# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

7







М. Б. ЮЛМӨХӘМӘТОВ, М. Х. ИҘЕЛБАЕВ

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 7

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

КИТАП
Өфө • 2017

УДК 373.167.1:82
ББК 83.3 (2 Рос=Баш)-922
Б28

*Автор-төҙөүселәре:*
М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев

**Шартлы тамғалар:**

Һорауҙар һәм эштәр

Хәтергә төшөрәбеҙ

Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Фонохрестоматия

Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Ижади эш

Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

**Башҡорт әҙәбиәте :** уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ. : М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев]. – Өфө : Китап, 2017. – Һүрәттәре менән 368 бит.
Б28
ISBN 978-5-295-06767-9

**УДК 373.167.1:82**
**ББК 83.3 (2 Рос=Баш)-922**

**ТП – 079/17**

**ISBN 978-5-295-06767-9**

© Юлмөхәмәтов М. Б., Иҙелбаев М. Х., 2017
© Василов А. Э., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

*Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ*

## ҘУР ЫШАНЫС ҺЕҘГӘ, УҠЫТЫУСЫ!

Бөгөн илдең бар өмөтө – һеҙҙә,
Һеҙҙең аңда, һеҙҙең ҡулдарҙа,
Яҡты киләсәккә тура илткән
Һеҙ башлаған изге юлдарҙа.

Бөтәһе лә һеҙҙән тора бөгөн –
Йәштәр ҡарашының киңлеге,
Улар ғәмәленән ай-йылдарҙың
Оло быуаттарға тиңлеге.

Илдең көнө, ерҙең көнө бер саҡ
Ҡыл өҫтөндә тороп ҡалмаҫлыҡ
Яңы кеше, аңлы кеше кәрәк,
Яҡшы эштән ҡулы талмаҫлыҡ.

Һеҙ бит әҙерһегеҙ бер йыл түгел,
Бар ғүмерҙе тотош бирергә,
Илдең иртәгәһе яҡты булһын,
Китмәҫ өсөн донъя кирегә.

Бөгөнгөгә, киләсәккә төбәп
Мәғәнәһен бөтә эшенең,
Донъяларҙы яҡтыртырға теләп,
Яҡшыртырға теләп кешене…

Иң ҙур рәхмәт һеҙгә, Уҡытыусы,
Һәр быуындың ҡыҙы-улынан.
Һеҙ бара(һы)ғыҙ тотоп бала түгел –
Тыуыр замандарҙың ҡулынан.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Ни өсөн 1 сентябрь көнө Белем байрамы тип йөрөтөлә?
**2.** Белем байрамы һеҙҙең мәктәптә нисек үтте? Шул хаҡта һөйләгеҙ.
**3.** Байрам тантанаһында һеҙгә нимәләр ныҒыраҡ оҡшаны?
**4.** Саҡырылған ҡунаҡтар нимә тураһында һөйләне?

**Фонохрестоматия**

Актёр башҡарыуында тыңлағыҙ.

*Әмир ӘМИНЕВ*

## ИНША

Беҙҙең кластағы ике ҙур тәҙрә хәтерҙә. Шундай ҙурҙар – иҙәнгә йәйеп һал да рәхәтләнеп сәкән һуҡ. Беренһенән Мағаш тауының ваҡ имәндәр менән ҡапланған бейек һырттары, икенсеһенән зәңгәр күк йөҙө һәм төрлө ҡиәфәткә инеүсе болоттар күренер ине. Шул тәҙрәләр мине дәрестән айырып, ваҡыт-ваҡыт үҙҙәренә текәлергә мәжбүр итә, мауыҡтыра, хыял донъяһына сумдыра. Уҡытыусы йыш ҡына, яңы материалды аңламай ҡалаһың бит, тип иҫкәртә. Ғәйебемде танып башымды эйәм, насар ғәҙәтем өсөн үҙ-үҙемде әрләйем – уңайһыҙ. Тик аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә үҙем дә һиҙмәй яңынан тышҡа, оло донъяға бағам. Күк көмбәҙендә бер туҡтауһыҙ сабыусы ат-болоттар ҡапыл ғына уҡытыусыма оҡшап китә, унан колхоздың йәшелсә баҡсаһын минең ише малай-шалайҙан һаҡлаусы Басир бабай һынына әүерелә. Бабайҙың оҙон, яй хәрәкәтле кәүҙәһе йәмшәйә-кәкрәйә торғас, фил рәүешенә инеп, оҙон томшоғон һелкә-һелкә, төпһөҙ зәңгәр киңлек буйлап сабырға тотона…

Икенсе тәҙрәнән күренгән Мағаш теҙмәләре ауылды яртылаш урап, мәктәп урамына тиерлек килеп төшә. Ҡыш көндәре ул беҙҙең иң яратҡан урын: саңғыла, санала шыуабыҙ. Был тауҙар көҙҙәрен ауылды әсе елдәрҙән, һалҡындан, бурандарҙан ышыҡлай, йәйге селләләрҙә дым бөркә. Яҙ килгәс, тауҙар түбәһенән ҡотороҡ ҡар өйөмдәре ишелә, гөрләүектәр аға.

Бөгөн, балалыҡ көндәренән нисәмә йылдар үткәс, малай саҡтарҙы иҫкә төшөрөп, ҡабат-ҡабат күк көмбәҙенә бағам: шул уҡ зәңгәрлек, шул уҡ аҡһыл-зәңгәр болоттар, тик ғәжәп, мин уларҙы хәҙер уҡытыусыма ла, уҫал Басир бабайға ла, филгә лә, бүтән хайуанға ла оҡшата алмайым. Болот – болот инде. Белмәҫһең, әллә болоттар алмашынып бөткән, әллә үҙем үҙгәргәнмен.

Иң тәүге шиғри юлдарҙы мин шул класта яҙҙым. Гөрләүек һымаҡ көтмәгәндә-уйламағанда бәреп сыҡты ул. Иң яратҡан миҙгелем яҙ ине. Дәрестә ултырабыҙ. Тәҙрә төбөндә генә тиерлек сыйырсыҡтар һайраша, турғайҙар сырҡылдай, мәктәпкә күрше йәшәгән Тимербикә әбейҙең кәзә бәрәстәре өй нигеҙе тупрағында айҡаша. Мәрәкә инде, хәс тә кинолағы кеүек. Зәңгәр күк йөҙөндәге аҡһыл болоттар, төрлө ҡиәфәткә инеп, хыял диңгеҙендә йөҙҙөрә – бер космонавт булып күккә осам, бер осо-ҡырыйы күренмәгән диңгеҙ киңлектәрендә йөҙәм. Ошондай көндө нисек итеп дәрес тыңлап ултыраһың инде?

Тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһынан бер аҙ шөрләй ҙә, шул уҡ ваҡытта ярата ла торғайныҡ. Класҡа ингәс, башын ҡағып ҡына иҫәнләшер, ҡулындағы журнал, дәфтәрҙәрен өҫтәлгә һалыр, бар бүлмәгә күҙ йүгертеп, урынына ултырыр ине. Үткән дәрес материалын ентекләп һорар, ҡабаланмай ғына йөрөп, яңы дәрес аңлатыр, ваҡыты-ваҡыты менән берәйһен баҫтырып һорап та алыр, ҡыҙыҡ яуап ишетһә, рәхәтләнеп көлөр. Унан өйгә эш бирер һәм ингәндәге һымаҡ баш ҡағып ҡына хушлашыр ҙа, бына, бөгөнгә тамам, тигәндәй, мөләйем йылмайып сығып китер. Дәрескә бөтөнләй әҙерләнмәй килгән кешене хәтерләмәйем. Булһа булғандыр, уҡыуға илке-һалҡы ғына йөрөгән малайҙар ҙа хатта иртәнсәк килеү менән, бөгөн башҡорт

теле йәки әҙәбиәте бармы ул, тип һорай торғайнылар. Улар өсөн математика ла, физика ла, бүтән фәндәр ҙә әллә ни сетерекле түгел, ә бына тел йәки әҙәбиәт дәресе ярайһы уҡ ауыр ине. Уҡытыусыбыҙ әсә теленең матурлығын, уның үҙен мәҙәниәтле тип иҫәпләгән һәр кеше өсөн мөһим икәнлеген, тыуған ергә, Ватанға, халҡыңа һөйөү тойғолары шунан башланғанын аңлатырға, күңелдәргә һеңдерергә тырыша ине.

Бер саҡ ул минең тышҡа ҡарап ултырғанымды шәйләне лә:

– Тыңламағас, барыһын да беләһеңдер инде, әйҙә, бөгөн үткән теманы һөйләп бир, – тине.

Барлыҡ уйым-хыялым менән күктә йөрөгәс, ҡайҙан һөйләй алайым һуң? Ҡыҙарынып-бүртенеп, ыҡ-мыҡ иттем дә ярҙам эҙләп тирә-яғыма ҡарандым: эләктеңме, тип шырҡ-шырҡ көлгән Айытбайҙан, арттан ҡәләме менән төрткөсләгән һонтор Юлайҙан нимә ишетәһең инде? Уҡытыусы сабыр ғына яуап көттө-көттө лә:

– Ултыр, тыңларға кәрәк. Бындай көндә күңелдәрегеҙ урамда икәнен аңлайым, тик түҙегеҙ саҡ ҡына, – тине.

Киҫәмәгәс киҫәмәйем бит – ошонан һуң да тәҙрәгә ҡарап ултырыуымды күреп, ул мине дәрес аҙағындараҡ кластан сығыуымды һораны. Ишек төбөнә еткәс, туҡтатты ла иртәгеһенә бөгөн үткән теманы һораясағын әйтте. Ә мин оялышымдан һәм ғәрлегемдән иртәгеһенә дәрескә бөтөнләй килмәнем дә ҡуйҙым. Тағы бер дәрес аша инша яҙасағыбыҙҙы иҫкәртеп ҡайтарған.

Ул класҡа инеп числоны һәм иншаның темаһын яҙҙырғандан һуң, барыһы ла сәмләнеп эшкә тотондо. Ә минең күҙҙәр һаман тышҡа тартыла. Үҙем ерле юҡтан ғына дәрес ҡалдырғаным өсөн уңайһыҙланам да, ҡурҡам да, нимә тураһында яҙырға һуң, тип аптырайым да. Күперелеп йөҙгән аҡ болоттарҙы күҙәтәм, хыялдарым менән Мағаш түбәһендә йөрөйөм, унан ағып төшкән тынғыһыҙ ҡар һыуы тауышын тыңлайым, әйтерһең, ҡолаҡ төбөмдә моңло бер йыр яңғырай.

– Яҙып та бөттөңмө ни? – тине уҡытыусы, ҡабаланмай ғына яныма килеп.

Мин, ҡот алынып, дәфтәргә эйелдем. Ҡайҙан бөтәйем ти инде, башлаған да юҡ бит әле.

Оҙаҡламай тапшырыусылар ҙа күренә башланы. Мин уларға көнләшеп ҡарап ҡалам: шундай тиҙ һәм еңел генә яҙа алһаң ине ул! Бына, исмаһам, бәхетле кешеләр!

Тағы байтаҡ ҡына ваҡыт үтте. Класта кеше бөтөнләй аҙайҙы. Дәрес бөтөүен белдереп, ҡыңғырау шылтыраны. Үтә ҡыҫҡа тойолдо миңә был дәрес, әллә яңылышып алдан бирҙеләрме, тип тә уйлап ҡуйҙым.

Уҡытыусы, был урамдан ни йәм тапты икән, тигәндәй тышҡа ҡарап торҙо ла:

– Тапшыр! – тине һәм ҡапыл ғына боролоп сәсен артҡа һыпырып ҡуйҙы. Был уның түҙемһеҙләнә башлау билдәһе ине. Мин, бынан да һуңға ҡалырға ярамағанлығын белеп, әллә ҡурҡышымдан, әллә күңелем тулышҡандан, ҡабалана-ҡабалана:

Ташып-ташып йөҙгән болот
Аҡбуҙатҡа оҡшаған.
Текә баҫып үрәпсенә,
Мағаш таумы тышаған?

Тышауҙарҙы һелкеп ташлар
Дауылдар ҡупмаҫ тимә!
Шуларға тиң көс-ғәйрәтте
Йөрәктә тапмаҫ тимә! –

тип яҙҙым да, дәфтәремде уҡытыусының өҫтәленә һалып, тышҡа атылдым. Урамда ғына бөгөнгө числоны ла, инша тип тә, иншаның исемен дә яҙмағанлығым хәтергә төштө. Хәйер, уны инша тип тә булмай инде.

Иртәгеһенә тышҡа ҡарап ултырыу теләгемдән ҡурҡып, дәрестең тиҙерәк башланып, тиҙерәк бөтөүен теләнем. Уҡытыусы, һәр ваҡыттағыса, ашыҡмай ғына инде, иҫәнләште, дәфтәрҙәрҙе өҫтәлгә һалды.

– Иншаларығыҙҙы ҡараным. Дөйөм алғанда, насар түгел, тик мин әйткән темаларға бик иғтибар итмәгәнһегеҙ. Ә инша яҙыуҙың бар маҡсаты ла шул ине бит. Барығыҙҙың да дәфтәренән яҙ һулышы бөркөлә, сыйырсыҡтар

һайрай, йырғанаҡтар аға. Был – ике күҙегеҙҙең береһе тышта булыу һөҙөмтәһе. – Уҡытыусы еңелсә генә көлдө. Миңә төбәп әйткәне күренеп тора. – Уларҙы һеҙ яҡшы кәйеф, ихлас тойғолар менән бирергә тырышаһығыҙ. – Ул саҡ ҡына тынып торҙо ла бер нисә дәфтәрҙе ҡулына алды. – Тәүҙә иң яҡшыларҙы, унан дүртлеләрҙе исемләп әйтеп китәм.

Мин, әлбиттә, үҙемдең эште яҡшы билдәләр араһынан көтмәйем. Бына бишлеләр, унан дүртлеләр әйтелеп бөттө, минең исем ишетелмәне. Өслөләр араһында ла булмай сыҡты. Тимәк, икеле. Хәйер, уҡытыусы иншаларға бер ҡасан да насар билдә ҡуймай торғайны. Тикшереп-ҡарап та тормағандыр. Бер саҡ дәфтәрҙәр эйәләренә таратылып бөттө, минеке һаман юҡ.

– Хәҙер мин һеҙгә бер шиғыр уҡыйым, – тине уҡытыусы һәм ҡабаланмай ғына минең «инша»ны уҡып сыҡты. Минең бит-ҡолаҡтар янды, оялышымдан партаға һылаштым.

– Йә, оҡшанымы?

Класс шым ғына ултырған еренән ҡапыл геүләп китте.

– Кемдеке тип уйлайһығыҙ? – тип тағы бер ҡарап алды ла уҡытыусы ниндәйҙер күтәренке бер тауыш менән: – Уны Азамат яҙған! – тип һалды.

Баштар йәлп иттереп минең яҡҡа боролдо. Кемдер көлдө, хихылданы, күршем терһәге менән төрттө, һонтор Юлай «шағир» тип ысҡындырҙы. Ниндәй хурлыҡ – инша яҙа белмәгәс, шиғыр яҙғанмын! Ана, бүтәндәр дүрткә, бишкә яҙған да ҡәнәғәт йылмайышып ултыра. Мин үҙемде өҙгөләп ташларҙай булдым...

Тауыш саҡ ҡына баҫылғас, уҡытыусы:

– Молодец, һин матур шиғыр яҙғанһың, Азамат, – тине. – Бында, әлбиттә, ике генә строфа, шулай ҙа поэтик сағыштырыу, образлылыҡ бар. Тәҙрәнән сығырҙай булып ултырыуың бушҡа түгел икән. – Ул ихлас итеп йылмайҙы ла арҡанан һөйөп китте.

Ул әйткән поэтик сағыштырыу, образлылыҡ минең өсөн бөтөнләй аңлашылмаған төшөнсәләр ине. Тағы шуныһына аптыраным, ниңә ул миңә билдә ҡуйманы икән?

Бирелгән тема буйынса түгел, күңелеңдәген яҙһаң, әллә баһалауы ауырмы?

...Ошо «инша» һаман онотолмай. Уны уйлаған һайын, мөләйем, әммә ҡырыҫыраҡ ҡарашлы, сабыр уҡытыусым иҫкә төшә. Тик уның ярҙамында ғына мин туған тел байлығын, уның эске моңон, матурлығын аңланым. Уның дәрестәре, уның иншалары быуындары ла нығынып етмәгән бөгөнгө хикәйәләремә ҡанат ҡуйманымы икән?

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Һеҙ күктәге болоттарҙы күҙәтергә яратаһығыҙмы? Улар һеҙҙә ниндәй тойғолар уята?
**2.** Иртәгеһенә уҡытыусының үткән теманы һораясағын белеп, Азаматтың дәрескә килмәүен һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Ул дөрөҫ эшләгән тип уйлайһығыҙмы?
**3.** Уҡытыусыһы ярҙамында Азамат ниндәй ҡиммәтле байлыҡтарҙы аңлаған?
**4.** Уҡытыусы инша яҙырға ҡушҡан, ә Азамат шиғыр яҙып биргән. Дөрөҫ эшләгәнме?
**5.** Ни өсөн уҡытыусы Азаматтың иншаһына баһа ҡуймаған тип уйлайһығыҙ?

*Рәми ҒАРИПОВ*

## ТЕЛ

### I

Тыңлап таңға ҡалған тел,
Йәнгә рәхәт һалған тел,
Яулап-ҡурсып ҡалған тел,
Ҡан-йәш түгеп алған тел.

Күреп ирек емеше,
Килеп бәхет өлөшө,
Һаҡлар һине һәр кеше,
Яҡлар һине һәр кеше.

Телһеҙ инек – тел алдыҡ,
Илһеҙ инек – ил алдыҡ,

Һинең менән тәйән беҙ,
Яҡты таңға ҡуҙғалдыҡ,
Үткәнгә үрт, ҡуҙ һалдыҡ…

## II

Үткәнгә үрт һалмағыҙ,
Тик үрелеп ҡарағыҙ.
Яҡын булыр арағыҙ…
Йөрәктәге ярабыҙ
Уңалып та бөтмәгән,
Тағы ярып барабыҙ…
Бөтә даһи һөйләшерлек,
Бөтә ғашиҡ серләшерлек,
Тыңлап һүҙен көнләшерлек,
Аңлашырлыҡ уртаҡ тел
Бөтә телдә табылыр.
Телде телдәр хушһынмаһа,
Артылмаҫлыҡ тау булыр,
Булмаҫ дуҫлыҡ, дау булыр,
Дау артынан яу булыр.

## III

Көслөк менән тел булмаҫ,
Үслек менән ил булмаҫ,
Көс үҙенә көс табыр,
Үс үҙенә үс табыр.
Ҡыҙыл ҡандар түгелгән,
Күп ҡорбандар бирелгән
Ошо ғәзиз тел өсөн.
Бар донъяны айҡап сыҡ,
Юҡсылын да табырһың,
Бай һынын да табырһың,
Дуҫыңды ла табырһың,
Дошманға ла барырһың…
Йөрөй-йөрөй арырһың,
Илең һағынып янырһың…

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғырҙың тәүге бүлеген нисек аңлайһығыҙ?
**2.** Төрлө телдәрҙең тигеҙ хоҡуҡлылығын шағир ниндәй сағыштырыуҙар аша бирә?
**3.** Рәми Ғариповтың тел тураһында тағы ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ?
**4.** «Ҡыҙыл ҡандар түгелгән, күп ҡорбандар бирелгән ошо ғәзиз тел өсөн» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Шул хаҡта һөйләгеҙ.

*Рәсүл ҒАМЗАТОВ**

## ТУҒАН ТЕЛ

Төш тиһәң дә төш инде был, сәйер:
Үлем килде бөгөн, йән һорап.
Тауҙарымдың ҡайнар ҡуйынында
Ятам, имеш, сарсап, ҡанһырап...

Сылтыр-сылтыр аға, саба йылға,
Бер кемгә лә юҡ тип кәрәгең.
Ә мин ятам, тыуған ерҙе ҡосоп,
Ер булмаҫтан элек йөрәгем.

Үлем баш осомда, тик хәлемде
Белмәй һис кем, килмәй яныма.
Тик ҡайҙалыр алыҫ бөркөт саңҡый,
Тик кемгәлер болан ялына...

Ятам шулай хәлһеҙ, тәнем йәнһеҙ...
Ҡапыл шул саҡ бына яҡында
Ике кеше килә лыбырлашып
Үҙ телемдә ниҙер хаҡында.

Йәнгә яҡын, таныш был һүҙҙәрҙән
Мин аңыма килдем, аңланым:

---

* **Рәсүл Ғамзат улы Ғамзатов** (1923–2003) Дағстан Республикаһының Хунза районы Цада ауылында халыҡ шағиры Ғамзат Цадас ғаиләһендә тыуған. 1943 йылда «Ялҡынлы мөхәббәт һәм ҡайнар үс» шиғырҙар йыйынтығы сыға. 1945–1950 йылдарҙа Мәскәүҙә А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтында уҡый. 1951 йылдан Дағстан Яҙыусылар берлегенең рәйесе була. Уға бигерәк тә «Минең Дағстаным» исемле лирик повесы, «Минең тыуған йылым», «Бейек йондоҙҙар», «Яҙма», «Ҡатын-ҡыҙҙар утрауы» һәм башҡа поэтик йыйынтыҡтары киң танылыу килтерҙе.

Юҡ, үлемдән мине им-том түгел,
Тик туған тел ҡурсый алғанын.

Башҡаларға башҡа телдәр дауа,
Тик ул телдә яҙмам ғүмергә,
Әгәр иртән, телең юҡ, тиһәләр,
Мин бөгөндән әҙер үлергә.

Телем өсөн һәр саҡ йәнем әсей,
Ярлы тиһәләр ҙә телемде,
Бейек менмәһә лә, бөйөк миңә,
Төҫкәйе ул миңә илемдең.

Мин тормошто һөйәм, һөйәм ерҙе,
Ерҙең хатта һәр бер мөйөшөн,
Йырланым мин бөтә Совет илен,
Сыҡмаһа ла һәр йыр килешеп…

Мин йәнемдәй күрәм ирек илен,
Мин әҙермен ғәзиз йәнемде
Уның өсөн ҡайҙа бирергә лә!..
Тик үҙ ерем алһын тәнемде!

Тик ҡайһы саҡ яҡташтарым минең
Цадалағы бер таш янында,
Ғамзат улы Рәсүл ята, тиеп
Туған телдә иҫкә алһындар.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Рәсүл Ғамзатов тураһында ниҙәр беләһегеҙ? Ул ниндәй телдә ижад иткән?
**2.** Туған тел тураһында «бейек менмәһә лә, бөйөк миңә» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
**3.** Геройҙы үлергә ятҡанда нимә аңына килтерә? Шул урынды табып, уҡып күрһәтегеҙ.
**4.** «Әгәр иртән, телең юҡ, тиһәләр, мин бөгөндән әҙер үлергә» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Һөйләгеҙ.
**5.** Автор туған телдең ҡәҙерен, әһәмиәтен күрһәтеү өсөн ниндәй алым ҡулланған?

### Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ

Әгәр кемдер һеҙгә «телең ярлы» тиһә, нимә тип яуап бирер инегеҙ?

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

Һеҙгә билдәле булыуынса, борон-борон заманда, әле яҙыу булмаған ваҡытта, халыҡ мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, әкиәттәр һәм йомаҡтар ижад иткән, уларҙы быуындан быуынға ҡалдыра килгән. Һәр быуын уларҙы үҙгәрткән, йөкмәткеһен тулыландырған, камиллаштыра торған булған. Шуның өсөн дә халыҡ ижады ауыҙ-тел ижады исемен алған.

Халыҡ сәнғәте икенсе төрлө *фольклор* тип йөрөтөлә (инглиз телендә folk-lore – «халыҡ аҡылы»).

Халыҡ ауыҙ-тел ижадына **әкиәттәр, йырҙар, легендалар** һәм **риүәйәттәр, мәҡәлдәр** һәм **әйтемдәр, ҡобайырҙар**, **эпостар**, **йомаҡтар**, **бәйеттәр** инә. Һәр жанрҙың ижад ителеү маҡсаты уның төҙөлөшөн билдәләй. Мәҫәлән, әкиәт – һөйләү, йыр – йырлау, йомаҡ – ҡойоу, мәҡәл әйтеү өсөн сығарыла. Халыҡ ижады әҫәрҙәренең йөкмәткеһе мауыҡтырғыс, төҙөлөшө бик йыйнаҡ, теле образлы һәм тапҡыр, шуға күрә уларҙы уҡыу ҙа, аңлау ҙа еңел.

Фольклорҙа халыҡтың тарихы, көнкүреше, уй-теләктәре, хеҙмәте, азатлыҡҡа ынтылышы күрһәтелә; ирек һәм ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе батырҙары данлана. Халыҡ яҡшылыҡты яҡлай, яманлыҡты фашлай, кешеләге ыңғай әхлаҡи-этик сифаттарҙы асып бирә. Ҡыҫҡаһы, фольклор әҫәрҙәренең йөкмәткеһе күтәренке рух менән һуғарылған, кешене һәр саҡ алға – матур тормош, яҡты хыялдар өсөн көрәшкә әйҙәй. Уларҙа беҙ халыҡтың идея-эстетик ҡарашын, донъяны аңларға тырышыуын һәм уға мөнәсәбәтен күрәбеҙ.

Һеҙ инде алдағы кластарҙа әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, йырҙар, бәйеттәр һәм таҡмаҡтар менән танышҡайнығыҙ. Ә быйылғы уҡыу йылында халыҡ ижадының *тарихи йырҙар, риүәйәттәр, легендалар* һәм *сеңләүҙәр* тигән жанрҙарын үтербеҙ. Халыҡ ижады әҫәрҙәре боронғо ваҡыттарҙа халыҡ араһында йәшәгән тел оҫталары, сәсәндәр һәм йырсылар тарафынан сығарылған. Халыҡтың ауыҙ-тел ижады быуаттар буйы телдән телгә, быуындан быуынға күсеп, һәр бер быуындың кешеләре тарафынан байытылып, шымартылып беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Уларҙы ижад итеүҙә бер нисә быуын кешеләре ҡатнашҡан. Фольклор – халыҡтың уртаҡ ижад һөҙөмтәһе, күмәк кешенең ижад емеше.

Ҙур ғалимдар, яҙыусылар һәр ваҡыт халыҡ ижадын юғары баһалағандар, унан өйрәнергә, уны йыйырға һәм һаҡларға саҡырғандар. Күренекле рус яҙыусыһы М. Горький халыҡ ижадына бик юғары баһа биреп, былай тип яҙған: «Халыҡ ижадын белмәй тороп, хеҙмәтсән халыҡтың ысын тарихын белеп булмай. Һүҙ сәнғәтенең башы фольклорҙа, үҙ фольклорығыҙҙы йыйығыҙ, уны өйрәнегеҙ, ныҡ эшләгеҙ. Фольклорҙы белмәгән яҙыусы – насар яҙыусы ул. Халыҡ ижадында бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ йәшеренеп ята, намыҫлы яҙыусы уға эйә булырға тейеш».

Башҡорт халыҡ ижады – халыҡ аҡылын, тормош тәжрибәһен үҙенә туплаған оло хазина ул. Йәш быуын өсөн бер ниндәй китапта ла, закондар йыйынтығында ла яҙылмаған мәжбүри үтәй торған кәңәштәр йыйылмаһы. Боронғо атай-бабайҙарҙың һүҙен һәр бер быуын изге аманат итеп һаҡлаған һәм киләсәк быуын кешеләренә тапшырған. Мәҫәлән, беҙ һеҙҙең менән бөгөнгө көндә лә ниндәй тапҡыр, аҡыллы мәҡәлдәр, әйтемдәр, йырҙар, әкиәттәр, ҡобайырҙарҙа сағылған фәһемле фекерҙәр, кәңәштәр менән осрашабыҙ. Шуға күрә лә һәр кем ата-бабаларҙың тарихын, боронғо батырҙар тураһындағы легенда һәм йырҙарҙы яҡшы белергә, уларға хөрмәт менән ҡарарға тейеш.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Халыҡ ижадының ниндәй төрҙәре бар? Уларҙың үҙенсәлектәре ниҙә?
**2.** Фольклор әҫәрҙәрендә халыҡтың ниндәй уй-хыялдары сағылған?

### Хәтергә төшөрәбеҙ

Һеҙгә таныш булған халыҡ ижады жанрҙарын һанап сығығыҙ.
Ниндәй халыҡ ижады өлгөләре һеҙҙең күңелдә нығыраҡ һаҡланып ҡалды?
Һеҙҙең төбәктә, ауылда халыҡ ижады өлгөләрен һаҡлаған, уларҙы артабан байытыуға өлөш индергән кешеләр бармы?
Йомаҡтар, тиҙәйткестәр, һынамыштар, мәҡәлдәр һәм әйтемдәрҙе, халыҡ ижадының бәләкәй формалары тип әйтәләр. Ни өсөн?

### Ижади эш

Башҡорт халыҡ ижадының бәләкәй формалары буйынса проект һәм презентация эшләгеҙ.

## Йырҙар һәм риүәйәттәр

### УРАЛ

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Уйым күлдәр уйған туғайында
Күҙ йәшенән һарҡҡан һыу микән?
Иртән генә күтәрелгән томан
Аҡбуҙаттан сыҡҡан быу микән?

Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,
Уралҡайҙы һөймәҫ тә йән булмаҫ.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ.

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
Ете лә ырыу – илдең төйәге.
Ирек яулап үлгән иркәйҙәрҙең
Шунда ята изге һөйәге.

Атам да һин, Урал, әсәм дә һин,
Урал, тиермен, гүргә ингәндә,
Атҡайҙарҙы менеп яу сабырмын,
Ил өҫтөнә дошман килгәндә.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** «Урал» йырының ҡайһы дәүерҙә сығарылғанын билдәләп буламы?
**2.** Был йырҙа башҡорт халҡының батырлығы, Тыуған илебеҙҙең тарихи үткәне, Уралды данлау, уны яратыу һәм һаҡлау идеяһы ҡайһы юлдарҙа әйтелә? Шул юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.
**3.** Ни өсөн Уралда ҡырҡылған тал сыбығынан батырҙар ҡаны тама? Мәғәнәһен аңлатығыҙ.
**4.** Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын асыу һәм ябыу танталарында «Урал» йыры яңғырай. Был нимә тураһында һөйләй?
**5.** Йырҙың тексын ятлағыҙ һәм йырларға өйрәнегеҙ.

### Ижади эш

Халыҡ ижадына арналған стенгазета сығарығыҙ.

### Фонохрестоматия

Йырсылар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## АЗАМАТ

Алыҫтарҙан ағарып, ай, күренгән
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы,
Ирәндеккәй тауының аҡ ташы.
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы,
Ир-егеткәй менән ат башы.

Санаға ла еккән ҡара аттың
Арт аяғы уның аҡ булыр,
Арт аяғы уның аҡ булыр.
Ир-егеткәй ҡайҙа йөрөһә лә,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр,
Ҡылған эше уның хаҡ булыр.

Тубылғы ла ағас ҙур булмаç,
Араһынан үтер юл булмаç,
Араһынан үтер юл булмаç.
Ҡайҙа ла барһаң, дуçың булһын,
Дуç-иш барҙа ирҙәр хур булмаç,
Дуç-иш барҙа ирҙәр хур булмаç.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** «Азамат» йырындағы егет образын ҡылыҡһырлағыҙ.
**2.** *Дуç-иш барҙа ирҙәр хур булмаç* тигән һүҙҙәр бөгөнгө көнгә лә тап киләме?
**3.** Йырҙың тексын ятлағыҙ.

**Төркөмдә йәки парлашып эшләгеҙ**

Парталаш иптәшегеҙгә ошо йырға ҡағылышлы һорауҙар бирегеҙ. Уның яуаптары менән килешәһегеҙме? Килешмәһәгеҙ, бәхәс ойоштороғоҙ.

## ЭСКАДРОН

Ҡараһана, дуçҡай, ҡараһана,
Урал тауы тора күгәреп.
Уралтауға ҡарап бер йырлайыҡ,
Уйҙарҙы ла алыç ебәреп.

Йырҙар яҙҙым Урал ҡаяһына,
Иçтәлектәр булып ҡалһын тип.
Яуҙа йөрөп иçән ҡайта алмаһам,
Урал тауы иçкә алһын тип.

Урал ғына ҡошо, ай, һандуғас,
Ат менгәндә, моңло һайраның.
Ҡындан алып алмас ҡылысымды
Урал ташҡайына ҡайраным.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Йырҙың тексын тасуири итеп уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Йырҙың «Эскадрон» тип исемләнеүен нисек аңлатырһығыҙ?
**2.** Йырҙың ҡайһы строфаһында Тыуған илгә булған мөхәббәт, уны һаҡлау, яҡлау мотивтары сағыла?

## ҠАҺЫМ ТҮРӘ

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның, вай кем,
Маңлайында булыр урайы.
Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем,
Һул ҡулында булыр ҡурайы.

Аҡ балыҡтай уйнар һор(о) юрғаһы, вай кем,
Көмөшлө эйәр күренә ялтырап.
Ҡаһым түрә яуап алған саҡта, вай кем,
Дошман майор тора ҡалтырап.

Беҙҙең генә баҫыуҙың межаһы, вай кем,
Таҡыя ғына башлы сел ҡурай.
Командир ҙа булған Ҡаһым түрә, вай кем,
Командаһын көнөнә биш урай.

Ҡаһым түрә уйынға сығыр ине, вай кем,
Полковой командир ҡашында.
Ҡаһым түрә вафат булып ҡалды, вай кем,
Владимир губерна башында.

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның, вай кем,
Тояҡтары ҡупҡан, баҫа алмай.
Биш йөҙ кеше ҡарап өнһөҙ ҡалған, вай кем,
Ҡайғырышып ҡәбер ҡаҙалмай.

Ыласын, бөркөт үҫкән, ай, Уралда, вай кем,
Сал бөркөттәй һайлам ир ине.
Яуға ҡаршы сапҡан мәлдәрендә, вай кем,
Тау-таш ярыр йылдам ир ине.

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның, вай кем,
Бәкәлдәре уның аҡ ине.
Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем,
Әйтер һүҙкәйҙәре хаҡ ине.

Башҡынайым минең бик ауырта, вай кем,
Сәңгелдәтмәй барсы көймәмде.
Эскенәйем минең янып бара, вай кем,
Ысҡындырсы көмөш төймәмде.

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаҡай, вай кем,
Түбән эйеп тора башҡайын.
Ун ете лә йәшлек Сафия һылыу, вай кем,
Түгер инде күҙенән йәшкәйен.

Көмөш кенә һаплы булат ҡылыс, вай кем,
Ҡаһым түрә аҫҡан биленә.
Булат ҡына ҡылысын төҫө итеп, вай кем,
Алып ҡайтайыҡсы иленә.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Ҡаһым түрә кем булған?
**2.** Халыҡ Ҡаһым тураһында ниндәй фекерҙә? Шул юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.
**3.** Ҡаһым түрәгә характеристика бирегеҙ.
**4.** «Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем, һул ҡулында булыр ҡурайы» тигән юлдарҙы нисек аңлатырға була?

## ҠОЛОЙ КАНТОН

Башҡортомдоң тотҡан төп ҡоралы
Кәк(е)ре ҡылыс менән уҡ икән.
Эй, был имперҙы* бөтә айҡап сыҡтыҡ,
Башҡортомдан батыры юҡ икән.

Арғыл да ғына ергә, эй, ынтыла
Арҡаһы күк бүре балаһы.
Эй, йәнен фиҙа ҡылыр иле өсөн
Ҡолой кантон, Көсөк балаһы.

Алыҫтан да ғына, һай, күренә
Мәскәүский бейек таш ҡала.
Эй, ризыҡтарың бөтөп, тупраҡ яҙһа,
Тупраҡ яҙған ерҙә баш ҡала.

Ҡараһыу ҙа буйлап, һай, беҙ киттек,
Ҡара ҡаҙҙар кеүек теҙелеп.

---

* *Импер* – империя.

Эй, Мәскәүҙә лә дошман алған, тигәс,
Йөрәккәйҙәр китте өҙөлөп.

Мөгөҙ ҙә генә башлы, эй, яныма
Ебәк тә еп кәрәк керешкә.
Эй, ҡайҙа ғына булһа, батыр кәрәк,
Тәүәккәллек кәрәк һәр эштә.

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

**1.** Башҡортостан тарихы буйынса кантондарҙың ҡайһы осорҙа йәшәгәндәре тураһында һөйләгеҙ.
**2.** Кантондар нимә менән шөғөлләнгән?
**3.** Халыҡ һәм кантондар үҙ-ара нисек йәшәгән?
**4.** Йырҙың тексын ятлағыҙ.

## ЛЮБИЗАР

Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда,
Алдан сыҡты данибыҙ.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

Французлар килеп ингән
Мәскәү тигән ҡалаға,
Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алғас,
Сығып ҡасты далаға.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙен һынаған.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен.

Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлағас,
Таба алмайҙар эҙҙәрен.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

Мәскәүгә лә керҙек беҙ,
Парижды ла күрҙек беҙ.
Французлдарҙы еңгәндә,
Ер емертеп йөрөнөк беҙ.
    Любезники, любизар,
    Маладис, маладис!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Йырҙың тексын тасуири уҡығыҙ.

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

Был йырҙың тарихын беләһегеҙме? Һөйләгеҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

Был йырҙа рус һәм башҡорт халыҡтары араһындағы дуҫлыҡ нисек сағылдырыла?

## ЗӨЛХИЗӘ

Ялан ғына ерҙән дә болан килә,
Уйһыу ҙа ғына ерҙән, ай, түтә тип, Зөлхизә,
Төн уртаһы еткәс тә бер ҡыҙ илай,
Йәш ғүмерем заяға, ай, үтә тип, Зөлхизә.

Кәкүк кенә ҡоштоң да, ай, балаһы
Сит ояла үҫә лә ят булып, Зөлхизә.
Ҡанлы йәштәр түгеп тә бер ҡыҙ илай,
Көләс ғүмерем үтә тип ут булып, Зөлхизә.

Һыу буйына барып та битен йыуа,
Йөҙөндәге йәшле лә таптарын, Зөлхизә.
Күҙкәйҙәрен һирпеп тә берҙәр уйлай
Рәхәт үткән иркә лә саҡтарын, Зөлхизә.

## ҒИЛМИЯЗА

Эткәра ла тигән тау башында
Ҡалды минең уйнаған таштарым,
Һигеҙ менән туғыҙ араһында
Юғалды ла ғәзиз баштарым.

Был илдәрҙең менер атҡайҙары
Ҡырас яллы, көмрө билле икән.
Үҙ илемдәй түгел илкәйҙәре,
Ҡом бураны уйнай, елле икән.

Алыҫ ерҙән балҡып, ай, күренгән
Урал микән әллә көн микән?
Сит илдәрҙә уҙған ғүмеремдең
Бер көндәре әллә йыл микән?

Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Илкәйемә лә, шул, ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Йырҙың тексын тасуири итеп уҡырға өйрәнегеҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Зөлхизә ни өсөн илай тип уйлайһығыҙ?
**2.** «Зөлхизә» һәм «Ғилмияза» йырҙарында ҡатын-ҡыҙ яҙмышы нисек һүрәтләнгән?
**3.** Был ике йырҙың йөкмәткеһендә ниндәй уртаҡлыҡ бар?
**4.** «Ғилмияза» йырындағы «Һигеҙ менән туғыҙ араһында юғалды ла ғәзиз баштарым» юлдарын нисек аңлайһығыҙ?
**5.** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышына арнап сығарылған тағы ниндәй башҡорт халыҡ йырҙарын беләһегеҙ?
**6.** «Башҡорт халыҡ ижады» китабынан «Ғилмияза» йырының легендаһын уҡып килегеҙ һәм класта һөйләгеҙ.

### *Риүәйәт һәм легендалар тураһында*

Риүәйәт һәм легенда халыҡ араһында киң таралған жанрҙарҙан һанала, шуға күрә уларҙы **халыҡ хикәйәләре** тип йөрөтәләр.

**Риүәйәт** һүҙе беҙгә ғәрәп теленән ингән, ул *хикәйә, версия* мәғәнәһендә йөрөй, ә русса *предание, сказание* төшөнсәләренә тап килә. Риүәйәттәрҙең күпселеге ниндәй ҙә булһа хәл-ваҡиғаның, күренештең һәм факттың тарихын асыҡлауға нигеҙләнә. Мәҫәлән, 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына бәйле байтаҡ риүәйәт бар. Уларҙың күбеһе ихтилал етәкселәре Пугачёв менән Салауатҡа арналған. 1812 йылғы Ватан һуғышы геройҙарына арналған риүәйәттәр ҙә бар. Уларҙа Тыуған илен һаҡлаусы яугирҙарҙың ҡаһарманлығы мауыҡтырғыс итеп хикәйәләнә.

Легендаларҙың нигеҙендә лә, ғәҙәттә, тарихта һәм тормошта булып үткән хәл-ваҡиғалар ята. Әммә халыҡ уларҙы һөйләгәндә, батырҙарҙың эшен тағы ла өлгөлөрәк итеп күрһәтер өсөн, теге йәки был ваҡиғаға мөһимерәк төҫ бирер өсөн, арттырыбыраҡ, көсәйтеберәк тасуирларға тырыша. Шуға күрә уларҙың ҡайһы берҙәренә серле йәки фантастик элементтар ҙа ҡушылып китә. Легендаларҙың төп үҙенсәлеге – тормош дөрөҫлөгө менән уйҙырманың (фантазияның) үрелеп килеүе. Шул яғы менән улар әкиәткә яҡын.

Башҡорт риүәйәттәренең геройҙары ла реаль – тарихи шәхестәр: Ҡараһаҡал, Батырша, Пугачёв, Салауат батыр, Ҡаһым түрә. Риүәйәт легендар батырҙарҙы ла реаль шәхес дәрәжәһенә күтәреп һүрәтләй. Мәҫәлән, Бәндәбикә, Ерәнсә сәсән, Янһары батыр һ. б.

Ер-һыу атамаларына бәйле күп кенә риүәйәттәр ҙә ысын тарих, булған хәл итеп ҡабул ителә. Был инде һәр төбәктә йәшәүселәр өсөн үҙҙәре тыуып үҫкән ер-һыу атамаларының яҡынлығы менән аңлатыла.

Риүәйәт сюжеты, ғәҙәттә, күп вариантлы була, уның тулы йөкмәткеһе, эмоциональ көсө һөйләүсенең хикәйәләү оҫталығына бәйле.

Йөкмәткеләренә ҡарап, риүәйәттәрҙе ике ҙур төркөмгә: тарихи һәм тормош-көнкүреш риүәйәттәренә бүлеп йөрөтәләр.

Тарихи риүәйәттәр ил тарихына, ырыу-ҡәбилә, халыҡ яҙмышына бәйле ваҡиғалар һәм уларға бәйле танылған шәхестәр хаҡында һөйләй.

Тормош-көнкүреш риүәйәттәре, нигеҙҙә, башҡорт халҡының көндәлек көнкүрешенә, төрлө йолаларына, ғаилә, ырыу-ара мөнәсәбәттәренә бәйле ваҡиғаларға арнала.

Риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, легендаларҙа фантастик уйҙырма, хыял, мөғжизә төп урынды ала. Легенда геройҙары тәбиғәт, ҡош-ҡорт, йәнлектәр менән бик еңел аралашып, һәр төрлө ғәҙәти булмаған мөнәсәбәткә инә ала. Мәҫәлән, «Башҡорт ҡайҙан килеп сыҡҡан?» легендаһында башҡорттарҙың ата-бабалары Уралға, Ағиҙел һәм Кама буйҙарына мөғжизәле бүрегә (ҡортҡа) эйәреп килеп сыҡҡан, тип әйтелә. «Шул ҡорт баш булып юл күрһәтеп килгәнгә, улар үҙҙәрен башҡорттар тип атаған».

Башҡорт легендалары түбәндәге төрҙәргә бүленә: мифологик легендалар, топонимик легендалар, этнонимик легендалар.

Шулай итеп, башҡорт риүәйәт һәм легендалары халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, донъяға ҡарашын һәм аң үҫешен сағылдырған үҙенсәлекле фольклор жанрҙары булып тора.

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

6-сы класта легенда жанры менән танышҡайнығыҙ. Һеҙ өйрәнгән легенда нисек атала ине?

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Һеҙҙең төбәктә тыуған йырҙарҙың барлыҡҡа килеүенә бәйле риүәйәттәр, легендалар һаҡланғанмы? Шулар хаҡында һөйләгеҙ.
**2.** Халыҡ хикәйәләре әкиәттәрҙән ни яғы менән айырыла? Риүәйәттәрҙә ниндәй хәл-ваҡиғалар һүрәтләнә? Уларҙың төп геройҙары кемдәр? Әкиәттәргә оҡшашлығы бармы?
**3.** Легендаларҙың риүәйәттәрҙән айырмаһын әйтегеҙ. Легендаларҙың геройҙары кемдәр?

**4.** Риүәйәттәрҙә һәм легендаларҙа халыҡтың ниндәй уй-хыялдары, теләктәре сағылған?

**Ижади эш**

Үҙегеҙ йәшәгән төбәктең, ауылдың риүәйәттәре, легендалары тураһында проект һәм презентация эшләгеҙ.

## ҠУҢЫРБУҒА

Көньяҡтағы башҡорттарҙы дошман яуы баҫа. Төньяҡ башҡорттарынан ярҙамға ғәскәр башы булып Минәй батыр бара. Минәй батыр илде баҫып килгән дошмандар – һун төрөктәре менән аяуһыҙ һуғыша, үҙенең бәһлеүәнлеге менән барса халыҡты таң ҡалдыра. Минәйҙең яу ҡайтарыу батырлығы өсөн ошо яҡ – төшлөк яҡта берәгәй булып һаналған Таңдыса исемле һылыу ҡыҙҙы бирәләр. Ата-әсәһе Таңдысаны кейәү йортона бер ҡуңыр буға эйәртеп оҙата.

Минәй менән Таңдыса, эйәртенешеп, ҡуңыр буғаны етәкләп, Уралдан һуҙылып үткән һырттар буйлап төньяҡҡа, батыр йортона китәләр. Яратышып, тигеҙ донъя ҡороп ебәрәләр. Матур-матур теремек балалары була.

Ҡуңыр һыйыр йыл һайын төрлө-төрлө төҫтәге быҙауҙар килтереп тора, һыйыр малына төҫ бирә. Ул шулай ете тапҡыр быҙаулай ҙа үлеп китә. Унан ҡалған етенсе тана ла етене быҙаулап үлә. Һыйырҙың эйәһе был быҙауҙарҙың һәр алтыһын халыҡтарға биреп, тоҡом тарата.

Һуңғы, етенсе быуындың етенсе быҙауы төҫө, ҡылығы, бар булмышы менән иң тәүге ҡуңыр һыйырға оҡшаш була. Уны Ҡуңырбуға тип йөрөтәләр. Был Ҡуңырбуға, тыусаға сыҡҡас, бығаса һыйыр малында күрелмәгән, ғүмерҙә булмаған ике быҙау тыуҙыра. Берәһе тарғыл орғасы, икенсеһе күк үгеҙ була. Ҡуңыр һыйыр бынан һуң бойоға, болоҡһой башлай, баҡыра, үкерә. Үрештән ҡайтмайынса, юҡ булып та йөрөгөләй.

Көндәрҙең береһендә Ҡуңырбуға быҙауҙары менән юҡ була. Таңдыса быға, бәхетем юғалмағайы, тип ҡайғыра, борсола, әйләнә-тирә урмандарҙы, тауҙарҙы ҡыҙырып сыға. Дейеү инәһе – Бисура башлауҙарына барып әйләнә,

әммә малдары табылмай. Инде бер ҡайҙа ла эҙе-юлдары булмағас: «Туҡта әле, был Ҡуңырбуға бик болоҡһоу ине, тиктәҫкә булмағандыр», – тип, үҙе килен булып килгән юлға ҡарай йүнәлә. Тояҡ эҙҙәрен, өйкөм-өйкөм тиҙәктәрҙе, суғырмаҡлы ҡайында өйкәнеүҙән әләгеп тороп ҡалған йөндәрҙе осрата. «Ә-ә-ә, минең малдарым тыуған илемә ҡайтып киткән икән дә баһа, малдың малы ла үҙ тупрағын онотмай!» – тип, эҙҙәренә төшөп, ҡыуалатып китә. Шул кисерештәрен көйгә һалып һамаҡлай:

Эҙләй-эҙләй талды аяҡтарым,
Тау-таш, үңер, һырттар артылып;
Күҙҙәремде өҙмәй ҡараһам да,
Ҡайҙа китте былар алҡынып.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Һуҡ(ы)рандым урынһыҙға,
Йәш түктем юлығыҙға,
Һағынып-һыҡтап һораным,
Әллә ниҙәр юраным,
Айыу һуҡты, урланды,
Тип тә томал уйланым.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү,
Зәп-зәп-зәп-зәү,
Һәү-һәү-һәү,
Һәү-һәү-һәү.

Таңдыса малдарының юлына төшөүенә шул тиклем ҡыуана. «Илай-һыҡтай һорағаным ҡабул булдымы икән?» – тип уйлай.

Эскенәмдә ятҡан уй-һағышым
Һеҙҙең юлға, эҙгә тоташты;
Әллә инде ысын һорағаным
Ерҙән алып күккә олғашты.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.
Йөрәккәйем һиҙенде,
Ҡайтырығыҙ беленде;

Әле бәхетем мул икән,
Тап юлығыҙ шул икән;
Тәңгәлдән-тәңгәл икән,
Тыуған ил ҡарап киткән.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү…

Ата йортонан Минәй иленә киткән сағында ла, малын эҙләп йөрөгәндә лә Таңдыса уралып-уралып ятҡан Оло Уралға ҡарап хайран ҡала. Армыт-армыт Урал һырттарына, монар тартҡан алыҫ арҡаларға ҡарап, йыр һуҙа:

Уралып та ятҡан Оло Уралдың
Һырт өҫтөнән ярып юл һалып,
Ҡуңырбуғам, һине ҡыуа барам,
Аяҡ-балтырҙарым бик талып.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Ҡайҙа китеп бараһың,
Түтәнән юл һалаһың;
Малһыҙ нисек ҡалайым,
Юллап һеҙҙе табайым,
Ана етәм, бына тип,
Еләатлай барайым.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү…

Ул саҡта Оло Уралтау кейек-ҡырағай йыртҡыстарға иҫәпһеҙ бай, яңғыҙ-яры йөрөүселәргә ҡурҡыныс була. Таңдыса Уралдың, уның тирәһендәге тауҙарҙың ҡыйғаҡ үткер һуйырташлы урындарынан үтә, аяғын телдереп, ҡырҡтырып бөтә. Аяғының һыҙлауына түҙә алмай һыпырып, ыуалап ҡарай, малдарымдың да тояҡтары шулай туҙып, яраланып бөткәндер инде, тип хафалана. Шунан һамаҡлай-һамаҡлай юлын дауам итә:

Урал ғына тауҙың арҡа юлы
Ҡыйғаҡ үткер саҡматаш ҡына,
Тыуған илдән төҫ тә тоҡом булған
Малды әйҙәп, йөрәк ашҡына.

Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Ҡаҡ ҡаҙыҡҡа бәйләрмен,
Әрләрмен дә һыйлармын,
Һөтөң һауып, май яҙып,
Көнкүрешем яйлармын.
Ҡәһәтләндем[1] мин һиңә,
Рәнйенем дә мин һиңә.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү...

Таңдысаның малдары төшөп алған йомро юлдан бер яҡҡа ла сителеп сыҡмайынса баралар: сыҡһаҡ, юлдан яҙлығырбыҙ тип ҡурҡалар. Юл ситендәге ҡыйғаҡ үләндәрҙең башҡынаһын ҡыйып өҙөп ашап баралар, һыу эскәндә лә, йылға баштарынан, ҡойолоҡтарҙан ғына боролоп эсеп, һыуһындарын ҡандыралар. Аҙашмаҫҡа була: ашаныуҙар юлдың уң яғынан, ә эсенеүҙәр юлдың һул яғынан булдырыла, сөнки былар өлөшлө малдар була. Малдарҙың ошо рәүешсә барыуына Таңдыса тағы ла ғәжәпһенә:

Кәрешкәләр киҫеп, сәскә ҡыйпып,
Еләй-еҫкәй ерҙе ерһенеп,
Ысыҡ утын ялап һыуһыныңа,
Тыуған-үҫкән ерҙе илһенеп,
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Еләй-еҫкәй бараһың,
Сәскә-үлән ҡабаһың,
Төйәгеңде ҡалдырып,
Алыҫ юлдар алаһың,
Аҙымыңды арттырма,
Аяғымды талдырма.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү.

Таңдыса ҡырас[2] буйлап барғанда, тәү башлап һыуһар осрап, юлын ҡыйып үтә. Һыуһар, бара биргәс, бер ағастан

---

[1] *Ҡәһәтләндем* – бурыс ҡуйҙым, ант иттем мәғәнәһендә.
[2] *Ҡырас* – тау һырты.

икенсеһенә һикереп, ырғып уйнап китә. Һыуһарҙың юл ҡыйыуын ул яҡшыға юрай. «Һыуһар булһам, мин дә, ағастан ағасҡа осоп, малдарымды ҡыуып етер инем», – тип уйлай Таңдыса.

Ҡыш һыуыҡтан һаҡлаған
Һыуһар ҡама тун икән,
Ерҙең үҙен ҡамаған
Урал тауы шул икән.
Эй, Уралым, Уралым,
Тирәләп ҡарап торамын.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Был яғына Таңдыса юлда осраған йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа, күҙенә күренгән һәр нәмәгә йыр сығарып бара. Бара торғас, мышы көтөүен күреп ҡала. «Был януарҙар хәүефһеҙ урында йөрөй торғандыр», – ти, үҙе лә арығас, ошонда йоҡлап китмәксе була. Мышыларға яҡын уҡ барып йоҡлап, иртә таң алдынан торһа, улар мыш та мыш көйшәнеп яталар, ти.

Боҫ-боҫрап китеп, мыш-мыш көйшәнеп,
Көтөү-көтөү йөрөй мышыһы;
Сыҡҡанымдан алып айыштым[1] мин,
Урал да икән йәшәү ышығы.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү.

Аңҡайып, тирә-яғына ҡарап ала. Бейек тауҙарҙа ап-аҡ ҡарҙар күренә. Алдында дөм ҡара урман. «Был урманда әллә ниҙәр барҙыр инде», – тип шомлана. Минәй батыр менән тәү башта ҡайтып килгәнендә Урал эсе уға шул тиклем тын, ҡурҡынысһыҙ булып күренгәйне. Килә торғас, алдарынан бер мәл көмөштәй ҡара төлкө йүгереп үткәйне. Минәй, мәргәнлеген күрһәтеп, ҡара төлкөнө шунда уҡ уғы менән атып йыға. Минәй төлкөнөң тиреһен

[1] *Айыштым* – аңланым, төшөндөм.

һыпырып ҡына ала ла ашанып-эсенергә туҡтаған ерҙә уны ағас ботағына элеп ҡуя. Төн ҡараңғылана. Минәй ҡара төлкө тиреһен алып һелкә, тиренән осҡондар сәсрәй. Минәй тирене Таңдысаның муйынына һала. Төн ҡараңғылығында уның бит-күҙҙәре яҡтырып китә.

Иртә менән тороп атлағанда, Таңдыса хәҙер ҙә үткәнде иҫкә төшөрөп, ҡасандыр төшлөк башҡорттарына ташланған дошмандарҙы ҡыйратҡан Минәй хаҡында йырлай:

Етмеш төрлө хәйлә белә икән
Һорғоло ҡарасай көмөш төлкөһө,
Батыр ирҙәр барҙа баҙнат итмәҫ
Хас дошмандың барыһы, көллөһө.
    Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
    Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү...

Уралдың улдары күп,
Килгән яуға бирмәҫтәр,
Уралдың ҡамауы күп,
Ырғып аша инмәҫтәр;
Эй, Уралым нығынһын,
Дошман аҫҡа йығылһын.
    Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
    Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү...

Сылтырап аҡҡан бер йылғаны сығып, ҡаршылағы тауҙың иңкеүенән ҡырас буйлап китә башлай. Аңғармаҫтан ғына алдынан илек[1] күтәрелеп сабып күҙҙән юғала. Таңдыса быны ң һылыулығына, йылғырлығына аптырап ҡарап тора.

Бара торғас, Таңдысаның тоҡсайына тултырып алып сыҡҡан аҙығы бөтә. Асығып, берәй нәмә тура килһә, өҙөпйолҡоп һоғонорҙай булып бара.

Был аланлыҡ, типһән тултырып,
Япраҡябып үҫкән балтырған;
Аҙаштырмаҫ ерҙән аҙаштырҙы
Аҙаланған өс баш малғынам.

---

[1] *Илек* – ҡоралай.

Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.
Аҡрынлағыҙ, аҙмандар:
Арыттығыҙ һеҙ мине,
Йүгерә-атлай киләмен,
Аптыраттығыҙ һеҙ мине.
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү.

Таңдыса балтырғандың япрағын, сығып ҡына килгән көпшәһен шыртылдата сәйнәп ашап, тамаҡ ялғап ала.

Өйкөм-өйкөм үҫкән ҡайынлыҡтарҙы, һирәк-һаяҡ ҡарағаслыҡ, ваҡ бешәлектәрҙе үтеп, йыуан уҫаҡлыҡты, ҡарағай урманды эргәләп бара-бара, бер үҙәктең башына килеп сыға. Унда, боттарын кирә баҫып, ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй, рәхәтләнеп ҡолонсағын имеҙеп торған ҡоланды[1] күрә.

Буйға буйсан, һылыулыҡҡа һылыу
Урал ғына тауҙың ҡоланы;
Атайсалдан килгән берсә малдың
Кире ҡайта торған йолаһы, –

тип үҙенең күңелен йыуата ла:

Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү, –

тип, сәңгел тауышы менән һауаны ярып һөрәнләп ебәрә.

Боҫтары күтәрелеп, тау һыртындағы ала-ҡола ҡар аҫтынан асылған ҡуңырланып ятҡан ерҙе йыуып, йылы ямғыр яуып үтә. Ер ҡабығы йыуылыу менән өр-яңы төҫ ала, битләүҙәрҙә – йәм-йәшел үлән. Әсәһенең: «Ләйсән ямғырына башыңды йыу, ауырымаҫһың», – тигән һүҙе иҫенә төшөп, арығанына, тәненең һыныҡҡанына[2] ҡарамайынса, атлай бирә.

Таңдыса тағы ла бик күп юл үтеп, тамам асыға башлай. Зыулашып осоп йөрөгән бал ҡорттарына осрай. Күтәрелеп

---

[1] *Ҡолан* – йылҡыға оҡшаш ҡырағай хайуан.
[2] *Һыныҡҡанына* – талыуына.

ағасҡа ҡараһа, тумыртҡа тишегенән ҡорттар осоп сығып йөрөй. Ағасҡа үрелеп менә, бер ҡыуыраҡ ботаҡҡа тотонғанда, ботаҡ айырылып китә. Шул урындан юлаҡланып ергә бал ағып төшә. Солоҡтоң эсе тулы күптәнге аҙау бал булып сыға. Таңдыса туйғансы бал ашай.

Ҡая ташлы һырғый, эре ҡарағас урманын үтеп барғанда, Таңдыса өйөрөлөп-өйөрөлөп осоп йөрөгән бөркөттәрҙе күрә, уларҙың өҙөп-өҙөп, һауа ярып саңҡылдаған тауышын ишетә, шунан үҙенең дә күңеле ҡанатланып, йөрәгенә көс-ҡеүәт өҫтәлә.

Ата-әсәләре Таңдысаға элекке замандарҙа Урал өсөн бик яман яуҙар булып үткәнен, баҫҡынсыларҙың ил эсенә үтеп инеп, халыҡты талап, мал-мөлкәтте тартып алып китеүҙәрен һөйләр булған. Ул, шуларҙы күңеленән үткәреп, урман араһында япмаланып, сатыр шикелле торған оло ҡарағайҙарға ҡарап, тәьҫирләнеп ултыра. Батырҙарҙың дошман менән ҡанға-ҡан килешеп илен-йортон һаҡлауын күҙ алдына килтерә. Йырлай, һамаҡлай:

Йәйенке лә ботаҡ, һай, ҡарағай
Йәм бирәлер бейек тауҙарға;
Аямаған йәнен, биргән ҡанын,
Ҡаршы торған батыр яуҙарға.
    Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
    Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Батыр ҡылысын һаҡлаған
Ҡын һыйышы булалыр;
Ил намыҫын һаҡлаған
Ир-уҙаман булалыр;
Ирҙе яуға өндәгән
Илдә бер заң булалыр,
    Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
    Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү.

Әлһерәп, аяҡ-ҡулдары, бөтә ағзалары талыҡҡан булһа ла, Таңдыса алға барыуында булды. Бер һөҙәк үрҙе төшөү менән, сылтырап ағып ятҡан һай ғына ташлы һыуҙы күрҙе. Таштан ташҡа һикергеләп, уны аша сыҡты. Бәләкәй генә үрләскә менгәс, алдында әллә ҡайҙан күренеп

күккә олғашып ятҡан күм-күк тауҙарҙы күрҙе. Күбә-күбә таштарҙың өҫтө-өҫтөнә ултыртылып бөткәненә ғәжәпләнеп барған көйөнсә, атаһының: «Урал батыр һәр илле, һәр йөҙ йылда таштарҙы өҫтө-өҫтөнә ултыртып бара», – тип һөйләгәне иҫенә төштө.

Артабан әштәле-әштәле[1] тауҙарҙы үтте, ҡашлаҡлы тауҙарға барып терәлеп, ҡаянан таштарҙың япмаланып-япмаланып торған урындарынан үтте. Имгәкләп күтәрелеп, тағы тауҙан төштө. Түшәм-түшәм таштарҙың текә ерҙә бер-береһенә һөйәлешеп ултырған аралыҡтарынан ҡыҫыла-ҡыҫыла барып, таҙа һыулы шишмәне үтеп, eләкемеш юҡмы икән тип, түбәгә күтәрелде. Арғы яҡ ауынҡыһында тағы ла һерәйешеп ултырған оҙон-оҙон таштарға, әллә ҡайҙан күренеп ятҡан тум-тум урындарға, таш өйөмдәренә тап булды. «Олатай-өләсәйҙәремдең ҡәбереме икән был? Ап-аҡ ҡына аҡ ҡауландар сәселеп үҫкән сәстәреме икән?» – тип уйланып барҙы. Ҡауланлыҡтар төбөндә сырылдашҡан буҙтурғайҙарға, ҡалҡып торған яҫы таштарға ҡарап бара-бара, атаһынан отоп алған ҡобайырҙы әйтемләргә тотондо:

Уралына артылып,
Теҙәкләнеп, тартылып,
Ергә терәп аяғын,
Тау-ҡаяға таянып;
Ужарланып дошманға,
Аҡбуҙында елдереп,
Саптарында сабышып,
Йән аямай алышып,
Яу ҡыуып, һөрән һалып,
Болот һымаҡ ҡуҙғалып,
Ҡулындағы ҡылысын
Яҡ-яғына һелтәнгән,
Дошманына уҡталған.
Тас айыуҙай алышып,
Кем уҙарҙан сабышып,
Ҡыу ҙа ҡыу, тип ҡеүәтләп,

---

[1] *Әштәле-әштәле* – кәштәле-кәштәле.

Килгән яуҙы дөмбәҫләп,
Алҡымлашып, алышып,
Ҡарыуын һынап ярышып,
Самытланып көс алып,
Өҙә тотҡан биленән,
Кәрен алған ҡулынан;
Унарын унарлап әйләгән,
Йөҙәрен йөҙәрләп әйләгән.

Әй, батыр ир, батыр ир,
Яу ҡайтарған батыр ир,
Һуғышҡанһың йәнтәстем.
Илгә сыҡҡан даныңды
Иҫемә алып, мин әйттем,
Мин әйттем, ау, мин әйттем.

Ҡан ҡойған ул, йән биргән.
Үңгәмләшеп, алышып,
Дошмандарын ҡамалап,
Ҡыҫырыҡлап ҡырған ул;
Ҡаялай күкрәк киреп,
Тауҙай ҡалҡып торған ул.

Хас дошманды баҫтырып,
Килгән юлын таптырып,
Илдән ҡыуып сығарған;
Ертыштан[1] да уҙғарған,
Уҙғарып, ау, уҙғарған.

Таңдыса, һирәк-һаяҡ ағаслы тигеҙлектән килә-килә, тау ҡуйынына инә. Тәпәш-тәпәш тауҙарҙы үтә биргәс, өҫкә күтәрелә, сусаҡ ташлыҡ араларына, ҡымыҙлыҡлы урындарға килеп сыға.

Таңдыса арып, арманһыҙ булып талыҡты, аяҡтары һыҙлап, быуындары ҡаҡшаны. Ямғыр күҙе төшөп, бер аҙҙан һибәләргә тотондо. Алыҫтараҡ ҡап-ҡара болоттар өйрөлөшә. Йәшен йәшнәп, ер һиңкетеп күк күкрәй. Таңдысаның ҡарағас урманына инеүе булды, шаулап ҡойма ямғыр яуып ебәрҙе. Ялағай ялт та йолт килеп, даҫыр-доҫор

[1] *Ертыш* – Иртыш йылғаһы.

күк күкрәп, шуның ыңғайына йәшен уттары ишелеп, йомарланып, Таңдысаның аяҡ араларынан да, ҡултыҡ аҫтынан да үтеп сыға башланы. Яҡ-яҡҡа йүгерҙе, ут уны баҫтырҙы, ҡыуаланы. Йәшен уттарының уйнауы, күктең күкрәүе ҡотороп көсәйҙе. Ҡарағастарҙы сарпып, ярғыслап, өҙгөсләп, сатын-сатҡа айырып, арҡыс та торҡос йығып бөттө. Ҡурҡынған Таңдыса шунда бер ҡалпаҡ ташты күреп ҡалып, шуға барып һыйынып, күҙен сырт йомоуы булды, йәшнәү ҙә, күкрәү ҙә көсһөҙләнә төштө. Ямғыр туҡтаны, йәшнәү ҙә бөттө, урман эсе, тирә-яҡ тып-тыныс булып ҡалды. Таңдыса иркен һуланы, күҙ алдары яҡтырып китте. Ниндәй генә ҡурҡыныслыҡтарға тарыһаң да, Урал ҡуйынында һыйыныр урын табаһың, тип һөйөнөп, ғорурланып, барған юлы менән атлауында булды.

Эңер төшөү менән, Таңдыса йоҡларға йәтеш урын ҡарай башланы. Бер яғы һөҙәк, ҡаршы яғы текә ҡаяға менеп, һикәлтә генә мүкле ташҡа йоҡларға ятты. Айыуфәлән килһә, ҡасырға уңай урын да ҡараштырҙы. Ятҡан ерендә генә ҡая аҫтына янтайған бер ҡарағай күрҙе. Ысынлап та, Таңдысаны таң алдынан эҙләнеп йөрөгән айыу килеп баҫты. Таңдыса баяғы ятыҡ ҡарағайға буйлап менә башланы. Айыу ҙа артынан үрмәләне. Ағас ауырлыҡты күтәрә алмай, тороҡ ҡарағайға эләгә-эләгә, гөрһөлдәп барып төштө. Таңдыса тороҡ ҡарағайҙың ботағына тотоноп, сатағына ултырып ҡотолоп ҡалды. Айыу, бахырың, ағас менән бергә ергә тәкмәсләне, ыңрана-ыңрана, әйләнеп ҡарай-ҡарай күҙҙән юғалды. Таңдыса тағы ла татлы йоҡоға талды.

Тау ашаһынан ҡыҙарып ҡалҡҡан ҡояштың йылы нуры уның йөҙөн иркәләп уятты. Ҡояш сығыу менән, юлсы үҙенең юлында булды. Тау тарлауыҡтарын, һырт-лас үңерҙәрҙе аша төшөп атлай-атлай таҙа һалҡын һыулы йылғаларҙы үтте. Был йылғалар, оло һыуға ҡушылып, ҡайҙарға ғына аға икән, ошо һыуҙар һымаҡ аҡһам, мин дә илемә тиҙерәк барып етер инем, тип тәрән уйға төштө. Барған юлынан яҡын уҡ бөгөлөп-бөгөлөп аҡҡан ҙур ғына йылға күҙенә салынды.

Анау ятҡан йылға – Йылайыр ул,
Ҡайраҡ өсөн ташын алырмын;
Һау-сәләмәт етһәм үҙ илемә,
Ғүмерлеккә шатлыҡ табырмын.
   Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
   Һәү-һәү-һәү-һәү, зәп-зәп-зәү.

Таңдысаның атаһы Өлкәр ун ике йәштән алып утыҙ йәшкә хәтле гел ятлап һабаҡ алған, Таһранда[1] табиплыҡҡа уҡып ҡайтҡан ғилемле кеше, Уралдағы төрлө үләндәрҙән дауа эшләп, халыҡты дауалап, ауырыуҙарынан йүнәлтер, һауыҡтырыр ине. Таһран шағирҙары менән ултырҙаш булып, шиғриәткә әүәҫ, сәсән дә ине. Таңдыса: «Барып етһәм, ярылған табанымды, һыҙырылған балтыр, йөҙләктәремде атайым дарыулар, ярама яр япрағы һалып, йөнтәҫ япраҡтың ҡыҙыл көрән һутын һығып алып дауалар әле», – тип уйлай. Был хаҡта ла ул йыр теҙә:

Ирәүән барҙа, ир үлмәҫ,
Андыҙ барҙа, ат үлмәҫ,
Һыҙланыуҙан бер дауа –
Ҡырмыҫҡаның майы.
Сиренә күрә табылып тора
Бер әмәле, бер яйы.
   Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
   Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү.

Шулай бара торғас, ул бер оҙон асыҡлыҡ осона килеп текәлде. Таңдыса ошо асыҡлыҡ буйлап тәпәшәк кенә үрләстәрҙең береһенә менеп, икенсеһенән, өсөнсөһөнән төшөп, ҡап уртаһына тигәндәй килеп етте. Ултырып ял алайыммы тип ҡаранып торғанда, яҡында тирмә кеүек түңәрәкләнеп торған берҙән-бер ҡайын күрҙе лә шул ҡайын янына барҙы. Был тау түбәһендә асыҡлыҡ уртаһында ялбырлап үҫкән ҡарт ҡайын булып, төбөндә бер генә бөртөк гөл-сәскә үҫеп ултыра ине. Таңдыса, ҡайын

---

[1] *Таһранда* – Тегеранда.

төбөнә ултырып, сәскәнең һабағынан тотоп үҙенә борҙо, сәскә лә минең кеүек аҙашып килеп сыҡтымы икән, тип ғәжәпһенде. Гөл сәскәһе елберләгенән асыла-асыла ҙурайып, кейеҙ ҡалпаҡтай булды, тажы күҙҙе ҡамаштырып балҡып китте, нәҙек кенә бала тауышы менән сәскә телгә килде, ти:

Юлың алыҫ, беләмен,
Талыҡҡанһың, күрәмен;
Бер аҙ туҡтап китһәңсе,
Әҙерәк ялдар итһәңсе,
Илдең батыр ҡыҙы һин,
Илдең матур ҡыҙы һин.

Йөрәк-бауырҙы өҙгөләрлек, тән тамырҙарын тетрәтерлек ҡурай тауышы ишетелде. Ул көйлө тауыш та, йыр ҙа, моң да ялбыр ҡайын сатаһынан сыға, ти. Шул моңға ҡушылып, ҡаршылағы арҡа яғынан ер һелкетеп баҫҡан тояҡ тауышы, Урал өҫтөндә алыҫ-алыҫтарға бығаса ишетелмәгән бер ауаз таралды, ти:

Балҡып ҡына ятҡан был тауҙар,
Ҡалҡып ҡына ятҡан был тауҙар –
Ырыуымдың ул бит төйәге,
Ил-йортомдоң ул бит терәге.

Тауыш яңғырауына әйләнеп ҡараһа, ҡаршылағы арҡа өҫтөнән аҡбуҙ атҡа атланған, ҡулына ҡылыс тотҡан, буй-һыны болоттан ашҡан батырҙың Уралтауға табан барыуын күрә. «Урал батырҙың рухылыр был, уның йәне үлемһеҙ, ул хәҙер ҙә, дошман Уралға аяҡ баҫмаһын, халҡымды ла таламаһын, тарҡатмаһын, тип ҡурғап, һағауыллап йөрөй, тиҙәр ине, раҫ икән», – тип ата-бабаларының һөйләүҙәрен хәтерләп, батыр һынын күҙҙән юғалғансы ҡарап, оҙатып ҡала.

Минәй менән Таңдыса, Өлкәр ҡарт менән Таңдысаның әсәһе Өһәбикә әбей биргән быуаҙ тананы етәкләп, кейәү йортона ҡайтҡанда бер талай ер килгәс, был яҡтағы ҡомло асыҡ ялан ерҙең тәү тапҡыр әлгәнйәге менән

ялманы күренгәйне. Таңдыса ул саҡта ҡараштары менән Минәйенә һыйынып, тыуған Уралы, уның батырҙары тураһында ошо тәүге йырын сығарғайны:

Береһе үрҙә, береһе ерҙә уйнай,
Әлгәнийәге менән ялманы;
Үҙен түгел, күләткәһен күреп,
Дошман тигән берәү ҡалманы.

Алдында торған Ҡуңырбуғаһының янбашынан һөйә-һөйә:

Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү, –

тип тәүге саҡырыу, иркәләү һүҙен әйткәйне. Яҡ-яғына ҡараш ташлап, ошолай һамаҡлағайны:

Тыныс булыр тыуған йорт,
Батыр ирҙәр бар саҡта,
Дошман ҡабат яу һалмаҫ,
Айбарлы ирҙәр бар саҡта.

Эй, Минәйем, батыр ир,
Илен ҡурғап ятыр ир, ау,
Йортон ҡурғап ятыр ир...

Таңдыса текә ҡая таштарҙы, ҡырастарҙы, үңер һырт-тарҙы, типһән аҡланлыҡтарҙы, кәбәндәй, яҫмарҙай ташлы урындарҙы, соҡор-саҡырлы, уйҡыл-уйҡыл асыҡлыҡ-тарҙы, төбәк-төпкөлдәрҙе үтте. Инде Уралдың ташлы, ҡыраслы ҡаялары бөтөп, һирәкләп көмәс-көмәс ослайыш-ҡан тауҙар күренә башланы. Вағыраҡ уҫаҡ, имән, йүкә, йыла, саған ағаслы урмандар араһына килеп инде. «Урал-тауҙың ҡап уртаһын үтеүемә күп булды шикелле, инде осона сыҡмайыммы икән?» – тип уйланды.

Таңдыса оҙон юл үтеп, интегеп-ыҙаланып килә торғас, был яҡтағы тауҙарҙы, ер-һыуҙы ата йорто яғындағыға оҡшата бирҙе. Күңеле күтәрелеп, йырлай-йырлай бара

торғас, уйламаҫтан малдарының юлын юғалтты. Ул яҡҡа ла, был яҡҡа ла эҙләнеп йөрөп ҡараны, таба алманы.

Бар булған тауышы менән һөрәнләп, ике быҙауын эйәртеп ҡасҡан Ҡуңырбуғаһын өс көн буйы ыҙаланып эҙләп йөрөнө. Кистәрен гел ошо урынға килеп төнгө ялын алды.

Дүртенсе көндөң иртәһендә Таңдыса төшлөккә ҡарап самалап атларға булды. Ул арала бер күләүеккә осрап, шунан пырлашып һуна өйрәктәре осоп китте.

Һунарсы ла егет атып ала
Күләүек тә күлдең һунаһын;
Бер күрҙеме, кеше күрә икән
Был донъяның ыҙа-нужаһын, –

тип, тауышын алыҫ ебәреп йырланы. Алдағы кескенә йылғаның кисеүен сыҡҡанда, ҡарағас олононда өйкәнгән малдарының эләгеп ҡалған йөндәрен күреп ҡыуанды. Шул юл менән уңға ҡайырылды.

Аҡ сәскә лә менән, ай, миләүшә
Бер-береһе менән серләшә;
Үҙем әллә ҡайҙа йөрөһәм дә,
Күңелем һеҙҙең менән һөйләшә.

Йыр тауышы урман эсен яңғыратты, тау-таштарҙы шаңғыратты ла ҡаҡлығып үҙенә килде. Ошо тауышты һырт аша малдары ла ишетеп ҡалып, эйәһе яғына ҡарай әйләнеп саптылар. Ике быҙауын эйәртеп, Ҡуңырбуғаһы килеп етте, ти. Таңдыса уларҙы ҡосаҡлап һөйҙө, малдары йәнә алға ҡарай ҡыҙыу ғына атлап китте. Таңдыса арттарынан төшөп алды.

Малдары алдан уҡ барып, бер иҫке генә тирмә янында тора ине. Таңдыса шунда барҙы. Бик ҡартайған, ергә сүгеп бөткән бер әбей килеп сыҡты. Таңдыса әбейҙең маңлай уртаһындағы миңен күреп, әсәһен таныр-танымаҫ аптырап ҡарап торҙо. Тирмәнән йөҙ йәшәр ҡарт килеп сыҡты. Таңдыса атаһының да төҫөн сырамытты ла үҙен ата-әсәһенә танытты. «Ысынмы был, бушмы?» – тип үҙ

күҙҙәренә үҙҙәре ышанмайынса, ҡарт менән ҡарсыҡ ҡыҙҙарының ҡулдарынан тотоп, текләп-текләп ҡаранылар.

Таңдыса ата-әсәһен ҡосаҡлап күкрәгенә ҡыҫып:

Килсе, килсе, әсәйем,
Аптырама, атайым,
Күҙ туйғансы ҡарайым,
Бик һағындым, күрәйем,
Күҙ йәшемде түгәйем.

Күргем килеп һарғайҙым,
Илай-һыҡтай ҡартайҙым,
Әсәһе һыу, ашар ашым
Ошо илемдә ҡалғандыр.

Күп булмабыҙ беҙ бында:
Унда ҡалды ун балам;
Унынһы ла матурҙар,
Атаһылай батырҙар, –

тип һамаҡланы.

Таңдысаны шатланып ҡаршы алалар. Ата-әсәһе һыйхөрмәт күрһәтергә тырыша. Ашап-эсеп, бер аҙ тынысланып алғас, ҡыҙҙары:

Тулы күңелем бушанды,
Малдарым да юшанды, –

ти.

Аҙналар буйы ҡайҙан-ҡайҙа оҙон, ауыр юл үткән ҡыҙҙарының арып-талып, ҡаҡ һөйәккә ҡалып йонсоғанын күреп, Өһәбикә ҡарсыҡ: «Балам, арығанһың, ят тубығыма», – тип күпсек һала. Атаһы Өлкәр ҡарт ярылыпҡырҡылып бөткән аяҡтарына һарыҡтың оса майын һөртөргә тотона. Таңдыса татлы йоҡоға тала. Әсәһенең бер генә бөртөк йылы йәше тама. Был йәш ата менән әсәнең тәүләп ҡауышҡандағы йәше була. Унан һуң ике күҙенән ике бөртөк йылы йәше тама. Бынынһы әсә менән ҡыҙҙың айырылышыу аралығындағы күҙ йәше була. Ул яндыра

төшә, Таңдыса һиҫкәнеп уяна. Ата-әсәһен күреп, шат йылмая ла, әсәһе алдына ҡабат ятып, ҡаты йоҡоға китә.

Ике көн, бер төн йоҡлағас, уяна. Уның хөрмәтенә һый-хөрмәт, уйын-көлкө ойошторола. Һеҙ ҙә ҡәҙерле ҡунаҡһығыҙ, тип, малдарына тоҙ ялаталар.

Ырыу башлығы үҙе Таңдысаға алдыр тултырып ҡымыҙ һуҙа. «Әсәң һөтө урынына эс, ҡыҙым», – ти. Таңдыса алдырҙы ҡулына алып, сайҡап-сайҡап:

Иртән иртүк тороп юлланырбыҙ,
Айыра баҫып тауҙың бейеген,
Ҡуңырбуға менән быҙауҙарға
Хәүеф һалмаҫ Урал кейеге, –

тип йырлап ебәрә. Халыҡ алдында Тыуған илен, ата-әсәһен үлгәнсе онотмаҫҡа ант итә. Ашап-эсеп, күңел асып, һөйгән ҡыҙҙарының тыуған йортона ҡайтыуын байрам итәләр. Таңдыса иләҫләнеп ошо йырҙы йырлай:

Ашағыҙ ҙа, дуҫтар, эсегеҙ,
Ашап-эсеү менән мал бөтмәй;
Тәҡдирҙәрең етеп, ризыҡ бөтһә,
Ҡауырһындан тамған һыу ҙа үтмәй.

Иртәгеһен халыҡ йыйылып оҙата сыға. Ырыу ололары аманат һүҙҙәрен, ата-әсәһе васыятын әйтә.

Ырыу башлығы һамаҡлап ошоларҙы әйткән:

Ырыуҙағы ололарҙан
Кейәүебеҙгә һауыт[1] бир;
Улдарыңдың үҙле-үҙенә
Беҙҙән орлоҡ, кәтмән[2] бир;
Ҡыҙҙарыңдың һәр беренә
Һарауыс менән йөҙөк бир.

Кеше түгел, малҡай ҙа,
Быҙауҙарын эйәртеп,

---

[1] *Һауыт* – һуғыш кейеме.
[2] *Кәтмән* – яңы уңыштан бүләк.

Ҡыл муйынсаҡ һөйрәтеп,
Тыуған ерем тип килгән, –
Белгәндәргә белектер,
Белмәгәнгә көҙөктөр.

Ҡуңырбуға, малдарым,
Килегеҙ, кил яныма;
Ырыҫ-байлыҡ бәйләйбеҙ
Быҙауҡайҙың муйынына.

Ҡусҡар мөгөҙлө тәкәңә
Түл төйөмө әләбеҙ;
Ҡуш мөгөҙлө һарығыңа
Бөтмәҫ тоҡом теләйбеҙ.

Кәзәң менән тәкәңдең
Йөнө, дебете күп булһын,
Үрсеп китеп, күбәйеп,
Тау-таш ҡуйыны тулһын.

Ҡабырғаһын тәкәңдең
Кертелдәк май ҡаплаһын,
Унда-һанда һуғылып,
Зыян булып ятмаһын;
Илең-көнөң туҡ булһын,
Малың ырыҫ, ҡот булһын.

Ата йортона бүләк-ҡот булһын тип, Таңдыса Ҡуңырбуға менән килгән күк үгеҙ быҙауҙы ҡалдыра. Быҙауҙы мал күрке өсөн суҡлап, Таңдысаға имен-аман юл теләп ҡалалар.

Таңдыса килгән юлына төшөп, шул юл менән Урал өҫтөнән бик күп көндәр буйы барҙы ла барҙы. Аҙналар, айҙар үтте, ти. Бара торғас, алыҫта Иҙел башы Ирәмәл күгәреп күренә башлай.

Беҙ ултырған ерҙән күренеп ятҡан
Иҙел башы – Ирәмәл тау икән;
Беҙ киткәндә бары ла теүәл ине,
Илгенәйем имен-һаумы икән?

Беҙ китеүгә күп кенә,
Йөрәккәйем елкенә.
Күкрәк-эсем тулҡынды,
Арып-өҙөлөп йолҡондом.
Ҡуңырбуға, быҙауым,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
Эйәрегеҙ артымдан,
Инде китмәҫ йортомдан.

Урал өҫтөнән килә торғас, бейек-бейек, әллә ҡайҙан күренеп ятҡан һырттарҙы үттеләр. Иң бейегенең өҫтөнә күтәрелеп, бер аҙ ял итеп алғас, Таңдыса былай ти:

Теҙмә тауҙар, билән, ҡыр, арҡалар –
Был Уралҡай тауҙың күрке икән;
Тарбаҡ-тарбаҡ үҫкән ағастары –
Ҡабарып та торған бүрке икән.
Ҡуңырбуғам, һәү-һәү-һәү,
Тарғыл танам, һәү-һәү-һәү.
Ҡуҙғалығыҙ, малдарым,
Тамағығыҙ ялғанды,
Һәүкәшкәйем, һәү-һәү-һәү,
Эйәрегеҙ, ҡалмағыҙ,
Кәзәкәйем, кәз-кәз-кәз,
Бәрәнкәйҙәр, бәр-бәр-бәр,
Үҙебеҙгә етәбеҙ,
Ҡыуаныстар көтәбеҙ.

Байтаҡ ҡына юл үттеләр. Оло Уралдың өҫтөнән көн тыуышында, ҡояш байышында эре-эре тауҙар күренә.

Анау ятҡан Алатауҙы,
Күҙегеҙ етһә, ҡарап күрегеҙ,
Ана теге бейек – Ирәмәл ул,
Беҙ эргәләп үттек, белегеҙ.
Ҡуңырбуғам, малдарым,
Туйғанынса ҡарағыҙ,
Танып, белеп алығыҙ,
Хәтерегеҙгә һалығыҙ:
Әле байтаҡ барырбыҙ.

Ҡурташ ҡалды уңдараҡ,
Рәз, Ҡағыташ[1] – ҡырҙараҡ,
Ҡырҡты[2], Ирәндек – көнлөктә,
Сахра-сусаҡ – төнлөктә,
Һелтәй-һелтәй ҡулдарҙы,
Күп ҡыҫҡарттыҡ юлдарҙы.
Ҡуңырбуғам, һәүкәшкәйем,
Һәү-һәү-һәү,
Быҙауҡайҙар, зәп-зәп-зәү,
Кәзәкәйҙәр, кәз-кәз-кәз,
Бәрәнкәйҙәр, бәр-бәр-бәр.

Тимерғаҙыҡ, Һарат, Буҙат, Етегән, Өлкәр, Арҡысаҡ, Торҡосаҡ йондоҙҙарына ҡарап, Таңдыса үҙенең ҡайһы яҡҡа барғанын, ҡайһы ташҡа еткәнен үлсәп белеп ҡайтты.

Минәй ҡарт һәм балалар малдары менән эйәртенешеп ҡайтып килгән Таңдысаны һағынып ҡаршы алалар. Уның иҫән-һау ҡайтыу хөрмәтенә оло туй ҡылалар.

Башҡорт иленең төньяғынан төшлөк яғына инсе мал ҡасып ҡайтҡан юл «Ҡуңырбуға юлы» тип аталып ҡала. Шул замандан бирле ҡуңыр мал изге мал булып, ҡуңыр төҫ изге төҫ һаналып ҡалған, ти.

## «БУРАНБАЙ» РИҮӘЙӘТЕ

Элек бер ҙур боланан һуң башҡорттарҙың бер өлөшө Ирәндек буйынан бик алыҫтағы, Ырымбур аръяғындағы, Туҡ һыуы буйына ҡасып күсеп ултырған. Шул саҡта бер ауылдың башы Иҫәнгилде тигән ҡарт була. Ул Ағыш исемле улын Ирәндек яғынан бер ҡыҙға өйләндергән. Быларҙың Йәрмөхәммәт исемле улдары тыуған. Халыҡ уны Йәркәй тип кенә йөрөткән. Йәркәй йәшләй үк бик батыр көрәшсе, йырсы, ҡурайсы булып дан тотҡан.

---

[1] *Ҡурташ, Рәз, Ҡағыташ* – Белорет районындағы тауҙар.
[2] *Ҡырҡты* – Эбйәлил районындағы тау.

Бер заман Туҡ-Соран ерҙәрен төрлө баярҙар хәйлә, золом менән тартып ала башлаған. Халыҡ Йәркәй етәкселегендә быға ҡаршы сыҡҡан, ерҙәрҙе межалаттырмаҫҡа тырышҡан. Ләкин хөкүмәт ғәскәр ебәргәс, бола баҫтырылған. Йәркәй менән тағы бер нисә кеше ҡулға алынған.

Йәркәйҙе төрмәгә оҙатҡанда, ул, Һаҡмар һыуын сыҡҡан саҡта, һаҡ аҫтынан ҡасып киткән. Һаҡсылар быны тота алмаған. Йәркәй Башҡортостанға, Ирәндек буйына ҡасып килеп, элекке тыуған йортона барып морон төрткән. Бында бер нисә туған-тыумасаһынан башҡа берәү ҙә уны танымаған, белмәгән. Туғандары уны икенсе исем менән Буранбай тип йөрөтәләр.

Был һәләтле егетте Буранғол кантон уҡырға ебәргән. Уҡып ҡайтҡас, уны үҙенең ҡул аҫтында бер старшина итеп тәғәйенләгән.

1812 йылда Ватан һуғышы сығып киткән. Илде яҡларға башҡорттар ҙа күтәрелгән. Полктар төҙөлгән. Буранбай йөҙ һыбайлынан торған йөҙ башы булып яуға киткән. Унда күп батырлыҡтар күрһәткәне өсөн миҙалдар менән бүләкләнгән, француздарҙы ҡыуып, Париждың үҙенә үк барып еткән. Батыр илгә дан менән ҡайтҡан.

Яуҙан һуң Буранбай тағы элекке урынында старшина булып эшләй башлаған. Ләкин ул, яу батыры, Ырымбур губернаторының халыҡҡа һалым һалған, төрлө ҡыҫымдар яһаған фармандарын үтәргә теләмәгән, халыҡ мәнфәғәтен яҡлаған. Быға губернаторҙың бик ныҡ асыуы ҡабарған. Ләкин ул Буранбайҙы ҡапыл ғына ҡулға алырға шикләнгән. Ни өсөн тигәндә, Буранбайҙың халыҡ, старшиналар алдында абруйы ҙур булған. Шуға теге хәйлә юлына күскән. Губернатор бер килке башҡорт кантондарын, старшиналарын Каруанһарайға ҙур йыйынға тип саҡыртҡан. Бында төрлө ырыуҙың атаҡлы йырсылары, ҡурайсылары ла саҡырылған. Ярышта еңеүселәргә бүләктәр билдәләнгән. Йыр, ҡурай ярышында Буранбай берәүгә лә ал бирмәгән. Туҡ буйы яғынан килгән башҡорттар уны оҫта уйнауы, йырлауы менән үҙҙәренең Йәркәйҙәренә оҡшата биреп ҡуйғандар.

Кис бер тархан башҡорт түрәләрен, ҡурайсыларын үҙенә ҡунаҡҡа саҡырған. Бында ла Буранбай йырҙа, ҡурайҙа табындың күрке булған. Туҡ буйынан килгән бер старшинаның Сәлимә исемле бисәһе Буранбайҙың тауышын Йәркәйҙекенә бик ныҡ оҡшатып, шиккә ҡалған. Аҙаҡ Буранбай балтырындағы яра эҙен күреп, уның Йәркәй булыуына тамам ышанған. Йәш саҡтарында Йәркәй менән Сәлимә бер-береһен яратышып йөрөгән булғандар икән. Тик атаһы – старшина кеше – бер ярлы малайы ҡурайсыға ҡыҙын бирергә теләмәгәнгә генә улар ҡауыша алмағандар. Сәлимә иртәгәһен ире алдында маһайырға теләпме, нисектер: «Ана, Йәркәйҙе ҡасҡы тип яманлаһалар ҙа, хур булмаған, етмәһә, элеккесә йыры, ҡурайы менән бар халыҡты, табынды үҙенә ҡаратып тора. Буранбай старшина тигәнебеҙ Йәркәй бит», – тип хәбәр һалған.

Бисәһен яман көнләгән һәм губернатор алдында яҡшатлы булып күренергә тырышҡан был Туҡ буйы старшинаһы Сәлимәнең хәбәрен губернаторға еткергән. Йәркәй-Буранбай старшинаның ҡайтырға юлға сығыуы була, уны тотоп, ҡул-аяғын бәйләп һорау алырға алып киләләр. Аҙаҡ бығаулап һөргөнгә оҙаталар. Йәркәй-Буранбайҙың «Буранбай», «Ялан Йәркәй», «Бөҙрә тал» тигән йырҙары Себер һөргөнөндә саҡта сығарылған йырҙары икән.

«Ялан Йәркәй» йырында шундай куплет бар:

Ялан ғына ере, ай, ҡалҡыуыраҡ,
Бүҙәнәләр йүгерә төбөндә.
Тәүәккәл дә булып йөрөр булһаң,
Исемкәйең ҡалыр иләндә.

Ана шулай тәүәккәл булғаны, халыҡ мәнфәғәтен күҙәткәне өсөн оҫта йырсылығы, ҡурайсылығы менән Буранбайҙың исеме лә, йырҙары ла илкәйендә ҡалған. Был йырсы, ҡурайсы хаҡында Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә хәҙер ҙә легендалар ишетергә мөмкин.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Тексты тулы итеп һөйләргә өйрәнегеҙ.

**2.** Риүәйәттә 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһында нимәләр әйтелә? Был һуғыш тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр табып уҡығыҙ.
**3.** Һеҙҙеңсә, Йәркәй-Буранбай ни өсөн йәшеренеп йәшәй?
**4.** Йәркәй-Буранбайға характеристика бирегеҙ.

## БУРАНБАЙ

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ –
Буранбайҙың яҙған хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары.

Оҙон да ғына оҙон, ай, бик моңло
Буранбайҙың һуҙған йырҙары.
Буранбайҙың йырын тыңлағанда,
Йөрәкһенә ауыл ирҙәре.

Буранбайҙың аты, ай, кирме ине,
Серге аҫҡайҙары тирме ине?
Буранбай ҙа менән, ай, Ибраһим
Себерҙәргә китер ирме ине?

Алыҫ та ғына алыҫ, ай, күренгән
Юшатырҡай башы Аҡбейек.
Буранбай ҙа китте, иле ҡалды,
Илкәйенә булды ҙур көйөк.

Буранбайҙың менгән ҡашҡа аты
Саҡрым-саҡрым бармай баш ташлай.
Түрә тигәндәргә ышанмағыҙ,
Себер ебәреп үк башты ашай.

Һаҡмар ғына һыуҙың яры бейек,
Йәбешеп кенә сығыр талы юҡ.
Буранбай ҙа менән Ибраһимдың
Биреп кенә ҡайтыр малы юҡ.

Буранбайҙың яҙған, ай, хаттары –
Табаҡ та ғына табаҡ аҡ ҡағыҙ.

Буранбай ҙа һөргөн китте тиеп,
Балаларын ситкә ҡаҡмағыҙ.

Буранбай ҙа Себер китеү менән,
Тынырмы икән баяр ерҙәре?
Буранбай ҙа һөргөн китеү менән,
Баҫылыр микән илдең ирҙәре?

Ҡая ла ғына ташты, ай, үткәндә,
Буранбайҙы уйлап уҙығыҙ.
Буранбайҙың ғына, ай, көйкәйен
Иҫтәлеге итеп һуҙығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. «Буранбай» йырында халыҡ тормошоноң ниндәй яҡтары асыла?
2. Буранбай менән Ибраһим кемдәр ул?

## *Йырҙар тураһында*

**Йыр** – фольклорҙың киң таралған жанрҙарының береһе, халҡыбыҙҙың борон-борондан килгән тормош юлдашы. Йырҙарҙа беҙ халыҡ тарихында булып үткән иң мөһим, иң күренекле ваҡиғаларҙың поэтик йылъяҙмаһын, уның тормош-көнкүрешенең, йолаларының сағылышын күрәбеҙ. Йырҙарҙа халыҡ үҙенең Тыуған илен, батырҙарын данлай, ҡыуанысын һәм шатлығын, ҡайғы-хәсрәтен уртаҡлаша, мөхәббәтен аңлата.

Йыр һәр кемдең үҙе менән йәшәй. Уны шатланғанда ла, моңланған саҡта ла, күңел төшһә лә, теләгән ваҡытта, теләгән ерҙә йырларға, һис юғында көйләргә мөмкин. Йыр менән ир-егеттәр яуға киткән, яуҙан ҡайтҡан; туй ваҡыттарында ла, ҡәҙимге мәжлестәрҙә лә иң беренсе булып йыр һәм ҡурай моңо яңғыраған. Халыҡтың үҙе әйткәнсә, йыр күңелгә йыуаныс та, ҡыуаныс та биргән.

Халыҡтың көндәлек тормош-көнкүрешенә яҡын булыуы, поэтик яҡтан камиллығы, көй һәм йыр тарихының берҙәмлеге башҡорт йырҙарын оҙон ғүмерле ижад төрө иткән.

Элек-электән халыҡ күңелендә йырҙарға ғына түгел, ә, бәлки, данлы йырсыларға һәм ҡурайсыларға һөйөү һәм ихтирам тәрбиәләнгән. Борон-борондан уҡ оло йыйындар ваҡытында ҡурайсылар бер-береһе менән ярышып ҡурай уйнар, йыр сығарыр булған.

Башҡорт халыҡ йырҙарын төрлө принциптан сығып төркөмләргә мөмкин. Көйҙәренең характерынан сығып, мәҫәлән, уларҙы **оҙон** һәм **ҡыҫҡа йырҙарға**, ә йөкмәткеһе буйынса **тарихи** һәм **лирик йырҙарға** бүлеп йөрөтәләр.

**Тарихи йырҙар** – халыҡтың граждандлыҡ һәм хәрби тарихына, ил яҙмышына бәйле мөһим ваҡиғалар хаҡында һәм унда ҡатнашҡан халыҡ батырҙары, күренекле шәхестәр тураһында хикәйәләүсе ижад төрө. Тарихи йыр – үҙенең характеры менән конкрет тарихи ваҡиға ерлегендә тыуған лиро-эпик әҫәр: халыҡ яҙмышына бәйле ваҡиға хаҡында хикәйәләү ҙә, уйланыу ҙа унда берҙәй үк дәрәжәлә үрелеп килергә мөмкин.

Тарихи йырҙар – патриотик йөкмәткеле һәм героик пафос менән һуғарылған мираҫ. Унда халыҡ тарихында булып үткән иң һынылышлы осорҙар, быуындар күңелендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған оло ваҡиғалар сағылыш тапҡан. Тарихи йырҙарҙы, һис һүҙһеҙ, халыҡ тарихының поэтиклаштырылған йылъяҙмаһы тип һанарға мөмкин. Уларҙы түбәндәге тематик төркөмдәргә бүлеп йөрөтәләр:

1. Тыуған ил һәм ырыу-ҡәбилә берҙәмлеге тураһындағы йырҙар.
2. 1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы йырҙар.
3. 1812 йылғы Ватан һуғышы тураһындағы йырҙар.
4. Кантон башлыҡтары тураһындағы йырҙар.
5. Ҡасҡындар тураһындағы йырҙар.
6. Хәрби поход һәм әрме йырҙары.

Башҡорт халҡының тарихи йырҙарынан иң боронғо һәм йөкмәткелеләренең береһе – «Урал». Ул башҡорт ырыуҙарын берләштереүсе, уларҙың берҙәмлеген күрһәтеүсе. Шуға ла йырҙа: «Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы – Ете лә ырыу – илдең төйәге», – тип әйтелә.

Йырға теге йәки был һүҙ юҡҡа ғына индерелмәгән бит, һәр һүҙҙең төбөндә оло мәғәнәгә эйә булған тарих ята. Иң беренсенән, йыр аша башҡорт иле, Ватаны Урал икәне әйтеп бирелә. Был урында башҡорттарҙың әллә нисәмә быуыны йәшәгәне, төйәген һаҡлап ҡорбандар биргәне, уларҙың изге һөйәге ошо ерҙә һаҡланғаны, ата-бабалары ошонда ерләнгәне әйтелә:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы
Атай-олатайҙарҙың да төйәге,

йәки:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы –
Ете лә ырыу – илдең төйәге.

Үҙе йәшәгән ерҙе һаҡларға һәр саҡ әҙер торғаны ла асыҡ сағыла йырҙа:

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡкай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Йыр изге ерҙәренә аяҡ баҫырға, ҡул һуҙырға теләүселәрҙе ҡаты иҫкәртә. Башҡорттар йәнен аямай был ер өсөн һуғышасаҡ, ҡорбан буласаҡ:

Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаҫ.

Шуға күрә лә элек-электән башҡорт зыялылары, йырсылары, батырҙары бергә йыйылған саҡта бер-береһен ошо «Урал» йыры менән сәләмләгәндәр. Тора-бара ул башҡорт халҡының милли гимнына әйләнгән. Башҡорт ҡоролтайҙары йола буйынса ошо йыр менән үҙенең эшен башлап ебәрә һәм тамамлай.

Тарихи йырҙарҙың ҙур бер төркөмөндә башҡорт атлыларын яуға оҙатыу моменты сағылып ҡалған. «Эскадрон», «Француз көйө», «Һай, илкәйем» кеүек йырҙарҙа яуға оҙатыу күренеше төрлө яҡлап асылған.

Башҡорт атлыларын яу ҡырында һүрәтләгән, теге йәки был урында булып үткән һуғыш ваҡиғалары менән бәйләгән йырҙар әллә ни күп түгел. Ундайҙарға миҫал итеп «Әхмәт Байыҡ», «Любизар», халыҡтың ауыҙ-тел ижадында әлегәсә һаҡланмаған, әммә декабрист шағир П. Кудряшёв яҙмалары аша килеп еткән йырҙарҙы индерергә мөмкин.

Француз яуы тураһындағы халыҡ йырҙарының төп геройы – халыҡ. Был күренеш уларҙың поэтикаһында ла асыҡ күренә: бөтә йырҙарҙа ла хикәйәләү халыҡ исеменән алып барыла. Батырҙарҙы яуға оҙатҡанда хатта Уралтау ҙа телгә килгән, ти:

Ишетмәйҙәр микән сит илдәрҙә
Уралтауҙың йәйелеп ятҡанын.
Ниндәй яуға ҡаршы барһалар ҙа,
Һис күрмәнем еңмәй ҡайтҡанын.

**1773–1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы тарихи йырҙарҙың** ҙур өлөшөн Крәҫтиән һуғышының етәксеһе Емельян Пугачёвтың ярҙамсыһы, халҡыбыҙҙың милли геройы Салауат Юлаев тураһындағы йырҙар һәм легендалар алып тора. Ләкин был йырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен тик бер образ менән генә сикләү дөрөҫ үк булмаҫ ине, сөнки Салауат йырҙары миҫалында беҙ халыҡтың тарихи ваҡиғаларға булған мөнәсәбәтен, уларға төшөнөп баһа биреүен, шул уҡ ваҡытта иҙеүселәргә ҡаршы көрәш мотивтарының көсәйеүен күрәбеҙ. Салауат тураһындағы йыр, легендаларҙа, унан алда ижад ителгән тарихи йырҙар менән сағыштырып ҡарағанда, социаль тигеҙһеҙлек мотивтары шаҡтай көслө яңғырай, һәм улар туранан-тура ирек һәм азатлыҡ темаһы менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Был йырҙар синфи ҡаршылыҡтарҙы уның бөтә ҡырҡыулығында сағылдыра. Халыҡ кисергән барлыҡ ҡайғы-хәсрәттең сәбәбен йыр социаль тигеҙһеҙлек менән аңлата. Йырҙарҙа бер-береһенә ҡапма-ҡаршы булған синыфтар асыҡ һүрәтләнә.

**Французларға ҡаршы 1812–1814 йылдарҙағы Ватан һуғышы, ундағы башҡорт егеттәренең батырлығына**

**арнап халыҡ йырҙары** сығарылған. «Байыҡ», «Любизар», «Ҡаһым түрә» ана шундай тарихи йырҙар төркөмөнә ҡарай.

Халыҡ үҙен йәберләүсе **яуыз түрәләргә, кантондарға ҡаршы йырҙар** ижад иткән. Халыҡ ижадында Ҡолой, Төхфәт һымаҡ яуыз кантондарға ҡаршы ҡәһәрле ҡарғыш һүҙҙәре менән һуғарылған йырҙар киң урын алған.

**Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар** – патриархаль ырыу йолалары хөкөм һөргән замандарҙа тыуған мөхәббәт лирикаһының ғибрәтле бер үрнәге. Сығарылыу ерлеге йәһәтенән был йырҙарҙы ике ҙур төркөмгә бүлергә мөмкин. Уларҙың ҙур бер төркөмөн боронғо йолалар буйынса һөйгәненән айырып, көслөк менән малға һатып ебәрелгән ҡыҙҙарҙың әсе яҙмышы хаҡындағы йырҙар тәшкил итә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың бер ниндәй хоҡуғы булмаған. Күп ҡатын алыу, ҡалым түләү тәртиптәре хөкөм һөргән замандағы ырыу йолалары егет менән ҡыҙҙың ниәтенә кәртә була, уларҙың хыялдарын селпәрәмә килтерә. «Таштуғай», «Зөлхизә», «Мәҙинәкәй» кеүек йырҙарҙа малға һатылған ҡатын-ҡыҙҙарҙың фажиғәле яҙмышы үҙенең бөтә тулылығында сағылып ҡалған:

Төн уртаһы еткәс, бер ҡыҙ илай, Зөлхизә,
Йәш ғүмерем заяға үтә тип, Зөлхизә,

йәки:

Зәлифәкәй меҫкен ни хәл итһен,
Үҙ ағаһы һатҡас аҡсаға.

Малға һатылыу – башҡорт халыҡ йырҙарында бик киң таралған мотив, мал образы ҡыҙҙарҙың аяныс яҙмышын тулыраҡ аңларға ярҙам итеүсе ҡөҙрәтле бер көс булып һынлана:

Ғәзиз генә башым китеп барҙы,
Заклад һалып йыйған мал кеүек.

## Сеңләүҙәр

*Яусыға:*

Һәлпән-һәлпән йәлпәнләп,
Ҡулыңа таяҡ таянып,
Бер балағың һалпайтып,
Өс өй аша йортоңдан,
Арыҡ атыңа атланып,
Башың үргә ҡаҡайтып,
Ҡайҙа юлың тоҫҡаның?
Суҡмарҙай ҙур танауың
Шыр-шыр тартып, еҫкәнеп,
Емтек эҙләр ас эттәй,
Атҡа менеп эҙләнеп,
Ниңә килеп туҡтаның?..

*Атаһына:*

Атаҡайым, бура бурайһың,
Ике салғыйҙарың һыҙғанып,
Атаҡайым, мине йәштән бирҙең,
Бер ҡабымҡай ашың ҡыҙғанып.

Егәрләнеп йөрөп атың ектең,
Талманымы, атай, беләккәйең?
Теләмәгән ергә көсләп биргәс,
Янмаймы һуң, атай, йөрәккәйең?

Ай, һаҙ үтә, һаҙ үтә,
Аяғыма һыу үтә.
Бирмәҫ тә ергә бирәһең,
Үҙәккәйемде шул өтә.

*Ағаһына:*

Урындыҡҡайыңа, ай, ултырып,
Ойоном да йылы һөт кеүек.
Белмәйһең дә, ағай, хәлдәремде,
Йөрәккәйем өҙөлә еп кеүек.

Ағаҡайым, йәшел күлдәгеңдең
Итәккәйе матур бөгөлгән.
Атаҡайым бирмәҫ ерҙәренә
Ағаҡайым тырышып димләгән.

*Әсәһенә:*

Түбәләге дүрт сауыл
Түбән генә ҡарап үҫһәсе.
Түрҙә генә ултырған әсәкәйем:
– Быйылға йәш әле, – тиһәсе.

Кәңәш түрҙәрендә әсәкәйем
Уйламай ҙа шунда ултыра.
Үгәй ҙә генә түгел, үҙ әсәйем
Һыҡтамай ҙа димләп ултыра.

Суйын самауыр ҡуйҙырҙың,
Ҡайнамаһын, тиһеңдер.
Көндәшкә тотоп бирәһең,
Көн күрмәһен, тиһеңдер.

Ебәк кенә шаршау, таҫма бау
Һис ҡормамын, әсәкәй, түреңдә.
Киң күкрәккәйеңде, ай, тарһынма,
Күп тормамын, әсәкәй, ҡулыңда.

*Ҡоҙа-ҡоҙағыйға:*

Ҡоҙаларҙың аттары
Екән менән тышаулы,
Яусы булған ҡоҙаһы
Шүрәлегә оҡшаулы.

Ҡоҙаларҙың аттарын
Һыуға табан әйҙәгеҙ,
Яусы булған ҡоҙаның
Һаҡалынан бәйләгеҙ.

Мин баҫа ла торған баҫҡысты,
Ваҡ-ваҡ ҡына киртләс, тинеләр,
Мин бара ла торған ҡәйнәне,
Бик ваҡ һүҙле бисә, тинеләр.

*Кейәүгә:*

Сейәһе сейә икән дә,
Япраҡтары киң түгел.
Кейәүе кейәү икән дә,
Минең өсөн тиң түгел.

Һауыла ла торған һыйырымдың
Дүрт аяғы ла тышаулы.
Шунда ла торған кейәүегеҙ
Шүрәлегә оҡшаулы.

Ҡара ла болот сыҡты инде,
Яумай ҙа китер, тимәгеҙ.
Шул йәшәмәгер килде инде,
Алмай ҙа китер, тимәгеҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Бирелгән тексты уҡығыҙ.
**2.** Сеңләү жанры ниндәй ваҡиғаға бәйле ижад ителгән?
**3.** Ҡыҙҙың ата-әсәһенә, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға, яусыға ҡарата әйткән һүҙҙәре нимә тураһында һөйләй?

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

«Ғилмияза», «Зөлхизә» йырҙарын сеңләүҙәр менән сағыштырығыҙ, уларҙың оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын күрһәтегеҙ.

## *Сеңләүҙәр тураһында*

**Сеңләү** – ғаилә-көнкүреш йола поэзияһының бер төрө. Сеңләү – ул кейәүгә бирелгән ҡыҙҙың оҙатылыр алдынан ата-әсәһе, туған-тыумасалары, дуҫ-әхирәттәре, ауылы, тыуып үҫкән ер-һыуы менән хушлашыу йыры. Уның бөтә йөкмәткеһе патриархаль-ырыу йолалары заманындағы ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр яҙмышын, аһ-зарын һүрәтләүгә арнала.

Ҡыҙ ҡушыу йолаһы хаҡында ғалимдар түбәндәгеләрҙе яҙа: «Кейәү керә торған өйгә сымылдыҡ ҡороп, ҡыҙҙы ултыртып ҡуялар. Кейәү кергәс, сисенмәй ҙә, аяғын да һалмай ҡыҙҙың янына барып ултыра. Ҡыҙҙың бер еңгәһе килеп кейәүгә ҡыҙҙың ҡулын тоттора, «бына был һинең

биргән малың», ти. Бына был һүҙҙәрҙән ҡыҙ баланың ғаиләләге урыны бик асыҡ күренә. Шуға күрә лә сеңләүҙәрҙә ҡыҙ бала яҙмышының ир балаға ҡаршы ҡуйылыуы бик тәбиғи яңғырай:

Был донъяҡайҙарҙың эсенә
Ир балаҡай һыя, ҡыҙ һыймай.

Ошондай уҡ мотивтарҙы ҡыҙҙың ағаһы менән еңгәһенә сеңләүендә лә күрергә мөмкин. Әммә бында ҡыҙ үҙенең үпкәһен күберәк еңгәһенә белдерә:

Ағаҡайым минең бирмәҫ ине,
Еңгәкәйем килеп шыбырлай.

Ә инде ҡыҙҙың кейәүенә, яусыларға арналған сеңләүендә уларҙан көлөү, мәрәкәләү мотивтары өҫтөнлөк итә. Быны инде сит ырыу кешеһенә дошманлыҡ, ят бауырлыҡ мотивтарының бер сағылышы булараҡ ҡабул итергә кәрәк.

Сеңләүҙе ҡайһы бер урындарҙа һыҡтау тип тә йөрөтәләр. Сөнки ул илаған төҫлө, йәки һыҡтап башҡарыла. Сеңләү жанры бигерәк тә Урал аръяғы райондарында, бигерәк тә Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Ҡурған, Силәбе яҡтарында киң таралған булған. Был төбәктәрҙә бөгөн дә ҡайһы бер туйҙарҙа сеңләүҙе ишетергә мөмкин.

Сеңләү һамаҡтарында традиция көслө. Туй йолаларының мөһим бер элементы булараҡ, ул һәр осраҡта ла һаҡланырға тейеш булған. Дөйөм алғанда, ҡыҙҙар тик оло кешеләргә генә кейәүгә бирелгән, тип уйлау ысынбарлыҡҡа тап килмәҫ ине. Тормошта иһә бер-береһен күреп танып белгән, алдан вәғәҙәләшеп йөрөгән ҡыҙ һәм егеттәрҙең дә туйы булған, әлбиттә. Әммә был осраҡта ла ҡыҙ сеңләргә тейеш. Ҡурған өлкәһендә әле лә сеңләү традицияларының күпмелер урын алыуы шул хаҡта һөйләй. Был яҡтарҙа, мәҫәлән, оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙан «ҡыҙ теләмәһә лә, сеңләтәбеҙ, илатабыҙ инде ул» тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә ине. Аңлашылып тора, был осраҡта сеңләү йолаһы традиция буйынса ғына, туй йолаларын урынына еткереп үтәү өсөн генә башҡарыла.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Ҡыҙҙың кейәүенә, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға, яусыға әйткән һүҙҙәрендә ниндәй мотивтар өҫтөнлөк итә?
**2.** Кыҙҙарҙы, ғәҙәттә, нисә йәшендә кейәүгә биргәндәр?

**Хәтергә төшөрәбеҙ**

Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһында йырҙарҙы иҫкә төшөрөгөҙ. Уларҙың сеңләү менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын текстан уҡып иҫбатлағыҙ.

**Ижади эш**

«Йырҙарҙа һәм сеңләүҙәрҙә, риүәйәттәрҙә, легендаларҙа ҡатын-кыҙҙарҙың аянысл яҙмышы» тигән темаға инша яҙығыҙ.

## ЕРӘНСӘ СӘСӘН МЕНӘН ХАН

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Элгәре Ерәнсә сәсән тигән кеше йәшәгән. Ул бик яуапҡар[1], шул хәтле сумарт[2] булған. Ингән бер кешене – балаһы булһын, олоһо булһын – айырмаған: һәр ваҡыт һыйлап, хөрмәт итеп сығарып торған. Шунан бының даны киткән.

Бер ваҡыт шул дан барып ишетелгән ханға. Уны ишеткәс тә, хан:

– Эх, был Ерәнсә сәсәнде нисек күрергә икән? Шулай, шулай, тип бик маҡтайҙар ҙа баһаң, – тигән.

Шунан хан Ерәнсә сәсәнде күрергә ниәтләнеп, атҡа ултырып сығып китә. Килә, килә. Килә торғас, был уйлай инде: «Һуң, мин унда барып инһәм, ул минән һорашыр: «Һин кем булаһың?» – тип әйтеп. Мин ни нәмә тип әйтермен икән? Туҡта. «Мин һинең олатаңдың олатаһының олатаһының дуҫымын», – тип әйтәйем». Шул яуапты әҙерләп, тынысланып бара инде был. «Шулай тип әйтһәм, ҡәҙер итер мине лә», – тип уйлай хан.

Бер ваҡытты барып етә. Ерәнсәнең ҡапҡаһына барып инә. Ҡапҡаһына инеүгә, Ерәнсә йүгереп килеп сыға ла:

---

[1] *Яуапҡар* – яуаплы.
[2] *Сумарт* – йомарт.

– Әйҙүк, әйҙүк, хуш килдең, хуш килдең, – тип индереп алып китә, түргә мендереп ебәрә ханды.

Һөйләшеп ултыралар. Һөйләшеп ултыра торғас, Ерәнсә:

– Һин кем булаһың һуң әле? – тип һорай икән.

– Мин, – ти хан, – һинең олатаңдың олатаһының олатаһының дуҫы инем, – ти.

Шул ерҙә Ерәнсә белә тегене: «Һуң, был йәш тә баһа. Минең олатамдың олатаһының олатаһын ҡайҙан белһен ул? Был кәнде алдап ултыра». Ерәнсә, йәне көйөп, аш өйөнә сығып китә лә әбейенә әйтә:

– Һин беҙҙең алға бүтән ризыҡ алып барма, ҡара һыуҙы табаҡҡа ҡой ҙа шуны килтереп ултырт, – ти.

– Ярар, ярар, – ти әбейе.

Бер ваҡытты ҡара һыуҙы тултырғансы табаҡҡа ҡоя ла әбей алып барып ирҙәрҙең алдарына ултырта. Ерәнсә:

– Йә, ҡунаҡ, хуш иттек, – ти ҙә эсә, ти, ҡара һыуҙы ҡалаҡ менән һөрпөлдәтеп алып, – яҡындан ҡатнаш, – ти ҙә эсә, ти.

Ахырыһы булдыра алмай, хан да алып эсә башланы, ти, тегене. Эсә торғас, сыҙаманы, ти, хан:

– Һуң, был ни нәмә? – тип һораны, ти.

– Былмы? Был – ҡуяндың һурпаһының һурпаһының һурпаһының һурпаһы, – тип әйтте, ти, Ерәнсә.

Шулай итеп, тегенең хәйләһенә яуап ҡайтара инде. Шунан был хан, ярар, ҡоро ҡара һыуҙы эсеп ҡайтты, ти. Ҡайтырға сыға ла, эй уйлана, эй уйлана. Уйлана торғас: «Туҡта, – ти, – быға мин бер эш бирәйем, – ти. – Әгәр ҙә шуны үтәмәһә, башын ҡырҡайым», – ти. Йәне ныҡ көйгән, ти, бының. (Хан булғас ни, башын ҡырҡтырһа ла ихтыяр инде уға.)

Шулай тип уйлай ҙа хан Ерәнсәне саҡырта. Саҡыртҡас ни, Ерәнсә килә. Хан әйтә быға:

– Үәт, – ти, – һиңә бирәмен ҡырҡ баш тәкә, – ти. – Фәлән көндө барырмын. Шул ваҡытҡа һикһән баш булып торһондар, – ти. – Әгәр ҙә мин барғансы һикһән баш булмаһа, башыңды ҡырҡам, – ти.

Ерәнсә уйланып ултыра-ултыра ла, ахыры, булдыра алмай, ҡырҡ баш тәкәне ҡыуып алып ҡайтып китә. Алып ҡайта. Алып барып кәртәһенә индерә. Әбейе бының өйҙә булмай. Өйгә инә лә бошоноп ҡарап ултыра икән. Анса булмай, әбейе килеп инә лә:

– Ни нәмә эшләп уйланып киткәнһең әле? Ниндәй уйға төшкәнһең? – тип Ерәнсәнән һорай икән.

Ерәнсә:

– Үәт, – ти, – хан саҡыртып алып, – ти, – миңә ҡырҡ тәкә биреп ҡайтарҙы. Мин барыуға һикһән баш булһын, тип әйтте, – ти инде. – Үәт, шул хаҡта уйланып ултырамын әле. Әгәр ҙә һикһән баш булмаһа, башыңды ҡырҡтырам, тип әйтте, – ти.

Шунан бер ваҡытты әбейе әйтә инде:

– Һәй, юҡҡа аптырама һин. Ниңә аптырайһың шуға?

Әбейе сығарып бирә тегегә бысаҡ, ҡайраҡ.

– Мә, ҡайра, үткерлә.

Ерәнсә бысаҡты үткерләй. Бер ваҡыт алып сыға ла әбейе Ерәнсәгә әйтә:

– Ҡара, бер яҡшыһын, мыҡтыһын тотоп һуй тәкәнең, – ти.

Ерәнсә бер һәйбәт тәкәне, иң мыҡты тәкәне, тотоп һуя. Тиреһен һыҙырып, итен ботарлап ҡаҙанға һала ла бөтә күршеләрен, ауылын саҡырып ала был. Ҡунаҡтарын һыйлай-һыйлайҙар ҙа Ерәнсә менән ҡатыны килгән берәүһенә өсәр ҙә дүртәр, бишәр ҙә алтышар тәкә биреп ҡайтаралар. Кәртәлә бер тәкә лә ҡалманы, ти.

Ярар. Бер ваҡытты был хандың килер көнө килеп етә. Былар көтә инде. Ҡатыны әйтә:

– Һин, – ти, – өйҙә тик ултыр. Мин үҙем ҡаршы сығырмын. Һин яман тауыш менән әйҙә аҡыр ҙа аҡыр, – ти.

– Ярар, – тип әйтеп, Ерәнсә өйҙә ҡала.

Бер ваҡытты теге хан сәғәте менән, минуты менән туҡтамай килеп етһә, ҡапҡаны асып ебәрә ҡатын. Асып ебәргәс, хан аты менән кәртә эргәһенән ҡайырылып килеп тороуы була, өйҙә бер ир аҡыра башлай. Хан һорай:

– Кем ул өйҙә ҡысҡырған?

– Ерәнсә, – ти әбей.

– Ни нәмә эшләп ҡысҡыра?

– Ул, – ти, – ханым, балалай алмай ҡысҡыра.

– Һуң, ир кеше балалаймы?

– Тәкә һуң бәрәнләйме? – тип яуаплаша ҡатын.

– Ә-ә-ә, былай икән әле быларҙың эше, – тине лә, ти, хан айҙанды ла һыпыртты, ти.

Бының һаман да ҡуйығыһы килмәй. Нисек тә булһа Ерәнсәнең башын ҡырҡырға кәрәк бит инде. Йәне көйөүе шул хәтлем инде хандың. Бер ваҡытты был хан Ерәнсә сәсәнде йәнә саҡыртып ала. Саҡыртып ала ла, һорай:

– Йә, Ерәнсә, ошо июнь айында ҡайһы ерҙә себен юҡ? – ти. (Себендән ялҡҡандыр инде.)

– Ҡайһы ерҙә әҙәм юҡ, шунда себен юҡ, – ти Ерәнсә.

– Ҡайһы ерҙә юҡ һуң ул? – ти.

– Анауы тауҙың башында, – ти.

Хан шундай ергә, себендән ҡасып, йорт һалырға итә инде.

– Әйҙә барайыҡ, әләй булһа, – ти.

Бер ваҡыт, эйәртеп алып ханды, сығып китә Ерәнсә. Алып китә, алып китә. Хан китте, ти, бышлығып, әлеге һимеҙ нәҫтә. Бер тауға мендерҙе, ти, Ерәнсә, әле етмәйбеҙ, ана етәбеҙ, бына етәбеҙ, тип, тауҙан төшөрҙө лә тағы тауға алып менеп китте, ти. Шулай бара торғас, хандың хәле бөттө, ти.

– Ана, етеп барабыҙ. Еттек, еттек тигәндәй инде, – тип Ерәнсә һаман алып килә, ти.

Бер тауҙың башына менгәс:

– Бына ошо ерҙә себен юҡ, – тип әйткәс, ултырҙылар, ти, хәл алырға.

Тышылдап киткән, тирләп киткән, ти, хан. Тыңлап ултыра, ти, себен тауышы ишетеләме, юҡмы, тип. Анса булмай, тыж-ж-ж итеп бер себен түшенә килеп ҡунды, ти, хандың.

– Үәт, себен юҡ, тип әйткәйнең, бына ла баһа себен! – тип әйтте, ти, был.

– Һуң, мин әйттем бит: ҡайҙа әҙәм юҡ, шунда себен юҡ. Һинең менән беҙ әҙәм булмай – этме?

Шулай итеп, Ерәнсә ханға һыр бирмәгән, уны ыҙалатып-ыҙалатып ҡайтып киткән, ти. Хан ҡабат Ерәнсәгә тарымаҫ булды, ти.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хан Ерәнсәнең өйөнә килгән саҡта үҙен кем тип таныштырырға була?
**2.** Ерәнсә хандың әйткәне дөрөҫлөккә тап килмәүенә нисек төшөнә?
**3.** Хандың мәкерлегенә яуап итеп Ерәнсә ниндәй аҙым яһай?
**4.** Хан сәсәнден башын ҡырҡырға тип тағы ниндәй мәкерлек уйлай?
**5.** Ҡырҡ тәкә урынына һикһән тәкә булһын, тип шарт ҡуйыуға Ерәнсә сәсән әбейенең яуабы нисек була?
**6.** Әкиәтте тағы бер ҡат уҡып сығығыҙ һәм йөкмәткеһен һөйләгеҙ.

### Хәтергә төшөрәбеҙ

**1.** Башҡорт халыҡ әкиәттәре ниндәй төркөмдәргә бүлеп йөрөтөлә? Һәр төркөмгә миҫал килтерегеҙ.
**2.** «Ерәнсә сәсән менән хан» әкиәтен һеҙ ниндәй төркөмгә индерер инегеҙ, үҙ фекерегеҙҙе иҫбатлағыҙ.

## БОРОНҒО ӘҘӘБИӘТЕБЕҘ ҮРНӘКТӘРЕ

### «КҮРӘҘӘЛЕК КИТАБЫ»

Айыу менән ҡабан тау артылышында осрашҡан. Айыуҙың эсе йыртылған. Ҡабандың да аҙау тештәре һынған. Был – бәхетһеҙлеккә, тип һанарға мөмкин.

* * *

Ҙур йорттар янды. Үкенескә, көлдән башҡа бер ни ҙә ҡалманы. Бындай күрәҙәлекте бәхетһеҙлек тип һанарға кәрәк.

* * *

Ҡоҙғондо ағасҡа бәйләгәндәр. Ныҕыраҡ итеп яңынан бәйлә. Еренә еткереп бәйлә. Бындай күрәҙәлек бәхетле, тип өмөтләнергә кәрәк.

* * *

Өҫтә томан эленеп тора, аҫта – саң. Осар ҡоштар юлдан яҙлыҡты. Балалы ҡатын бара-бара аҙашты. Күк йөҙө арҡаһында бөтәһе лә имен-аман осрашты, бөтәһе лә шатлана. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Таҡыр көтөүлектә ҡалдырылған аттар бөтөнләй юҡҡа сыҡҡан. Күк йөҙө ҡөҙрәте буйынса, улар тауҙар араһында тау һыуын, ҡара тупраҡта үлән һәм үҫентеләр күреп, шул яҡҡа ынтыла, һыу эсеп, үлән юшап, үлемдән ҡотола. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Йәш егет бөркөт ҡойроғон табып ала. Кәләшенең башын биҙәп, әйҙә, бәхетле булһын. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Йылҡы көтөүендәге һуҡыр ҡолон бейәнең имсәген эҙләй. Көндөҙ артмаҡланған, төнөн ҡанға батҡан. Ҡайҙа бараһың? Бындай күрәҙәлек насарлыҡ тип һанала.

* * *

Ике үгеҙ бер егемдә. Ҡуҙғала алмай тик торасаҡтар. Бындай күрәҙәлек бәхетһеҙлеккә тип һанала.

* * *

Таң атты. Ер яҡтырҙы. Шунан ҡояш ҡалҡты, бөтә ергә уның яҡтылығы һибелде. Бындай күрәҙәлек бәхеткә тип һанала.

* * *

Байҙың һарыҡтары өркөп, ҡасып китте. Бүрегә тарынылар. Әммә бүренең ауыҙында тештәре юҡ ине, шуға имен ҡалдылар. Бындай күрәҙәлек бәхеткә тип һанала.

* * *

Ҡырағай юлбарыҫ һунарға сыға. Үҙенә аҙыҡ таба. Табып, ояһына ҡәнәғәт ҡайта. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Арҡаһы сейләнгән ҡарт үгеҙҙе ләпәкәйҙәр талап бөтөргән. Ҡуҙғалырға хәленән килмәй, тик торасаҡ. Бындай күрәҙәлек – бәхетһеҙлеккә.

* * *

Кешеләр ҡайғырҙы, күк йөҙө йонсоуланды. Шул арала ҡояш ҡалҡты. Эс бошоуҙы еңеп, күңел күтәренкелеге килде. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Бер ир бала, ата-әсәһенә асыуланып, өйөнән ҡасып сығып китә. Аҙаҡ, һағынып, кире ҡайта. «Әсәйемдең әйткәндәрен тыңлайым, атайымдың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалам», – ти ул, ҡайтҡас. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Хандың яугирҙары һунарға сыға. Ҡамауға ҡоралай эләгә. Хан ҡоралайҙы тота, яугирҙар күмәкләп шатлана. Бындай күрәҙәлек – бәхеткә.

* * *

Туйған аттың ауыҙы ҡата. Хужаһы уны ауыҙлыҡлай алмай. Бындай күрәҙәлек – бәхетһеҙлеккә.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Был ҡыҫҡа сюжеттарҙа ниндәй образдар таба алаһығыҙ? Уларҙы төркөмләп ҡарағыҙ.
**2.** Текстан сығып, боронғо әҙиптәр ниндәй һүрәтләү сараларын йышыраҡ ҡулланғанын билдәләгеҙ.

**Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ**

Интернеттан «Күрәҙәлек китабы» ҡомартҡыһының яҙмышы, беҙҙең көндәргә килеп етеү юлдары тураһында мәғлүмәт табығыҙ.

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## «ҠОРҠОТ АТА КИТАБЫ»нан

### Ғазраил һәм Домрул

Ханым! Уғыҙҙар араһында Дука-хужа улы Домрул исемле ир йәшәгән. Ул ҡороған шишмә аша күпер төҙөгән, унан аша үткәндәрҙән утыҙ өс тәңкә алған; ә үтмәгәндәрҙе туҡмап, ҡырҡар тәңкә алған. Ни эшләп улай эшләгән? Ул әйткән: «Минән батырыраҡ, минән көслөрәк, минең менән көрәшкә сығырлыҡ кеше бармы? Минең батырлығым, минең егетлегем тураһындағы дан Рум һәм Шамға еткән».

Бер заман ошо күпер янына күсеп йөрөүсе ғаилә килеп туҡтаған; ғаиләләге изгелекле, матур егет ауырып киткән һәм Алла ҡөҙрәте менән донъя ҡуйған. Әсе, ҡара ҡайғы кисергәндәр; кем улын, кем туғанын йәлләп илаған. Ҡапыл батыр Домрул сабып килеп сығып, уларға өндәшкән: «Булдыҡһыҙҙар, ниңә илайһығыҙ? Минең күпер янында ниндәй ығы-зығы? Нимәгә ҡайғыраһығыҙ?» Улар әйткән: «Ханым, беҙҙең изгелекле егетебеҙ үлде, шуға илайбыҙ». Батыр Домрул һораған: «Әйтегеҙ, егетегеҙҙе кем үлтерҙе?» Улар әйткән: «Эй, бәк егет, Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте, ул егеттең йәнен ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраил алды». Батыр Домрул әйткән: «Бәндәләрҙең йәнен алған ниндәй кеше ул һеҙҙең Ғазраил? Ҡөҙрәтле Аллам, һинең берлегең, һинең именлегең хаҡына шул Ғазраилды миңә күрһәт әле, изгелекле егеттең йәнен ҡотҡарыу өсөн, артабан ул изгелекле егеттәрҙең йәнен ҡыймаһын өсөн, уның менән алышайым әле». Шулай тип әйтеп, батыр Домрул үҙенең өйөнә ҡайтып киткән.

Аллаға Домрулдың һүҙе оҡшамаған. «Ҡара, ҡара, – тигән ул, – аҡылһыҙ ҡәбәхәт мине, берҙән-бер Алланы, танымай, миңә миһырбанлыҡ күрһәтмәй; әйҙә, ул минең кисереүемде һорап ялбарһын». Ул Ғазраилға бойорған: «Бар, Ғазраил, шул аҡылһыҙ ҡәбәхәткә күрен; уның йөҙөн ағарынырға, йәнен хырылдарға мәжбүр ит тә йәнен ал».

Батыр Домрул ҡырҡ егет менән ашап-эсеп ултырғанда, ҡапыл Ғазраил килеп сыға. Ғазраилды ҡапҡа ҡарауылсыһы ла, һаҡсы ла күрмәй ҡала; батыр Домрул-

дың яҡты йөҙө ҡапыл ҡараңғылана, көслө ҡулдары һәленеп төшә, уның күҙ алдында донъя ҡараңғылыҡ менән ҡаплана. Батыр Домрул көслө тауыш менән өндәшкән – күрәйек әле, ханым, нимә тигән ул: «Бәлә, һин ниндәй ҡурҡыныс ҡарт! Ҡапҡа ҡарауылсылары һине күрмәгән, һаҡсылар шәйләмәгән; минең яҡты йөҙөм ҡараңғыланды, көслө ҡулдарым һәленеп төштө, ҡалтыранды, йәнем тынысһыҙланды, алтын бокалым ҡулымдан ергә төшөп китте. Ауыҙым боҙ кеүек, һөйәктәрем саң кеүек булды. О, аҡ һаҡаллы ҡарт! О, ҡара күҙле ҡарт! Һин ниндәй ҡурҡыныс ҡарт! Әйт әле: минең бәхетһеҙлегем бөгөн һиңә тейһен».

Уның был һүҙҙәренән һуң Ғазраилдың асыуы ҡупҡан; ул әйткән: «Аҡылһыҙ ҡәбәхәт! Нишләп һиңә минең күҙҙәремдең ҡаралығы оҡшамай? Күк күҙле ҡыҙ-кәләштәрҙең йәнен мин йыш алдым. Нишләп һиңә минең һаҡалымдың ағарыуы оҡшамай? Аҡ һәм ҡара һаҡаллы ир-егеттәрҙең дә йәнен йыш алдым. Аҡылһыҙ ҡәбәхәт! Һин маҡтанып һөйләндең: «Әгәр минең ҡулыма ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраил килеп эләкһә, уны үлтерер инем, уның ҡулынан изгелекле егеттең йәнен алыр инем»; ә хәҙер, аҡылһыҙ, мин һинең йәнеңде алырға килдем; бирәһеңме, әллә минең менән алышаһыңмы?»

Батыр Домрул әйткән: «Һинме ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраил?»

«Эйе, мин».

«Теге изгелекле егеттәрҙең йәнен һин алаһыңмы?»

«Эйе, мин алам».

Батыр егет әйткән: «Ҡапҡа ҡарауылсылары, ҡапҡаларҙы ябығыҙ! Ғазраил, мин һинең менән иркен урында осрашырға теләгәйнем; бәхеткә шулай минең ҡулыма тар урында эләктеңме? Мин һине үлтерәм, изгелекле егеттең йәнен ҡотҡарам». Шулай тип, ул үҙенең ҡара ҡылысын сығарып, ҡулына алған, Ғазраилға киҙәнгән; Ғазраил күгәрсенгә әйләнеп, тәҙрәнән осоп сығып юғалған.

Ир-аттарҙы хайран ҡалдырыр батыр Домрул ҡул сабып ҡысҡырып көлгән дә, әйткән: «Егеттәрем, мин Ғазраилды шул тиклем ҡурҡыттым, ул ҙур ҡапҡаны ҡал-

дырып, минең ҡулдан тар тәҙрә аша ҡасып ҡотолдо, күгәрсенгә оҡшаш ҡошҡа әүерелеп, осоп китте; әммә мин уны ыласындан тоттормайынса тынысланмаясаҡмын».

Шулай тип әйткәс, бер-ике күгәрсенде үлтереп, кире әйләнеп ҡайтҡан. Өйөнә килеп етәрәк, атының күҙенә Ғазраил күренгән; аты өркөп, Домрулды ергә атып бәргән; уның ҡара башы бөгөлөп төшөп, кәкрәйеп ҡалған; уның аҡ күкрәген ҡыҫып, Ғазраил менеп ултырған. Ул хәлһеҙ мығырҙаған, шунан хырылдай башлаған. Ул әйткән: «Йәллә, Ғазраил, Алланың берҙән-берлегенә шик юҡ! Мин һине ундай тип белмәй инем, йәндәрҙе алғанлығыңды татыманым. Беҙҙә бейек түбәле тауҙар бар; ул тауҙарҙа – беҙҙең йөҙөм ағастары; ул ағастарҙа – ҡара йөҙөм шәлкемдәре, уларҙы һыҡһаң, ҡыҙыл шарап сыға; кем шул шарапты эсһә, иҫерә. Мин шул шараптан иҫергәнмен, ни һөйләгәнемде белмәгәнмен, һинең егетлегеңде аңламағанмын, татып ҡарамағанмын. Минең йәнемде алма, Ғазраил, йәллә!»

Ғазраил әйткән: «Аҡылһыҙ ҡәбәхәт! Нишләп миңә ялбараһың? Аллаға ялбар, миндә ниндәй хакимлыҡ? Мин дә – хеҙмәтсе».

Батыр Домрул әйткән: «Тимәк, йәндәрҙе биреүсе лә, алыусы ла – Алла?»

«Эйе, ул».

Домрул Ғазраилға ҡараған: «Улайһа, һин ниндәй әфәнде? – тигән ул. – Кит бынан. Мин Алла менән һөйләшәсәкмен».

Шулай тип, батыр Домрул һөйләп алып киткән, тыңлайыҡ әле, ханым, нимә тип әйткән: «Һин бөтә юғарылыҡтарҙан юғарыраҡ; һинең ниндәй икәнлегеңде бер кем дә белмәй, Аллам, нишләп ахмаҡтар һине күктән эҙләй, ерҙән табырға теләй, һин – табыныусылар йөрәгендә. Аллам, мәңге хаҡ хаким! Аллам, мәңгелек серҙәр һаҡлаусы! Минең йәнемде алғың килһә, үҙең ал, Ғазраилға алырға бирмә».

Батыр Домрулдың был һүҙҙәре Аллаға оҡшап ҡалған. Ул Ғазраилға ҡысҡырған: «Был аҡылһыҙ ҡәбәхәт минең берҙән-берлегемде танып, рәхмәт белдерә белгәс, әйҙә,

Ғазраил, батыр Домрул үҙ йәне урынына берәй йән тапһын, уның йәне иректә ҡалһын».

Ғазраил әйткән: «Тыңла, батыр Домрул, Алланың ихтыяры шулай: батыр Домрул үҙ йәне урынына берәй йән тапһын, уның йәне иректә ҡалһын».

Батыр Домрул әйткән: «Нисек йән табайым? Бәлки, шулай: оло йәштәге атайым менән әсәйем бар; әйҙә, уларҙың икеһенең береһе, бәлки, үҙ йәнен бирер, шуны ал, ә минең йәнемде ҡалдыр».

Батыр Домрул атаһы янына килеп, уның ҡулын үбеп өндәшкән – ҡарайыҡ, ханым, ул нимә тигән: «Аҡ һаҡаллы, ҡәҙерле, хөрмәтле йәнем минең, атайым! Беләһеңме, ни булды? Мин Аллаға ышанмаусанлыҡ һүҙе белдергәйнем, Аллаға ул оҡшаманы; ул күктән ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраилға ҡушты; уныһы осоп килеп, минең аҡ күкрәгемә ултырып ҡыҫты, мине хырылдарға мәжбүр итте, ләззәтле йәнемде алырға теләне. Атай, мин һинән йәнеңде һорайым; бирәһеңме, әллә: «Улым, батыр Домрулым», – тип илайһыңмы?»

Атаһы әйткән: «Улым, улым! Йән киҫәгем, улым! Улым, арыҫланым, һин тыуғанда, мин туғыҙ ата дөйә салдым! Улым, минең алтын түбәле йортомдоң терәге! Улым, аҡҡош кеүек ҡыҙ-киленемдең сәскәһе! Әгәр беҙҙең ҡаршыла ятҡан ҡара тауым кәрәк булһа, әйт; алһын Ғазраил, әйҙә уға йәйләү булһын; һалҡындан-һалҡын ҡоҙоҡтарым кәрәк булһа, әйҙә, уға эсәр һыу булһындар; өйөр-өйөр етеҙ йылҡыларым кәрәк булһа, әйҙә, уға еккегә булһын; дөйәләрем рәте кәрәк булһа, әйҙә, уға йөк ташырға булһын; аҡ һарыҡтарым көтөүе кәрәк булһа, әйҙә, ҡара аласыҡта уға ризыҡ булһын; алтын-көмөшөм, аҡсам кәрәк булһа, әйҙә тотонһон. Тормош татлы, йән ҡәҙерле; йәнемде бирә алмайым, белеп ҡуй. Әсәйең бар, ул миңә һинән ҡәҙерлерәк, һинән һөйөклөрәк; улым, әсәйең янына бар».

Батыр Домрул атаһынан ярҙам тапмай, уның янынан китеп, әсәһенә барып әйткән: «Әсәй, беләһеңме, ни булды? Күктән ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраил осоп төшөп, минең аҡ күкрәгемә ултырып ҡыҫты, мине хырылдарға

мәжбүр итте, йәнемде алырға теләне. Мин атайымдың йәнен һорағайным, ул бирмәне; һинең йәнеңде һорайым, әсәй! Бирәһеңме, әллә: «Улым, батыр Домрулым!» – тип илайһыңмы, тырнаҡтарыңды аҡ йөҙөңә батырып, ҡоҙғондоҡо кеүек ҡара сәстәреңде йолҡаһыңмы, әсәй?»

Шул саҡ әсәһе әйткән, ҡарайыҡ, ханым, нимә тигән ул: «Улым, улым! Туғыҙ ай тар ҡорһағымда йөрөткән улым! Биләүҙән, сәңгелдәктән үҫтергән улым! Ун ай айынан һуң донъяға тыуҙырған улым! Аҡ һөтөм менән йомарт имеҙгән улым! Аҡ манаралы ҡәлғәгә бикләнһәңсе, улым! Бысраҡ динле кафырҙар ҡулына әсирлеккә эләкһәңсе, улым! Көс-хәл менән алтын-көмөш йыйып, һине ҡотолдорор инем, улым! Боҙоҡ ергә бараһың, улым, (артыңдан) бара алмайым; тормош татлы, йән ҡәҙерле; йәнемде бирә алмайым, белеп ҡуй». Әсәһе лә үҙенең йәнен бирмәгән.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Ғазраил батыр Домрулдың йәнен алырға килгән; батыр Домрул әйткән: «Кисер, Ғазраил, Алланың берҙән-берлегендә шик юҡ!»

Ғазраил әйткән: «Тағы ниндәй кисереү һиңә, аҡылһыҙ ҡәбәхәт? Аҡ һаҡаллы атайыңа барҙың, йәнен бирмәне, әсәйеңә барҙың, йәнен бирмәне; хәҙер кем бирһен?»

Батыр Домрул әйткән: «Мине хәстәрләгән берәү бар, уны күрәйем».

Ғазраил һораған: «Әйт, аҡылһыҙ, кем ул һине хәстәрләгән?»

Ул әйткән: «Минең ҡатыным бар, сит кеше ҡыҙы; унан ике малайым бар; васыятым бар; шуны уларға еткерәйем дә, һин минең йәнемде алырһың».

Ул ҡатыны янына килгән дә, әйткән: «Беләһеңме, ни булды? Күктән ҡыҙыл ҡанатлы Ғазраил осоп төшөп, минең аҡ күкрәгемә ултырып ҡыҫты, татлы йәнемде алырға теләне. Мин атайыма, йәнеңде бир, тип әйттем, ул бирмәне; әсәйем янына барҙым, ул да йәнен бирмәне; тормош татлы, йән ҡәҙерле, тинеләр улар. Хәҙер минең бейектән-бейек тауҙарым һиңә йәйләү булһын, һалҡындан-һалҡын һыуҙарым һиңә эсергә ҡалһын, өйөр-өйөр етеҙ йылҡыларым һиңә еккегә ҡалһын, алтын түбәле

йортом һиңә күләгә булһын, рәт-рәт дөйәләрем һиңә йөк ташыһын, аҡ һарыҡтарым көтөүе һиңә ризыҡҡа ҡалһын. Ҡарашың кемгә туҡталһа, йөрәгең шуны яратыр, шуға кейәүгә сыҡ; ике малайҙы етем итмә».

Шул саҡ ҡатыны әйткән, ҡарайыҡ, ханым, нимә тигән ул: «Ни һөйләйһең, ни тип әйтәһең һин, күҙҙәремде асҡас та күргән, йөрәгемде биреп яратҡан кешем, батыр егетем, батша егетем минең, бер мендәргә баштарыбыҙҙы һалған кешем! Ҡаршыбыҙҙа ятҡан һинең ҡара тауҙарыңды һинән һуң мин нишләтермен? Унда йәйләүгә барһам, улар миңә ҡәбер булһын! Һалҡындан-һалҡын һыуҙарыңды эсһәм, улар миңә ҡаным булһын! Һинең алтын-көмөштәреңде тотонһам, улар миңә кәфен булһын! Өйөрҙәге етеҙ аттарыңда йөрөһәм, улар миңә ләхет булһын! Һинән һуң берәй егетте яратып, уға сығып, бергә ятһам, ул сыбар йыланға әйләнеп, мине саҡһын! Булдыҡһыҙ атайың менән әсәйеңдең һиңә ҡалдыра алмаҫлыҡ йәнендә нимә бар? Алла яҡлауы шаһит булһын! Уның тәхете шаһит булһын! Ер шаһит булһын! Күк шаһит булһын! Ҡөҙрәтлеләрҙән-ҡөҙрәтле Алла шаһит булһын! Минең йәнем һинең йәнең урынына ҡорбан булһын!» Шулай тип әйтеп, әҙерлеген белдергән.

Ғазраил ҡатындың йәнен алырға килгән; ир-аттарҙы хайран ҡалдырыр ир ҡатынын ҡалдырып китә алмаған; Аллаға ялбара башлаған, тыңлап ҡарайыҡ, нимә тип ялбарған: «Һин бөтә юғарыларҙан юғары; Һинең ниндәй икәнеңде бер кем дә белмәй, изге Аллам! Күп ахмаҡтар Һине күктән эҙләй, ерҙән табырға теләй; ә Һин – үҙеңә ышаныусыларҙың йөрәгендә. Аллам, мәңгелек хаким! Мин Һинең хаҡыңа оло юлдар сатында мосафирҙарҙы ҡабул итер йорттар төҙөрмөн; ас бәндәне күрһәм, Һинең хаҡыңа ашатып ебәрермен; яланғасты күрһәм, Һинең хаҡыңа кейендерермен. Алғың килһә, икебеҙҙең дә йәнебеҙҙе бергә ал; ҡалдырғың килһә, икебеҙҙекен дә бергә ҡалдыр, мәрхәмәтлеләрҙән-мәрхәмәтле, ҡөҙрәтлеләрҙән-ҡөҙрәтле Аллам!»

Аллаға батыр Домрулдың һүҙҙәре оҡшаған; ул Ғазраилға бойорған: «Батыр Домрулдың атаһы менән әсәһенең

йәнен ал; был ир менән ҡатынға мин йөҙ ҙә ҡырҡ йыл ғүмер бирҙем».

Ғазраил Домрулдың атаһы менән әсәһенең тыны менән йәнен алған; батыр Домрул үҙенең ҡатыны менән тағы ла йөҙ ҙә ҡырҡ йыл йәшәгән.

Ҡорҡот атам килде, йыр сығарҙы, һүҙ әйтте: «Әйҙә, ул йыр батыр Домрул хаҡында булһын, – тине ул, – минән һуң уны йырсылар отоп алып һөйләһендәр; әйҙә уны батыр ирҙәр яланбаш көйө тыңлаһындар!»

Мин алдан әйтәм, ханым, һинең тыуған ҡара тауҙарың емерелмәҫ; күләгәле ныҡлы ағасыңа балта сабылмаҫ; мәңге ағыр яҡты йылғаң ҡоромаҫ; ҡөҙрәтлеләрҙән-ҡөҙрәтле Алла һине яуыздарға юлығырға мәжбүр итмәҫ! Һинең аҡ йөҙөң хаҡына беҙ биш һүҙлек ғибәҙәт сығарҙыҡ; ул ҡабул ителһен, бер булып ҡушылып, ныҡлы торһон; Алла һинең гонаһтарыңды Мөхәммәт хаҡына кисерһен, уның исеме дан, ханым!

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Домрулға ниндәй характеристика бирер инегеҙ? Ул ниндәй кеше?
**2.** Үҙенең урынына йәнен биреүҙе һорап, ул ни өсөн тәүҙә атаһына, шунан әсәһенә өндәшә?
**3.** Ә ниңә башҡаларҙан, хатта ҡатынынан да, йәнен биреүен һорап тормай?
**4.** Хоҙай ни өсөн Домрулдың үҙен дә, ҡатынын да ярлыҡай, ә ата-әсәһен үлемгә хөкөм итә?
**5.** Әҫәрҙең телмәренә, бигерәк тә автор һүҙҙәренә иғтибар итегеҙ. Проза менән яҙылһа ла, шиғри текстҡа оҡшаш ниндәй һыҙаттар табып була?

*Әхмәт ЙҮГНӘКИ*

* * *

Белем хаҡында һөйләйем, һүҙемде тыңла,
Белемлелеккә, әй, дуҫ, үҙеңде әйҙә!
Белем аша асылыр бәхет юлы,
Белемле бул һин, бәхет юлын эҙлә!..

Һөйәккә елек кәрәк, ә иргә – белем,
Ир күрке аҡыл ул, һөйәктеке – елек.

Наҙан әҙәм елекһеҙ һөйәктәй буш,
Елекһеҙ һөйәккә һуҙылмай һис кем.

Белем туплап, ҡаҙаныр ир билдәлелек,
Белемһеҙ иһә бушҡа итер тереклек.
Белемле ир үлһә – исеме ҡала,
Белемһеҙ иҫән булһа ла исеме – үлек...

Сереңде ныҡ тот, кеше белмәһен,
Һүҙеңдән үҙеңә үкенес килмәһен!
Барлыҡ йәшерен эшең булып фаш,
Һәр күргән-ишеткән һинән көлмәһен!

Ишем тип ышанып сер әйтмә, һаҡлан,
Ни тиклем ышаныслы иш булһа ла яҡын!
Сереӊ үҙеңә ҡалып, һеңеп тормаҡас,
Ҡалмаҫ ишеңдә, бел шуны, һаҡлан!..

Йәнә бер кәрәкле һүҙем бар һиңә,
Әйтәйем мин уны, ҡолаҡ тот миңә!
Һүҙ шулдыр: тәкәбберлекте баштан һөрөп,
Кеселеклекте ныҡ тот, йәбеш уға!

Тәкәбберлек барлыҡ телдә уятыр нәфрәт,
Холоҡтарҙан изгеһен һайлау – яҡшы ғәҙәт.
Кем үҙен юғары сөйә, мин-мин, тиеп,
Уны халыҡтар һөйәме, һин миңә әйт?..

Уҡып һөйлә һүҙҙе, шашып һөйләмә,
Һүҙеңде йәшер, ләкин башың йәшермә!
Мең ир дуҫың булһа, күп күрмә һин,
Бер ир дошман булһа, уны әҙһенмә!..

Яҙҙым белемгә, әҙәпкә өндәп китабым,
Уҡыһа, татыр гел баллы емеш тәмен.
Кем иһә был һүҙемде алмаштыра,
Ҡуйһын урынына дөрөҫ һәм тиң һүҙен.

Әҙип Әхмәд исемем, әҙәпкә бәйле һүҙем,
Һүҙем бында ҡалыр, китермен үҙем.
Килер көҙ, китер яҙ, барыр был ғүмер,
Төкәтте ғүмеремде был яҙым-көҙөм.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ һәм йөкмәткеһе хаҡында уйлағыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шағир кешеләрҙе нимәгә өндәй?
**2.** Шағир ни өсөн серҙе нык һаҡларға саҡыра тип уйлайһығыҙ?

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

«Һөйәккә елек кәрәк, ә иргә – белем» тигән шиғыр юлдары хаҡында фекер алышығыҙ.

## *«Күрәҙәлек китабы», «Ҡорҡот Ата китабы», Әхмәт Йүгнәки шиғырҙары тураһында*

Төрки телле халыҡтарҙың уртаҡ яҙма һүҙ сәнғәтенә ҡараған был ҡомартҡыларҙың өсөһө лә боронғо дәүерҙә ижад ителгән. Уларҙың иң үҙенсәлеклеләренең береһе – *«Күрәҙәлек китабы»* («Ырҡ битиг»). Был әҫәр – руник тамғаларҙа ҡағыҙға теркәлеп, беҙҙең көндәргәсә килеп еткән берҙән-бер яҙма. Ижад ителеү ваҡыты – IX быуат башы.

«Ырҡ битиг» – «Күрәҙәлек китабы» тигән һүҙ (ырҡ, орак, оракул – күрәҙә, күрәҙәсе; битиг – бетеү, ҡағыҙ, китап). Күләме артыҡ ҙур түгел: һәр береһе руник тамғала 8–9 юлды тәшкил иткән 104 биттән, 65 бүлектән тора. Был китап, уҡыусыла эстетик зауыҡ уятыусы әҙәби әҫәр вазифаһынан тыш, күрәҙәлек итеү өсөн дә тәғәйенләнгән. Әҫәрҙең һәр бүлегендә күрәҙәлек объекты сифатында берәр төп образ бирелә. Уның артабанғы хәле, хәрәкәте, торошо, яҙмышы, бер яҡтан, китап асыуҙың һөҙөмтәһенә булышлыҡ итһә (бәхеткә, бәхетһеҙлеккә; яҡшыға, яманға), икенсе яҡтан, бүлектең әҙәби геройы ролен үтәй. Мәҫәлдәрҙәге кеүек, бында ла йәнлектәр, ҡоштар, әйберҙәр, күренештәр, кешеләр кеүек үк, камил аҡыллы зат сифатында бирелә: фекер йөрөтәләр, һөйләшәләр, шатлана-ҡайғыра беләләр, икеләнеүгә-тәүәккәллеккә һәләтлеләр. Хәҙерге башҡорт һүҙ сәнғәтендә был әҫәр менән тематик һәм поэтик ауаздашлыҡ эҙҙәре ярылып ята. Башҡорт сәсәндәре ҡобайырҙарында тормош-

тағы төрлө ыңғай һәм тиҫкәре күренештәрҙе «Бер тигәс тә ни яҡшы?», «...ни яман?» тип баһалаған юлдар ҙа «Күрәҙәлек китабы» традицияларына бәйле булыуы бик ихтимал. Уҡыу ҡулланмаһында «Күрәҙәлек китабы»нан айырым өлгөләр бирелде.

*«Ҡорҡот Ата китабы»нда* легендар аҡыл эйәһе, баҡсы, һүҙ оҫтаһы, күрәҙәсе Ҡорҡот сығарған әҫәрҙәр тупланған. Легендар аҡыл эйәһе Ҡорҡот VII быуатта йәшәгән, Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең замандашы булған, уның менән яҡындан аралашҡан. Ҡорҡоттоң халыҡҡа телдән сығарып һөйләгән әҫәрҙәрен китап күсереүселәр үҙе иҫән саҡта уҡ яҙмаға теркәй башлаған. Ҡорҡоттоң ижади ҡомартҡыһы хәҙерге көндә «Ҡорҡот Ата китабы» тигән исем менән билдәле. Ул ун ике сюжеттан тора. Был әҫәрҙәрҙе ғалимдар төрлөсә атай: хикәйәт, героик дастан, йыр һ. б.

Беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ Ҡорҡотто яҡшы белгән, әҫәрҙәре менән дә таныш булған. Башҡорт халыҡ ижадында уның исеме йыш осрай. Дәреслектә «Ҡорҡот Ата китабы»ндағы ун ике сюжеттың береһе (бишенсеһе) генә бирелә.

*Әхмәт Йүгнәки* – XII быуат шағиры, Фирғәнә үҙәнендә Йүгнәк ауылында тыуған, шиғырҙары Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Урал–Волга буйында бөтә төрки донъяһына таралған. Беҙҙең заманға «Хәҡиҡәт бүләге» («Һибәт әл-хаҡаиҡ») тип аталған бер генә китабы килеп еткән. Ул 14 бүлектән тора. Үҙенең шиғриәтендә Әхмәт Йүгнәки Ҡөрьәнгә һәм хәҙистәргә таянып, әхлаҡ мәсьәләләрен күтәрә: белемлелек менән наҙанлыҡ, изгелек менән яманлыҡ, йомартлыҡ менән һаранлыҡ, баҫалҡылыҡ менән тәкәбберлек төшөнсәләрен ҡаршы ҡуйып, халыҡты рухи юғарылыҡҡа саҡыра.

*Василий ЗЕФИРОВ*

## ЙӘНТҮРӘ ХИКӘЙӘҺЕ

*(1812 йылғы Ватан һуғышы иҫтәлектәренән)*

– Иртәгә ике көнгә минең яҡын дуҫым Йәнтүрәгә ҡунаҡҡа барабыҙ. Һин уны ул миндә сағында күрҙең, унын миҙалы ла бар ине бит, – тине миңә старшина.

– Ризамын, тик унда һунарға сығырбыҙмы? – тинем мин.

Старшина уйға ҡалды.

– Хәҙрәт, – тине ул бер аҙ өндәшмәйенсә торғас, – мин бөгөн шоңҡарҙарҙы осорғанмын икән, был һинең күңелеңде асыу өсөн генә булды, үҙем өсөн булһа, мин уны эшләмәҫ инем. Әле ҡаҙҙар һәм өйрәктәр ояла ултырып себеш сығаралар, хәҙер үк ҡабыҡ ярып себештәре сығырға торған йомортҡаларҙы бер файҙаһыҙға ниңә әрәм итергә?

Мин старшинаны үбеп алырға ла әҙер тора инем. Ҡоштарҙы шулай бөтә күңеле менән йәлләгән һәм ҡыҙғаныусы йөрәкле бындай башҡортто осратырмын тип мин һис тә уйламағайным. Мин был ҡартты туғаным кеүек яраттым.

Иртәнсәк үҙебеҙ менән Йәнтүрәнең өлкән улын алып юлға сыҡтыҡ. Йәнтүрәнең йәйләүе Ағиҙел буйында урман араһында ине. Беҙҙе шатланып ҡаршы алдылар: сисендерҙеләр, мендәрҙәргә ултырттылар һәм, самауыр әҙерләгәнсе, ҙур туҫтаҡ менән һәр кемгә ҡымыҙ бирҙеләр. Мин дә юлдан арып, һыуһап килгәйнем, тын алмаҫтан туҫтаҡтағы бөтә ҡымыҙҙы бер юлы һемереп эсеп ебәрҙем.

Тирмә эсендәге бер нәмәгә минең күҙем төштө: ул башҡорттарҙың боронғо һуғыш кейеме ине. Был кейем бөтөнләйгә ҡорос дүңгәләктәрҙән беркетеп яһалған; әйтергә кәрәк, өс дүңгәләк дүртенсеһе менән беркетелгән булһа ла, улар бөтәһе бергә бер бөтөн булып торалар. Ул кейем кешене башынан алып биленә тиклем ҡаплап тора. Мин уны кейеп ҡарарға теләгәйнем дә, булдыра алманым. Уны пуля яҡындан атҡанда ғына тишеп үтә алыр ине.

– Быndай кейемде һеҙ хәҙер ҡулланаһығыҙмы? – тип һораным мин.

– Юҡ, хәҙрәт, – тине Йәнтүрә, – беҙҙең хәҙерге йәштәр ҡыҫҡа буҫтау кейем, осло башлы бүрек кейеп йөрөргә яраталар; улар быndай ауыр тимер кейемде онотҡандар инде. Элекке замандарҙа башҡорттар былай түгел ине; ул



ваҡытта походҡа сығырға булһа, улар тимер кейем, уның өҫтөнә күк буҫтау сәкмән, баштарына аҡ ҡалпаҡ кейә торғайнылар; билдәренә йәйә менән уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс тағалар, ҡулдарына һөңгө тоталар, командир ҡайҙа ҡушһа, шунда китәләр ине. Мин үҙем шундай кейем менән француздарға ҡаршы һуғыштым һәм уларҙың баш ҡалаһы Парижда булдым.

– Нисек, Париж яҡшымы? – тип һораным мин.

– Яҡшы, бик шәп ҡала. Тик бына бисәм генә мине яңғыҙымды ебәрмәне.

– Бисәм тиһеңме, әллә ул да һуғышта булдымы? – тип мин уның һүҙен бүлдем.

– Эйе, булды, миҙалы ла бар, – тине Йәнтүрә. – Һин минең ҡыҙҙарҙың нисек итеп һыбай йөрөүҙәрен күргәнһеңдер бит?! Ҡулдарында һөңгөләре генә юҡ, әгәр булһа, тап казак булырҙар ине; йылғыр егетеңде лә ат өҫтөнән әйләндереп төшөрөрҙәр ине.

Сәй эскәндә һүҙ тағы француздар тураһында башланды. Йәнтүрә күп кенә ҡыҙыҡлы нәмәләр һөйләне. Миңә уның ябай, үҙенә күрә шаян һүҙҙәре бик оҡшаны.

– Беҙҙең ғәскәр, – тип һөйләй башланы ул, – Дрезденға бик ҡыҙыу барҙы: беҙ өс көн, өс төн аттарыбыҙҙан төшмәнек. Ул ваҡытта август урталары ине. Эҫе һауа кешеләрҙең тынын ҡура, мин дә, бик ныҡ арығанлыҡтан, ат өҫтөндә көскә-көскә генә бара инем. Ахырҙа, бара торғас, минең хәл тамам бөттө, атымды юлдың ситенә ҡайырҙым да үләнгә яттым. Бисәм дә үҙемдең янда ине. Ул да яныма килеп ултырҙы ла буҫығып-буҫығып иланы. Мин саҡ-саҡ ҡына тын ала инем. «Хуш бул, – мин әйтәм. – Тыуған илем Башҡортостан, хуш булығыҙ, киң сәхрәләрем, мин һеҙҙе хәҙер яңынан ҡайтып күрә алмам инде». Миңә бик ҡыйын, бик ауыр ине. Ҡапыл эскем килеп китте. Беҙҙән алыҫ түгел күтерле соҡорға оҡшаған ылымыҡлы бер бәләкәй күл бар ине. Мин нисек етте шулай, бисәмдең ярҙамы менән, шыуышып шул күл янына барып еттем. Бәхеткә ҡаршы, башыма һыуға төшөп ятыу уйы килде. Сисендем дә бер сәғәт самаһы һыу эсендә яттым; миңә еңел булып китте. Аяҡҡа баҫып, һыуҙан сыҡтым. Сығыу

менән, ҡурҡып киттем, ә бисәм ҡурҡыуынан йығылып китә яҙҙы. Минең бөтә тәнемде, муйынымдан алып табаныма тиклем, һөлөктәр һырып алғайны. Һөлөктәр ҡанымды тағы бер аҙ һурһындар әле тип, яңынан һыуға инеп яттым. Һыуға өсөнсө тапҡыр инеп ятҡандан һуң, улар минең ҡанымды эсеп туйып, үҙҙәре төшөп бөттөләр. Шунан һуң тәнемдәге ауырлыҡ ҡул менән һыпырып ташлаған кеүек булды. Мин үҙем кейенеп, атыма һикереп мендем дә, бисәм менән икәүләп үҙебеҙҙең отрядты ҡыуып еттек.

– Юҡ, хәҙрәт, – тип өҫтәне Йәнтүрә, – кемдең ғүмере ҡайҙа бөтә, тупрағы ҡайҙа яҙған, ул шунда үлә. Бына, мәҫәлән, икенсе бер ваҡыт мин Тыуған илемә әйләнеп ҡайтыуҙан бөтөнләй өмөтөмдө өҙгәйнем, тик бисәм генә ҡотҡарып алып ҡалды.

Ҡайһы урында икәне хәтеремдә ҡалмаған, беҙҙе бәләкәй бер күҙәтселек отрядына ҡуйҙылар. Белмәйем, беҙ нисектер күрмәй ҡалғанбыҙ, таң атып килгәндә, түштәренә ҡорос таҡта кейгән егермеләп француз беҙҙең алға килеп сыҡты. Беҙ тиҙ генә һөңгөләребеҙҙе эйәргә ныҡытып, һөрән һалып, яуыздар өҫтөнә ташландыҡ. Мин атланған ат бик йылғыр, ҡурҡмаусан ине; сабып барған ыңғайға бер французды һөңгөм менән сәнсеп йыҡтым. Һөңгөнө тартып алырға маташҡанда, уларҙың икенсеһе килеп ҡылысы менән яурыныма сапты; тимер кейем сыҙаманы, мин сабылған яурын менән аттан йығылып төштөм һәм иҫтән дә яҙғанмын. Һушыма килгәндә беҙҙең иптәштәрҙең яртыһы тегеләр тарафынан тураҡланып бөткәнен, ҡалғандарының ҡул-аяҡтары бәйләнгән булыуын күрҙем. Бисәм янымда юҡ ине. Мин инде, ул донъяла юҡтыр, тип уйланым. Аттарға мендереп, беҙҙе пленға алып киттеләр. Сәғәт ярымдан һуң ҡапыл урман араһынан йөҙләгән Дон казагы килеп сыҡты һәм беҙҙе уратып алды. Унлап ҡына ҡалған французлар ҡурҡтылар һәм, үҙҙәренең бирелеүҙәрен белдереп, баш эйҙеләр. Минең бисәм дә Дон казактары араһында ине. Ул эш былай булған: беҙ һуғыша башлау менән, минең ҡатын, тегеләргә ҡаршы тора алмаясағыбыҙҙы аңлап алып, һуғыш

майҙанынан тайшанып сыҡҡан да төп отрядҡа хәбәр иткән. Эйе, әгәр ҙә ул булмаған булһа, мин илемдә былай байрам ҡороп, күңел асып йөрөй алмаған булыр инем. Яманлап бер һүҙ ҙә әйтерлек түгел, бик яҡшы һәм дан бисә.

– Ә һинең бисәң иҫәнме әле? – тип һораным мин.

– Иҫәнен иҫән, тик ҡартайҙы, бик ныҡ ҡартайҙы һәм хәҙер өс йыл инде күҙҙәре бер нәмә лә күрмәй.

Ҡунаҡсыл дуҫта беҙ ике көн булдыҡ һәм ваҡытты бик күңелле үткәрҙек: балыҡ тоттоҡ, мылтыҡтар менән ҡоралланып, һунарға йөрөнөк; һунарҙа йөрөгәндә старшинаның улы мәргән атыуҙа үҙенең оҫталығын күрһәтеү мөмкинлеген тапты. Беҙ һунарҙан ҡайтып килә инек инде. Тауҙар араһынан ҡайтып килгәндә, мин ҡая башында баҫып торған бер ҡоралай күрҙем һәм атырға уйланым. Ләкин Йәнтүрә мине туҡтатты. «Туҡта әле, хәҙрәт, – тине ул, – һин Нәғиптең оҫталығын күр». Старшина улының исеме шулай ине. Нәғип һаҙағын алды, уға уҡты йайлап ҡуйҙы, тоҫҡаны; һаҙаҡ оҫта башҡорттоң ҡулында дүңгәләк хәленә килде; уҡ, һыҙғырған тауыш сығарып, атылып китте һәм үтәнән-үтә уҡ тишеп сыҡҡан ҡоралайҙың кәүҙәһе туранан-тура тау аҫтына, беҙҙең аяҡтарыбыҙ янына, тәгәрәп килеп төштө. Шунда булыусыларҙың таң ҡалыуҙары батыр өсөн бүләк булды.

Кискә табан инде беҙ ҡайтып китергә йыйынғайныҡ, ләкин ҡунаҡсыл хужа беҙҙең ҡунып китеүебеҙҙе бик ныҡ үтенеп һораны. Бында мин башҡорттарҙың милли музыкаларын тыңлау мөмкинлегенә ирештем. Был музыка ҡурайҙа йәки ҡумыҙҙа уйнау һәм тамаҡ төбө менән йырлау – өҙләү ине. Был өҙләүҙе нисек аңлатырға ла белмәйем. Бәлки, минең ҡарашым күптәргә оҡшамайынса, ҡыҙыҡ һымаҡ тойолор. Ләкин асыҡтан-асыҡ әйтергә кәрәк: башҡорттарҙың иң һөйөклө батырҙары Салауат тураһындағы балладаны ике ҡурайҙа уйнағанда һәм тамаҡ төбө менән йырлағанда, мин был музыканы ысын күңелдән кәйефләнеп, рәхәтләнеп тыңланым.

## Хәтергә төшөрәбеҙ

Хикәйәлә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙа башҡорттар нисек ҡатнашҡан?

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** В. Зефиров тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
**2.** Йәнтүрә килгән ҡунаҡтарға нимә тураһында һөйләй?
**3.** Йәнтүрә французлдарҙы ҡайҙа тиклем ҡыуып бара һәм шул хаҡта нимә һөйләй? Шул урындарҙы текстан табып, уҡып күрһәтегеҙ.
**4.** Йәнтүрәне ҡатыны ҡайһы осраҡтарҙа үлемдән ҡотҡарып ҡала?
**5.** Халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, музыкаһы ҡунаҡҡа нисек тәьҫир итә?
**6.** Старшина килгән ҡунаҡҡа башҡорт халҡының ниндәй йолаларын күрһәтә?
**7.** Башҡорттарҙың һуғыш кейеме нисек һүрәтләнә? Шул юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.



Мифтахетдин

# АҠМУЛЛА

**(1831–1895)**

Мифтахетдин Аҡмулла – революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихында киң билдәле шағир. Заманында халыҡ уның шиғырҙарын хәтерендә һаҡлар һәм яттан һөйләр булған. Улар ҡулъяҙма көйөнсә лә халыҡ араһында киң таралған.

Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулла 1831 йылдың 14 декабрендә Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе Күл иле-Мең олоҫо (хәҙер Миәкә районы) Туҡһанбай ауылында тыуған. Әсәһе үлеп киткәс, Аҡмуллаға бик йәшләй үгәй әсәһенең ҡыйырһытыуҙарын күреп үҫергә тура килә. Ул башта үҙ ауылында атаһынан тәүге һабаҡтарҙы ала, унан күрше ауылдарҙағы мәҙрәсәләрҙә уҡый. Аҙаҡ тыуған ауылын бөтөнләй ташлап сығып китә. Бер нисә йыл атаҡлы Стәрлебаш мәҙрәсәһендә уҡый, һуңыраҡ Троицк ҡалаһына юл тота. Ҡышын ул мәҙрәсәләрҙә уҡып, йәй көндәрен ҡаҙаҡ далаларына китеп, ҡаҙаҡ балаларына һабаҡ биреп йөрөй.

Аҡмулла күп ғүмерен ҡышын балалар уҡытып, йәй көндәрен балта оҫтаһы булып эшләп үткәрә. Халыҡҡа аң-белем таратырға тырыша. Уҡырға, ғилемгә эйә булырға өндәп шиғырҙар яҙа. Уҡымышлылығы, тура һүҙлелеге, сәсәнлеге өсөн халыҡ уны Аҡмулла тип атай. Аҡмулла тура һүҙле, ғәҙел кеше тигән һүҙ.

Халыҡ Аҡмулланы саф күңеле, тапҡырлығы өсөн яратһа, байҙар, түрәләр иһә уның һүҙенән ҡурҡыр булған. Уларға әсе шиғри һүҙ менән тел тейҙергән өсөн үс алырға тырышҡандар, хатта бер заман, нахаҡҡа ғәйепләп, төрмәгә ултыртҡандар. Аҙаҡтан, кешеләр яллап, уны 1895 йылда Урал тауҙары араһында үлтереп киткәндәр. Аҡмулланың ғүмере шулай фажиғәле ослана. Ләкин уның шиғырҙары, ижады, яҡты исеме халыҡ күңелендә ҡала, бөгөнгә тиклем йәшәй.

## БАШҠОРТТАРЫМ, УҠЫУ КӘРӘК!

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыктан ҡурҡыу кәрәк!

Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллыҡтан килә ятыр ҙур афәттәр.
Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кәрамәттәр.

Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр.

Алтыға берҙе ҡушып, һан ун булмай,
Сәғәтте алға бороп, төн көн булмай.
Белемлелек – арыҫландан көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы матур итеп укығыҙ һәм ятлап алығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, уларға аңлатма бирегеҙ.
**2.** Аҡмулла нимәгә бик ҡайғыра? Шул урынды табып, укып күрһәтегеҙ.
**3.** Аҡмулланың халыкты аң-белемгә өндәү идеяһы ҡайһы юлдарҙа сағыла?
**4.** Шағир укымышлы кешенең ниндәй сифаттарын асып һала?
**5.** Белемле булыуҙы Аҡмулла нимә менән сағыштыра? Бөгөнгө көндә ошо сағыштырыу урынлымы?

## НӘФСЕ

Бай уйлар, ҡалай ярлы булмайым, тип,
Фәләнсә байҙан артҡа ҡалмайым, тип.
Бер уйлаған байына малы етһә,
Йәнә уйлар, алдыма һалмайым, тип.

Йөҙгә малың еткәндә, йүгерерһең,
Бер тинлек сығым булһа, йөгөнөрһөң.
Ҡәнәғәтең аҙайып, шул ваҡытта
Бер мал үлһә, йөҙ ҡайғырып, үкенерһең.

Малың меңгә еткәндә тарыларһың[1],
Ике меңгә етһәсе, тип зар ҡыларһың.
Эрелек һәм тәкәбберлек шомлоғонан
Шул көндә тәүбәләрең яңыларһың.

Мең ерҙән табыш алған уңмай ҡалмаҫ,
Табышһыҙ яланғастар туңмай ҡалмаҫ.
Йәне һаран яман бай таштан ҡаты –
Фәҡир түгел, Хоҙайын күңеленә алмаҫ.

Ил маҡтаһа «бай», «бей» тип ҡыуанабыҙ,
Әҙәмдән йөҙөбөҙ өсөн оялабыҙ.
Ғәзиз торған Тәңренән оялмайбыҙ –
Шундайын бер аҡылһыҙ диуанабыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. «Нәфсе» шиғыры кемдәргә арналған?
2. Шиғырҙа байҙарҙың ниндәй сифаттары тәнҡитләнә?
3. Шиғырҙы уҡығандан һуң һеҙ үҙегеҙгә ниндәй һығымта яһанығыҙ?
4. Бөгөнгө тормошта нәфсеһен тыя алмаған кешеләр бармы?

## ДУҪЛЫҠ

Дуҫ тигәнең тыштан матур, эстән мөрдар[2] булмаһын,
Донъяһы тар булһа булһын, күкрәге тар булмаһын.
Бар көнөңдә дуҫ булып, тарлыҡта ташламаһын,
Бер ваҡытта хәжәт булып, заллына[3] зар[4] булмаһын.

---

[1] *Тарылау (ҡаҙ.)* – һаранланыу, ҡомһоҙланыу.
[2] *Мөрдар (ғәр.)* – насар, әшәке.
[3] *Залл (ғәр.)* – аҙғын, боҙоҡ.
[4] *Зар (фар.)* – дарманһыҙ, көсһөҙ, зәғиф.

Ғәйебенә күҙ һалма дуҫтың – ғәйебе мәнзур[1] түгел,
Ғәйебе асыҡ булһа булһын, ғәйеп асыусы булмаһын.
Уйҙа ғына булған дуҫҡа көйҙәшлек мәшрут[2] түгел,
Ҡалыбы башҡа булһа булһын, ҡәлебе[3] башҡа булмаһын.

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

**1.** Шағир дуҫтың ниндәй сифаттарына иғтибар итә?
**2.** Дуҫлыҡҡа булған ошо талаптар бөгөнгө көндә лә урынлымы?

## АТТЫҢ НИҺЕН МАҠТАЙҺЫҢ?..

Аттың ниһен маҡтайһың –
Бәйгеләрҙә сапмаған;
Дөйәнең ниһен маҡтайһың –
Алыҫ ергә бармаған;

Әҙәмдең ниһен маҡтайһың –
Яҡшы яғы ҡалмаған;
Донъяның ниһен маҡтайһың –
Ырыҫ-бәхет ҡунмаған;

Хакимдың ниһен маҡтайһың –
Яуыз йырын йырлаған;
Егеттең ниһен маҡтайһың –
Илде дошман сарлаған[4];

Ҡатындың ниһен маҡтайһың –
Ҡағып түшәк һалмаған;
Баланың ниһен маҡтайһың –
Атаның телен алмаған;

Ҡыҙҙың ниһен маҡтайһың –
Ғәйбәт һүҙҙән ҡалмаған;
Мулланың ниһен маҡтайһың –
Үле менән теренең
Барын берҙәй ялмаған.

---

[1] *Мәнзур (ғәр.)* – иғтибарға лайыҡ.
[2] *Мәшрут (ғәр.)* – шартлы, мотлаҡан.
[3] *Ҡәлеб (ғәр.)* – күңел, йөрәк.
[4] *Сарлау (ҡаҙ.)* – тултырыу, баҫып алыу.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шиғыр ни өсөн «Аттың ниһен маҡтайһың?..» тип атала?
**2.** Шағир кемдәрҙең ниндәй сифаттарын тәнҡитләй? Һеҙ уның менән килешәһегеҙме?
**3.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

### Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

*Яҡшы яғы ҡалмаған; атаның телен алмаған; ғәйбәт һүҙҙән ҡалмаған* һүҙбәйләнештәре кемгә ҡарата әйтелгән? Һеҙ уларҙы нисек аңлайһығыҙ, мәғәнәләрен төшөндөрөгөҙ.

## НӘСИХӘТТӘР

*(ҡыҫҡартып алынды)*

Иң әүәл кәрәк нәмә – иман, тигән,
Ахирәт эштәренә инан, тигән.
«Хоҙай, кисер!» – тигән менән эш бөтмәйҙер,
«Иман шарты»н өйрәнмәһә – Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәмә – күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа – күмел, тигән.

Өсөнсө ҡиммәт нәмә – аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.

Дүртенсе ҡиммәт нәмә – шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһөҙлөк – көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: «Хоҙай, кисер», – тигән – хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе ҡиммәт нәмә – әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән – мөхәббәткә сәбәп, тигән.

Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы ҡиммәт нәмә – сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә сабырһыҙҙың төбө – хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.

Етенсе ҡиммәт нәмә – ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас – юлдаш, тигән.

Алдыбыҙҙан киткәне юҡ хәүеф-хәтәр,
Был халыҡ, белә тороп, ғафил ятыр.
Ғәфләттән уяныу юҡ, оялыу юҡ,
Каруандар үтеп ятыр ҡатар-ҡатар.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡырға өйрәнегеҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Ҡиммәттәр хаҡында фекер алышығыҙ.
**2.** Нимә ул нәсихәт?

**Ижади эш**

Уҡыу, йәшәү, хеҙмәт, дуҫлыҡ тураһында үҙегеҙ нәсихәт яҙып ҡарағыҙ.

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## ӨЛГӨР ҺҮҘ

Асманда тыуған йондоҙҙан
Яҡтырып тыуған ай артыҡ;
Жабы[1] тыуған эш атынан
Ҡазанат[2] тыуған тай артыҡ;

[1] *Жабы (ҡаҙ.)* – ҡатнаш, төрлө тоҡомло аттан тыуған.
[2] *Ҡазанат (ҡаҙ.)* – таҙа ҡанлы.

Башы боҙоҡ хакимдан
Хәйерле, шым яй[1] артыҡ;
Шәрә булһа, тауҙан да
Ағасы бар сай[2] артыҡ;

Дөйә һуйған йыйындан
Туҡлы һуйған туй артыҡ;
Һүҙ тыңламаҫ улыңдан,
Һыйҙаш булһа, сит артыҡ;

Әрһеҙ айыу килендән
Көсөкләгән эт артыҡ;
Ауыл гиҙгән ҡыҙыңдан
Бишектәге ул артыҡ;
Күреп алған күркәмленән
Күрмәй алған ҡыҙ артыҡ!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

Аҡмулла ҡайһы бер күренештәрҙе «яҡшы», ә икенселәрен «насар» тип атай. Ошо юлдар менән килешәһегеҙме? Килешмәһәгеҙ, үҙ фекерҙәрегеҙҙе дәлилләгеҙ.

### *Аҡмулла шиғырҙары тураһында*

Мифтахетдин Аҡмулла – бик талантлы һәм үҙенсәлекле шағир. Ул үҙенең арбаһы менән ауылдан ауылға, йәйләүҙән йәйләүгә йөрөргә, донъя гиҙергә яратҡан. Шуға күрә лә ул халыҡтың тормошон, йәшәү рәүешен үҙ күҙҙәре менән күреп йөрөгән. Башҡортостандың матур тәбиғәте, тауҙары, урмандары, күлдәре, йылғалары менән һоҡланған. Ошо матурлыҡ уның күңелендә нескә тойғолар, һоҡланыуҙар уятҡан. «Күкләм», «Яҙ», «Көҙ» исемле шиғырҙары – ошо һоҡланыуҙың емеше.

---

[1] *Яй, жай (ҡаҙ.)* – ябай, түбән ҡатлам кешеһе.
[2] *Сай (ҡаҙ.)* – йырғанаҡ.

Ул «Бәхет», «Аттың ниһен маҡтайһың?..» шиғырҙарында яҡшы менән яманды, хаҡ менән нахаҡты айыра белергә саҡыра. Ауылдар буйлап йөрөгәндә ул байҙарҙың, муллаларҙың ярлы халыҡтан нисек көлөүҙәрен күреп әсенгән. Ошо ғәҙелһеҙлекте тәнҡитләп үҙенең «Нәфсе» шиғырын яҙған. Был шиғырында ул байҙарҙың нәфсеһенән, ҡомһоҙлоғонан әсе итеп көлә.

«Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырында ул үҙенең милләттәштәрен наҙанлыҡтан ҡурҡырға саҡыра. Ғилем-һөнәр алыуҙы халыҡтың ауыр, хәйерсе тормошонан ҡотолоу сараһы итеп күрә, шуға күрә үҙенең милләттәштәрен уҡырға, белем алырға өндәй.



Мәжит
# ҒАФУРИ
(1880–1934)

## МӘЖИТ ҒАФУРИҘЫҢ БАЛА САҒЫ ҺӘМ УҠЫУ ЙЫЛДАРЫ

### Балалыҡ иптәшем Мәжит

*(Б. Мәҡсүтов иҫтәлеге буйынса)*

Өфө – Ишембай тимер юлының көнсығышына ҡараһаң, бик матур булып бейек тау теҙмәләре күренә башлай; был тауҙар мәшһүр Урал тауҙарының ҡатлаулы теҙмәләре булып, был теҙмә тауҙарҙың эсендә, Ағиҙелгә яҡынырaҡ Мағаш тауы күгәреп күренә. Ошо тауҙар араһынан ашҡына-ашҡына Еҙем йылғаһы ағып сыға. Уның Ағиҙелгә ҡушылған еренән алыҫ түгел, тәбиғәттең матур бер урынында, Еҙем-Ҡаран ауылы урынлашҡан.

Башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафури 1880 йылда ошо ауылда Нурғәни исемле бер фәҡир хәлфә ғаиләһендә тыуған. Мәжит, үҙ ауылында өс йыл уҡығас, дүртенсе йылына Оло Үтәшкә килә. Был 1893 йылда булды.

Мәжит дәрес белеү яғынан алдынғыларҙан иҫәпләнә ине. Ул яҙыуҙы ла матур ғына яҙғанлыҡтан, бай балаларына ялланып китаптар ҙа күсереп бирә торғайны. Был эшен ул Үтәш мәҙрәсәһенә барғас та дауам итте.

Мәжиткә быны эшләмәйенсә ярамай ине. Сөнки Мәжит Үтәш мәҙрәсәһенә уҡырға кереп, күп тә үтмәй, уның атаһы Нурғәни хәлфә вафат булды. Атаһының үлеүенә бер йыл тулыр-тулмаҫтан, әсәһе Мәрзиә әбей ҙә вафат булып, Мәжит Нурислам ағаһы тәрбиәһендә тороп ҡалды. Ағаһы ярлы ине. Шунлыҡтан Мәжиткә бай балаларына аш бешереп, самауыр ҡайнатып хеҙмәт итеп уҡырға тура килде.

Мәжиттең башҡа балаларҙан иртәрәк тороу ғәҙәте бар ине. Ул иртүк тороп китап уҡый йәки яҙыу эше менән ултыра. Ҡайһы бер уҡыусылар ҡыҙыҡһынып һораһалар, Мәжит уларға:

– Иртә тороу дәрес әҙерләү өсөн файҙалы, – тип яуап ҡайтарыр ине.

Мәжит йәй көндәрендә бигерәк тә иртә тора ине. Ҡайһы ваҡыттарҙа ул ҡапҡа бағанаһы башына йәки берәй бейек урынға менеп ултырып, балаларға ҡыҙыҡлы нәмәләр һөйләй торғайны. Уның ҡысҡырыуы була, балалар йыйылалар ҙа, бөгөн Мәжит нимә һөйләр икән, тип ҡыҙыҡһынып, уның һүҙен көтәләр. Мәжит уларға йә ҡатмарлы ғына йомаҡ әйтә, йә ҡыҙыҡлы әкиәт һөйләргә тотона.

Мәжиттең һүҙгә оҫта булыуы, һорауҙарға яуапты тиҙ табыуы ауылдағы бөтә балаларға ла билдәле ине.

Мәжит тәбиғәт менән дә бик ҡыҙыҡһына ине. Һыу буйҙарында ҡармаҡ һалып йөрөгәндә, ул көмөш кеүек саф һыуҙың сылтырап ағыуына һоҡлана, һандуғастарҙың моңло һайрауын тыңлап дәртләнә. Ҡайһы саҡтарҙа ағын шишмә тауышына, һандуғастарҙың моңона ҡушылып йырлап та ебәрер ине ул.

Ауыл балалары, ҡайһы саҡта бер-береһен үсектерергә тырышып, үсекләүҙәр әйтеп уйын уйнай торғайнылар. Мәжит бер ҙә үсекмәҫ ине. Уның Мәһәҙи тигән ағаһы йыш ҡына «Мәжити ҙә гәзити» тип шаяртыр ине. Шулай бер ваҡыт Нурғәни хәлфә Мәһәҙиҙең шаяртып әйткән һүҙҙәрен ишетеп ҡалған да: «Балалар! Һеҙ минең Мәжитемдән көлмәгеҙ, минең һынауым буйынса, уның киләсәктә атаҡлы бер кеше булыу ғәләмәттәре күренә әле», – тип балаларҙы тыйған.

Мәжит менән минең аралағы дуҫлыҡ бер ваҡытта ла өҙөлмәне. Уның менән беҙ йыш ҡына, киләсәктә нисек булһа ла ситкә китеп, берәй ҙурыраҡ мәктәпкә инеп уҡыу тураһында һөйләшә торғайныҡ.

Бына Мәжитте Оло Үтәш мәҙрәсәһе лә ҡәнәғәтләндермәй башланы. Ул оҙаҡламай Өфөләге «Ғосмания» мәҙрәсәһенә барып уҡырға инде, тик ҡыш буйына йәшәрлек аҡсаһы булмағанлыҡтан, Өфөлә күп тора алманы. Ҡыйышҡы ауылында Мирсаяф хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡый башланы.

Тиҙҙән Мәжит, Ҡыйышҡы мәҙрәсәһенән ҡайтып, үҙ ауылында балалар уҡытырға тотондо. Ә йәйгә сыҡҡас, Белорет тирәһендәге кирбес заводына эшкә китте. Йәйҙе кирбес заводында эшләп үткәрҙе. Көҙ еткәс, тағы үҙ ауылына ҡайтып, балалар уҡыта башланы.

Көндәрҙең береһендә Мәжит миңә электән уйлап йөрөгән уйын әйтеп һалды. Ул Троицкиға уҡырға китергә йыйына икән. Мине лә үҙе менән китергә димләне. Минең Троицкиға барып уҡыу теләгем ҙур булһа ла, юл әҙерлеге күрелмәгән, паспорт алынмағанлыҡтан, хәҙер генә унда китергә мөмкинлек юҡ ине.

Мәжит Троицкиға китергә йыйынған ваҡытта ғына, Еҙем-Ҡаран ауылы Ғәбдрәхим тигән кеше Лапыштыға бара икән тигән һүҙ

таралды. Мәжит быны ишетеп ҡалған да Ғәбдрәхимгә барып һөйләшкән. Ғәбдрәхим ағай уны Лапыштыға тиклем атына ултыртып алып барырға риза булған. Троицкиға киткәненә бер ай самаһы ваҡыт үтеүгә, Мәжит ҡабат үҙ ауылына әйләнеп ҡайтты, сөнки уның паспорты онотолоп ҡалған икән. Ләкин ауылда ул күп торманы. «Берәй ерҙә эшләп, аҙыраҡ аҡса рәтләп алып, Троицкиға уҡырға китергә кәрәк» тигән уйға килеп, Мәжит менән икәү йәйәүләп Кама йылғаһы буйына эш эҙләп сығып киттек. Төш еткәнсе һис бер ерҙә туҡтамай бик ҡыҙыу барып, төш ауғас ҡына, бер һыу буйында туҡтап сәй ҡайнатырға булдыҡ. Шул ваҡыт Мәжит бик һыуһаған булһа кәрәк, сәй ҡайнағанды көтмәй, ағып ятҡан һыуҙан һыу алып эсте лә оҙон көй менән моңло итеп ҡысҡырып йырлап ебәрҙе:

Таҡыя ғына башлы ҡырлы ҡурай –
Ялан ғына ерҙең межаһы.
Эсмәҫ кенә ерҙән һыу эсерә
Был донъяның ҡаты нужаһы.

Сәй эскәс, тағы киттек. Кама йылғаһына барып еткәс, Мәжит бер байға ялланып эшләй башланы, ә мин Еҙем-Ҡаран ауылынан күсеп барған Мифтах тигән бер кешенең йорт эштәрен эшләргә яллandым. Көҙгә тиклем байҙа эшләп, көҙ көнө ауылға ҡайтты ла Мәжит балалар уҡытырға кереште. Ләкин унда күп эшләргә тура килмәне. Сана юлы төшкәс тә, ул тағы ла Троицкиға китте. Был 1898 йылда булды.

Шунан һуң Мәжит, үҙенең белемен тағы ла арттырыу теләге менән, Троицкиҙан «Буби» мәҙрәсәһенә барҙы. Ләкин был мәҙрәсәне яратмай, Ҡазанға барып, «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инде. Унда уҡыған сағында ул шул ваҡытта Ҡазанда сыға торған гәзиттә шиғырҙарын баҫтыра башланы.

1905 йылда Мәжит Ғафури Ҡазанда уҡыны. 1906 йылда Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инде.

## Мәжит Ғафури Өфөлә

Өфөлә М. Ғафури «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә ситтән тороп уҡырға урынлаша һәм 1909 йылда тамамлап сыға. 1905–1907 йылғы революция еңелгәндән һуң, Рәсәйҙә ҡара реакция йылдары башлана. Батша самодержавиеһы, яңы ғына баш күтәреп, революция яһап йөрөгән халыҡтан ҡаты үс ала. Быларҙың барыһын да М. Ғафури тәрән кисерә. Ҡайһы бер шәкерттәр 1905 йылда «революция», «азатлыҡ» тип ауыҙ асып ҡысҡырып йөрөп тә, ҡара реакция башланыу менән боҫоп ҡалалар, революцион ҡараштарынан баш тартып, халыҡҡа хыянат итәләр. М. Ғафури күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, халыҡҡа тоғро булып ҡала. Батша охранкаһы шағирҙың һәр бер аҙымын тикшереп, һәр бер яҙған әҫәренә тикшереү үткәреп бара.

Бына ошондай ҡыҫынҡы, ҡурҡыныс шарттарҙа ла М. Ғафури байҙарҙы тәнҡитләп, ябай хеҙмәт кешеләрен яҡлап, үҙенең ошо фәҡирҙәр менән булыуын белдереп, «Мин ҡайҙа?», «Үҙем һәм халҡым», «Баҙарға сыҡтым» шиғырҙарын яҙа.

1908–1910 йылдарҙа М. Ғафури йыш ҡына ауылдарға сығып йөрөй. Халыҡтың ауыр тормошон күрә. Башҡорт ауылдарында йөрөп, ул халыҡ ижадын йыя, «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән башҡорт эпосын китап итеп баҫтырып сығара.

1912 йылда М. Ғафури миллионер Кәримовтың «Шәреҡ» типографияһына корректор булып эшкә урынлаша. Был йылда Ғафури тормошонда ҡыуаныслы бер ваҡиға була. Троицк яғына ҡымыҙ эсеп дауаланырға китеп барышлай, бөйөк Ғ. Туҡай Өфөгә тейеп китә.

Ошо уҡ йылдың майында Туҡай Өфөгә икенсе тапҡыр килә. Ике шағир Ағиҙел яры башындағы баҡсала (хәҙерге Салауат Юлаев исемендәге баҡса) йәшел үләндә аунап, аяҡ аҫтында ғына бормаланып, тулҡынланып аҡҡан саф, мул һыулы Ағиҙелгә ҡарап, оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп, күңел аса торған булғандар.

Айырылышыуҙарына бер йыл самаһы ваҡыт үтер-үтмәҫтән, Туҡайҙың үлем хәбәре килә. Ғафури, дуҫының үлем хәбәрен ишетеп, бик ҡайғыра, «Шағир Ғ. Туҡай үлгәндән һуң» тигән шиғырын яҙа.

1914 йылда Беренсе донъя һуғышы башланыу менән, М. Ғафури үҙе эшләгән типография эшселәре араһында сәйәси ваҡиғалар хаҡында әңгәмәләр алып бара башлай. Өфө охранкаһы, быны белеп ҡалып, типографияла тентеү үткәрә. Был йылдарҙа М. Ғафури һуғышҡа ҡаршы йүнәлтелгән «Юҡтырһың да, Алла!» тигән күренекле шиғырын яҙа.

Февраль революцияһын ул ихлас күңелдән тәбрикләй. Батшаны тәхетенән бәреп төшөргән революцион эшселәргә ул «Ҡыҙыл байраҡ» тигән шиғырын бағышлай.

Октябрь социалистик революцияһын М. Ғафури бөтмәҫ шатлыҡ менән ҡаршылай. 1919 йылдан алып М. Ғафури редакцияла эшләй башлай.

1923 йылда Ғафуриҙың ижади эшмәкәрлегенә 20 йыл тулыу айҡанлы юбилей үткәрелеп, уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән ҙур исем бирелә.

Мәжит Ғафури 1934 йылдың 28 октябрендә Өфөлә вафат була.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Б. Мәҡсүтовтың иҫтәлеген уҡып сығығыҙ һәм сығыш яһау өсөн план төҙөгөҙ.

**2.** Мәжит Ғафуриҙың бала саҡтан уҡ белем алырға ынтылыуы тураһында һөйләгеҙ. Ул ҡайһы мәҙрәсәләрҙә уҡыған?

**3.** Мәжит Ғафури ҡасан, ҡайҙа шиғырҙарын баҫтыра башлай?

**4.** Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында һөйләгеҙ.
**5.** Әҙиптең Тукай менән осрашыуы тураһында һөйләгеҙ.
**6.** Шағирҙың тормош һәм ижад юлы менән бәйле даталарҙы күрһәтеп хронологик таблица төҙөгөҙ.

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

М. Ғафуриҙың ижады һәм тормошо тураһында өҫтәлмә материалдар табығыҙ.

## ҮҘЕМ ҺӘМ ХАЛҠЫМ

Бер аҙым алға баҫам да,
Әйләнәм мин артыма.
Ҡайҙа баҫҡандар икән тип,
Күҙ һаламын халҡыма.

Шул ваҡыт мин бик юғары
Ҡош кеүек осһам әгәр,
Ә улар һаман шулай
Баҫҡан урында торһалар?..

## МИН ҠАЙҘА?

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңло күп була,
Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була.

Юҡ уларҙа төрлө ҡатлау, юҡ уларҙа эс сере,
Тыштары керле, вә ләкин юҡ уларҙа эс кере.

Юҡ тәкәллеф[1], юҡ эрелек, ултырышаһың һин дә мин,
Юҡ күңел ҡырылыр тигән уй, ул йәһәттән мин имен...

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағирҙың халыҡҡа булған мөнәсәбәте нисек сағыла?
**2.** «Мин ҡайҙа?» шиғырында шағир халыҡты нисек һүрәтләй?
**3.** Ике шиғырҙы ла ятлағыҙ.

---

[1] *Тәкәллеф* – яһалмалыҡ, ҡыланыу.

## ГӨЛДӘР БАҠСАҺЫНДА

Бер көн шулай гөлдәр баҡсаһында
Сәскәләрҙе ҡылдым тамаша.
Хуш еҫтәре менән йән шатлана,
Нурҙарынан күҙҙәр ҡамаша.

Нәфис төҫтәренә, буйҙарына
Хайран ҡалып, ҡыҙығып ҡараным:
– Әй, сәскәләр, һеҙгә кемдәр дуҫтар?
Кемдәр дошмандар? – тип һораным.

Гүйә улар шунда йәнләнделәр,
Нурҙар сәсеп, ем-ем көлдөләр.
Әкрен генә иҫкән ел арҡылы
Миңә былай яуап бирҙеләр:

«Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙый,
Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,
Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле, –
Шулар беҙгә дуҫтар!» – тинеләр. –

«Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,
Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәйҙәр,
Кемдәр килеп, беҙҙе хаҡһыҙ өҙә, –
Шулар беҙгә дошман!» – тинеләр.

Сәскәләрҙең ошо яуаптарын
Алғас: «Дөрөҫ, – тинем уларға, –
Эшһеҙ кешеләрҙең хаҡтары юҡ
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарға…

Күңелле эш, матур тормош менән
Йыл артынан йылдар ағалар…
Эшсән егет менән эшсән ҡыҙҙар
Һеҙҙе түштәренә ҡаҙарҙар».

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир ни өсөн сәскә образына мөрәжәғәт иткән?
**2.** Шиғырҙағы йәнләндереүҙәрҙе табығыҙ, әҫәрҙең төп йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен билдәләгеҙ.
**3.** Түбәндәге өҙөктәрҙән эпитеттарҙы табып, мәғәнәләрен асыҡлағыҙ. *Саф, ҡара, тар* һүҙҙәренең тура мәғәнәле ҡулланылышына һөйләмдәр уйлағыҙ. *Кемдәр* һүҙенең ҡабатланып ҡулланылыу сәбәптәрен аңлатығыҙ.
**4.** Түбәндәге юлдарҙы һеҙ нисек аңлайһығыҙ, шул турала әңгәмә үткәрегеҙ:

«Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле, –
Шулар беҙгә дуҫтар!» – тинеләр. –
«Кемдәр ҡара эсле, тар күңелле,
Кемдәр ысын эшкә ҡул бирмәйҙәр,
Кемдәр килеп, беҙҙе хаҡһыҙ өҙә, –
Шулар беҙгә дошман!» – тинеләр.

**5.** Шиғырҙы ятлағыҙ.

## *Шиғыр төҙөлөшө тураһында*

Матур әҙәбиәттә поэтик телмәрҙе **проза** һәм **шиғыр** төрҙәренә айырып йөрөтәләр.

Прозанан айырмалы рәүештә, шиғырҙа телмәрҙең ниндәйҙер кимәлдә тамамланған өлөшсәләре, киҫәктәре билдәле бер тәртиптә ҡабатланып киләләр. Шиғыр юлында ижектәрҙең билдәле бер һанда булыуы, рифмалар, строфалар шиғыр төҙөлөшөнөң төп үҙенсәлектәрен тәшкил итә. Ижектәр һанының билдәле бер тәртиптә ҡабатланыуы, рифмалы һүҙҙәр, өндәрҙең оҡшаш яңғырауы, шулай уҡ шиғыр юлдары аҙағындағы паузалар шиғырҙың ритмын барлыҡҡа килтерәләр. Миҫал өсөн, Мәжит Ғафуриҙың «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырынан бер строфаны алып ҡарайыҡ:

«Кемдәр эшләй, кемдәр ерҙәр ҡаҙый,
Кемдәр беҙгә һыуҙар һибәләр,
Кемдәр сәскә кеүек саф күңелле, –
Шулар беҙгә дуҫтар!» – тинеләр.

Был строфаның беренсе һәм өсөнсө юлдары – унар ижектән, ә икенсе һәм дүртенсе юлдары туғыҙар ижектән

тора. Һәр юлдың һуңғы ижегенә көслө баҫым төшә, һәм унан һуң бер ни тиклем туҡталыш – пауза яһала. Ана шулай шиғыр юлдарындағы ижектәрҙең билдәле бер һанда һәм тәртиптә ҡабатланып килеүҙәре, һәр шиғыр юлы аҙағында пауза яһалыуы шиғырҙы ритмлы яһай.

Күберәк ижекле юлдарҙан торған шиғырҙарҙа, ғәҙәттә, юл уртаһында ла бер ни тиклем туҡталыш – пауза яһалыусан була. Мәҫәлән:

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңло күп була,
Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була.

*М. Ғафури. «Мин ҡайҙа?»*

Тәүгеһе ун биш, икенсеһе ун ете ижектән торған был шиғыр юлдарының уртаһында ла (һигеҙенсе ижектән һуң) бер ни тиклем пауза яһала. Шиғыр юлы уртаһындағы ошондай пауза **цезура** тип атала.

Шиғыр юлдары бишәр, алтышар, етешәр, ун бишәр һәм унан да күп ижекле булырға мөмкин. Мәҫәлән:

Томандар ҡуйырып, – 6
Урала ҡамышҡа. – 6
Һалдаттың күңеле – 6
Китә бик алыҫҡа. – 6

*Х. Кәрим*

Аҡ ҡар баҫҡан яланды, – 7
Ҡураларҙы, соланды. – 7
Ябалаҡлап ҡар яуа, – 7
Бөгөн буранлы һауа. – 7

*Д. Юлтый*

Шиғырҙың ритмын һәм матур яңғырауын көсәйтеүҙә рифмаларҙың роле бик ҙур. Бына юғарыла миҫалға алынған строфаларҙың тәүгеһендә «ҡамышҡа – алыҫҡа» һүҙҙәре, икенсеһендә «яланды – соланды», «яуа – һауа» һүҙҙәре бер төрлөрәк яңғырайҙар. Өндәре тулыһы менән үҙ-ара ҡабатланып килгән рифмаларҙы **теүәл** йәки **тулы рифмалар** тип атайҙар. Юғарыла миҫалға алынған рифмалар – тулы рифмалар. Сөнки уларҙың тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәре, үҙ-ара ярашып, бер төрлө яңғырайҙар.

Әгәр шиғыр юлы аҙағындағы яңғыраш һүҙҙәрҙең айырым өндәре генә (йә тартынҡылары, йә тик һуҙынҡылары ғына) оҡшаш килһә, бындай рифмаларҙы **иректле рифма** тип атайҙар. Мәҫәлән:

Тор, кинйә улым, тиҙерәк
Эйәрләп мен ат.
Байраҡ шикелле елберләп,
Ҡалаға тура сап.

*Б. Бикбай*

Был шиғырҙа «ат», «сап» һүҙҙәре үҙ-ара бер төрлөрәк ишетелә. Ләкин был рифмаларҙа һуҙынҡы өндәр генә бер төрлөләр. Шуға күрә был рифма иректле була. Иректле рифмалар башҡорт поэзияһында бигерәк тә Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Б. Бикбай, Х. Кәрим шиғырҙарында йыш осрай.

Шиғыр төҙөлөшөндә ритм һәм рифма мөһим роль уйнай. Дөрөҫ, ҡайһы ваҡытта шиғырҙа рифма булмаҫҡа ла мөмкин. Рифмаһыҙ шиғырҙарҙы **аҡ шиғыр** тип атайҙар. Мәҫәлән, Ҡадир Даяндың «Таңсулпан» пьесаһы аҡ шиғыр менән яҙылған. Бындай әҫәрҙәрҙә ритмикаға бик ныҡ иғтибар ителә.

Шиғыр төҙөлөшөндә строфаларҙың роле шулай уҡ ҙур. Строфа шиғыр юлдарын мәғәнә яғынан бөтөн бер төркөмгә ойоштора, рифмаларҙың билдәле бер ритмда ҡабатланышын яйға һала.

Тимәк, тигеҙ ритмлы һәм, ғәҙәттә, рифмаланыусы һүҙҙәрҙе һәм юлдарҙы эсенә алған һәм айырым строфаларға төркөмләнгән теҙмә әҫәр ш и ғ ы р тип атала. Ш и ғ ы р  т ө ҙ ө л ө ш ө шиғыр юлдарында ижектәрҙең билдәле бер һанда тигеҙ ҡабатланыуы, рифмалар, строфалар, паузалар менән билдәләнә.

*(Ғ. Б. Хөсәйеновтан)*

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шиғри әҫәр менән проза әҫәре араһында ниндәй айырма бар?
**2.** Нимә ул ритм? Миҫалдар килтереп һөйләгеҙ.

**3.** Цезура тип нимәгә әйтәбеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.
**4.** Рифма тураһында нимә әйтә алаһығыҙ? Тулы һәм ирекле рифмалар араһында ниндәй айырма бар?
**5.** Строфа тип нимәгә әйтәбеҙ?
**6.** Үҙегеҙ теләгән бер шиғырҙың төҙөлөшөн тикшереп килегеҙ.

**Ижади эш**

«Сәскәләр донъяһында» тигән темаға шиғыр яҙып ҡарағыҙ.

## *Эпик һәм лирик әҫәрҙәр*

Художестволы әҙәбиәт һәм фольклор әҫәрҙәре бер нисә төргә бүленә: эпик, драматик, лирик һәм лиро-эпик әҫәрҙәр.

Төрлө ваҡиғалар тураһында һөйләгән әҫәрҙе **эпос** йәки **эпик әҫәр** тип атайҙар. Мәҫәлән, С. Злобиндың «Салауат Юлаев» әҫәрендә башҡорт халҡы тормошонда күптән булып үткән ваҡиғалар һүрәтләнә. Был ваҡиғаларҙа кешеләр – әҫәрҙең геройҙары – ҡатнаша. Унда геройҙарҙың эштәре, уйҙары күрһәтелә. Бындай әҫәрҙәр – эпик әҫәрҙәр.

Һүрәтләнгән ваҡиғаға ҡарата яҙыусының уйҙарын, тойғоларын биргән йәки тәбиғәт күренештәрен тасуирлаған әҫәрҙәрҙе **лирик әҫәрҙәр** тип атайҙар. Мәҫәлән, М. Ғафуриҙың «Бир ҡулыңды», «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырҙары – лирик әҫәрҙәр.

Ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә эпик һәм лирик элементтар бергә килергә лә мөмкин. Бындай әҫәрҙәрҙә ваҡиғаларҙы һөйләү, ғәҙәттә, авторҙың йәки геройҙың уйҙары, кисерештәре менән бергә ҡушылып китә. Мәҫәлән, Р. Ниғмәтиҙең «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» поэмаһында ваҡиғаларҙы һөйләү автор уйҙары менән бергә бирелә. Бындай әҫәрҙәр **лиро-эпик әҫәрҙәр** тип атала.

*(Ғ. Б. Хөсәйеновтан)*

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

**1.** Лирик әҫәрҙәр тип ниндәй әҫәрҙәргә әйтәбеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.
**2.** Эпик әҫәрҙәргә хас сифаттарҙы асыҡлағыҙ.

# ҺАРЫҠТЫ КЕМ АШАҒАН?

*(Мәҫәл)*

Бер аусының бер һарығы ҡырҙа ҡалған,
Эҙләп тә тапмағандар, ул юғалған.
Бер-ике көн үтеп киткәс, беҙҙең аусы:
«Бүре ашаған һарыҡты», – тип хәбәр алған.

Быны ишеткәс, аусы сикһеҙ асыуланды,
Йыртҡыстарҙың был эшенә көйҙө, янды.
Һарыҡтың үсен алмай ҡалмамын, тип,
Януарҙарға ошолай тип хәбәр һалды:

«Ҡыҙғанып тора инем үҙем һеҙҙе,
Асыуланһам, ҡалдырмамын берегеҙҙе.
Һарығымды кем ашаған булһа, шуны
Талап ҡылам, миңә тотоп биреүегеҙҙе!»

Аусыны белә урманда һәр бер януар,
Был хәбәрҙе ишеткәстән таң ҡалдылар.
Аусыны тиҙерәк риза итәйек, тип,
Кәңәш өсөн бер урынға йыйылдылар.

Мәжлестә Төлкө кәтип[1], Бүре рәис[2],
Рәис һүҙ башлап әйтте: «Был ниндәй эш!..
Аусының һарығын кем ашаны? –
Танмайынса ошбу ерҙә әйтеү тейеш.

Шул эш өсөн саҡырҙым мин бында һеҙҙе:
Асыуланһа, аусы ҡырыр һәммәбеҙҙе.
Кем ашаһа, шуны биреп ҡотолайыҡ,
Тоғролоҡтан айырмағыҙ үҙегеҙҙе».

Әүәл Бүре, ашаманым, тине, танды,
Төлкө лә тоғролоғон һөйләп алды.
Һәммә йыртҡыс үҙҙәрен аҡланылар.
Бер яҡ ситтә йыртҡыс түгел Ҡуян ҡалды.

---

[1] *Кәтип* – секретарь.
[2] *Рәис* – председатель.

Тине Бүре: «Ситтә тороп яңғыҙ үҙең,
Бур кешенең күҙе төҫлө ике күҙең.
Һарыҡты ашаған кеше һин түгелме?
Әйтеп ҡал! Бында килеп, әйтер һүҙең!..»

Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды,
«Ашаусы мин түгел», – тип саҡ әйтә алды.
Шөбһәле кеше төҫлө яуап биргәс,
Барса йыртҡыс: «Ашаусы шул!» – тип ауаз һалды.

Ашамай Ҡуян һис бер ваҡытта ит,
Әйтә алманы: «Ашаусы мин түгелдер», – тип;
Тине Бүре: «Һарыҡ ашап йөрөгән кеше
Ошо икән, килтерегеҙ бәйләргә еп!»

Шул минутта әллә ҡайҙан еп таптылар,
Ҡуяндың муйынына еп таҡтылар,
Яуызлығың язаһын күр бына инде! – тип,
Аусының ауылына оҙаттылар.

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан[1],
Һәр ҡайҙа золом[2] күрер меҫкен Ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шағир үҙенең был шиғырына ниндәй идея-тематик йөкмәтке һалған?
**2.** Мәҫәлде иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда һүрәтләнгән ваҡиғаның асылы нимәлә?
**3.** Бүре, Төлкө образдарына характеристика бирегеҙ. Улар йөҙөндә шағир ниндәй кешеләрҙе күрһәткән?
**4.** Түбәндәге юлдарҙы аңлатығыҙ: «Ҡуян меҫкен ҡурҡыуынан ҡалтыранды: «Ашаусы мин түгел», – тип саҡ әйтә алды»; «Яуызлығың язаһын күр бына инде!» – тип, аусының ауылына оҙаттылар».
**5.** Әҫәрҙә һүрәтләнгән төп ғәҙелһеҙлек нимәлә күренә?

---

[1] *Йыһан* – донъя.
[2] *Золом* – яфа.

**Ижади эш**

Мәҫәлде сәхнәләштерегеҙ. Бының өсөн Бүре, Ҡуян, автор ролдәрен башҡарасаҡ уҡыусыларҙы алдан билдәләгеҙ; тасуири итеп уҡырға өйрәнегеҙ.

**Телмәрегеҙҙе байытығыҙ**

Әҫәрҙә осраған бөтә яңы һүҙҙәрҙе һүҙлек дәфтәрегеҙгә яҙып ҡуйығыҙ, уларҙың мәғәнәләренә төшөнөгөҙ, бер нисә һөйләм төҙөгөҙ.

## *Мәҫәл һәм аллегория тураһында*

«Һарыҡты кем ашаған?» мәҫәлен алып ҡарайыҡ. Унда бер ваҡытта ла ит ашамай торған ҡуян йыртҡыстар тарафынан һарыҡты ашауҙа ғәйепләнә. Ләкин мәҫәлдең ысын мәғәнәһе кешеләр араһындағы яуызлыҡты һәм көслөләрҙең көсһөҙҙәрҙе йәберләүен фашлай. Хайуандар аша кешеләр тормошон ошо рәүешле ситләтеп һүрәтләү алымы **аллегория** тип атала.

Аллегория алымы менән яҙылған кескәй шиғри әҫәр **мәҫәл** (басня) була.

Мәҫәл, ғәҙәттә, тормоштағы етешһеҙлектәрҙе тәнҡит итеүгә йүнәлтелә. Автор шул кәмселектәргә ҡаршы көрәшергә өйрәтә һәм ғәҙеллекте яҡларға саҡыра. Быңдай өгөт-нәсихәт (мораль) әҫәрҙең башында йә аҙағында бирелә. Мәҫәлән:

Бүре төҫлө йыртҡыстарға киңдер йыһан,
Һәр ҡайҙа золом күрер меҫкен Ҡуян.
Зарарлы бәндә булып күренерһең,
Башҡаларға ҡылмаһаң да һис бер зыян.

Башҡорт әҙәбиәтендә басня, йәғни мәҫәл жанры М. Аҡмулла һәм М. Ғафури ижады менән бәйле барлыҡҡа килә.

Мәҫәлдәрҙә геройҙар, сюжеттар һәм темалар алмашына, ләкин ирония, аҡылға өйрәтеү, ситләтеп әйтеү үҙгәрешһеҙ ҡала.

Мәҫәл – аҡылға өйрәтеү характерында, ситләтеп әйтелгән ҡыҫҡа шиғри йәки сәсмә хикәйә формаһында яҙылған әҫәр.

Мәҫәлдәр хикәйәнән һәм әхлаҡ яғынан һығымта яһауҙан тора. Һығымта хикәйәнең алдында йәки һуңынан була һәм бөтөнләй булмауы ла ихтимал (был осраҡта ул күҙ алдында тотола).

Мәҫәлдәрҙә, ғәҙәттә, хайуандар хәрәкәт итә, ә улар йөҙөндә кешеләр күҙ уңында тотола, йәғни уларҙа йәнләндереү файҙаланыла (мәҫәлдәрҙә хайуандар һөйләшәләр, тоялар, фекер йөрөтәләр).

Мәҫәлдә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттә етешһеҙлектәр тәнҡитләнә, яуызлыҡҡа, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы тороу кәрәклеге әйтелә. Автор әйтергә теләгән фекер, ғәҙәттә, мәҫәлдең аҙағында өгөт-нәсихәт (мораль) рәүешендә бирелә. («Һарыҡты кем ашаған?» мәҫәленең һуңғы дүрт юлына иғтибар итегеҙ.) Был өгөт-нәсихәт автор фекерен дөйөмләштереп, йомғаҡлап ҡуя.

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

**1.** Мәҫәл тураһында ҙур булмаған сығыш әҙерләгеҙ: мәҫәл нимә ул, унда нимә тураһында һөйләнелә, ул нимәнән көлә? Мәҫәлдәр шиғырҙарҙан нимәһе менән айырыла?
**2.** «Әхлак», «аллегория» һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ? Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе билдәләмәләр менән сағыштырығыҙ.

## ҺУНАРСЫ ҠАРТ

*(Мамин-Сибиряк буйынса)*

### I

Элекке замандарҙа шул Урал тауҙары тирәһендәрәк бер башҡорт ауылында Бикҡужа исемле һунарсы ҡарт йәшәй торған булған. Уның бөтә ғүмере тип әйтерлек һунарҙа уҙған. Бикҡужа бабайҙың кейәүгә киткән Алтынбикә исемле бер ҡыҙы ла булған. Алтынбикәнең дә Миңлегәрәй исемле берҙән-бер матур улы булған. Бикҡужа бабай – ҡыҙын, ә ҡыҙы үҙенең берҙән-бер улын бик ярата торған булғандар. Берҙән-бер көндө Алтынбикә улы Миңлегәрәйҙе ҡулынан тотоп, йөрөргә сыҡҡан.

Йөрөй торғас, улар урманға кереп киткәндәр икән. Шул ваҡытта уларҙың алдына көтмәгәндә бүреләр килеп

сыҡҡан. Алтынбикә үҙе өсөн бик аптырамаһа ла, улы Миңлегәрәй өсөн шаҡтай ҡурҡҡан. Ләкин ни эшләмәк кәрәк? Йәненән ҡәҙерлерәк булған балаһы өсөн Алтынбикә лә бүреләр менән һуғыша башлаған. Яңғыҙ ҡатын бүре көтөүенә ҡаршы тора аламы һуң? Әлбиттә, юҡ! Алтынбикә лә, бисара, ни саҡлы оҙаҡ көрәшһә лә, ахырҙа бүреләр уны талап бөткәндәр. Йыуан имән тарбағына ултырып өлгөргән Миңлегәрәйҙе олатаһы килеп ҡотҡарып алған. Шул ваҡыттан бирле Миңлегәрәй Бикҡужала тора башлаған.

Бына йәйге аяҙ көндәрҙең береһендә бабай үҙенең ғәҙәте буйынса ҡулына иҫкереп бөткән мылтығын алып, артынан юлдашы Аҡтырнағын эйәртеп, урманға һунарға китергә әҙерләнә. Шул ваҡытта түшәктә ауырып ятҡан Миңлегәрәй урындан һикереп тора ла:

– Олатай, йәнем, нисек булһа ла, миңә бер болан балаһы алып ҡайт. Бик матуры, һарғылты булһын! – тип ҡала.

– Ярар, бәбкәм, ярар! Хоҙай бойорһа, алып ҡайтырмын, – тине лә Бикҡужа бабай үҙ юлына китте.

Бикҡужа бабай урманда бер көн йөрөй, ике көн йөрөй, ләкин һарғылт төҫлө болан балаһын һаман да осрата алмай. Инде ҡарт һунарсы арый башлай, ләкин шулай ҙа буш ҡул менән өйгә ҡайтып китеүенә күңеле риза түгел. Ул: «Сабыр итергә кәрәк. Ҡуйы ағастар араһынан шатыр-шотор итеп болан балаһы сыҡмай булмаç, Хоҙай бойорһа», – тип, һаман йөрөй ҙә йөрөй. Үҙе дүрт күҙ менән тирә-яҡҡа ҡарана. Инде Аҡтырнаҡ та тамам әлһерәп бөттө. Ҡарт һунарсы, йөрөүенән туҡтап, ут яҡты. Аҡтырнаҡты янына саҡырып, улар өсөнсө кисен дә шул урманда үткәрергә булдылар.

Бер заман өйҙән сыҡҡанға дүрт көн булды тигәндә, көтмәгән ерҙә генә ҡарттың үткер күҙҙәренә таныш тояҡ эҙҙәре күренде. Бикҡужа бабай эҙгә ҡарау менән үк эште аңланы... Бынан яңыраҡ ҡына балаһы менән инә болан уҙған, бына был ҙур тояҡ эҙе инәһенеке, ә быныһы балаһыныҡы, тип уйлай һәм, Аҡтырнаҡҡа әйләнеп: «Йә, Аҡтырнаҡ дуç, тырышып ҡара әле!» – тине.

Көн бөркөү. Урмандың асыҡ ерҙәрендә ҡояштың ҡыҙҙырыуына сыҙар хәл юҡ. Һунарсы ҡарт Аҡтырнаҡ артынан көскә аяҡтарын һөйрәп, яңы ғына үҫеп килгән шыршылыҡ араһынан бара ла бара. Аҡтырнаҡ телен һалындырған көйөнсә әле унда, әле бында һуғыла, үләндәрҙе, ағас төптәрен еҫкәй. Бына бер заман ҡарт һунарсының ҡолағына шатыр-шотор иткән тауыш ишетелә башлай… Аҡтырнаҡ тиҙ генә үләнгә ята ла шул килеш үлгән төҫлө ҡата ла ҡала. Ана, инде болан үҙе күренә… Ул үҙе урман ситендәрәк тора, үҙе ҡурҡҡан һымаҡ. Ул һунарсы ҡартҡа туп-тура ҡарай, серәкәйҙәр болот шикелле томалап алғандар ҙа уның өҫтөндә гөж киләләр. Болан борсола, ҡалтыранып-ҡалтыранып ҡуя.

Биҡҡужа бабай боҫоп ҡына йәшеренгән еренән сыға һәм эсенән генә: «Юҡ, туған, һин мине алдай алмаҫһың», – ти.



Болан инде күптән һунарсы барын һиҙенә һәм, бер ҙә ҡурҡмайынса бик тырышып, уның ни эшләгәнен – барын да күҙәтеп тора.

Һунарсы һаман боҫоп ҡына боланға яҡынлашҡандан-яҡынлаша бара, эсенән генә: «Ул мине балаһы янынан алып китергә тырыша», – ти. Үҙе аҡрын ғына мылтығын боланға төҙәй. Шул арала болан тиҙ генә бер нисә сажин самаһы артҡа сигенә лә туҡтай. Бикҡужа боҫоп ҡына уға табан бара башлай, ул мылтығын алып атам тигәндә генә болан тағы сигенә. Шул килеш ҡарт бер нисә сәғәт аҙаплана. Болан һаман уны алдап йөрөтә һәм нисек булһа ла уҫал һунарсыны ғәзиз балаһы йәшеренгән урындан ситкәрәк алып китергә тырыша. Ул үҙенең балаһын шул ҡәҙәре ярата, уның өсөн үҙе һунарсы ҡулында ауыр үлем менән үлергә лә риза була. Тик уның ғәзиз балаһы ғына иҫән ҡалһын! Ләкин ҡайҙа һуң инде уға балаһын иҫән алып ҡалырға! Бикҡужа ҡарт бөгөн генә һунарға сыҡмаған бит! Ул инде үҙ балаһы өсөн үлергә әҙер торған шәфҡәтле боландарға үҙ ғүмерендә бик күп осраған, һәм ул боландар ҙа, уларҙың матур балалары ла – барыһы ла береһе артынан береһе уның ҡулынан теге донъяға китеп бөткәндәр.

Һунарсы ҡарт эсенән генә боланға асыулана. Шуның менән бергә уның был батырлығына, хайуан булып та үҙ балаһын шул ҡәҙәре яҡын күреүенә иҫе китә.

## II

Инде кис яҡынлаша. Бисара хайуан менән һунарсы һаман әле береһен-береһе алдарға тырыша. Аҡтырнаҡ, күләгә төҫлө, ҡарт артынан ҡалмай йөрөй. Бер ваҡыт болан Бикҡужаның күҙенән юғалды. Ләкин арттан килгән Аҡтырнаҡ бабайҙың аяғына төрттө. Ҡарт артына әйләнеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен: өс көндән бирле аҙапланып эҙләп йөрөгән һарғылт төҫлө йәш болан балаһы унан бер нисә аҙымда, ағас аҫтында, тора. Йәш кенә, бер-ике аҙналыҡ ҡына булыр. Бикҡужа бабай уның

нәҙек оҙон аяҡтарына, һөйкөмлө башына, уның нескә генә муйынын һуҙып үҙ алдына ағас япрағын эләктерергә аҙапланыуына бер аҙ ҡарап тора. Бына бер заман һунарсы ҡарт мылтығын рәтләп төҙәй башлай, ләкин уның йөрәге был ваҡыт ни өсөндөр дөп-дөп килә. Бына инде болан балаһын атып тәгәрәтәйем тигәндә генә, ҡарттың күңеленә ҡылт итеп инә болан, уның балаһына булған сикһеҙ мөхәббәте төшә. Шуның артынан уҡ ул үҙенең мәрхүмә ҡыҙын, уның етем ҡалған улын хәтерләй. Ҡарт ирекһеҙ моңһоуланып уйлана башлай. Уйлаған һайын уның күңеле йомшара бара. Инде ул аҡрын ғына мылтығын ергә ҡуя. Ә болан балаһы бер нәмә лә һиҙмәйенсә һаман ары-бире йөрөнә, япраҡтарға һуҙыла һәм, ҡыштырлаған тауыш ишетһә, оҙаҡ текләп ҡарап тора.

Бикҡужа бабай тора ла бик ҡаты һыҙғырып ебәрә. Болан балаһы, йәшен шикелле, ҡыуаҡтар араһына кереп күҙҙән юғала. Ҡарт ул киткән яҡҡа бик оҙаҡ уйланып ҡарап тора һәм үҙе нимәгәлер йылмая. «Әллә-лә-лә, малҡайың! Йылғыр икән, хәйер! Ҡара һин уны, шаянды, уҡ шикелле күҙҙән юҡ булды ла ҡуйҙы», – ти. Үҙе һаман мыйыҡ аҫтынан ғына йылмая.

Икенсе көндө өйгә ҡайтып килеүгә, Миңлегәрәй уны:

– Олатай, мин әйткән булдымы? Болан балаһы алып ҡайта алдыңмы? – тигән һорау менән ҡаршы ала. – Мин инде һине көтә-көтә интегеп бөттөм, – ти. Уға ҡаршы ҡарт йомшаҡ ҡына тауыш менән:

– Юҡ бит, Миңлегәрәй, булманы... Күреүен күрҙем дә...

– Ниндәй ине, олатай, һарғылтмы?

– Эйе, бөтә ере һарғылт, тик ауыҙы менән тояҡтары ғына ҡара ине. Шундай матур инде, күрһәң, иҫең дә, аҡылың да китер!.. Үҙе шулай ағас аҫтында йөрөнә, үҙе ағас япраҡтарын семсенгән була... Мин шулай мылтығымды төҙәнем дә...

– Тейҙерҙеңме һуң?

– Юҡ, Миңлегәрәй, эш тейеүҙә түгел. Мин үҙем атманым: йәш хайуан ҡыҙғаныс тойолдо... Инәһен ҡыҙғандым... Шулай, һыҙғырып тороп ебәргәйнем, кескенә

боланды һин күр ҙә мин күр. Күҙ асып йомғансы юҡ булды... Шулай итеп китте шул.

Һунарсы ҡарт бик оҙаҡ улына үҙенең нисек итеп өс көн рәттән болан балаһы эҙләп йөрөгәнен, үҙе һыҙғырып тороп ебәргәс, уның нисек итеп ҡасҡанын һөйләй-һөйләй, «малҡайыңдан елдәр иҫте!» ти.

Миңлегәрәй уны әллә ниндәй дәрт менән тыңлай һәм ҡарт менән бергә кәйефләнеп көлә. Ул йоҡларға ятҡандан һуң да ҡарттан бер нисә мәртәбә:

– Шулай итеп, күҙҙән юҡ булды, тиң, ә, олатай? – ти.

– Эйе, йәшен төҫлө, тиҙ генә ҡыуаҡтар араһына кереп китте.

– Ә үҙе ниндәй ине? Һарғылт инеме?

– Һарғылт ине, тик ауыҙы менән тояҡтары ғына ҡара...

Миңлегәрәй шул килеш йоҡоға китте һәм төн буйы болан балаһы менән һаташып сыҡты. Ул һарғылт болан балаһының инәһе менән әрәмәлектә рәхәтләнеп үлән ашап йөрөгәнен күргән төҫлө була ине.

Был ваҡыт мейес башында ятҡан Бикҡужа бабай йоҡлағайны инде. Ул да, Миңлегәрәй кеүек, йоҡо аралаш йылмая ине.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хикәйәне уҡығыҙ, планын төҙөгөҙ, һәр бүлеккә исем бирегеҙ һәм йөкмәткеһен һөйләргә әҙерләнегеҙ.
**2.** Әгәр Биккужа бабай болан балаһын атып алып ҡайтһа, быны Миңлегәрәй нисек ҡабул итер ине?
**3.** Болан үҙенең бәләкәс балаһын һаҡлап ҡалыу өсөн нимә эшләй?

### Ижади эш

Хикәйәлә һүрәтләнгән болан балаһының һүрәтен төшөрөгөҙ.



Шәйехзада
# БАБИЧ
(1895–1919)

XX быуат башы һәм Граждандар һуғышы осорондағы башҡорт әҙәбиәтендә иң сағыу балҡығаны Бабич йондоҙо булды. Ул 1895 йылдың 2 (14) ғинуарында элекке Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендәге Әсән ауылында (хәҙерге Дүртөйлө районында) ауыл муллаһы ғаиләһендә тыуған. Ул бала саҡтан уҡ бик зирәк, уҡыуға әүәҫ була. Шуға күрәлер ҙә инде, уның тәүге шиғырҙарының береһе «Эй, китап» тип атала.

Үҫмер сағында «Зарланыу», «Моңланыу», «Аптыраған минуттарҙа», «Ҡараңғылыҡта» шиғырҙарын яҙа.

Ауыл мәҙрәсәһендә уҡып йөрөгәндә, ул 1910 йылдың йәйендә Ҡаҙағстан яҡтарына барып, Дүсәнбай ауылында балалар уҡыта. 1911 йылдың көҙөндә Өфөләге «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. 1916 йылда «Ғәлиә» мәҙрәсәһен тамамлай. Был ваҡытта инде ул танылған шағирҙарҙың береһе булып китә. Тап ошо йылдарҙа ҙур күләмле «Ҡандала», «Ғазазил» поэмаларын ижад итә. Эпиграммалар яҙа башлай, һәм Ҡазанда 1922 йылда ошо йыйынтығы баҫылып сыға.

1917 йылда башҡорттарҙың азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәтенең эшен ҙур ихласлыҡ менән ҡаршылай һәм ошо йылдарҙы «Башҡортостан йәшәһен!», «Башҡорт күрһен сараһын» тигән шиғырҙары менән хуплай. 1917 йылда Ырымбурҙа «Йәш Башҡортостан. Зәңгәр йырҙар» китабы донъя күрә. Уның «Башҡортостан», «Олуғ шатлыҡ», «Ҡурайҡайға», «Салауат батыр», «Ҡаһарман Әмир Ҡарамышев» һәм башҡа шиғырҙарында Башҡортостан азатлығы өсөн көрәштең изгелеген иҫбатлап, батырҙарға дан йырлана. Бабичтың һуңғы әҫәренең береһе – «Большевиктар менән килешеү айҡанлы башҡорт халҡына көйлө хитап» булды.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, 1919 йылдың 29 мартында ҡыҙылдар ҡулынан фажиғәле һәләк була.

Шәйехзада Бабичтың шиғриәте башҡорт поэзияһының мәңге һүнмәҫ йондоҙона әйләнде.

## САЛАУАТ БАТЫР

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел ҡамсат бүрке башында…

*Халыҡ йырынан*

Салауат ҡандай бәһлеүән?
Салауат ҡандай бәһлеүән?
Даусан, яусан бәһлеүән;
Еңелмәүсән бәһлеүән.

Салауат – тиңһеҙ арыҫлан.
Салауат – тиңһеҙ арыҫлан.
Арыҫландай алышҡан,
Уғы алған алыҫтан.

Салауат – Урал балаһы,
Салауат – йөрәк ҡәғбәһе[1],
Ерҙә әнүәр[2] кәүҙәһе,
Күктә зәңгәр шәүләһе.

Салауат дауҙы ҡайтарған,
Салауат яуҙы айҡаған.
Ҡылысы тауҙы аҡтарған,
Тауышынан күл сайҡалған.

Салауат – йәнле шәжәғәт[3],
Салауат мәңге сәләмәт,
Ҡаны беҙгә аманат,
Килтермәбеҙ яманат!

---

[1] *Ҡәғбә* – Мәккә ҡалаһындағы мәсеттә табыныу ташы.
[2] *Әнүәр* – нурлы.
[3] *Шәжәғәт* – батырлыҡ.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир Салауатты нисек итеп һүрәтләй? Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп бирегеҙ.
**2.** Шағир Салауатты ниндәй әкиәт батыры менән сағыштыра?
**3.** Ш. Бабич Салауат батырҙы асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн ниндәй әкиәт алымын ҡуллана?
**4.** «Салауат мәңге сәләмәт, ҡаны беҙгә аманат, килтермәбеҙ яманат!» тигән юлдарҙың мәғәнәһен аңлатығыҙ.
**5.** Ш. Бабич Салауаттың образын һүрәтләү өсөн ниндәй эпитеттар, метафоралар ҡулланған?

### Хәтергә төшөрәбеҙ

Салауат Юлаев хаҡында алдағы кластарҙа уҡыған әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

### Фонохрестоматия

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## ЗӘКИ – БАШҠОРТОСТАН ТЕРӘГЕ*

Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ әйтәм,
Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң,
Зәки һеҙҙе һатҡан тигән һүҙгә
Ышанмаҫһың, алйот булмаһаң…

Уйыңа ла алма, башҡорт булһаң,
Әхмәтзәки беҙҙе һатыр тип!
Ҡөрьән үбеп Зәки ғәһед иткән,
Уйлай күрмә антын тапар тип.

Башҡорттағы намыҫ, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки – Башҡортостан терәге.

---

* «Большевиктар менән килешеү айҡанлы башҡорт халҡына көйлө хитап» әҫәренән өҙөк.

Башын һалып Зәки эшкә кергән
Йәтим Башҡортостан бәхетенә,
Валлаһи, ул һатмаҫ Тыуған илен
Донъя аҡсаһына, тәхетенә...

Ышан, ышанғандай бер Аллаға:
Зәки – һинең тоғро уғылың!
Утҡа бешер Зәки, һыуға төшөр,
Әммә һатмаҫ намыҫ – күңелен!

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ.

### Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ

**1.** Шиғыр кемгә бағышлап яҙылған?
**2.** «Зәки – Башҡортостан терәге» тигәндә нисек аңлайһығыҙ? Шул турала һөйләгеҙ.
**3.** Ш. Бабич үҙенең был шиғырын ниндәй маҡсат менән яҙған тип уйлайһығыҙ?
**4.** Шағир Зәкиҙе ни өсөн шулай ҡурсалай тип уйлайһығыҙ?

## ҠУРАЙҠАЙҒА

Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.

Һөйлә Һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сахраларҙы,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын.

Һөйлә йәйләүҙәрҙә йәйҙе йәйләп,
Ҡырҙан ҡырға күсеп ҡуныуҙы;
Һөйлә ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп,
Ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы.

Һөйлә елберләгән таллыҡтарҙы
Сылтырап аҡҡан шишмә буйында;
Һөйлә күбәләктәр, бал ҡорттарҙы
Уйнап осҡан сәскә ҡуйынында.

Һөйлә тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар хәлдәренән,
Йөрөш, торош, заңын, йолаһын…

Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;
Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән!..

Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә яңраһын!
Ҡыуанып китһен урман, сахра, туғай,
Буҙтурғайҙар ҡыуанып һайраһын!..

Күкрәтеп, геүләп, һайрап, өҙләп
Килде, ҡурай, уйнар миҙгелең,
Яҡты уйҙар һалып, дәртен ҡуҙғап,
Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгерен!

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ.

**Уҡыған буйынса фекер алышабыҙ**

**1.** Шағир ҡурайға иркәләп, наҙлап нимә тип өндәшә? Ни өсөн шулай мөрәжәғәт итә тип уйлайһығыҙ?
**2.** Ш. Бабич ҡурайға өндәшеүен шартлы рәүештә ике өлөшкә бүлә, шулар тураһында һөйләгеҙ һәм уҡып күрһәтегеҙ.
**3.** Шиғырҙа ҡулланылған һүрәтләү сараларын табығыҙ һәм исемдәрен әйтегеҙ.
**4.** Шиғырҙың музыкаль яңғырашына ирешеү өсөн автор ниндәй алым ҡулланған?
**5.** Шиғырҙа халыҡ ижадының ниндәй жанрҙары йоғонтоһо бар?
**6.** Ҡурай тураһында элек үткәндәрҙе иҫкә төшөрөгөҙ һәм уның башҡорт халҡы тормошондағы роле хаҡында һөйләп бирегеҙ.
**7.** Һуңғы ике строфала ниндәй заман килеүе хаҡында әйтелә? Был замандың йырҙары, һеҙҙеңсә, ниндәй булырға тейеш?

**Ижади эш**

Кәрәкле материал туплап, ҡурайға арналған кисә үткәрегеҙ.

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## КӨТӘМ

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын,
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.

Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры – гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем – гүрестан.

Гүрестандай ғәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.

Янып-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә – белмәйем,
«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.

Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына…

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

### Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡып сығығыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Шағир ниңә үҙенең был шиғырын «Көтәм» тип атаған?
**2.** Ш. Бабичтың нимә көткәнен әйтә алаһығыҙмы? Шул юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.

### *Шәйехзада Бабич шиғырҙары тураһында*

Шәйехзада Бабич Февраль революцияһын ҙур өмөттәр менән ҡаршы ала. Был революция осоронда ул Троицк ҡалаһында уҡытыусы булып эшләй. Петербургта батшаның төшөрөлөүе, эшселәрҙең еңеп сығыуы хәбәрен ишеткәс тә, Бабич Троицкиҙа сыға торған «Хөр милләт» газетаһында «Йәшәһен эшселәр!», «Хөрриәт бүләге» тигән шиғырҙарын баҫтыра. Бында ул революцион эшселәрҙе еңеү менән ҡотлай, ирек, хоҡуҡ өсөн тағы ҡыйыуыраҡ көрәшкә саҡыра.

«Салауат батыр», «Ҡурайҡайға» шиғырҙары Граждандар һуғышы осоронда яҙылған. Шағир бында Салауат Юлаевты ирек өсөн көрәшкән иң атаҡлы халыҡ батыры итеп һынландыра. Шиғыр Салауат хаҡындағы башҡорт халыҡ йырҙары рухында яҙылған. Уға халыҡ йырының «Салауат нисә йәшендә? Йәшел ҡамсат бүрке башында» тигән юлдары эпиграф итеп килтерелгән.

«Ҡурайҡайға» шиғырында иһә башҡорт халҡының тарихы һәм рухи донъяһы ҡурай, унан сыҡҡан моңдар ярҙамында күҙ алдына баҫтырыла. Ҡурай «үткән ҡайғыларҙы, ҡайнар тойғоларҙы, шатлыҡтарҙы» йырлар моң шишмәһен хәтерләтә. Был шиғырҙа ла башҡорт халҡының ҡурай тураһындағы йырҙарындағы мотивтар, моңдар ишетелеп тора.

Шулай уҡ Ш. Бабич 1917 йылда «Тәмҫил киҫәге», «Байҙарға», «Буржуй», «Мөртәт социалистарға», «Әй, большевик!» кеүек шиғырҙарын яҙа. Был әҫәрҙәрҙең идея-тематик уртаҡлығы – батша төшөрөлөү айҡанлы ҙур шатлыҡты белдереү, халыҡтың азатлығына дан йырлау, көрәшкә әйҙәү.

Бабичтың «Йәшәһен эшселәр!» шиғырын башҡорт һәм татар йәштәре бер марш көйөнә демонстрацияларҙа йырлайҙар. Был шиғырының төп фекере уның исемендә үк бирелгән. Әҫәр йәмғиәттең көслө, әммә иҙелгән синыфтарының береһе – эшселәргә өндәү формаһында яҙылған һәм интонацион яңғырашы менән маршты хәтерләтә. Шағир эшселәрҙе берләшеүгә саҡыра. Был фекер һәр строфала тип әйтерлек ҡабатлана.



# Дауыт
# ЮЛТЫЙ
## (1893–1938)

Дауыт Юлтый – башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы әҙиптәрҙең береһе. Уның тормош юлы, йәмғәтселек эштәре һәм ижады башҡорт милли мәҙәниәтенең сағыу биттәрен тәшкил итәләр.

Дауыт Ишембай улы Юлтыев 1893 йылдың 6 (18) апрелендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосына ҡараған Юлтый ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде тәүҙә атаһынан, артабан ауылдарында яңы асылған мәҙрәсәлә ала. Йәй көндәре ҡаҙаҡ далаларында балалар уҡыта, һуңынан тыуған ауылында мөғәллим булып эшләй.

1909–1913 йылдарҙа Д. Юлтый тәү башлап үҙенең ҡәләмен һынап ҡарай. Уны халыҡтың ауыр тормошо, иҙелеп йәшәүе борсой. Ләкин ул иҙелгән халыҡтың киләсәгенә өмөт менән ҡарай. Ошо дәүерҙә ул «Үрләрем», «Әйтмәһендәр», «Ҡәләмгә», «Аҙашҡанда» һәм башҡа шиғырҙарын яҙа.

Беренсе бөтә донъя һуғышы башланыу менән, Д. Юлтый ҙа хеҙмәткә алына. Өс йылға һуҙылған һуғыш мәлендә иҫ киткес ҡәһәрле мәшәҡәттәр менән осраша. Ошо һуғышта үҙен һаҡлап йөрөткән «Шинель» шиғырын, артабан империалистик һуғышҡа ҡаршы протест белдереп, «Сумка», «Ҡан баҙары» шиғырҙарын ижад итә.

Февраль революцияһын ул хуплап ҡаршы ала. Октябрь революцияһынан һуң Д. Юлтый Украинала, Петроград фронттарында һуғыша. 1918 йылда Туҡсоранға совет власын урынлаштырыу эшенә ебәреләә. 1919 йылдың мартынан «Ҡыҙыл йондоҙ» исемле хәрби газетаның мөхәррире итеп билдәләнә. «Ирек тауышы», «Атлан, батыр!» шиғырҙары революцияның дошмандарына ҡаршы көрәшкә саҡырыу пафосы булып яңғырай.

1920–1921 йылдарҙа Д. Юлтый Бәләкәй Башҡортостандың баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта төрлө йәмғәтселек эштәрен башҡара.

«Ҡыҙыл батыр» тигән хәрби гәзиттең редакторы булып эшләй. 1921 йылда Стәрлетамаҡта уның «Урал моңдары» исемле тәүге китабы баҫылып сыға.

Егерменсе йылдарҙа Д. Юлтый «Һуҡа бабай, ситкә кит, трактор килә» шиғыры менән иҫкелекте бөтөрөү идеяһын күтәреп сыға.

Утыҙынсы йылдарҙа «Мәйсәрә», «Нефть тураһында әкиәт», «Айһылыу» лиро-эпик поэмаларын ижад итә.

Башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусыларҙың да береһе ул булды. Уның «Ҡарағол» трагедияһы тарихи теманы күтәрһә, «Ҡолансәс», «Тирмәндә» пьесаларында яңы заман темаһы яҡтыртылды.

Д. Юлтыйҙың проза өлкәһендәге тәжрибәләре революцияға тиклем үк башланһа ла, «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһе тәүге өлгөрөп еткән әҫәре булды. Социаль-философик проблемаларҙы күтәреүсе «Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе – уңышлы әҫәрҙәренең береһе. Артабан «Хәлкәй артист», «Өмөт» хикәйәләрен ижад итә.

Шулай уҡ 30-сы йылдарҙа заман темаһына арналған ҙур эпик әҫәре «Ҡан» романы булды. 1933 йылда романдың тәүге китабы, 1936 йылда икенсе китабы яҙылып бөтә, өсөнсө китабы репрессиялар башланыу арҡаһында яҙылмай ҡала. «Ҡан» романы башҡорт әҙәбиәтендә роман жанры формалашыуҙа билдәле роль уйнаны.

Д. Юлтый 1938 йылда шәхес культы осоро репрессияһына эләгеп һәләк була.

## ТИМЕРКӘЙ ФӘЛСӘФӘҺЕ

### I

Был киң туғай минең үҙ йортом кеүек булып китте инде.

Яҙ булып, ерҙе үлән ҡаплау менән, минең һәр кисем бында үтә. Уның үләндәре, сәскәләре араһында аунайым, тулайым. Унан һуң йәшел үлән өҫтөнә ятып, төрлө уйҙарға сумам. Унан һуң инде йоҡоға китәм...

Бына мин бөгөн дә бында.

Нисәнсе тапҡыр килеүем икән?

Үҙем дә белмәйем. Бөгөнгө һауа бүтән көндәргә ҡарағанда ла күңеллерәк. Йондоҙҙар бер-береһенән көнләшкән кеүек йымылдашып яналар. Миңә ҡарап күҙ ҡыҫҡандай булалар. Шуларға ҡараһам, ҡылт итеп күрше ҡыҙы Гөлбикә иҫкә төшә. Анау көндө ул мине аулаҡ өйгә

ҡурай тартырға саҡырғайны. Шунда мин уның күҙҙәренә ҡарап торҙом да ошо йондоҙҙарға оҡшаттым. Ләкин был йондоҙҙар, уның күҙҙәре кеүек, йөрәккә үтмәйҙәр, тик уны иҫкә генә төшөрәләр. Ә Гөлбикәнең күҙ ҡараштары инде минең бөтә тәнемә ут йүгертеп ебәрә.

Ана, Нора тауы артынан ай ҙа ҡалҡа... Кисә әҙ генә иртәрәк ҡалҡҡайны һәм өҙөк-өҙөк болоттар араһында ине. Бөгөн ап-асыҡ булып түңәрәкләнеп ҡалҡа ул. Күк йөҙөндә уның йөҙөн ҡапларлыҡ бер генә болот киҫәге лә күренмәй... Өҫтәре ысыҡ менән ҡапланған үләндәр, арыш башаҡтары аҡһыл ай нурында ынйы төҫлө ялтырап киттеләр. Бейек тау биттәре шыйыҡ аҡһыл томандар аша серле көмбәҙ кеүек ялтырап күренделәр, тағы ла бейегәйгән төҫлө булдылар.

Донъяла ниндәй хикмәттәр юҡ. Ҡарап торһаң, иҫеңаҡылың китерлек. Ошо донъяны «Алла яралтҡан» тиҙәр. Әле уның был ғына түгел, теге донъяһы – ахирәте лә бар, тиҙәр.

Унда ожмах менән тамуғы ла бар, тиҙәр. Үҙен бик шәфҡәтле, бөтә гонаһтарҙы кисерә, тиҙәр. Улай булғас, кешене аҙаплар өсөн, ниңә тамуҡ яралтты икән ул?

Шул тамуҡ тигәндәре иҫкә төшһә, бай ағай күҙ алдына килә. Бай ағай ҡайһы ваҡытта мине тиктомалға туҡмаған саҡта, тамуҡты яралтҡан Алла бай ағай шикелле булып күҙ алдына килеп баҫа.

Ысынлап та, әгәр ҙә мин Алла булһам, бигерәк тә шәфҡәтле булыр инем. Бөтә кешеләрҙе бер тигеҙ бай яһар инем. Зерәгә кешеләрҙе тамуҡта яндырмаҫ инем. Ысынлап та, ниңә кешеләрҙе яфаларға, аҙапларға инде?

Бына мин үҙем дә шул бәхетһеҙҙәрҙең береһе. Мин етем. Мин хеҙмәтсе, мин ҡол. Алла ҡоло ла түгел, бәндә ҡоло!

Иртәнән кискә тиклем байға эшләйем. Эҫе ҡояш аҫтында бөтә тәндәрем әсе тиргә ҡойона.

Кис булғас, ат менән ҡунырға киләм. Төндәр буйы ат көтөп сығам. Таң беленеү менән тағы өйгә, тағы эшкә, тағы тиргәшкә!

Минең көндәрем шулай үтәләр!

Минең бөтә тыныслығым ошонда ғына.

Бында теләгәнсә иркен һулыш алам, бында теләгәнсә уйлана алам. Бында мин тамам ирекле, һис кем миңә тығыҙлыҡ яһамай.

Аһ, өйгә ҡайтһаң инде... Елкә тырнарға ла ваҡыт юҡ! Эш, эш!.. Шуның менән дә байға ярап булмай әле. Берәй нәмәкәй генә тура килмәһә, зерә юҡҡа минең өҫкә аҡырынырға тотона. Имеш, бөтә гонаһ миндә генә. Мин бит ни ҡушһа, шуны эшләйем. Барыһын да эшләйем, ул тиклем донъя аҡтарырлыҡ ниндәй гонаһым бар һуң минең? Әҙ генә яуаплашһаң, унда инде ҡиәмәт ҡуба башлай.

– Табаныңды ялтырат! – тип кенә ебәрә.

Бына шул мәлдә теге тамуҡты яралтҡан Алла ҡылт итеп иҫкә килеп төшә.

Ул, тим, асыулы кешеләренә тамуҡ яралтҡас, тим, беҙҙең бай шикелле берәй ныҡ асыуы килгән сағында нисек донъяны емереп ташламай икән, тим.

Шуға күрә лә туғайҙағы тынис кистәрҙе дүрт күҙ менән көтөп алам мин. Уның һауаһы, тынлығы, матурлығы, йомшаҡ үләндәре миңә рәхәтлек бирә. Йәйҙең матур, ҡояшлы көндәре ни тиклем матур булһа ла, үҙем уның рәхәтен күрә алмағас, яратмайым мин уны.

Ҡояш сыҡҡас та, миңә әлеге тамуҡ ғазабы башлана...

Ҡояш тау артына батып, ер өҫтөнә ай шары ҡалҡыу менән, үҙемде бәхетле һанайым мин. Был да бит ваҡытлы ғына. Уның йәйе үтә лә китә, уның бит әле ҡышы бар!

Их, ҡыш, ҡыш!.. Ҡыш түгел, тамуҡ ул!

Унда инде бындай рәхәтлектәр булмай. Көнө лә, төнө лә, таңы ла эш менән үтә. Үҙемдең шул тиклем бәхетһеҙ булыуыма аптырайым мин!

Алланы шәфҡәтле тиҙәр, етемдәргә шәфҡәт итә, тиҙәр. Үҙе лә шулай итергә ҡушҡан, тиҙәр. Етем-еҫерҙәрҙең теләктәрен ҡабул итә, имеш, тиҙәр.

Мин илай-илай бәхет һораным, көндәр һораным, төндәр һораным. Бай ағай өй эсе менән «ҡәҙер» кисәләрендә намаҙ уҡығанда, теләк теләгәндә, мин дә теләнем. Ләкин минең теләктәремдең береһе лә ҡабул булманы. Минең һорағандарымдың береһен дә бирмәне.

Донъяла күп кешеләр йәшәйҙәр, бәхетте Алла бирә, тиҙәр. Ә үҙҙәре көн-төн эшләйҙәр. Байҙары кешеләр яллап эшләтәләр, шуның менән байыйҙар. Әгәр ҙә эшләмәй йәки эшләтмәй торһалар, бер нәмә лә булмай. Сәсмәйенсә ашлыҡ та үҫмәй, сапмайынса бесән дә булмай. Шуларҙың береһен дә эшләмәһәң, береһе лә булмаймы ни, нисек һуң «Алла бирә» тиҙәр икән?

Тимеркәй һәр ваҡыт шундай уйҙар менән баш вата ине. Көндөҙөн эше араһында ла, кистәрен туғайға ат ҡарауылларға ҡуна барғанда ла шуларҙы уйлай ине.

Бөгөн дә ул туғайҙа йәшел үләндәр араһында яңғыҙы ятҡан саҡта ошо уйҙарға күмелде. Күп уйҙарын, кешегә һөйләгән кеүек, ҡысҡырып һөйләне. Айға, йондоҙҙарға, алыҫта күренеп торған бейек тауҙарға ҡарап һөйләне. Уйлаған уйҙарының осона сыға алмаған, үҙенең биргән һорауҙарына яуап таба алмаған:

– Юҡтыр ҙа ул! – тип ҡуйҙы. Ләкин ул һүҙҙәрҙе ҡырҡа әйтә алманы, күңеленең әллә ниндәй генә бер мөйөшөндә шик ҡалды. – Кешеләр, бар, тиҙәр бит, – тип өҫтәп ҡуйҙы.

Уйҙары сыуалды, башы эшләмәй башланы. Алыҫтан, әллә ҡайҙан бер тауыш ишетелгән кеүек булды. Ҡолаҡтарын ҡуйып тыңлай башланы. Ләкин ул тауыш ҡабатланманы. Ҡалын урманға инеп юғалғандай булды. Алыҫ та түгел үҙенең ҡунырға алып килгән аттары, ауыҙҙарын тултырып, йәшел ысыҡлы үләндәрҙе көйшәйҙәр ине.

Бына ерән айғыр, башын юғары күтәреп, ҡолаҡтарын торғоҙҙо ла дәртле итеп бер кешнәп ебәрҙе. Уның көмөш тауышы тулҡынланып туғайға йәйелде. Урман, һыу буйҙарына таралды. Уның яңғырағы ярҙарға ҡағылып, алыҫта тағы бер-ике ерән айғыр кешнәгән кеүек булды. Бер-ике секундтан һуң был тауыштар урманға инеп йотолдолар.

Тимеркәй тағы башын ҡалҡытып был тауышты тыңлап торҙо.

Тау артынан ҡыҙарып йәйге таң атып килә ине.

## II

Тимеркәй ата-әсәһенән бик йәшләй генә етем ҡалды.

Ул әсәһен яҡшылап хәтерләмәй ҙә. Сөнки ул әсәһе үлгән саҡта ике йәш ярымдар самаһында ғына ине. Әсәһе үлгәс, Сәми ҡарттың бер яҡын ҡәрендәше Ҡаңышбикә әбей Тимеркәйҙе үҙ тәрбиәһенә алғайны. Сәми ҡарт – үҙ ғүмере буйынса Никлудин баярында урман ҡарауылсыһы булып торған кеше. Ул ауылға йылына ике – ғәйеткә йәки берәй кәрәкле йомошо булһа ғына ҡайта.

Шуның өсөн дә уны «Урман Сәми» тип йөрөтәләр. Уның тураһында халыҡ телендә әллә ниндәй легендалар бар. Уға урман ене эйәләшкән икән дә, шуның менән тора икән, тип тә һөйләйҙәр. Бисәһен дә урман ене быуып үлтергән, тип һөйләй торғайнылар. Ул ауылға ҡайтҡандың артынан берәй кеше ауырып китһә:

– Моғайын, Сәми ене ҡағылғандыр әле, – тип шомланалар.

Балалар илаһа:

– Ана, Сәми килә! – тип ҡурҡыталар.

Сәми ҡарт халыҡ йөрәгенә үҙенең шул ҡурҡынысллы яғы менән инеп ултырғайны. Һәр кем уның тураһында ҡурҡыныс һүҙҙәр һөйләй. Һәр кем шомлана ине.

Ҡаңышбикә әбей үлеп киткәс, Сәми ҡарт улы Тимеркәйҙе үҙ янына алды. Шунан һуң Тимеркәй туғыҙ йәшенә тиклем атаһы янында, урман араһында, ҡалды.

Ҡаңышбикә апаһы үлеп, Тимеркәй үҙ тәрбиәһенә ҡалғас, улыма иптәш булыр тип, өйләнергә уйланы. Бер-ике тол ҡатынға яусы ебәреп маташты. Уның тураһында халыҡ телендә йөрөгән ҡурҡыныс әкиәттәргә ҡарап булһа кәрәк, теге ҡатындар риза булманылар. Шунан һуң ул был мәсьәләне икенсе тапҡыр ҡуҙғатманы. Ҡулын һелтәне лә ҡуйҙы. Үҙенең яҙмышына баш эйеп, ул Тимеркәй менән икәү торорға ҡарар бирҙе.

Сәми ҡарттың землянкаһы Ағиҙел ярының эргәһендә генә. Ул уны үҙ ҡулы менән һалған, уның бөтә кәрәк-яраҡтары шунда, сөнки йомошҡа барырға күршеһе юҡ уның. Үҙе бешерә, үҙе әҙерләй. Ҡашығын да үҙе яһаған,

туҫтаҡ, табағын да үҙе эшләгән. Балта, көрәк кеүек нәмәнән башҡаһын береһен дә баҙарҙан һатып алмаған ул.

Шунда уҡ яр ситендә кәмәһе тора. Ҡармаҡ, мурҙалары, ауҙары ла шунда. Уның бүреләрҙән һаҡланыу өсөн яһаған ҡоралы ла үҙенеке. Бер оҙон имәнгә кейҙереп, тимер һөңгө кеүек нәмә лә эшләп алған. Ул урманға барһа йәки төнгә ҡалһа, шуның менән йөрөй. Урмандағы айыуҙарҙың барыһы ла уға таныш. Сәми ҡарт инде уларҙың барыһына ла исем ҡушып бөткән. Уның нисә балаһы бар икәнен, уларҙың нисә йәштә икәнен – барыһын да күңеленә теркәп бара. Ул инде уларҙың иҫәбен яңылышмай. Ләкин ул бүреләр менән дуҫ түгел. Уларҙы бер ваҡытта ла үҙ бойороғона күндерә алғаны юҡ. Хатта бер нисә тапҡыр бүре ҡазаһына осрай яҙып ҡалғаны ла бар. Теге һөңгөнө ул ана шул бүреләр өсөн яһап алғайны.

Тимеркәй ана шул бүреле-айыулы урманда үҫте. Атаһы күп ваҡыт землянкала булмай: утарға аҙыҡ алырға, йә урманды әйләнеп сығырға, йә балыҡ тоторға китә. Балыҡҡа барғанда Тимеркәй атаһынан ҡалмаһа ла, күберәк ваҡыт Тимеркәйгә землянкала ҡалырға, ғүмерен яңғыҙ үткәрергә тура килә ине.

Тимеркәй йәй көнө землянкала ултырмай, көнө буйы яланғас көйө Иҙел буйында, ҡыҙыу ҡом өҫтөндә аунай. Уйнап туйһа, тау башына менеп, матур таштар йыйып йөрөй йәки, бейек ағас баштарына менеп, ҡош оялары ҡарай. Атаһы ҡайтҡан саҡта, күп ваҡыт өйҙә булмай торғайны. Сәми ҡарт һөрән һалып уны ҡайтара ине. Тимеркәйҙең көндәре шулай үтә ине.

## III

Бәхет бер киргә китһә китә бит ул.

Холера йылы ине. Сәми ҡарт үҙенең тотҡан балыҡтарын йөкмәп баҙарға китте. Донъя бит ул. Аҡсаһыҙ тороп булмай. Тимеркәйгә күлдәк-ыштан кәрәк. Ҡышҡа табан аяғына, өҫтө-башына ла кәрәк була. Үҙенең эре, үтемле балыҡтарын йөкмәп, ике аҙнаға бер тапҡыр 15 саҡрым-

дағы баҙарға барып, ваҡ-төйәк нәмәләр алып ҡайтҡылай торғайны. Бөгөн дә шул уй менән баҙарға барырға сыҡты.

Көн эҫе. Исмаһам, әҙ генә еле лә юҡ. Бөгөнгө көндө үҙ кәүҙәңде йөрөтөргә лә күп хәл кәрәк. Ә Сәми ҡарт, ике ботлап балыҡ йөкмәп, ҡомло юлдан бара. Ул иртәнге һалҡын менән сыҡһа ла, көндөң ҡыҙыуына ҡалды. Баҙарға килеп еткәндә, уның эсендә йәһәннәм ҡайнай ине. Ул шул тиклем көйгәйне, уға бер күл һыуы ла әҙ булыр төҫлө ине. Ул баҙарға инмәне, ҡойоно күреп, уға тура килде. Балығын ергә ҡуйҙы ла йәһәт кенә биҙрәне төпкә төшөрҙө. Һалҡын һыу менән битен, ҡулын әҙ генә сайҡаны ла ҡомһоҙланып эсә башланы. Эскәс, еңеләйгән төҫлө булды. Баҙарға сығып, бик еңел ҡулдан ғына балығын һатып өлгөрҙө.

Баҙарҙан әйләнеп юлға сыҡҡанда, уның тәне ауырайҙы. Эсендә ҡара йылан әйләнгән шикелле булды. Ҡояш юғарынан ныҡ ҡыҙҙырһа ла, уның тәненән, арҡа буйынан ваҡыт-ваҡыт һалҡын йүгереп китте.

– Ай-һай, шул түгелме икән? – тине. Сөнки баҙарҙа холера менән ауырып киткән, арбаларында ҡоҫоп ятҡан кешеләрҙе үҙ күҙе менән күргәйне. Уның йөрәге өшөнө, йәһәтерәк ҡайтып етергә теләне. Ләкин аяҡтар уның теләгенсә йөрөмәйҙәр ине.

Тимеркәй уны әллә ни тиклем ер йүгереп килеп ҡаршыланы. Атаһын күрҙе лә:

– Ни эшләп улай күҙҙәрең эскә батып киткән? – тип һораны.

Сәми ҡарт:

– Бик эҫе бит, арығанмындыр, – тине.

Землянкаһына инеп, нәмәләрен ҡуйырға өлгөрмәне, эсен тотоп һикегә йығылды. Ҡоҫа башланы. Эсендә ут йүгерә ине. Тимеркәй Иҙелдән һаман һыу ташып торҙо. Төн урталарында ҡарт иҫенән яҙҙы. Үҙен үҙе төрлө яҡҡа ата башланы.

Таңға табан аяҡтары һыуынды, тырнаҡ остары ҡарайҙы. Танауы эскә батып керҙе. Эскә батҡан күҙҙәрен ҡаймаҡ төҫлө шекәрә баҫты, ауыҙынан әллә ниндәй һыуҙар аға башланы. Инде ул хәҙер дуламай. Уның тик күкрәге аҙ-аҙ ҡалҡып китә ине.

Тимеркәй:

– Хәҙер тынысланды, йоҡоға китте, иртәгә, бәлки, терелер, – тип уйланы. Яҡында ғына урман эсендә олоған бүреләрҙең шомло тауыштарын тыңлап йоҡоға китте.

## IV

Сәми ҡарт, үлгәс, өс көн буйына землянкаһында ятты. Һис бер килеүсе булманы. Дүртенсе көн утарҙан өс хеҙмәтсе килеп, тау битендә бер ҡәбер ҡаҙынылар ҙа, кейемдәренә төрөп, шунда күмделәр. Йыназа уҡыу, кәфенләү, саҙаҡа биреү кеүек дини мөрасимдарҙың береһе лә уның ҡәбере өҫтөндә үтәлмәне. Күмеп бөткәс, бер таҙа имән ҡаҙыҡты башының осона билдә итеп ҡаҡтылар ҙа, эҫе көндә тирләп-бешеп бөткән эшселәр хәл йыйырға ултырҙылар. Бик тәмләп кенә тәмәке төрөп тарттылар. Тимеркәй, быларҙың барыһына ла шаһит булып, ауыҙына бармағын тығып, ситтән генә ҡарап торҙо.

Эшселәр:

– Их, малай, атаһыҙ ҡалдың бит инде, хәҙер кемең бар? – тинеләр.

Ул быларға яуап ҡайтарманы. Уларҙың күҙҙәренә туп-тура ҡараны ла башын түбән эйҙе. Ул тәүге көндө илаһа ла, бөгөн иламаны. Ул алдағы көндә нисек буласағын да уйламай. Уларҙы уның башы һыйҙырмай ине әле.

Кискә табан ул эшселәргә эйәреп утарға китте.

Ауылда Сәми ҡарттың нисек үлеп, нисек күмелеүе тураһында төрлө хәбәрҙәр йөрөнө.

– Ул үлгәс, уны ендәр йыназа уҡып күмгән икән, – тип тә һөйләнеләр.

Ҡайһы берҙәре:

– Ул убырлы булған икән, вабаның[1] башы ла шунан булған икән. Уның тағы ла берәй шауҡымы булыр, ҡәберен асып, уны ҡаҙыҡ менән ҡаҙаҡларға кәрәк, – тип һөйләнделәр. Ҡайһы бер кешеләр уның ҡәберендә убыр осоп

---

[1] *Ваба* – холера.

йөрөгәнен дә күреп ҡайттылар. Ул үлгәс, уның тураһында ауылда тағы ла ҡурҡыныслы хәбәрҙәр күбәйҙе. Һәр бер ҡаза, мал үлеү тураһында унан шомлана башланылар.

– Сәми шауҡымы ҡағылғандыр әле, – тиҙәр ине.

## V

Ҡотлояр – ауылдың иң бай әҙәме.

Уны «Һаран Ҡотлояр» тип тә, «Урыҫ Ҡотлояр» тип тә йөрөтәләр. Ул йәш сағында бик ярлы булған, ҡайҙалыр бер баярҙа хеҙмәт иткән, шунан һуң ауылға ҡайтып йорт ҡорған да бик ҡапыл байып киткән.

Ҡотлоярҙың байыуын халыҡ былай һөйләй:

– Ул баяр яланынан бик күп хазина тапҡан икән дә баяр менән уртаҡлашҡан икән. Шуның менән баяры ла, үҙе лә байып киткән икән, – тиҙәр.

Ҡайһы берәүҙәре:

– Үҙенең баярына килгән ҡунаҡ баярының иҫерек ваҡытында аҡсаһын ҡулға төшөргән дә байыған икән, – тиҙәр. Уны төрлө кеше төрлөсә һөйләй. Ләкин ул нисек кенә булһа ла байыған. «Ҡотлояр бай» тигән исемде күтәргән, тирә-яҡҡа байлығы менән уның даны таралған.

Ул үҙе кеше менән бик аҙ ҡатыша, йәй булһа, бөтә ғүмерен яланда үткәрә, ҡыш булһа инде, кәртәһенән кермәй. Шундағы ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнеп ваҡытын үткәрә. Кеше барһа, йомош бирмәй, үҙе лә кешегә йомош һорап сыҡмай.

Уның өйөндә йылына ике генә мәжлес була. Ураҙала бөтә тирә-яғын саҡырып, бер ифтар[1] яһай, Ҡорбан байрамында бер нисә ҡорбан салып, бөтә ауылды тиерлек ҡунаҡ итә. Бына шунан башҡа ваҡыттарҙа инде уның ҡапҡаһы ябыҡ була. Ҡапҡаһынан хәйерсе-фәләнде генә түгел, күршенең этен дә индермәй, – шуға күрә уны «Һаран Ҡотлояр» тип йөрөтәләр.

---

[1] *Ифтар* – үҙен күрһәтеп ала мәғәнәһендә.

Үҙен бик мыжыҡ тиҙәр.

Уға бик аҙ хеҙмәтсе ярай. Унда түҙеп торған хеҙмәтсене:

– Айыу тиреһенән яралғандыр, – тип һөйләйҙәр. Шуның өсөн дә ул яҡын-тирәнән үҙенә хеҙмәтсе таба алмай, әллә ҡайҙан ситтән барып яллай торғайны. Унан ҡасҡан хеҙмәтселәрҙең иҫәбен-һанын әйтеп бөтөрөрлөк түгел.

Ул хеҙмәтселәрҙе эшкә шул тиклем ҡаты ҡуша ки, уның иртәһе лә, кисе лә, төнө лә эш менән үтергә тейеш.

Ул йөҙәр дисәтинә иген сәсә, икешәр-өсәр йөҙ баш йылҡы аҫрай, ҡуйҙарының иҫәбен үҙе лә белмәй торғандыр. Бына шул ҡыр эше таң ҡараңғыһынан төн ҡараңғыһына тиклем бара. Хеҙмәтселәрҙең арыуы, йонсоуы менән иҫәпләшеп тормай, ул төндә лә эш таба, һис тә булмаһа, берәй ауырыу малын ҡарауылларға ҡуша. Шул рәүешсә уның ҡул аҫтында бер генә минутҡа ла тынғылыҡ юҡ. Ул үҙе лә шулай тынғыһыҙ бер әҙәм. Уның тураһында халыҡ:

– Бер күҙе йоҡлаһа, икенсе күҙе һәр ваҡыт ҡарап тора, – тип һөйләй.

Уның йорт-ҡаралтыһына килһәң, себен осоп инерлек урын юҡ. Бөтә йорто бейек таш ҡойма менән уратылған. Хатта йортоноң тәҙрәләре лә урамға ҡарамай. Барыһын да ҡура яғына сығарып эшләткән. Шуға күрә булһа кәрәк, уны «Урыҫ Ҡотлояр» тип йөрөтәләр.

Бына Тимеркәй ҙә туғыҙ йәштән уның донъяһына тап булды. Уның әңгәмәһе былай:

Сәми ҡарт үлгәс, Тимеркәйҙе берәү ҙә тәрбиәгә алманы. Атаһы үлгәс, баяр тирәһендә лә урын булманы. Йәш, эшкә яраҡһыҙ тип, ауылына ҡайтарҙылар. Уны ауылда ла бер кеше лә йортона индермәне. Сәми ҡарт тураһындағы шомло әкиәттәр Тимеркәйгә күсте. Уны «урманда ен алыштырған» тип һөйләй башланылар. Тимеркәй урамда, кәбән аҫтарында, аҙбар арттарында йоҡлап йөрөй ине. Әгәр ҙә берәүҙең йортона килеп ҡунһа, иртәгеһен үк ауылға хәбәр тарала. Ул йортта бер ҡаза йәки ауырыу көтөлә.

Уға ҡайҙа барырға?..

Һис бер урын юҡ. Бөтә ишектәр ябыҡ. Бөтә кеше уға:

– Теге мәлғүндең ен алыштырған балаһын берәйһе шунда үлтереп ташлаһа, сауаплы булыр ине, – тип сиркәнеп ҡарай.

– Ауылға килгән аяҡлы фетнә, – тип йөрөтәләр. Тимеркәй бының серенә төшөнә алмай. Көнөнә бер-ике һыныҡ икмәк табып ҡорһағын тултырһа, уға шул етә. Төн үткәреү Тимеркәй өсөн ҡайҙа ла бер. Ул уға күнгән инде.

Ул мәлдә Тимеркәй Ҡотлояр байҙың да ҡапҡаһын буш ҡуйманы. Унан бер нисә тапҡыр әрләнеп, ҡыуылып сыҡҡайны.

Бер көн Ҡотлояр байҙың ниндәй мәрхәмәте килгәндер инде, Тимеркәй иртә менән аҙбар артында йоҡлап ятҡан сағында, уны уятып, өйгә алып инде. Алдына ҡатыҡ менән ҙур киҫәк икмәк килтереп ҡуйҙы ла:

– Һинең барыр урының юҡ, беҙҙә ҡал, эшләрһең, тамағыңды туйҙырырһың! – тине. Тимеркәй былдай йылы һүҙҙе кешенән беренсе тапҡыр ишетә ине әле.

Ризалығын һүҙ менән әйтә алманы, башын ғына һелкеп белдерҙе.

Шул көндән башлап Тимеркәй Ҡотлояр байҙа хеҙмәтсе булып ҡалды. Уның бында тап булыуы ла Ҡотлояр байҙың хеҙмәтселәре ҡасҡан осорға тура килде. Уға яраҡлы хеҙмәтсене бик тиҙ генә балсыҡтан яһап булмай, морон төртөрлөк урыны булмаған кешеләр ауыр эштәргә тиҙ күнегеүсән булалар. Тимеркәй ҙә шуларҙың береһе, иң беренсеһе ине. Ҡотлояр бай ҙа былдай мәлдән бик файҙалана белә. Был тиклем байлыҡ бит бушҡа ғына йыйылмаған, уның өсөн бик күп әсе-сөсөләрҙе татыған инде ул.

## VI

Тимеркәйҙе хеҙмәтселеккә алғас, Ҡотлояр бай тураһында тағы яңы хәбәрҙәр таралды.

– Ҡотлояр бай, ен алыштырған Тимеркәйҙе үҙендә тотоп, уның ендәрен ҡушып эшләтә икән. Улар шулай күп икән... Ул былай икән... – тип һөйләй башланылар.

Был хәбәрҙе иң күп таратыусы, бик оҫта итеп, кеше ҡурҡырлыҡ итеп һөйләүсе Балтабикә ҡарсыҡ ине. Сөнки ул ен, зәхмәт, им-том тирәһендә тирә-яҡҡа мәшһүр бер ҡарсыҡ булып танылған.

Сәми ҡарт унының иң ҙур кәшфиәтенән[1] һанала ине. Ул үлгәс, Тимеркәйгә күсте. Тимеркәйҙе Ҡотлояр үҙенә алғас, ул шомло төйөн унының себен осоп инмәҫлек йортона барып йәшеренде. Унда ул тағы ла серлерәк бер төҫ алып китте. Һәр көн таң алдынан Ҡотлояр байҙың йортонан бик күп ен ғәскәрҙәренең сығып китеү хәбәрен дә, бик йәшерен сер итеп, ана шул Балтабикә тараттҡайны.

Ысынлап та, Тимеркәй эшкә килһә, ен кеүек эшләй ул.

Ул Ҡотлояр байҙа ун бер йыл хеҙмәт итте. Ул инде унының ауыр эштәренә тамам күнегеп бөткәйне. Ул кәбән ҡойған саҡтарҙа ат тартымы күбәләр кәбән башына йөн шикелле ырғытылалар. Аҫау малдарҙы ҡороҡлап тотҡанда, Тимеркәй бер аҙым атлатмай, шып иттереп туҡтата. Унының ун бер йыл буйына Ҡотлояр донъяһына түккән көсөн иҫәпләп ҡараһаң – унының таш ҡоймалары ла күтәрә алмаҫтар. Шулай булһа ла, Ҡотлояр байҙың уға мыжымаған сәғәте юҡ. Бер тапҡыр әрләмәгән, унының эшенә бәйләнмәгән көнө булмағандыр. Тимеркәй уға күптән күнеккән, уға ундай мығырлауҙар ябай һүҙгә әйләнеп киткән, шуның өсөн дә Ҡотлояр байға ҡаршылашмай торғайны. Ҡаршылашып ҡайҙа бараһың?

Унан сығып китер ине, барыр урыны юҡ. Сәми ҡарт тураһындағы шомло әкиәттәр уны халыҡтан алыҫлаштырған, уға һаман да шомланып ҡарау бөтмәгән ине. Ҡайһы ваҡыттарҙа Тимеркәйҙең дә үҙ тормошонан зарланған, риза булмаған минуттары була. Ләкин уны бер кемгә лә һөйләмәй ул.

Хәҙер унының башына аң кергән. Унының ише егеттәр өйләнәләр, донъя рәхәтен күрәләр, ваҡытлы эшләйҙәр, ваҡытлы күңел асалар. Ә Тимеркәй – һаман да шул Тимеркәй. Унының эш менән үтмәгән бер генә минуты ла

---

[1] *Кәшфиәт* – асыш мәғәнәһендә.

юҡ. Уның да башҡалар төҫлө булғыһы килә, ләкин була алмай. Уның да хәҙер инде, ҡыҙҙар күрһә, күңеле өҙгөләнә, күрше ҡыҙы Гөлбикә тураһында һәр ваҡыт уйлана, үҙенең арт ҡапҡанан сыҡҡан саҡтарын уның һыуға төшә торған ваҡытына тура килтерергә тырыша. Бер ваҡыт, йәшеренеп, Гөлбикәләрҙең өйөнә ҡурай тартырға ингән сағын һис хәтеренән сығарғыһы килмәй уның.

Ул уны ярата, ләкин бер ваҡытта ла үҙенең яратыуын уға һөйләй аласаҡ түгел, уны әйтеү менән барыбер Гөлбикә һанға алмаясаҡ.

Ул шулай уйлай ине.

Шундай өмөтһөҙлөктәр арҡаһында уның башын тағы ла күберәк уйҙар, төрлө хыялдар сырмап ала. Ул эш араһында ла, кис менән туғайға ат ҡарауылларға ҡуна барғанда ла үҙе тураһында уйлана, үҙенең бәхетһеҙлегенең сәбәптәрен тикшерергә бик ярата:

– Әгәр ҙә мин теге Һағынбайҙар төҫлө аталы-әсәле булып, шулар кеүек түңәрәк кенә донъя көтһәм, Гөлбикә лә миңә һис бер һүҙһеҙ килер ине бит.

Бына уның уйының тармаҡтары шунан башланып китә торғайны. Ул Алланан шул бәхетте бик күп һораны. Ләкин береһе лә уның теләгенә ярҙам итмәне. Һәр көнгө таң уны ауыр, иҫәпһеҙ күп эштәр, тиргәштәр менән ҡаршыланы. Әле уның киләсәгенә лә бер өмөтлө нәмә юҡ.

Шуның өсөн дә уйҙарының аҙағы Аллаға барып терәлә ине. Күңелендә бер генә лә өмөт тойғоho ялтырамаған ауыр, әсе минуттарында:

– Юҡтыр ҙа ул! – тип ҡуя ине.

## VII

Дөрр!..

Дөрр!

Ерҙәр һелкенә, окоптар ишелә, мылтыҡ, пулемёттарҙан ямғыр шикелле пулялар яуа. Меңдәрсә кешеләр ут эсендә, туп йәҙрәләре ҡурҡынысы аҫтында үлем көтәләр. Әллә ни тиклем кәүҙәләр тупраҡҡа болғанып, ҡан эсендә ята. Әллә

ни саҡлы кешеләр йәрәхәтенән ыңғыраша. Күкрәге менән шыуышып, пуляһыҙ, тупһыҙ ерҙәргә сығырға ынтыла...

Тимеркәй ҙә шулар араһында.

Ул инде алты ай буйына ана шул ҡурҡыныстар аҫтында йөрөй. Һуғыш сыҡҡан көҙ менән үк ул һалдатҡа алынды. Өс айҙан һуң инде фронтҡа оҙатылды.

Немецтар өҙлөкһөҙ окопҡа аталар. Баш ҡалҡытыр әмәл юҡ.

Шул ваҡыт Тимеркәйҙең башынан ошо уйҙар үтте:

– Беҙ ни өсөн һуғышабыҙ? Илде, ерҙе һаҡлау өсөн, тиҙәр. Һуң, минең бер табан ерем юҡ. Ниңә, улай булғас, ерен һаҡлар өсөн Ҡотлояр байҙың балаһы килеп һуғышмай? Ул ҡолағын ауырттырҙы ла хеҙмәттән тороп ҡалды. Ул кәләше менән тыныс ҡына йәшәп тик ята. Башҡа бай балалары барыһы ла шундай һылтау менән тороп ҡалдылар. Исхаҡ бай улын хеҙмәттән ҡалдырыу өсөн меӊ һум аҡса тотҡан. Ә беҙҙе йүнләп ҡарамаҡылар ҙа: «Годен!» – тип сығарҙылар ҙа ебәрҙеләр.

Унан тура һуғышҡа. Минең немецтар менән ниндәй уртаҡ малым бар? Мин уларға, улар миңә пуля аталар.

Быныһы Алла эше тиһәң инде, ниңә ул теге бай улдарын ҡушмай икән?

Күпме кешеләр зар илайҙар, Алланан иҫән ҡалыуҙы һорайҙар. Ләкин туптар, пулялар быларҙың барыһын да үҙенсә эшләй, ә Алланың бында бер генә лә, бармаҡ осондай ҙа мәрхәмәте юҡ. Уның көсө ҙур, һәр нәмәне үҙенсә эшләтергә ихтыяры етә, тиҙәр. Ниңә һуң инде иҫәпһеҙ кешеләрҙең: «Һуғыш туҡталһын ине!» – тигән теләктәренә әҙ генә булһа ла ҡолаҡ һалмай икән?

– Юҡтыр ҙа ул!..

Шул ваҡыт уның эргәһендә ҙур туп шартланы. Тупраҡтары уны еле менән этәреп, ҡырға алып ырғытты. Шунан айнып торҙо ла бер соҡорға йүгерҙе. Шул минут аяғына ҡаты бер нәмә бәрелде. Йөрәгенә үтте. Табан аҫтары эҫеле-һыуыҡлы булып сымырлап китте. Окоп эсенә һикереп төштө лә мылтығын ырғытып бәрҙе. Бер нисә ҡанлы кәүҙә өҫтөнән атлап, окоп буйлап артҡа

шыуыша башланы. Аяғының ауыртҡан ерен тотто. Ҡулы ҡып-ҡыҙыл йылы ҡанға батты.

– Ах, харап булғанмын! – тип юғарыға ҡараны ла, тороп, йән көсө менән алға йүгерә башланы. Уның тирә-яғында пулялар себен кеүек осалар ине.

– Юҡ ул! Юҡ ул! – Шул һүҙҙәр уның ауыҙында ҡабатландылар.

Алдында тағы шрапнель ярылды. Снаряд ҡаҙыған соҡорға йығылды. Башынан йәшен үткән шикелле булды. Ҡысҡырырға уйланы, ауыҙына тупраҡ тулғайны. Күҙ алдында әллә ниндәй ут уйнаны ла ер төбөнә убылып төшөп киткән кеүек булды.

Шрапнелдең бер ауыр суйын киҫәге уның түбә ҡапҡасын алып киткәйне. Ул баҫҡан урынында ике мәртәбә әйләнде лә, мәңге тормаҫлыҡ булып, снаряд соҡорона йығылды. Уның теге уйҙары, шрапнель киҫәге менән осоп, ҡанға аралаштылар.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Әҫәрҙең беренсе бүлегендә тәбиғәт күренештәре нисек һүрәтләнә? Шул урындарҙы яңынан уҡып сығығыҙ.

**2.** Ошо күренештәрҙе күҙ алдына баҫтырып һүрәт эшләргә ҡушһалар, һеҙ ул һүрәтте нисек эшләгән булыр инегеҙ? Телдән тасуирлап бирегеҙ.

**3.** Тимеркәйҙең тәбиғәт, донъя, Алла хаҡындағы ҡараштарын һөйләп бирегеҙ.

**4.** Сәми ҡарттың хәйерселеге, бәхетһеҙлеге нилектән?

**5.** Ауыл кешеләренең аң кимәле, донъяға ҡарашы нисек һүрәтләнгән?

**6.** Атаһы үлгәндән һуң, Тимеркәйҙең тормошонда ниндәй үҙгәрештәр була?

**7.** Д. Юлтый был әҫәрен ни өсөн «Тимеркәй фәлсәфәһе» тип атаған?

**8.** Сәми, Тимеркәй, Ҡотлояр бай образдары тураһында һөйләгеҙ.

**9.** Тимеркәй яҙмышы һеҙҙә ниндәй уй-тойғолар уятты?

**10.** Тимеркәй туғайҙа үҙен нисек тоя, нимәләр тураһында уйлай?

**11.** Ни сәбәпле уның өсөн ҡояш ҡалҡҡас та тамуҡ ғазабы башлана? Яуабығыҙҙы текстан миҫалдар табып иҫбатлағыҙ.

**12.** Сәми ҡарт менән Тимеркәйҙең урман өйөндәге тормош-көнкүрешен һөйләп бирегеҙ.

**13.** Сәми ҡарт үлгәс, ауылда ниндәй шомло хәбәрҙәр йөрөй? Был хәбәрҙәр Тимеркәйҙең яҙмышына ниндәй йоғонто яһай?

**14.** Халыҡ Ҡотлояр байға ни өсөн «Урыҫ Ҡотлояр», «Һаран Ҡотлояр» тигән ҡушаматтар бирә? Текстан миҫалдар менән иҫбатлағыҙ.

### *«Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе тураһында*

Дауыт Юлтыйҙың 1924 йылда яҙылған «Тимеркәй фәлсәфәһе» тигән хикәйәһе 1925 йылда хикәйәләр йыйынтығында баҫылып сыға.

Дауыт Юлтый был хикәйәһендә Сәми ҡарт һәм Тимеркәй образдары аша капитализм йәмғиәте шарттарында хеҙмәтсән халыҡтың ауыр яҙмышын һүрәтләй. Бөтә йәберләүҙәргә, иҙеүҙәргә буйһоноп йәшәү Сәми ҡартты ла, Тимеркәйҙе лә һәләкәткә килтерә. Уларҙың ауыр тормошоноң һәм аяныслы үлемдәренең сәбәбе элекке йәмғиәттең ҡәһәрле закондарына, кешене бер-береһенә дошман итеп тәрбиәләү тәртиптәренә бәйләнгән.

Бик күп йәберҙәр күреү, аяуһыҙ иҙелеү Тимеркәйҙе тора-бара үҙ хәле, яҙмышы хаҡында уйланырға мәжбүр итә. Ни өсөн берәүҙәр эшләмәһә лә бай йәшәй, ә икенселәр ғүмер буйҙарына өҙлөкһөҙ эшләп тә ярлылыҡта, мохтажлыҡта көн күрә тигән уйға килә.

Тимеркәй һуғышҡа оҙатылғас, Алланың ярлыларҙы һис ярлыҡамауы, ә байҙарҙың фронтҡа бармайынса өйҙә ҡалыуҙары хаҡында баш вата башлай. Ләкин оҙаҡламай Тимеркәй фронтта үлеп ҡала. Уның михнәтле тормошо ана шулай аяныслы үлем менән сикләнә.

Хикәйә бер нисә бүлектән тора. Беренсе бүлектә Тимеркәйҙең үҙ тормошо хаҡында уйланыуҙары бирелһә, унан һуңғы бүлектәрҙә иһә Сәми ҡарттың һәм Тимеркәйҙең тормоштары эҙмә-эҙ хикәйә ителә.

Яҙыусы бәләкәй генә хикәйәлә үҙ геройҙарының ауыр яҙмышын бөтә тулылығы менән күрһәтә алған. Быны өсөн ул геройҙары тормошондағы киҫкен ваҡиғаларҙы һайлап алып, уларҙы йыйнаҡ, әммә тәрән мәғәнәле итеп һөйләп бирә.

Яҙыусының үҙ геройҙарына биргән характеристикалары ла бик тапҡыр һәм тәрән мәғәнәле. Мәҫәлән, ул Ҡотлояр байҙың ҡомһоҙлоғон һәм тынғыһыҙлығын «бер күҙе йоҡлаһа, уның икенсе күҙе һәр ваҡыт ҡарап тора» тип халыҡсан атама менән тапҡыр әйтә. Йәки уның ихатаһын шулай тасуирлай: «Уның йорт-ҡаралтыһына килһәң,

себен осоп инерлек урын юҡ. Бөтә йорто бейек таш ҡойма менән уратылған. Хатта йортоноң тәҙрәләре лә урамға ҡарамай. Барыһын да ҡура яғына сығарып эшләткән».

Хикәйәнең беренсе бүлегендә Тимеркәйҙең төрлө сыуалсыҡ уйҙары үҙ исеменән һөйләтелә. Был алым Тимеркәйҙең характерын асығыраҡ күрһәтергә ярҙам итә.

Геройҙарҙы характерлағанда, ваҡиғаларҙы тасуирлағанда ла Дауыт Юлтый ябай һәм тапҡыр һүҙҙәр һайлауға, әҫәрҙең телен асыҡ һәм образлы итеүгә ныҡ әһәмиәт бирә.

## ҺАНДУҒАСҠА

Туғайҙарҙа үҫеп, гөлдәр ҡосоп,
Сәскәләргә күсеп һандуғас,
Ҡанаттарын ҡағып, бәғер киҫеп,
Һайрай өҙөп, йәйге таң тыуғас.

Һандуғасҡай, телең белһә инем,
Алыр инем һинең йырыңды,
Йырлар инем бөгөн, көйләр инем
Зар иңрәгән тыуған ҡырымды.

Тыуған илдең йәйен күрер өсөн,
Мендем бейек тауҙың башына.
Аяҡтарым талғас, мин ултырҙым
Көнгә ҡаршы ҡая ташына.

Бейек тауҙан бейек йөрәккәйем,
Бейектәргә телә менергә,
Зар иңрәгән илдең күкрәккәйен
Бейектәргә менеп күрергә.

Һандуғасым, бирсе ҡанатыңды,
Бейек, бейектәргә осайым,
Бейектәргә осоп, түбән төшөп,
Зарлы илдең ғәмен эсәйем!

## Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Был шиғыр ниндәй төргә ҡарай?
**2.** Шағир һандуғасҡа нимә тип мөрәжәғәт итә?
**3.** «Гөлдәр ҡосоп», «бәғер киҫеп», «һандуғас теле», «бейек тауҙан бейек йөрәккәйем», «илдең күкрәккәйен» тасуири сараларының төрөн билдәләгеҙ.



Һәзиә
# ДӘҮЛӘТШИНА

**(1905–1954)**

## БӘХЕТ ҠОШО

*(Үҙем тураһында)*

Миңә ете-һигеҙ йәш. Мин йыш ҡына әсәйемдең әсәһе – ҡартәсәйем янына барып йөрөйөм. Ул, үҙенең туҡалаҡ балсыҡ өйөндә кешеләргә ямау ямап, тамаҡ туйҙырырлыҡ эш эшләй. Ул ҡарсыҡ, яр башында япрағын ҡойоп яңғыҙ ултырған ҡарт өйәңке һымаҡ, бер үҙе зарланып йәшәй. Мин, бала кеше, уның эше булыуын да уйламайым. Тик ҡараңғы төшөп, өйгә шәм алынды иһә: «Ҡартәсәй, ҡарһүҙ һөйләйһеңме инде, ҡартәсәй, һөйлә, ҡараңғы булды бит инде, һөйләргә ярай бит инде», – тип теңкәһенә тейә башлайым. Ул, көндөҙ булһа, уңай ҡотола, көндөҙ ҡарһүҙ һөйләргә ярамай, ҡыш оҙаҡ була, ти. Кис көнө ул бер һүҙ менән дә минең ныҡышыуҙан ҡотола алмай. Уның ҡарһүҙҙәре бик күп һәм төрлө булалар. Мин инәлә башлағас та, ул үҙенең ғәҙәте менән: «Ни һөйләйем инде, балам, ҡарһүҙем дә бөттө», – ти. Тәрән көрһөнә. Мине тубығына яткырып, ялбыр сәстәремде бармаҡтары менән аралаштырып һыйпай ҙа тағы уйлана. «Ни һөйләйем икән һуң, бәхет ҡошо – Һомай ҡошо тураһында һөйләмәһәм инде», – ти. Миңә ни булһа ла ярай. Тик һөйләһен генә. «Эйе, эйе, ҡартәсәй, шуны һөйлә, тағы ла шуны һөйлә», – тип ҡыуанам. Ул шунан һуң ғына яйлап һөйләй башлай: «...Һауала, күктең иң бейегендә, нисәмә мең йылдарҙан бирле Һомай ҡошо тигән бер бәхет ҡошо йәшәй икән, ти. Ул донъяла бер генә ҡош та осоп менә алмаҫлыҡ бейектә оса икән. Уны бер генә кеше лә үҙ күҙе менән күрә алмай икән. Ул үҙенең йомортҡаһын ергә табан ҡырҡ көн, ҡырҡ төн томалап төшә-төшә лә, сайҡалып китеп, эсендә себейе яралып, моронлап йомортҡа ҡабығын тишеп сыға ла тағы ергә ҡырҡ көн, ҡырҡ төн төшә икән. Шулай итеп, ул себей төшөп килә-килә лә,

инде ергә төшөп етергә ҡырҡ ҡолас ҡалды тигәндә, ҡанат еткереп, тағы ла әсәһе янына, болоттар араһына күтәрелеп осоп китә икән. Шуға күрә ул Һомай ҡошон бер кеше лә күрә алмай икән. Ул ҡоштоң үҙен түгел, күләгәһен генә ерҙә күреп ҡалған кеше лә сикһеҙ бәхетле булып йәшәй икән. Беҙ ана шул бәхет ҡошо – Һомай ҡошон күрә алмаған өсөн шулай бәхетһеҙ икәнбеҙ. Ә уның үҙен күргән кеше йә батша була, йә бай була, йә бала-сағаһы күп булып, теүәл йәшәп, рәхәт көн күрәләр икән. Ҡайғы күрмәйҙәр икән...» – тип, ҡартәсәйем әкиәтен башлай ҙа үҙе белгән, үҙе ишеткән бай кешеләр тураһында һөйләп китә.

Ә минең күҙ алдыма ҙур, ап-аҡ, матур, күпереп торған мамыҡлы Һомай ҡошо килә. Уны күргем, себешен тотоп ятаҡым килә, бик бәхетле булғым, ҡартәсәйемде лә бик бәхетле, ҡайғыһыҙ иткем килә. Иртәгеһен көндәр буйы иге-сиге булмаған зәңгәр күктең сикһеҙ тәрәнлегенә күҙҙәремде йүгертәм. Йәшел үләндәргә һуҙылып ятып, һирәкләп кенә йөҙгән матур, көмөш кеүек аҡ болоттарҙың ваҡ киҫәктәрен Һомай ҡошоноң ҡанат ҡаҡҡан себейҙәреме икән әллә, тип хыялланам.

Эйе, улар бала саҡтың матур хыялдары булғандар. Ҡартәсәйем, бахыр, һикһән йәштән артыҡ йәшәһә лә, был һағынып көтөлгән бәхет ҡошоноң күләгәһен дә күрә алмай үлеп ҡалды. Был бәхетле тормошто күреү теләге иҙелгән халыҡтарҙың ҡайһыһында ғына булмаған тиһең.

Ә хәҙер был бәхет беҙҙең үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙа. Мин илебеҙ халыҡтарының бөтәһе кеүек тигеҙ бәхетлемен. Сөнки борон күләгәһе лә ергә төшмәй торған тәкәббер Һомай ҡоштары урынына беҙҙең өсөн еңеү факты булған, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренә еңеү юлын күрһәтә торған Бөйөк Конституциябыҙ бар. Был – беҙҙең илебеҙҙең, еңгән, ирекле, һөйөклө илебеҙҙең үҙе үҫтергән бәхет ҡошо. Беҙҙең колхоз, совхоз ҡырҙарындағы йөҙәр меңләгән тракторҙарыбыҙ – ошо ҡоштоң себейҙәре улар. Беҙҙең еңелмәҫ данлы авиациябыҙ ҙа – беҙҙең бәхет ҡоштарының балалары улар. Ул себештәрҙе беҙҙең илдең бөтә кешеләре үҙҙәренең устарынан емләп үҫтерҙеләр.

Конституция ҡабул ителгән көндө беҙ урамдарҙа йөрөп байрам иттек. Ял көнө. Ҡояш матур. Халыҡтың йөҙөндә бер байрамда ла күрелмәгән шатлыҡ. Ҡыҙыл флагтар шаярып елберләй. Конституцияның бер генә пункты булған «Совет граждандарының уҡырға, эшләргә, ял итергә хоҡуҡтары бар» тигән һүҙҙәрҙе генә иҫкә алғанда ла, сикһеҙ картиналар күҙ алдына килә.

Баяғы ҡартәсәйемдең өлкән улы Ишмәттең һуғышта үлеүе тураһында бер рус иптәш хат яҙғайны. Ул ваҡытта русса уҡыу түгел, башҡортса ла яҙыу таныусы һирәк. Шуға күрә ул өс-дүрт көн буйынса ауыл писарының ситтән ҡайтҡанын көттө. Ҡартәсәйем был көндәр эсендә башынан әллә ни тиклем шатлыҡтар кисерҙе. Хатты көндөҙ кеҫәһендә һаҡланы. Төндә баш осона, яҫтыҡ аҫтына ҡыҫтырып ҡуйып,

йоҡоһонан уянған һайын уны ҡулы менән һыйпай-һыйпай йоҡлап китте. Ләкин уның эсендә яҙылған йөрәк өҙгөс ҡурҡыныс хәбәрҙе, ҡайтыуын зарығып көткән ҡәҙерле улының үлем хәбәрен, ул уҡый алмай ине, ул күҙле һуҡыр ине.

Мин – уның ейәнсәре. Хәҙер мин вузда уҡыйым. Көн дә иртәнсәк тороп институтҡа барып инеүем миңә әллә ниндәй рәхәтлек, шатлыҡ бирә. Мин көнләп кенә түгел, сәғәтләп үҙемдең үҫә барғанымды һиҙәм. Уҡыған өҫтөнә уҡығым килә. Мине институт быйылғы һайлауҙарҙа Өфөнөң Ленин районы Советы ағзаһы итте. Ә ҡала Советы Советтарҙың ғәҙәттән тыш X Бөтә Башҡортостан съезына делегат итеп ебәрҙе. Мин, бөтә Башҡортостандың данлыҡлы кешеләренән йыйылған ошо тиклем тарихи съезда улар менән тиң хоҡуҡта илебеҙҙең Бөйөк Конституцияһын мөҙәкәрә итеп[1], уны Советтарҙың ғәҙәттән тыш VIII Бөтә Союз съезына ебәреүҙә ҡатнаштым.

Мин хәҙер башҡорт телендә хикәйәләр яҙа алам, рус телендә Маркс, Энгельс, Ленин хеҙмәттәрен уҡый һәм өйрәнә алам.

Мин белемем арта барыуына ҡыуанам. Сөнки ул белем тик минең яңғыҙым өсөн генә түгел, ә иркле илемдең миллиондар менән һаналған бөтә халҡы өсөн кәрәк.

*Һәҙиә Дәүләтшина. 1936 йыл, 25 ноябрь*

XX быуаттың утыҙынсы йылдарында ошо юлдарҙы яҙған Һәҙиә Лотфулла ҡыҙы Дәүләтшина, артабан ауыр яҙмышҡа дусар ителеүенә ҡарамаҫтан, үҙ идеалдарына тоғро ҡалып, Башҡортостандың иң мәшһүр яҙыусылары кимәленә күтәрелә. 1958 йылда атаҡлы рус яҙыусыһы Леонид Соболев: «Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын белмәй тороп, башҡорт халҡының үткәнен күреү, аңлау мөмкин түгел», – тип баһалай. Әҙибәнең тағы «Айбикә», «Башаҡтар тулҡыны» повестары, «Партизан», «Һылыуҡай – пионерка», «Һырға һабағы» хикәйәләре һәм башҡа әҫәрҙәре уҡыусыларға киң билдәле.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** 1936 йылдың 5 декабре ниндәй тарихи ваҡиға менән билдәле? Уның юғарылағы хәтирәгә бәйлелеген асыҡлағыҙ.
**2.** Маркс, Энгельс, Ленин – кемдәр ул? Ни өсөн автор уларҙың исемен телгә ала?
**3.** Был хәтирәһе буйынса Һәҙиә Дәүләтшинаның бала саҡтағы булмышын нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ, уға характеристика бирегеҙ.

### Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Интернеттан һәм баҫма белешмә сығанаҡтарҙан яҙыусының тормошо һәм ижады тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр табығыҙ.

[1] *Мөҙәкәрә итеү* – һөйләшеп фекер алышыу.

## АЙБИКӘ

*(Повестан өҙөк)*

### I

«Тор, тор инде, Айбикә килен, тор. Был ни бөтмәҫ йоҡо?! Йылдай төндә лә йоҡо туймаҫ икән. Ҡыҙыл эңерҙән ятып йоҡлайһың, ҡояш ауалағансы, йоҡо туймаҫ булырмы? Ана, һыйырҙарың ызылдашып торалар, һауа һалып ал!» – тигән тауышҡа Айбикә, күҙен асып, һикереп торҙо. Уның янында, ҡулына ҡомған тотоп, Ғәйшә тора ине. Ул Айбикә тороп аяғына итеген кейгәнсе туҡтамай әрләне лә тышҡа сығып китте, тағы үҙенең түшәгенә инеп ятып, тәмле йоҡоға китте.

Айбикә әле генә, үҙенең алама аласаһы өҫтөнә һалған тышһыҙ ҡара кәпрәнле мендәренә башын ҡуйып, алама көпөһөн өҫтөнә ябынып йоҡларға ятҡайны. Аҙ ғына серем итергә лә өлгөрмәне, көн дә иртәнсәк ишетә торған әрләү, мыжыу, тиргәү уның ҡолаҡ төбөндә яңғырай башланы.

Ул аҫтындағы аласаһын мендәре өҫтөнә ҡайырып ҡапланы ла, бит-ҡулын йыуып, башындағы яулығын йүнәтеп бәйләп, һыйыр һауырға сығып китте.

Таңдың әрә-һәрәһе, йүнләп аяҡ юлы ла күренмәй. Йоҡо туймаған, күҙҙең ҡабаҡтары ауыртып, үҙенән-үҙе кире йомолалар. Тәндә ауырлыҡ, әйтерһең, берәү иҫәңгерәтә туҡмап ташлаған да, шунан яңы ҡалҡып торғанһың. Кисә лә, унан элекке көндәрҙә лә шул уҡ таң, шул уҡ тәндең ауыртып талыуы, шул уҡ Ғәйшәнең мыжыуы, шул уҡ һыйырҙар, быҙауҙар, бейәләр, осо-ҡыры юҡ ваҡ йорт эше.

Айбикә сығып биш һыйырҙы быҙауҙары менән эйҙәреп һауып алды ла, ике силәк һөттө ишек алдындағы өлкән аҡ келәт эсенә сепарат янына ултыртып, һыйырҙарын көтөүгә ҡыуырға китте. Унан ҡайтып быҙауҙарын, егерме-утыҙ башлап һарыҡты ҡыуҙы, унан ҡайтҡас, сепараттан һөт үткәрҙе, самауыр ҡуйҙы, ул арала йылҡы көтөүе төшөп, бейәләрҙең ҡолондарын айырҙы, дүрт-биш көйәнтә һыуға барҙы, икмәк баҫты, иҙәндәрен һеперҙе,

һөтөн бешереп ойотто, һауыт-һабаларын йыуып, тағы ҡаҙанға эркет ҡайнатырға һалды, ул арала бейәләрҙең һауыны етеп, дүрт бейәне һауып алды.

Шунан һуң ғына Ғәйшә, йылы түшәгенән тороп сығып:

– Ҡана, килен, сәйеңде өлгөрт... Көнһылыу менән Ишбулдыны уят, – тине.

Айбикә Көнһылыу менән Ишбулды йоҡлаған бүлмәгә инә... Айбикә, әле Көнһылыуҙы, әле Ишбулдыны уятып, торғоҙа алмағас, Ғәйшә янына сығып:

– Еңгә, Көнһылыуҙарҙың торғолары килмәй. Уяттым-уяттым, тағы йоҡлай ҙа китәләр, – тине.

Ғәйшә, ҡыҙыл сыбар тышлы ҙур мендәрҙең өҫтөнә аяҡтарын бөкләп ултырып, сәй яһай башлағайны.

– Йә, ярар, йоҡолары туймаһа, ятһындар, ни уларҙы ҡайта-ҡайта маҙаһыҙлайһың, аталары менән бергә эсерҙәр, – тине. Уға яңғыҙ сәй эсеү күңелһеҙерәк булды, ахыры, ул Айбикәгә:

– Килен, барсәле, Көмөш еңгәйҙе сәйгә алып кер, – тине.

Айбикә, Көмөш әбейҙе тиҙ генә үҙе менән бергә алып килеп, боролоп, аш өйөнә сығайым тигәйне, Ғәйшә тағы ла:

– Самауырың һыуынып китте, ҡана, тиҙ генә шаулатып алып кил, – тине.

Айбикә шунан һуң ғына тағы үҙ эшенә тотоноп китте.

Аш өйөндә Ҡотлояр ҡарттың тороуына икенсе самауырҙы ҡуйҙы, икмәк һалды, эркет ҡутарып, уны тоҡҡа ҡойоп һарҡытырға ҡуйҙы. Сәйҙәрен йыйып алып, уның арты икенсе самауырҙы ултыртыуға, бейәләрҙең икенсе һауыны етте, уларҙы һауыуға, көтөүҙән һыйырҙар безәкәйләп ҡайта башланы. Уларҙы, быҙауҙарына ҡушылмаһын өсөн, ҡураға бикләне, уларҙы ғына урынлаштырып әйләнгәнсе булмай, бесәнселәрҙең береһе килеп етте. Уларға аҙыҡ әҙерләп бирергә кәрәк. Хатта аҙ ғына ултырып хәл алырға ла әмәл юҡ. Төшкө сәйҙән ҡалған самауырҙағы йылы һыуға икмәк ҡушып тамаҡ ялғарға ғына ултырғайны, тағы Ғәйшә тауышы...

– Килен, бында ҡомғаныңда һыу бөткән, шуны ла ҡарап ҡуйырға ярамайһың. Ҡуйсы, ҡуйсы. Һиңә әйтһәң

дә бер, әйтмәһәң дә бер. Был тиклем әрпеш булырһың икән. Тастарың әҙәм күҙенә күрһәтерлек түгел, шуларҙы таҙартып ҡуйһаң ни була? Иртәрәк йоҡонан торһаң, барын да эшләп өлгөрөр инең. Уятҡанды көтөп йоҡлайһың да ятаһың, бер әйтәгүр. Кискә ҡунаҡтар саҡырып алырға кәрәк, өйөңдө арыу итеп йыйыштырып ал! Ҡаҙан бушанымы? Ике ҡаҙанға ла тултырып аш һалырға кәрәк. Ҡайнағаң торғас, Асатайға әйтеп килерһең: көтөүенә барып, берәй туҡты тотоп ҡайтһын, һуйып алырбыҙ...

Айбикә самауыр төбөнән һикереп тора. Ҡомғанға һыу һала, усаҡтағы тиҙәк ҡуҙын аҡтарып, ҡаҙанға таҙа һыу ҡоя, тастарын таҙартырға тотона. Ауыҙына ҡапҡан икмәген эш араһында сәйнәп йота, ә уның яртыһы эселмәй ҡалған шәшкеһе самауыр төбөндә һыуынып көтә...

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Айбикә өсөн Ғәйшә кем ул? Ни өсөн Айбикәгә бер туктауһыҙ эш ҡуша?
**2.** Ни өсөн Ғәйшә Айбикәне ҡара таңдан әрләй-әрләй уята, ә оҙаҡ йоҡлаған Көнһылыу менән Ишбулдыны маҙаһыҙламаҫҡа ҡуша?
**3.** Айбикәнең бер көн эсендә үтәп өлгөргән эштәрен һәм тағы ла эшләргә ҡушылғандарын һанап бирегеҙ.

## III

Айбикә арып-талып, төн уртаһы ауғас ҡына йоҡларға ятты. Әллә үтә арығанғамы, әллә борсоулы уйҙар күп булғанғамы, ул, һуң ятыуына ҡарамаҫтан, йоҡлап китә алманы. Уның күҙ алдынан үткән көндәрҙең күренештәре береһе артынан береһе үттеләр.

Ана әле ул ун дүрт – ун биш йәштәрҙәге ҡыҙ. Өйҙә ҡартайған әсәһе менән ҡартайған атаһы ғына. Уларҙың барлығы ун бер балаһы булһа ла, төрлөһө төрлө ауырыуҙан үлеп бөтөп, яңғыҙ Айбикә генә ҡалған. Шуның өсөн дә уны бик яраталар. Булған ғына нәмәләрен Айбикәгә бирергә, уны йүнәтергә, хәлдән килгән тиклем бөтәйтергә тырышалар.

Айбикәнең күҙ алдына үҙҙәренең бәләкәй генә, соланһыҙ кирбес өйҙәре килеп баҫты. Уның ҡарындыҡ күҙле

тәҙрәләре ишекте асҡанда ла, япҡанда ла бер эскә, бер тышҡа һуғылып, ҡырп-ҡырп итеп, йырпылдап торалар. Урындыҡ өҫтөнә йәйгән алама кейеҙ өҫтөндә атаһы һәр ваҡыт тегеп, итек ямап, быйма табанлап ултыра. Ҡартлыҡ менән күҙҙәренең күреүе лә насарланған. Шуға күрә ул, энә һапларға булһа йә энәһен төшөрөп юғалтһа, тиҙ генә Айбикәне саҡыра ла: «Балам, энәмде һаплап бир әле; балам, энәм төшөп китте, табып бирсәле», – ти.

Атаһының янында әсәһе лә тарамыш ишеп йә тарамыш һумалалап, ҡайһы саҡтарҙа кешегә ярым-ярты хаҡҡа йә бушлай уҡ ситек йоллоҡлап[1], ямап ултыра. Күрше бисәләре йәһәт кенә өҫтәренә көпөләрен бөркәнеп инәләр ҙә, Айбикәнең атаһынан биттәрен йәшерә-йәшерә, шыбырлап:

– Бибекәй еңгә, быуна ҡатамдың билтергенәһе айырылып сыҡҡан, шуны эт теше тартып ҡына тегеп бирсәле, – тиҙәр. Әбей тиҙ генә тегеп биреп ебәрә.

Айбикәнең берҙән-бер бала, уның да ҡыҙ булыуы ҡайһы саҡтарҙа ҡарт менән ҡарсыҡтың күңелен бойоҡтора. Улар, икәүһе генә ҡалып, шулай эшләп ултырған саҡтарында, аҡрын ғына, ауыр ғына һүҙҙәр менән, берберенә ҡарамай ғына, зарланышып алалар: «Эй әбей, әбей, ҡартайғанда күрергә ҡалды һинең менән миңә. Сынтимер генә һау булһа ла, хәҙер уға ун өс йәш булыр ине бит инде. Шул уҡ ир бала ҡартайған көнөмдә ҡул-ҡамытлыҡ итер ине. Хәҙер ни, етмешкә еткәс, бөксәңләп, эшең ни ҙә, үҙең ни. Ураҡ урайым тиһәң, бил ярамай, тегенәйем тиһәң, күҙ күрмәй... Ат булһа ла, әллә кешемаҙарға ҡушылып эшләр инең...» Әбей ҡартының был һүҙҙәренән Айбикәгә тел тейеүҙән ҡурҡа. Шуға күрә лә уның һүҙен тиҙерәк бүлергә тырыша: «Нисек итәһең, Алла яҙғанылыр инде. Уллы ла илар, улһыҙ ҙа илар, тигәндәр боронғолар. Ҡыҙ булһа ла, ошо яңғыҙыбыҙ һау була күрһен инде. Әле бына ике йылдан бирле өй эсендәге эште ҡулыма ла тейҙермәй бит. Урыны тура килеп, арыу

---

[1] *Йоллоҡлау* – итектең баш өлөшөн яңыртып ямау һалыу.

ғына кеше осраһа ла инде, әллә, бәлки, ярҙамы булыр ине...» Һүҙ бүтәнгә борола. Ҡулына энәһенме, беҙенме сәнскән бабай, ҡапыл тертләп:

– Әемм... һүҙең генә бар булһын, күҙең бар булғыры, – тип асыуланып ала. – Ошо көн болот булһа, бер нәмә күрмәйем. Исмаһам, ҡырҡтартмасыһы ла йөрөмәй бит, берәй күҙелдерек алыр инем.

– Ана йәй көнө йөрөгәндә, алайыҡ, тинем мин һиңә. Ҡыйбат, тигән булдың.

– Ҡырҡ тиндән төшмәне бит уныһы ла. Утыҙ биш тин бирҙем бит, бирмәне.

Ҡарт менән ҡарсыҡтың бөтә ҡышы тигәндәй шулай үтә...

Тышта буран ҡоторғандан-ҡотора. Тәҙрәне яртыһынан ашыу ҡар баҫып киткән. Мөрйә геүләй, тәҙрә ярығынан ел һыҙғыра, ҡар өрә. Был ваҡыттарҙа Айбикә һабаҡта була. Ул мулла бисәһе Фатимаға һабаҡҡа йөрөй. Бик сатлама һыуыҡ көндәр булмағанда, ул атаһы бейек тағалы итеп тегеп биргән ҡара итеген сылғау урап кейә лә, өсөнсө йыл тегелгән, еңе-салғыйҙары ҡыҫҡарып, уңып бөткән ҡыҙыл сатин көпөһөнөң түшенә «Иман шарты»н ҡыҫтырып, ауыл уртаһындағы мәсет эргәһендә торған мулланың өйөнә йүгерә. Өшөп, туңып, ҡулдары ҡыҙарып ҡайтып килеүгә, әсәһе, усаҡтағы тиҙәк ҡуҙын көл араһынан ҡутарып сығарып, ут тоҡандырырға әҙерләнә. Тиҙәк, сытырҙарҙы усаҡҡа һала ла мөрйә асырға Айбикәне көтә.

Айбикә, тиҙ генә йүгереп өй башына менеп, мөрйә өҫтөндәге өлкән ташты, уның аҫтындағы өлкән көл тоҡсайын алып, мөрйә янына ҡуя ла, йышылып бөткән боҙло баҫҡыстан шыуып төшөп, өйгә инә. Был ваҡытта инде усаҡ дөрләп яна башлай, бәләкәс кенә йәмшек еҙ самауырға ҡаҙандан әҫе һыу ҡойоп, шаулатырға ҡуҙ һалып, самауыр соҡалағына ҡуялар. Әсәһе сәй ултырта башлай. Киндер ашъяулыҡ. Замазкалар менән ҡоршалып бөткән, ҡайһыһы тотҡаһыҙ өс шәшкене ҡара батмусҡа ҡуя. Шәкәр юҡ, ҡара ғына итеп тартылған бойҙай икмәге, һөтһөҙ үлән сәй. Әсәһе сәй яһай, атаһы Айбикәнең һабағын һораша:

– Бөгөн ни уҡының, ҡыҙым?

– Әбжәткә[1] төштөм инде, атай.

– Яраған. Кәлимәтеңде[2] бөттөң иһә, бүтән йөрөмәçһең. Ҡыҙ кешегә шул еткән.

Әсәһе лә йөпләй:

– Эйе шул, ҡыҙ балаға ни, шул иман белеп, намаҙлығын белдениһә, етте инде, – тине.

Тик Айбикә өс ҡыш буйы өшөп-туңып һабаҡҡа йөрөһә лә, оçтабикәнең сыбыҡ менән һуҡтырыуы, сәс тартыу, тырнаҡтарға һуғыуҙан башҡа «әлепсөн, ә әлебсын и, әлептөр ә; әлепкикөсөн ән, әлепкикасын ин, әлепкикөтөр өн»[3] дәресе үтеп, «кәпсенкәләмасылый, кәлимимсемә кәлимәтикөтөрөртөн кәлимәтен»гә генә етеп ҡалды.

Үҙҙәренең иген сәсерлек хәлдәре булмағанға күрә, йәйҙең йәй буйы өсәүләшеп ураҡҡа йөрөп, ялланып ураҡ уралар. Бәләкәйерәк саҡта Айбикә усма ғына һала торғайны, туғыҙ-ун йәшкә еткәс, үҙе лә ура башланы. Бәләкәй генә, ябыҡ ҡына ҡыҙыл һыйырҙы күршеләге Нәғимә әбейгә ҡалдырып китәләр ҙә, ул йәй буйы һауып, һөтөн эсә, быларға егерме-егерме биш ҡаҙаҡтай май, ҡырҡилле башлап булһа ла ҡорот йыйып, әҙерләп ҡуя ине. Ураҡтан ҡайтҡас, Айбикә әсәһе менән башаҡҡа йөрөп, биш-алты боттай бойҙай әҙерләйҙәр. Бына уларҙың бөтә ҡыш буйына әҙерләгән запас аҙыҡтары. Улар шуның менән әл-йөл итеп ҡышты сығалар. Шулай ҙа был көндәр Айбикәнең күңелендә ғүмеренең иң яҡшы, тормоштоң иң рәхәт, иң йылы ваҡыттары булып иçендә ҡалғандар.

Ә ул көндәр, балалығының ғәмһеҙ мәлдәре, күпкә бармай. Уға яңы ун дүрт йәш тулғайны шикелле, уны һорап, күрше ауылдан яусы килде. Оҙаҡ тартышып торманылар, «урын яҡшы, улы аҡыллы, тип әйтәләр», – тип, ун алты һум мәһәр, туйына бер ҡуй һуйып, уны кейәүгә биреп тә ебәрҙеләр. Мулла никах уҡыны...

---

[1] *Әбжәт* – иçке мәҙрәсәлә хәреф таныу тәртиптәре.

[2] *Кәлимәт* – һүҙ.

[3] *Әлепсөн, ә әлебсын и, әлептөр ә; әлепкикөсөн ән, әлепкикасын ин, әлепкикөтөр өн* – ғәрәп хәрефтәрен һүҙ менән көйләп уҡыу.

* * *

...Айбикә, иçтәлектәренең ошо еренә еткәс, ауыр итеп көрһөндө лә икенсе яғына әйләнеп ятты. Улай ҙа уның күҙен йоҡо алманы. Уйҙар туҡтаманылар. Тормоштоң үткән көндәр иçтәлеге береһе артынан икенсеһе кәүҙәләнеп үтә торҙолар. Бына ул, килен булып төшөп, ике йыл торҙо. Ҡайныһы Малбай ҡарт ҡартайған инде. Уның береһенән-береһе ваҡ әллә нисә балаһы булған булһа ла, уларҙың күбеһе үлеп бөткәндәр. Хәҙер уларҙың ике улы, бер ҡыҙы ҡалып, иң өлкәне Юлдыбай ине. Быларын да үçтерергә байтаҡ көс кәрәк булғанға, йәй көнө бисәһе менән көтөү көткәндәр. Ҡыш көнөн аслы-туҡлы уҙҙырғандар.

Юлдыбай өлкәнәйгәс кенә ҡарттың ҡулынан эш төштө. Ҡәйнәһе Фәғилә әбей ҙә, ҡарт булһа ла, әле ныҡ, таҙа, ҡышы-йәйе бер ҙә эшһеҙ тормай. Тире иләп, балаларына тун тегеп кейҙерә... Ул арала башҡа кешеләргә лә эшләй. Яҙлы-көҙлө һарыҡ, ҡуй, дөйә йөндәре ҡырҡышырға, кәзә тарашырға байҙарға йөрөй. Шуларҙан эш хаҡы урынына алып ҡайтҡан йөндән балаларына шарфтар, бейәләйҙәр бәйләп бирә. Айбикә өйҙәге бөтә эште эшләй. Йәй көндәре үҙҙәренең аҙ-маҙ игендәрен тиҙ генә йыйып алалар ҙа, өйҙә әбей менән бабайҙы ҡалдырып, бөтәһе лә ураҡҡа ялланып китәләр. Унан ҡара көҙһөҙ ҡайтып килмәйҙәр. Юлдыбай ҡыш көндәре лә кешегә ялланып эшләй ине.

Шулай итеп, көндө көнгә ялғап, бер һыйырҙың һөтөн, бер аттың көсөн ҡушып көн күреп ятҡанда, герман һуғышы сығып китте. Бер-ике наборҙан уҡ Юлдыбайға ла сират етте – уны һуғышҡа ҡыуҙылар. Өйҙә эш кешеһе булып Айбикәнең ун өс йәшлек ҡәйнеше Әптерәй ҡалды. Ун алты йәштәге Сибәрҙе үҙҙәренең ауылына кейәүгә бирҙеләр. Шул йылды уҡ Әптерәй, Иçәнғол байға бесән ташышҡанда, һыуыҡ тейҙереп, ауырып ҡайтты ла, шул ауырыуынан тора алмай бер ай ятҡас, үлеп китте. Ҡарт менән ҡарсыҡ Айбикәгә генә ҡарап ҡалдылар.

Айбикәнең ҡайны менән ҡәйнәһе бар саҡтағы ғүмере арыу ғына үтте. Ҡайныһы тыныс, ҡәйнәһе бигерәк тә йомшаҡ күңелле һәйбәт әбей ине. Ул һәр ваҡыт Айбикәгә:

– Ҡарап ҡалғаныбыҙ һин инде, балам. Бындағылары бында үлеп бөттө, инде анау ут эсендә йөрөгән Юлдыбайҙа ни өмөт... Эллә, бәлки, һуғыштар туҡтап китһә, әйләнеп ҡайтып та килер. Батшаныҡын белмәҫһең, ни эшләйем тиһә лә, ирке бар, Алла күңеленә рәхимдәрен һалмаҫмы, – ти торғайны.

Юлдыбайҙан тәүҙә хаттар йыш-йыш ҡына килһә лә, һуңға ҡарай бик һирәк килә башланы. Ҡайһы ваҡыттарҙа биш-алты ай хат килмәй китә ине. Был ваҡыттарҙа Фәғилә әбей олоҫҡа барып ҡайтҡан бер кешене дүрт күҙ менән көтә, ауылдағы улдары һуғышҡа киткән үҙ тиңе әбейҙәргә барып һорашып, илашып ҡайта. Ҡарт, көндөң көнө буйы ҡайғыға күмелеп, әбейҙең һөйләгәндәрен өнһөҙ-тынһыҙ тыңлай ҙа тәрән көрһөнөп ҡуя ине.

1917 йылдың ҡар ҡатыш ямғыр, боҙлауыҡ яуып торған рашҡылы яҙ көнө ине. Айбикәгә ҡәйнәһе:

– Килен, көндәр һалҡынайтып тора, төшкә һыуға ғына булһа ла күжә[1] төйөп, бешереп алмаһаң булмаҫ, балам, бик ҡарын асты, – тине.

Айбикә, соландағы шаңдан бер өлкән туҫтаҡ бойҙай индереп, мейес артындағы ағас килене сығарып, бойҙайын ебетеп һалып төйөп алды. Усаҡҡа ут тоҡандырып, ҡаҙанға бойҙайҙы һалып, ҡайната башланы. Ҡайныһы мөйөштә, ҡыптыр тунын ябынып, йоҡомһорап ята, ҡәйнәһе нуҡта ишергә ҡыл шөйкәләп[2] ултыра ине. Ишекте ҡапыл асып, Ирмәт бабай ҡыҙы Хәтирә килеп инде. Әбей, һиҫкәнеп:

– Атаҡ, балам, аҡрын, – тип әйтеп өлгөрмәне, ҡыҙ ашыға-ашыға, шатланып:

– Фәғилә инәй, һөйөнсө! Олатай, һөйөнсө! Һөйөнсө! – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Өсәүһе лә урындарынан һикерешеп торҙолар.

– Ни бар, ҡыҙым, ни булған?

– Һөйөнсө, Айбикә еңгә! Ни бирәһең һөйөнсөһөнә, тиҙ бул, – тине Хәтирә, һаман да һүҙен бирмәй.

– Йә, ни бар? Бер самауыр сәй үҙеңә, ни бар, әйт.

---

[1] *Күжә* – бөтәү ярма.

[2] *Ҡыл шөйкәләү* – ҡылды ишергә әҙерләү.

– Юлдыбай ағайым ҡайтты! Юлдыбай ағайым ҡайтты, әле генә баҙарҙан атайыма ултырып ҡайтты. Мин тәүҙәрәк йүгерҙем…

– Ысынмы, балам? Уй, балам, ысынмы?

Улар, шулай итеп әлән-борхан булып, йүгерешеп сығырға ҡаталарын кейеп өлгөрмәнеләр – Юлдыбай менән Ирмәт ҡарт килеп тә инделәр.

Юлдыбайҙың өҫтөндә һоро шинель, башында иҫке бейек бүрек, аяғында өлкән ботинка өҫтөнән обмотка уралған. Ул, килеп ингәс үк, көлөп ебәрҙе, эсендә котелоктан башҡа бер нәмә лә булмаған тоҡсайҙы урындыҡ ситенә ырғытты ла ашыҡ-бошоҡ барыһы менән дә күрешергә тотондо.

Өй эсе шатлыҡ менән тулды. Юлдыбайҙың әсәһе, ҡыуанысынан бер илап, бер көлөп, күҙҙәрен күлдәк еңенә һөртөп:

– Хоҙайым, өнөммө, төшөммө?! Хәбәрһеҙ-ниһеҙ бит әле, үлгәндер үк тигәйнем балаҡайымды. Һаҡал ғынаһы үҫеп киткән, – тип һөйләнә-һөйләнә, уны арҡаһынан ҡағып яратты. Атаһының да ҡыуанысының сиге юҡ. Ул иламай, ә йыйырсыҡланған бите, нурһыҙ күҙе, тешһеҙ ауыҙы менән бер туҡтауһыҙ йылмая ине. Күрше-тирәләр йыйылып киттеләр. Әллә кемдәр әллә кемдәрен һораша. Ирҙәр, әбейҙәр, Юлдыбайға яҡын ғына ултырып, ауыҙына инерҙәй булып һорашалар. Йәш һалдаткалар, урындыҡтың ситенә генә ултырып, тартынып ҡына ҡәйнәләренең ҡолағына шыбырлайҙар:

– Ҡәйнәм, улыңды күрмәнеме икән, Юлдыбай ҡайнағанан һора әле…

Юлдыбайҙан өмөтһөҙ хәбәр ишетәләр ҙә баштарын түбән эйәләр, тамаҡ төбөнә төйөн килеп тығыла, күҙҙәренә йәш эркелә. Ҡайһы берәүҙәр өндәшмәй оҙаҡ текләп ултыра-ултыралар ҙа, Юлдыбайҙымы әллә үҙенең йылдар буйы хәбәрһеҙ юғалған яҡын кешеләрен иҫкә төшөрөпмө, – билдәһеҙ рәүештә:

– Баа-хыр ғына… – тип һуҙып ҡуялар.

Балалары ҡайтмаған әбейҙәр ҙә:

– Ана, һау булғас ни, ситкә сәселгән ризыҡтарын йыйҙы ла ҡайтып та килде. Минең кескәйем дә шулай итеп

ҡайтып килерме икән, әллә берәй ерҙә, күҙгенәһе тилмереп, үлеп ҡалырмы икән? – тиҙәр ҙә, йөрәктәрен өҙөп сыҡҡан күҙ йәштәренә быуылып, һүҙҙән туҡтайҙар…

– Әллә инде, юл төштәре күрәм, бөгөн дә төшөмдә һәйбәт йылға буйында икәнмен, тием. Һәйбәт еҫле һабын менән күпертеп тороп битемде йыуам, имеш. Күбеге төптө бөтмәй икән, тием, шулайтып ҡына күреп ятҡанда, Зөлхизә уятып ҡуйҙы.

– Эй, ҡалай һәйбәт юл төшө, һин әле. Йылғаһы – юл, һабын күперегә ат тире бит инде. Ҡайтыр, Алла бирһә, улыңдың юлы булыр.

– Үҙем дә шулай тип юраҡайным, ни булыр инде… – Төш тыңлаусыларҙың барыһы ла өмөт менән йылмаялар.

Ул арала Юлдыбайҙан алдараҡ ҡайтҡан һалдаттар ҙа килеп инделәр.

– Йә, Юлдыбай! Ҡайттым, тиһең, ә? Шулайтып батшаңды тәкмәстереп ҡайтып килдек шул. Һин ҡайҙан, Һамар аша ҡайттыңмы ни? Ә, улай булғас, юлда осрашырға тура килмәгән шул. Беҙ Байрам менән Һарытау аша килеп, Яйыҡ төшөп, шунан урап ҡайттыҡ…

Ҡайтыусыларҙың күбеһе зәғиф. Ҡайһыһының бер ҡулы юҡ, ҡайһыһының аяғы аҡһаҡ, ҡайһы берәүҙәренең бармағы тупыс, ҡайһылары йүткерә, хәлһеҙ, ләкин йөҙҙәрендә өҙлөкһөҙ шатлыҡ, йылмайыуҙар…

Петроградтан ҡайтҡан Хөсәйен үҙенең ҡыҙыҡтарын һөйләй:

– Шунан, малай, Ленин заграницанан ҡайта, тигәнде ишеткәс тә, вокзалға уны ҡаршы алырға киттек. Ҡара ҡором кеүек эшселәр, һалдаттар йыйылып киткәнбеҙ, матростар ҙа бар. Ленин бронабикка баҫып тороп һөйләп ебәрҙе, әй. Прәмә инде ҡыуанысыңдан ят та үл. «Завод – эшселәргә, ер крәҫтиәндәргә булһын. Батша төштө, ирек алынды, йәшәһен Социалистик революция!» – ти. Беҙ, малай, кәпәстәрҙе һауаға ырғытып, ура ҡысҡырабыҙ. Ундағы шатлыҡтарҙы күрһәңсе инде. Хатта Ленинға барып әллә ниҙәр һөйләге килә.

– Һин Лениндың үҙен күргәнһең икән, улай булғас.

– Эй, күреүҙе әйтәһең, янына ғына, яҡын ғына барып ҡарап торҙом. Күп булһа, бына минән алып ана Малбай олатайыма тиклем генә булыр арабыҙ.

Барыһы ла ҡыҙығып ябырылалар.

– Йә, йә, ниндәйерәк кеше? Мыҡты кәүҙәлелер инде ул?

– Военныйҙыр инде ул һиңә, Ленин булһын да.

– Юҡ, түгел, военный ҙа түгел, артыҡ мыҡты ла түгел. Урта кәүҙәле, яҫы маңлайлы, өлкән башлы бер кеше. Өҫтөндә пальтә генә, башындағы кипкәһен алып, ҡулына ҡыҫты ла һөйләй ҙә башланы. Әйтәм бит, ҡәҙимге бер кеше.

– Ҡуйсы, ысынмы?

Уларҙың йөҙҙәрендә шатлыҡ ҡатыш аптыраш тыуҙы. Ҡайһылары эстән генә: «Ни ысын булһын, Хөсәйен күргәнде һөйләй тиһеңме шул», – тип уйланы.

Бисәләр үҙ-ара һөйләшәләр.

– Уныһы кем һуң ул, һөйләгәндәре?

Күпте белә торған Хөбби ҡарсыҡ яуап бирә:

– Бына ошо һуғышты самай туҡтатыусы кеше, ти, ул. Батшаға ҡаршы сығып, уны төшөртөүсе лә шул булған, ти, бит. Һалдаттарға, һуғышмағыҙ ҙа нитмәгеҙ, ҡайтығыҙ ҙа китегеҙ, һеҙгә бер нәмә лә булмаҫ, тип әйткән, ти.

Барыһы ла аптырашта ҡалды. Ҡайһылары аҡрын ғына:

– Берәй изге бәндәлер ул. Батша тиклем батшаға ҡаршы тел әйтә алырлыҡ булғас, буш кеше булмаҫ инде ул, – тип һөҙөмтәләп ҡуялар.

Икһеҙ-сикһеҙ яңы хәбәрҙәр...

Айбикәнең шул көндәге эсенә һыймаған шатлығы иҫенә килеп төштө. Юлдыбай ҡайтып төшөү менән, әйтерһең, өс-дүрт йыл күргән нужа, ҡайғы-хәсрәттәре бер юлы алып ташланды. Тағы ла шатлыҡлы көндәр башланды.

Юлдыбай ике тапҡыр яраланған, шулай ҙа зәғифләнеп ҡалмаған. Тик үтә ябыҡҡан һәм хәлһеҙләнгәйне. Ул ауылға советтар һайларға, байҙарҙың ерҙәрен, малдарын ярлыларға алырға, тағы әллә ниҙәр, әллә ниҙәр эшләргә тип, бер туҡтамай тотоноп китте. Ул ҡайһы саҡтарҙа ашап-эсергә лә ҡайтмай торғайны.

Айбикә унын һөйләгәндәренең ҡайһыһын аңлай, ҡайһыһын аңламай: «Инде һуғыш бөткәс, тик кенә ятһа, ни була икән?» – тип уйлай ине. Шул уйын бер нисә тапҡыр Юлдыбайға әйтеп ҡараһа ла, ул көлә биреп:

– Эй бисә, бисә, ул улай ғына булмай шул. Хәҙер бына хөрриәт, донъя үҙебеҙгә ҡалды, шуға күрә беҙгә эшләргә, донъяны үҙебеҙсә ҡорорға кәрәк. Оҙаҡламай бына ярлыларҙың бөтәһенә лә ерҙе тигеҙләп бүлеп бирергә итәләр, шунын өсөн эш башында байҙар ултырмаһын, ярлылар үҙҙәре ултырһын, – тип әллә ни тиклем һөйләй ине. Айбикә ерҙәр, ярлылар, байҙар тигәндәренә төшөнһә лә, Юлдыбайҙың «эшселәр, заводтар, Ленин, Керенский, большевик, меньшевик» тигәндәрен аңлап бөтә алмай ине. Ғүмерҙә күрмәгән, ишетмәгән нәмә булғанға, төштә күргән кеүек кенә булып, күҙ алдына килеп өлгөрмәҫ борон, таралып ҡалалар ине. Ләкин был тыныс ваҡыттар оҙаҡҡа һуҙылманы. Юлдыбай ҡайтып бер йылдай ҙа торманы, Ҡыҙыл гвардияға күңеле булып яҙылып[1], тағы ла һуғышҡа китте.

Атаһы менән әсәһенең:

– Ҡуй, балам, йөрөмә инде. Ҡарт көнөбөҙҙә беҙҙе ташлап, ҡайҙа бараһың? Һуғыштан туймаһыңмы, ҡайтып саҡ күҙебеҙгә күрендең дә тағы китәһең! Бына килен дә нисә йыл көттө. Ул бахырға ла рәхмәт инде. Ҡартайған көнөбөҙҙә беҙҙе ташламай, һаман ҡарап торҙо. Йөрөмә инде! – тип ҡабат-ҡабат инәлеп илаһалар ҙа, Юлдыбай уларға ҡараманы, яңынан китте.

– Әй, әсәй, юҡҡа илашмағыҙ инде. Оҙаҡҡа китмәйем бит мин. Күп булһа, ике ай, уҙа барһа, өс ай йөрөрмөн дә, бына күрегеҙ ҙә торағоҙ, тиҙ үк ҡайтып килермен. Хәҙер һуғышмай булмай шул. Бына бит, ишетеп тораһығыҙ, ярлыларға ер бирәбеҙ, фәлән, тип алданылар ҙа, бер нәмә лә бирмәй, эш башында байҙар ултыра бирәләр. Батшаһын төшөргәс, былары ни нәмә ул, – тип өйҙәгеләрҙе әүрәтте.

---

[1] *Күңеле булып яҙылып* – үҙ ирке менән яҙылыу мәғәнәһендә.

Уны тағы ла илашып оҙаттылар. Айбикә ул ваҡытта «тиҙ ҡайт, йәме»нән башҡа һүҙ әйтә алманы. Уның күҙ йәштәре әйтер һүҙҙәрен әйтергә ирек бирмәнеләр.

Ул киткәс, өй үлек сыҡҡан кеүек бушап, ҡараңғы булып ҡалды. Әбей, һаман һөйләнеп, илауҙан туҡтаманы.

– Иреклe башын ирекһеҙ итеп, әҙәм үҙ ихтыяры менән ут эсенә ынтылыр икән... Был ниткән бала булды, Хоҙайым...

Юлдыбайҙы тиҙ ҡайтыр тип, дүрт күҙ менән көтһәләр ҙә, ул тиҙ генә ҡайта алманы. Тик ун туғыҙынсы йылдың аҙаҡтарында ул үҙенең отряды менән бик ҡабалан ғына үҙҙәренең ауылына тейеп китте. Ул ваҡытта улар ҡасып барған аҡтарҙы, шулар эсендә Ҡотлояр ҡарттың балаһы – Ишбулат офицерҙы, баҫмалатып ҡыуып[1] баралар ине. Улар иртә менән килделәр ҙә көн буйы ҡасҡан-боҫҡандарҙы эҙләп, Ҡотлоярҙың өйҙәрен, һарай, келәттәрен тентеп, мулла балаһы Аллабирҙене ҡулға алып, кискә ҡарай ауылдан сығып та киттеләр. Айбикәгә был көн шатлыҡлы төш кенә кеүек булып ҡалғайны. Ул көндө Юлдыбайҙың үҙҙәрендә ултырып ике сынаяҡ сәй эсергә лә ваҡыты булманы.

Фәғилә әбей менән Айбикә тиҙ генә аҙыҡ-маҙар йүнләп, бауырһаҡ бешереп, тоҡсайға тултырып, Юлдыбайға бирҙеләр. Ул:

– Юҡҡа мәшәҡәтләнәһегеҙ, – тине. Уны ла алманы. Әсәһе, уға ҡарамай, тоҡсайҙы йәшел брезент тоғона һалып ебәрҙе.

Юлдыбайҙың, шул көндән бик күп ваҡыт үткәс кенә, бер хаты килде, «Бөтә полкыбыҙ менән Петроградҡа киттек», – тип яҙғайны. Шунан бирле хаты ла, хәбәре лә юҡ. Әллә үле, әллә тере. «Үҙе булһа, әллә былайтып йөрөмәҫ тә инем...» – Айбикәнең күҙҙәренән эре-эре йәш бөрсөктәре тәгәрәп төштөләр. Аслыҡ йылда үлеп ҡалған ҡайны менән ҡәйнәһе күҙ алдына килде. Туры ат менән ҡыҙыл һыйырҙы ла һуйып ашанылар. Ләкин келәттә бер тәпән

---

[1] *Баҫмалатып ҡыуыу* – үксәләренә баҫа-баҫа ҡыуып барыу мәғәнәһендә.

запас йыйып һаҡларлыҡ байлыҡ булмағас, ҡара көҙҙән үк асығып, ҡыш уртаһына яҡын үлеп ҡалдылар.

Айбикә лә асығып, йөҙҙәре шешенде. Ул эт тә, бесәй ҙә, табылғанда, алабута ла ашаны, йәш кеше шулай ҙа түҙҙе. Ул арала инде совет ашхана асып, шуның менән тамаҡ ялғанып китте. Ашхананы Ҡотлоярҙың өйөндә астылар. Ул ваҡытта ауыл советы рәйесе, арғы остоң Хөсәйене, Ҡотлоярҙың яҡын кешеһе ине. Уларҙың ҡулдарынан һыҡҡандары ғына тама. Үҙҙәре, бер өйкөм генә ағай-эне, бергәләп эш күрәләр. Ботлап-ботлап аҡ он, какао, дөгөләрҙе бүлешеп алып ашайҙар. Бисәләре ҡаҙаҡлап кейемһалым, көмөш тәңкәләргә алмаштырып кейенәләр. Уларҙың һәр береһендә бер-ике ҡаҙаҡ онға йәки бер ҡаҙаҡ иткә алмаштырып алынған төрлө ҙурлыҡтағы самауырҙар, өлкән-өлкән яҫтыҡтар менән келәттәре тулып ята. Быны берәй кеше һиҙеп, уларға һүҙ әйтә икән, ашханала ашатмау менән ҡурҡыталар ине.

Ана шул ваҡытта, йортҡа өйрә, икмәк бешерергә кеше кәрәк булғас, Ҡотлояр байҙың бисәһе Ғәйшә Айбикәне үҙенә саҡырып алып:

– Айбикә килен, былайтып асығып йөрөмә. Ашхананан алып ашаған менән, өйөңә яғырға утының юҡ, һыуыҡ өйҙә яңғыҙ ултырғансы, беҙгә кил. Миңә арлыбирле эш эшләшерһең. Хәҙер, кемгә әйтһәм, шул килә. Тик һине үҙебеҙҙеке тип кенә әйтәм, – тине.

Шул ваҡыттан бирле Айбикә Ҡотлояр байҙа тора. Шунан бирле көнө-төнө эшләп бушамай, шул көндән бирле йүнләп йоҡоһо туйғаны, рәхәтләнеп ял иткәне юҡ. Шунан бирле әрләнә-тиргәлә ине.

Айбикә уйҙарының шул еренә еткәндә, төпкө өйҙөң ишеге асылған тауыш ишетелде. Ул урынынан һикереп торҙо. Ишектән Ғәйшә күренде:

– Әстәғәфирулла. Яңы тороп киләһеңме? Һай-һай, йоҡлайһың да инде. Ҡыҙыл эңерҙән ятып, ҡояш сыҡҡансы… – тип һөйләнә-һөйләнә, ҡулына ҡомған тотоп, тышҡа сығып китте.

Тик әле, ҡояш сығыу түгел, таң яғы яңы аллана башлағайны.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ата-әсәһе янында Айбикә нисек йәшәй?
**2.** Ни өсөн был көндәр уның күңелендә ғүмеренең иң яҡшы, иң рәхәт ваҡыттары булып иҫендә ҡалған?
**3.** Ошо бүлектәрҙәге геройҙарҙың һәр ҡайһыһына характеристика бирегеҙ.
**4.** Иман шарты, әбжәт тураһында нимә беләһегеҙ?
**5.** Бүлектәр биш йылдан ашыу ваҡытты үҙ эсенә ала. Был осорҙа илдә ниндәй оло ваҡиғалар булып үтә?
**6.** Ни өсөн халыҡ Ленин менән ныҡлап ҡыҙыҡһына, ентекләп һораша? Һеҙ уның тураһында ниҙәр беләһегеҙ?

## IV

Көн буйынса нуры, йылыһы менән тәнгә йылылыҡ, рәхәтлек биргән ҡояш, инде байырға яҡынлашып, тау битендәге урман артына йәшеренде. Уның нурының ҡыҙыл уттары, урмандың тигеҙһеҙ ағастары араһына теҙеп ҡуйылған һөңгөләр һымаҡ, уҙалы-ҡаҙалы йыш-йыш булып теҙелеп торалар.

Айбикә тиҙ генә бейәләрен ағытты ла[1], һуңға ҡалыуҙан ҡурҡып, ҡабалан-ҡабалан түбәнге осҡа һыйыр көтөүенә ҡаршы китте.

Шулай ашығып ҡына барғанда, юлда уға уҡытыусы Хәҙисә менән Алмаҡай осранылар.

– Айбикә еңгә! Туҡта әле, туҡта! Беҙ һиңә китеп бара инек әле, ярай, үҙең тап булдың.

Айбикә туҡтағыһы килмәй генә:

– Йә, ни? – тине.

Хәҙисә, уға яҡыныраҡ килеп:

– Ай, ашығырҙай булғанһың икән дә баһа! Туҡта, һөйләшәйек әле. – Шулай тигәс, Айбикә бөтөнләй туҡтаны. Ул әле һары сәсле, күк күҙле, өҫтөнә аҡ кофта менән ҡара юбка кейгән, башына ҡыҙыл яулыҡты артҡа ҡайырып бәйләгән, аяғына башалтай менән сандалий кейгән асыҡ йөҙлө Хәҙисәгә, әле ҡырҡҡан ҡара сәсле, янып торған ҡара күҙле, яҙғы елгә тутлап өлгөргән ҡара-тура Алмаҡайға алмашлап ҡарай-ҡарай, йылмайып:

---

[1] *Ағытыу* – ҡымыҙға бәйләгән һауын бейәләрен ҡолондары менән иркенгә ебәреү.

– Йә, ни бар? Тиҙ генә һөйләгеҙ ҙә, ана һыйырҙарым етеп килә, – тине.

Ҡыҙҙар береһенең һүҙен икенсеһе бүлеп, ашыға-ашыға:

– Еңгә, һин бөгөн клубҡа бар. Унда йыйылыш, шунан һуң уйын була. Бик ҡыҙыҡ була, барырһың, йәме, – тинеләр.

Айбикә, быны ишеткәс, һиҫкәнеп китте:

– Атаҡ, ҡуйығыҙ, һылыуҙарым, клубҡа барырға ҡайҙа ул. Унда барыу түгел, һеҙҙе күреп һөйләшкәнде ишетһәләр ҙә әрләрҙәр әле. Эшем дә бик күп, хатта бороларға ла ваҡытым юҡ. Ғәйшә еңгәм ишетеп ҡалһа… – тип урынынан ҡуҙғала башланы.

Ләкин Хәҙисә менән Алмаҡай уның ай-вайына ҡуйманылар. Уны, ҡулынан тотоп, туҡтаттылар.

– Юҡты ләпелдәп торма! Ни Ғәйшәнән ҡотоң оса һуң? Һыйырҙары кәрәк булһа, үҙе барып алыр.

– Эшем күп, тигән була, клубҡа барыу эш түгелдер шул! Ғәйшәнең һиндә ни эше бар? Әрләһәләр, тот та беҙгә кил, – тинеләр…

Айбикә бер аҙ ыңғайланды, ҡыҙҙарға ҡарап, йомшаҡ ҡына көлдө:

– Әлләсе… Тегеләрҙең киске тамаҡтарына ла ашатмағанмын, эшемде бөтөрә алһам, уйлап ҡарармын.

– Бөтөрөрһөң, эшеңде лә бөтөрөрһөң. Әле йыйылыш һигеҙҙә генә башлана.

Айбикә көлөмһөрәп юлына китте. Алмаҡай, уның арҡаһына еңел генә шаяртып һуғып:

– Ҡара, еңгә, һүҙебеҙҙе йыҡма, – тип ҡалды.

Аҡҡондоҙ йылғаһы аръяғында типһәнлек буйлап, ҡара болот һымаҡ күсеп, һыйыр, һарыҡ көтөүе төшөп килә ине. Айбикә күпер төбөнә килеп еткәндә, көтөүгә ҡаршы сыҡҡан ҡыҙҙар, ҡатындар, әбейҙәр, малайҙар, эркелешеп, көтөүҙең килеп еткәнен көтөп торалар ине. Уларҙың ҡайһыһы үҙ-ара һөйләшә, ҡайһылары көлөшә; бала-саға, береһен-береһе этеп йығып, елкәләренә төртөп шаярышалар; ҡыҙҙар, сәстәрен һыйпап, күлдәктәрен төҙәтеп, йылмайышып, көлөшөп, ҡупшыланып, ҡулда-

рындағы сыбыҡтарын уйната-уйната, үҙ-ара әңгәмәләшәләр...

Көтөү быуаға килеп тығылды. Уларҙың ҡайһыһы һыу эсә, һыйырҙар, һарыҡтар аралашып, буталып, бәрәстәр тезелдәшеп баҡырышалар. Һыйырҙар мөңрәшәләр, бәрәстәрен юғалтып, һарыҡтар баҡырышалар ҙа, табып алғас, еҫкәп мекерләйҙәр. Шул арала ҡайһы берәүҙәрҙең бәйләнеп өлгөрмәгән быҙауҙары көтөүгә ҡаршы сабып киләләр ҙә, инәләрен табып алып, ҡабалан-ҡабалан имергә керешәләр. Ҡатындар араһында сыр-сыу, тауыш күтәрелә.

– Ҡарлуғас еңгә! Ана, тиҙ бул, һыйырыңды имә, быҙауың ҡушылды, һыртаҡ һыйырыңдың быҙауы, йүгер, ана, әле генә ҡушылды, тиҙ бул! – тип ҡысҡыралар.

Быны күреп ҡалған Ҡарлуғас ҡабаланып, ахылдап йүгереп барып быҙауының томшоғон инәһенең елененән һелкә тартып ала ла, итәгенә йәбешеп, эшкә оронсоҡлаған ике-өс йәшлек балаһын да, быҙауын да, һыйырын да әрләй башлай:

– ...Һәүкә! Уй, ҡороғоро, һөтөмдө генә әрәм итте лә баһа. Бына бер балаһы ла бороломрға ирек бирмәй бит, рәхмәт төшкөрө нәмә. Әйҙә, атла, ҡыу быҙауҙы. Ана, сыбыҡты алып ҡыу.

Бала әсәһенең һүҙен тыңлай. Юл буйында ятҡан сыбыҡты алып, танауын мыш-мыш тарта-тарта, һулаҡай ҡулы менән төшөп барған ҡыҫҡа балаҡлы ыштанының бөрмәһенән күтәрә-күтәрә быҙауҙы ҡыуа. Быны тыңламаһа, был сыбыҡтың үҙенә әләгерен һиҙә, шуға күрә, бара торғас һөрөнөп йығылып китһә лә, тауышын сығармай ғына илай...

Ҡайһы бер әбейҙәр, үҙе кеүек үк умшырайған ҡарт һыйырҙың арҡаһынан тапап һөйә-һөйә һөйләнеп, татыу ғына бергә ҡайталар. Малайҙарға етә ҡала: улар һыйырҙарҙың ҡойроғона йәбешәләр ҙә, сыбыҡ менән бер-ике һыҙыра тартып, туйған һыйырҙы быхылдатып, һөт менән тулған елендәрен сайҡалтып, береһен-береһе уҙармандан саптырып, өйҙәренә алып ҡайталар. Быны күргән әсәләре ярһып ҡаршы баралар:

– Ай, ен ботағы! Нисә тапҡыр әйттем мин һиңә, туйған һыйырҙы шәп ҡыумай алып ҡайт, тип. Ҡабаланып, атаң башына бараһыңмы, кафыр? – тип ҡыҙып-туҙып унан-бынан һелтәп ҡалалар. Малайҙар быны ҡолағына ла элмәйҙәр, әсәләре һуғырға ғына тип ынтылғанда, ҡултыҡ аҫтарынан сығып ҡасалар.

Ул арала быуаның түбән яғындағы таш кисеүҙән йылҡы көтөүе һыу аръяғына, яланға, сыға башлай. Уларҙың да ҡолондары сырҡырай, бейәләре кешнәй, айғырҙары тибешә, сыр-сыу, саң-томан күтәрелә.

Айбикә шул сыр-сыу тауыш, ҡысҡырыштар араһында Ҡотлоярҙың һарыҡтарын, һыйырҙарын, кәзәләрен айырып алып, урам буйлап ҡыуып ҡайтып китте.

* * *

Айбикә хужаларын тамаҡландырып, эшен бөтөрҙө лә уларға белгертмәй генә клубҡа барырға сыҡты.

«Юлда кеше күрмәһә ярар ине, кеше осраһа, әллә ни тип уйлар. Унда барғас, ҡалайтып ултырырмын икән? Ҡайнаға тейеш кешеләр ҙә барҙыр инде», – тип шикләнә-шикләнә барҙы.

Ул барып ингәндә, йыйылыш башланғайны. Ул тағы ла ҡаушаңҡырап тупһанан үтергәме әллә боролоп китергәме тип икеләнеп торғанда, алдағы рәттең бирге башында ултырған Алмаҡай уны күреп ҡалып, урынынан тороп, аяҡ ослап ҡына ҡаршы килде. Айбикәне ҡулынан етәкләп алып барып, үҙ янына ултыртты ла уның ҡолағына:

– Бына, еңгә тиһәк буласы. Әйткән һүҙеңдә торҙоң, – тип шыбырланы.

Докладты ҡыш көнө Ҡотлоярҙың бажаһы Абдулланы төшөрөп ташлағандан һуң уның урынына һайланған батрак Сирай һөйләй ине.

– ...Инде, иптәштәр, кооперацияға килһәк, бында ла ҡыш уртаһынан бирле яҡшы ғына үҙгәрештәр бар. Шулай булғас, минеңсә, бында бер ҙә көтөп тора торғаны юҡ, тотабыҙ ҙа, яңы ауылға күсеп ултырып, артель булып

эшләй башлайбыҙ. Шунан колхозға күсергә лә уңайлы була. Минең әйтә торған һүҙем шул, иптәштәр, – тине.

Ҡаршы сығып һөйләүселәр күп булды…

– Һин, ҡустым, Сирай, улай еңел генә һөйләйһең дә бит, эш уның менән генә барып сығырмы икән? Бына һинең яҡшы бер нәмәң дә юҡ. «Бер ат та бер ҡамсы» тигәндәй, туҡалаҡ өйөң дә бисә, күтәренден дә киттең. Ә бына беҙҙең аҙ булһа ла донъя, кәртә-ҡура, бала-саға бар. Унда күсеп, билемде бөксәнләтеп йөрөгәнсе, мин былай ҙа ике ат, өс һыйырым менән үҙ ғаиләмде бик һәйбәт туйҙырып тора алам, донъям да туҙмаҫ. Унда күскәс, өйҙө боҙорға, яңынан һалырға, кәртә-ҡураларҙы күсерергә кәрәк, ә быға беҙҙең бөтә малыбыҙ ҙа етмәҫ…

Ләкин был оҙаҡҡа барманы, төрлө яҡтан һүҙ алыусылар уларға ҡаршы төштөләр.

– Ҡуй әле, Хөсәйен ағай. Юҡты бысылдайһың. Беҙ был турала үткән йыйылышта уҡ яҡшылап кәңәштек инде. Һин ул йыйылышҡа килмәнең, шуға күрә яңғырайһың.

Унан һуң Ғәбиҙә еңгә ҡалҡты:

– Һин, Хөсәйен ҡәйнеш, бында Ҡотлояр һүҙен һөйләп торма әле. Үткән йыйылышҡа нишләп килмәнең? Һин ул көндө Ҡотлоярҙа бал эсеп, һыйланып яттың, беҙ белмәй тиһеңме әллә? Шуға күрә уның йырын йырлап ултыраһың. Күсмәһәң ни әллә, атамдан ары! Берәүҙе лә көсләп күсергән кеше юҡ, теләй икәнһең, күсәһең, теләмәй икәнһең, тағы ла ана тора.

Хөсәйен быға асыуланды:

– Һеҙ, бисәләр, инде ҡырынға һаплауҙы кешенән һорамаҫһығыҙ. Йыйылыш булғас, әйтергә ярамаймы әллә? Мин бит күсмәйем тимәйем, бында һүҙҙең айышы кәрәк… – Ул тағы ниҙер әйтергә самалап торһа ла, әйтмәй, урынына ултырҙы.

– Төшөндөк, айышына ла төшөндөк, – тип ҡысҡырыштылар.

Ғәбиҙә еңгә тағы ябырылды:

– Бисәләр ни әле? Һинең ир булыуың ҡороһон, бүрегең аҫтында бисәләр аҡылындай ҙа аҡылың булмағас!

– Ҡуйығыҙ әле, ни ирешергә тотондоғоҙ тағы.

Рәйес тауышҡа ҡуйҙы. Унлап кешенән башҡалары «күсергә» тигән ҡарарға ҡул күтәрҙеләр...

Айбикә был һөйләгәндәрҙең барыһын ысын күңел менән тыңланы... Ул һөйләүселәрҙең артынан, үҙе лә абайламайынса, халыҡҡа ҡушылып, ҡул сапты. Аҙаҡ, ҡарарҙар сығарып, тауышҡа ҡуйғанда ла, иң тәүҙә үҙе ҡул күтәрҙе. Уның юлда килгәндәге шикләнеүҙәре әллә ҡайҙа юғалдылар. Ысынлап та, мин ни нәмәһенән ҡурҡып торам һуң әле, тип уйланы.

Йәнгә яғымлы, күңелгә яҡын булған һүҙҙәрҙән ул батырланып киткән кеүек булды. Боролоп, йыйылыштағы халыҡҡа күҙ төшөрҙө. Ауылдың бөтә йәштәре тигәндәй килгәндәр. Ҡайһылары тәҙрә төбөнә теҙелгәндәр. Сирайҙың бисәһе имсәк балаһын күтәреп килгән. Алмаҡайҙың еңгәһе менән, оло булыуына ҡарамай, әсәһе лә килгән. Тағы әллә кемдәр, әллә кемдәр... Ана алда, дүртенсе рәттә, мәзин улы Фазлый менән Абдулла байҙың малайы үҙ-ара аҡрын ғына һөйләшәләр ҙә, яндарында ултырған Хөсәйендең ҡолағына ниҙер шыбырлап, бисәләр ултырған яҡҡа ҡарап, мыҫҡыл итеп ауыҙҙарын ҡыйшайтып көләләр. Улар бисәләрен дә алып килмәгәндәр.

Айбикә, кистең һуң булыуына ҡарамаҫтан, үҙендә арығанлыҡ һиҙмәне...

Айбикә ошо көндән һуң йыйылыштарҙан ҡалмай башланы. Яңы ауылға күсеүселәр рәтенә лә яҙылды. Уның яңғыҙлығы, ярлылығы, кәмһетелеүҙәре онотолған кеүек булып киттеләр.

Ҡотлояр был араларҙа гел асыуланып ҡайта, әле бисәһен, әле балаларын, бигерәк тә Айбикәне әрләй. Сәй эсергә ултырғанда ла ҡабағы яҙылмай. Ҡунаҡта булғанда ла элекке кеүек көлөп, кинәнеп һөйләү урынына, ҡыҙыптуҙып, бүтәндәр менән һүҙ көрәштерә:

– Күсһендәр, китһендәр ана ауылдан! Йә, шунан ни сыға тип уйлайһығыҙ? Имеш, күмәкләшеп иген сәсәләр. Күмәкләшеп йәшәйҙәр. Бик шәп инде. Алла бирмәгәнде, күмәкләшеү менән була, тиҙәр инде!..

Өй артында йыйылышта һөйләшеп ултырғанда ла яңы ауылға күсеүселәр исемлегенә яҙылған кешеләргә күҙҙәрен секерәйтеп, мыҫҡыл итеп көлөп, сәнсеп, төртөп һөйләй.

Был ваҡыттарҙа Айбикәгә тыныслыҡ бөтөнләй бөттө. Уның йыйылышҡа йөрөп, күсеүселәр исемлегенә яҙылғанын белгәс, көнө-төнө әрләй башланылар. Ҡотлояр урамда һүҙ көрәштереп, еңә алмай ҡайтҡас, бер көнө Айбикәгә тотондо:

– Айбикә килен, һин минең һүҙемде тыңла әле. Ни тигән эш был? Имеш, бисә башың менән йыйылыштарға йөрөү, йыйылыштарҙа тороп һүҙ һөйләп, ул ғына етмәһә, яңы ауылға күсәм, тигән булып, шул елғыуарҙар артынан эйәр. Туймай торған тамағың бармы, өҫтөң яланғасмы, әҙерәк кешенән оялырға, Алланан ҡурҡырға, исмаһам, нисә йыл аҫрап торғандың ҡәҙерен белергә кәрәк ине. Яманмы, яҡшымы, ҡайның менән бер туған ҡайнағаңмын, миңә кәңәш итергә, бәләкәй аҡыллашырға кәрәк ине.

Иренең тауышы аҙыраҡ баҫылғас, Ғәйшә тотондо:

– Йөрөй шунда тартанлаған Хәҙисәләр, Алмаҡайҙар артынан. Алмаҡай булам, тип сәсеңде лә ҡырҡтыр инде, тәүбә әстәғәфирулла. Улар яҡшылыҡҡа өйрәтә, тиһеңдер инде, байғош...

Уларға быйыл ҡыш техникумдан ҡыуылып ҡайтҡан Көнһылыу ҡушылды. Ул, күҙенең ҡыры менән генә Айбикәгә ҡарап, ауыҙын ҡыйшайтып:

– Какжы, коммунистка була ул! – тине.

Быға тиклем хәл йыйып алған Ҡотлояр тағы һүҙ башланы:

– Былай итеп беҙҙе әҙәм көлкөһөнә ҡалдырып йөрөй торған булһаң, бер көн дә торма. «Эт һимерһә, эйәһен тешләй», – ти. Ана тора юлың! Минең Ҡотлояр исемемде бысратып йөрөгәнсе, сыҡ та кит.

Быға тиклем өндәшмәй торған Айбикә, «сығып кит» тигән һүҙҙе ишеткәс, түҙмәне:

– Сығып китеүҙе мин һеҙҙән һорамайым. Һеҙ әйтмәһәгеҙ ҙә, күптән әҙерләнгәнмен. Минең аяҡ-ҡулым һау булһа, ҡайҙа ла эш табыла. Һинең ҡайнаға булыуың бөгөн генә иҫеңә төштөмө ни? Бер туған ағаң астан үлгәндә, ҡайҙа инең? Биш йыл тороп, өҫтөмә бер ҡат кейем алып бирҙегеҙме? Һаман һеҙҙең ҡалдыҡ-боҫтоҡ аламағыҙҙы кейеп йөрөйөм. Мин ни эшләп һеҙҙән кәңәш

һорайым, ти. Кәңәш кәрәк булһа, ана тора Совет. Ул мине асҡа үлтермәç әле. Һеҙҙе судҡа бирәм икән, бөгөн үк баш-аяғығыҙҙы әйләндереп, эш хаҡымды түләтерҙәр. Әле ҡыуып ҡурҡытмаҡсы булаһығыҙ икән, – тине.

Ҡотлояр Айбикәнең был ҡыйыулығын күреп, тәүҙә аптырап ҡалды. Ул биш йыл буйы ауыҙ асып һүҙ әйтмәгән Айбикәнән быны көтмәгәйне. Уның былай аң-таң булыуы бер минутҡа ғына һуҙылды. Ул Айбикәнең һүҙҙәренән үҙен үҙе тота алмаçлыҡ булып ҡыҙып китте, асыуына сыҙай алмай, бүлмәнең бер башынан икенсе башына шәп-шәп атлап йөрөй башланы. Айбикә, уның әрләп бөткәнен көтмәй, аш өйөнә сығып киткәс, тауышланып көрһөндө лә:

– Һе. Вәт һин уны! Ай донъя... – тип һуҙып ҡуйҙы.

Айбикә шул көнө кис менән бөтә ваҡ-төйәк нәмәһен йыйҙы ла Алмаҡайҙарға китте.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Яҙыусы ауыл халҡының көтөү ҡаршылауын нисек тасуирлай? Был күренештән ниндәй фәһем алырға була?
**2.** Ҡотлояр бай менән Ғәйшә донъяһынан Айбикә нисек ҡотола? Бының өсөн уға ниндәй хәлдәр йоғонто яһай?
**3.** Биш йыл буйы ауыҙ асып һүҙ әйтергә ҡыймаған Айбикәнең Ҡотлояр менән Ғәйшәгә ҡыйыу, тәүәккәл өндәшеүенең сәбәптәрен асыҡлап ҡарағыҙ.

* * *

Повестың бишенсе бүлегендә ваҡиға ҡалала бара. Беҙ Айбикәнең ире Юлдыбайҙың тормошон күрәбеҙ. Ул хәҙер ҡалала етәксе урында эшләй. Рәйсә исемле ҡатын менән донъя ҡорған. Ләкин тәүҙә культуралы булып күренгән Рәйсә мещанка булып сыға. Ул Юлдыбайға «Юличка» тип исем ҡушып алған, уйлағаны кейем-һалым, кәйеф-сафа ҡороу. Юлдыбайға ауылдан Таймаç тигән иптәше килә. Ләкин улар иркенләп һөйләшеп тә китә алмайҙар. Юлдыбай ҡатыны Рәйсәнән уңайһыҙлана, Таймаç үҙен был өйҙә ят һиҙә. Ахырҙа ул, түҙә алмайынса, Юлдыбайға: «Тура әйткән туғанына ярамаған, тиҙәр, шунда ла һин асыуланма, башың юғалған икән, дуç», – тип әйтә. Ул Юлдыбайҙы мещанлыҡ һаҙлығына батып

барыуҙа ғәйепләй. Юлдыбай үҙенең хатаһын танырға мәжбүр була. Таймаҫ ауылындағы колхоз хәлдәрен һөйләп бирә. «Юлдыбай, һиңә Айбикәне хәҙер күрергә кәрәк ине, танымаҫһың да... Егерме алтынсы йылдың көҙөндә партияға алдыҡ. Ул теге, был һинең нәҙек сираҡ Рәйсәңде сиртеп кенә йыға. Үткән ҡыш кантонда асылған тракторсылар курсын бөтөрөп, хәҙер үҙебеҙҙең колхоздың тракторсыһы булып алды», – ти ул.

## VI

Утыҙынсы йылдың тәүге айы ине. Айбикә ҡалала беренсе тапҡыр саҡырылған колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар кәңәшмәһенә делегатка булып килде. Беренсе ултырыш кис сәғәт биштә асылды. Бында нисәмә колхоздарҙан килгән делегаткалар ғына түгел, эшселәр төбәгенән дә, төрлө учреждениеларҙың ҡатын-ҡыҙ бүлектәренән дә әллә ни хәтле кешеләр бар ине.

Президиум һайланды. Ултырышты өлкән ҡатын-ҡыҙҙар рәйесе Юламанова иптәш асты.

Тәүҙә тороп металл заводынан килгән эшсе ҡатын тәбрик итте. Уның яулыҡ аҫтынан күренгән йыйырсыҡлы бите, соҡорайған күҙҙәре йылмая. Төҫөндә яҡынлыҡ, дуҫлыҡ, шатлыҡ күренеп тора.

– ...Беҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, барыбыҙ ҙа Совет власының биргән иркен хоҡуғы арҡаһында ошондай шатлыҡлы көндәргә килеп еттек. Беҙ был иректе, хоҡуҡты ҡулыбыҙҙа ныҡ һаҡлау өсөн, аралағы элемтәнең тағы ла нығыраҡ яҡынайыуына ғына түгел, хәҙер инде шул ныҡ элемтә менән социализмға, социализм ярышының уңышлы һөҙөмтәләр биреүенә тырышабыҙ. – Ул оҙаҡ итеп, аҡыллы итеп һөйләй. Айбикәнең уның һәр бер һүҙенә «эйе шул, эйе, дөрөҫ» тип әйткеһе килә ине.

Уның артынса ҡыҙыл яулыҡлы, тулы битле, көләс йөҙлө комсомолка һөйләне. Ул русса һөйләгәнгә күрә, Айбикә төшөнмәй ултырһа ла, уның һөйләгәндәрен икенсе бер һары сәсле комсомолка башҡортсаға әйләндереп биргәс, быныһын да аңланы. Ул район комсомолдар ойошмаһы исеменән тәбрик иткән икән...

«Ҡыҙыл тыу» колхозынан килгән Тимербулатованың сәғәт ярым һөйләгән доклады Айбикә өсөн һанһыҙ ғүмер һымаҡ тойолдо. Ул үҙҙәренең колхозы ҡалай төҙөлөүе, төҙөлгән ваҡыттағы ауырлыҡтар, уларҙан нисек ҡотолоуҙары, кулактар менән көрәш, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың тормоштары тураһында һөйләй ине.

Айбикә, күңеле тулҡынланыуына ҡарамайынса, докладты иғтибар менән ихлас итеп тыңланы. «Ҡыҙыл тыу» колхозын төҙөүҙә кисергән мәшәҡәттәр, эштәр, көрәштәр, еңеүҙәрҙең күбеһе Айбикәләр колхозында булған, булып үткән ваҡиғалар менән бер төҫ тип әйтерлек. Тимербулатова һөйләп килеп-килеп, бер иң ҡыйын урынға еткәндә, Айбикә: «Туҡта, улар бында ни эшләнеләр икән?» – тигән һорау менән тын да алмай көтә. Башҡалар ҙа шулай уҡ тыныс ҡына тыңлайҙар. Залда себен осһа ла ишетелерлек.

Бына Тимербулатова һүҙен бөтөрҙө, уға шаулатып ҡул саптылар. Төрлө яҡтан яҙып та, һүҙ менән дә һорауҙар башланды...

Бик күп ҡатындар тороп һөйләне. Айбикә лә, әллә нисә тороп, үҙ фекерен әйтте...

– ...Беҙҙең колхоздарҙа ауыл хужалығы машиналарына, бигерәк тә тракторға, мохтажлыҡ ҙур. Уларҙың ҡайһы берәүҙәрен сит илдән алырға тура килә. Шуның өсөн задатка һәм түләү мәсьәләләре бик ауырға төшә... Мин был турала шуны әйтер инем: бына беҙҙең ауылдарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында әле эшкә ашырылмай ятҡан иҫке тәңкәләр, һаҡалдар, селтәрҙәр, ҡашмауҙар, сәстәңкәләр, тағы шуның кеүек күп байлыҡ ята. Бына шул байлыҡты, ҡоро бушҡа әрәм ятҡырғансы, тоторға ла тракторға задатка итеп бирергә кәрәк. Хәҙерге беҙҙең яңы тормош өсөн уларҙың ни кәрәге бар? Ул – иҫке тормош ҡалдығы, байҙар йолаһы икәнен беҙ барыбыҙ ҙа беләбеҙ бит инде. Бына беҙҙең колхоздағы бисәләр үҙҙәренең дөйөм йыйылыштарында ҡарар сығарып, барлығы 873 һумлыҡ аҡса һәм бүтән көмөш нәмәләр йыйып бирҙеләр. Башҡа колхоздарҙан килгән иптәштәр ҙә ошонан өлгө

алып, шулай эшләһәләр, хөкүмәткә лә, үҙебеҙгә лә бик күп файҙа итер ине.

Айбикә урынына кире ултырҙы. Һөйләгәндә ҡыҙарған битен уң ҡулы менән һыпырып ҡуйҙы. Уның һүҙен яҡлап байтаҡ бисәләр һөйләне. Аҙаҡ был аҡылды бер ауыҙҙан ҡабул иттеләр.

Ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләшеүҙәр, аңлашыуҙарҙан һуң, ҡарарҙар сығарып, ултырыш ябылды...

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Айбикәнең колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар менән кәңәшмәһендә һөйләгән сығышына иғтибар итегеҙ. Ул ниндәй мәсьәләләр күтәрә?
**2.** Ҡотлояр йортонда йәшәгәндә ул ошондай телмәр тота алыр инеме?
**3.** Бүлектең башынан алып аҙағынаса Айбикәнең аңының үҫешен күҙәтегеҙ. Миҫалдар килтереп, иҫбатлағыҙ.

## VII

Яҙғы көндөң иртәнге ҡояшы дымлы ер өҫтөнә күтәрелгән күкһел быуҙарҙан үтә төшөп, уларҙы йәшелле-күкле, юлаҡ-юлаҡ төрлө төҫтәге матур нурҙарға әйләндерҙе.

Шоңҡар ауылының тирә-яҡ тигеҙлегенән һөҙәкләнеп барып бейегәйеп киткән ҡырлас тауҙар унар саҡрымдарға һуҙылып алыҫаялар ҙа Ирәмәлдең нәҙек һыҙыҡтар шикелле генә күренгән ҡаяларына барып тоташалар. Унан да уҙғас, Ирәмәл түбәһенең ҡайһы бер урындарында ала ҡармы йәки бейек тауҙың битен һыйпап үтеп барған болоттармы икәне лә айырылмай торған ҡайһылары аҡ, ҡайһылары ҡара нөктәләр генә булып күренәләр.

Аҡҡондоҙ йылғаһының аръяғындағы сусаҡ тауҙың итәген ҡаплап үҫкән шыршы, ҡарағайҙар йәшел ботаҡтарын яҙғы ҡар һыуына манып алған һымаҡ, тағы ла матур, тағы ла йәшелерәк булып асылғандар. Улар менән аралаш ҡайын сауҡалары ла ваҡ ҡына булып шытып килгән бөрөләренең морондарын күрһәтеп, яҙғы йылы елгә елберләтеп ултыралар.

Шоңҡар ауылының, бынан өс-дүрт йылдар элек бүленеп сығып, яңы ауыл яһап ултырған кешеләре егерме һигеҙенсе йылда уҡ колхозға күскәйнеләр. Быйыл ҡыш

тағы ла иҫке ауылда ҡалған бөтә ярлы, урта хәллеләре уларға ҡушылып, йөҙ ун өс хужалыҡтан торған «Оло үҙән» колхозын төҙөнөләр.

Ауылдың «Урта быуа» төбәге тип аталған байҙар төркөмөнөң бөтә ҡаралтылары, өйҙәре, малдары «Оло үҙән» колхозына ҡарай.

Ошолар араһындағы Ҡотлоярҙың йорт ҡаралтылары, өйҙәре тирәһендә колхоздың бүленмәй торған нәмәләре тупланған. Уның әйләнәһе ярты саҡрымдай ерҙән былай уратып алынған кәртәләре, түбәһен аҡ таҡта менән япҡан лапаҫтары эсенә «Оло үҙән» колхозының иген машиналары тултырылған.

Бөгөн иртәнән бирле сәсеүгә сығырға әҙерләнгәнгә күрә, колхозсыларҙың күбеһе ошо лапаҫтар тирәһендә, машиналар эргәһендә ҡайнашалар...

Өлкән ишек алдының тап уртаһына ҡатарлап ҡуйылған ике «Интернационал» тракторы тирәһендә Айбикә менән Әхәй, ҡаштарын йыйырып, етди төҫ менән уларҙың бөтә киҫәктәрен тикшереп, барлап, майлап, бензин ҡойоп, ходҡа ебәреп йөрөйҙәр. Улар тирәһендә колхоздың



ҡарт бабайҙары ла хәлдәренән килгән тиклем ярҙамлашып маташалар.

Ул арала ҡырға китеүселәр әҙерләнеп бөтөп, һәр кем үҙ урынына урынлашты. Иң тәүҙә геү-геү, дыр-дыр итеп Айбикә ултырған трактор, уның артлы Әхәйҙең тракторы ҡуҙғалды. Улар артынан бөркөлөп сыҡҡан бензин төтөнө, сыр-сыу булып ҡайнашҡан халыҡты аралап, бөтә ишек алдына йәйелде. Тракторсыларҙың өҫтөндә – майлы кейемдәр, өлкән күн бейәләйҙәр, һөргән ваҡытта кейә торған өлкән түңәрәк күҙле күҙелдеректәрен улар маңлайҙарына күтәреп ҡуйғандар.

Быларҙың ҡуҙғалған тауыштарын ишеткән бисәләр, бындағы эштәргә ҡалыусылар, мәктәптән сыҡҡан балалар – барыһы ла сәсеүселәрҙе оҙатырға йыйылдылар.

Тракторҙар ҡырсын түшәлгән ишек алдын иҙеп, йырып, арттарына тағылған дүрт һабанды һөйрәп, ҡапҡанан сығып киттеләр. Уларҙың алдындағы бәләкәй генә ҡыҙыл флагтар, ҡояш яҡтыһында тағы ла ҡыҙылыраҡ булып, елберләп баралар.

Тракторҙар артынса икешәр ат егелгән ике сәскес машина, уның арты тимер тырмаларға егелгән аттар, янындағы алмашҡа тигән парҙары менән ҡатарлашып, ҡапҡанан ҡаҡлыға-һуҡлыға сыҡтылар. Улар арты орлоҡтар тейәлгән, аҙыҡтар һалынған, кешеләр ултырған бер нисә арба, улар менән ҡатар һыбайҙар, шулар араһында агроном менән Алтынбай аттарын атлатып баралар. Трактор геүелдәүе, егелгән аттарҙың бышҡырыуы, бисәләр, бала-сағаларҙың сыр-сыуҙары, ҡысҡырыш-көлөштәре менән сәсеүселәрҙе ауылдан оҙатып ебәрҙеләр.

Сәсеүселәр киткәс, бында ҡалғандар һәр ҡайһыһы үҙенә билдәләнгән эшенә тотоноп китте. Көтөү төшөп килгәнен күргән бисәләр тиҙ генә һыйыр һауа торған һарайға ыңғайланылар. Балалар мәктәп янына килеп, үҙҙәренең йәшелсә сәсергә тип әҙерләгән ерҙәрен йомшартырға тотондолар. Ҡайһы берәүҙәре сәсергә тип әҙерләнгән баҡса орлоҡтарын, картуфтарын агроном ҡушып киткәнсә әҙерләргә, таҙартырға тотондолар.

Айбикәнең янына, атын юрттыра биреп, Алтынбай килеп етте:

– Айбикә! Туранан сығып булмаç, һулға бор. Ташҡын артынан туғай кибеп бөтмәгән, урау булһа ла, бынау убаны әйләнеп барып сығайыҡ, – тине.

Убаны әйләнеп, ҡалҡыуға күтәрелгәс тә, Айбикәнең күҙҙәре иге-сиге булмаған баçыу ҡырҙарына төштө. Уларҙың ҡайһыһы һөрөлгән, ҡайһыһында көҙ сәсеп ҡалдырылған арыш ҡурпыһы, йәп-йәшел келәм булып, йәйелеп ята. Анау, уң яҡтаныраҡ күренеп ятҡан, былтыр һөрөлөп бөтөлмәгән ерҙе ул һөрәсәк ине. Уның тракторы тағы ла дыһыр-дыһыр итеп, киң яланға күк бензин төтөнөн һирпеп ебәрҙе. Айбикә иркен тын алып, тәрән итеп көрһөнөп ҡуйҙы. Уның шатлыҡ менән йылмайған йөҙө, аҙ ғына асылған тештәре ҡояш нурҙарында сағыла ине.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** «Оло Үҙән» колхозы халҡы сәсеүгә төшкән күренешкә иғтибар итегеҙ.
**2.** Айбикәнең яңы тормошҡа аяҡ баçыуына ете-һигеҙ йыл үткәс, төп герой һәм Шоңҡар ауылы халҡы тормошонда ниндәй үҙгәрештәр күҙәтелә?
**3.** Был әçәрҙә яҙыусы ҡыҙыл төçкә күберәк иғтибар биргән (ҡыҙыл яулыҡлы ҡатын-ҡыҙҙар, «Ҡыҙыл тыу» колхозы, ҡыҙыл флаг һ. б.). Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?
**4.** Әçәрҙән бер өҙөктө ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

**Фонохрестоматия**

Актёрҙар башҡарыуында тыңлағыҙ.

## *Повесть тураһында*

Повесть жанрын еңелерәк аңлау өсөн әҙәби төрҙәрҙе иçкә төшөрөргә кәрәк. Һүҙ сәнғәтендә өс төр бар: эпос, лирика, драма. Уларҙың бүленеше яҙыусының үҙе ижад иткән художестволы донъяға – геройҙарына, хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә ҡарата мөнәсәбәтенең ниндәй кимәлдә сағылыш табыуы нисбәтенә бәйләнгән. Лирик әçәрҙә автор лирик герой образы аша уҡыусыға үҙенең

күңел донъяһын, кисерештәрен, уй-ҡараштарын тулыһынса тиерлек асып һала. Драма төрөндә унының әйтер һүҙе бары тик геройҙар, ваҡиғалар аша әйтеп бирелә, автор мөнәсәбәте әҫәрҙә бөтөнләй сағылыш тапмай. Эпос – эпик төр. Эпик әҫәрҙәрҙә яҙыусы үҙенең уҡыусыға әйтер һүҙен хәл-ваҡиғалар, унда ҡатнашҡан геройҙар конфликты аша еткерә, уларға үҙенең мөнәсәбәтен урыны-урыны менән генә, йә лирик сигенеү, йә автор һүҙе аша еткерә. Хикәйә, повесть, роман кеүек жанрҙар ошо эпик төргә ҡарай.

Хикәйәлә, ғәҙәттә, үҙәктә торған бер генә герой һынландырылып, бер эре ваҡиға һәм бер генә сюжет һыҙығы менән бирелә. Романда бер нисә герой үҙәккә ҡуйылып, төрлө ваҡиғалар һәм бер нисә сюжет һыҙығы киҫелешенә ҡуйыла. Повесть иһә – ошо ике жанрҙың уртаһындараҡ торған әҫәр. Унда, хикәйәнән айырмалы рәүештә, алғы пландағы геройҙар ҙа, төп хәл-ваҡиғалар ҙа, сюжет һыҙыҡтары ла икәүҙән кәм булмай. Шул уҡ ваҡытта, роман үҙенсәлектәренә эйә булмаҫ өсөн, артыҡ күбәйеп китергә лә тейеш түгел. Ошоларға бәйле рәүештә, повестың күләме лә хикәйәнекенән ике-өс тапҡырға ҙурыраҡ, романдыҡынан байтаҡҡа бәләкәйерәк була. Был – ҡағиҙә рәүешендә. Әммә һәр бер әҫәр – яҙыусының әҙәби ижады, ҡайһы бер осраҡта был ижад емеше жанр талаптарынан сығып китергә лә мөмкин. Башҡорт әҙәбиәтендә күләме яғынан бәғзе романдарҙан ҙурыраҡ повестар ҙа осрай. Мәҫәлән, И. Насыриҙың «Сибай» повесынан бәләкәйерәк күләмле романдар бар. Автор барыбер был әҫәрҙең жанрын дөрөҫ билдәләгән. Ҙур күләмле булһа ла, ул повесть жанрының үрҙә әйтелгән төп талаптарына тап килә.

Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесы бөтә яҡлап та повесть жанрына яуап бирә. Исеме үк әйтеп тороуынса, әҫәрҙең төп геройы – әлбиттә, Айбикә. Унының янында алғы планға сығарылған башҡа геройҙар ҙа бар. Шулар араһынан иң сағыуы – Юлдыбай. Повеста уға ҙур ғына урын бирелгән, быны әҫәрҙең айырым бер сюжет һыҙығы тип ҡабул итергә мөмкин. Айбикәнең дә, Юлдыбайҙың да сюжет һыҙыҡтары берәр генә ваҡиға менән сикләнмәй.

Юлдыбай күберәк Айбикәнән ситтә һынландырыла. Ике һуғышта ҡатнаша, тыныс тормош башланғас та, уларҙың юлдары айырыла, Юлдыбай ситтә йәшәй, икенсе ҡатынға өйләнә. Был сюжет һыҙыҡтары үҙ-ара киҫешкеләп тә ала. Ошо мәлдәрҙә беҙ алғы пландағы ике геройҙың булмышын асығыраҡ күрәбеҙ. Айбикә лә, Юлдыбай ҙа егерменсе быуаттың беренсе сирегендәге ҡатмарлы йылдарҙа күптәргә хас булған шәхси һәм дөйөмләштерелгән һыҙатлы образдарын кәүҙәләндерәләр.

Повеста Бибекәй, Малбай ҡарт, Фәғилә, Ҡотлояр бай, Ғәйшә, Ишбулды, Хәҙисә, Алмаҡай, Сирай, Әхәй, Рәйсә, Таймаҫ Юламанов кеүек икенсе пландағы геройҙар ҙа асыҡ һынландырылған. Улар Айбикә менән Юлдыбайҙың төп һыҙаттарын тулыраҡ асырға ярҙам итә.

### *Әҙәби әҫәр геройҙарына характеристика биреү*

Әҙәбиәттә образ төшөнсәһе киң мәғәнәгә эйә. «Образ» тигән һүҙ менән беҙ иң тәүҙә әҫәрҙең геройҙарын, персонаждарын күҙ уңында тоторға күнеккәнбеҙ: ыңғай образ, тиҫкәре образ, эске ҡаршылыҡлы образ һ. б. Ә уның мәғәнәһе бик киң, ябайыраҡ итеп әйткәндә, образ – «күҙ алдына килтереү» тигән һүҙ. Яҙыусы үҙенең ижадында ысынбарлыҡты үҙенсә күҙ алдына баҫтырып, художестволы итеп бирә икән – тимәк, әҫәрҙәге бөтә нәмә лә образ: хәл-ваҡиғалар, күренештәр, кисерештәр, пейзаж образдары. Тимәк, әҫәрҙе өйрәнгәндә ошо бөтә образдарға ла характеристика бирә алабыҙ.

Ә геройҙарға килгәндә, улар әҙәбиәттең төп предметы, уҡыусы иң беренсе сиратта улар менән ҡыҙыҡһына. Геройҙарҙың булмышы әҙәби әҫәрҙә төрлө яҡлап асыла. Мәҫәлән: геройҙың тибы (ыңғай, кире яҡтары, эске ҡаршылығы); тышҡы ҡиәфәте; уны тәрбиәләгән, донъяға ҡарашын формалаштырған социаль шарттар; күңел донъяһы, кисерештәре һәм әҫәрҙәге башҡа персонаждарға мөнәсәбәте; әҫәрҙәге конфликттарҙы хәл итеүҙә геройҙың роле; телмәр үҙенсәлектәре; образды һынланды-

рыуҙа ҡулланылған өҫтәлмә саралар; әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыуҙа һәм әҙәбиәт үҫешендә геройҙың биләгән урыны. Ошоларҙың бөтәһен сағылдырыуҙа авторҙың бер нисә төр эшмәкәрлегә ҡатнаша: яҙыусының үҙенең туранан-тура характеристикаһы, геройҙың эш-хәрәкәтен һүрәтләүе, уның телмәр үҙенсәлектәрен биреү.

Һәҙиә Дәүләтшина «Айбикә» повесында үҙенең төп геройы тураһында күп кенә мәғлүмәттәр бирә, уҡыусыға уның баҫалҡы холоҡ-фиғелен, ҡиәфәтен, портретын күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Автор тарафынан төп геройҙың тормош юлы, эш-хәрәкәттәре һүрәтләнеүе уның булмышы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе бермә-бер байыта. Тәүҙә Ҡотлояр йортонда баш баҫып, йорт хужалары өсөн өҙлөкһөҙ бил бөгөп эшләп йөрөгән ҡыҙ бала әкренләп үҙгәрә бара, ҡыйыулана төшә, аҙаҡ инде «Ҡыҙыл тыу» колхозының актив ағзаһы, йәмәғәт эшмәкәре булып китә. Телмәр үҙенсәлектәре иһә был геройҙы шәхси һәм дөйөмләштерелгән һыҙаттарға эйә булған ысын мәғәнәһендәге художестволы образ кимәленә күтәрә.

Яҙыусы әҫәрҙәге бүтән геройҙарҙы ла ошондай уҡ ижади алымдар ярҙамында ижад итә.

## ҺЫРҒА ҺАБАҒЫ

Аяҙ көҙҙөң үрмәксе ауҙары оса торған алдауыс йылы көнө. Өс тонналыҡ йәшел автомашина, аҡ саң бағаналары күтәреп, «Ҡыҙыл билдә» колхозының Ҡыҙыл һыуы күперенән сығыуға, яр буйында уйнап йөрөгән ваҡ балалар, төрлөһө төрлө тауыш менән, тип-тип, тут-тут, тип уның артынан төштөләр. Уларҙың ҡайһылары үҙҙәрен автомобиль иткән булып, ялан аяҡтары менән көрпөлдәк саңды борҡолдатып, ҡулдарын рулдәргә ҡуйған һымаҡ итеп йүгерешәләр. Үҙҙәренең һумала һымаҡ ҡара сәстәренә һырыҡҡан, шаян йылғыр күҙҙәренә, танауҙарына тулған саңда уларҙың эше юҡ. Һәр бер үткән машинаны шулай кем уҙарҙан ауылға инеп киткәнсе оҙата бирәләр. Улар артта ҡалыу менән, ауылдағы йыбанып тик ятҡан һимеҙ

эттәр ҙә өрөп машинаға ҡаршы сығалар ҙа, уның үткер еле ҡағылыу менән, шыңшып, тайпылышып ситкә ҡасалар.

Машинаның кабинкаһында һул яҡтан ултырған, тотош һары күндән кейенгән шофёр Ирғәли, был балаларҙы, эттәрҙе тапатмаҫ өсөн, рулде һаҡланып-һаҡланып бора. Бәғзе урындарында машинаның барышын аҡрынайта, бөтә урамды яңғыратып, сигнал бирә. Уның уң яғында ултырған Юлдаш әбей һәр бер осраған бала һайын, өрөп, юлға арҡыры сыҡҡан һәр бер эт һайын, һәр бер бороу һайын: «Арҡыры йүгереүе ни һуң инде, сусҡаның!» – тип ҡыпылдап бара.

Ете-һигеҙ йылдар буйы шофёрлыҡта йөрөп, әле бер генә лә кешегә ҡағылып, бер тауыҡ себейен дә тапатмаған Ирғәли, әбейгә тынис йылмайып, аҡ ҡоба йөҙөнә айырым маһайыу төҫө сығара:

– Юҡ, тапатмам, инәй, ҡурҡма. Балаларҙың ғәҙәте инде ул.

– Алла һаҡлаһын, тиген. Был замандың балалары бит улар ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәйҙәр, кафырҙар...

Улар шулай һөйләшә-һөйләшә һыртҡы урамдың урта тәңгәлендәге Юлдаш әбейҙең кейәүе Сөләктең арата ҡапҡаһы төбөнә туҡтанылар. Алдан, кабинка ишеген һирпеп асып, Ирғәли һикереп төштө. Уның артынан Юлдаш әбей ипләп кенә ишек яңағына таяна-таяна төштө. Ул, өйҙәренең бикле икәнен күреп:

– Атаҡ, минең ҡыҙым һаман һабаҡтан ҡайтмаған, ахыры, – тип һөйләгәнсә булманы, күршеләге өс тәҙрәһе урамға ҡараған ағас өйҙөң ҡапҡа янындағы бәләкәй ишегенән Хәбирә килеп сыҡты.

– Юлдаш ҡоҙағый, бына асҡысың. – Ул машина янында торған һары кейемле ят кешене күргәс, тартына биреп, һыҙғанған еңен төшөрөп, башындағы артҡа һыпырылған яулығын төҙәтте лә: – Мәрйен ҡалдырып киткәйне, йә, һау йөрөп ҡайттыңмы? – тип өҫтәне.

– Бик шәп йөрөп ҡайттым. Һорағанға сәләм әйтеп ҡалдылар. Ҡала кешеләренең ни, иген йыя торғандары булмағас, бисәләре буш. Әйҙә өйҙән өйгә ҡунаҡлатып тик йөрөттөләр. Әле бына ярай, күктән төшкәндәй булып,

Ирғәли улым тап булып, сәғәт тигәнсә алып килеп еткерҙе. Булмаһа, ай ятһаң да ебәрәсәк түгелдәр, үҙем дә, ниңә барҙым, тигән көнгә төштөм. Улым, машинаңды ишек алдына индереп тор, сәй эсеп китерһең, – тине.

– Юҡ, инәй, рәхмәт. Мин бөгөн сәғәт өстә МТС-та булырға тейеш инем, әлдә һуңлап киттем, бөгөн бынан кәрәсинде алып ҡайтып еткермәһәм, тракторҙар туҡтап ҡуйыуы бар. Кис менән, тағы иген тейәп, ҡалаға китәм, – тине.

– Ҡуйсы инде, шулай тигән һүҙ буламы! Бер сәғәттең арыһы ни ҙә, биреһе ни. Самауырым хәҙер ҡайнай. Сәй эсермәй ебәрмәйем дә. Ғүмер эсендә бер тура килеп, ҡоро ауыҙ китеп ни!

Ирғәли ауыҙындағы папиросын тартып бөтөп ергә ташлап, аяғы менән баҫып һүндерҙе лә үҙ һүҙен итте:

– Ярай инде, инәй, күңелеңде киң тот. Юлдың аҙағы булмаҫ әле. Мин әйләнгән һайын ошо юлдан йөрөйөм, хәҙер гел төшә йөрөрмөн инде.

Әбей быға саҡ тигәндә риза булды:

– Былай бер ҙә килешмәне инде. Икенсе юлыңда төшмәй үтмә, улай булғас. Ҡарт булһа ла, инәйеңде улай онотоп китмә, балам. Тап юл эсендә ултырабыҙ, үткән-һүткәнеңдә тейә йөрө. Әсәң бахыр менән ни бер туғандар ғына кеүек көн иттек бит. Ҡабымдан ҡалдырышмай, бер ҡалаҡтан ашап, бер ҡалаҡтан эстек...

Әбейҙең тағы ла оҙон хәбәргә төшөүенән шикләнеп, Ирғәли ҡабаланды:

– Ярай, инәй, килермен. Хуш булып тороғоҙ.

– Хуш инде, улай булғас. Киленгә күптән-күп сәләм әйт.

Машина, тағы ла йыйылған бала-сағаларҙы туҙҙырып, саңдар уйнатып, өҫтөндәге алты-ете кәрәсин мискәһен сайҡалта-сайҡалта, ауылдан сығып китте.

Юлдаш әбей, ишек йоҙағын шалтыратып аса-аса, Хәбирәнең:

– Кем балаһы, ҡайһы ауыл ул? Ҡалай ипле генә матур егет, – тип һорауына яуап бирҙе:

– Беҙҙең ауылдың Ҡотлоюл тигәндең улы. Ата-әсәһе ғүмергә беҙҙең ут күрше булып йәшәнеләр. Көтөүҙә лә,

урaҡта ла бергә йөрөй торғайныҡ. Әсәһе, бахыр, әлдиләп кенә үҫтергән яңғыҙ улының ошолай ир-егет булып йөрөгәнен күрә алмай үлеп ҡалды. «Атайым һау», ти.

Юлдаш әбей баҙарҙан алып ҡайтҡан бер өлкән тоҡсай нәмәһен урындыҡҡа һалды. Башындағы һуғылған дебет шәлен, өҫтөндәге оҙон ҡара еләнен сисеп ташлап, күлдәк итәктәрен бөрмәһенә ҡыҫтырып, самауырға һыу ҡойоп, ут һалып, соҡалыҡҡа ултырта-ултырта, Хәбирәнән бындағы хәлдәр тураһында һорашты, үҙе алып ҡайтҡан хәбәрҙәрен дә теҙҙе:

– Оҙаҡлап киттем шул. Ебәрмәй ыҙалаттылар. Мин әйтәм, эш ваҡытында дүрт көн буш йөрөү, ул ни тигән өлкән оят, тип ҡарайым, юҡ, тыңламайҙар бит. Беҙҙең бригада картуфты ҡаҙып та бөтә яҙғандыр инде?

– Бар әле, ҡоҙағый, һиңә генә етер. Үҙең, бригадир башың менән, эш ташлап йөрөгәс ни! Кисә бөтөрөрбөҙмө әллә тип тырышҡайныҡ та ни, хәҙер бригадта ете әбей генә ҡалғас, ыратып булмай, һин дә юҡ.

– Ул ни эшләп етәү генә?

– Сәмүҡ еңгәмде ни, аш бешерергә тип, ырҙынға алып китеп барҙылар бит. Унан Хәмиҙә киленде алып, башаҡ йыйыу комиссияһына баш иткәндәр, ти. Беҙ һин ҡайтмайынса бирмәйбеҙ тип ҡырҡышҡайныҡ та, Сөләк ҡуя торған түгел: «Ҡәйнәм менән килешермен әле, бик ҡыҙа башлаһа, үҙең прогул яһап йөрөгәс, шулай була ул, тип әйтермен», – тип көлә. «Картуф әллә ҡайҙа ҡасмаҫ, бына иген йыйыу планы үҙ ваҡытында өлгөрмәй бара», – ти.

Юлдаш әбей зәһәрһеҙ асыу менән генә дыуылданы:

– Ана шул булыр инде ул беҙҙең кейәүҙең! Саҡ ҡына күҙең тайшанһа, тота ла үҙенекен ҡыла торған. Мин уны, улайтып күп әбизлискәй яһап йөрөй башлаһа әле, тиҙ эшен табырмын. Бригадирға кәңәш юҡ, ни юҡ, ҡара һин уны! Мин уны председатель тип тормам, ҡалай эш көнө кәметеп тегеләй!

– Беҙ ҙә әйттек инде уны, булмай, иген эше бөткәс, картуфығыҙҙы ҡаҙышырға үҙебеҙ килербеҙ, ти. Буксирға алырбыҙ, ти.

– Эйе шул, уларҙы көтөп, эште ҡырауға ҡалдырмаһаҡ ярар ине. Ҡарыуҙан тайып ятҡан юҡ әле, әбейҙәр тигәс

тә, бигерәк тағы! Уларһыҙ ҙа бына тигән итеп йыйып ҡуйырбыҙ әле!

Сәй ултыртып бөткәс, Юлдаш әбей, баҙарҙан алып ҡайтҡан нәмәләрен ҡутарып күрһәтә-күрһәтә, метрлы ситсалар, лампасый, йоҡа ойоҡ, резинка табанлы ботинкалар араһынан йөҙәр грамлыҡ биш-алты киҫәк яҡшы сәй сығарып, өлкән ала сәйнүккә услап һалып, боҫо борҡорап ултырған йылтыр еҙ самауырҙан сәсрәтә-сәсрәтә ҡайнаған һыу бороп, уны камфарка өҫтөнә бешерергә ултыртты.

– Бармай ҙа инем, бына ошо сәй алайым тип кенә барҙым бит инде. Сәй эсмәһәм, эш тә эш түгел, ударник та булып булмай ул. Баш ауырта ла тора... Һай-һай, Баймаҡ ҡайһылай байып киткән дә! Ҡайһы ғына лавкаһына инмә, донъя тулы нәмә, кирбес-кирбес сәй, бөртөк сәйҙең бына бит ҡандайҙары бар. Әйтәгүр, бер кинәнеп үпкәм йөҙгәнсе сәй эсеп ҡайттым әле. Бик байыған Баймаҡ, бик байыған...

Юлдаш әбейҙең хәбәрҙәрен тыңлай-тыңлай, уның ҡара яндырып, ҡаймаҡ ҡойоп тороп ҡуйы итеп яһаған сәйен тәмле лампасый менән эсә-эсә, Хәбирәнең үҙенең дә Баймаҡҡа барғыһы килеп китте.

– Ҡуйсы, ҡуйсы, ҡайһылай һәйбәт тә, бынау сәйен әйтәм! Мин дә, эште бөтөп, труттин[1] алғас та, Баймаҡҡа барып ҡайтайым әле. Мин барғансы сәйе генә ҡалһа ярар ине.

– Әй, ул ни эшләп ҡалмаһын ти, Хәбирә ҡоҙағый. Ғүмереңә етер. Әйтәм бит, лавка һайын кәштә, кәштә тулы сәй. Беҙҙең ауылдың Әүбәкер ҡарт мәрхүмдең улы Әскәр тигәндәре шунда заводта алтын йыуыу эшендә оҫта булып эшләй ине. Хәҙер шул бик ҙур кеше булып киткән, бөтә заводҡа башлыҡ, ти, әллә ни нәмә тигән исеме лә бар ине, хәтеремдән сығып киткән, мин ни, бик онотасаҡмын бит. Шулай итеп уның бисәһе Зөлхизә килен дә сағыра һалып алды. Бик шәп торалар икән, ике улы, бер ҡыҙы бар. Аш бешергән, ҡыйратып тороп һалмалаған. Әскәр ҙә

---

[1] *Труттин* – русса *трудодень* һүҙенән; 1930–1966 йылдарҙа колхозда эш күләмен иҫәпкә алыу формаһы.

эштән ҡайтып килде лә, ҡәҙимге боронғо һымаҡ уйнап-көлөп, беҙҙең менән бергә ултырып тороп ашап-эсте. Шулай өлкән урындарҙа йөрөп эреләнмәүен әйт әле һин уның. Шунда әйтә, бына ошо сәй хәҙер үҙебеҙҙә яһала, ти. Борон Ҡытайҙанмы, тағы әллә ҡайҙан килә торғайны, ти. Әллә ҡайҙа ғына тигәйне әле, әллә Мәскәүҙән дә алыҫ ерҙә, ти, әй, грузин тигән ерҙә, тине икән. Ошо сәйҙең дә үҙенең колхозы була икән дә баһа уның!

Хәбирәнең был хәбәргә бигерәк тә иҫе китте:

– Атаҡ, ҡалай ҡыҙыҡ икән, барып күрһәң ине. Улар труттинға тоҡлап-тоҡлап сәй алаларҙыр инде, колхоз булғас ни!

– Шулайҙыр инде ул. Мин унышын һорашырға ҡыймаһым әллә ни.

Уларҙың һүҙенең ҡыҙыу урынында китаптарын ҡултыҡлап Мәрйен ҡайтып инде. Ҡартәсәһен күреп, ҡыуанып көлөп ебәрҙе.

– Бәй, ҡартәсәйем саҡ тигәндә ҡайтып килгән.

– Ҡайттым, балам, ҡайттым. Йә, шәп торҙоғоҙмо? Тауыҡтарҙы яҡшы ҡарап, ем ашатып торһаң ярай ине. Ҡаҙҙар һыу буйынан да ҡайтып килмәйҙәрҙер инде.

– Бәй, ҡарамай ни, ҡаранымсы. Барыһы ла теүәл. Кисә киске һауынды ғына быҙау имеп ҡуйҙы, ҡартәсәй, туҡмаһаң туҡмарһың инде!

Мәрйен ҡартәсәһен иркәләнеп шаяртты. Үҙе ашыға-ашыға бер ҡултыҡ китап, ике оҙон төргәк аҡ ҡағыҙ ҡурайҙарын мейес янындағы аҡ ашъяулыҡ япҡан өҫтәлгә һалды. Ҡара һауыттарын алып яҙырға әҙерләнде. Ҡартәсәһе уны асыуланмай ғына орошто:

– Ана, әйттем бит, мин китһәм, һеҙҙең шул инде. Әпсәң бер ҡайтып әйләнмәнеме ни, сурҡаҡ.

– Юҡ, ҡартәсәй, ҡайтырға ҡайҙа ул. Ырҙында йоҡлайҙар, шунда ашайҙар. Мин дә көн һайын, һабаҡтан ҡайтҡас, барып эшләшәм, кисә лә шунан ҡайтып өлгөрә алмай ҡалдым, быҙау көтөүгә ҡаршы сығып имгән дә ҡуйған.

– Әллә, үҙем өйҙә булһам, барыһына ла өлгөрәмсе. Һеҙҙең ваҡытығыҙ ҙа етмәй, эшегеҙ ҙә бөтмәй. Бер һауын

һөт – бер йомғаҡ май бит ул, әрәм итеп. Йә, ни нәмәһе тағы яҙынырға керешеп киттең, әйҙә тамағыңа эсеп ал!

– Ҡоя тор, ҡартәсәй, минең бына тиҙ генә эшләп бөтөрә торған диаграмма бар. Байрамға тиклем бөтөрөп, клубҡа элергә кәрәк.

Хәбирә лә Мәрйенде яҡлашты:

– Юлдаш ҡоҙағый, орошма әле һин уны, хатта йүгереп, барыһына ла етешә бит әле ул. Һабағына ла, өйҙә лә, яланға ла барып эшләшеп ҡайта.

– Өлгөрһөн шул, йәш кешегә эш нәмә ул.

Ике әбей береһен-береһе уҙып, яңғыратып һөйләшә-һөйләшә, үҙҙәренең үткән ғүмерҙәрен дә ҡыҫтырып, хәҙерге йәштәр тураһында һөйләп, Мәрйендең эшенә ҡамасауланылар. Ҡартәсәһе, әлдән-әле уны сәй эсергә ултырырға ҡыҫтап, һүҙҙе уның тураһына борҙо:

– Бына әле генә тиерлек бит, мин ошо кейәүем менән ҡыҙыма килгәндә, бынау Мәрйенем ни бармаҡ буйы ғына ине бит әле. Хәҙер бына ул уҫлаптай ҡыҙ булып китте. Быйыл бына ҡырпаҡ ҡарҙа ун бише тулып, ун алтыға сыға инде. Хәҙер бына һырға һабағы алып, килен булырға әҙерләнеп йөрөр сағы ла бит, ул рәхәтләнеп уҡып, пионер булып тик йөрөй. Беҙгә ундай саҡтарҙы күреү ҡайҙа ул, ҡарғалай ҡалҡҡандан биреп ашай торғайнылар. Эй, үткән ғүмерҙәрҙе уйлаһаң, ҡуй инде, ни бала булып рәхәт күрелмәне, ни йәш ғүмереӊ нужа менән заяға үтте.

– Әйтмә инде, ҡоҙағый, минең ни ун алты йәшем тулғанда ана Әбделғәзиземдә ҡулыма алдым бит. Ун дүрттә килен булып төштөм.

Юлдаш әбей, самауырын яңынан өҫтәп, тағы ла сәй һалып, тағы ла хәбәр һөйләй-һөйләй сәй яһай башланы.

– Бөгөнгөләй хәтеремдә, Ирәндектең бейек ҡаяларын ярып сыҡҡан Ҡыҙыл йылғаһының урғылып-урғылып ташҡан боҙҙары бөтөп, уның ҡотороп аҡҡан ҡара тулҡынлы һыуы ғына ҡалғас та, беҙ ыҙманан йәйләүгә күстек. Илдән киткәндә атайым, ҡарағай түбәле бәләкәс кенә ҡайын бүрәнә өйөбөҙҙөң тәҙрәһенә таҡта ҡаҙаулай-ҡаҙаулай:

– Ҡыҙым, иртән илдән ҡалмай йәйләүгә күсергә кәрәк. Үлән моронлаған саҡта малдың яланда булыуы яҡшы, тиҙ һимереүсән була ул, – тине. Мин әле, ун тулып, ун бергә генә сыҡҡан ҡыҙ бала булһам да, әсәм үлгән, өлкән апайым кейәүгә киткән булғанға, өйҙәге бөтә эштәрҙе үҙем атҡара инем. Атайым шулай тигәс, табаҡ-һауыттарымды, самауырымды йыйыштырған булдым, барыһын тейәп арбаға һалған булдым. Атайым уларҙы тағы ла йүнәтеңкерәп тейәне, иртәнсәк бөтә ил зыҡ ҡубып, байҙар көтөү-көтөү йылҡыларын сырҡыратып, һыйырҙарын мөңрәтеп, һарыҡ-кәзәләрен дөрһөлдәтеп, ҡатын, бала-саға, әбей-бабайҙы арба-кырандастарға тейәп, егет-еләндәр һыбай, мал ҡыуып, илдән сығып киттек. Атайым, бахыр, атҡа менеп торманы, ҡолонло бейәне арбаға екте лә, мине үҙе менән ҡатар ултыртып, тәртәгә таҡҡан ҡыҙыл һыйыр менән ҡоба быҙауҙы сыбыҡ алып ҡыуып барырға ҡушты.

Ерҙең уйпат урындары кибеп бөтмәгән. Көтөү-көтөү малдың эҙе, арба-кырандас юлдары, йәйәүлеләрҙең итек сыбарлауы менән оло юл киң, оҙон, бер сутырмаҡлы аҡланға әйләнде. Йорттоң быйылғы һайлаған йәйләүе беҙҙең ауылдан ҡырҡ-илле саҡрымдар самаһындағы Яу Күле әйләнәһендә ине. Бында ете-һигеҙ ауыл ҡушылып йәйләй торғайныҡ. Пар атлылар көнөнә етте. Беҙҙең һымаҡ һыйыр тағып, бер ат еккәндәр, ара ҡунып, иртәгеһенә, көн кислэгәс, көтөү менән бергә барып еттек. Беҙ барғанда, ике-өс ауыл, үҙҙәренең ауылы-ауылы, ырыуы-ырыуы менән өйөрөлөшөп, Яу Күленең аҡлы-һарылы томбойоғо һымаҡ булып, тирмәләр менән таралышып ултырғайнылар. Атайым менән мин дә үҙебеҙҙең ауылдың күлгә яҡын һибелгәнерәк яҡтан үҙебеҙҙең Һыуһындар тоҡомо төбәгенә төшөп урынлаштыҡ. Ҡыш буйы ыҙмала быҫҡып ятҡандан һуң, яҙ башы киң яланға сығып, бер иркенләп тын алыуы үҙе ни тора! Яҙғы көндөң матур йылы саҡтары етте. Мин тиңдәш ҡыҙҙарым менән бергә көн һайын йыуаға, умырзаяға барып, яландың аллы-ҡыҙыллы, күкле-һарылы умырзаялары, аҡ сәскәләрен шәлкем-шәлкем алып ҡайтып, үҙебеҙҙең һоро тирмәнең

ҡыҙыл кирәгәләрен биҙәй торған булдым. Шулай итеп бер көнө кисерәк иптәш ҡыҙҙарым менән бер ҡосаҡ сәскә, ҡыуыш йыуалар йыйып ҡайтып инһәм, тирмә түрендә мендәр өҫтөндә атайым менән ҡатарҙан аяҡ салып тороп бер ҡарсыға моронло, япрай ҡашлы, үткер ялтыр түңәрәк күҙле, асыраҡ яңаҡлы, сал һаҡаллы бер ҡарт ултыра ине. Мин, әле үҙемде бала хисабында ғына күргәс ни, был ҡарттан йөҙөмдө йәшереп торманым.

Бабайҙың:

– Ни хәл, ҡыҙым? – тигән һаулашыуына ҡаршы саҡ ҡына тартынып:

– Бик һау, олатай, – тинем.

Атайым миңә быға тиклем булмаған бер титкеү ҡарашы менән ҡарап ултырҙы. Мин, уларға сәй ҡайнатайым тип, самауырыма йәбешһәм дә, ҡарсыға танаулы бабай:

– Юҡ, бала, аҙапланма, мин сәй эсеп тормайым, юлым ҡабалан, – тине лә, үҙе, урынынан ҡуҙғалып, тора башланы.

Атайым быға күнмәне:

– Юҡ, Байрамбай ағай, ғүмер эсендә бер юл төшөп, ат маңлайы терәп, тирмәмә туҡтағанһың икән, улай ҡоро ауыҙ сығыу ярамаҫ. Ҡана, ҡыҙым, айран булһа ла яҙып бир – беҙҙә ҡымыҙ юҡ инде, – тине.

Мин тиҙ генә ағас күнәгемдән бер туҫтаҡ ойотҡан алдым да, һыуыҡ һыу ҡойоп, көбөлә бешә һалып, айран һыулап, өлкән алдыр менән ике ҡуллап бабайға һуҙҙым. Бабай уны һемереп эсте лә:

– Ярай, ҡыҙым, күп йәшә, ҡулыңдан һөйөн, – тине лә миңә кеҫәһенән егерме тинлек ҡыя сапҡан көмөш тәңкә сығарып бирҙе. Үҙе битен һыйпап доға ҡылды. – Юлсының юлда барғаны яҡшы, рәхмәт яуһын, китәйем, – тине.

Атайым бүтәнсә ныҡышманы:

– Ярай, Байрамбай ағай, ҡабаландың, хәйерле юл булһын, – тине. Бабай ҡайтып китте.

Мин тәңкәне эсемдән ҡыуанып алдым да, ул киткәс үк тишә һалып, түшемә, күлдәк иҙеүемә, таҡтым. Атайым, ҡарттың ҡараһы юғалғас, үҙ алдына һөйләнгән һымаҡ: «Был кеше Ҡайынлы ауылынан Байрамбай тигән ҡарт

була», – тине. Мин тәңкә менән булышып, уның һүҙенә ҡолаҡ һалманым. Күрше тирмәләге Аллағыуат ағайым кәләше Алтын еңгәмә тәңкәмде күрһәтергә йүгерҙем. Ул быны күргәс:

– Уй алйот... Ул ҡарттың бына тигән еткән, матур улы бар. Ул һиңә, улай булғас, һырға һабағы биргән бит, – тине.

Мин ҡыҙарҙым, бүртендем, илар сиккә етеп, үҙебеҙгә ҡайттым да тәңкәне өҙөп алып, һандыҡ төбөнә ырғыттым. Ләкин эш үткәйне инде. Ҡороғоро, был ҡарттың күңеленә бик оҡшағанмын да, ул мине үҙенең улына яраҡлы, килен булырлыҡ ҡыҙ икән тип, миңә ошо тәңкәне биргән, имеш. Мин, бала кеше, уны-быны байҡамағас ни, алдым да түшемә таҡтым. Белгәндә ҡыла торғаным ни, – оло башын кесе итеп, берәү ҡомартҡы биреп торғас, ҡалайтып кире ҡайтараһың. Шунда ла мин эстән генә, икенсе юлы килә ҡалһа, был ҡартҡа күренмәҫкә, инде биргән нәмәһен алмаҫҡа, тип уйлап ҡуйҙым.

Был эшкә йомамы, аймы үткәндер, белмәйем, бер көнө кискә һарҡыу атайым, Мәлек байҙарға бесән сабышырға өмәгә барып, арып, ҡара тирле булып ҡайтып, үҙенә тигән бер өлкән киҫәк һыйлы һөйәкте миңә бирҙе.

– Ҡыҙым, ошоно арыу ғына итеп һалмала, исмаһам, бер һурпа эсеп алайыҡ, – тине.

Мин тирмә алдындағы ҡаҙыған усаҡҡа ут яҡтым, суйын ҡаҙанымдың яртыһынан итеп тағы аш һалдым. Төтөн киске тынлыҡ менән һирпелеп яйлап йәйелде лә Ирәндек өҫтөндә аҫылынып торған ап-аҡ көмөш кеүек болоттарға үрләп барып ҡушылды. Был мәлдә бөтә кешеләр ҙә ҡаҙан аҫтарына ут яҡҡандар, уларҙың да төтөндәре шулай яйлап алыҫҡа йәйелделәр, йомшаҡ аҡ йыландар һымаҡ һығылып, күккә ауаланылар. Ашым ҡайнағас, мин, сәс тарап алайым тип, Алтын еңгәм эргәһенә йүгерҙем. Уның урталай һынған ярты һөйәк тарағы менән билдән уҙған оҙон ҡара сәстәремде этләнә-этләнә генә яҙа башлағайным, үҙебеҙҙең тирмә яғынан атайымдың:

– Юлдаш! Һин ҡайҙаһың, ҡыҙым? – тигән тауышын ишетеп, йүгереп сыҡһам, атайым менән бергә ҡарсыға

морон ҡарт баҫып тора ла баһа. Мин, ҡалайтырымды белмәй, туҙған толомдо тиҙ генә артҡа һирптем дә ҡабаланып үрә-үрә үҙебеҙҙең тирмәгә ыңғайланым. Байрамбай ҡарт тағы ла үҙе башлап һаулыҡ һорашты. Мин тағы ла яуап бирҙем.

– Ни хәл, бала, һаулыҡмы?

– Һау әле, олатай, – тинем.

Тәү килеүендә оҡшамаған был бабай был юлы миңә бигерәк тә шыҡһыҙ, тағы ла һөйкөмһөҙ күренде. Шунда ла мин сырайыма асыу төҫө сығармаҫҡа тырыштым. Аш әҙерләнем, һалма ҡайнаттым, ҡара суйын ҡомған менән тимер тасҡа ҡулдарын йыуҙырып, алдарына бер табаҡ аш ҡуйҙым да, сығып китәйем тиһәм, атайым, бахыр, тағы ла:

– Балам, үҙең дә ултыр, мине көтөп, ҡарының асҡандыр, ултыр, аша, – тине.

Мин ни тиклем ҡыйынһынһам да, атайым һүҙен йыҡмай, аш янына ултырҙым. Улар миңә иғтибар итмәнеләр. Үҙҙәренең аттары, малдары, көтөүҙәре, төлкө, бүрегә сабыуҙары, ҡош-ҡорт атыуҙары тураһында ҡыҙып-ҡыҙып һөйләштеләр. Һүҙ араһында Байрамғол ҡарт ҡаға-һуға ғына үҙенең атайымды яҡын күргәнен, уның менән дуҫ, яҡын булырға теләүен аңлатып ҡуйҙы. Ашап бөткәс, мин тағы ҡул йыуҙырып, таҫтамал биргәндә, ҡарт миңә тағы ла «рәхмәт, күп йәшә, балам» тигәндән һуң, кеҫәһенән көмөш сытралы, ысын аҡыҡ ҡашлы, баштарына егерме бишәр тинлек иҫке аҡсалар таҡҡан ҡуш сулпы сығарып бирҙе. Мин, алмаҫҡа булып, ҡулымды артҡараҡ тарттым, «ни эшләйем инде» тигән һымаҡ, атайыма күҙ һирптем.

Ул көлөмһөрәп ҡараны ла:

– Ал, балам, ал, олатайың биргәс, оло кешенең ҡулын мәхрүм итмә, – тине.

Мин ҡалтыраған ҡулдарым менән матур сулпыларҙы алдым да, тас-ҡомғанды күтәреп алып, тиҙерәк усаҡ янына йүгерҙем. Был ваҡытта минең биттәрем ут кеүек яна, йөрәгем дөпөлдәп һуға, үҙем бер ояла, бер асыулана, берҙән, сулпының матурлығына ҡыуана инем. Бабай тағы ла сәй эсмәне. Атайым уның ерән ҡашҡаһын килте-

реп алдына ҡуйҙы ла теҙгенен ҡулына тотторҙо, бабай ҡайтып китте.

Алтын еңгәм минең сулпыларымды күреп ғәжәп итте:

– Атаҡ, ҡалай аҫыл ҡомартҡылар биргән әле был бабай. Ҡалай ҙа ҡаштары һәйбәт инде, ысын аҡыҡ бит, – тип телен шапылдатып ҡуйҙы.

Мин, уның сулпыны маҡтағанына ҡыуанып, уны сәс үременә тағып, сылтыратып ҡараным, сайҡала биреп оҙон йыуан ҡара сәс үремдәремде бер алға, бер артҡа бәүелтеп ебәрҙем. Был минең өсөн күрелмәгән ҙур ырыҫ ине. Алтын еңгәм, бахыр, сулпыны маҡтаһа ла, әллә ниңә үҙе миңә йәлләгән күҙҙәре менән ҡараны. Уйлана биреп:

– Миңә ҡайным һырға һабағы биргән саҡта мин дә ун өс кенә йәштә инем, – тине.

Мин уның «ҡайным» тигән һүҙенән сусып киттем. Был шыҡылһыҙ ҡарттың да минең ҡайным буласағы күҙ алдыма килеп, йөрәгем шыу итеп китте, тәндәрем эҫеләһыуыҡлы булды. Мин быны еңгәмә әйтмәнем. Ул ҡайтып киткәс, сулпыларҙы ипләп кенә систем дә һандыҡ төбөндәге тәңкә янына ташланым. Шулай итеп, ул тынысһыҙ көндәрҙе мин онотоп бөткәйнем инде. Көҙгәсәйен йәйләнек. Йәйләүҙән йәйләүгә күстек. Шунан бер мәле, көҙ көнө Аҡморон йәйләүендә ятҡан сағыбыҙҙа, әлеге ҡайны була торған ҡарсығә морон ҡарт йәнә килеп төштө. Был юлы ул һыбай ғына түгел, арбала үҙе янына бер кеше ултыртҡан. Уның башына ҡыҙыл фәс кейгән, бер күҙенә аҡ һалған бер әҙәм ине.

Бөрйән ауылының Аллағыуат суфый тигәндәре шул булған икән. Алтын еңгәм минең ҡолағыма ғына:

– Юлдаш, һиңә бөгөн бата ҡылдыралар, һин беҙгә барып ултыр, – тине.

Мин ни, бала кеше, уның нимә икәнен ҡайҙан беләйем, шунда һаман ҡыҫылып йөрөйөм бит әле, алйот.

Нүкә инәйем менән Алтын еңгәм аш-һыуҙы үҙҙәре яраштырҙылар. Күрше-тирәне саҡырҙылар. Беҙ, тиңдәш ҡыҙҙар, бергә йыйылдыҡ та, ситке аулаҡ тирмәлә төнө буйы ҡумыҙ тартып бейешеп, ҡурай тартып йырлашып ултырҙыҡ. Сәтүк тигән бер оҫта ҡурайсы егет бар ине. Ул

ҡурай уйнай, мин йырлайым, мин ҡумыҙ тартам, ҡыҙҙар бейей... тинтәк саҡтар...

Иртәгеһенә, ҡоҙалар киткәс кенә, мин үҙ тирмәмә ҡайтып йыйыштырып алдым. Атайым, бахыр, аҡрын тауыш менән, йомшаҡ һүҙҙәр менән һөйләшә. Ул мине аянымы икән, мин уны бигерәк тә аяным. Әсәм үлеүенә өс йыл. Ул мине үгәй бала итмәҫ өсөн икенсе бисә алмаған. Хәҙер мине үҫер-үҫмәҫ кейәүгә бирҙе. Әсәм үлгәне бирле илағаным юҡ ине, шул көнө кис, урынға ятҡас, ошоларҙың бөтәһен дә уйлап, үкһеп-үкһеп иланым. Бала күңелде хәсрәт бик тиҙ еңә бит ул.

Киләһе яҙ тағы ла килеп етте. Тағы ла Яу Күленә йәйләргә күстек. Ун ике йәшем тулып, ун өскә ҡараным. Быға тикле булған минең уйҙарым, ғәмдәрем, үҙемдең кейәүгә бирелгән ҡыҙ булыуым да онотолғайны инде. Алтын еңгәмдәр тирмәләрен тағы ла беҙҙең тирмәгә ҡатар итеп кенә ҡорҙолар. Мин тағы сәскәләр менән тирмә кирәгәләрен биҙәнем. Бер һалҡынса айлы эңер ине. Алтын еңгәмдәр тирмәһе алдына минең бөтә аяннауҙарына[1] тиклем танып бөткән былтырғы ерән ҡашҡаны менгән ҡупшы оҙон буйлы, киң яурынлы, ҡара кәзәкейле, башына аҡ ҡырпыулы бүрек, аяғына бейек тағалы ҡара итек, яҫы яғалы күлдәк кейгән бер егет килеп төштө лә уға ҡаршы сыҡҡан Бикбулат ағайым менән күрешеп, уларҙың тирмәһенә инеп китте. «Кейәү тигәндәре ошолор инде» тигән уйҙан минең ҡотом осто. Ҡурҡышымдан умас һоҫоп торған ҡоштабағымды ергә төшөрөп ебәрҙем. Быны күргән атайым, ҡурҡып:

– Алла, балам, иплэп, – тип ҡысҡырып ебәрҙе лә, – аҡрыныраҡ, бер ереңде бешереп ҡуйма, – тигән булды.

Минең ашағаным да аш булманы, ит менән тире араһына китте. Аштан һуң атайым тирмәләр араһына ҡыҙыра китте. Алтын еңгәм беҙгә килеп:

– Юлдаш, ағайың Ҡайынлыға ҡунаҡҡа китте, әйҙә минең менән йоҡларһың, – тигән булды.

---

[1] *Аяннау* – юртыу.

Мин уға ышаныу ҡайҙа ул:

– Эйе, йәнәһе, алдашыу баяғы! – тинем дә йүгереп тирмә артына ҡастым.

Алтын еңгәм аптыраған кеше булды:

– Атаҡ, атаҡ, бына алйот. Мин һине алдағаным бармы? – тигән булды ла, үҙе аҡрынлап миңә яҡынлашты.

Мин тағы ҡастым, ул тағы ҡыуҙы. Уға тиклем Солтан ағайымдың кәләше Айҙын еңгәм дә тирмә артынан сығып, мине ҡамап тотоп алдылар. Тулатып алып барып, Алтын еңгәмдәрҙең тирмәһенә индерҙеләр ҙә, баяғы ҡупшы егеттең янына алып барып:

– Кейәү, бына тот уң ҡулынан, – тип, үҙҙәре әйләнеп сығып та киттеләр.

Мин инде ни тиклем сәбәләнһәм дә, билалый типкән турғай балаһы һымаҡ, ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп ҡыҫҡан көслө ҡулдар эсендә инем. Шуға күрә ҡурҡыуымдан, ғәрлегемдән ҡалтырай-ҡалтырай илай башланым. Кейәү кеше, көлөп, балаларҙы әүрәткән һымаҡ:

– Ҡурҡма, Юлдаш, мин һине ашамайым бит, һин минән улай ҡурҡма, – тип әүрәтте.

Шул икән, баҡтиһәң, былтырғы ямаҡ ҡарттың улы Тимербай. Әй, ҡуйһаңсы инде үткән ғүмерҙе, бер көндәй ҙә булмаған икән, үткән дә киткән.

Сәй һаман эселә. Хәбирә әбей Юлдаш ҡоҙағыйының был хикәйәһенә үҙенекен ҡушып ялғап китә.

Мәрйен ҡартәсәһенең был хикәйәләрен күп тапҡырҙар ишеткән, уның бер ҡыуанып, бер илап, бер уфлап, бер уйланып һөйләгән был һүҙҙәренә лә бик бәләкәй сағынан тыңлап, күнеп бөткән. Шуға күрә ул бөгөн, ҡартәсәһенең был хикәйәләренә ҡолаҡ һалмаҫҡа тырышып, үҙ эшендә булды. Октябрь байрамына клубҡа элергә тип яһалған бөтә донъялағы пионерҙар хәрәкәте үҫешен күрһәткән диаграмманың аҙаҡҡы бағаналарын буйларға ашыға. Быны бөтөү менән, ырҙынға эшкә китергә кәрәк. Ләкин әбейҙәрҙең береһен-береһе уҙып һөйләгән һүҙҙәре уның эшенә ныҡ ҡамасауланылар. Ҡарт кешеләргә был турала әйтһәң дә, йә аңламайҙар, йә үпкәләгән һымаҡ булалар.

Шуға күрә Мәрйен үҙенең уйҙарын бүлә-бүлә булһа ла тырышып эшен бөтөрҙө лә сәй эсергә килеп ултырҙы.

Юлдаш әбейҙең, ейәнсәрен һирәк күргәнгә, уны һис янынан ебәргеһе килмәй, гел уның шәп, һау, эшлекле, матур булыуы тураһында ҡайғырта, өҙләкһеҙ кәңәштәр бирә:

– Бик күп яҙынаһың, балам. Күҙ нурғынаңды ашап бөтә инде был аҡҡа теклəп ултырыуҙарың. Сәсеңде лә бына былайтып, сонтоҡ ҡойроғо һымаҡ, ялбырлап йөрөгәнсе, арыу ғына үҫтерергә кәрәк ине. Әҙерәк үремгә индениһә, осона сулпы таҡһаңсы. Артмаҡ була ул, сәс үҫергә лә яҡшы була.

– Сәс ниңә кәрәк ул, ҡартәсәй, ошолай рәхәт бит, үреп тә тормайым, тарай ҙа ҡуям.

– Ҡуйсы, шулай итеп ҡырҡмыш тай булып йөрөүеңде бер ҙә яратмайым да. Әсәң дә бушамай, исмаһам, сәсмәү яһап бирһен тағы, минең күҙем йүнле күрмәй. Ана әсәңде кейәүгә биргән йылды мин уға әҙәм көсө етмәҫлек һаҡал яһап биргәйнем, шуны ана үҙем Советта председатель йылды тракторға бирҙерттем. Арғы остоң Байғужа ҡайнаға, шуны ишеткәс, мине эт итеп әрләне бит: ҡартайған һайын бәйеләң аҙҙы, килен, уны улайтып юҡҡа тәләф иткәнсе, муллаға биреп Ҡөрьән сығартһаҡсы, үлектәргә бер доға булыр ине, ти, ер төкөрә, бахыр ғына.

Мәрйен, ҡартәсәһе сельсовет председателе булып эшләгән ваҡыттарын һөйләй башлаһа, бөтә эшен онотоп тыңлай, ҡыҙығып өҙләкһеҙ һораша:

– Ҡартәсәй, ҡартәсәй, һин ҡайһы йылдарҙа председатель булдым тиһең әле?

– Ҡайһы йылы тип ни, ҡайһы йылын кем белә, аслыҡты сыҡҡандың өсөнсө йылымы, икенсе йылымы икән шул, өсөнсөһө ине, шикелле.

– Ҡартәсәй, һин бит һуң үҙең яҙа белмәйһең, уҡый белмәйһең, ҡалайтып эш ҡағыҙҙарын уҡый торғайның һуң?

Әбейгә был турала әйтһәң, бер ҙә яратмай, күңеленә ауыр ала.

– Ярар, һеҙ уҡый белгәс. Ни эшләп белмәйем ти, таҡай-тоҡай булһа ла, ҡул ҡуя беләм бит мин. Сиклатар

яҙа, мин ҡул ҡуя торғайным. Һеҙ бына ни тиклем уҡыһағыҙ ҙа, ундай өлкән эштәрҙе атҡара алмайһығыҙ бит әле. Үрҙән килгән кешеләр әбдән төшөнгәнсә әйтеп, һөйләп китәләр ҙә, шунан эшләй бирәһең ул. Кеше эшләгән эште белмәйем тигәнде ҡуйһаңсы инде, балам. Урыҫ араһында күп йөрөгәс ни, урыҫ теленә аптыраманым. Бер-бер эш менән ҙурыраҡ урындарҙан килгән урыҫтар булһа, мине саҡырта һалып ала торғайнылар.

Мәрйенгә ҡартәсәһенең был һүҙҙәре бигерәк тә ҡыҙыҡ тойола. Уның көлгөһө килә, ҡартәсәһен үпкәләтмәҫ өсөн, тулы, түңәрәк, алһыу яңаҡтарын һыйпай ҙа һылыу ҡара ҡаштарын йыйырырға тырыша.

– Ҡартәсәй, аслыҡ йылынан ике-өс йыл һуң, тиһең, үҙең, кулактарҙы ауылдан ҡыуғанда, колхоз ҡорғанда ла ҡатыштым, тиһең.

– Атаҡ, ҡатышмай ни, дәл уртаһында булдым. Беҙҙең ауылға барғанда, ана урта ауылды күрһәттем бит, ана шул Көнсыуаҡтарҙы бөтә төбәге менән оҙаттыҡ. Улар ни борон-борондан нигеҙле килгән кешеләр бит. Волосҡа барҙыҡ та, унан килгән кешеләр менән ауылда ярлылар йыйылышы үткәреп, колхоз төҙөп алдыҡ та, тегеләрҙең бөтә йорт-йыһаздарын, малдарын колхозға алып, үҙҙәрен оҙаттыҡ шул. Миңә уҡыу ниңә кәрәк?.. Мин үҙем һабаҡ. Мин ул дошмандарҙың ҡылғанын өнөмдә түгел, төшөмдә лә онотасаҡ түгелмен. Ярман һуғышы сыҡмаҫтан бер-ике йыл борон ҡартатайың бахыр менән Ҡыҙыл йылғаһының үр яғындағы анау Һыртынский тигән ҡаҙаҡ урыҫы ауылының йылҡыһын көттөк. Көтөүселәр беҙ генә түгел. Ҡыҙылды буйлап ун биш-егерме тирмә теҙелешеп ултырабыҙ. Ҡайһыһы баярҙыҡын көтә, ҡайһыһы, беҙҙең һымаҡ, ауылдыҡын көтә. Ҡайһы саҡта алмашлап та көтөшөп китәләр. Беҙ көткән ауыл бик өлкән ине. Әләксәй тигән урыҫтың йылҡыһы әҙәм ҡулы тейгеһеҙ аҫау була торғайны. Беҙ ул заманда, көтөү алған саҡта, бейәләрен һауып, ҡымыҙ эсергә һөйләшә торғайныҡ. Урыҫтарҙың нуҡта теймәгән аҫау бейәләренең ҡымыҙын бер талай эстек инде. Шулай итеп, бер көнө ҡартатайың, бахыр, Әләксәйҙең бер әңгәһерҙәй ҡола бейәһен һауыуға

өйрәтергә миңә ҡороҡлап ҡына бирәйем тип, ҡороҡто муйынына һалғайны... Ҡартатайыңды ҡороғо менән һөйрәтеп-һөйрәтеп алып барҙы ла, башынан һыпырып, олағып сыҡты ла китте. Ҡолоно ҡолонмо, серә, йылҡылдап тора. Һөтлө бейәнең ни! Шунан ҡартатайың ҡолаған еренән ырғып торҙо ла, бүреген алып ергә һуҡты: «Ана, ер йотһон, һөтөңдө эсермәһәң, ошо ҡолоноңдан яҙҙырырмын!» – тине. Тирә-яҡтағылар ҙа йыйылып киттеләр. Улар ҙа бейәнең көсөнә ғәжәп ҡалдылар. «Ғүмерҙә бер аҫау айғырҙы ла ҡулынан ҡотҡармаған Тимербай ағай, һиңә ни булды? Әллә ҡартлыҡ еңәме?» – тиештеләр. Аранан ҡайһылыр йор кешеһе: «Булһа булыр шул, сәсенә ҡырау төшкән ғуй», – тип көлөп ҡуйҙы.

Ҡарт, бахыр, ғәрлегенән уларға яман ауыҙлап һүгенде лә:

– Әгәр шул бейәнең ҡолонон ашамаһам, антым башыма етһен! – тине.

Бүтәндәр өндәшмәй таралдылар. Әмәлгә баҡҡандай, шунан ете көн үтеүгә, ҡартатайың, бахыр, сәсрәп ауырып китте. Минең эскә һыуыҡ төштө, бахырымдың башына анты етмәһә генә ярай ине, тим. Ни булһа, ул булһын, ҡолондо һуйҙырып ҡына итенән ауыҙ иттерәйемме икән әллә, тип тә ҡуям. Ул арала тирмәләге Сәйрүш баярҙың көтөүсеһе, әлеге ҡартатайыңа көлгән Сулпан килеп инде. Мин шулай, шулай тип хәлде һөйләп бирҙем. Сулпан ни элеп алды ла китте:

– Әй, еңгә, бер ҙә аптырама. Әләксәйҙең етмеш-һикһән баш йылҡыһынан бер ҡолон ҡайҙа китмәгән, үҙем тотоп һуям, – ти. Мин, ҡуй ҙа ҡуй, гонаһы булыр, тинем. Ул үҙенекен ҡыуа: – Була, имеш, урыҫ малын һуйғанға ниндәй гонаһы булһын тағы! Бүре ашаған, тибеҙ ҙә ҡуябыҙ уны, – ти. – Атыу ағайым үлә бит, – тип ҡурҡыта.

Мин уның «үлә» тигәнен ишеткәс, унан яман ҡурҡтым. Яманмы, яҡшымы, күп йыл ғүмер иткәс, туҡмаған саҡтары булһа ла, баш күнеккән, ир булғас, бисә туҡмамай булырмы. Әллә, мин әйтәм, үҙ ихтыярығыҙ тағы, тинем. Уларға ни шул етә ҡалды. Бишәү-алтау эркелешеп киттеләр. Араларынан Ҡолтап ҡарт:

– Беҙ уны төптө урламайбыҙ. Үҙе бирә ул, бына күреп тороғоҙ, үҙе бирә, – ти.

Шулай итеп, улар бер ҙә уйлап тормағандар. Аҡһырғаҡ ҡайнатып тороп, ҡолондо тотоп алып, бахырҙың танауына бөрккәндәр. Ҡолон, бахыр, зыр түңәрәп әйләнә башлаған. Кемеһелер менеп Әләксәйгә сапҡан. Ҡолоноң ауырый ҙа, ҡолоноң ауырый, әйләнсек булған, ни эшләтәбеҙ инде, тигәндәр. Әләксәй бай атын егә һалып килеп етте. Ҡараһа, ҡолон ысынлап әйләнеп тик йөрөй. Шунан ул ҡул һелтәне.

– Ҡуй, һуйығыҙ инде, әйҙә һеҙҙеке булһын, – тине лә кире боролоп ҡайтып китте.

Урыҫ булһа ла, арыу бәндә ине, үҙе башҡортсаға һыуҙай ине. Хужанан рөхсәт булғас ни, ҡолондоң итен ашап киңәндек. Һимеҙ килеп тороп, ҡаҙыһын-ниһен әйтәһең инде! Итенең ҡырҡмаға ҡараһы юҡ. Ҡабырға һырттары ая ҡалынлыҡ май байғоштоң! Ҡарт, бахыр, төҙәлгәс, әлеге Әләксәй тағы килде.

– Инде, берүк, ҡалғанына теймәгеҙ. Бүре ашаған, тиһәгеҙ, ышанмаҫ инем, минең малдар ғүмере бүрегә бирелгәндәре юҡ. Былай әйләнеп йөрөгәс, булманы инде. Тимофей (Тимербай тигәнде шулай ти торғайны), берүк, ҡара инде малдарҙы, – ти. Шунның аръяғына теймәнек, уны ни итәһең. Шулай итеп, үҙе ауырыуынан яҙылып китте.

Хәбирә еңгә лә ҡоҙағыйының әллә ҡасан үткәргән был кисерештәрен, ҡойған сәйен дә эсмәй, бирелеп тыңлап ултырҙы ла, уның, ҡарты төҙәлде, тигән еренә еткәс, иркен тын алды:

– Ҡарасәле, ярай инде, улайтып һәүетемсә генә бөткәс. Әлдә урыҫтар, яла яғып, судҡа тарттырмағандар икән әле, – тине. Ҡойған сәйен эсеп бөтөп, сынаяғын түңкәрҙе. Ләкин Юлдаш әбей уға ирек бирмәне:

– Йә әле, ҡоҙағый, әле баштан сынаяғыңды түңкәреп ни, эсәйек әле, сәй өҫтәнем, самауырым шаулап ултыра, – тип, тағы сәй яһай башланы.

Мәрйен сәй эсеп туйып, картәсәһе алып ҡайтҡан нәмәләрҙе аҡтарып ҡараны. Үҙенә таман ғына резинка сеүәктәрҙе кейеп ҡарап:

– Ҡартәсәй, быныһы миңәме, гимнастика яһағанда кейергә һәйбәт икән.

– Һиңә, балам, һиңә, аяғыңа таманмы?

– Таман ғына. Ҡартәсәй, һине кем алып килде, йәйәү ҡайттыңмы әллә?

– Юҡ, ҡалайтып шунса нәмәне күтәреп, йәйәү ҡайтайым? Ирғәли ағайың машина менән алып килеп китте. Шуны һәйбәтләп ҡунаҡ итермен тигәйнем, ҡабаланды ла ҡалды. Ирғәлиҙе күрһәм, үҙемдең баламды күргәндәй булам. Минең дә уның менән бер йәшлек улым бар ине, бәләкәй саҡтарында бергә генә уйнап үҫкәйнеләр, бахырымдың 12 йәше тулды тигәндә, күкрәгенә ат тибеп үлтереп ҡуйҙы. Көтөүҙә атаһы менән бергә йөрөгән була торғайны, шунда һәләк булып ҡуйҙы шул балам... – Әбей һүҙҙән туҡтап, үҙенең уйҙарына юл ҡуйған һымаҡ, бер шәшке аҫты сәйен өндәшмәй һемерҙе лә тағы ялғап китте: – Беҙҙең быуында күрмәгән аҙ ҡалды инде. Ул нужа үҙәгеңә үтһә, бер ҙә уҡып тора торғаны юҡ икән, донъя үҙе өйрәтә икән ул. Мин килен булып төшкәс, ҡайным ҡартатайың бахырҙы ике-өс ҡайта тороп туҡманы, ерле юҡ нәмәгә ҡыҙа ла китә шул. Байлыҡ яраштыра, юҡлыҡ һуғыштыра, тигәндәре бик дөрөҫ ул. Ҡартатайың, бахыр, ул итеп, был итеп кешегә эшләп, табыш итә торғайны. Шул ҡайныма әллә ни нәмәһе ярамай. Ҡамсы менән килеп тороп тарта бахырҙы. Ҡартатайың, бахыр, сыт та итмәй, ни йәне менән сыҙайҙыр инде, баш һалып тик тора. Шунан мин түҙмәнем, йәш булһам да, батыр инем:

– Ир ҡорона тулғанһың, өйөңә бисә төшөргәнһең, оҙаҡламай ата булырға тораһың, – мин әйтәм, – ҡасанмаға былай тип атаңдан туҡмалып тормаҡ булаһың? Ирмеһең, ҡатынмыһың һуң һин? – тинем.

Ошо һүҙ баяғыны сәмләндерҙе бит. Атаһының ҡулынан ҡамсыны һелкә тартып алып мөйөшкә ырғытты ла:

– Бик улай шашһаң, әйҙә, сығып кит, – тип екерҙе. Ҡайнымды, бахырғынаны, бөгөнгөләй хәтерләйем – аптырап, өнһөҙ-тынһыҙ улына ҡарап торҙо ла, ҡарсыға моронон оҙон итеп бер тартып, еңгенәһе менән арҡыры һыйпап, өндәшмәй генә сыҡты ла китте. Шунан өс-дүрт

көн үткәс, ҡайтып килде баяғы. Шунан балаһын туҡмамаҫ булды. Беҙ көтөү эшенә бәйләнеп киттек. Утыҙ йылдан артыҡ көтөү көттөк. Утыҙ йыл буйы ошо Ҡыҙыл һыуының ике яҡ яғаһын иңләп, бер башынан икенсе башына тиклем тапаныҡ инде. Ҡайным бахыр ҙа картайҙы. Үлә-үлгәненсә үҙебеҙ аҫраныҡ. Күкһәү ауырыуына һабышып китте. Үҙе йәш ғүмерендә ҡаҙаҡ араһында йөрөп көтөү көткән кеше, һөйләгәндә лә ҡаҙаҡса ҡатыштырып һөйләй, асыуланһа, ҡаҙаҡса әрләгән була торғайны. Бик оҙаҡ ауырыны. Бахыр ғына, арлы-бирле хәле инеп, күңеле күрәйһә:

Ҡыҙыл ғына буйы ҡыҙыл ҡырсын,
Ҡыҙыл ҡырсын буйлап йүгерҙем.
Уҙып ҡына киткән был ғүмергә
Бүреккенәмде һалып һыҙғырҙым.

Ҡыҙыл ғына һыуы өйрәк, ҡаҙ,
Өйрәктәре осоп, ҡаҙ ҡалды.
Беҙ йырламай, дуҫтар, кем йырлаһын,
Беҙ күрмәгән нужа аҙ ҡалды, –

тигән булып йырлай торғайны…

Беҙ күрмәгән нужа аҙ ҡалды инде. Тик бына ҡартатайың, бахыр, нужаһын күреп, рәхәтен күрмәй үлеп китте. Шулай урыҫ араһында күп йөрөп киткәс, ҡартая башлағас, халыҡ араһында «урыҫ Тимербай» тигән исем күтәргәс, үҙ илебеҙгә, үҙ башҡортобоҙға ҡайтып көн итәйек, тигән булып, үҙебеҙҙең ауылға ҡайтып, Көнсыуаҡ байҙың йылҡы көтөүен алған булдыҡ. Алдырыр көн яҙҙырыр, тип, уның былай булып ҡуйырын кем белгән, төптө шул Һыртынскийҙан уҡ ҡайтмаҫлыҡ булған икән, ҡороғороң…

Шулай итеп, ауылда көтөү көтә башланыҡ. Көнсыуаҡтың малы мал ғынамы һуң? Ҡоҙағый, ана Ҡайынлыға барғанда үҙең дә күргәнһеңдер әле мәсет янындағы ике ҡатлы ҡыҙыл кирбес йортто?

– Күрмәй ни, күрҙем, хәҙер унда колхоз кооперативы бит.

– Эйе, эйе, ана шул Көнсыуаҡ байҙың йорто бит. Шуның ҡапҡаһынан ябырылып малы сығыр ине, ана ҡаршыһындағы Көнсыуаҡ тауының битен ябыр ине. Шунда ла көтөүҙең бер осо кәртәлә булыр ине. Ана шулай бай ине ул Көнсыуаҡ. Шул. Беҙ көтә башланыҡ. Көмөшбикәм бынау Мәрйене һымаҡ селберләп кенә ҡыҙ булып етте. Бик һылыу, күрмәгә таҙа булды. Төрлө ерҙән яусы килә башланы. Тейәре лә һорай, теймәҫе лә һорай. Көнсыуаҡ ҡарттың өс бисәле Ишбай тигән иң оло улы тотто ла һораны бит. Дүртенсе бисәлеккә һорай, йә инде, минең сәстәрем үрә торҙо. Ҡалайтып берҙән-бер генә ҡыҙыңды аждаһалай өс бисә өҫтөнән ҡырҡ биш йәшлек кешегә бирәһең? Улар уны әҙәм итәләрме һуң? Ярлы булһа ла, бала ғәзиз бит! Атаһы ғына риза булып ҡуймаһа ярар ине, тип ҡурҡып йөрөйөм. Ишбай ныҡыша, ете-һигеҙ баш мал бирә, байға моңмо ни. Беҙҙең кеше үҙе бик төплө аҡыллы, булмаған намыҫсан әҙәм ине. Ауылға ҡайтҡан булып, донъя ҡорайыҡ, тип уйлағас, үҙе, бахыр, тырышып-тырмашып, көтөүҙән ҡайтҡан арала таш ташып өйөп, кәртә-ҡуралар урата башлаған булды. Мин дә ҡул-ҡамытлыҡ иткән булам да, бисә кешенең таш эшендә көсө ни инде. Шунан бер көнө Көнсыуаҡтың шул Ишбайы, ҡымыҙ эсеп маҙрап, кырандаста ҡырын ятып, ҡара юрғаны атлатып ҡына үтеп бара икән. Күңеле көр булғас ни, беҙҙең кешегә уйнап әйтәм типме, әллә үҙе мыҫҡыл итепме, һүҙ ҡушҡан:

– Эй, Тимофей ағай, был тиклем таштар бурап, ен биклергә уйлайһыңмы ни, малың ҡайҙа? – тигән.

Ҡартатайың шул һүҙгә үлгәнсе ғәрләнгән икән дә баһа, Ишбай ҡыҙ һората ебәргәс тә, яусыһына шул һүҙҙе әйтеп ҡайтарған бит баяғы. Шунан һуң Ишбай ҙа намыҫҡа талашып китте. Батшалар һымаҡ байҙарға бер көтөүсе ҡыҙын бирмәгәс, тегенең даны сыҡты бит инде. Көслөк менән тартып алам тип, ҡыҙҙы аңдый башлағайны, беҙ тиҙ генә, алдан вәғәҙәләшеп йөрөгән ошо Сөләк кейәүҙе саҡырып алып, Көмөштө ултырттыҡ та ебәрҙек. Шунан алып Көнсыуаҡтар бөтә тоҡомо менән тере дошманға әйләнделәр. Ҡартатайың, көтөү йылын тултырайым да, кире урыҫ араһына китербеҙ, бында тороп булмаҫ, тип

кенә йөрөй ине, Көнсыуаҡтар йәшәтмәнеләр, үҙҙәренең бер яҡшы айғырҙарын йәшерҙеләр ҙә, Тимербай урланы, тип, нахаҡ бәлә ябып, тоттороп ебәрҙеләр. Юлда барғанда, яллап үлтертеп ғәйеп иттеләр, ҡәһәр һуҡҡырҙары! Йөрөгән булдым, волосҡа ла, урәдниккә лә барған булдым. Ҡайҙа ул, түрәләр һөйләшмәйҙәр ҙә. Көнсыуаҡ барыһына мал биреп, аҡса биреп, нығытып ҡуйған. – Юлдаш әбей, күҙенә эркелгән йәштәрен еңе менән һөртә-һөртә, һүҙен бөтөрҙө: – Үсемде алдым ҡырғырҙарҙан, үсемде алдым! Колхоз ғына килеп сыҡҡайны, бөтәһен бер ҡунысҡа тығып оҙаттыҡ. Ишбайҙың үҙе лә ана әллә ҡайҙа үлеп ҡалған, ти, әле. Беҙҙекен аҡса биреп үлтерткәйне, үҙе лә язаһын алды, ҡәһәр һуҡҡыры!..

Бына бында миңә ниндәй уҡыу кәрәк? Бынан өлкән һабаҡ бармы? Һеҙ бына шуны уҡығыҙ, Мәрйен балам!

Мәрйен, ҡартәсәһенең һаман үҙенә үпкәләгәнен күреп, уңайһыҙланды:

– Юҡ та, ҡартәсәй, мин һине уҡый белмәй тип ғәйепләмәйем бит һуң, – тине.

– Ғәйепләргә урының да юҡ. Беҙ бахырҙарға уҡыу ҡайҙа ти ул. Һеҙгә килде инде бына иркен донъя. Әйҙә, ни бар ғилемде, ни булған белемде алып ҡалығыҙ, балам.

Мәрйен ҡартәсәһен иркәләнеп алдаштырҙы. Уның ашъяулыҡ эргәләп һуҙып ултырған аяҡтарына башын һалып аунаҡланы:

– Йә, йә, ҡартәсәй, бөттө. Уҡыу ғына түгел, оҙаҡламай ярапланда ла осоп китермен әле бына, күрмәй ҙә ҡалырһың. Ана әле гәзиттә ҡыҙҙарҙың һауанан ярапландан парашютта һикергәндәрен һүрәткә төшөргәндәр. Ҡалаға барҙыниһәм, үҙем дә шунан ырғыйым әле, ҡартәсәй.

– Осһаң ос, ырғыһаң ырғы, тик һау ғына бул, шәп бул, ҡолонсағым! – Әбей тынысланды. – Ай Алла, ятма әле, балам, тубығыма, аяҡтарым ойоп киткән.

Хәбирә еңгә лә сәй эсеп туйып, урынынан торҙо.

– Бик оҙаҡ ултырып киттек, ҡайтайым әле. Һыйыр ҙа ҡайтыр инде. Атаҡ, минең аяғым да ҡалай ойоп киткән. – Ул тупсанлай-тупсанлай урындыҡтан төшөп, ҡаталарын кейҙе.

Ул киткәндә, Юлдаш әбей оҙата сығып:

– Ҡоҙағый, иртән ҡояштан алда тороп эшкә китербеҙ. Тегеләргә әйтеп ҡуй әле, – тип ҡалды.

Хәбирә еңгә:

– Ярай, ярай, бөгөн үк әйтермен. Ҡалған эшкә ҡар яуа, ти, иртәнән ҡалдырмай бөтөрәйек инде ул картуфты, – тине.

Мәрйен, әбейҙәр сыҡҡас, тиҙ генә яҙыу-һыҙыуҙарын йыйыштырҙы. Йәшелле-күкле, ҡыҙыллы-ҡаралы бағаналар менән биҙәлгән диаграммаһын тағы бер тапҡыр йәйеп ҡарап һоҡланды, уны өҫтәлгә кире һалып, тәҙрә янына килде лә, селтәр ҡорғанды һирпеп, тышҡа ҡараны. Көн кискә һарҡҡан. Байырға яҡынлашҡан ҡояш һыу аръяғындағы ырҙында кәбәк саңдарын һауаға боролдатып ултырған тапам машинаһын, уның тирәяғында ҡыжмып йөрөгән кешеләрҙе һуңғы нурҙары менән иркәләй, ундағы эре-эре һары иген кәбәндәрен тағы ла һарыраҡ итеп нурында сағылдыра. Мәрйен ата-әсәһенең бөгөн дә ҡайтмай шунда төндә лә эшләйәсәктәрен иҫенә төшөрөп, үҙе лә бөгөн ҡайтмай шунда эшләргә булды. Ишек төбөндә һөйәүле торған велосипедын алып, тәгәрәтеп ишектән сығыуға, ҡартәсәһе осрап:

– Ҡайҙа бараһың? – тине.

– Ырҙынға эшкә барам, ҡартәсәй. Һыйырҙы үҙең һауырһың инде. Мин бөгөн ҡайтмайым, төнгәсәйен эшләйбеҙ, – тине.

Юлдаш әбей башындағы аҡ яулығын төҙәтә-төҙәтә:

– Йә бар, бар, һауырмын, – тине.

Мәрйен, оҫта һикереп, велосипедына атланды ла уның ҡыңғырауын сыңғырлата-сыңғырлата күпергә тәгәрәне. Уның ҡырҡҡан ҡара ҡуңыр сәстәренең бөҙрәһе, елдә уйнап, сикәләренә һуғыла, йөн фуфайка өҫтөнә таҡҡан ГТО значогы һул яҡ күкрәгенә һуғылып-һуғылып бәрелә, алһыу күлдәгенең киң итәктәре, велосипед елендә елберләп, атҡан сәскә һымаҡ туҙылып, артҡа һирпелә ине.

Юлдаш әбей, ейәнсәренең ҡараһы күҙенән юғалғансы, уң ҡулын маңлайына ҡуйып текләп торҙо. Уның сырышҡан ҡара-туры йөҙө ҡыуаныслы йылмайҙы. Мәрйендең

ҡараһы юғалғас ҡына, ул урынынан ҡуҙғалып, тәрән көрһөндө. Әйтерһең дә, ҡыҙының ал күлдәктәрен елберләткән шаян елдәр уның да иҫке хәсрәтен өрөп тарҡаталар, әйтерһең дә, Мәрйен ашығып бара торған машинаның көслө гудок тауышы уның хәсрәтле, иҫке ҡайғылы уйҙарының ауырлығын алып ырғытты. Ул йылмайған сырайы менән келәткә боролдо. Ишеген асып ҡараны. Ярты буранан артыҡ ҡып-ҡыҙыл бойҙай ишелеп ята. Сөләк менән Көмөштөң быйылғы трудденына тағы бишалты йөҙ бот буласаҡ. Уны һалырға урын кәрәк ине. Ул, елтерәкләп йөрөп, алдағы өйҙөң урындыҡ аҫтын йыйыштыра башланы. Үҙ-үҙенә һөйләнде:

– Ошонда ғына һыйһа, бик ярар ине лә, һыймаҫ шул. Ҡайҙа йыйырға инде был тиклем игенде, ҡайҙа ғына урынлаштырып бөтөрөргә инде?

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Юлдаш әбейҙең ҡаланан ҡайтыу ваҡиғаһынан сығып, әҫәрҙә ҡайһы йылдар тураһында һүҙ барғанын самалап буламы?
**2.** Юлдаш әбей, күршеһе Хәбирә, Мәрйен сәй эскән арала ниндәй ваҡиғалар тураһында һөйләшәләр?
**3.** Шуларҙың ҡайһыларында һырға һабағы телгә алына? Ул бында ниндәй мәғәнәлә ҡулланыла?
**4.** Авторҙың һәм геройҙарҙың телмәренә иғтибар итегеҙ. Хәл-ваҡиғаларҙың ҡайһы төбәктә барғанын ниндәй һүҙҙәр һәм ер-һыу атамалары аша белергә мөмкин?
**5.** Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар бирелешендә, геройҙарҙың ҡылыҡтарында һәм телмәрендә «Айбикә» повесы менән уртаҡлыҡтар эҙләп ҡарағыҙ. Таба алһағыҙ, сәбәптәрен аңлатып бирегеҙ.



# Рәшит НИҒМӘТИ

## (1909–1959)

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти (Ниғмәтуллин Рәшит Ниғмәтулла улы) 1909 йылда хәҙерге Һамар өлкәһе Диңгеҙбай ауылында тыуған. Уның бала сағы бик ауыр була. Ун йәшендә әсәһе донъя ҡуя, тағы ике йылдан атаһы үлә. 1916–1919 йылдарҙа ауыл мәҙрәсәһендә уҡый. Үкһеҙ етем ҡалғас, уны Һамар балалар йортона урынлаштыралар, аҙаҡ ун биш йәшенә тиклем Украинаның Белая Церковь ҡалаһындағы балалар йортонда тәрбиәләнә. 1924 йылда Өфөгә ҡайтып, Ленин исемендәге интернат-мәктәптә уҡый, 1930 йылда рабфак тамамлай.

Хеҙмәт юлын Туймазы районының «Ленин юлы» исемле район гәзитендә башлай. Башҡортостан Яҙыусылар берлегендә яуаплы сәркәтип, Китап нәшриәтендә мөхәррир вазифаларында эшләй.

Р. Ниғмәти 17 йәшенән үк шиғырҙар яҙа. Тиҙҙән уның әҫәрҙәре халыҡ араһында киң билдәлелек ала. «Кереш» исемле тәүге китабы 24 йәшендә донъя күрә. XX быуаттың 30-сы йылдарында һәм Бөйөк Ватан һуғышына тиклем «Дауылдар тыуҙырған ғүмер», «Йәмле Ағиҙел буйҙары», «Минең баҡсамда» тигән шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтыҡтары баҫылып сыға. Шағирҙың һуғыш йылдарында ижад иткән «Һинең кәләшеңдең хаттары», «Егеттең яуабы», «Үлтер, улым, фашисты!» поэмалары, «Башҡортостан һүҙе», «Мөхәббәт һәм нәфрәт йыры» китаптары илебеҙ халыҡтарын еңеүгә рухландырҙы. 40-сы йылдарҙа әҙип драма әҫәрҙәре лә яҙҙы, уның «Врач Ғимранов», «Ағиҙел ярында», «Урман шаулай», «Уның йондоҙо» пьесалары театр сәхнәләрендә ҡуйылды. Ғүмеренең һуңғы ун йылы эсендә ижад иткән «Һинең кәләшеңдең хаттары», «Большевик», «Осҡондан – ялҡын» поэмалары шул дәүерҙәге башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына инде.

Рәшит Ниғмәти балалар әҙәбиәте һәм тәржемә өлкәһендә лә ихлас эшләне. Мәктәп уҡыусылары шағирҙың «Ҡыҙымдың һорауҙа-

рына яуаптар» поэмаһын, «Киләсәккә сәйәхәт» китабына ингән шиғырҙарын бөгөн дә яратып уҡыйҙар. Ул боронғо рус әҙәбиәтенең «Игорь полкы хаҡында һүҙ» ҡомартҡыһын, А. С. Пушкин, М. Ю. Лермонтов, В. В. Маяковский шиғырҙарын, С. П. Злобиндың «Салауат Юлаев» романын башҡорт теленә тәржемә иткән.

## ЙӘМЛЕ АҒИҘЕЛ БУЙҘАРЫ

Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.
Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға,
Һалҡын терегөмөш шикелле.
Ярҙарында талдар тулҡыналар,
Шаулашалар ялбыр ҡайындар,
Төптәрендә ваҡ таш,
әйтерһең дә,
Барлыҡ йондоҙ шунда байыған.
Ағиҙелкәй!
Һинең буйҙарыңда
Нисә быуын ғүмер кисергән,
Үҙең кеүек тәрән,
үҙеңдәй киң
Күпме йыр бар һинең исемгә!
Һәм һәр быуын
үҙенең шатлығын да,
Ҡайғыһын да һиңә йырлаған.
Ул йырҙарҙы тын да алмайынса
Тыңлай торған булған Уралтау.
Тараҡҡанһың ҡайғы,
ә шатлыҡты
Тәрәнерәк итә алғанһың.
Һиңә тартылғандар
кем шатлыҡлы,
кем хәсрәтле,
кемгә яманһыу.

Яр ташыңа ҡунып ялдар иткән
Ҡор ауынан ҡайтҡан ҡарсыға.
Тауҙар ватып, таштар аҡтарғанда,
Йыр йырлаған һиңә таусылар:
«Ағиҙелкәй аға урғып-урғып,
Ҡояш байыштары яғына.
Таштар аҡтарырға ҡыуһалар ҙа,
Ағиҙелкәй, һине һағынам».
Моңло-моңло йыр йырлаған һалсы,
Кис тынлыҡта ағып барғанда.
Ул йырҙы ай, талдар, һандуғастар
Таң ҡалышып тыңлап ҡалғандар:
«Ағиҙелкәй алҡын, һыуы һалҡын,
Тулҡындары тулы, яры киң,
Киң яландар кеүек киң Иҙелде
Байғуралар беҙгә тар итте».
Ай байығас тауҙар аръяғына,
Таң һарғайып килгән сағында,
Ҡыҙ йырлаған һөйгән егетенә
Ағиҙелдең бейек ярында:
«Ағиҙелкәйҙәге дүрт өйрәкте,
Бик үк мәргән булһаң, – ат, егет.
Мал биреп үк һөйгән йәрең түгел,
Таң һарғайып килә – ҡайт, егет».
Онотҡан да егет бар ҡайғыһын,
Шатлыҡ хистәренә күмелеп,
Яуап биргән һөйгән матурына,
Иретерлек таштар күңелен:
«Ағиҙелкәйҙәге дүрт өйрәкте,
Бигүк мәргән булһам да, атмайым.
Таң һарғайыу түгел, ҡояш сыҡһын,
Танһыҡтарым ҡанмай ҡайтмайым».
Бик алыҫтан, урман, тауҙар аша
Йыр яңғырай Иҙел турында.
Шул йырҙарҙан
йәмле Ағиҙелгә
Мәңгелек ҙур һәйкәл ҡоролған.

Тарихсылар, кеше ғүмерен әҙләп,
Боронғоноң эҙен ҡаҙыһа,
Ер аҫтында
ҡорал, ҡәберлектәр,
Бик күптәнге ҡала табыла.
Ҡаҙыһын ине улар Ағиҙелдең
Көмөш һыуын, ташлы ярҙарын,
Табыр ине улар ташҡа һеңгән,
Һыуға һеңгән моңдо, аһ-зарҙы!
Ағиҙелкәй!
Оҙон ғүмерендә
Ни белмәгән, ниҙәр күрмәгән.
Күргәндәрен уның бөгөндә лә
Тулҡындары һөйләп бирәләр.
Салауат батыр
саптар аты менән
Йөҙөп сыҡҡан саҡта Иҙелде,
Ҡулдарынан тулҡын тотоп торған
Таш йөрәкле һалҡын үлемдең.
Инде яр буйында
Пугачёвтың
Ҡылыс яныған эҙе ҡалмаған,
Ләкин шул турала һаман һөйләй
Тулҡын ҡаға торған ҡаялар.
Ағиҙелкәй көткән килер көнөн,
Ул теләгән йәйрәп ағырға,
Батырҙарҙың күҙҙәренә ҡарап,
Ул тыуасаҡ ғүмерен һағынған.
Йылдар үткән…
Бер саҡ шаулағандар
Ағиҙелдең зифа талдары.
Һәм яҡтырып киткән нурһыҙ йөҙө
Яр ситенә баҫҡан ҡаяның.
Гудок тауышын ярҙар яңғыратҡандар,
Поезд килеп кергән күпергә.
Ағастарға тәмле тойолғандар
Паровоздан сыҡҡан төтөндәр.

Иҙел аша Ленин үтеп киткән,
Ул тәҙрәнән ҡарап барғанда,
Аҡ ҡайындар, ҡарт имәндәр,
эйелеп,
Шул тәҙрәнән ҡарап ҡалғандар.
Ер тетрәтеп ҡалҡҡан ҡаты күкрәү
Күтәрелгән бейек тауҙарға.
Һәм Ағиҙел,
ҡаты тулҡынланып,
Ярҙарынан үрелеп ҡараған.
Фрунзе уҙған урман аръяғынан
Һәм ҙур ҡыҙыл байраҡ килтергән.
Чапай сапҡан, бурка салғыйҙарын
Елберҙәтеп елдәр иркенә.
Ай Ағиҙел, Ағиҙел,
Күпте күргән Ағиҙел,
Ҡартлас Урал ни күрһә,
Шуны күргән Ағиҙел.
Ел-дауылға ҡушылып,
Йыр йырлаған Иҙел ул,
Оҙон ғүмере буйына
Йыр тыңлаған Иҙел ул.
Ай-ҡылыстай бөгөлөп,
Ярҙарынан түгелеп,
Арғымаҡтай йүгереп,
Ашығып аҡҡан Иҙел ул.
Ай Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай Ағиҙел, Ағиҙел!
Ҡая ташын ҡаушырып,
Кереш тартҡан йылға ул,
Мәргән уғын дошманға
Кирелеп атҡан йылға ул.
Ҡайынына ҡан биргән,
Имәненә йән биргән,
Яланына йәм биргән
Һылыу ҙа һылыу йылға ул.
Һандуғасын һайратып,
Туғайҙарын яңғыратып,

Ташына ҡылыс ҡайратып,
Талпынып аҡҡан йылға ул.
Ай Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай Ағиҙел, Ағиҙел!
Һыуһап килгән юлсыға
Һыуын биргән был Иҙел.
Байҙан ҡасҡан ялсыға
Ҡуйынын биргән был Иҙел.
Дуҫтар яуға сапҡанда,
Айырылған ул икегә.
Дошман яуға сапҡанда,
Урғып ярҙан һикергән.
Дуҫтар аттан ҡолаһа,
Батырмаған дуҫтарын,
Дошман аттан ҡолаһа,
Һә тигәнсе йотҡан ул.
Ай Ағиҙел, Ағиҙел,
Ай Ағиҙел, Ағиҙел!
Ағиҙелкәй!
Һинең буйҙарыңда
Нисә быуын ғүмер кисергән.
Үҙең кеүек тәрән, үҙеңдәй киң
Күпме йыр бар һинең исемгә!
Тау, урмандар, йөҙәр ер артынан
Йыр яңғыраған һинең тураңда.
Һиңә
мәңгелек һәм емерелмәҫлек
Һәйкәл булып тора шул йырҙар.
Әкиәт йөрөй: «Чапай килеп
Туҡтаған ярға.
Ишеткән: уны тилмереп,
Саҡырған аръяҡ.
Чапай түҙмәгән, ҡынынан
Ҡылысын һурған,
Приказ биргән Ағиҙелгә,
Ҡылысты болғап:
«Мин – Чапай! Юл бир, Ағиҙел,
Оҙаҡ көттөрмә!

Юҡһа боецтарым һине
Ергә тигеҙләр!
Мин – Чапай! Ишеткәнһеңдер,
Ҡыҙыл командир,
Иҙелгәндәргә азатлыҡ
Алып барам мин.
Шатлыҡ килтерәм халыҡҡа,
Тауға, урманға.
Йыр йырлап ағыр шишмәләр,
Йәйрәп – йылғалар,
Килтерәм һеҙгә, туғандар,
Ленин аҡылын.
Килтерәм бәхет, Ағиҙел,
Юл бир, аҡыллым!»
Юл биргән Иҙел, Чапай
Шул юлдан сапҡан.
Полктар һәм дивизиондар
Иркен юл тапҡан.
Кергәндәр Өфө-ҡалаға
Ал байраҡ сөйөп,
Ҡыуғандар Колчак ғәскәрен,
Елкәһен төйөп.
Шул көн булды йәмле Ағиҙелгә
Башланыуы яңы ғүмерҙең.
Май айының сәскәләрен атты
Ошо йылдың ҡайнар июне!
Һуңғы туп тауышы ишетелде
Бик алыҫтан, Байкал яғынан.
Ишетелеп тынған тауыш һымаҡ,
Ҡайтмаҫ өсөн китте ҡайғылар.
Яңы япраҡ ярҙы ҡарт тирәктәр,
Яңы йыр йырланы ҡайындар,
Яҙғы ташҡын һымаҡ, киң йәйелеп,
Шатлыҡ керҙе һәр бер ауылға.
Йәмле Ағиҙелде яңғыратып,
Яңы йыр йырланы кешеләр:
«Буйлай алмаҫ дошман Ағиҙелде,
Ағиҙелдән атын эсермәҫ!»

Һәм Ағиҙел һылыу буй үҫтерҙе,
Зифа буйы кеүек шыршының.
Кремль тирәһендә сайҡала ул,
Мәскәү йылғаһына ҡушылып.

Ялтырап аға Ағиҙел,
ярҙарға ҡаға.
Яр буйында аҡ ҡайындар
ҡалалар ҡарап.
Шул ҡайындарҙың янына
һәр бер ял көнө
Ағыла төрлө яҡтарҙан
халыҡ төркөмө.
Киләләр ҡыҙҙар, егеттәр,
киләләр ҡарттар,
Киләләр гармун тауышы
яңғыраған яҡҡа.
Салауат күпере төҫлө
сыбар кейемдәр.
Шатлыҡлы йылмайыу ята
һәр пар ирендә.
Берәүҙәр бейей, болонда
тапала үлән,
Берәүҙәр һөйгән матурын
тәүге ҡат үбә.
Совет законы килтергән
хоҡуҡты улар,
Шатлыҡҡа һәм йырға күмеп,
үткәрә шулай.
Йырлайҙар бәхетле йәшәү
биргән кешегә.
Йырлайҙар, йырҙары сыға
йөрәк эсенән.
Йырлайҙар, Ағиҙел менән
икәүһен ҡушып,
Һәм тауыш күктәргә аша,
ә ул йыр ошо:

Ағиҙелкәй яры бейек,
Һыуы терегөмөштәй,

Донъяла шундай һыу бармы,
Булһа, ҡайһы мөйөштә?
Алҡынып аға Ағиҙел,
Талпынып аға Ағиҙел
Тауҙар артынан,
Мәскәүгә барып етер ул,
Һәм ҡайнар сәләм әйтер ул
Башҡорт халҡынан!
Ағиҙелдең һыуы һалҡын,
Ярҙары таш булғанға,
Ағиҙел кеүек саф йылға
Юҡтыр инде донъяла.
Алҡынып аға Ағиҙел,
Талпынып аға Ағиҙел
Тауҙар артынан,
Мәскәүгә барып етер ул,
Ҡайнар сәләм әйтер ул
Башҡорт халҡынан!
Ағиҙелдең балыҡтары
Көмөш кеүек ялтырай.
Дошман уны буйлай алмаҫ,
Һыу ала алмаҫ атына!
Алҡынып аға Ағиҙел,
Талпынып аға Ағиҙел
Тауҙар артынан,
Мәскәүгә барып етер ул,
Һәм ҡайнар сәләм әйтер ул
Башҡорт халҡынан!

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Урал менән Ағиҙелде бергә тасуирлаған тәүге юлдан образлы һүрәтләү сараларын табығыҙ, уларҙың нимә аңлатҡанын асыҡлағыҙ.
**2.** Поэмала йыр төшөнсәһе киң ҡулланыла. Иғтибар итегеҙ, әҫәрҙең тәүге һәм аҙаҡҡы өлөштәрендә кемдәр нимә тураһында йырлай?
**3.** Поэмалағы образ-персонаждар өс төркөмгә бүлеүҙе һорап тора: ташсы, һалсы, ғашиҡ ҡыҙ менән егет; Ленин, Фрунзе, Чапай (Чапаев); халыҡ төркөмө. Бындай бүленеште нисек аңлатырһығыҙ?
**4.** Әҫәрҙә Ленин, Фрунзе, Чапаев кеүек шәхестәр исемдәре ни өсөн Ағиҙелгә бәйле рәүештә телгә алына?
**5.** Ағиҙел өсөн яңы ғүмерҙең башланыуын белдереүсе ҡайнар июнь тураһында һүҙ алып барыла. Нисәнсе йылдың июне һәм ниндәй ваҡиға күҙ уңында тотола?

**6.** Шағир башҡорт халыҡ ижадының төрлө жанрҙарын (ҡобайыр, оҙон көй, таҡмаҡ һ. б.) файҙалана, уларҙан өҙөктәр килтерә. Ошондай урындарҙа ҡайһы юлдарҙың халыҡ ижадыныҡы, ҡайһылары авторҙыҡы икәнен билдәләп ҡарағыҙ.

**7.** Поэманан өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

**Фонохрестоматия**

Актёр башҡарыуында тыңлағыҙ.

## *Поэмалар тураһында*

Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесын өйрәнгәндән һуң повесть жанры тураһында һүҙ йөрөтөп, беҙ өс әҙәби төр барлығын белгәйнек. Әҙәбиәттә ике төрҙөң билгеләре яҡынса бер тигеҙ нисбәттә тәшкил иткән әҫәрҙәр ҙә осрай. Йәғни уларҙа хәл-ваҡиғалар, геройҙар хәрәкәте менән бергә, авторҙың уларға ҡарата мөнәсәбәте – лирик сигенеүҙәре, уй-хистәре, кисерештәре сама менән бер үк кимәлдә урын ала. Баллада, нәҫер, поэма жанрҙары шундай үҙенсәлеккә эйә. Бындай әҫәрҙәр лиро-эпик төргә ҡарай.

Поэмаға килгәндә, уның күләме нәҫер менән балладаныҡынан ҙурыраҡ була, шуға күрә авторҙың ижади мөмкинлегенә лә шарттар иркенәйә. Ниндәй темаға мөрәжәғәт итеүенә, уны асыу өсөн ниндәй поэтик саралар ҡулланыуына ҡарап, автор поэмаларҙа йә хәл-ваҡиғаларға өҫтөнлөк бирә, йә уҡыусыға әйтер һүҙен, шиғырҙағы кеүек, күберәк үҙенең уй-кисерештәре, хистәре, әҫәрҙә һүҙ барған проблемаларға шәхси мөнәсәбәте аша еткерә. Һөҙөмтәлә, бер поэмала лириклыҡ, икенсеһендә эпиклыҡ һыҙаттары мулыраҡ урын алырға мөмкин. Жанрҙың был үҙенсәлегенә дәүер ҙә йоғонто яһай. Мәҫәлән, XX быуаттың егерменсе-ҡырҡынсы йылдары поэмаларында күп осраҡта хәл-ваҡиғалар өҫтөнлөк итә (Д. Юлтый, Ғ. Сәләм, Р. Ниғмәти, Б. Ишемғол, М. Кәрим поэмалары), етмешенсе-туҡһанынсы йылдарҙа лириклыҡ элементы көсәйә (Р. Ғарипов, Р. Бикбаев, Р. Назаров һ. б.). Дөйөм алғанда, поэма барыбер лиро-эпик жанр булып ҡала.

Рәшит Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһы – шағирҙың 30–40-сы йылдарҙа яҙылған ошо жанрҙағы

башҡа әҫәрҙәренән («Дауылдар тыуҙырған ғүмер», «Баҫыу хөкөмө», «Тимер юл», «Һаҡмар ҡыҙы») айырмалы рәүештә, лириклыҡ һәм эпиклыҡ нисбәтен бер үк кимәлдәрәк һаҡлаған әҫәр. Бында Ағиҙел йылғаһына бәйле бирелгән тарихи ваҡиғалар теҙмәһе мул ғына бирелә. Улар тураһында Башҡортостандың гүзәл тәбиғәте фонында авторҙың тәрән хис-тойғоло, урыны-урыны менән борсоулы ла, ғорур ҙа уй-кисерештәре йәнәш килә.

## МӘСКӘҮГӘ МИНЕҢ БҮЛӘГЕМ

Мин Мәскәүгә барам.
                    Ҡулдарыма
Ниндәй бүләк тотоп барырға?
Тыуған ерем – хазиналар ере,
Ҡайһы хазинаны алырға?

Алырғамы ат башындай алтын,
Йәки бер көлтәһен арыштың,
Йә Бөрйәндең тәмле йүкә балын,
Йәки ҡуйы нефтен Нарыштың?

Әллә алырғамы бүләк итеп
Ферма һөттәренең ҡуйыһын,
Әллә бүләк итеп алырғамы
Сәскәләрен Иҙел буйының?

Ләкин
        кемгә етһен был бүләктәр?
Мәскәү тулы минең дуҫтарым.
Шуға күрә
            тыуған еремдең мин
Алам бары бер ус тупрағын.

Шул тупраҡта –
                    иген диңгеҙҙәре,
Нефть күлдәре – шуның аҫтында.
Ошо тупраҡ үҙе балдай татлы,
Ошо тупраҡ ҡиммәт алтындан.

Ферма көтөүҙәре шунда йыя
Һөттөң ҡаймаҡ һымаҡ ҡуйыһын,
Хуш еҫтәрен шул тупраҡтан ала
Сәскәләре Иҙел буйының.

Яуҙарҙа яҡлаған уны халҡым
Һәм данлаған уны йырҙарҙа.
Ошо тупраҡты ул
әсе тире
Һәм һөйөүе менән һуғарған.

Алып барамын мин шул тупраҡты
Һәм шатланам шуға уйымдан:
Барығыҙға ла өлөш тейер, дуҫтар,
Һөйөү тип аталған тойғонан.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шиғырҙың идеяһын асыҡлап ҡарағыҙ.
**2.** Шағир тәүҙә Мәскәүҙәге дуҫтарына ниндәй бүләктәр алып барырға тип уйлай? Ниндәй бүләк алырға була?
**3.** Әгәр ҙә һеҙгә Мәскәүгә барырға тура килһә, ундағы дуҫтарығыҙға ниндәй бүләк һайлар инегеҙ?
**4.** «Башҡорт халыҡ ижады» китабынан бүләк тураһында мәҡәлдәр табып яҙығыҙ.



Мостай

# КӘРИМ

(1919–2005)

Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримов) – Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың Ленин премияһы лауреаты. Ул үҙенең «Тормош сәхифәләре» тигән иҫтәлектәрендә балалар өсөн түбәндәге юлдарҙы яҙып ҡалдырған.

«...Мин ырыуҙан ырыуға, нәҫелдән нәҫелгә шөйлә нык ҡына һаҡланыусы үҙ тәртиптәре булған күп бала-сағалы ғаиләлә тыуғанмын. Иҫәп буйынса нисәнсе бала булып донъяға килеүемде әйтеүе ҡыйын. Был нисек, ҡайһы остан иҫәпләүгә бәйләнгән. Тыуған йылым – 1919, тыуған айым – октябрь. Был мәғлүмәттәрҙе ғаилә Ҡөрьәненең бер мөйөшөнә затыбыҙҙа берҙән-бер уҡый-яҙа белгән өлкән ағайым Мортаза ҡулы теркәгән.

Беҙҙең Келәш ауылы Дим һыуынан – ҡасандыр Сергей Тимофеевич Аксаковтың наҙлы һәм һағышлы йырына әйләнгән йылғанан – ике саҡрымдар тирәһе алыҫлыкта тау битләүендә ултыра. Келәш тауҙарынан төндәрен Өфө уттары күренеп тора – баш ҡаланы беҙҙең ауылға яҡын ғына һалғандар.

Бәләкәйҙән үк мин доғалар ятларға әүәҫләнеп алдым. Әлбиттә, мәғәнәләрен аңламайым, шулай ҙа уларҙың арбаусы көсөн үҙемдә шаҡтай нык тоя инем. Өйөбөҙгә хөрмәтле ҡунаҡтар йыйылһа, атайым пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм тәсбихтәрен өйрәнеүҙә минең ниндәй уңыштарға ирешеүемде күрһәтеп алырға ярата торғайны. Үҙем дә быға атлығып торам.

Минең уйлауымса, балаларға ҡайһылыр йәшендә үҙ тиңдәштәре ололарға ҡарағанда ла ныҕыраҡ йоғонто яһаусан. Минең дуҫым бар ине. Искәндәр малайы Әсғәт. Әйберҙәрҙең тылсымлы мәғәнәһен иҫ киткес итеп аңлай, күҙе менән күргәнде йәки ҡолағы менән ишеткәнде түгел, үҙенең хыялына – фараз итеүенә – тап килгәнде шәйләй ала ине ул. Әсғәт ҡоштарҙың нимә тураһында сырылдашыуын,

шишмәнең ни тип ағыуын, япрактарҙың ниңә кыштырлауын яңылышмайынса, дөп-дөрөҫ итеп әйтеп бирә, кешеләрҙең ни уйлауын да тоҫмаллай. Әсғәт үҙе лә һиҙмәҫтән мине шулай хыял донъяһына, үҙе уйлап сығарған уйҙырмаға ихлас ышанырға өйрәтте. Уға мәктәп тупһаһын бер касан да аша атлап үтергә насип булманы. Ишле бала-сағалы ғаиләлә ул ышаныслы эш кулы һаналды, шуға күрә унда укыу кайғыһы юк ине. Һуғыш башланыр алдынан Әсғәт армияла хеҙмәт итә ине инде, уның зәңгәрһыу күҙҙәренең кайҙа, ниндәй яландарҙа һүнгәнлеге миңә билдәһеҙ.

Яҙыу-һыҙыуға һәүәҫлек, дөрөҫөрәге, кешеләргә үҙ исем-шәрифемде, кағыҙға яҙып, танытырға теләү күңелемдә шактай иртә уянды. Беренсе класка мин инде шыма ғына укырға-яҙырға өйрәнгәс, ун бер йәшемдә барҙым. Иң әүәл иғтибар иткәнем – класс стеналарына эленгән төрлө лозунгылар, бөйөк кешеләрҙең нәсихәтле һүҙҙәре булды (йәйәләр эсенә авторҙарҙың фамилиялары куйылғайны). Лозунгылар миңә окшаны. Өйгә кайткас, иҫке гәзиттәрҙе йыйҙым да, сыбык осон көрән караға манып, үҙем сығарып, лозунгылар яҙырға тотондом. Уларҙа беҙҙән өй аша тороусы, ғүмер бакый талашып йәшәүсе күршеләребеҙҙе татыулыкка сакырҙым, укытыусы апайҙың кыҙыл кәләмен сәлдергән класташым Хәмәтйәндең ғәйебен фашланым. Бер лозунгымда хатта үтә ялкынланып китеп: «Йәшәһен Өфө калаһы!» – тип оран ташланым. Мине шатландырғаны – лозунгы үҙе түгел, һүҙҙәр аҫтында, йәйәләр эсендә торған култамғам ине. «Ижад емештәремде» стеналарға йәбештереп сыктым.

...Әҙәбиәт кисәләре бик йыш үткәрелә торғайны ул йылдарҙа. Укытыусылар йортондағы кисәгә бер сак беҙҙе – йәш шағирҙарҙы бик киң күңелле, иғтибарлы, ләкин әҙәбиәттә әле үҙен күрһәтеп өлгөрмәгән кеше – Яҙыусылар союзының шул вакыттағы секретары Низам Кәрип алып китте. Райондарҙан йыйылған укытыусылар беҙҙе якшы кабул итте, шаулашып кул саптылар. Йомғаклау һүҙе еткәс, беҙҙең секретарыбыҙ, тамашасыларға карап, һис шаяртыуһыҙниһеҙ: «Бынауыларҙы (ул беҙгә күрһәтте) шулай якшы кабул иткәнегеҙ өсөн рәхмәт һеҙгә. Бүтәндәр менән сағыштырғанда, былар бары кыркмыш тайҙар ғына әле. Иң шәптәре өйҙә калды», – тине. Уның һүҙҙәрен көлкөгә һанап, тамашасылар геү килде... Өйҙәребеҙгә таралышыр алдынан Низам ағай беҙгә ләғәтле аңлатма бирҙе: «Һеҙ һауаланып китмәһен өсөн мин шулай тинем. Карағыҙ уны, танауығыҙҙы сөймәгеҙ!»

...Тиҙҙән мин дә дүрт дәфтәр шиғырым менән шағирҙар секцияһы хөкөмө алдына баҫтым. Тикшереү арыу үтте, шулай ҙа яҙмаларымдың яртыһын ташларға кәңәш иттеләр... Тарап-тырмап сыккандан һуң, «иҫән» калған шиғырҙарымдан йыйынтык төҙөргә тәкдим яһанылар. Йәш шағир Вәли Нафиков менән икәүләп бер йыйынтык төҙөнөк тә уға дәғүәле рәүештә «Отряд куҙғалды» тигән исем бирҙек, йәнәһе,

абайлағыҙ, беҙ ҡуҙғалдыҡ! Китап 1938 йылда баҫылып сыҡты, һуғышҡа тиклем йәнә бер йыйынтыҡлыҡ шиғыр яҙып өлгөрҙөм. Бөтәбеҙ ҙә тойоп торған дауыл алды шомлоҡтарына үс иткәндәй, мин уны «Яҙғы тауыштар» тип атаным. Ул йыйынтыҡтың беренсе данаһын һуғыш сығырға бер көн ҡалғас ҡына ҡулыма алдым. Таңда һуғыш башланды...»

## АЙГӨЛ ИЛЕ

*Алты картиналы романтик драма**

**Ҡатнашалар:**

Сит кеше – йәше юҡ.
Айгөл – прологта 16 йәштәр, унан 17 йәштә.
Йәғәфәр Моратшин – 55 йәштә.
Зөлхәбирә Иҙрисова – ул уҡ синьора Пиккио – 35 йәштә.
Синьор Карло Пиккио – 50 йәштә.
Ричард Галин – Айгөлдөң йәштәше, буйға ҙур түгел.
Ҡәҙерйән Ябағаев – берәҙәк, 60 йәштә.
Зәлифә
Гөлсирә
Банат
Миңлекәй

(Зәлифә, Гөлсирә, Банат, Миңлекәй) – буржуй күрергә килгән ҡатындар.

1955—1956 йылдар

**ПРОЛОГ**

**1955 йыл**

Сит кеше сәхнә алдына сыға. Артта – ҡаялар.

Сит кеше. Мин – сит кеше. Автор миңә хатта исем дә биреп тормаған. «Сит кеше» тигән дә киткән. Әҙәмдәр бер-береһен эҙләп тапҡансы сит булалар йәки табышҡас ситкә әйләнәләр. Һәр хәлдә, мин – кеше. Уйынға ҡатнашмайым. Бүтәндәргә ҡарата мин шулай ҙа изге теләктәмен: юлдағыларға юл булһын, аҙашҡандар ҡауышһындар, эҙләгәндәр табышһындар. Ә кешеләр гел

---

* Ҡыҫҡартып алынды.

юлда, гел эҙләйҙәр. Бәхеттәрен, мөхәббәттәрен, хәсрәттәрен, хатта әжәлдәрен эҙләйҙәр. Барыһынан да былай үҙҙәрен эҙләйҙәр. Йә табалар, йә таба алмайҙар, йә табып юғалталар... Аңлайым, ҡыҙғанам, хатта һыҙланам, әммә ярҙам итә алмайым. Мин – сит кеше.

Ҡапыл сутылдашып ҡош һайрарға тотона, Сит кеше йотолоп тыңлай. Дауам итә.

Кешеләр генә түгел, ҡоштар ҙа бер-береһен эҙләй, саҡыра... Ҡайһылай өҙгөләнә, бисара... Аңлайым, ҡыҙғанам, һыҙланам... Әммә... *(Ҡулдарын йәйә.)*

Алыҫта, тау башында, Айгөл тауышы яңғырай. Ул үҙе күренмәй.

Айгөл тауышы. Кем һин? Мин – Айгөл. Айгөл! Айгөл! Тауҙар, урмандар, ишетәһегеҙме: мин – Айгөл! *(Урман яуап ҡайтара: «Айгөл! Айгөл! Айгөл!!!» )*

Сит кеше. Ана, ишетәһегеҙме, ҡыҙ бала үҙен үҙе эҙләй. Ул тиктәҫкә генә былай өҙгөләнмәй. Уның сабыйлыҡтан сығып барған йөрәге юлға йыйына... Аҡылы оҙата барһа ярар ине...

Айгөл тауышы. Мәңге торор таш ҡаялар! Уҙып ҡына барыусы мамыҡ болоттар! Ишетәһегеҙме – мин яратам!

Сит кеше. Кемде? Кемде яратаһың?

Айгөл тауышы. Белмәйем. Ә, беләм. Ерҙе, күкте, ҡояшты, һыуҙы... Йәнә... Кешене! Егет кешене!

Сит кеше. Кем ул? Ул кем?

Айгөл. Белмәйем. Мин уны бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ әле. Ләкин ул бында – минең күкрәгемдә...

Сит кеше *(залға)*. Кешенең мөхәббәткә бөрөләнгән кескәй йөрәге ана нисек талпына. Уның әле мөхәббәтте һауаларҙан, хыял ғына осоп етерлек бейеклектәрҙән эҙләр сағы. И әҙәм балаһының көндөҙ күрә торған дөм һуҡыр заманы!..

Айгөл. Оялмайынса нимә һөйләйем мин тағы? Әсәйем тыңлап торһа, ни әйтер ине? Был ҡыҙ әллә аҡылдан яҙғанмы, тип аптырар ине. Әсәй, әсәйем! Әсәкәйем! Ун өс йыл саҡырам бит инде мин һине, ниңә яуап ҡайтар-

майһың? Ниңә? Һин миңә бик кәрәкһең, хәҙер бигерәк тә кәрәкһең, әсәкәйем! Миңә бит ун алты йәш! Ун алты! Оһо-һо!!!

Сит кеше. Айгөлдөң әсәһе юҡ. Бәлки, барҙыр ҙа... Өҙөп кенә әйтә алмайым. Ул хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Исеме Зөлхәбирә ине уның. Бына шул Зөлхәбирә 1943 йылда фронтҡа яҡын бер госпиталдә үлем хәлендә ятҡан ирен күрергә тип китте лә юҡ булды. Зөлхәбирә, бәлки, иҫәндер ҙә... Илдә бер сибәр ине. Ҡатын-ҡыҙҙы сибәрлек һаҡлаусан була... Кешеләр тураһында бына ни саҡлы нәмәләр беләм мин. Шуға күрә лә аңлайым, ҡыҙғанам, һыҙланам, әммә ярҙам итә алмайым. Сөнки мин сит кеше.

Алыҫта, тау башында, Айгөл тауышы. Сит кеше юҡ була. Яҡтылыҡ Айгөл баҫып торған бейеклеккә күсә. Йәй урталары. Ҡояшлы көн. Ул баяғыса уҡ өҙгөләнә.

Айгөл. Ниңә яуап ҡайтармайһың, әсәкәйем? Мин һине эҙләп табырға, нисек кенә булһа ла табырға тейешмен... *(Оҙаҡ ҡына түбәнгә ҡарап тора. Кемгәлер ҡул болғай.)* Эй! Арыҫлан йөрәкле Ричард! Ричард Галин! Мин бында!

Ричард Галин инә. Ул, ғәҙәтенсә, ялан сумкаһын аҫып алған.

Ричард. Һин миңә «арыҫлан йөрәк» тимә. Кеше арыҫландан да көслөрәк, хатта батырыраҡ ул.

Айгөл. Оһо! Һин дәме?

Ричард. Кәрәк икән – мин дә.

Айгөл. Һин йыуаш шул, Ричард Галин.

Ричард. Мин йыуаш түгел, мин сабырмын, сыҙамлымын...

Айгөл. Уф! Минең сабырлығым бөттө!

Ричард. Нимә булды һиңә?

Айгөл. Әсәйемде табырға кәрәк. *(Боғаҙын күрһәтә.)* Бына шулай...

Ричард. Һуң, эҙләйек.

Айгөл. Йәғәфәр бабайым ҡайҙарға ғына яҙып бөтөрмәне инде.

Ричард. Ул бит үҙебеҙҙең илдән генә эҙләне. Ә беҙ бөтә донъянан эҙләйек.

Айгөл. Ә нисек?

Ричард. Тотайыҡ та икебеҙ донъяның ике башынан эҙләп китәйек. Әҙәм бит ул, табылыр әле.

Айгөл. Донъяның башы, аҙағы булһа икән...

Ричард. Әйҙә, улайһа, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына яҙайыҡ. Беҙгә фәлән кешене табып бирегеҙ, зинһар өсөн, үтенеп һорайбыҙ, тиәйек.

Айгөл. Ҡайғыһы бар ти уның кешеләә... Кеше уның өсөн сүп кенә...

Ричард. Эйе шул... Минеңсә, ныҡ ҡына уйлашҡанда...

Айгөл *(ҡапыл)*. Туҡта, туҡта... Ҡағыҙ-ҡәләмең бармы?

Ричард *(сумкаһын аҡтара)*. Бар.

Айгөл. Минеңсә, туранан-тура кешелек донъяһының үҙенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Ричард. Ә ҡалай?

Айгөл. Бына шулай: мин әйтеп торам, һин яҙ! «Ер йөҙөндә йәшәүсе бөтә кешеләргә мөрәжәғәт». «Мөрәжәғәт» тигәненең аҫтына ике тапҡыр һыҙ.

Ричард. Һыҙҙым.

Айгөл. Шуның аҫтына уртаға былай тип яҙ: «1955 йыл, июлдең туғыҙы, «Ватан» колхозының умарталығы». Быныһының аҫтына бер генә һыҙ.

Ричард. Һыҙҙым.

Айгөл. «Бөтә ер йөҙөндә көн күреп ятыусы кешеләр! Мин Айгөл Иҙрисова булам. 1943 йылда минең әсәйем хәбәрһеҙ ғәйеп булды. Зөлхәбирә Иҙрисова. Тирә-яҡта бер матур ине, тиҙәр...»

Ричард. Юҡ, быныһы кәрәкмәҫ, йөҙ матурлығы менән маҡтаныу килешмәй ул.

Айгөл. Оҡшамағас, һыҙ, улайһа. Әммә бынан һуң бүлдермә. Ары яҙ: «Хәҙер ул утыҙ биш йәштә. Сөнки мине тапҡанда ни бары ун туғыҙҙа ғына булған. Кешеләр! Һеҙ күршеләрегеҙҙе, күршеләрегеҙ үҙ күршеләрен, ул күршеләр йәнә ары күршеләрен белә. Шуға күрәлер бит инде

яҡшы-яман күп хәбәрҙәр телдән телгә күсеп, ә тигәнсе бөтә Ер шарын урап сыға. Минең үтенесем – яҡшы хәбәр. Уны өйҙән өйгә, ауылдан ауылға, илдән илгә таратығыҙ! «Айгөл әсәһен эҙләй!» – тип оран һалығыҙ. Төнгә ҡаршы берәй бала урманға инеп аҙашһа, беҙҙең барлыҡ ауыл халҡы күтәрелә лә, ҡулға-ҡул тотоноп, бөтә урманды арҡырыға-буйға аралап сыға. Ныҕытып эҙләгәс, табыла теге бала. Был донъя – төнгө ҡара урман, әсәйем аҙашҡан кескәй бала булмаһа ла, уны табырға мөмкин. Мөм-кин! Кешеләр! Һеҙ уны ҡулға-ҡул тотоношоп эҙләгеҙ. Һеҙҙә бит биш миллиард ҡул бар. Биш миллиард!» О-һо-һо! *(Ричардҡа.)* Яҙып өлгөрәһеңме?

Ричард. Өлгөрәм, хатта һине уҙып китәм.

Айгөл. Уҙмай ғына яҙ. *(Дауам итә.)* «Бөтә илдәрҙең радиолары һәм гәзиттәре! Телдәрегеҙ, диндәрегеҙ, төҫтәрегеҙ, сәйәси ҡараштарығыҙ ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, һеҙгә мөрәжәғәт итәм. Һеҙҙә лә бит көлә, илай, ҡайғыра белә торған кешеләр эшләйҙәр. Кешеләр кешеләрҙе аңларға тейеш. Аңлағыҙ минең ҡайғымды! Кешелек донъяһына йүнәлтелгән минең ошо хатымды, гәзиттәр, бер-берегеҙҙән күсереп баҫығыҙ, радиолар, бөтә биш материктың да эфирына таратығыҙ! Мине бәхетле итеүгә йүнәлтелгән был ҙур изге эшегеҙҙә һеҙгә уңыш теләйем».

Ричард. Был мөрәжәғәт буржуйҙарға ла йүнәлтеләме инде?

Айгөл. Йүнәлтелә.

Ричард. Ә бүтәнсәрәк итеп... уларҙан башҡа ғына нитеп... булмаймы?

Айгөл. Булмай шул. Бер Ер шарында йәшәгәс, улар менән дә иҫәпләшергә тура килә.

Ричард. Уныһы шулайын шулай ҙа... Бөттөмө инде?

Айгөл. Юҡ әле. Барыһын да алдан күрергә, алдан хәстәрләргә кәрәк. *(Дауам итә.)* «Бөтә донъяның тимер юл, һыу юлы, һауа юлы компаниялары! Әгәр әсәйемдең ҡайтыр юлға аҡсаһы булмаһа, уны бушлай ултыртығыҙ. Бөтә сығымды һуңынан үҙем түләрмен. Быға тулы гарантия бирәм!» *(Ричардҡа.)* Гарантия биреүен бирәм дә, әгәр көс етмәҫлек ҡыйбатҡа төшһә...

Ричард. Төшә бирһен... Мин балыҡсылар бригадаһында эшләйем, һин – умарталыҡта. Тапҡан-табылған уртаҡ ҡаҙанға йыйылыр. Тырышыбыраҡ эшләһәк, беҙ һинең менән самолёт һатып алырлыҡ аҡса йыя алырбыҙ.

Айгөл. «Тулы гарантия бирәм» тигәндең аҫтына өс тапҡыр һыҙып ҡуй.

Ричард. Һыҙҙым. Ә быны хәҙер ни эшләтәбеҙ?

Айгөл. Нимәне?

Ричард. Кешелек донъяһына яҙған мөрәжәғәтте.

Айгөл. Өйгә ҡайт та, ҡара менән яҙып, дүрт күсермә эшлә. Өсөһөн Өфөгә өс гәзиткә, береһен радиоға ебәрербеҙ. Тырышып яҙ, ҡара тамыҙма. Имзаһын үҙ ҡулым менән ҡуйырмын. Бар, һин төшә башла. Мин саҡ ҡына кешелек донъяһына ҡарап торайым.

Ричард ҡуҙғалып та өлгөрә алмай, ут һүнә. Пролог бөттө.

### Беренсе картина

Йүгереп килгән еренән кәртә аша ғына һикереп, Ричард Галин инә. Ул гипстағы һул ҡулын аҫып алған.

Ричард. Айгөл! Йәғәфәр ағай! Айгөл!

Тауышҡа Ябағаев инә.

Ябағаев. Нимә булды?

Ричард. Юҡ, һеҙ түгел, ағай. Айгөл! Айгөл кәрәк!

Айгөл йүгереп инә.

Айгөл. Ричард Галин?! Ип-иҫән! *(Күңелһеҙ йылмая.)* Иҫәрлегең бөттөмө инде?

Ричард. Бөтмәне.

Айгөл. Ә минең бөттө. Бөттө, шикелле.

Ричард. Бөгөн иртән больницанан һыҙҙым, эйе, тиң.

Айгөл. Эйе.

Ричард. Анау Туҡран юлына сыҡҡас та бер машина ҡыуып етте, эйе, тиң.

Айгөл. Эйе, эйе...

Ричард. Рәхим итегеҙ, тип мине ултыртып алдылар. Юл һораштылар. Ташморонға килеп еткәс, ике ҡатын осраны. Бынау ҡоп-ҡоро көндә туфлиҙарын һалып, ҡулдарына тотҡандар. Ирмәкме? Бер аҙ үткәс, таяҡ таянған йәнә бер әҙәм осраны. Уныһын таныным. Ниңә һуң мин быларҙы һиңә һөйләйем әле?

Айгөл. Һөйләгең килгәнгәлер.

Ричард. Юҡ, уның өсөн түгел. Мин ваҡытты һуҙҙым. Мин бит һине әҙерләп торорға алдан йүгерҙем... Юғиһә йөрәгең ярылыуы ихтимал.

Айгөл *(ҡапыл һиҙенеп)*. Әсәйем ҡайттымы? Әсәйемме?

Ричард *(иңбаштарын йыйыра)*. Әйтмәҫ борон нисек беләһең уны?

Айгөл. Күңелем һиҙә ине. Әсәйем! Ҡайҙа ул минең әсәйем?

Ричард. Ана тегендә. *(Тегеләргә ҡул болғап һыҙғыра.)* Әй-һәй. Бөтәһе лә – во!

Айгөл. Быныһы ла йәнә төш кенәме? Хыял ғынамы?

Ричард. Өн! Өндөң дә өнө!

Айгөл. Әсәкәйем, ҡәҙерлем! Йөрәгем сыға бит инде. *(Башта ҡапҡа яғына йүгерә, шунан кире йүгереп, имән артына ҡаса.)* Әсәкәйем! Һин ниндәйһең икән! Нисек ҡаршыңа барып баҫайым? Ниңә был тиклем ҡалтыранам мин? Ул бит үҙ әсәйем, үҙемдең әсәйем. *(Тағы ҡапҡа яғына йүгерә, кире сигенеп, имән артына йәшеренә.)* Юҡ, көсөм етмәй. Ҡурҡам. Ҡурҡам!

Ябағаев менән Ричард Зөлхәбирә менән Пиккионы ҡаршылайҙар. Пиккио ҙур-ҙур сумаҙандар тотҡан. Ҡапҡанан ингәс, Зөлхәбирә баҫа ла ҡатып ҡала.

Ябағаев. Рәхим итегеҙ, ханым! *(Пиккиоға.)* Рәхим итегеҙ, иптәш...

Пиккио. Яҡшы, яҡшы, иптәш Пиккио, Карло Пиккио. Итальяно, Милано. Һеҙ синьор Йәғәфәр Моратшин?

Ябағаев. Юҡ, түгел. Киреһенсә, Ҡәҙерйән Ябағаев.

Зөлхәбирә. Минең ҡыҙым ҡайҙа? Айгөлөм ҡайҙа?

Айгөл *(имән артынан)*. Мин бында! Бында мин! Имән артында. *(Атылып килеп, әсәһенең ҡосағына ташландым тигәндә, туҡтап ҡала. Күрешергә ҡулдарын һуҙа.)* Исәнме?

Зөлхәбирә. Ҡыҙым, балам, бәләкәсем... Был һинме? Һин! Һин! *(Ике ҡулын алға һуҙа.)* Үҙ һөйәгем, үҙ ҡаным, үҙ йәнем! *(Ҡосаҡланым тигәндә, сайҡалып китә. Пиккио тотоп ҡала. Һушын йыя.)* Был көндәрҙе күрергә лә насип булған икән! Балам – бауыр ярам! *(Үкереп илап ебәрә, ҡосаҡлашалар.)*

Айгөл *(әсәһенең башын, яулыҡтарын һыйпай)*. Һин хас та карточкаҙағы кеүекһең...

Зөлхәбирә. Балам, күҙ нурым... Ниңә миңә әсәйем тип өндәшмәйһең?

Айгөл. Өндәшермен, көнөнә мең тапҡыр өндәшермен. Әлегә, нисектер, әйтеп булмай. Һин юҡ саҡта мин гел генә: «Әсәйем әле ни эшләй икән?» – тип уйлай торғайным. Әсәйем! Әсәкәйем! Һин табылдың! Табылдың! Әйттем бит, донъя ҡара урман түгел, тип... Әйттем бит! Ричард Галин! Кил, минең әсәйем менән күреш!

Ричард. Беҙ күрештек инде.

Айгөл. Тағы күреш. Ул минең дуҫым, әсәй. Теге хатты беҙ уның менән яҙғайныҡ. Йыл тулғанда, хәбәр тәки барып еткән икән. Ҡалай оҙаҡ барған!

Зөлхәбирә. Хат, тиһеңме?

Айгөл. Һиңә атап яҙылмағайны ул. Кешелек донъяһына атап яҙылғайны.

Зөлхәбирә *(аңлап ала)*. Эйе, ҡыҙым, хаттар оҙаҡ йөрөй шул, хаттар бик оҙаҡ йөрөй. Йыш ҡына бөтөнләй барып етмәй... Бәләкәсем! Мин киткәндә, кескәй бармаҡтарыңды тырпайтып, тәҙрә аша мине саҡырып ҡалғайның. *(Ҡыҙының ҡулын усына ала.)* Ошо бармаҡтарыңды тырпайтып... Ун өс йыл буйы шул бармаҡтар мине саҡырып торҙо. Нисек аҡылдан яҙманым икән мин?

Пиккио. Синьора Зөлхәбирә, тынысланырға тырыш.

Зөлхәбирә. Эйе, эйе. Миңә тынысланырға кәрәк. Мин тынысланам... *(Күҙҙәрен һөртә.)* Юғиһә баламдың йөҙөн күрә алмайым, күҙҙәремдә йәштәр ҡаплай.

Айгөл *(ҡапыл һиҫкәнеп).* Бабайым! Бабаҡайым! *(Артҡа йүгерә.)* Һин ҡайҙа? Әсәйем ҡайтты! Урман! Тауҙар! Ишетәһегеҙме – әсәйем ҡайтты-ы! *(Кире йүгереп килә. Ричардҡа.)* Мөрәжәғәтте һин яҙғайның, ҡулың еңел булды. Рәхмәт һиңә, Ричард Галин. *(Ябағаевҡа.)* Һеҙгә лә рәхмәт! *(Пиккиоға килә.)* Һеҙгә лә... *(Әйтеп бөтөрмәй кире китә. Кәртәгә эленгән айыу тиреһен күрә.)*

Артта, тау яғында, Йәғәфәрҙең тауышы ишетелә: «Oho-ho-ho! Мин киләм!» Бер аҙҙан йүгерә-йүгерә үҙе лә килеп сыға.

Йәғәфәр. Зөлхәбирә! Бәләкәсебеҙ! Оя төбө! Иҫән! Бөтөнләй иҫән! Сәп-сәләмәт, бөп-бөтөн! *(Зөлхәбирә эргәһенә етәрәк абынып йығыла.)* Ну, ошо ағасты! Имгәк! *(Ағас аяғын ергә бәрә. Ҡәҙерйән менән Пиккио уға торорға булыша.)*

Зөлхәбирә. Ағайым! Ҡәҙерлем! Берҙән-берем! Бына һине лә күрҙем. *(Яңағын Йәғәфәрҙең яңағына ҡуя.)* Һин һаман да шундай уҡ сәнскелеһең, үҙең йомшаҡһың, йылыһың, шул уҡ ағайымһың.

Йәғәфәр. Үҙем шул. *(Көлә.)* Бына аяҡ ҡына яңы.

Зөлхәбирә. Аяғың да шул.

Йәғәфәр. Хәйер, мин уны фронттан һин киткәнсе үк алып ҡайтҡайным шул. Туҙмай улай... Өҙөлөп ҡалған аяғымды әллә ниҙә бер иҫкә төшөрһәм, һине уйламай ҡалған көнөм, сәғәтем булманы – ун өс йыл буйы... Күңелебеҙҙә һине юғалтманыҡ та, үлтермәнек тә. *(Һеңләһен һөйә. Тауышы ҡалтырай. Йәш быуа.)* Беҙ өмөт өҙмәнек, көттөк, өмөтөбөҙ еңде. Һин юғалмаҫҡа тейеш инең. Юғалманың. Юғалып табылдың...

Пиккио. Берәү юғалды, икәү табылды. *(Үҙенә күрһәтә.)* Мин самалайым, һеҙ синьор Йәғәфәр Моратшиндыр, тип самалайым.

Йәғәфәр *(көлөп).* Синьор түгелен түгел дә, әйе, Йәғәфәр Моратшин.

Пиккио. Мин – Пиккио. Иптәш-товарищ Карло Пиккио, Итальяно, Милано, коммерсант. Рәхим итегеҙ – визит карточкам...

Зөлхәбирә. Карточкаңды ҡуйып тор, Карло. Ағайым! Ҡыҙым! Был – Карло Пиккио, минең ирем. Яҡшы кеше. Беҙҙе нисек ҡабул итеү һеҙҙең ихтыярығыҙҙа. Беҙ Италиянан, Миланонан килдек. Күпкә түгел, бик аҙға ғына килдек...

Айгөл. Нисек инде ул аҙға ғына? Нисек инде ул күпкә түгел? Әсәйем! Нисек инде?

Зөлхәбирә. Быныһы яҙмыш, ҡыҙым, уны үҙгәртеү беҙҙең көстән килмәй.

Йәғәфәр. Ҡуйып тороғоҙ. Бөгөнгә күрешеү шатлығына ҡара шәүлә төшөрмәйек. Йәшәп күрәйек. Хәсрәттең әсе туҫтағынан эсергә ваҡыты еткәс тә өлгөрөрбөҙ. Уныһы ҡасмаҫ, ашыҡмайыҡ. Әйҙәгеҙ, өйгә рәхим итегеҙ. Айгөл, ас ишекте ҡунаҡтарға.

Айгөл йүгереп барып ишек аса. Инәләр. Ябағаев башҡа яҡҡа китә.
Ричард яңғыҙ ҡала.

Ричард. Эштәр шулайыраҡ икән. *(Алмаш-тилмәш сумаҙандарға төртөп күрһәтә, әрнеүле тауыш менән ҡабатлай.)* Итальяно, Милано, коммерсант... Милано, Итальяно... Коммерсант...

Ут һүнә.

## Дүртенсе картина

Элекке картиналағы урын. Аяҙ, матур иртә. Ағастар араһынан әле аҡһыл шыйыҡ томан да китеп бөтмәгән, томан аша үтеп, ҡояш нурҙары япраҡ араһында уйнай. Өй болдоронда Карло Пиккио, ситтәрәк түмәр өҫтөндә Йәғәфәр ултыра. Пиккионың ҡулында – боронғо уҡ-йәйә, тоҫҡап маташа. Йәғәфәр еп ишә.

Пиккио. Беҙҙең Альпта ла тауҙар араһында йәйге иртәләр тап шундай була. Томан, ҡояш... Һуғыш осоронда мин унда тирмән тоттом, Миланоға күсеп килгәнсе.

Йәғәфәр. Кисә әле, партизан булдым, фашистарға ҡаршы һуғыштым, тигәйнегеҙ, бөгөн тирмәнсе булып сыҡтығыҙ.

П и к к и о . Кисә ни ҡыҙмаса баштан, бәлки, шаштырыбыраҡ ебәргәнмендер. Әммә мин дошманға ҡаршы көрәштем. Ҡорал тотоп түгел, ана шул тирмәнем менән көрәштем. Партизандарға он, икмәк, ярма ташыным мин. Бик арзан хаҡҡа... бөтөнләй бушлай тиерлек. Интендант мин! Шулай тип атанылар ҙа мине: Карло Пиккио – интендант. *(Ултырған еренән ҡалҡынып ҡуя.)*

Й ә ғ ә ф ә р . Һуғышта интендант та кәрәк.

П и к к и о . О, синьор! Алғы сафтағыларҙың ике ҡулына бер ҡорал. *(Уғын тоҫҡай.)* Тотто атты, китте барҙы.

Й ә ғ ә ф ә р . Ҡайҙа китте? Теге донъяғамы?

П и к к и о . Ниңә теге донъяға булһын, алға. Ә һин тоҡтарыңды тейәп өлгөр улар артынан.

Й ә ғ ә ф ә р *(ирония менән)*. Ҡыйын инде, синьор, ҡыйын...

П и к к и о . Ҡыйын булды, синьор, әммә беҙ һуҡранманыҡ, бирешмәнек. *(Тағы ҡалҡынып ҡуя.)* Сыҙам булдыҡ. *(Ҡапыл кәртәгә эленгән айыу тиреһен күреп ҡала.)* Айыу тиреһе?! Ҡалай ҙур! Ни хаҡ тора ул?

Й ә ғ ә ф ә р . Оҡшаймы әллә?

П и к к и о . О, синьор, бик оҡшай. Айыу тиреһен мин үлеп яратам.

Й ә ғ ә ф ә р . Оҡшаһа, алығыҙ.

П и к к и о . Былай ғына, бушлай ғынамы?

Й ә ғ ә ф ә р . Мин һеҙгә бүләк итәм уны.

П и к к и о . Һеҙ бына быны ла *(уҡ-йәйәһен күрһәтә)* бүләк иттегеҙ. Миңә оҡшаған өсөн Айгөл үҙе ҡайыған һөлгөнө бүләк итте... Уңайһыҙыраҡ та...

Й ә ғ ә ф ә р . Кире уйламаҫ борон алып ҡалығыҙ, оҡшай, тинегеҙ бит.

П и к к и о . Юҡ, юҡ, кире уйламағыҙ! Әйткән һүҙ – атҡан уҡ. *(Бушлай ғына йәйәһен тарта.)* Алам. Рәхмәт һеҙгә. Тирене минеке тип иҫәпләнек.

Й ә ғ ә ф ә р . Мин атты барып тышаулап ҡайтайым. Себенләп, алыҫ китеүе бар.

П и к к и о . Минең ярҙам кәрәкмәйме? Кәрәкһә, мин шатланып...

Й ә ғ ә ф ә р . Кәрәкмәй, рәхмәт. *(Китә.)*

Пиккио айыу тиреһен алып, ябынып ҡарай. Бөтөнләй күмелеп ҡала.

Пиккио. Юҡ, килештереп булмаç, буйым бәләкәй. Минән айыу сыҡмаясаҡ, бәләкәсерәк бүре сыҡһа сығыр. Мин был тирене иҙәнгә йәйеп, өçтөнә баçып йөрөйәсәкмен. Айыу тиреһенә баçып йөрөү өсөн үҙеңә айыу үлтереү шарт түгел бит әле... Бында бер ҡатлы, яҡшы күңелле, йомарт кешеләр йәшәй. Миңә мөмкин хәтле нәфсемде тыйырға тырышырға кәрәк. Юҡһа, оҡшаған нәмә күп булыр Пиккиоға. *(Тирене кире элеп ҡуя.)*

Ричард инә. Ҡулында ҙур ғына биҙрә.

Пиккио. О, йәш синьор! Кисәге юлдаш. Сәләм, сәләм!

Ричард. Үҙегеҙгә лә, синьор әфәнде.

Пиккио. Әфәнде түгел, иптәш синьор. Әйҙә, һеҙҙең менән яҡыныраҡ танышып алайыҡ.

Ричард. Мин һеҙҙе беләм: Итальяно, Милано, коммерсант синьор Карло Пиккио.

Пиккио. Дөрөç. Дөп-дөрөç. Бына һеҙгә визит карточкам. Миланоға килһәгеҙ *(бирә),* рәхим итегеҙ – туп-тура үҙемә. Ә һеҙ?

Ричард. Мин – Ричард Галин.

Пиккио. Ричард? Тимәк, һеҙ инглиз – Шотландия, Ирландия, Лондон? Ричард король: беренсе, икенсе, өсөнсө...

Ричард. Башҡортостанский, Уральский, Күсәрбайский. Король түгел, балыҡсы.

Пиккио. Балыҡсы? Был да бик яҡшы. Бөтә Ричардтар ҙа король булырға тимәгән.

Ричард. Синьор әфәнде.

Пиккио *(төҙәтә).* Синьор иптәш.

Ричард. Синьор иптәш, һеҙ миңә визит карточкағыҙҙы бирҙегеҙ. Ә минең үҙ янымда ундай карточкам юҡ, әгәр бындай фотокарточкамды ғына бирһәм, ғәйеп итмәçһегеҙме?

Пиккио. О, синьор! Рәхим итеп бирһәгеҙ, рәхмәт әйтеп ҡабул итермен. Сувенир, иçтәлек! Башҡортостанский, Күсәрбайский!

Ричард *(үҙ алдына)*. Беҙ кемдән кәм ул саҡлы?.. Бер генә минут сабыр итегеҙ. *(Түш кеҫәһенән ҡәләм алып яҙа.)* Бына адресымды ла яҙҙым.

Пиккио. Һеҙҙең менән шулай яҡын танышыуыма шатмын, синьор, дуҫтар булырбыҙ. *(Ричардтың ҡулындағы балыҡты күреп ҡала.)* Тере балыҡ! Исеме нисек?

Ричард. Табан.

Пиккио. Табан? Кем табаны? Нимә табаны?

Ричард. Күл табаны. Мүклекүлдеке.

Пиккио. Ни хаҡ тора?

Ричард. Нимә ни хаҡ?

Пиккио. Ошо балыҡ. Ошо биҙрәләге балыҡ.

Ричард. Һеҙгә оҡшаймы әллә?

Пиккио. Оҡшай... Юҡ, оҡшамай, оҡшамай... оҡшауын оҡшай ҙа. Ни хаҡ?

Ричард. Оҡшаһа, алығыҙ, мин һеҙҙе һыйлайым.

Пиккио. Юҡ, юҡ, һыйламағыҙ! Мин үҙ нәфсемә баш була алам. Миңә оҡшаған нәмә күп булыр, улай нәфсеңә сик ҡуймаһаң...

Ричард. Мин һеҙҙе яҡын танышыу хөрмәтенә һыйларға теләйем.

Пиккио. Яҡын танышыу шәрәфенә генә тимәһәм шул... Тик быныһы һуңғыһы булыр. Бүләк, күстәнәс алыуҙан ары яғына нәфсемде тыясаҡмын. Быныһы өсөн рәхмәт, синьор Ричард Гал... Галин! Синьора Зөлхәбирә! Синьора, бына алтын балыҡ тоттом! *(Бер ҡулына биҙрә, икенсеһенә йәйәһен тотоп, һикергеләп, өйгә инеп китә.)*

Ричард. Һынар өсөн генә әйткәйнем, тап өҫтөнә баҫтым. *(Гипстағы ҡулын ҡосаҡлап, түмәргә барып ултыра, ул уйға бата.)* Яҡын дуҫ булырбыҙ, тиме... Ҡаршыһына баҫып, тиң итеп һөйләшеп, әллә был буржуй алдында ваҡланыбыраҡ ташланылды инде? Самаһыҙ сиселеп тә киттем, буғай. Өҫтәүенә, артына адрестар яҙып, фотокарточка бирҙем. Уяулыҡ, уяулыҡ ҡайҙа булды? Итальяно, Милано тигәс тә, иҫ китте... Яйын табып, карточканы кире алырға кәрәк. Уның эсендә нимә барын ҡайҙан беләһең? Ҡайтыр ҙа Миланоһына, Советҡа ҡаршы яла яғып, гәзиттә мәҡәлә сығарыр. Етмәһә, аҫтына сабата-

лай итеп минең һүрәтте баҫтырып ҡуйыр. Йәнә: «Гәзиттә яҙылғандарҙың бөтәһе лә ошо кеше ауыҙынан сыҡҡан һүҙ», – тип өҫтәп тә ҡуйһа?.. Их һин, Башҡортостанский, Уральский, Күсәрбайский Ричард Галин – асыҡ ауыҙ, йомоҡ күҙ! Бөгөн үк, хәҙер үк карточканы кире алырға кәрәк. Карточкаһыҙ ул бер нәмә лә эшләй алмай, ҡулынан килмәй уның... *(Өйгә инеп китә.)*

Зәлифә, Банат, Гөлсирә, Миңлекәй инә. Байрамса милли кейемдәләр. Быны улар алдан кәңәшләшеп эшләгән булырға тейеш.

Зәлифә. Буржуй күрәбеҙ тип, әллә түбәнһенәбеҙ инде, әхирәттәр?

Миңлекәй. Ғүмергә күрмәгән буржуй бынауында эргәңә килеп сыҡһын да, шуға ҡарап та ҡалма, имеш. Уның ни ғәйебе бар?

Банат. Күрәйек әле, беҙҙең ирҙәребеҙ кемгә ҡаршы һуғышып ғәзиз баштарын һалды икән.

Гөлсирә *(илай яҙып)*. Иҫкә төшөрмә инде, Банат...

Зәлифә. Ярай. Ултырышайыҡ, килгәс, күрмәй китмәбеҙ. *(Ултырышалар, байтаҡ һүҙһеҙ торалар.)*

Миңлекәй. Буржуйҙар бисәләренә «йәнем-бәғерем» тип әйтәме икән?

Гөлсирә. Уйлар уй, һөйләр һүҙ тапты тағы бынау Миңлекәй.

Банат. Был господаларҙың сыҡҡанын шулай көтөп ултырырбыҙмы һаман?

Миңлекәй. Әйҙәгеҙ, шарҡылдап көләбеҙ. Ишетерҙәр ҙә сығырҙар.

Гөлсирә. Кисә Хәлимә ҡарсыҡ машинала уҙып барғандарын күреп ҡалған. Буржуйының мыйығы сысҡан ҡойроғо кеүек неп-нескә генә, ти.

Миңлекәй. Бынау Гөлсирә үҙе гонаһһыҙ йән булып ҡылана, үҙе туп-тура мыйыҡҡа барып йәбеште.

Банат. Миңлекәй, тим, етер һиңә!

Миңлекәй. Бөттө, бөттө, Банатҡайым.

Зәлифә. Үҙем ултырам, үҙемдең йөрәгем леп-леп тибә. Зөлхәбирә тураһында уйлайым.

Гөлсирә. Мин дә...

Банат. Сер бирмәҫкә! Һүҙ бер булһын!

Пиккио менән Ричард өйҙән сыға, Ричард үҙ фотоһын кире түш кеҫәһенә һала.

Пиккио. Тимәк, джентльмен һүҙе – һин миңә бүтән карточкаңды бирәһең...

Ричард *(ситкә, һуҙып)*. Ҡарт инәңә сәләм әйт!

Пиккио *(ҡатындарҙы күреп ала)*. О, синьоралар! *(Ҡарап тора.)* Ниндәй ҡупшы кейемдәр! Ниндәй биҙәктәр! Һаумыһығыҙ!

Ричард. Улар синьоралар түгел, беҙҙең ауыл ҡатындары...

Пиккио. Таныш булайыҡ – Карло Пиккио. Бына рәхим итегеҙ – визит карточкам. Быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә, быныһы һеҙгә. Италияға – Миланоға килһәгеҙ, туп-тура үҙебеҙгә рәхим итегеҙ. Хуш килдегеҙ!

Ҡатындар, аптырашып, бер-береһенә ҡараша.

Миңлекәй. Карточка, ти, һүрәте алдында ла, артында ла юҡ. Бына бер мәрәкә.

Гөлсирә. Яҙыуы латинса инде әллә?

Пиккио. Латино, эйе, латино.

Банат *(күңеле ҡайтып)*. Фу! Ошо ла булдымы буржуй. Сиңерткә шикелле һикергеләп тора. Ваҡыт уҙҙырып, итек туҙҙырып килеп йөрөүебеҙ.

Ричард. Шул үҙе инде.

Миңлекәй. Булмаҫ, гәзиттә сыҡҡан һүрәттәргә яҡын да килмәгән.

Зәлифә. Һуғыштан һуң, бәлки, улар ҙа шулай арыҡланып ҡалғандарҙыр.

Ричард. Буржуйҙың төрлөһө була... Ҡарама үҙенә, ҡара күҙенә.

Гөлсирә. Бынау яҙыуҙы нимә эшләтергә икән?

Ричард. Был уның адресы. Италияға барһағыҙ, эҙләп табырға... Хат яҙырға ла була...

Миңлекәй. Ысынлап та, барып сыҡһаң, күҙе шар булыр ине, әйкәйем.

Банат *(Пиккио эргәһенә килә)*. Мин тиҙ арала ғына Италияға бармаҫҡа булдым. Мәгеҙ адресығыҙҙы. *(Бирә.)*

Зәлифә. Мин дә... *(Бирә.)*

Гөлсирә. Мин дә... *(Бирә.)*

Миңлекәй. Барһам, яҙыуһыҙ ҙа эҙләп табырмын. Телгә харап үткермен мин. *(Бирә.)*

Пиккио. Нимәлер аңлашылманы, ахыры, синьоралар. Ғәфү итегеҙ. Мин ихлас күңелдән.

Банат. Бөтәһе лә аңлашылып тора. Беҙ ҙә ихлас күңелдән.

Ричард һиҙҙермәй генә тау яғына китә, моғайын, ул Зөлхәбирә артынан баралыр.

Миңлекәй. Өҙөп кенә әйтегеҙ әле: һеҙ, ысынлап та, буржуймы?

Пиккио. Ҡайһылайыраҡ итеп әйтергә һуң? Нисегерәк әйтһәм, дөрөҫ булыр икән?

Банат. Туп-тура итеп.

Пиккио. Бер яҡтан ҡарағанда, буржуй, бәләкәс буржуй, господин буржуй түгел, иптәш-товарищ буржуй, икенсе яҡтан – партизан...

Банат. Иптәш-тауариш бүре тәүҙә кемде ашарға икәнде үҙе белер әле, тип әйтте, ти...

Пиккио. Нимә ти ул?

Зәлифә. Бүре тураһында әкиәт һөйләй ул.

Пиккио. Эйе, эйе, мин дә беләм ул әкиәтте. Ҡыҙыл башлыҡлы ҡыҙҙы бүре ашаған...

Гөлсирә. Күп ашаны, ай, күп ашаны. Балаларҙы ла, ололарҙы ла...

Пиккио. Әкиәт ары, мин бире, ти, синьоралар. Моғайын, һеҙ синьора Зөлхәбирә килмәгәнгә асыуланғанһығыҙҙыр. Улар Айгөл менән тауға киткәндәр икән, хәҙер килерҙәр. Әлегә мин ҡабул итәм һеҙҙе.

Банат. Бөтөнләй баш булып алған был.

Пиккио. Баш, баш... Мин һеҙҙең мәҡәлде беләм, ир – баш, ҡатын – муйын. *(Башын борғолай.)*

Банат. Ай-һай, йор.

Зәлифә. Йор булмаһа, бөгөнгө көндә ошонда йөрөп тә ятмаç ине.

Пиккио. Һеҙ бөтәгеҙ ҙә синьора Зөлхәбирәнең дуçтарылыр, моғайын. Йөҙөгөҙҙө танымаһам да, исемдәрегеҙҙе беләм мин. Һанап сығайыммы?

Миңлекәй. Һанап ҡарағыҙ әле.

Пиккио. Иң яҡын дуçы-әхәриәте – Зәлифә, Зәлифә – бер.

Зәлифә башын ситкә бора. Исемдәре сыҡҡас, башҡалар ҙа шулай итә.

Миңлекәй. Әхәриәт түгел, әхирәт.

Пиккио. Эйе... Әхирәт. Ары һанайым. Банат – ике. *(Бармағын бөкләй.)* Банат – әллә ниндәй ҡанат та тигәйне әле...

Миңлекәй. Талмаç ҡанат. Уңған ул, күп эшләй. *(Ҡулы менән эшләп күрһәтә.)*

Пиккио. Ҡанат – ике, Сәлимә – өс, Фәниә – дүрт, Фәниә – дүрт...

Миңлекәй. Миңлекәй...

Пиккио. Миңлекәй – биш, Миңлекәй – биш... Гөлсирә – алты... Йыйыныһы һигеҙме, туғыҙмы инде.

Миңлекәй. Ҡара әле, тәтәкәйем, харап бит был бәндә.

Банат. Бисәһе һөйләгәндер.

Зәлифә. Һөйләһә лә инде...

Гөлсирә. Һағынып һөйләгәндер, күрәһең, бахыр. Әҙәм балаһы бит.

Банат. Ебеләçкә!

Пиккио. Синьора Зөлхәбирә һеҙҙе шатландырасаҡ әле. Ул бөтәгеҙгә лә бүләктәр алып ҡайтты. Аçыл, затлы бүләктәр... Матур кофталар, тек-тек баçып йөрөй торған туфлиҙар. О, тағы әллә нәмәләр!

Банат. Бисәләр! Оҙаҡ ҡунаҡ булдыҡ, әҙәп белергә кәрәк.

Зәлифә. Эйе, күрәһе әҙәмде күрҙек, ҡуҙғалайыҡ.

Бик ашыҡмай ғына ҡуҙғалышалар.

Пиккио. Синьоралар! Саҡ ҡына күтәрегеҙ, тағы саҡ ҡына...

Миңлекәй. Күтә-күтә күтәк булдыҡ, унан өтәк булдыҡ.

Пиккио. Тағы аҙ ғына өтәк булығыҙ. Бик аҙ ғына.

Гөлсирә. Зөлхәбирә ҡайтып етә алманы, үкенер инде...

Банат. Хушығыҙ, иптәш-тауариш!

Пиккио. Һеҙ китһәгеҙ, синьора Зөлхәбирә миңә асыуланасаҡ, ой асыуланасаҡ. Пиккионың баш бөттө!

Миңлекәй. Баш бөтһә, муйын ҡалыр...

Тау яғынан Зөлхәбирә менән Айгөл йүгереп килә. Пиккио уларҙы күреп ҡала.

Пиккио. Муйын, муйын... *(Шатланып.)* Ана муйын ҡайтып килә. Ике муйын!

Ҡатындар боролоп ҡарайҙар. Ашыҡмай ғына кире урындарына ултыралар.

Зөлхәбирә *(алыҫтан уҡ)*. Дуҫтарым, әхирәттәрем! Бына рәхмәт һеҙгә! Үҙем барайым тип тора инем. Уф! Һағындым! Бөтәгеҙҙе лә үлеп һағындым. *(Ҡосаҡ йәйеп килә.)* Ҡайһығыҙҙан башлайым икән? Зәлифәкәйем, әхирәткәйем, ҡайҙа үҙеңдән башлайым. *(Зәлифәгә ынтыла. Зәлифә, башын эйеп, өнһөҙ ултыра.)* Нимә булды һиңә, Зәлифә? Ниңә башыңды күтәрмәйһең? Был мин бит – әхирәтең Зөлхәбирә.

Зәлифә. Мин һине танымайым...

Зөлхәбирә. Нисек инде ул танымайһың? Нисек инде? Оноттоңмо ни? Мин һеҙҙең берегеҙҙе лә онотманым.

Зәлифә. Мин танымайым.

Зөлхәбирә. Ә һин, Миңлекәй? Һин танийһыңмы һуң?

Миңлекәй. Мин Миңлекәйен Миңлекәй ҙә...

Зөлхәбирә. Мин Зөлхәбирә.

Миңлекәй. Таныш түгел.

Зөлхәбирә. Гөлсирә, Гөлсирәкәй! Һин таны, исмаһам!

Гөлсирә *(илап)*. Әллә инде... Таныйым да кеүек, танымайым да кеүек....

Банат. Күп илауҙан уның күҙҙәре зәғифләнде. Кеше айырмай ул хәҙер.

Зөлхәбирә. Банат! Арала иң уҫалыбыҙ Банат – һин һуң ни әйтерһең?

Банат. Әйтмәм. Танымайым мин һине.

Зөлхәбирә *(бөтөнләй ҡойолоп төшә)*. Һеҙ мине шаяртаһығыҙ, әлбиттә, шаяртаһығыҙ. Һаман да уйынсаҡ икәнһегеҙ әле, шайтан ҡыҙҙар! Йәгеҙ, етер, етер, әхирәткәйҙәрем. Түҙер хәлдәрем ҡалманы. Үҙегеҙҙең дә, минең дә сыҙамлыҡты башҡаса һынамағыҙ. Шартлап өҙөлөүе бар.

Банат. Беҙҙеке өҙөлөүҙән үткән инде.

Зөлхәбирә. Дуҫтарым, ҡәҙерлеләрем, нимә эшләүегеҙ был? Ниндәй фажиғә, ниндәй ҡот осҡос сихыр был?

Айгөл, йәшен һуҡҡан кеүек, шаҡ ҡатып тора.

Пиккио. Синьоралар, әхирәттәр! Бөтә көсөгөҙҙө йыйып, иҫегеҙгә төшөрөргә тырышып ҡарағыҙ, синьоралар! Зинһар өсөн!

Зөлхәбирә. Бар, Карло дуҫым, беҙҙе ҡалдырып тор. Үҙебеҙ генә, бәлки, тиҙерәк аңлашырбыҙ.

Пиккио. Ярай, ярай, мин китәм. *(Аяҡ осона баҫып сығып китә.)*

Зөлхәбирә. Зәлифә, Банат, Миңлекәй, Гөлсирә! Ни булды һеҙгә?

Миңлекәй. Беҙгә бер ни ҙә булманы.

Гөлсирә *(илап)*. Артыҡ бер ни ҙә...

Банат. Беҙҙең хәтеребеҙ юғалды. Дөртебеҙҙең дә бер юлы.

Зөлхәбирә. Улайһа, бөтәһен дә берәм-берәм хәтергә төшөрәйек. Зәлифә, беҙ бит һинең менән күрше өйҙәрҙә үҫтек. Иҫтәлеккә тәтәйҙәр бирешеп, һигеҙ йәштән әхирәт булыштыҡ. Мәңге ташлашмаҫҡа ант итеп, әпәкәй-ҡояш, тиештек... Һинең сәсең бөҙрә ине, тарай алмай интегеп бөтә торғайның... Хәтерләйһеңме инде?

Зәлифә. Юҡ, юҡ! *(Әрнеп.)* Хәтерләмәйем!

Зөлхәбирә. Иҫеңдәме, Банат. Һинең менән икәү Йәркәй ауылына барғайныҡ. Ауыл осонда бер малай беҙҙе таяҡ менән ҡурҡытмаҡсы итте, һин уны ҡыуып тоттоң да аҡыртып туҡмап киттең. Яман көслө инең... Үҫеп еткәс, һин уның ҡатыны булдың.

Банат. Малай иҫемдә. *(Баш сайҡай.)* Һин – юҡ.

Зөлхәбирә. Миңлекәй, һин бик йәшләй үк егеттәрҙең баштарын әйләндерә торғайның. *(Көлә.)* Шулай бит, Миңлекәй! Һинең менән беҙ – ике ахмаҡ – Фазылйән арҡаһында аҙна буйы спор булып йөрөнөк. Һин ерле юҡ-ҡа көнләштең дә киттең... Аҙаҡтан рәхәтләнеп бер көлдөк, исмаһам. Эйе бит, Миңлекәй! Һеҙҙең баҡсала, ҡарама төбөндә. Ул ҡарама әле лә иҫәндер, моғайын...

Миңлекәй. Үткән ҡыш утынға киҫеп яҡтым. Торған көйө ҡороно.

Зөлхәбирә. Хәтерләнеңме инде?

Миңлекәй. Юҡ.

Зөлхәбирә. Мүклекүлдә томбойоҡ өҙөп йөрөгәндә, кем кәмәнән йығылып төшкәйне? Һин түгелме, Гөлсирә?

Гөлсирә. Мин.

Зөлхәбирә. Баттың тигәндә, кем тартып сығарҙы һине? Хәтерләйһеңме шуны?

Банат *(һикереп тора)*. Етер! Һин дә туҡта! Беҙҙең сыҙамлыҡты һынама, уның да сиге бар. Беҙ ҙә таштан яралмаған! Беҙҙә лә йөрәк, беҙҙә лә йән бар!

Зөлхәбирә. Тимәк, таныйһығыҙ?

Банат. Юҡ, барыбер таный алмайбыҙ һине.

Айгөл *(уртаға атылып сыға)*. Банат апай! Был минең әсәйем бит! Һин таныйһың бит уны, таныйһың! Үҙең бит осраған һайын, мине туҡтатып: «Бигерәк әсәһенә оҡшаған, бигерәк сибәр», – тип арҡамдан һөйә инең. Мин әсәйемә оҡшағас, нисек уны танымаҫҡа мөмкин? Мөмкин түгел! Ниңә бушты һөйләйһең, Банат апай? Миңлекәй апай, Зәлифә әхирәт апай, Гөлсирә апай! Миңә һеҙ бөтәгеҙ ҙә бәләкәс сағымдан уҡ: «Әсәйең илдә бер ҡыҙ ине, әсәйең кеүек аҡыллы бул, әсәйең кеүек игелекле бул!» – тип тылҡынығыҙ. Эйе, гел шулай тинегеҙ. Зәлифә апай! Әсәйең кеүек күрәм, тип анау көндө кем мине

ҡосаҡлап иланы? Һин иланың бит, Зәлифә апай! Әлек әйткән һүҙегеҙҙе хәҙер танаһығыҙмы ни? Әйтегеҙ, танабыҙ, тиегеҙ, тиегеҙ. Әйтегеҙ!

Ҡатындар, ҡаушап-аптырап, һүҙһеҙ ҡалалар. Оҙаҡ пауза.

Зәлифә *(аҡрын ғына Зөлхәбирә ҡаршыһына килеп баҫа)*. Теге Зөлхәбирәнең мин әхирәтемен. Шуның өсөн иң тура һүҙҙе мин әйтергә тейешмен.

Зөлхәбирә. Мин шул уҡ Зөлхәбирә. Шул уҡ! Тик ғазаптарым ғына күберәк.

Зәлифә. Теге Зөлхәбирә үҙебеҙҙеке ине. Ә быныһын күҙебеҙ таный, күңелебеҙ танымай. Беҙ донъя күргән халыҡ түгел, ябай халыҡ. Донъяны беҙ ҡап уртаға: аҡҡа – ҡараға, дуҫҡа – дошманға, яҡшыға – яманға, йәшәүгә – үлемгә бүләбеҙ. Беҙ дүртебеҙ ҙә етем, тол бисә. Ирҙәребеҙ, дошманға ҡаршы һуғышып, тупраҡҡа һеңделәр, һинең беренсе ирең, үҙ ирең кеүек үк... Дошман кем ине һуң? Ул синфи дошман ине, Зөлхәбирә. Беҙҙеңсә, ябай ғына әйткәндә, буржуйҙар, капиталистар ине. Һин шуларҙың береһенә кейәүгә сыҡҡанһың. Уныһы, әлбиттә, һинең эш. Ә бына уны эйәртеп ҡайтыуың инде беҙгә лә ҡағыла. Намыҫыбыҙға тейә, бынан алыҫ яҡтарҙың тупрағында ятҡан мәрхүмдәрҙең иҫтәлеген мыҫҡыл итә. Һинең был ҡылығыңды йөрәк шулай ҡабул ҡылды. Беҙ, ябай ауыл бисәләре, бәлки, бөтәһен дә аңлап еткермәйбеҙҙер. Донъяла беҙҙең өсөн дуҫ бар, дошман бар, Ватан бар, сит донъя бар, бөгөнгө көн бар, иҫтәлектәр бар. Уйлап ҡараһаң, ҡайһы бер йәһәттән беҙ ыҙандың төрлө яғында булып сығабыҙ. Уйлағанымды әйтәйем. «Ғәфү ит!» – тиер инем, урынһыҙ булыр. Һин үҙең беҙҙән ғәфү үтенергә тейешһең, итә алһаҡ... Шулай, Зөлхәбирә, күҙебеҙ таныны, күңелебеҙ танымаңы.

Банат. Йәгеҙ, бисәләр, һүҙ быҙау имеҙә, ти... Беҙ бит донъя буйлап сәйәхәт сыҡҡан кешеләр түгел *(тора)* – эш көтә.

Миңлекәй. Беҙҙе хәҙер бары шул эш кенә көтә лә инде.

Бөтәһе лә ашыҡмай ғына урындарынан тора.

Зөлхәбирә *(ярһып)*. Китмәгеҙ! Хөкөм һүҙегеҙҙе әйтеп бөтөрөгөҙ! Һеҙ мине күргән яфаларым, кисергән ғазаптарым, һулҡылдап әрнеп торған яраларым өсөн, аҙаҡ килеп, йөҙ үлемдән ҡотолоп иҫән ҡалғаным өсөн хөкөм итәһегеҙ бит! Аңлайһығыҙмы шуны? Бына быныһы *(күлдәк еңен өҙөп ырғыта)* фашистың беренсе мөһөрө. Утлы тимер менән баҫылған.

Зәлифә *(әсе тауыш менән)*. А-бау!

Гөлсирә *(илап)*. Илаһым!

Зөлхәбирә. Ә уға тиклем, унан һуң булғандары! Теләһәгеҙ, теләмәһәгеҙ ҙә, тыңлаһағыҙ, тыңламаһағыҙ ҙа, һөйләйем. Хөкөм аҫтындағы кеше үҙенең һуңғы һүҙен әйтеп бөтөрөргә тейеш. Закон быны рөхсәт итә.

Гөлсирә. Закон тип ни инде...

Зөлхәбирә. Мин Сабирҙың бары ҡәбере менән генә осраштым. Төн буйы уның баш осонда ултырҙым. Төн буйы тирә-яғымда туптар шартланы, пулялар һыҙғырҙы, танкылар үкерҙе. Ҡояш сығып килгәндә, берәү ҡаршыма баҫып, миңә автомат тоҫҡаны. Был фашист ине. Шунан алып ҡоллоҡ башланды. Мал ташый торған вагонға йөҙләгән ҡатынды тыңҡыслап тултырҙылар ҙа алып киттеләр. Эҫенән, аслыҡтан, һыуһауҙан яфаланып, бик оҙаҡ барҙыҡ. Сирлеләр баҫҡан көйө үлделәр, ятып үлерлек тә урын юҡ ине.

Зәлифә. Бисаралар...

Зөлхәбирә. Беҙҙе тау араһындағы бер заводҡа алып барып тыҡтылар. Тәүлегенә ун алты сәғәт эш. Һигеҙ сәғәт – илау-һыҡтау. Ҡайҙа икәнебеҙҙе беребеҙ ҙә белмәйбеҙ. Шулай ҙа мин бер көн, яйын табып, ҡастым. Тиҙ тоттолар. Ҡанға батырғансы туҡманылар, мөһөр баҫтылар. Өс айҙан һуң бер иптәшем менән йәнә ҡастыҡ. Ике көндән һуң эт менән эҙләп тоттолар, һуштан яҙҙырғансы туҡманылар. *(Күкрәген аса.)* Ҡыҙған тимер менән сажлатып бынау икенсе мөһөрҙө һуҡтылар.

Гөлсирә. А-а! *(Ҡулы менән күҙен ҡаплай.)*

Банат. Йыртҡыстар!

Миңлекәй. Ҡан эскестәр!

Зәлифә. Ошондай фәрештә кеүек ҡатынға нисек ҡулдары күтәрелгән?

Гөлсирә. Дошман тигән бәндәләреңә күрһәтмәһен.

Зөлхәбирә. Йәй башы ине. Тағы ҡастыҡ. Өсәү инек. Артыбыҙҙан әллә ҡыуа сыҡманылар, әллә сығып та, эҙебеҙгә төшә алманылар. Был юлы беҙ үҙебеҙҙең ни тирәләрәк икәнебеҙҙе аҙыраҡ самалай инек. Ҡайҙалыр көньяҡта Италия булырға тейеш. Тау араларынан юлһыҙ-ниһеҙ егерме көн барҙыҡ. Йонсоп, ҡоро һөйәккә ҡалдыҡ. Тәүҙә Иванканы... ташҡын алып китте. Шунан Ростислава... Ул, яҙа баҫып, упҡынға осто.

Миңлекәй. Бисараҡайҙар...

Гөлсирә. Ниҙәр генә күрһәтмәне был һуғыш әҙәмдәргә...

Зөлхәбирә. Яңғыҙ ҡалғас, ашамай-эсмәй күпме йөрөгәнмендер, белмәйем. Бөтәһе лә һаташыу кеүек кенә булды. Тирмәнсе йортонда һушыма килдем. Тирмәнсе мине бер йылға ярында табып алып ҡайтҡан икән.

Миңлекәй. Ул да фашист булып сыҡтымы?

Зөлхәбирә. Юҡ, түгел. Һәйбәт кеше. Һеҙ уны күрҙегеҙ. Йылдар үткәс, ул ҡыҙым Зәлифә менән улым Джузеппеның атаһы булды. Минең тегендә тағы ике балам бар!

Көсөргәнеш кәмей. Байтаҡ һүҙһеҙ торалар.

Банат. Шулай икән...

Миңлекәй. Тимәк, теге әкиәттәге кеүегерәк булып сыҡты инде. Йомғағы артынан илап йүгергән үгәй ҡыҙ урап ҡайтҡанда, эт былай тип өрҙө, ти, бит: «Үлергә киткән апайым байып ҡайтып килә-ләү!» Ҡыҙыл әрмис ҡатыны булып ҡына киткәйнең, буржуй ҡатыны булып ҡайтып төштөң...

Зөлхәбирә. Шулайыраҡ булды шул. Һуғыштан һуң Карло ҡапыл байып китте... Бына бөтәһен дә һөйләп бирҙем, хөкөмөгөҙҙө сығарып бөтөрөгөҙ.

Зәлифә *(Зөлхәбирә алдына килә, уның асыҡ күкрәген яба)*. Ғазаптарың, яфаларың, яраларың *(тауышы ҡал-*

*тырай)* ҡот осҡос, күргән, кисергән яҙмышың фажиғәле, Зөлхәбирә. Һин һөйләгәндә генә лә тәндәр сымырлап торҙо. Ләкин улар тыуған ерҙе сит ергә, үҙ кешеләреңде яттарға алмаштырырға хоҡуҡ бирәме икән? Быныһын мин белмәйем.

Миңлекәй. Мин дә белмәйем.

Банат. Эйе, беҙ белмәйбеҙ.

Гөлсирә. Ә мин беләм: беҙ ҡаты бәғерле ҡатындарбыҙ, беҙ рәхимһеҙ ҡатындарбыҙ. *(Илай.)*

Банат. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Беҙ ҙә тыумыштан ундай түгел инек. Хәсрәт ҡатыш нәфрәт бауырҙарыбыҙҙа таш булып йомарланды. Дүртебеҙҙең дә ире, һалҡын тупраҡты ҡосаҡлап, ерҙең дүрт тарафында ята. Уларҙы көнбайыштан килгән заттар үлтерҙе. *(Йоҙроғон болғай.)* Көнбайыштан килгәндәр! Шул уҡ көнбайыштан ағайың ағас аяғын һөйрәп ҡайтты. Ә һин нисек ҡайттың? Ниңә ҡайттың һин?... *(Үҙе саҡ иламай.)* Беҙгә лә ауыр, үҙеңә лә бик ауыр. Бер-беребеҙҙе барыбер йыуата алмайбыҙ. Тыныс ҡына хушлашайыҡ.

Зөлхәбирә. Бына ошолаймы, бөтөнләйгә сит кешеләр булыпмы?

Зәлифә. Башҡаса мөмкин түгел, күрәһең...

Зөлхәбирә. Һеҙгә атап алып ҡайтҡан бүләктәрем бар ине. Булмаһа, шуларҙы алыр инегеҙ. Мин хәҙер сығарам.

Зәлифә. Бүләгеңде лә ҡабул итә алмайбыҙ. Быныһы өсөн ғәфү үтенәбеҙ... Әммә ҡабул итә алмайбыҙ. *(Илап ебәрмәҫ өсөн иренен ҡымтый.)*

Дүртеһе лә баштарын эйеп сығып китә. Гөлсирә өнһөҙ илай, Зәлифә яулыҡ осо менән йөҙөн ҡаплай.

Зөлхәбирә *(ҡарап ҡала)*. Мәйет менән хушлашып киткән кеүек киттеләр...

Айгөл. Улар былдай уҫал түгел ине, әсәйем. Улар бик һәйбәт инеләр.

Зөлхәбирә *(имәнде ҡосаҡлай)*. Тыуған тупрағым! Һиңә тағы ла әсе күҙ йәштәремде түгермен, тип уйлап ҡайтҡайныммы ни мин? Тыуған тупрағым! Минең зарымды ишетәһеңме һин? Аҙашып йөрөгән етем ҡошсоғоң

үҙ ояһына ҡайтып ингәйне, оялаштары уны ҡабул итмәне, талап сығарҙы. Көткән ҡурҡыныстар ситләп үтте, уйламағандар алға килде. Тегенән мине совет законы, ГПУ, төрмә, лагерь менән ҡурҡытып ебәрҙеләр. Бында мине улар түгел, дуҫтарымдың нәфрәте көтөп торған икән. Нимә ҡылайым? Ҡайҙа барып һыйынайым? *(Быуылып илап ебәрә.)* Балам! Зинһар, һин ташлама мине! Үтенеп, ялынып, ялбарып һорайым, балам!

Айгөл *(әсәһе ҡаршыһына теҙләнә)*. Илама, әсәйем, аҙаҡтан бөтәһе өсөн дә бер юлы ғына иларбыҙ. Бер юлы ғына...

Зөлхәбирә. Йәш саҡтағы кеүек иламай сыҙап булһа икән ул.

Айгөл *(әсәһенең сәстәрен һыйпай)*. Һинең кеүек батыр кешегә күп илау килешмәй.

Зөлхәбирә. Тән яраларына түҙеп була, йән яралары быуынға төшә, балам.

Айгөл оҙаҡ итеп әсәһен һөйә. Күккә ҡарай.

Айгөл. Әсәй! Италияла күк ни төҫлө?

Зөлхәбирә. Бөтә ерҙә лә бер үк күк, бер үк ҡояш, ҡыҙым. Яҙмыштар ғына төрлө.

Айгөл. Күк хас та ошондай бейек, зәңгәрме?

Зөлхәбирә. Барғас күрерһең...

Айгөл. Италияны картала бейек үксәле итеккә оҡшатып төшөрәләр. Һеҙ ул итектең ҡайһы ерендә тораһығыҙ – йөҙлөгөндәме, ҡунысындамы, үксәһендәме?

Зөлхәбирә. Ҡунысының осонда ғына. Барғас, теләгән ереңә йөрөрһөң, теләгәнеңде күрерһең. Бик боронғо ил ул.

Айгөл. Уныһын ғына беләм дә... Әсәй, Италия фильмдарында кешеләр йә йырлайҙар, йә талашалар. Ысынлап та, улар шундаймы?

Зөлхәбирә. Шундай. Әммә аҙыраҡ йырлайҙар, күберәк талашалар. Башҡа ерҙәрҙәге кеүек үк.

Айгөл. Етер, Италияны һөйләмәйек инде... Атайымдың ҡәбере тураһында һөйлә. Ҡайҙа ул?

З ө л х ә б и р ә . Украинала. Ҡола яланда тау битендә ине.

А й г ө л . Пионерҙар унда, моғайын, сәскәләр һалалыр әле... Ә беҙ оноттоҡ уны.

З ө л х ә б и р ә . Кешеләр үлгәндәрҙе генә түгел, тереләрҙе лә оноталар.

А й г ө л . Ә беҙ онотмайыҡ. Синьор Пиккиоға минең бер һүҙем юҡ. Шулай ҙа атайымды, минең атайымды онотмайыҡ, йәме, әсәй.

З ө л х ә б и р ә . Бергә булғас, һин миңә гел уны хәтерләтеп торасаҡһың – тегендә, Италияла.

А й г ө л *(һикереп тора)*. Атайымды онотмау өсөн Италияға барыу һис тә кәрәкмәй, әсәй!

З ө л х ә б и р ә . Ҡыҙым! Ун өс йыл көтөп, ҡырҡ кәртә үтеп ҡайттым. Мин бит һине алырға ҡайттым.

А й г ө л . Әгәр мин бармаһам?

З ө л х ә б и р ә . Был мөмкин түгел, ҡыҙым.

А й г ө л . Мин башта уҡ һиҙгәйнем, әсәй. Ләкин рәнйемә, ҡапыл ғына өҙөп әйтә алмайым. Етерлек аҡылым да, таянырлыҡ тәжрибәм дә юҡ. Иҫәр бер йөрәгем бар. Ә ул икеләнә, бик ныҡ икеләнә... Кемгә генә кәңәш итәйем?

З ө л х ә б и р ә . Намыҫыңа.

А й г ө л . Ул да икеләнә.

З ө л х ә б и р ә . Миңә кәңәш ит.

А й г ө л . Юҡ, әсәй, был йәһәттән һин кәңәшсе була алмайһың. Бабайым ни әйтер? Йәнә Ричард Галин... Бөтә ун ете йыл ғүмеремдә мин улар менән бергә йәшәнем бит.

Тау яғынан Й ә ғ ә ф ә р менән Р и ч а р д килә. Йәғәфәр кескәй генә айыу балаһын ҡултығына ҡыҫтырып алған.

Ана, бабайым!

Й ә ғ ә ф ә р *(айыу балаһын күрһәтә.)* Бына беҙ йәнә өйгә ҡайттыҡ.

А й г ө л . Тыйнаҡтың бер балаһы түгелме һуң был?

Й ә ғ ә ф ә р . Шул, инәһен юғалтҡас, тыуған йортон эҙләп килгән, бахыр... Ярай, үҫерһең әле. Илдә һин түгел, ҡанаты һынған сәпсек балаһы ла үлмәй...

А й г ө л . Бабайым! Әсәйем мине алырға ҡайтҡан бит!

Йәғәфәр. Ҡалай алырға? Ҡайҙа алырға?

Зөлхәбирә. Италияға. Үҙ яныма, теге балаларым янына.

Йәғәфәр. Нисек инде ул шулай, ҡапыл ғына? *(Ҡулдарын йәйә.)* Көтмәгәндә генә?

Зөлхәбирә. Ун өс йыл көттөм, ун өс йыл ашҡындым. Аңла, ағайым! Мин бит әсә. Айгөл – минең тәүге балам, иң ныҡ яфаларға төшөргән иң ҡәҙерле балам. Унан башҡа бүтәнсә йәшәй алмам. Әрнеүҙәрем елегемә төштө. Йәшәй алмам. Унһыҙ йәшәй алмам.

Йәғәфәр. Ә мин? Мин нисек йәшәрмен? Япа-яңғыҙым, бер үҙем нисек йәшәрмен? Әлегә саҡлы мин ни өсөн йәшәнем? Кем өсөн йәшәнем?!

Зөлхәбирә. Һөйөклө ағайым! Был бәхәс минең өсөн ни тиклем ауыр икәнен аңлаһаң ине. Аңлайһыңдыр, һин аҡыллы бит. Әммә мин әсә. Ҡанымдың әмере аҡылымдан көслөрәк. Минең яҡта әсәлек хаҡы.

Йәғәфәр *(тыныс)*. Беҙҙең яҡта ил хаҡы, ер-һыу хаҡы *(күккә күрһәтә)*, анау ҡояш хаҡы.

Зөлхәбирә. Минең яҡта күкрәк һөтө хаҡы, күҙ йәштәрем хаҡы...

Йәғәфәр. Әгәр әсә менән Ватан бала өсөн судлашһа, ғәҙел суд кем яғында булыр ине?

Зөлхәбирә. Әлбиттә, әсә яғында булыр ине.

Ричард. Бәлки, Ватан яғында...

Пауза.

Йәғәфәр. Бала үҙе хәл итһен.

Айгөл. Эйе, мин хәл итермен. Бик-бик күп уйлағас, үҙем хәл итермен. Әлбиттә, хәл итермен. Моғайын, әсәйем, икенсе ҡат һинән айырыла алмам. Кисер, ҡәҙерле бабаҡайым! Әсәйемдән айырыла алмам. Мин... Мин... Аҙашҡан айыу балаһы мин...

Ут һүнә.

## Бишенсе картина

Таң алды. Әле генә уянған ҡоштар һайрай. Сит кеше – яҡтылыҡ түңәрәгендә. Өй тәҙрәһенән зәғиф кенә һарғылт ут төшә.

Сит кеше. Таң ата. Ҡоштар йоҡонан уяна. Тәүлектең иң саф сабый сағы. Был сәғәттә тик бәхет, шатлыҡ, мөхәббәт, тылсымлы киләсәк хаҡында ғына һөйләргә ине. Яңы көн тыуа. Был минуттарҙа, бер-береһенең иңбаштарына баштарын һалып, кемдәрҙер ҡайҙалыр ул турала һөйләшәләр, әлбиттә. Хыялдарында бер йылға, ун йылға, йөҙ йылға осоп үтәләрҙер. Ә мин ун туғыҙ йылға артҡа ташланам. Мин ул саҡта ла бар инем, бөтәһен дә күреп, ситтән генә күҙәтеп торҙом. Ошондай уҡ йәйге таң ине. Тәмәке төтөнө баҫҡан ҙур шыҡһыҙ бүлмә. Йондоҙҙар йымылдауы, төнгө еләҫ ел, ҡоштар һайрауы эскә үтеп инмәһен өсөн, тәҙрәләргә ҡалын, ауыр пәрҙәләр ҡоролған. Сөнки тормош ауазы, донъя һулышы бүлмәгә бәреп инһә, ундағы кешеләрҙең күңелдәре йомшарыуы ихтимал. Күңел йомшаҡлығы ул заманда тыйыла ине. Елһенгән күҙле өс кеше һарғылт йөҙлө бер кешене хөкөм итте был иртәлә. Башта: «Ултырығыҙ, гражданин Моратшин», – тинеләр. Тыңламағас, тағы ҡабатланылар: «Ултырығыҙ, гражданин!..» Ултырҙы. Өсәүҙең икеһе ялған ғәйепләү ҡағыҙҙарына – ялған шаһиттарҙың ялаһына ихлас ышанып, шик-шөбһәһеҙ хөкөм сығарҙы. Улар үҙҙәренең бурыстарын шулай ғәҙел, теүәл башҡарыуҙарынан риза ине. Ә өсөнсөһө бөтә ҡағыҙҙарҙың ялған, ә ғәйепләнеүсенең ғәйепһеҙ икәнен белә ине. Сөнки улар дуҫтар ине. Өсәүҙең беренсеһе: «Ғәйепле!» – тине. «Ғәйепле!» – тип ҡабатланы икенсеһе. Өсөнсөһө өндәшмәне. Хатта баш та ҡаҡманы. Теге икәү уға иғтибар ҙа итмәне. «Алып китегеҙ!» – тине беренсеһе. Алып киттеләр. «Нәүбәттәген килтерегеҙ!» – тине икенсеһе. Килтерҙеләр. «Ултырығыҙ, гражданин!..» – тинеләр. *(Сит кеше юҡ була.)*

Өй эсе. Тоноҡ ҡына ут яна. Йәғәфәр өҫтәл эргәһендә ултыра. Ҡәҙерйән ишек төбөндә баҫып тора. Айгөл, юрғанына төрөнөп, карауатында ултыра.

Йәғәфәр. Өсөнсө тапҡыр ҡабатлайым: ултырығыҙ, гражданин Ябағаев.

Ябағаев. Ултырһам да ярай, баҫып торһам да...

Йәғәфәр. Ярамай, ултырығыҙ.

Ябағаев. Ултырҙым. Был аяҡлы бәлә ҡайҙан килеп сыҡты, тиһеңдер, тиһегеҙҙер...

Йәғәфәр. Шулай тимен.

Айгөл. Бабайым! Ҡәҙерйән ағай тураһында бер һүҙ әйтәйемме?

Йәғәфәр. Хәҙергә әйтмәй тор. Һин уны «кем» тип һорағайның. Мин һине шуға уяттым. Тыңлап ҡына ултыр.

Ябағаев. Мин һеҙҙе бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ туғыҙынсы йылдан бирле, һеҙ аҡланып сыҡҡандан бирле, эҙләйем. Күпме хаттар яҙҙым, кире ҡайтты.

Йәғәфәр. Хаттарың килде, алманым. Мин һине юҡ тип иҫәпләнем...

Ябағаев. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, хәҙергә бармын шул. Күпме тапҡырҙар үҙ-үҙемә ҡул һалырға ла йыйынып ҡараным. Һәр юлы кисектереп торҙом.

Йәғәфәр. Бушты һөйләйһең. Хайуандың мәхлүге лә, йыртҡысы ла үҙ-үҙенә ҡул һалмай. Донъяла юҡ эш ул.

Ябағаев. Дөрөҫ. Шуға күрә лә ул эште мин кисектерә килдем.

Йәғәфәр. Нимә, һин минән йәлләтергә килдеңме? Зинһар, үҙ-үҙеңде харап итмә, тип инәлергә тейешме инде мин һиңә?

Ябағаев. Юҡ, Йәғәфәр, быныһы тик һүҙ ыңғайында ғына.

Йәғәфәр. Нимә кәрәк һуң һиңә?

Ябағаев. Һинең ғәфү итеүең кәрәк. Ун туғыҙ йыл үҙемә урын таба алмайым. Йәнем өҙгөләнә. Кешелек ҡиәфәтемде юғалттым. Кешелек сифаты, кешелек дәрәжәһе тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Уныһын үҙең күрәһең...

Йәғәфәр. Ҡаршыға баҫып ҡына ғәфү һорарға һин шаярып китеп тәҙрә быялаһы ватҡан малай түгелһең бит.

Ябағаев. Беләм. Мин һинең тормошоңдо, яҙмышыңды емереүҙә ҡатнаштым, өндәшмәүем менән ҡатнаштым. Шуның арҡаһында һин ҡатыныңды, берҙән-бер балаңды юғалттың.

Йәғәфәр. Күрәм, һин аңлай башлағанһың икән...

Ябағаев. Мин күптән аңланым. Ун ете йыл, бөтә нәмәнән ваз кисеп, һине, һеҙҙе... эҙләйем.

Йәғәфәр. Мин кәрәкмәйем бит һиңә, йән тыныслығы кәрәк.

Ябағаев. Эйе, дөрөҫ.

Йәғәфәр. Һиңә выждан ғазабынан ҡотолорға кәрәк.

Ябағаев. Эйе. Миңә башҡа һис ни кәрәкмәй. Хатта бәхет тә *(меҫкен йылмая)*, бәхет тағы... Иман килтерергә кәрәк миңә!

Йәғәфәр. Килтер. Ана, Ҡара ҡая алдына баҫ та килтер.

Ябағаев. Ҡара ҡая түгел, һин генә ҡотҡара алаһың мине.

Йәғәфәр. Һин бит мине ҡотҡарманың, ҡотҡарырға тырышып та ҡараманың...

Ябағаев. Әгәр ул саҡ һине ҡотҡарған булһам, хәҙер бынау ҡиәфәттә алдыңа килеп баҫыр инемме ни?

Йәғәфәр. Дөрөҫөн әйткәндә, ул ваҡытта мин һине был тиклем үк ҡаты хөкөм итмәнем. «Бер ул ғынамы ни?» – тип уйланым. Бара-бара, уйлай-уйлай нәфрәтем ҡайнап сыҡты... Әгәр ул йылда һәр өсөнсө һинең кеүек булмаһа, теге икәү ҙә, бәлки, тиҙерәк аңына килер ине. Һүҙ әйтер саҡта ауыҙҙарына һыу уртлап ултырған өсөнсөләр, тура ҡарар урында күҙ керпектәрен түбән сәнскән өсөнсөләр, шул өсөнсөләр булмаһа... Һәр өсөнсөбөҙҙөң эсендә шул өсөнсө кеше ултырмаһа... Заман сире, заман имгәктәре... «Эйе» менән «юҡ» араһындағы өсөнсөләр!

Ябағаев. Мәрхәмәтле бул, кисер мине!

Йәғәфәр. Әгәр был һинең шәхси ғәйебең генә булһа, бәлки, ярлыҡар ҙа инем.

Ябағаев. Заманда минең эшем юҡ. Үҙ заманымдан ваз кистем мин. Һин минең үҙ өҫтөмә төшкәнде генә ярлыҡа. Үҙемдекен генә! Әйҙә, башта минең ғәйебемдең

күләмен, миҡдарын, ауырлығын билдәләйек. Бөтөнләй үк ғәфү итмәҫлек нәмә эшләнемме ни мин? Мин хатта «ғәйепле» тип тә әйтмәнем бит.

Йәғәфәр. Һин «ғәйепһеҙ» тип тә әйтмәнең.

Ябағаев. Әйтмәнем. Улай тиһәм, мин һинең яҡта булып сыға инем. Ҡатыным, балаларым хаҡына өндәшмәнем. Хәйер, улар һуңынан мине барыбер ҡыуып сығарҙы.

Айгөл *(ырғып тора)*. Ғәйепһеҙҙе «ғәйепһеҙ» тип әйтмәнегеҙме? Өндәшмәнегеҙме? Яҡламанығыҙмы?

Ябағаев. Әйтмәнем, өндәшмәнем, яҡламаным.

Айгөл. Их, һеҙ!

Йәғәфәр *(Айгөлгә, ҡырҡа)*. Хәҙер үк ояңа сум, айыу балаһы!

Ябағаев. Мин аңланым. Өндәшмәгәнем өсөн үҙемде үҙем язаға тарттым, выждан ғазаптары кисерәм. Ә тегеләр? Тегеләр һуң?

Йәғәфәр. Кемдәр?

Ябағаев. Тегеләр!

Йәғәфәр. Кемдәр? Теге икәүме?

Ябағаев. Түгел. Иптәштәре, туғандары, хатта аталары өҫтөнән донос яҙған әҙәмдәр, теләһә кемгә яла яҡҡан, теләһә күпме провокация эшләгән әҙәмдәр!

Йәғәфәр. Минән дә әшәкерәктәр бар, тимәксе булаһыңмы?

Ябағаев. Эш унда түгел. Улар, һис нәмә булмағандай, изгеләрҙән-изге ҡыланып йәшәй бирәләр. Етмәһә, трибунаға баҫып, намыҫ, выждан, әхлаҡ тураһында нотоҡ, вәғәз һөйләйҙәр... Улар ҡаршыһында мин нимә? Күҙе асылмаған бесәй балаһы...

Йәғәфәр. Ундайҙар, арттан боҫоп килеп, арҡаға хәнйәр ҡаҙанылар. Ҡаҙанылар ҙа ҡастылар. Ә һинең кеүектәр – ғәҙел хөкөм, закон вәкилдәре ул хәнйәрҙе күрә тороп тартып алманы. Бының өсөн үтә ҙур батырлыҡ та кәрәкмәй ине.

Ябағаев. Батыр булһам, мин Ҡәҙерйән Ябағаев та булмаҫ инем. Ябағаев булмаһам, был тиклем ғазапланмаҫ та инем.

Йәғәфәр. Ә бүтәндәр?

Ябағаев. Бүтәндәрҙә минең эшем юҡ. Шунан һуң минең берәүгә лә зыяным теймәне.

Йәғәфәр. Ә файҙаң?

Ябағаев. Файҙам да теймәне. Үҙең... үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, минән ниндәй файҙа сыҡһын? Мин – буш, буп-буш. Бына тирем, һөйәктәрем бар, ә эстә буш. Башым да буш. Берәй фекер килеп инһә, башым урман кеүек яңғырап китә. *(Күкрәген күрһәтә.)* Бөтәһе лә ҡара көйҙө бында.

Йәғәфәр *(башын эйә)*. Һинең тауышың да ҡайҙандыр шомло замандан килгән төҫлө.

Ябағаев. Ҡыҙған мине, Йәғәфәр, зинһар, ҡыҙған! Кисер, ярлыҡа!

Йәғәфәр. Туҡта, саҡ ҡына уйларға бир.

Ябағаев. Уйлап торма. Аҡылың һалҡын һинең. Йөрәгеңдән һора, йөрәгеңдән! Ул мәрхәмәтле! Ғәфү ит мине, Йәғәфәр Моратшин! *(Теҙләнә.)* Рухыма азатлыҡ бир! Күмергә ҡалған йөрәгем төтәмәй генә янып бөтһөн! Миһырбанлы бул! Гонаһымдан ҡотҡар мине! Ваҡыты еткәс, тыныс ҡына донъя ҡуйырға рөхсәт ит миңә! Ап-аҡ һаҡалым буйлап аҡҡан күҙ йәштәрем менән инәлеп һорайым, – кисер мине! *(Илай.)* Шул изгелекте эшләһәң, үҙеңә сауап булыр. Мин хәҙер гонаһҡа ла, сауапҡа ла ышанамын. Ярлыҡа гонаһымды. Йоло мине. Йолоһаң, иртәгә үк китәм бынан. *(Башын күтәрә, таң яҡтыһы күрә.)* Йәғни бөгөн үк...

Йәғәфәр. Тор! Ҡарарға сирҡаныс.

Ябағаев *(үҙен ҡарап ала)*. Эйе, шулайҙыр шул. Шулайҙыр.

Йәғәфәр. Тор, тим бит.

Ябағаев. Торам, торам. Быуындар ебәрмәй. *(Ауырлыҡ менән тора.)*

Йәғәфәр. Бына нәмә, Ҡәҙерйән Ябағаев, һинең гонаһтарыңды ярлыҡарға мин һиңә рус побы түгел. Бар, Хоҙайыңа тапшырып, кит үҙ юлыңа.

Ябағаев. Ошо көйөмө? Нисек килдем, шулаймы?

Йәғәфәр. Минең турала бүтәнсә уйлама.

Ябағаев. Нисек уйламайһың инде? Бер нәмә лә үҙгәрмәне лә баһа.

Йәғәфәр. Үҙгәрҙе. Мин дә һинең хаҡта онотторға тырышырмын. Онотормон.

Ябағаев. Тимәк, ғәфү итәһең? Тимәк, йолойһоң?

Йәғәфәр. Үҙеңә нисек кәрәк, шулай аңла... *(Ҡул һелтәй.)*

Ябағаев *(ҡулдарын һуҙып ынтыла, туҡтай)*. Аңлайым, тап шулай аңлайым. Рәхмәт һиңә! Рәхмәттәр уҡыйым һиңә!

Йәғәфәр *(башын күтәрмәй генә)*. Хуш.

Ябағаев. Эйе, хуш, хуш. Хәҙер мин үҙемдең бисара ғүмеремә үҙем хужа. *(Арты менән ишеккә бара, туҡтай. Айгөлгә өндәшә.)* Был донъя шулай ул, ҡыҙым...

Айгөл. Бөтә донъямы? Бөтә, бөтә донъямы?

Йәғәфәр. Үҙебеҙ эшләгән этлектәрҙе шул донъяға япһарыуҙан ҡасан туҡтарбыҙ?

Ҡәҙерйән ишек төбөндә туҡтай. Тыш яҡтан асыҡ тәҙрәгә Пиккио килеп башын тыға. Уны күрмәйҙәр.

Ябағаев. Беҙ башҡаса күрешмәбеҙ, Йәғәфәр. Мин һинең күҙеңә бүтәнсә салынмаҫҡа тырышырмын. Әгәр асыуланмаһаң, тағы бер нәмә һорар инем.

Йәғәфәр. Һора.

Ябағаев. Бер мең туғыҙ йөҙ утыҙ етенсе йылда һин, ауыл хужалығы белгесе булараҡ, юғары поста, яуаплы урында инең...

Йәғәфәр. Әйтәйек, шулай.

Ябағаев. Коммунист инең.

Йәғәфәр. Коммунист инем.

Ябағаев. Әгәр ундай эштә эшләмәһәң, әгәр коммунист булмаһаң, һиңә, бәлки, ел-ямғыр ҡағылмаҫ та ине.

Йәғәфәр. Бәлки, ҡағылмаҫ та ине. Шунан?

Ябағаев. Шунан, тип ни... Миңә мәғлүм булыуынса, аҡланып ҡайтҡас, һине кире элекке эшеңә саҡырғандар. Бармағанһың. Быныһын аңлауы ҡыйын да түгел.

Йәғәфәр. Барманым. Рәнйенем. Хәтерем ҡалды, шуға барманым. Ошонда умартасы булып килдем.

Ябағаев. Ә барлыҡ әрнеүҙәреңде, рәнйеүҙәреңде онотоп, партия сафына ҡайтҡанһың...

Йәғәфәр. Бутайһың, Ябағаев! *(Һикереп тора.)* Һин әйткән «юғары пост», «яуаплы урын» менән коммунист исемен бәрәбәр ҡуйырға ярамай. Ярамай! Минең аңлауымса, миңә ҡалһа, партия сафында булыу үҙе, ҡәҙерен белгән кеше өсөн, иң юғары пост! Ҡалғандары килә лә, китә лә... Был – бер. Икенсенән, әгәр шул заман партия сафынан минең кеүектәр китеп бөтһә, һинең кеүектәр, йәғни Ҡәҙерйәндәр, унда күпселеккә әйләнер ине. Үҙең уйлап ҡара, нимә булыр ине ул саҡта?

Ябағаев. Хәҙер мин фирҡәле түгелмен.

Йәғәфәр. Хәҙерге Ҡәҙерйән иҫәпкә инмәй. Мин тегеһен әйтәм... Аңлатып бирә алдыммы?

Ябағаев. Төшөндөм. Рәхмәт. Хушығыҙ. *(Китә.)*

Айгөл *(үҙ алдына)*. Нимәһелер әллә һәйбәт, әллә ҡыҙғаныс был бабайҙың.

Пиккио *(тәҙрә аша)*. Кисерегеҙ, синьорҙар, ирекһеҙҙән һүҙегеҙҙең аҙағын ишетергә тура килде.

Йәғәфәр. Тыңлағас, ишетелер шул.

Пиккио. Эйе, синьорҙар, һеҙ күңелһеҙ ваҡытты, яман йылды хәтерләнегеҙ. Шәхес... культ... репрессия, донос!

Йәғәфәр. Ә һеҙ уны ҡайҙан беләһегеҙ?

Пиккио. Беләбеҙ, синьор Йәғәфәр, бер планетала йәшәйбеҙ бит.

Йәғәфәр. Белгәнегеҙҙе бында инеп һөйләгеҙ.

Пиккио. Улай ҙа була. *(Ишектән урап инә.)* Ул йылда беҙҙең гәзиттәр яҙғанды уҡыһағыҙ, радио һөйләгәнде тыңлаһағыҙ, түбә сәстәрегеҙ үрә торор ине. Беҙ ул хәбәрҙәрҙең яртыһына ғына ышандыҡ. Шулай ҙа, бахыр Рәсәй тағы ла ҡанға батҡан икән, тип бик йәлләнек һеҙҙе. Шул

утыҙ етенсе йылдағы хәлдәрҙе быйыл тағы ҡабат-ҡабат һөйләнеләр. Тағы йәлләнек.

Йәғәфәр. Ныҡ йәлләнегеҙме?

Пиккио. Һәләк ныҡ. Кешеләр урамда бер-береһен йығып һуйһындар ҙа, нисек йәлләмәйһең шуларҙы? Һуйылғандарҙы, тим... Ярай әле иҫән ҡалғанһығыҙ.

Йәғәфәр. Улай ныҡ йәлләгәс, ҡыйын булғандыр инде һеҙгә.

Пиккио. Ҡыйын булды, бик ҡыйын булды. Үтә ҡыҙғандыҡ. Әле лә ҡыҙғанабыҙ. Беҙ, итальяндар, ифрат әҙәм йәнле халыҡ бит.

Йәғәфәр *(Пиккионың ҡаршыһына килә)*. Бына нәмә, синьор Пиккио: һеҙ минең ҡунағым, етмәһә, кейәү тейешле кеше.

Пиккио. Һеҙ миңә ҡайнаға.

Йәғәфәр. Эйе, мин ҡайнаға, һеҙ кейәү. Урынығыҙ түрҙә. Ҡәҙерегеҙҙе белеп кенә ултырығыҙ шунда.

Пиккио. Рәхмәт. Рәхмәт, ҡайнаға.

Йәғәфәр. Әммә бынан һуң, синьор, яңылышып та, алдан уйлап та, йыуатырға теләп тә, илатырға теләп тә беҙҙең яраларға, яңы уңалып килгән иҫке яраларға, ҡағылмағыҙ! Сөнки утыҙ етенсе йылы ла, шәхесе лә, синьор, культы ла үҙебеҙҙеке. Ғазаптары ла, ҡара ҡайғылары ла, ҡанлы йәштәре лә үҙебеҙҙеке!.. Һыҙлауҙары үҙебеҙҙеке булғас, тимәк, һыҡтауҙары ла үҙебеҙҙеке. Ҡағылмағыҙ беҙҙең иҫке яраларға! Ҡағылмағыҙ, синьор! Беҙҙе былтыр ҡыҫҡанға быйыл ҡысҡырмағыҙ. Беҙгә ҡушылып ялған һалҡын күҙ йәштәре менән иламағыҙ. Барығыҙ, ана, айыу тиреһенә төрөнөп йоҡлағыҙ. Иртә әле!

Пиккио. Урынһыҙ ҡатнаштым. Кисерегеҙ, синьор. Мин былай һеҙҙең хәтерегеҙҙе ҡалдырырмын тимәгәйнем.

Йәғәфәр. Бер юлға ғәфү итәм.

Пиккио *(һүҙҙе икенсегә борорға теләп)*. Әле айыу тигәс, иҫемә төштө. Кисә анау ояла кескәй генә айыу балаһы бар ине. Шундай ирмәк. Йомғаҡ кеүек тәгәрәй. Ул ни...

Йәғәфәр. Уның хаҡы юҡ...

Пиккио. Мин былай ғына әйтәм, хаҡын һорамай ғына...

Йәғәфәр. Бүләк тә ителмәй!

Пиккио. Һеҙ мине аңламанығыҙ, синьор Йәғәфәр. Аңлата белмәнем...

Йәғәфәр. Аңланым. Ул айыу балаһы хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһы. Ғаилә ағзаларын беҙ һатмайбыҙ ҙа, бүләк тә итмәйбеҙ.

Ут һүнә.

## Алтынсы картина

Шул уҡ өй алды. Аласыҡ бағанаһында мылтыҡ, патронташ эленеп тора. Көн үҙәге яҡынлашып килә. Ябағаев, Ричард.

Ябағаев. Ҡарт көнөмдә нишләптер мылтыҡ атырға өйрәнге килеп китте. Әллә, тим, үҙемдә һунарсы олатайҙарҙың ҡаны ҡуҙғалып тора инде.

Ричард. Оҙаҡламай өйрәк ата башлаясаҡбыҙ. Һунарсы ҡаны алдан һиҙә уны.

Ябағаев. Ахыры, шулайҙыр. Тик шул мылтығын ғына тотоп өйрәнелмәгән.

Ричард. Дәртең булғас, Ҡәҙерйән ағай, мин һине һә тигәнсе өйрәтәм. Ана мылтыҡ та бар. *(Мылтыҡты, патрондарҙы ала.)* Бына быныһы ҡушкөбәкле мылтыҡ, быныһы патрондар...

Ябағаев *(мылтыҡты ала ла кире бирә)*. Тос ҡына икән.

Ричард. Мылтыҡтың ҡоролошон һөйләп торайыммы?

Ябағаев. Һөйләп торма, өйрәт кенә. Ҡорорға, тоҫҡарға, йәнә атырға өйрәт.

Ричард. Бына ошолай асып, бынау еренә патрон һалаһың. *(Аса.)* Бер патроны ла бар икән. Хәҙергә алып торайыҡ. Бынау ярыҡҡа анау мушка тигән бәләкәс кенә төймәне тура килтереп тоҫҡайһың. Шунан яй ғына бынау тәпе тигәнен тартаһың. Бына шулай. Төшөндөңмө?

Ябағаев. Атылып китһен өсөн, бынау нәмәһенә баҫырға кәрәкме?

Ричард. Эйе. Яйлап ҡына, ашыҡмай ғына... Әгәр алыҫҡа атырға кәрәк булһа...

Ябағаев. Әллә ни алыҫҡа ата алмам инде мин...

Ричард. Мин күрһәткәнде эшләп ҡара әле. Анау бағана ботағына эленгән көршәккә тоҫҡа.

Ябағаев. Анауғамы?

Ричард *(артынан килеп ҡарай)*. Аҫҡа тоҫҡайһың. Баяғы мушка тигәне көршәктең ҡап уртаһына тура килһен.

Ябағаев. Хәҙер ырғағына баҫайыммы?

Ричард. Баҫ.

Ябағаев. Ни эшләп шартламай ул?

Ричард. Ҡоролмаған, көпшәһендә патроны юҡ. Тағы бер ҡабатлайыҡ.

Ябағаев. Шулаймы?

Ричард. Ниңә ҡалтыранаһың? Һунарсының нервылары ныҡ булырға тейеш. Һин нервыларыңды сыныҡтыр.

Ябағаев. Әлбиттә, сыныҡтырырмын. Әлбиттә... *(Патронды ала.)* Ошоноң берәүһе үлтерәме?

Ричард. Был хатта бүрене, айыуҙы үлтерә.

Ябағаев. Мә, урынына һалып ҡуй.

Ричард. Мылтыҡты ҡороп ҡуйыу ярауын ярамай ҙа... *(Ҡора.)* Әйҙә, элеккесә, үҙенекенсә ҡалһын. *(Мылтыҡты, патронташты урынына элә.)* Өйрәк осоро башланғас, мин һиңә әйтермен. Бергә йөрөрбөҙ.

Ябағаев. Ярай, ярай... Бик рәхмәт. *(Ричардтың арҡаһынан ҡаға.)* Һин яҡшы күңелле бала.

Ричард *(ситкә тайшана)*. Мин арҡанан һөйгәнде яратмайым, Ҡәҙерйән ағай... Һынған ҡабырға ауырта.

Өйҙән Айгөл сыға.

Айгөл. Ричард Галин?! Өс көн буйы ҡайҙа китеп олаҡтың? Мин һине һағынып бөттөм.

Ричард ҡапыл Айгөл яғына ынтыла. Ябағаев аҡрын ғына барып мылтыҡты ала ла шым ғына сыға.

Ричард. Һағынмағанһыңдыр ҙа...

Айгөл. Ысын! Ниңә килмәнең?

Ричард. Артымдан юллап килеп, больницаға илтеп яптылар. Бөгөн тағы ҡастым.

Айгөл. Ә ҡасҡынды ни эшләтәләр, беләһеңме?

Ричард. Әйттеләр инде: тағы ҡасһаң, милиция менән алдырып, каталажкаға яптырабыҙ, тинеләр.

Айгөл. Яралы булыу һиңә килешә, Ричард Галин! Үҙ яраларыңа торорлоҡ егет һин!

Ричард. Ә һин үҙеңдең ниндәй һәйбәт ҡыҙ икәнеңде белһәң, аҡылдан яҙыр инең.

Айгөл *(шарҡылдап көлә)*. Улай булғас, белмәй тороуым яҡшыраҡ.

Ричард *(гипстағы ҡулын ҡосаҡлап ултыра)*. Больницала мин иланым. Яңғыҙлыҡтан... Йәнә алда торған яңғыҙлыҡты уйлап...

Айгөл *(Ричард эргәһенә бүрәнәгә ултыра)*. Мин «Айгөл дәфтәре»н уҡып сыҡтым. Баштан-аяҡ.

Ричард. Көлдөңмө?

Айгөл. Башта көлөргә иткәйнем дә, ҡапыл күңелем тулып китте. Һуңынан нисектер яманһыу ҙа, бер аҙ ҡурҡыныс та булып ҡуйҙы.

Ричард. Ысынмы?

Айгөл. Ысын булмай. Ул дәфтәрҙе – «Айгөл дәфтәре»н ни эшләтәһең?

Ричард. Ҡул төҙәлгәс тә, сумкаға һалып йөрөтәм.

Айгөл. Бир миңә уны, бүләк ит. Үҙем менән Италияға алып китәйем. Битен асҡан һайын, һине, бабайымды, ошо имәнде – бөтәһен дә, бөтәһен дә иҫкә төшөрөрмөн.

Ричард. Ҡасан китәһегеҙ?

Айгөл. Бөгөн көндөҙ үк китәбеҙ. Әсәйемдәр сумаҙандарын йыйып бөттө инде.

Ричард. Ә мин? Мин белмәй ҡалған булһам?

Айгөл. Мин үҙем һине эҙләп тапҡан булыр инем.

Ричард. Тимәк, «Айгөл дәфтәре»нең беренсе бүлеге ошонда бөттө. Ал һин уны. Ул һинеке, бөтөнләйгә һинеке. Тик шуны ғына үтенеп һорайым: беҙҙе оноткас, утҡа яҡ

һин уны. Күҙ көйөгө булып туҙанда аунап ятмаһын. Италия туҙанында аунап…

Айгөл. Үҙем туҙанда аунаһам да, уны аунатмам…

Ричард. Үҙең дә аунама, Айгөл…

Айгөл *(нәҡ тәүге картиналағыса Ричардтың алдына теҙләнә).* Тәпәй баҫҡандан бирле, был ерҙә беҙ гел бергә йөрөнөк. Башта етәкләшеп йөрөнөк, һуңынан былай ғына. Ун ете йыл буйына һин мине хатта бер тапҡыр этәреп тә ебәрмәнең. Мин һине йәберләнем, күп йәберләнем. Шулар өсөн бөгөн кисер мине, Ричард… Ричард Галин… Айырылышыу алдынан һиңә әллә ниндәй һәйбәт, мәңге онотолмаҫлыҡ һүҙҙәр әйткем килә.

Ричард. Ундай һүҙ берәү генә инде. Әйт шуны…

Айгөл. Миңә ни тиклем, ни тиклем ауыр икәнен белһәң ине. Мин бер Айгөл түгел, ике Айгөл. Уң ҡулым төҙәткәндә һул ҡулым боҙа, уң күҙем һоҡланғанда, һул күҙем нәфрәтләнә, уң ҡолағым йыр ишеткәндә, һул ҡолағым һыҡтау ишетә. Ҡыйын миңә…

Ричард. Китмә, Айгөл. Һиңә нимә ҡалған ул сит донъяла?

Айгөл. Унда минең әсәйем буласаҡ. Әсәй кеше үҙе бөтөн бер донъя ул.

Ричард. Бынау тауҙарҙан, урмандарҙан, һуҡмаҡтарҙан, күктәрҙән башҡа, беҙҙән башҡа ни эшләрһең һин унда?

Айгөл. Мин ул хаҡта уйламаҫҡа, бөтөнләй уйламаҫҡа тырышам. Мин бары әсәйемдә уйлайым. Бер-беребеҙҙән башҡа йәшәү беҙгә мөмкин түгел.

Ричард. Быға саҡлы мөмкин ине бит.

Айгөл. Бынан ары мөмкин түгел.

Ричард. Ни өсөн шулай?

Айгөл. Белмәйем. Тик мөмкин түгел. Мин шулай хәл иттем.

Ричард. Мин һине бер тигәндә артыңдан юллап барып табасаҡмын барыбер.

Айгөл. Ә хәҙергә хушлашырға тура килә, сыҙам, сабыр дуҫым минең… Йә күрешербеҙ, йә юҡ… Күрешербеҙме, юҡмы? Әйҙә таш менән юрайыҡ.

Ричард. Юҡ, юрамайыҡ! Юрауға, ырымға, сихырға ышанмайым мин! Ышанмайым мин! Бары үҙемә генә ышанам. Мин һине табасаҡмын. Башҡа планетаға китһәң дә, табасаҡмын! Адресың йөрәгемдә: Итальяно, Милано... Милано, Итальяно... *(Тау яғына сығып йүгерә.)*

Зәлифә менән Миңлекәй килә. Улар ябай, ләкин матур кейенгәндәр.

Миңлекәй *(һөйләп килә)*. Бынау Ҡара ҡаяға яҡынлаша башлаһам, йөрәгем леп-леп-леп тибергә тотона...

Зәлифә. Бер һүҙҙе күп һөйләйһең, Миңлекәй.

Миңлекәй. Һағынып һөйләргә генә ҡалғас...

Инәләр.

Зәлифә. Һаумы, ҡыҙым. *(Текләп ҡарай.)* Ниңә былай төҫөң ҡасҡан, әллә ауырыйһыңмы?

Айгөл. Ауырымайым. Беҙ бит китәбеҙ, Зәлифә әхирәт апай.

Зәлифә. Ҡайҙа?

Айгөл. Италияға. Бөтөнләйгә.

Миңлекәй. Италияға? Бөтөнләйгә? Һиңә ни етмәгән унда йыйын буржуй араһында? Бына бер кәмит! Нимә ҡарай теге ағас аяҡ мәжнүн?

Зәлифә. Беҙ бик сәпсәләнеп тә китмәйек әле, Миңлекәй. Илсенең суҡмары – сабырлыҡ, ти.

Миңлекәй. Сабыр булабыҙ тип, бынау бөтә тирәяҡты йәмләп торған аҫыл бер затты ер аяғы – ер башы ергә үҙ ҡулыбыҙ менән биреп ебәрәйекме ни инде?

Айгөл. Мин бит әсәйем менән бергә буласаҡмын.

Миңлекәй. Ғүмер буйы әсәйеңдең итәгенә тотоноп тора алмаҫһың. Ишегеңде асып, урамға сыҡҡас та, ҡайҙа барырһың, кемгә һүҙ ҡушырһың? Уйлағаның бармы шуны?

Айгөл. Юҡ.

Миңлекәй. Бар, уйлай йөрө. Әсәйеңә әйт, бында сыкһын.

Айгөл *(аптырап иңбаштарын йыйыра. Үҙ алдына)*. Ниңә шулай үсегәләр икән былар?..

Айгөл өйгә инеп китә.

Зәлифә. Һин үтә елкенеп китеп, эште боҙоп ҡуйма.

Миңлекәй. Беләбеҙ. Тел үҙебеҙҙеке. Кәрәк саҡта ут сәсәбеҙ, кәрәк саҡта боҙ ялайбыҙ.

Зәлифә. Тик ут менән боҙҙо бутап ҡуйма.

Миңлекәй. Шулай ҙа һүҙҙе һин башла. Йә ҡапыл тоҡанып китермен.

Зөлхәбирә өйҙән сыға.

Зөлхәбирә *(ҡаушап)*. Килеп ҡалай яҡшы иткәнһегеҙ. Һаумыһығыҙ?

Баш эйеп иҫәнләшәләр.

Зәлифә. Һаумы, Зөлхәбирә?

Миңлекәй. Иҫәнме?

Зәлифә. Китергә йыйынаһығыҙ икән. Хәбәребеҙ һуңлағандыр инде, былай булғас.

Зөлхәбирә. Бәлки, һуңламағандыр.

Зәлифә. Элекке ете дуҫың араһынан икебеҙ илсе булып килдек. Һине ғәфү итергә тип ебәрҙеләр беҙҙе.

Зөлхәбирә. Рәхим итегеҙ! Моғайын, килерҙәр, тип көткәйнем. Бына рәхмәт һеҙгә! Күңелем тынысланып китәсәкмен.

Миңлекәй. Рәхмәтеңде әйтергә ашыҡма әле, Зөлхәбирә. Һиңә бер шартыбыҙ бар.

Зөлхәбирә. Һеҙ, әлбиттә, үтәй алмаҫлыҡ шарт ҡуймаҫһығыҙ. Үтәрлек шарт булыр. Әйтегеҙ...

Зәлифә. Беҙ етәүләп шулай хәл иттек: әгәр һин бында ҡалһаң, һине ғәфү итәбеҙ. Ҡалыр ниәтең булһа, уңайһыҙланма, әйт. Ҡурҡма, һиңә бармаҡ та янатмабыҙ.

Миңлекәй. Һис ваҡыт, һис кемдән битәр һүҙе ишетмәҫһең.

Зәлифә. Ете дуҫың шул ҡарарға килде.

Зөлхәбирә. Һеҙ бит яҡшы беләһегеҙ: ҡаяһынан ҡубып, түбәнгә әллә ҡайҙа тәгәрәгән ташмын мин. Ҡайтыр юлым юҡ минең.

Миңлекәй. Ҡайтҡанһыңсы.

Зөлхәбирә. Йәнемдең яртыһы тегендә. Унда ике балам, ирем, йорт-йыһазым, донъям бар. Унда үткән ун өс йыл ғүмерем бар, ә бында? Һеҙҙең нәфрәттән башҡа нимә күрҙем мин бында? Нимә күрҙем?..

Миңлекәй. Бәй, балаларыңды, ireңде бында күсер. Бөтәбеҙгә лә урын етер. Нәфрәт тә бөтөр.

Зөлхәбирә. Минең алға ундай шарт ҡуйыу – шәфҡәтһеҙлек! Шартығыҙға күнә алмайым. Ярлыҡамаһағыҙ, шул көйө, ләғнәтләнгән көйө, китермен. Ер менән күк араһында аҫылынып ҡала алмайым мин. Ел өргән яҡҡа күсеп йөрөргә мин болот түгел. Кеше мин! Үҙем теләгән яғыма барам.

Зәлифә *(белмәмешкә һалышып)*. Ә Айгөлөң?

Зөлхәбирә. Ҡыҙым минең менән китә. Алып китәм.

Миңлекәй. Уныһын ҡарап ҡарарбыҙ әле.

Зөлхәбирә. Бала минеке.

Зәлифә. Етем өйрәк бәпкәһенә йомортҡа һалған өйрәк инә түгел, ултырып бала сығарған тауыҡ – инә. Айгөлгә Йәғәфәр хужа, беҙ хужа, бына бынау йорт хужа.

Зөлхәбирә. Ә беҙҙе мәктәптә «кеше үҙенә үҙе хужа» тип өйрәттеләр тағы.

Зәлифә. Башҡа һабаҡтарҙы онотһаң да, быныһын онотмағанһың икән.

Арттараҡ Йәғәфәр уҙып бара.

Миңлекәй. Йәғәфәр ағай!

Йәғәфәр яҡын килә.

Йәғәфәр. Һаумыһығыҙ, ҡарындаштар? Оҙатырға килдегеҙме? Бик һәйбәт иткәнһегеҙ.

Миңлекәй. Оҙатырға ла, оҙатмаҫҡа ла.

Йәғәфәр. Үтә өҙөп, төшөндөрөп һөйләйһең, Миңлекәй.

Миңлекәй. Ә һин, мыйыҡлы мәжнүн, аяҡ үрә төш күреп йөрөйһөң. Айгөлдө шулай ултыртып ебәрәбеҙме ни инде?

Йәғәфәр. Бала үҙе шулай хәл итте.

Миңлекәй. Хәл итте, имеш, нимә хәл итһен ул? Баланың башында әле Ирәмәл түбәһендә уйнаған елдәр уйнап тора.

Айгөл сыға. Һуңғы һүҙҙәрҙе ишетә.

Зөлхәбирә. Әсәне баланан, баланы әсәнән айырырға берәүҙең дә хаҡы юҡ. Юҡ хаҡы! Күрһәтегеҙ миңә шундай закон!

Зәлифә *(күкрәгенә ҡулын ҡуя)*. Беҙҙең закон бына бында.

Айгөл. Бәхәсләшмәгеҙ! Мин үҙем хәл итәм, әсәйемдән айырылмаҫҡа хәл итәм.

Зәлифә *(Айгөл эргәһенә килә)*. Унда барғас, кем булырһың һуң һин, балам?

Айгөл. Айгөл булырмын.

Зәлифә. Айгөл булырһың. Әммә ниндәй Айгөл? Ул тормош кем итер һине – ҡолмо, ҡурсаҡмы? Ҡайһыһы итһә лә, аяныс. Бына шуны уйлап йән өҙгөләнә.

Айгөл. Мин һәйбәт булырмын, Зәлифә әхирәт апай. Ант итеп әйтәм – һәйбәт булырмын! Һеҙ ҙә асыуланмағыҙ. Татыу ғына айырылышайыҡ. Элеккесә...

Миңлекәй. Беҙ һине ебәрмәйбеҙ, Айгөл! Һин беҙҙеке. Етебеҙ ҙә юлығыҙға сығып, Зөлхәбирә, машинағыҙ алдына һуҙылып ятырбыҙ, әммә баланы бирмәбеҙ. Ер менән күк араһында берәү аҫылынып торғас та еткән. Үҙ хазинабыҙҙы һаҡлап ҡалырға беҙҙең көсөбөҙ етер! Киттек, Зәлифә!

Ҡапыл боролоп сығып китәләр.

Зөлхәбирә. Кеше эшенә, кеше тормошона шулай һөмһөҙ килеп тығылыу – ниндәй тупаҫлыҡ, наҙанлыҡ! Ниндәй кешелекһеҙ ҡырағай әхлаҡ, әрһеҙ ғәҙәт! Минең

өсөн былар бөтөнләй ят хәҙер. Мин уларҙың тормошона, ирһеҙ тапҡан балаларына ҡатнашмайым бит.

Йәғәфәр. Зөлхәбирә һылыуым, үҙ алдыңа теләһәң ни уйла, әммә минең алда беҙҙең әхлаҡҡа тел тейҙермә. Һиңә ярамай ул! *(Күҙен һөртә-һөртә боролоп китә, Айгөл уның беләгенә аҫылына.)*

Айгөл. Бабайым, ҡәҙерлем. Һин миңә асыуланма. Әсәйем миңә бик кәрәк бит.

Сығалар.

Зөлхәбирә *(оҙаҡ һүҙһеҙ тора)*. Китергә, хәҙер үк китергә кәрәк. Һәр кем үҙенсә хаҡлы. Ә мине рәнйетеп, йәберләп ебәрәбеҙ тип берәү ҙә уйламай. Хатта ағайым да... Күпме рәнйеп, йәберләнеп, яфаланып китәм бит мин тыуған еремдән.

Ике сумаҙан күтәреп, Пиккио сыға.

Пиккио. Тимәк, һау бул, Күсәрбай! Әссәләмәғәләйкүм, Милано! Синьор Йәғәфәр әйтте, оҙаҡламай машина киләсәк, тине. Нәмәләрҙе сығарып ҡуяйыҡ.

Зөлхәбирә. Эйе, китергә ваҡыт.

Пиккио. Һин тағы борсолғанһың. Юлда мин һине Неаполь йырҙарын йырлап йыуатырмын, минең гүзәл синьорам!

Зөлхәбирә. Урал илатҡан йәнде Неаполь йыры йыуата алмаҫ шул.

Пиккио. Иң ҡара болот та бер килеп тарала, хазинам минең! Бер хазина урынына ике хазина алып ҡайтып бара Карло Пиккио. Ой, Пиккио – ир-егет!

Айгөл үҙ төйөнсөгөн сумаҙандар эргәһенә сығарып ҡуя. Баҫып ҡала.

Зөлхәбирә. Шатлығыңды эсеңә һыйҙырыбыраҡ, иплерәк ҡыланырға тырыш, Карло. Күрәһең бит, бөтәбеҙ ҙә мәйет оҙатҡандағы кеүекбеҙ.

Пиккио. Аңлайым: юлдашың һуҡыр булһа, күҙеңде ҡыҫ.

Зөлхәбирә. Эйе.

Пиккио. Ярай, ярай... Әммә Айгөл үҙенең сибәрлеге менән бөтә Миланоны хайран ҡалдырасаҡ. Баһалап бөтә алмаҫлыҡ хазина ул. Уның хаҡы миллион, ун миллион, йөҙ миллион!

Зөлхәбирә. Ниңә һин шулай, Карло, бөтә нәмәгә лә хаҡ ҡуяһың? Хатта кешегә, хатта сабый балаға?

Пиккио. Беҙҙә генә түгел, бында, Советта ла, иң ҡиммәтле капитал – кеше, тиҙәр ине бит. Шуға ғына әйтәм. Үҙең беләһең, итальяндар матурлыҡты баһалай ала.

Айгөл *(атылып алға сыға)*. Нимә һеҙ, синьор Пиккио, мине Италияға илтеп һатырға уйлайһығыҙмы ни? Ни һөйләй ул, әсәйем? Ниңә шундай һүҙ әйтә ул?

Зөлхәбирә, Пиккио ҡапыл аптырап ҡалалар.

Пиккио. Һатыу? Алла һаҡлаһын! Әҙәм һатырға, Хоҙайға шөкөр, Италия ҡырағай ил түгел. Һин шундай матурһың, синьорина Айгөл, тимәк, айҙағы гөл – һинең ҡулыңды һорап, миллионер улдары алдыңа килеп баш эйәсәктәр. Ҡатын-ҡыҙ өсөн иң юғары чин – матурлыҡ. Беҙ, ирҙәр, уның ҡаршыһында ҡалтырана-ҡалтырана теҙ сүгәбеҙ. Һин ундан берҙе, йөҙҙән берҙе үҙең һайлап аласаҡһың.

Зөлхәбирә *(тыныс)*. Етер. Карло, ошонда туҡта.

Пиккио. Әйтеп кенә бөтөрәм дә... Шунан һин бөтә Миланоға, хатта бөтә Италияға мәшһүр миллионерша буласаҡһың. Бына ниндәй күркәм тормош көтә һине.

Айгөл. Тимәк, йә ҡурсаҡ, йә ҡол? Йә ҡол, йә ҡурсаҡ?

Зөлхәбирә. Тыңлама һин уны. Шул миллиондар менән һаташҡан ул.

Айгөл. Юҡ, әсәйем, тыңламай булдыра алмайым. Зәлифә әхирәт апайым да шуны әйтте. Мин ҡурҡам! Ҡурҡам мин, әсәй!

Пиккио. Ниндәй сәйер халыҡ был? Бүләк бирә, бүләк алмай, үҙе ярлы, үҙе миллиондан ҡурҡа.

З ө л х ә б и р ә . Карло!

А й г ө л . Ялған! Беҙ ярлы түгел! Бына минең генә ни саҡлы мөлкәтем бар! *(Төйөнсөгөн сумаҙандар янынан алып ситкә ырғыта.)*

З ө л х ә б и р ә . Ярһыма, ҡыҙым, уның һөйләгәне буш хыял. Ул шундайыраҡ кеше.

А й г ө л . Ул уйлағанын һөйләй, күрергә теләгәнен һөйләй... Синьор Пиккио бер ваҡытта ла алдашмай.

П и к к и о . Карло Пиккио алдашмай.

А й г ө л . Ә һин һуң, әсәй, нимә, ниндәй тормош вәғәҙә итәһең?

З ө л х ә б и р ә . Яҙғаны булыр.

Төрөлгән айыу тиреһе, уҡ-йәйә күтәреп, Йәғәфәр сыға.

А й г ө л . Юҡ, әсәй, тоҡҡа һалып ҡына алып китергә мин күҙе асылмаған айыу балаһы түгел! Күҙе асылған айыу балаһы мин! Синьор Пиккио асты минең күҙемде. Баһам түбәнерәк булһа ла, тамыр йәйгән еремдә ҡалам.

Имәнде килеп ҡосаҡлай.

З ө л х ә б и р ә . Ярабби! Тағы ни ишетәм мин? Бер һелтәүҙә бөтә өмөттәремде селпәрәмә килтерәһеңме ни инде, балам? Ҡыҙым! Тотош бер юлы!

А й г ө л . Кисер, әсәйем, үҙемде лә, һине лә алдаған булып сыҡтым. Кисер! Синьор Пиккио уйнап ҡына, шаярып ҡына һелтәгән таяҡ мине һушыма килтерҙе. Шиктәремде таратты. Рәхмәт уға!

З ө л х ә б и р ә . Күңелем һиҙенә ине, шик-шөбһәләрем йөрәгемде тырнай ине. *(Күкрәгеп ыуа.)* Бына бынауҙан бер минутҡа ла ҡанлы төйөр китмәне. Ахыры шул бер килеп быуыр инде. *(Тыныс ҡына.)* Башҡаса өгөтләргә хаҡым да, инәлергә көсөм дә юҡ. Күрәсәгем шулдыр. *(Сумаҙанға ултырып битен ҡаплай, иламай, Айгөл килеп уны иркәләй.)*

Ҡара ҡая яғында атыу шартлай. Бөтәһе лә тертләп китә.

Й ә ғ ә ф ә р . Кемдер йәнә мылтыҡ менән шаяра.

Пиккио *(ирония менән)*. Тантаналы салют! Каруан юлға сыға!

Ричард *(алыҫтан ҡысҡырып килә.)* Бәлә! Бәлә! *(Инә, ҡулында мылтыҡ.)* Ҡот осҡос бәлә! Бәлә! Ҡәҙерйән Ябағаев атылды. Ҡара ҡая башында үҙен үҙе атты.

Йәғәфәр. Ниңә тыйманың? Ниңә мылтығын тартып алманың?

Ричард. Мин атыу тауышы ишетелгәс кенә күрҙем. Мин барып еткәндә, йән биргәйне.

Айгөл. Бисара бабай... Бер яҡшы һүҙ ҙә әйтеп ҡала алманым.

Йәғәфәр. Кем мылтығы?

Ричард. Теге әҙәмдеке. Өс аҙна эсендә бынау ике көбәктән ике үлем сыҡты. Ләғнәт төшһөн мылтығына ла, хужаһына ла! *(Мылтыҡты атып бәрә.)*

Зөлхәбирә *(ултырған еренән)*. Ҡарт үҙен борсоған һорауҙарға яуап тапҡан... Ниндәй мәхшәр был? Китергә, китергә... Яй ғына, шым ғына, йомғаҡ кеүек йомарланып ҡына китергә кәрәк... *(Ҡысҡырып.)* Йомғаҡ булһам да, осо барыбер бында ҡала! Ҡыҙым!.. *(Тора, тирә-яғына ҡарай.)* Башҡаса күрә алмаһам, бәхил булығыҙ. Ғәйепле булһам, мин генә түгел, һуғыш та ғәйепле. Бәхил булығыҙ!

Ирҙәр нәмәләрҙе күтәреп ала. Айгөл әсәһен ҡосаҡлай. Аҡрын ғына сығалар. Сит кеше инә.

Сит кеше. Мәйеттәр ашыҡмай. Ябағаев көтөп торор. Ә юлсыларҙың юлда булыуы яҡшы. Терелэр гел юлда. Гел эҙләйҙәр, табалар, юғалталар. Хатта тапҡанда ла юғалталар, юғалтҡанда ла табалар. Үҙҙәрен табалар... Ричард Галин әйтмешләй, «Айгөл дәфтәре»нең беренсе өлөшө тамамланды. Алда ни булыр, уныһы билдәһеҙ. Ә хәҙергә Айгөлдөң нимә юғалтып, нимә тапҡанын үҙегеҙ күрҙегеҙ. Әйткәнемсә, мин уйынға ҡатнашманым. Берәүҙе лә илатманым да, йыуатманым да... Сөнки мин – сит кеше... Ниңә тағы килеп индем һуң әле мин бында? Ә... үҙемдең шул көйө иҫән-һау икәнемде күрһәтер өсөн инде. Хушығыҙ. Ары китәм. *(Юҡ була.)*

Айгөл артына боролоп ҡарай-ҡарай йүгереп инә. Уға Ричард эйәргән.

Айгөл *(артына әйләнеп)*. Мин һине, әсәйем, тау башынан ҡарап ҡалам. Унан алыҫ күренә! Унан бик алыҫ күренә. Мин һине шунан ҡарап ҡалам.

Йүгереп үтәләр. Ут һүнә. Шунда уҡ тоҡана. Прологтағы тау башы. Айгөл, Ричард.

Айгөл. Хуш, әсәйем! Мәңгегә китер өсөн генә ҡайтҡанһың икән. Хуш! Эсемдә ҡойондар уйнап ҡалды, әммә йөрәгемә зиһен биреп киттең. Мин ҙур үҫтем хәҙер. Бик ҙур үҫтем! Үҙемде түгел, инде һине ҡыҙғанам. Нисек түҙерһең һин?

Ричард. Ташморонға еттеләр.

Айгөл. Ташморондо үттеләр. Күҙҙән юғалдылар, күмелделәр. Хуш, әсәйем! Хуш! *(Илай.)*

Ричард. Һин илайһың?

Айгөл. Илайым.

Ричард. Тәртип юҡ был ер йөҙөндә.

Айгөл. Булырға тейеш. Булдырырға кәрәк уны!

Ричард. Ә һин илайһың.

Айгөл. Илайым. Бөтәһе өсөн дә бер юлы илайым. Ләкин күҙ йәштәрем аша салауат күпере күрәм мин, офоҡтан офоҡҡа һуҙылған алтын күпер күрәм. Һинең менән беҙ шул күперҙән үтеп бейеккә, юғарыға күтәрелербеҙ. Алыҫҡа, бик алыҫҡа китербеҙ. Тик үткәндәрҙән ғәфү һорар өсөн кире әйләнеп ҡайтмаһаҡ ине. Ҡайтмаһаҡ ине, Ричард Галин!

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Драма әҫәрҙәре бик һирәк осраҡта пролог менән башлана. «Айгөл иле»ндә пролог ниндәй роль үтәй?

**2.** Әсә менән ҡыҙҙың осрашыуы һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы? Һөйләп бирегеҙ.

**3.** Зөлхәбирәнең әхирәттәре – Зәлифә, Гөлсирә, Банат, Миңлекәйҙәрҙең уны хәтерләргә теләмәүҙәрен, Тыуған илдә ҡалһа ғына, ғәфү итәсәктәрен, Айгөлдө Италияға ебәрмәҫ өсөн машина алдында һуҙылып ятырға әҙер булыуҙарын һеҙ нисек ҡабул итәһегеҙ? Улар хаҡлымы?

**4.** Халҡыбыҙҙа ҡунаҡтың күңеленә ятҡан, оҡшатҡан нәмәне уға бүләк итеү йолаһы бар. Уны Карло Пиккио нисек файҙалана? Сама белергә кәрәк, тип үҙен тыйырға тырышып ҡараһа ла, айыу балаһын күргәс, тыйыла алмағанын нисек аңлатырға була?
**5.** Йәғәфәр Моратшин менән Ҡәҙерйән Ябағаевтың һөйләшеүендә заманында һүҙ әйтергә ҡурҡып, ауыҙҙарына һыу уртлап ултырған өсөнсө кешеләр фашлана. Ҡайһы дәүер һәм кемдәр күҙ уңында тотола?
**6.** Әсәһенә эйәреп Италияға йәшәргә китергә әҙерләнеп бөткән Айгөлдө нимә аҡылына килтерә? Ни өсөн ул Карло Пиккиоға рәхмәт әйтә?
**7.** Әҫәрҙең жанр формаһы «романтик драма» тип билдәләнгән. Уның нимә аңлатҡанына төшөнөү өсөн реалистик һәм романтик һүрәтләүҙең асылын белергә кәрәк. Шуларҙы һүҙлектәрҙән үҙ аллы табып, романтик драманың мәғәнәһен асыҡлағыҙ.

## ШАҒИР ШАТЛЫҒЫ

Шатлыҡ һөйләргә шағирға
Килерме кем дә берәү?
Шатлыҡ ҡанатлы заттан ул –
Кәрәкмәй уға терәү.

Кешеләр килә шағирға
Мәшәҡәт, хәстәр менән,
Керпектәре осондағы
Тулышҡан йәштәр менән.

Бар ғаләмде йыуатырға
Шағир ҙа Алла түгел,
Телгеләп үк бирер ине –
Йөрәге алма түгел.

Ҡалдырып китәләр уға
Борсолоу, әрнеү, яра…
Шуға уның ҡарашында
Моңһоулыҡ арта бара.

Бер кис шағир күҙҙәренән
Бөркөләп нурҙар аҡты,

Гүйә, Сулпан алдан ҡалҡып,
Сылтырап таңдар атты.

Шағир өйөндә шундай бер
Тамаша булған икән:
Таянып килгән таяғын
Бер ҡарт онотоп киткән.

**Тасуири уҡырға өйрәнәбеҙ**

Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Шағир ни өсөн шатлана? Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп бирегеҙ.
**2.** *Бөркөлөп нурҙар аҡты*, *сылтырап таңдар атты* һүҙбәйләнештәренең ниндәй тасуири сараға ҡарағанын асыҡлағыҙ.

## АП-АҠ МӨҒЖИЗӘ

*(«Ғүмерем миҙгелдәре» китабынан)*

Биштәр тирәһендә булғанмындыр. Ҡыҙамыҡ менән ауырып яфаланам. Хәлем йүнәлә, буғай, инде. Оло инәйем урынымды һикегә арҡыры түшәп, башымды ян тәҙрә яғына бороп һалды. «Көн яҡтыһын күрергә күпме зар булды. Исмаһам, донъяға ҡарап ятһын...» – тине. Башты күтәрерлек кәр юҡ юғын, шулай ҙа байтаҡ нәмәне күреп, күҙәтеп була. Ана, баҡса кәртәһенә эленгән һөлгөнөң семәкәйле башын ала быҙауыбыҙ килеп сәйнәргә кереште. Күрмәйҙәр микән ни? Сәйнәп бөтөрә бит инде! Ҡара әле, бөтөнләй һөйрәп төшөрөп, икенсе осон тапарға кереште. Етмәһә, семәренең уртаһына ғына «көлсә»һен һалып ҡуйҙы. Тәрбиәһеҙ нәмә. Көлсә эргәһенә генә бер һоро турғай килеп ҡунды. Суҡышын да тейҙермәй, кире осоп китте. Оҡшатманы. Талымһыҙ түгел икән үҙе. Биҙәкле пар күнәген көйәнтәләп, Кесе инәйем һыуҙан ҡайтты. Бәләкәй ҡапҡа ябылып бөтмәй ҡалды. Минең Кесе инәйем ишек-ҡапҡаны гел шулай ябып бөтөрмәй. Атайым уға: «Артыңа ҡулың етмәй», – ти.

Быҙау, һөлгөнө сәйнәй-сәйнәй, лапаҫ аҫтына инеп китте. Тышта хәҙер ҡыймылдаған да нәмә юҡ. Буш ихатаға ҡарап, күҙем тала башланы.

Бәләкәй ҡапҡа шар асылып китте. Тәүҙә Мортаза ағайым күренде. Унан ап-аҡ ат килеп инде. Атлап түгел, бейеп инде. Ағайым уның теҙгенен ҡыҫҡа ғына тотоп алған. Шулай ҙа аҡбуҙ, тәҙрә тураһына еткәс, бер тапҡыр үрәпсеп ҡуйҙы. Ятһыныуымы, ҡыуаныуымы шул булды. Бығаса ат күрмәгән шикелле, әллә нишләп киттем. Шомло ла, рәхәт тә миңә. Ергә баҫып килмәне ул, күктән осоп төштө. Оло инәйем һөйләгән әкиәттәге шикелле. Ағайым ҡалай таҫыллы баһадир икән, тегенең теҙгенен ныҡ эләктереп алған. Аттың килеп инеүе булды, бөтә нәмә яҡтылыҡҡа сумды, уның ҡуйы оҙон ҡойроғонан, туҙғаҡ ялынан, әйтерһең, ап-аҡ нурҙар ергә ағыла. Мин хайран ҡалдым. Мин сихырландым. Юрғанымды атып ташлап, тышҡа йүгерҙем. Мин сыҡмаһам, кире осоп китер тип, ҡотом ҡалманы. Күтәрмәлә мине Оло инәйем күтәреп алды: «Иҫәр, торорға яраймы ни һиңә? Өҙләгерһөң бит», – ти.

– Өҙләкмәйем! Өҙләкмәйем! – тип сарбайланым. Келәт яғынан атайым да килеп етте.

Ихата уртаһында, аттың ялын һыйпай-һыйпай, ағайым йылмайып тора.

– Төклө аяғың менән килеп ин, малҡай... – тине атайым, аҡбуҙҙың яңағынан һөйҙө. – Яңы төйәктә тәү тапҡыр һыртына сабый тәне ҡағылһын. – Ул Оло инәйем ҡулынан мине тиҙ генә эләктереп алды ла атҡа атландырҙы.

– Сырхау баланы яфаламаһаң шулай...

– Ат өҫтөндә сирле егеттәр ҙә һауыға ул. Ат шауҡымы шифалы.

Баяғыса шомло ла, рәхәт тә миңә. Юҡ, шомдар таралды, рәхәте генә тороп ҡалды. Хайуан тәненең йылыһын һиҙәм. Был йылылыҡтың тылсымынан йөрәгем талпына, еңелсә генә башым әйләнә. Өнөм төшкә күсә. Ә төшө күреп туйғыһыҙ: ҡанатлы толпар мине күктәргә ашыра...

Шулай итеп керҙе беҙҙең ҡураға, беҙҙең донъяға ат сифатындағы илаһи бер йән.

Үҫә төшкәс, мин шуны белдем: ул яҙҙы беҙҙең ауыл ирҙәре, кескәй генә бер артель булып, Урал яғына ат һатып алырға барғандар. Атайым, тәүәккәлләп, күршебеҙ сулаҡ Хәтипйәнгә эйәртеп, ун һигеҙ йәшлек Мортаза ағайымды ебәргән. Хәтипйән менән ағайым бер төрлө үк хаҡҡа ике ат алғандар. Береһе ерән байтал, икенсеһе ошо ап-аҡ дүнән булған. Ғәҙел йәнле Хәтипйән үҙенә оҡшаған малды былай ғына алмаған. Мортаза ағайым менән шыбаға тотҡандар. Өҫкә сыҡҡанға аҡ айғыр тейгән. Беҙҙең бәхеткә. Шундай һомғол, сапсан, нескә күңелле, ғорур зат булып сыҡты дүнәнебеҙ. Исемен, төҫөнә ҡарап-тыр инде, Аҡсал тип ҡуштылар. Шуны ла әйтеп үтәйем, күршебеҙ Хәтипйән дә ерән бейәһенән зарланманы. Йылдам уҡ булмаһа ла, күндәм булды. Ике йыуаш пар килде.

Мин бына ошо Аҡсалдың һыртында ун ике йәшемә тиклем йөрөнөм, йәғни көн иттем. Тәненә сыбыртҡы-ҡамсы тейҙертмәне ул. Ғәрсел булды. Бер саҡ туғайға ҡуна барышлай малайҙар менән уҙышҡанда, тышау һелтәп, абайламаҫтан атымдың осаһына тейҙерҙем. Теге ҡапыл ситкә тайпылып, мине ергә ҡолатты. Өҫтөмдә ҡалын көпө ине. Имгәнмәнем. Шулай ҙа һыным ҡатып, бер яҙ яттым. Аҡсал кире боролоп минең эргәмә килгән дә башын сайҡап тора, әйтерһең, битәрләй: «Миңә шулай ҡул тейҙереүеңде көтмәгәйнем. Рәнйеттең», – ти. Минең дә уға хәтерем ҡалды. Ныҡлап ҡалды, һуғам тип һелтәмәнем дә инде. Яңылыш ҡына тейҙе. Хәл кергәс тә, күҙҙәремде йомоп, байтаҡ заман ҡуҙғалмай яттым. Әйҙә, мине ни көнгә төшөргәнен күреп, үкенһен, эсе әрнеһен әле, тим. Бер мәл мороно менән мине төрткөләргә тотонмаҫмы теге. Мин ҡымшанмайым да. Аптырағас, атым көпөмдән тешләп тартҡылай башланы. Шунан ғына аяҡ үрә баҫтым. Аҡсал минең яурыныма матур ҡаҡ башын һалды. Мин уның маңлайынан һыйпаным. Малҡайымдың моңһоу ике күҙенән ике бөртөк йәш тәгәрәне. Ат күҙендә йәш күреп, мин ҡойолоп төштөм...

Мин ҡуна барғанда йыш ҡына ике ат менән йөрөйөм. Икенсеһе – оло башлы һоро алашабыҙ. Үҙе үшән, моңһоҙ, үҙе сиктән сыҡҡан тиҫкәре. Тамаҡҡа талымһыҙ тип кенә аҫрайбыҙ инде. Иртә таңда, ҡайтыр мәлде һиҙеп, Аҡсал беҙ ятҡан ҡыуыш эргәһенә үҙе килә, теге ғибрәтте эҙләй-эҙләй аяҡтарым ҡалмай. Етмәһә, томан баҫҡан берәй соҡор эсенә төшөп ятҡан була. Ә бына Аҡсал менән Кесе инәйемдең ятып торғанын күргәнем дә юҡ. Улар һәр саҡ аяҡ өҫтөндәләр. Үшән һоро алашабыҙ Түбән остоң хөрәсән ялҡауы Бәҫәргән Миңлеәхмәт һыңары. Миңлеәхмәт бит йоҡлай-йоҡлай бәҫәреп бөткән. Шуға күрә янмай ҙа, туңмай ҙа. Аттың да, кешенең дә йүнһеҙе бер иш уның. Быныһын мин белеп, һынап әйтәм.

Ә яҡшы аттар менән затлы ҡатындарҙың бер рухтан яралыуы тураһында мин ғүмер баҡый тылҡыйым. Юҡ, бәғзе ҡатындарҙың яҡшы нәҫел-нәсәбе тураһында ғына әйтмәйем. Хәйер, нәҫел дәрәжәһе үҙе бер бәрәкәт: тамыры баҡыр ағастың сатыры алтын булмаҫ. Әммә шундай ҡатындар килә был донъяға, уларҙың яралыуында, бар булыуында илаһи көстөң, илаһи уттың ҡатнашы күҙгә бәрелеп тора. Улар иң бейектә саҡта ла ерҙән айырылмайҙар, иң түбәнгә төшкәндә лә түбәнлеккә төшмәйҙәр, хурлыҡҡа батмайҙар, юғалтыуҙар кисергәндә, юғалып ҡалмайҙар, ҡайғылар күргәндә, шартлап һынмайҙар; уларҙы хатта аслыҡ-яланғаслыҡ та кәмһетә алмай, сибәрлектәренә ҡағылырға ҡартлыҡ үҙе тартына. Илһамланған миҙгелдәремдә миңә Аҡйондоҙҙо төҫмөрләткән Гөлзәбирә еңгәмде уйлайым. Йәнә йылдар монары аша үткән һирәк-һаяҡ бүтән һындар алдыма, эргәмә килеп баҫа. Заманалар алмашыныуы, әҙәп-әхлаҡтарҙың үҙгәреүе, изгелек менән яуызлыҡ алыштары, оло фажиғәләр, ваҡ ығы-зығылар уларға ҡағылмай. Күп хәҡиҡәттәрҙе инҡар итеп, күп ҡанундарҙы юҡҡа сығарып, тәкәббер хакимдарҙы тәхеттәренән ҡолатып була икән. Ә бындай ҡатындарҙы инҡар итеп тә, юҡҡа сығарып та, тәхеттән ҡолатып та булмай. Йөҙ йыл әүәл, мең йыл әүәл, ун мең йыл әүәл нисек йәшәгәндәр, шулай йәшәй бирәләр. Сөнки улар – даһиҙар.

Аҡсалды мин ниндәй генә хәлдәрҙә күрмәнем. Һоро алаша менән икеһен егеп һабан һөргәндә, тырыша торғас, бер күлемгәсә[1] аҡ күбеккә, киске яҡҡа ҡара тиргә бата, теге ялҡау ыжламай ҙа. Миңрәү булһа ла хәйләкәр. Ағайым һабан һабы тота, мин ат әйҙәйем. Ләкин күпме тырышһам да, оло башты рәтләп тыңлата алмайым, һайтлауға ла ҡолаҡ һалмай, сыбыртҡыға ла иҫе китмәй, баҫайыммы-баҫмайыммы тигәндәй, бураҙнанан саҡ атлай. Ҡайтҡанда, ағайым менгән Аҡсал ваҡ-ваҡ баҫып бейергә керешә, минең алашам, бышҡырып, ике тарафтан да тын сығара-сығара арттан һөйрәлә. Уның һыртында ултырыу оят белгән кеше өсөн үҙе бер мәсхәрә.

Тыумышы менән Аҡсал тикәй көндө эш аты, байрам көндө байрам толпары ине. Йонсоу оҙон юлдарҙа арыуталыу белдермәне, ҡаты бурандарҙа эҙҙән яҙманы, күпме йөк тейәһәләр, шуны тартты, күпме нығ ҡыуһалар, шул тиклем йылдамыраҡ барҙы. Йәне ярылып сығыр саҡтарҙа ла һынатманы, йәнәһе, уның ни бары тире генә атылып сыҡҡан…

Ә байрамдарҙы ул нисектер алдан һиҙә ине. Бына мин күтәрмәлә баҫып торам. Мортаза ағайым Аҡсалдың ап-аҡ итеп йыуылған, таҙартылған, йылҡылдап торған һыртына дүрткә ҡатланған семәрле балаҫ йәйҙе, балаҫ өҫтөнә еҙ тәңкәләр менән биҙәлгән күн эйәр һалды, айылдарын тартты. Баянан бирле, дәртенә сыҙай алмай, башын сайҡап торған айғыр, һыртына эйәр тейгәс, оторо ирегеп китте, ер тырнарға кереште. Әсе кешнәп ебәрҙе. Ағайымдың осоп эйәргә ҡуныуы булды, Аҡсал үҙе генә белгән таҡмаҡҡа бейей ҙә башланы. Бейер ҙә шул. Ҡара Яҡуп һабантуйына китәләр бит улар. Ағайым менән икәүһе.

– Ҡара уны, Мортаза, сәмләнеп китеп, бәйгегә ынтылаһы булма. Ишетһен ҡолағың. Рөхсәт юҡ! – тине атайым.

Тиҙ ярһыусан шул айғырыбыҙ. Йә көстән тайыр, йә бөтөнләй яныр, тип бәйгегә бер тапҡыр ҙа ебәрмәнек. Ә минең ысын ярышта сапҡым килә ине.

---

[1] *Күлемгәсә* – күлем: ҡыр эштәрендә бер ял иткәндән икенсе ялға тиклемге ваҡыт; бер һыуһын йәки бер тына эшләп алыу.

Йылдан-йыл нәҫел-ырыуға, күрше-күләнгә килен төшөргәндә кейәү менән кәләш кырандасына Сәмиғулла еҙнәмдең тимер күк бейәһе менән Аҡсалды парлап егәләр. Тимер күк – төптә. Аҡсал – мисәүҙә. Икеһенең дә ҡойроҡ-ялдарын аллы-гөллө таҫмалар менән биҙәйҙәр, ҡолаҡтарына ҡайыған суҡлы ҡулъяулыҡтар тағалар. Дуғала эреле-ваҡлы өс еҙ ҡыңғырау сыңлай, затлы ҡайыш-сбруйҙарҙың баҡыр биҙәктәре йымылдап тора. Кырандасҡа тәүҙә кейәү менән кейәү егете менеп ултыра. Мортаза ағайым кузлаға саҡ һикереп өлгөрә, пар ат алға ынтыла. Тимер күк, бәлки, йыбаныр ҙа ине. Ул сабырыраҡ мал. Аҡсал уны үҙ дәрте менән шулай ҡапыл тоҡандыра. Кәләш артынан күрше йортҡа, күрше урамға баралармы, әллә егерме-утыҙ саҡрымдағы сит ауылға китәләрме – килен төшөрөү ғәҙәтен еренә еткереп башҡара беҙҙең келәштәр. Ҡоҙа-ҡоҙағый, егет-елән, туғантыумаса тейәлгән биш-алты кырандас һәм арба теҙелешеп, ауыл буйлап елдерә. Кемдер шунда әсе иттереп һыҙғырып ебәрә. Тамаша башлана. Килен күрше-күләндән генә булһа ла, барыбер бөтә ғаләмде аяҡҡа баҫтырып, саң болоттары борҡотоп, Келәштең бөтә урамдарын урап сығалар. Фарсит итеп ҡалалар.

Ялынан ҡойроғона тиклем биҙәлгән ҡупшы Аҡсалдың мисәүҙә нисек барғанын күрһәгеҙ ине. Берсә ул үҙенең матур башын, наҙланып, ҡырын һала, берсә уны ғорур күккә сөйә, берсә, сайҡап, үҙ ялын үҙе туҙҙыра. Тояҡтары иһә ергә тейеп-тейеп кенә ҡала. Ырғып сапмай ул, елдереп кенә бара. Йүгәне лә, ҡамыты ла, ыңғырсағы ла, ышлыяһы ла нисек килешә уға. Ҡойған да ҡуйған. Бәғзе кешегә бына шулай кейем килешә бит...

1931 йылда беҙ айырылыштыҡ. Тәндәребеҙ түгел, йәндәребеҙ айырылышты. Атайым Аҡсалды колхоз көтөүенә илтеп ҡушты. Тәүге мәлдәрҙә бик күптәрҙең аттары кире ҡайтып ыҙаланы. Былтыр башҡа сыҡҡанда Мортаза ағайыма тейгән һоро алаша көндөң көнө ҡаса ла килә. Иртә тимәй, кис тимәй. Аҡсал иһә ете йыл ғүмер иткән төйәгенә әйләнеп тә ҡараманы, өйөбөҙ тирәһенән үтергә тура килгәндә, башын хатта ситкә борҙо. Үҙ аттарына һыныҡ-

мыныҡ ҡаптырырға йөрөгән малайҙарға эйәреп, аттар аҙбарына мин дә бер тапҡыр барҙым. Усымдағы ризыҡты хайуаным теләр-теләмәҫ кенә алды. Тамаҡ ялғар өсөн түгел, әҙәп һаҡлап ҡына эшләне булыр быны. Сөнки рәхмәт белдереүҙең әҫәрен дә һиҙмәнем. Ә бит әүәл бәләкәс кенә бер һыныҡ өсөн ҡыуанып, ҡулды ялай-ялай биш төрлө рәхмәт яуҙыра ине. Ә хәҙер... Йортонан айырғаныбыҙ өсөн беҙгә үтә үпкәләне, үтә рәнйене булыр Аҡсал. Беҙҙән күҙе биҙҙе, күңеле ҡайтты. Нескә күңелле ғорур зат хыянатты ғәфү итмәне. Былай ҡарағанда артыҡ бойоғоп, мәлйерәп төшмәне. Сер бирмәне. Әммә беҙҙән ваз кисте. Мин үҙем дә уның күҙенә күренергә тартына, ояла башланым. Аҡсалдың ҡылығы тураһында Оло инәйемә һөйләгәйнем, ул былай тине: «Бөтәбеҙ ҙә бер Тәңре мәхлүктәре, тере йән эйәләребеҙ. Рәнйеүе лә ихтимал, Хоҙай әшкәртһә...»

Ул саҡта был һүҙҙең мәғәнәһен аңлап еткермәнем, ә тылсымын һиҙҙем.

Аҡсалдың донъя ҡуйыуы үҙәк өҙгөс аяныслы булды. Иҫемә төшкән һайын хәсрәтем яңыра.

1934 йылдың март аҙаҡтары ине, буғай. Юлдар өҙөлгән саҡ ине. Ни арба, ни сана. Бригадир, кистән килеп, атайыма әйтеп китте: «Биш ат менән иртә таңда Шишмәгә бойҙай орлоғона китергә кәрәк. Һүҙемде йыҡма инде, ағай. Тейәр-бушатыр кешеләр һинән башҡа ла бар. Күҙ-колаҡ ҡына булырһың». Төндә атайымдың биле ҡуҙғалды. Шуға күрә мин киттем.

Алыҫ юлға сыҡҡанда йәки ауыр йөк ташығанда кешеләр элекке аттарын екмәҫкә тырыша ине. Үҙ атың ҡыҙғаныс, ҡағып-һуғырға ҡул бармай. Ә сит малды кем аяһын...

Тоҡтарҙы тейәп, Шишмәнән ҡайтырға сыҡтыҡ. Иң алда Аҡсалды әйҙәп алабарман Хәлфетдин бара, уның артынан мин, минең арттан тағы өс сана килә. Ҡара Яҡупҡа тиклем ара – уйпат ер, юлда әле ҡар ҙа иреп, боҙ ҙа муртланып бөтмәгән. Ырамлы ғына киләбеҙ. Көн үҙәгендә Димгә еттек. Боҙ өҫтөндә һыу күренә башлаған икән. Иртәнге һыуыҡта һиҙелмәй ине әле. Хәҙер ат бәкәленә етә. Шулай ҙа йылғаны имен уҙҙыҡ. Ҡара Яҡупты

сығып, Үгеҙ үрен күтәрелгәндә аттар нығ йонсоно. Сана эҙенән ҡара йылғасыҡтар юл ярып аға. Етмәһә, Аҡсал егелгән сананың табандары тимерле. Урыны-урыны менән уның эҙҙәре ҡара балсыҡты ялтыратып, һыҙылып ҡала. Үрҙең яртыһын менеүгә бер атыбыҙ бөтөнләй хәлдән тайҙы. Уның йөгөн дүрт санаға бүлеп һалдыҡ. Өсәүһенә берәр тоҡ тейҙе, Аҡсалға икәү әләкте. Намыҫсан хайуан ҡарышманы, һаман юлында булды, дәртләндереп бүтәндәрҙе эйәртте. Ярты юлды уҙғас, туҡталып аттарҙы тын алдырҙыҡ.

Кискә табан ғына Назиязға килеп төртөлдөк, һаҙлыҡ араһынан ағып ятҡан был йылғасыҡ яман мәкерле. Йәйен-ҡышын ситтәре гел күтер уның. Көн йөҙөндә Назияздың ярҙары нығ ҡына бәлтерәгән икән. Әммә алабарман Хәлфетдин санаға менеп баҫты ла, уны-быны ҡарамай, һайтлап атына сыбыртҡы менән һуҡты. Бер аҙым киңлегендәге генә болғансыҡ ағымды аша һикерәм тип, Аҡсал алға ынтылды, алғы тояҡтары менән теге ярҙы әләктереп алды, тик арт һаны йылғала тороп ҡалды. Хәлфетдин, әшәке һүгенеп, ҡайыш сыбыртҡы менән тегене ярырға кереште. Минең йөрәгем туҡталып, тыным ҡыҫылды, ҡысҡырырға тауышым юҡ. Ҡолағымда тик сыбыртҡы шыйылдауы ғына: шый... шый... шый... Ат, йән асыуы менән үрәпсеп, тағы алға ташланды. Сана урынынан ҡуҙғалып, үрәсәһе менән күтерле ярға килеп төртөлдө. Шул саҡ өмөтһөҙлөктөң сигенә еткән айғыр, әллә ниндәй ғазаплы, зарлы тауыш сығарып, кешнәп ебәрҙе. Кешнәне лә муйынын күккә һондо. Күтәргән башын түбән эймәй, ҡапыл һул яғына ҡоланы. Шартлап ике тәртә бер юлы һынды. Мин билдән күтергә батып, Аҡсалдың сөйөлдөрөгөн сисәйем дә ҡамытын бушатайым тип, теге ярға ташландым.

Сөйөлдөрөк сисеүҙең хәжәте ҡалмағайны инде. Хайуандың аҡ тештәре араһынан ҡан һарҡып сыҡты. Леп итеп ике күҙе берсә һүнде. Тештәрен нығ ҡыҫҡайны. Мин ауыҙын аса алманым. Ниңә асырға кәрәк булғандыр инде? Уға бит яңынан йән өрөп булмай... Ошо мәхлүктең фажиғәле әжәлен иҫкә төшөргәндә, үҙ тәҡдирем күҙ

алдыма килгәндәй булды. Ҡанһыҙ хәлфетдиндәр мине лә шулай йөгөм-нием менән берәр һаҙлыҡҡа килтереп батырырҙар ҙа ҡамсылар менән ярырға керешерҙәр. Теге йонсоған, ас Хәлфетдин, бахыр, ошо ҡылыҡты үртәлеүҙән, йәне әрнеүҙән ҡылғандыр. Шулай булғандыр. Ә был хәлфетдиндәр уны үстәре ҡаныуҙан рәхәт сигеп эшләйәсәктәр. Мин, хәлемдән килеп, һуңғы минутымда, Аҡсал һымаҡ, бер үрәпсей алырмынмы икән?..

...Аҡсал минең рухыма дүрт аяҡлы януар булып түгел, аңлы йән эйәһе булып керҙе. Бик ауыр саҡтарымда иң яратҡан, иң ышаныслы кешеләрҙе уйлағанда, Аҡсалды хәтеремә алам. Ыҙаланған күңелемә таяныс була...

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Аҡсал менән малайҙың (хикәйәләүсенең) осрашыуын текстҡа яҡын итеп һөйләп бирегеҙ.
**2.** Төркөмдәргә бүленеп, Аҡсал тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ.
**3.** Хикәйәләүсенең телмәре матур, тәрән мәғәнәле. Быны текстан миҫалдар табып нигеҙләгеҙ.
**4.** Әҫәрҙең һуңғы абзацын яңынан уҡып сығығыҙ. Ни өсөн автор «иң яратҡан, иң ышаныслы кешеләрҙе уйлағанда» Аҡсалды хәтеренә төшөрә? Ошо хәлгә бәйле уй-фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.

*Михаил ШОЛОХОВ**

## КЕШЕ ЯҘМЫШЫ

*(Хикәйә)*

Һуғыштан һуңғы тәүге яҙ Үрге Дон тарафтарына ҡапыл һәм дәррәү килде. Март аҙаҡтарына Азов буйынан йылы елдәр иҫеп, Дондың һул ярындағы ҡомлоҡтар ике тәүлек эсендә тотош яланғасланып ҡалды, далалағы уйһыулыҡта һәм ҡыраздарҙа баҫылып ятҡан ҡарҙар күпсене, боҙҙарын ватып, йылғалар ҡотороноп аҡты һәм юлдар бөтөнләй тиерлек йөрөп булмаҫлыҡ хәлгә килде.

Шундай алама бер мәлдә миңә Букановская станицаһына юл төштө. Алыҫ ара түгел дә – алтмышлап километр ғына – мәгәр уны үтеү бигүк анһат булманы. Иптәшем менән ҡояш ҡалҡмаҫ борон ҡуҙғалып киткәйнек. Көр генә пар ат, мисәү бауҙарын ҡылдай тарттырып, ауырайған бричка-арбаны саҡ-саҡ һөйрәй, тәгәрмәстәр ҡар һәм боҙ ҡатыш еүеш ҡомға көпсөктәренәсә батып бара. Берәй

---

* **Михаил Александрович Шолохов** (1905–1984) – бөйөк рус совет яҙыусыһы, киносценарист, Нобель, Ленин премиялары лауреаты.

Хәҙерге Ростов өлкәһе Вёшенская станицаһында тыуған. Бөтә ғүмере буйы тиерлек тыуған төбәгендә йәшәй һәм ижад итә.

Уның «Тымыҡ Дон», «Күтәрелгән сиҙәм», «Улар Тыуған ил өсөн көрәште» романдары, «Кеше яҙмышы» хикәйәһе буйынса бөтә донъяға билдәле кинофильмдар төшөрөлдө.

Михаил Шолохов – ике тапҡыр Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ булған берҙән-бер яҙыусы.

сәғәттән аттарҙың янбаштарында, ял төптәрендә һәм йоҡа шлея ҡайыштары аҫтында аҡ күбектәр күперенә башланы. Иртәнге саф һауала ҡырҡыу, иҫерткес йылҡы тире һәм сбруйҙарға мул һөртөлгән дегет еҫе аңҡый.

Аттарға бигерәк ҡыйын ерҙәрҙә, арбанан төшөп, йәйәүләнек. Табан аҫтарында епшек ҡар шырҡылдай, атлауға ауыр, ә юл ситләп, ҡояшта гәлсәрҙәй ялтырап ятҡан йоҡа боҙлауыҡтан барыу уғата ыҙалыраҡ. Алты сәғәт самаһы йонсоғас ҡына, утыҙ километр араны үтеп, Еланка йылғасығы кисеүенә саҡ етелде.

Йәйҙәрен урыны менән ҡорой торған был йылғасыҡ Моховский хуторы тапҡырындағы ерек үҫкән туғайға километрҙай киңлеккә йәйелгән. Аръяҡҡа өс кешенән артыҡты күтәрмәҫтәй төбө яҫы, бик иҫке кәмәлә сығырға кәрәк. Аттарҙы ебәрҙек. Теге яҡта беҙҙе колхоз һарайында, ҡыш уҡ үҙебеҙ ҡалдырып киткән, күпте күргән иҫке «виллис» көтә. Шофёр менән туҙып бөткән әлеге кәмәгә шөрләй биреберәк ултырҙыҡ. Юлдашым әйберҙәр менән яр буйында ҡалды. Ярҙан ҡуҙғалып та киттек, сереп иҙрәгән кәмә төбөнән ваҡ-ваҡ фонтан һымаҡ һыу бәрә башланы. Беҙ был йүнһеҙ ялғаш тишектәрен ҡул аҫтындағы юҡ-бар менән тыҡҡылап, кергән һыуҙы һоҫа-түгә барҙыҡ. Бер сәғәттән генә Еланканың теге яғында инек. Шофёр хуторҙан машинала килде лә, кәмәгә кереп, ишкәккә йәбеште.

– Был ҡәһәр һуҡҡан ялғаш һыуға тарҡалып ҡуймаһа, ике сәғәттән әйләнеп килербеҙ, – тине ул. – Шунан иртәрәк көтмәгеҙ ҙә…

Хутор шаҡтай йыраҡ ятҡанлыҡтан, кәмә бәйләй торған урында көҙ аҙағынараҡ кеше йөрөмәҫ ерҙәрҙә йә тәүге яҙ көндәрендә генә була торған тәрән тынлыҡ. Йылға өҫтәренән дымлы быу ағыла һәм серегән еректәрҙең әскелтем еҫе килә, ә йыраҡтағы күкшел томанға сорналған Хопер буйы далаларынан иҫкән талғын ел ҡар ҡатламынан яңы беленеп сыҡҡан ерҙең танауға саҡ ҡына һиҙелгән, мәңге йәш хуш еҫтәрен бөркә.

Яҡындараҡ, яр буйындағы ҡом өҫтөндә, ауған ситән ята. Мин шунда терәлдем дә, тәмәке тартмаҡ булып,

һырма көпөмдөң уң кеçәһенә ҡулымды тыҡҡайным, ифрат ҙур ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, «Беломор» бөтөнләй ебегән, имеш. Йылғаны сығышлай, һыуға шаҡтай батып йөҙгән кәмә ситенән тулҡын сайпылып торғанлыҡтан, буръяҡ һыу минең бил тирәһен ҡойондорғайны шул. Тәмәке тураһында уйларға форсат теймәне, кәмә батып ҡуймаһын өсөн, ишкәкте һалып, тиҙерәк һыуҙы һирпергә кәрәк ине – хәҙер иһә шул саҡтағы үшәнлегемә йәнем көйөп, ебеп бөткән папирос ҡабын кеçәнән һаҡлыҡ менән тартып алдым да, сүкәйгән килеш, көрән төçкә кергән еүеш папиростарҙы берәм-һәрәм ситәнгә теҙә башланым.

Төш ваҡыты ине. Ҡояш май айындағы һымаҡ ҡыҙҙыра. Тәмәкем тиҙ кибер тип өмөтләндем. Ҡояш шундай ҡайнар, мин һалдат көпөһө менән һырма салбар кейеп юлға сыҡҡаныма үкенә башланым. Әле ҡышҡы һалҡындарҙан һуң тыуған ысынлап та тәүге йылы көн. Шулай, бөтөн күңелең менән һиллеккә һәм яңғыҙлыҡҡа ирәйеп, үҙең генә ситән өçтөндә ултырыу, иçкерә төшкән һалдат ҡолаҡсынын һалып, йонсоп, ишкәк ишкәндә тирләгән сәстәреңде елләтеү, зәңгәр күк йөҙөнән ағылған аҡ болоттарҙы ғәмһеҙ генә күҙәтеү рәхәт ине.

Тиҙҙән хутор ситендәге йорттан бәләкәй малай етәкләгән бер ирҙең сыҡҡаны һәм бирегә ыңғайлауы шәйләнде. Буйына күрә, малайға биш-алты йәштән артығын биреп булмаçтыр. Улар арыҡ аҙымлап кисеүгә ҡарай киләләр ине, ләкин машина тирәһенә етәрәк минең яҡҡа боролдолар. Бөкрөрәк, һонтор был кеше эргәмә еткәс, ҡарлыҡҡаныраҡ ҡалын тауыш менән:

– Ни хәл, браток! – тип иçәнләште.

Мин үҙемә һуҙылған ҙур, ҡытыршы ҡулын ҡыçтым.

– Иçәнлекме!

Ир малайға эйелеп әйтте:

– Ағай менән иçәнләш, улым. Атаҡайың кеүек, ул да шофёр, буғай. Тик беҙ һинең менән йөк машинаһын йөрөтә инек, ә ул бынау бәләкәй машинаны ҡыуа.

Күк йөҙөндәй балҡыу күҙҙәре менән миңә туп-тура ҡарап, малай саҡ ҡына йылмайҙы ла, ҡыҙарған һал-

ҡынса ҡулын ҡыйыу ғына һуҙҙы. Мин уның ҡулын йомшаҡ ҡына һелкә-һелкә:

– Нишләп былай ҡулдарың бик һыуыҡ һинең, бабай? Тышта шундай йылы, ә һин туңып бөткәнһең түгелме һуң? – тип һораным.

Малай күңелде иретерҙәй сабыйҙарса ышаныусанлыҡ менән тубыҡтарыма һыйынды ла, ғәжәпләнеп, аҡһыл нескә ҡашын күтәрҙе.

– Эй, ағай, ниндәй бабай булайым ти мин? Малай ғынамын. Мин туңманым әле. Ә ҡулдарым ҡар йомарлап уйнағанға һыуыҡ.

Атай кеше һалдат тоғон арҡаһынан һалып, арыған ҡиәфәттә эргәмә терәлде лә һөйләнеп ҡуйҙы:

– Бәлә генә шул быңдай пассажир миңә! Уның арҡаһында үҙем дә аҙымдан яҙлығам. Эрерәк атлай башланиһәң, сабырға керешә, аҙымыңды шундай пехотаға яйлап ҡара шунан. Бер атлар урынға өс атлайым. Шулай, ташбаҡа менән ат шикелле, икебеҙ ике төрлө барабыҙ. Ә үҙен гел генә күҙәтеп йөрөргә кәрәк. Аҙ ғына ситкә борол, ул инде йәйелеп торған һыуға кереп тә китә, йә булмаһа, боҙ китеп алып, кәнфит урынына имә. Юҡ, быңдай пассажирҙар менән сәйәхәт ҡылыу ирҙәр эше түгел. Йәйәүләп бит әле! – Бер аҙ һүҙһеҙ торҙо ла теге: – Ә һин, браток, начальствоңды көтәһеңме? – тип һораны.

Шофёр түгеллегемде әйтеп, юлаусының минең хаҡтағы фекерен кире ҡағырға йәпһеҙләндем.

– Көтөргә тура килә бит.

– Арғы яҡтан киләләрме?

– Эйе.

– Ә һин белмәйһеңме, кәмә тиҙ сығыр микән?

– Ике сәғәттән.

– Ап-аруҡ икән шул. Ни хәл итәһең, бер аҙ ял алырбыҙ, әллә ҡайҙа ашығыр ерем юҡ. Уҙып та китер инем, ләкин күрәм: үҙебеҙҙең кеше – шофёр ҡыҙынып ята. Булмаһа, мин әйтәм, барайым әле янына, бергәләп тәмәке көйрәтербеҙ, тим. Яңғыҙ башыңа тәмәке тартыу ҙа, үлеүең дә әллә нисек бит ул. Ә һин хәлле икән, папирос ҡына төтәтәһең. Һыуланың, тимәк? Эх, брат, ебегән тәмәке

ҡазаланған ат һымаҡ ул, бер нәмәгә ярамай. Әйҙә, минекен тартайыҡ, хәтәр ҡаты нәмәкәйҙе.

Ул йәшкелт йәйге һалдат салбары кеҫәһенән бөгәрләп төргән һәм ярайһы туҙған сейәләй ҡыҙыл ебәк янсыҡ сығарҙы ла сисеп ебәрҙе. Мин янсыҡтың бер мөйөшөнә сигелгән «Ҡәҙерле боецҡа Лебедянская урта мәктәбенең 6-сы класта уҡыусы ҡыҙҙан» тигән яҙыуҙы уҡып өлгөрҙөм.

Бик ҡаты «самосад» төрөп, оҙаҡ ҡына һүҙһеҙ ултырҙыҡ. Мин был малай менән ҡайҙа барыуын, уларҙы ошондай өҙәремдә йөрөргә ниндәй нужа ҡушҡанын һорашмаҡсы инем, ул минән элегерәк һорау бирҙе:

– Һин нимә, тотош һуғышты баранка тотоп үткәрҙеңме?

– Шулайыраҡ булды шул.

– Фронттамы?

– Эйе.

– Миңә лә, браток, ғазапҡа муйындан, хатта тәрәнерәк тә батырға тура килде унда.

Ул ҡарағусҡыл ҙур ҡулдарын тубығы өҫтөнә ҡуйҙы, бөкрәйә төштө. Мин уға ҡарап алдым, һәм шул ваҡыт әллә нишләп киттем... Ҡасан да булһа көл һипкәндәй тоноп ҡалған һәм тормоштан төңөлгән күҙҙәрҙе осратҡанығыҙ бармы? Ундай күҙҙәргә ҡарау, ай-һай, ауыр. Миңә осраҡлы рәүештә әңгәмәләшергә насип иткән әлеге кешенең күҙҙәре лә шундай хәсрәтле вә һағышлы ине.

Ситәндән ҡороған бер кәкре сыбыҡ һындырып алды ла был, шуның осо менән ҡомға хикмәтле һындар һыҙғылап, бер минуттай өнһөҙ ултырғас, һүҙен дауам итте.

– Ҡай саҡ төнө буйы йоҡлай алмай, буш күҙҙәрең менән ҡараңғыға текләйһең дә: «Ни өсөн һин, тормош, мине шул ҡәҙәр имгәттең? Ниңә шулай ғазапланың?» – тип уйлап ятаһың. Ә был һорауға ҡараңғыла ла, көн яҡтыһында ла яуап юҡ. Юҡ та, булмаҫ та! – Шунда иҫенә килеп, кескәй улын ипләп кенә бер ситкәрәк этәрҙе: – Бар, һөйөклөм, бер аҙ һыу буйында уйнап ал, оло һыуҙа бала-саға ниндәй ҙә табышҡа юлығыусан. Тик абай йөрө, аяғыңды сылата күрмә!

* * *

Һүҙһеҙ генә тәмәке быҫҡытып ултырғанда уҡ һиҙҙермәйсә генә атаһы менән малайына күҙ төшөргөләнем һәм үҙемә сәйер тойолған бер нәмәгә эстән ғәжәпләнгәйнем. Малайҙың өҫ-башы ябай, ләкин арыу ине: шаҡтай иҫкергән, еңел, һарыҡ тиреһе менән ҡаймалы оҙон пинжәгенең таман килешеп тороуы ла, ҡыҫҡа итектәренең йылы ойоҡбаш менән кейерлек итеп тегелеүе лә, ҡасандыр йыртылған еңенең бик оҫта ямап ҡуйылғанлығы ла – һәммәһендә лә ҡатын-ҡыҙ ҡулы, әсә ҡайғыртыуы һиҙелеп тора. Ә атаһы бөтөнләй башҡа: һырма курткаһының ут төшөп тишкән ерҙәре йәмһеҙ итеп унан-бынан ғына ҡоршалған, туҙған салбарының ямауҙары тейешенсә ятмаған, ә ирҙәрсә эре-эре йөйҙәр менән әләктереп кенә ҡуйылған, аяғындағы һалдат ботинкаһы яңы кеүек тә, тик бәйләнгән ойоҡтарын көйә кимергән – уларға ҡатын-ҡыҙ ҡулы теймәгән. Мин шундуҡ: «Йә буйҙаҡтыр, йә ҡатыны менән татыу йәшәмәйҙер был», – тип уйлап та ҡуйғайным.

Бына ул малайҙың ситкәрәк китеүен күргәс, шым ғына тамаҡ ҡырып, яңынан һүҙ башланы, ә мин уны ихлас тыңлап торҙом.

– Тәүҙәрәк тормошом ҡәҙимге барҙы. Мин үҙем Воронеж губернаһынан, мең дә туғыҙ йөҙөнсө йылғы. Граждандар һуғышында Ҡыҙыл Армияның Киквидзе дивизияһында хеҙмәт иттем. Егерме икенсе йылғы аслыҡта Кубангә барып, шунда кулактарға ялланып, ишәк урынына эшләнем. Шуның арҡаһында ғына иҫән дә ҡалдым. Ә өйҙә ата-әсәйем, һеңлем астан үлгән. Бер үҙем ҡалдым. Туғандарҙан бер кемем дә юҡ ине. Бер йылдан һуң, Кубандән ҡайтып, өйҙө һаттым да Воронежға кире киттем. Тәүҙә балта оҫталары артелендә эшләнем, шунан заводҡа күсеп, слесарлыҡҡа өйрәндем. Бер аҙҙан өйләнеп ебәрҙем. Балалар йортонда үҫкән бер етем ине ҡатыным. Һәйбәт ҡыҙ тура килде! Үҙе аҡыллы, күңелсәк, күндәм ҡатын, минең ише түгел. Мохтажлыҡты бала саҡтан татыған йән ине, бәлки, холҡона шул да тәьҫир иткәндер. Үҙе былай, ситтән ҡарап тороуға, әллә ни күркле лә түгел, ә мин бит уға ситтән түгел, ә тура ҡарай инем. Минең өсөн

ер йөҙөндә унан матур, унан да һөйөклөрәк бүтән берәү ҙә юҡ һәм табылмаҫ та!

Эштән арып ҡайтаһың, ә ҡай саҡ тамам йәнең көйөп. Юҡ, ул дорфа һүҙгә бер ҡасан да тупаҫ яуап ҡайтармай. Шундай яғымлы, шундай баҫалҡы. Ҡайҙа ултыртырға белмәй, аҙ ғына ризыҡтан да тәмлекәс әҙерләргә тырыша. Ҡарап-ҡарап тораһың да, асыуҙарың осоп бөтә, ә бер аҙҙан үҙен ҡосаҡҡа алаһың да: «Ғәфү ит, Ирина йәнем, һине рәнйеттем. Беләһеңме, эштең бер ҙә йүне булманы бөгөн», – тиһең. Татыулашабыҙ, йәнә йән тыныслана. Ә һин беләһеңме, брат, эшкә был нисек йоғонто яһай? Иртәгеһенә елкенеп тораһың да заводҡа еләһең, унда теләһә ниндәй эш ҡулыңдан килә. Тормош юлдашың – аҡыллы ҡатын бына шулай була ул!

Оҙаҡламай бер-бер артлы балалар тыуа башланы. Тәүҙә улым, бер нисә йылдан ике ҡыҙым донъяға килде. Шунда инде әшнәләр менән араны ла өҙҙөм. Бар аҡсаны өйгә алып ҡайтам, ғаиләм ишәйеп китте, эсергә форсат тәтемәй. Ял көнө бер көрөшкә һыра һемерәм дә – вәссәләм.

Егерме туғыҙынсы йылда мине машиналар әүрәтте. Автомобиль эштәренә өйрәнеп, йөк машинаһының баранкаһына ултырҙым, һуңынан шуға эйәләшеп алғас, заводҡа ҡайтҡым да килмәне. Руль артында күңеллерәк тойолдо. Шул рәүештә ун йыл йәшәнем һәм ул йылдарҙың нисек үтеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым. Нимә ул ун йыл! Оло йәштәге берәй әҙәмдән, ғүмереңдең нисек уҙғанын һиҙҙеңме, тип һорап ҡара әле. Һис тә һиҙмәгән була! Үткән ғүмер – ана теге йыраҡтағы томанһыу дала шикелле ул. Иртәнсәк үткәндә тирә-яҡ ап-асыҡ күренә ине, егермеләп километр атлағайным, уны инде томан ялмап алды, хәҙер бынан тороп урманды әрәмәнән, баҫыуҙы бесәнлектән айырыу ауыр...

Әлеге ун йылды көн-төн эшләнем. Аҡсаһы арыу әләкте, шуға бер кемдән дә кәм-хур торманыҡ. Балалар ҙа ҡыуандырҙы: өсөһө лә «бишле»гә генә уҡый, ә малайым Анатолий математикаға бик һәләтле булып сыҡты, хатта үҙәк гәзиттә лә яҙҙылар. Был фәнгә ғәләмәт талант ҡайҙан килгәндер уға, уныһын, браток, үҙем дә белмәйем.

Был минең өсөн ҙур һөйөнөс булды, улым менән маһая инем, ай-һай, ҡупая торғайным!

Ун йыл эсендә аҙмы-күпме аҡса йыйып, һуғыш алдынан ғына ике бүлмәле, соланлы һәм коридорлы ыҡсым йорт һалып индек. Ирина ике кәзә һатып алды. Бүтән ни кәрәк? Балалар һөтләп бутҡа ашай, баш өҫтөндә түбәбеҙ бар, өҫ тә бөтөн, тамаҡ та туҡ, тимәк, барыһы ла яҡшы. Тик йорт урыны ғына яйһыҙыраҡ ергә тура килде. Миңә авиазавод эргәһенән генә алты сутый бүлгәйнеләр. Йортом башҡа тарафта булһа, бәлки, тормошом да бүтәнсәрәк барыр ине лә…

Һуғыш башланып китте. Икенсе көнөнә – военкоматтан – повестка, ә өсөнсө көнө – әйҙә, эшелонға. Дүртәүләп: Ирина, Анатолий, ике ҡыҙым – Настенька менән Олюшка ла оҙатырға төштөләр. Балалар үҙҙәрен һәүетемсә тотто. Ҡыҙҙарҙың ғына, эйе, күҙҙәрендә йәш ялтыраштъы. Һыуыҡтан дерелдәгән шикелле, елкәләре генә һелкенгеләп ҡуйҙы Анатолийҙың, ун етеһе менән бара ине. Ә Иринам… Ун ете йыл бергә йәшәп, уның былдай сағын бер ҙә күрмәгәйнем. Ул төнө күлдәгемдең яурындары һәм күкрәксәге уның күҙ йәшенән кипмәне, иртәгеһенә лә… Вокзалға төштөк, мин иһә йәлләүҙән йөҙөнә лә ҡарай алмайым: илай-илай ирендәре күбеп бөткән, яулығы аҫтынан сәстәре туҙып сыҡҡан, күҙҙәре аҡылдан яҙған әҙәмдекеләй мәғәнәһеҙ, тоноҡ. Командирҙар посадка иғлан итә, ә ул күкрәгемә ауып, ҡулдары менән муйынға һарылды. Ҡалтырана, әйтерһең, йығылырға әҙер ағас… Балалар ҙа өгөтләп ҡарай үҙен, мин дә – файҙаһы теймәй! Башҡа бисәләр ирҙәре, уландары менән һөйләшә, ә минеке, ботаҡҡа эләгеп ҡалған япраҡ кеүек, сат йәбешкән дә, тотош кәүҙәһе ҡалтырана, әйтер һүҙен дә әйтә алмай. Мин уға: «Ирина, йәнекәйем, үҙеңде ныҡ тот! Хушлашыу өсөн берәй нәмә әйт», – тим. Шунан һүҙ һайын үкһеп: «Андрюша… бәғерем… инде беҙ… донъяла… ҡабат… күрешә… алмабыҙ…» – тимәһенме!

Уны ҡыҙғаныуҙан йөрәгем өҙгөләнә, ә ул шундай хәбәр ысҡындыра. Айырылышыу миңә лә ҡыйын икәнен, кейәү ҡоймағы ашарға бармауымды аңларға тейеш тә

бит. Ҡапыл ярһыным! Ҡулдарын муйынымдан киҫә генә ҡайырып алдым да иңбашына еңелсә генә төрттөм. Йомшаҡ ҡына ҡағылған кеүекмен, тик көс тигәнең миндә шул: ике-өс аҙым артҡа сигенде лә, ваҡ-ваҡ атлап, тағы миңә табан килә был, үҙе миңә ҡулдарын һуҙған. Мин уға: «Шулай һаубуллашалармы һуң? Ниңә мине үлмәҫ борон күмергә йыйынаһың?» – тип ҡысҡырам. Ҡабат ҡосаҡлап алдым үҙен, сөнки күрәм, ни ҡыланғанын белмәй ҙәһә...

Әңгәмәсем ярты һүҙендә туҡтап ҡалды һәм мин шул тынлыҡта уның боғаҙында нимәнеңдер ғырылдап һәм ыңҡылдап ҡуйғанын ишеттем. Ят ирҙең тулҡынланыуы миңә лә күсте. Тегеңә ҡараш ташлап алдым, тик уның, гүйә, һүнеп ҡалған, нурһыҙ күҙҙәрендә бер тамсы ла йәш шәйләмәнем. Ул башын эйеп ултыра, ҙур ҡулдары һалынып төшкән, эйәге һәм ҡыҫыҡ ирендәре генә дерелдәй...

– Кәрәкмәй, дуҫ, иҫеңә төшөрмә! – тинем мин баҫынҡы ғына, ә ул ишетмәнеме, тулҡынланыуын эске көсөргәнеш менән еңеп, ҡапыл ғына сәйер үҙгәреп киткән, ҡарлыҡҡан тауышы менән әйтте:

– Теге юлы төртөп ебәреүем өсөн һуңғы минутыма ҡәҙәр, гүргә ингәндә лә ғәфү итмәйәсәкмен үҙемде!

Ул тағы шаҡтай шымып торҙо. Тәмәке төрмәксе булғайны, гәзит ҡағыҙы йыртылып китте, тәмәкеһе тубығына һибелде. Ниһайәт, көс-хәл менән төрөп, бер нисә тапҡыр йотлоғоп һурҙы ла, ара-тирә йүткереп, хәбәрен дауам итте:

– Иринанан айырылып, ике битен аймап усланым да үбергә тотондом. Ирендәре боҙ шикелле ине. Аҙаҡ балалар менән хушлашып, йүгерҙем дә ҡуҙғала башлаған вагон баҫҡысына һикереп баҫтым. Поезд әкрен генә бара, ә миңә үҙемдекеләр тапҡырынан үтәһе бар. Күрәм, балаларым етемһерәп кенә өйөлөшкән дә миңә ҡул болғайҙар, йылмаймаҡсы итәләр, ләкин булдыра алмайҙар. Ә Ирина ҡулдарын түшенә ҡаушырған; ирендәре аҡбур ише ап-аҡ, ниҙер бышылдай, керпеген дә ҡаҡмай миңә баға, үҙе, көслө елгә ҡаршы торорға тырышҡандай, һаман алға йомола... Ул хәтеремә мәңгегә шулай һеңде: түшенә ҡау-

шырылған ҡулдар, ап-аҡ ирендәр һәм йәш тулы шар асыҡ күҙҙәр... Төшөмә лә күберәк шулай керә... Шул мәлдә ниңә этеп ебәрҙем икән? Иҫләһәм, йөрәгемде хас үтмәҫ бысаҡ менән ҡырҡҡылаған кеүек...

Белая Церковь янында, Украинала формировать иттеләр беҙҙе. Миңә «ЗИС-5» бирҙеләр. Фронтҡа шул машинала киттем. Һиңә һөйләп тороуҙың кәрәге юҡ инде, һуғыштың баштараҡ нисек булғанын үҙең дә күреп беләһең. Өйҙән хатты йыш алдым, үҙем сәләм ҡоштарын һирәк осорҙом. Хәлдәр арыу, яйлап һуғышабыҙ, әлегә сигенһәк тә, тиҙҙән көстө туплап, фрицтарҙы төйгөсләй башларбыҙ, тип яҙған саҡтар булды. Башҡа нимә яҙаһың? Хөрт ине бит, башта хат ҡайғыһы түгел ине. Танмайым, хәсрәт ҡылдарын сиртергә әүәҫ түгелмен үҙем дә. Хәләлдәренә йәки сибәркәйҙәренә кәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә хат яҙып, көн һайын ҡағыҙ битенә маңҡаларын сыймаҡлаған йыбытҡыларҙы яратмай инем. «Йәнәһе, уға ҡыйын, бик ауыр. Имеш, үлтереүҙәре лә ихтимал», ә тылда меҫкен ҡатынҡыҙҙың һәм бала-сағаның хәле беҙҙекенән дә мөшкөл икәнен аңларға теләмәй. Бөтөн ил шуларға таянды бит! Шундай ауырлыҡ аҫтында ла һығылып төшмәнеләр, түҙҙеләр бит! Ә бысраҡ йәнле илаҡтар йәлләткес хәбәр ебәрһен – йүгереп эшләгән ҡатындың бөгәренә таяҡ менән һуҡҡан һымаҡ бит был. Ундай хаттан һуң ул бахырҙың ҡулдары һәленеп төшә, эшләгәне ырамай башлай. Юҡ! Нужа ҡушҡанда түҙер өсөн, бөтә ауырлыҡты күтәрер өсөн дә һин ир булып яралғанһың, шуға ла һалдат һин.

Тик миңә бер йыл да һуғышырға яҙмағандыр... Шул арала ике рәт яраландым, икеһендә лә еңелсә: бер тапҡыр ҡулымдың һум итенә, икенсе тапҡыр аяғыма тейҙе; беренсеһендә – самолёттан атҡан пуля, икенсеһендә – снаряд ярсығы. Немец машинамды өҫтән дә, ҡабырғаларынан да тишкеләп бөтөрҙө, ә үҙем, браток, баштараҡ гелән ҡотолоп килдем. Ҡотола-котола килдем дә бер көн барып та ҡаптым... Ҡырҡ икенсе йылдың майында Лозовеньки янында әсиргә эләктем. Ул осор немец аяуһыҙ һөжүм итә ине һәм йөҙ ҙә егерме ике миллиметрлы бер

гаубица батареяһы бөтөнләй тиерлек снарядһыҙ ҡалды: минең машинаға снарядты өймәләп тейәнеләр, үҙем дә тейәштем, хатта тирләүҙән гимнастёркам арҡама йәбеште. Эште тиҙ теүәлләргә кәрәк ине, сөнки алыш беҙҙең тирәгә яҡынайғандан-яҡыная: һул яҡта танкылар геүләй, уңда ла, алда ла атыш бара, хәтәр...

Авторота командиры һораған була: «Үтә алырһыңмы, Соколов?» – тип. Һорамаһа ла ярар ине – унда иптәштәрем һәләк була, мин бында наҙланып ятайыммы ни? «Нимә һөйләп торорға, – мин әйтәм. – Үтергә икән үтергә, шуның менән – вәссәләм!» «Ярай, улайһа, – ти ул миңә. – Ҡыу ҙа ҡыу!»

Ҡыуам ғына. Ғүмерҙә лә улай уҡ шәп елдергән юҡ ине. Бәрәңге тейәмәгәнемде лә, бындай йөк менән һаҡ йөрөргә кәрәклеген дә беләм, ләкин тегендә егеттәр буш ҡул менән алышҡанда, юл үтәнән-үтә артиллерия уты аҫтына ҡалғанда ниндәй һаҡлыҡ булырға мөмкин?!. Алты километрҙай үтеп, инде батарея торған ҡалҡыуға сығыр өсөн ат юлына боролам ғына тигәндә, ян-яҡҡа күҙ һалһам – юлдың уң яғында ла, һул яғында ла беҙҙең пехота ап-асыҡ ҡыр буйлап саптыра ғына, араларына миналар ҙа төшөп ярыла башланы. Нишләргә миңә? Кире боролмаҫһың бит. Йәнә ҡыуҙым! Батареяға етергә күп тиһәң бер километр ҡалған, инде арба юлына ла ҡайырылып керҙем, хәлбүки, браток, үҙебеҙҙекеләр эргәһенә етергә насип булманы... Дальнебойныйҙан атыптырмы, бер ауыр снарядты машинамдың янына ғына килтер ҙә һал... Шартлағанын да, бүтәнде лә ишетмәнем, тик башымда ғына ниҙер өҙөлөп киткәндәй булды – артабан бер ни хәтерләмәйем. Ҡалайтып имен ҡалғанмын – һис аңлай алмайым, шулай уҡ йырындан бер һигеҙ метрҙай ситтәрәк күпме ятҡанмын – уныһын да белгән юҡ. Һушыма килһәм, аяҡҡа баҫа алмайым: баш сайҡала, биҙгәк тотҡан шикелле ҡалтырата, күҙ алдарым ҡараңғыланды, һул ҡулбашымда нимәлер сытырлай, нимәлер шығырлай, тотош тәнем һыҙлай, әйтерһең, ике тәүлек буйы ни тура килһә, шуның менән туҡмағандар. Шаҡтай ваҡыт йөҙ түбән шыуышып барҙым да нисек тә тороп баҫтым.

Ләкин ҡайҙа икәнлегемде лә, ни булғанды ла аңлай алмайым әле. Зиһенем бөтөнләй сыуалған. Ятырға ҡурҡам. Ятһам, ҡабат тора алмам, үлермен шикелле. Баҫып торам, дауылдағы тирәктәй, тегеләй-былай сайҡалам.

Аңыма килеп, зиһенемдә йыйҙым да тирә-йүнде ныҡлап байҡаным – йөрәгемде кинәт кемдер ҡыпһыуыр менән ҡыҫҡан кеүек тойолдо: ян-яғымда үҙем алып бара торған снарядтар тырым-тырағай һибелгән, яҡында ғына, тәгәрмәстәрен өҫкә күтәреп, йәнселеп бөткән машинам ята, ә һуғыш тигәнең, бәй, минең артта бара… Нимә була инде был?

Йәшерен-батырыны юҡ, шул мәлдә аяҡтарым быуынһыҙ ҡалды, һәм мин, сабылған дегәнәктәй, ергә ауҙым, сөнки үҙемдең солғанышта – дөрөҫөрәге, фашистар ҡулында икәнлегемде аңланым. Һуғышта була икән ул…

Их, брат, ирекһеҙҙән әсирҙә ҡалыуыңды аңлау анһат түгел икән шул. Үҙе татымаған кешегә былдай хәлде әҙәмсә аңлатып биреү бик ҡыйын.

Ну, ятам шулай, танкылар геүләгәнен ишетәм. Уртаса ҙурлыҡтағы дүрт немец танкыһы мин снарядтар тейәп килгән яҡҡа ҡыҙыу уҙып китте… Бик ауыр булды миңә быны күреп ятыу! Аҙаҡ, пушкалар һөйрәп, тягачтар ынтыла башланы, ялан кухняһы, уларҙан аҙаҡ пехота уҙҙы, әллә ни ҡуйы түгел, туҡмалған бер ротанан артыҡ булмаҫ. Уларға күҙ ҡырыйы менән генә ара-тирә ҡарайым да, йәнә сикәм менән ергә ҡапланып, күҙемде йомам: күрге килмәй үҙҙәрен, күңел болғана, йөрәк әрней…

Үтеп бөттөләр, буғай, тип башымды күтәрһәм, алты автоматчик – ана, яҡында ғына, минән бер йөҙ метрҙа ғына. Күрәм, юлдан боролоп, туп-тура миңә табан атлайҙар. Үҙҙәре бер ни өндәшмәй. «Бына үлемем дә яҡынлаша», – тип уйлайым. Тороп ултырҙым, – ятҡан килеш дөмөккө килмәй – аҙаҡ баҫтым. Тегеләрҙең береһе, миңә бер нисә аҙым ҡалғас, яурынын һикертеп ебәрҙе лә, автоматын ҡулына шылдырҙы. Әкәмәт тә һуң кеше тигәнең: шул минутта миндә һис тә паника булманы, йөрәгем дә бәлтерәмәне. Бары тегегә өңшәйеп: «Хәҙер ҡыҫҡа очередь менән бәрә инде, тик ҡайһы еремә сәпәр икән – башымамы

әллә күкрәгемәме?» – тип кенә уйлайым. Кәүҙәмдең ҡай ерен тишкеләһә лә, әйтерһең, минең өсөн барыбер түгел.

Үҙе былай килбәтле генә кәүҙәле, ҡара сәсле, ҡарағусҡыл битле йәш егет, ирендәре еп шикелле нескә, күҙҙәре ҡыҫылып тора. «Уйлап та тормай һәләк итә был», – тим эсемдән генә. Эйе ләһә: автоматын йәтешләп тотто был, – бер һүҙ өндәшмәй күҙенә ҡарап торам, – икенсеһе, ефрейтор микән, йәшкә тегенән олораҡы, ҡартлас тип әйтерлеге, нимәлер ҡысҡырып, тегене этте лә минең янға килде, үҙенсә уны-быны лыҡылдап, уң ҡулымды терһәктән бөгөп ҡарай, йәғни мускулымды самалай. Ҡапшап ҡараны ла: «О-о-о!» – тип ҡуйҙы һәм ҡулы менән юлға, ҡояш байышына иҙәне. «Тәпәйлә әйҙә, эш хайуаны, беҙҙең рейхка эшләргә!» – тимәксе, йәнәһе.

Ҡарасмандың күҙе минең итеккә төштө, ә итек ҡарамаҡҡа шәп кенә, ҡулы менән ымлай был: «Сис!» Ергә ултырҙым да итектәремде сисә һалып һондом. Ҡулымдан тартып ҡына алды был. Сылғауҙарымды ла сисеп һуҙҙым да аҫтан ғына текләп торам үҙенә. Әммә ул ҡаты ажғырып, үҙ телендә һүгенде лә йәнә автоматына йәбеште. Ҡалғандары ауыҙ йырып хахылдай. Шунан тынысланып ары киттеләр. Ҡарасманы ғына юлға еткәнсе миңә өс тапҡыр боролоп ҡараны, күҙҙәре бүре күтөйөнөкөләй йылтырай, асыулы, ә нимә өсөн? Әйтерһең, минең итекте ул түгел, уныҡын мин һалдырып алғанмын.

Ни эшләйһең, брат, ҡайҙа бараһың инде! Юлға сығып, Воронежса ҡатлы-ҡатлы итеп һүгендем дә көнбайышҡа – әсирлеккә атлап киттем... Ә ул ваҡыт бик яй йөрөй инем, сәғәтенә бер километрҙан артыҡ булмаҫ. Һин алға атларға теләйһең, ә бары ян-яҡҡа сайҡалаһың, һөйрәләһең юлда иҫерек кеүек. Аҙ ғына атлағас, мин хеҙмәт иткән дивизиянан әсир төшкән үҙебеҙҙең һалдаттар колоннаһы ҡыуып етте. Уларҙы унлап немец автоматчигы ҡыуалап бара ине. Колонна алдынан барған берәү, минең тапҡырға килеп еткәс, яман һүҙ әйтмәйсә генә киҙәнде лә автомат һабы менән башыма тондорҙо. Шунда йығылһам, ул мине автомат очереды менән ергә һылаштырып ҡына ҡуя ине, тик беҙҙекеләр ҡолап барған ерем-

дән тотоп алдылар ҙа, уртаға этеп индереп, ярты сәғәттәй ҡултыҡлап алып барҙылар. Аңыма килгәс, береһе миңә: «Хоҙай һаҡлаһын, йығыла ғына күрмә! Аҡтыҡ көсөңдө йыйып бар, юғиһә үлтерәләр», – тип шыбырланы. Һәм мин йән көскә атлай бирҙем.

Ҡояш байыу менән, немецтар конвойҙы көсәйтте, йөк машиналарынан йәнә егермеләп автоматчик ҡушып, ашыҡтырып ҡыуырға керештеләр беҙҙе. Ҡаты яралылар бүтәндәр артынан етә алмағанға, уларҙы юлда уҡ атып йығалар. Икәүебеҙ ҡасмаҡсы ине лә – айлы төндә, асыҡ ҡырҙа үҙҙәрен әллә ҡайҙан күрергә мөмкин икәнен иҫәпкә алмағандар, күрәһең, – әлбиттә, уларҙы ла үлтерҙеләр. Төн уртаһына ятылаш янған бер ауылға еттек. Беҙҙе төн үткәрергә көмбәҙе емерелгән бер сиркәүгә ҡыуып керттеләр. Сиркәүҙең таш иҙәнендә остоҡ һалам да юҡ, ә барыбыҙ ҙа шинелһеҙ, бер ҡат гимнастёрка менән салбарҙан ғына, аҫҡа түшәрлек бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Берәүҙәрҙең гимнастёркаһы ла юҡ, исмаһам, өҫтәрендә эске бәз күлдәк кенә. Күбеһе кесе командирҙар ине. Үҙҙәрен рядовойҙарҙан айыра алмаһындар өсөн сисеп ташлағандар гимнастёркаларын. Артиллеристар ҙа гимнастёркаһыҙ. Орудиелары янында күлдәксән йөрөгән хәлдә дошманға эләккәндәр.

Төндә ҡойоп ямғыр яуҙы, барыбыҙ ҙа лысма һыуландыҡ. Сиркәүҙең көмбәҙен ауыр снарядмы, әллә самолёт бомбаһы ҡутарып ташлаған, ә түбәһен снаряд ярсыҡтары тишкеләп бөткән, хатта алтарендә лә ҡоро ер таба алмаҫһың. Шулай төнө буйы, ҡараңғы аҙбарҙағы һарыҡтар һымаҡ, сиркәүҙең әле бер, әле икенсе еренә күсеп йөрөнөк. Бер мәл төн уртаһында кемдер еңемдән тартты: «Һин яралы түгелме, иптәш?» – ти. Мин: «Ә һиңә нимә кәрәк, браток?» – тим. «Мин – хәрби врач, бәлки, берәй ярҙам күрһәтә алырмын?» – ти ул. Мин уға зарымды һөйләп ташланым, һул ҡулбашым һыҙлай, шешеп тә килә, ауыртыуға түҙер әмәл юҡ, тим. Ул ҡоро ғына: «Гимнастёркаңды, күлдәгеңде лә сис», – тине. Мин барыһын да сисеп һалдым, ә ул нескә бармаҡтары менән ҡулбашты ҡапшарға керешкәйне, күҙемә уттар күренде хатта. Мин тештәремде генә шығырлатам: «Һин кеше докторы түгел,

ветеринарҙыр. Ауыртҡан ергә ниңә шул ҡәҙәр баҫаһың, йөрәгең ташмы әллә?» – тип телләшәм. Ә ул ҡапшауын белә, етмәһә, яһиллана: «Һинең эшең – тик тороу! – Хәбәрен таба бит әле. – Түҙергә тырыш, хәҙер нығыраҡ ауыртыр». Ҡулымды ҡапыл һелкә тартҡайны, күҙемдән утлы осҡондар сәселде.

Аңыма килгәс, һораным тегенән: «Нишләттең мине, меҫкен фашист? Ҡулым йәнселеп бөткән бит минең, ә һин шундай ҡаты тартаһың». Ишетәм, шыпырт ҡына көлә теге: «Мин уң ҡулы менән һуғып ебәрһә был тип көткәйнем, ә һин сабыр егет булып сыҡтың. Ә ҡулың йәнселмәгән, быуыны сыҡҡан, шуны ултырттым. Йә, нисек, еңелерәкме хәҙер?» Ысынлап та, ауыртыуы кәмей башлаған кеүек. Ихлас рәхмәт әйттем үҙенә, ә ул әкрен генә: «Яралылар бармы?» – тип белешә-һорай ҡараңғыла ары китте. Ысын доктор бына ниндәй була ул! Әсирҙә булһа ла, ҡараңғыла ла үҙенең изге эшен үтәй.

Бик тынғыһыҙ төн булды. Тышҡа ла сығармайҙар. Конвой башлығы беҙҙе сиркәүгә ҡушарлап индергәндә үк был хаҡта киҫәтеп ҡуйғайны. Әмәлгә ҡалғандай, дин тотҡан беребеҙ бик ныҡ ҡыҫталған булып сыҡты. Түҙҙетүҙҙе лә илап ебәрҙе: «Мин изге сиркәүҙе нисек мәсхәрәләйем инде? Мин бит Аллаға ышанам, христиан! Нишләйем икән, туғандар?» – тимәһенме. Ә беҙҙең халыҡтың ниндәйлеген беләһең! Береһе көлә, береһе һүгенә, өсөнсөһө, шаяртып, кәңәштәрен бирә. Һәммәбеҙҙең күңелен асты был. Тик ваҡиға бик хәсрәтле бөттө: теге иптәш, ишек алдына сығарыуҙы талап итеп, ишекте дөбөрләтергә тотондо. Башын харап та итте: фашист оҙон очередь менән автоматтан ишек үтә атты ла теге динлене, тағы өс әсирҙе үлтерҙе, ә берәүҙе ҡаты яраланы. Уныһы иртән аяҡ һуҙҙы.

Үлектәрҙе бер ергә өйөп, сүкәйешеп ултырҙыҡ та уйға сумдыҡ: хәйерле башланманы был… Ә бер аҙҙан кемдең ҡайҙа тыуғаны, ҡайһы өлкәнән икәне, әсиргә нисек эләгеүе тураһында быш-быш килдек. Бер взводта йәки бер ротала хеҙмәт иткәндәр ҡараңғыла бер-береһен юғалтҡан булғандар, шулар, исемдәрен шым ғына әйтеп,

табышырға кереште. Янымда ғына кемдәрҙеңдер һүрәнке һөйләшкәндәрен ишеттем. Береһе былай ти: «Әгәр иртәгә беҙҙе артабан алып китер өсөн теҙеп, комиссарҙарға, коммунистарға һәм йәһүдтәргә сығырға ҡушһалар, һин, взводный, йәшеренеп маташма! Барыбер ниәтең бойомға ашмаҫ! Гимнастёркаңды сискәнеңә күрә генә рядовойға һанарҙар тип уйлайһыңмы? Барып сыҡмаҫ! Һинең өсөн яуап бирергә теләмәйем, үҙем беренсе булып һине күрһәтәм, һинең коммунист икәнеңде беләм дәһә. Мине партияға керергә өгөтләгәйнең бит, үҙ эштәрең өсөн үҙең яуап бир». Быны миңә йәнәш, һул яғымдан ултырғаны әйтте, ә уның икенсе яғынан йәшерәк тауышлы берәү: «Һинән, Крыжнев, әшәке кешелер тип, һәр саҡ шикләнә инем. Бигерәк тә уҡый-яҙа белмәүеңде һылтау итеп, партияға инеүҙән баш тартҡас, шундай фекергә килдем. Ләкин хыянатсы уҡ булырһың тип һис уйламай инем. Һин бит ете йыллыҡ мәктәп бөтөргән кеше». Тегеһе взводныйына ғәмһеҙ генә: «Бөтөрһә ни, шунан?» – тип ҡуйҙы. Шаҡтай һүҙһеҙ торҙолар, аҙаҡтан взводныйҙың тоноҡ тауышы салынды ҡолаҡҡа: «Һин мине тоттора күрмә инде, иптәш Крыжнев». Тегеһе көлдө: «Иптәштәр тигәнең фронттың арғы һыҙығында ҡалды, ә мин иптәш түгел һиңә, һорамаңитмә, барыбер күрһәтәм үҙеңде. Һәр кемгә лә үҙ йәне ғәзиз».

Шымып ҡалдылар, ә мин бындай яуыҙлыҡтан ҡалтырана башланым. «Юҡ, мәйтәм, һинең эше эт көсөгөнә үҙ командирыңды һатырға юл ҡуймам! Мин барҙа сиркәүҙән сыға алмаҫһың, үләкһә урынына аяғыңдан һөйрәкләрҙәр үҙеңде!» – тип уйланым. Таң беленә башлағас, ҡарайым – эргәмдә ҡулдарын баш аҫтына ҡуйып, ялпаҡ битле бер егет салҡан ята, ә янында, тубыҡтарын ҡосоп, күлдәксән, ныҡ ағарынған, ябыҡ ҡына бер төймә танаулы егет ултыра. «Әһә, – тинем эстән генә, – бынау елле алашаға был егеттең көсө етмәҫ. Үҙемә тотонорға тура килер, ахыры».

...Иртән барыбыҙҙы ла, Крыжнев әйтмешләй, сиркәү алдына сығарып теҙҙеләр, автоматсылар менән ҡамап алғас, эсэссы өс офицер үҙҙәренә зыянлы кешеләрҙе һай-

ламаҡ булды. Кемдең коммунист, кемдең командир һәм комиссар икәнлеген төпсөй башланылар, ләкин бирәү ҙә сыҡманы. Тоттороусы эт тә табылманы, ә яртыбыҙ тиерлеге коммунистар ине, командирҙар ҙа, әлбиттә, комиссарҙар ҙа бар ине. Ике йөҙҙән ашыу халыҡ араһынан барлығы дүрт кешене алып киттеләр. Бер йәһүдте һәм өс урыҫты. Бары ла рядовойҙар. Урыҫтар шуға әләкте – өсөһөнөң дә төҫтәре ҡарараҡ, сәстәре бөҙрәрәк ине. Ундайҙың ҡаршыһына барып: «Юде?» – тип кенә һорайҙар. Теге урыҫ икәнлеген әйтә, ә уға ҡолаҡ та һалмайҙар. Бары тик сафтан сығырға ҡушалар.

Бисараларҙы аттылар, беҙҙе иһә ары алып киттеләр. Теге йәш егет взводный Познангә еткәнсе гел йәнәш атланы, беренсе көндө бара бирә лә ҡулымды ҡыҫып ҡуя ине. Познандә шундай бер хәлдән һуң бер-беребеҙҙән айырылдыҡ.

Браток, бына нисек булды: мин тәүге көндө үк үҙебеҙҙекеләр яғына һыпыртырға ҡарар иткәйнем. Тик ышанысլы ҡасырға кәрәк тип уйлай инем. Познангә еткәнсе яйы сыҡманы һис. Ә унда беҙҙе ысын лагерға урынлаштырҙылар. Шунда мөмкинлек сыҡҡандай булды: май аҙағында беҙҙе яҡындағы бәләкәйерәк урманға үлгәндәрҙе ерләү өсөн ҡәбер ҡаҙырға ебәрҙеләр. Ул ваҡытта дизентериянан күп кеше ҡырылғайны. Шулай, үҙем Познань балсығын соҡойом, үҙем тирә-йүнгә ҡаранам. Шунда һаҡсыларыбыҙҙан икәүһенең ҡапҡылап алырға ултырғанын, ә өсөнсөһөнөң ҡояш йылыһында серем иткәнен шәйләнем. Шунан көрәгемде ташланым да ҡыуаҡ араһына ыңғайланым... Оҙаҡ йүгерҙем мин тәңгәл ҡояш сыҡҡан яҡҡа.

Ҡарауыл тиҙ генә белмәгәндер. Ә миңә, ябығып хәлдән тайған кешегә, бер тәүлек эсендә ҡырҡ километрға яҡын араны үтергә ҡайҙан көс килгәндер – үҙем дә белмәйем. Ләкин өмөт-хыялым бер нисек тә аҡланманы: дүртенсе тәүлеккә киткәндә, теге ҡәһәр төшкән лагерҙан байтаҡ алыҫайғас, мине тотоп алдылар. Эҙемдән эттәр ебәрелгән икән, шулар мине сабылмаған һоло баҫыуында ҡаптырҙы. Мин, таң яҡтыһында асыҡтан барырға шөрләп,

көндө шунда үткәрмәк өсөн һоло араһына кереп ятҡайным. Ә урманға тиклем кәмендә өс километр бар ине әле. Усыма һалып һоло бөртөктәре ыуҙым. Бер аҙын ашаным, кеҫәгә лә запасҡа тултырҙым. Шул мәлдә ҡотороноп эт өргән һәм мотоцикл бытырлаған тауыш ишетелде. Йөрәгем жыу-у-у итеп китте, сөнки эттәрҙең лау-лауы бик яҡынайҙы, һис юғы, битемде йыртҡысламаһындар өсөн йөҙ түбән ҡапланып яттым. Ә эттәр килеп тә еттеләр һәм минут эсендә һәләмәләремде йолҡҡолап та ташланылар.

Ике мотоциклда немецтар килеп етте. Тәүҙә буйтым туҡманылар, шунан һөсләткән эттәре өҙгөләп бөтөрҙөләр, тәнемдән ит һәм тире киҫәктәре генә осоп торҙо. Лагерға ла шәрә һәм ҡанға батҡан хәлдә алып ҡайттылар. Ҡасҡан өсөн бер ай карцерҙа ултырҙым, мәгәр иҫән... эйе, иҫән ҡалдым!

Миңә әсирҙә күргәндәремде хәтерләү, браток, үтә ауыр, ә һөйләүе – бигерәк тә. Германияла кисергән әҙәм күтәрмәҫ ғазаптар, лагерҙарҙа әхәзләнеп үлгән дуҫ-иштәр иҫкә төшһә, йөрәгем күкрәктән түгел, боғаҙыма тығылып тибә, һулыш ауырлаша...

Тотҡонда үткән ике йыл эсендә ҡайҙарға ғына ҡыуып йөрөтмәнеләр үҙемде! Шул ваҡыт эсендә ярты Германияны гиҙеп сыҡтым: Саксонияла силикат заводында эшләнем, Рур өлкәһе шахталарында күмер соҡоп ташыным, Баварияла ер ҡаҙып бөкрәйҙем, Тюрингияһында ла булдым. Ҡайҙарҙа йөрөмәнем икән немец еренең – суртым да белмәҫтер. Унда, брат, тәбиғәт төрлөсә, ер ҙә төрлө, тик беҙҙекеләрҙе бөтә ерҙә лә бер төрлө үлтерәләр, бер төрлө туҡмайҙар ине. Ә ул ләғнәт төшкән әрәм тамаҡтар һәм хәшәрәттәр шундай ҡаты бәргесләй, беҙҙә хайуанды ла ғүмере улай интектермәйҙәр. Йоҙроҡ менән дә төйәләр, аяҡ менән дә тибәләр, резина таяҡ менән дә, ҡулдарына ниндәй тимер тап килә, шуның менән дә туҡмайҙар, мылтыҡ төйҙәһе, һуйыл-күҫәк тураһында әйтеп тә тормайым.

Урыҫ булғаның өсөн дә, һаман яҡты донъяға баға алғаның өсөн дә, шул мәлғүндәрҙең үҙҙәренә эшләгән өсөн дә туҡманылар. Улар теләгәнсә ҡарамаһаң, улар әйткәнсә атламаһаң, улар ҡушҡанса боролмаһаң да... Тиктомалға,

ҡасан да үлер хәлгә етһен тип тә, ҡыйынға сыҙай алмайса, үҙенең аҡтыҡ тамсы ҡанына тонсоғоп үлһен тип тә туҡмайҙар ине. Беҙҙең кәүҙәләрҙе яндырыр өсөн Германияла мейестәр етмәгән, моғайын...

Ашатҡандары ла һәр урында бер иштән: яртыһы бысҡы онтағынан әүәләнгән эрзац-икмәк менән шалҡандан шыйыҡ баланда. Ҡайнаған һыуҙы биргән ерҙә бирәләр, бирмәгән ерҙә юҡ. Нимәһен һөйләп ултырырға, үҙең бел: һуғышҡа хәтлем һикһән алты килограмм тартһам, ә көҙгә илленән артманым, һөйәк тә тире генә ҡалды, һөлдәмде йөрөтөрлөк тә хәл етмәй башланы. Ә эште өйәләр генә, ҡаршы һүҙ әйтә күрмә. Ниндәйерәк әле эше – йөк аты ла тарта алмаҫ.

Сентябрь баштарында беҙҙе, совет хәрби әсирҙәренән йөҙ ҙә ҡырҡ кешене, Кюстрин ҡалаһы янындағы лагерҙан Дрезден янындағы 14-Б лагерына күсерҙеләр. Шул осорға лагерҙа беҙҙекеләр ике меңләп йыйылғайны. Барыһы ла таш сығарыу карьерында эшләне – немец ташын ҡул көсө менән ваталар, киҫәләр һәм ваҡлайҙар. Норма – йән башына дүртәр кубометр көнөнә. Йән тигәнең еп менән сырмап ҡуйғандай, тәндә саҡ ҡына аҫылынып торған бер нәмә. Бына шунда башланды: ике ай тигәндә, йөҙ ҙә ҡырҡ ике кешелек эшелондан илле ете кеше ҡалдыҡ. Нисегерәк тиһеңме? Бында иптәштәреңде күмергә өлгөрөп булмай, ә лагерҙа, немецтар Сталинградты алған, Себергә ябырыла башлаған, имеш, тигән хәбәрҙәр ҡуйыра. Хәсрәт өҫтөнә хәсрәт. Ҡайғы баҫа үҙеңде, ерҙән күҙеңде ҡалҡыта алмайһың, шул немец еренә, сит ергә, үҙең дә ҡаҙалып китерҙәй булаһың. Ә лагерь һаҡсылары көн дә эсә, аҡырып йырлаша, шатлана, тантана итә...

Бер кисте шулай баракка ҡайттыҡ эштән һуң. Көнө буйы яуып торғанға, өҫтөбөҙҙәге кейем йораты һыуланды; һалҡын елдә эт урынына өшөнөк, тешебеҙ тешкә теймәй. Ә кибенергә урын юҡ, йылынырға ла әмәл юҡ. Өҫтәүенә, үлер хәлгә етеп, тиһәм әҙ булыр – шундай асыҡҡанбыҙ. Ә кистәрен беҙгә ашарға бирмәйҙәр ине.

Өҫтөмдәге еүеш аламаларҙы һикегә ырғыттым да: «Уларға дүртәр кубометр бир, ә һәр кемдең ҡәберенә бер

кубометр ҙа баштан ашҡан», – тип һөйләндем. Әйтеүен әйттем, ләкин арабыҙҙа шул әсенеүле һүҙҙәремде лагерь комендантына еткереүсе әҙәм аҡтығы табылған бит.

Мюллер тигән немец лагерь коменданты, йәғни уларса лагерфюрер, ине беҙҙә. Тәпәшерәк буйлы, йыуан кәүҙәле, аҡһыл сәсле. Үҙе лә ниндәйҙер аҡтан бөткән ғәләмәт: башындағы сәсе лә, ҡашы-керпеге лә аҡ, хатта аҡайып торған күҙҙәре лә аҡһыл. Русса нәҡ һинең менән минең шикелле һөйләй, өҫтәүенә, Волга буйында тыуып үҫкән кешеләй, «о» хәрефенә баҫым яһай. Ә һүгенергә тиһәң, иҫ киткес ине, ләғнәт, был тиклем үк маһирлыҡҡа ҡайҙа өйрәнгәндер. Беҙҙе блок алдына – баракты улар шулай тип атайҙар – сығарып теҙә лә, уң ҡулын һоноп, бер өйөр эсэссылар менән строй алдынан уҙа. Һуҡҡанда бармаҡтары имгәнмәһен өсөн, һул ҡулына ҡурғаш менән эсләнгән бирсәткә кейә. Үҙе бара, үҙе стройҙа торған һәр кешенең моронона һуға, йәғни ҡанын тамыҙа. Быны «гриптан һаҡлау профилактикаһы» тип атай үҙе. Һәр көн бит әле. Лагерҙа дүрт блок бар ине. Бөгөн береһенә, иртәгә икенсеһенә, аҙаҡ бүтәндәренә «профилактика» яһай. Бик теүәл кеше ине, ҡәбәхәт. Ошо эштә ял көнө тигәнде лә белмәне. Бер нәмәгә генә башы етмәй ахмаҡтың: ҡайыҙларға керешерҙән алда, тамам ҡыҙып алыр өсөн строй алдында кирә баҫып, бер ун минуттай һүгенеп торор ине. Ул теттереп һүгенә, ә беҙ иһә әҙ-мәҙ еңеллек тоябыҙ: сөнки таныш һүҙҙәрҙе, асылыбыҙға һеңгәнде ишеткәндәй булаһың, тыуған яҡтан ел иҫеп үткәндәй... Әгәр ошо һүгенеүе менән беҙҙең күңелде генә асҡанын белһә, русса түгел, ә үҙ телендә һүгенер ине. Быға Мәскәүҙән бер дуҫымдың ғына асыуы килә. «Ул һүгенгән ваҡытта, – тиер ине, – күҙемде йомам да үҙемде Мәскәүҙең Зацептағы һыраханаһында ултырған шикелле хис итәм. Шул ҡәҙәр һыра эскем килә, баштар әйләнә хатта».

Әлеге комендант кубометр тураһында һүҙ әйткәндең иртәгеһенә үк мине үҙ янына саҡырта. Кисен баракка ике һаҡсы эйәртеп, тәржемәсе инә. «Кем бында Андрей Соколов?» – ти был. «Мин ул», – тим. «Марш беҙҙең менән, герр

лагерфюрер үҙе таптыра һине». Ни өсөн саҡырғаны билдәле – көлөмдө күккә осорорға. Иптәштәр менән хушлаштым. Минең үлергә киткәнде барыһы ла аңлай, әлбиттә. Ауыр бер һуланым да киттем. Лагерь буйлап барам, йондоҙҙарға ҡарайым, улар менән дә хушлашам, үҙем: «Бына, Андрей Соколов, лагерса әйтһәң, өс йөҙ утыҙ беренсе номер, шулай барлыҡ ғазаптарҙың ахырына етәһең инде», – тип уйлайым. Ниңәлер Ирина менән балаларҙы йәлләп ҡуйҙым, аҙаҡ был тойғо баҫылды һәм мин: «Донъянан китеүҙәре ҡыйын икәнде һуңғы минутымда дошмандар күрмәһен, пистолет көбәгенә ысын һалдаттай ҡыйыу ҡарарға кәрәк», – тип рухи ғәйрәтемде барлайым.

Комендант бүлмәһендә – тәҙрә төптәрендә гөлдәр, таҙа, нәҡ беҙҙең илдәге яҡшы клубтағы ише. Өҫтәл артында – тотош лагерь начальствоһы. Бишәү ултыра, сусҡа туң майы ҡапҡылап, шнапс эсәләр. Өҫтәлдә – яңы башланған дәү шешәле шнапс, икмәк, май, тоҙло һыуҙа ебетелгән алма, төрлө консерва асып ҡуйылған. Улар ашайһы әлеге ризыҡтарға күҙ һирпеп сыҡтым һәм, ышанмаҫһың да, – күңелем болғанып, саҡ ҡоҫмай ҡалдым. Мин бит бүреләй ас, әҙәм ашай торған нәмәне онотоп бөтөргәнмен, ә алдыңда – шул ҡәҙәр ризыҡ... Күңел болғаныуын саҡ тыйып, көс-хәлгә генә йолоп алдым күҙемде өҫтәлдән.

Нәҡ ҡаршымда ярым иҫерек Мюллер ултыра, пистолетын уйнатып, ҡулынан ҡулына сөйә, ә үҙе, күҙен дә йоммайса, миңә йыландай ҡарай. Ҡулдарымды бот буйына һуҙып, һалпыш үксәләремде бер-береһенә шыҡылдатып, доклад бирәм ҡысҡырып: «Герр комендант, хәрби тотҡон Андрей Соколов һеҙҙең приказығыҙ буйынса килде». Ә ул минән һорай: «Тә-әк, рус Иван, дүрт кубометр ҡаҙыу күпме ни?» «Так точно, герр комендант, күп». «Ә һиңә ҡәбер өсөн бер кубометр ҙа етәме?» «Так точно, герр комендант, – мин әйтәм, – етә, артып та ҡалыр әле».

Ул тороп баҫҡас: «Шул һүҙҙәрең өсөн һине, олуғ хөрмәт йөҙөнән, үҙем атып йығам хәҙер. Тик бында йәпһеҙерәк, әйҙә ихатаға сығайыҡ, эшеңде шунда бөтөрөрбөҙ», – тигәйне, «Ихтыярығыҙ», – тинем мин. Ул бер аҙ уйлағандан һуң, пистолетын өҫтәлгә бырғытып,

стаканға тултырып шнапс ҡойҙо ла, икмәк телеме алып, өҫтөнә бер ҡырҡым усҡа майы һалып, миңә һуҙҙы:

– Үлемең алдынан, рус Иван, немец ҡоралының еңеүе хаҡына эсеп ебәр әле.

Стаканды ла, ҡабымлыҡты ла ҡулынан алып өлгөргәйнем инде, ләкин уның ошо һүҙен ишетеп, утҡа өтөлгәндәй булдым. Үҙем уйлайым: «Мин, рус һалдаты, немец ҡоралының еңеүе өсөн эсә буламмы? Бүтән... берәй теләгең юҡмы, герр комендант? Барыбер үлергә, шулай булғас, ер упһын һине араҡың менән бергә!»

Өҫтәлгә стаканды ҡуйҙым да ҡабымлыҡты һалып, үҙенә әйттем: «Һый өсөн бик рәхмәт, тик эсә торған кеше түгел мин», – тинем. Теге йылмая: «Беҙҙең еңеү өсөн эсергә теләмәйһеңме? Улайһа, үҙ үлемең өсөн эс», – ти. Ә мин нимә юғалтам әле? «Үҙемдең үлерем һәм ғазаптарҙан ҡотоласағым өсөн эсәм». Шулай тип стаканды алдым да ике йотоуҙа ғорлама түңкәрҙем. Закускаһына ҡағылманым да. Әҙәпле генә усым менән ауыҙҙы һөрттөм дә: «Һыйығыҙ өсөн рәхмәт. Мин әҙер, герр комендант, әйҙәгеҙ, расходҡа ебәрегеҙ», – тинем.

Ә ул миңә текләп тора һәм әйтә: «Исмаһам, үлер алдынан ҡапҡылап ал», – ти. Мин быға: «Мин беренсе стакандан һуң бер ни ҙә ҡапмайым», – тип яуаплайым. Ул икенсегә һалып бирә. Икенсеһен дә эстем, тик закускаға һаман ҡағылмайым, ғәйрәт йыймаҡсы булам: «Йәнемдән айырылыр алдынан, һис юғында, эсеп сығайым ихатаға», – тип уйлайым. Комендант аҡһыл ҡаштарын ныҡ күтәреп: «Ниңә ҡапмайһың, рус Иван? Тартынма!» – тип белешә. Ә мин һаман үҙемдекен: «Ғәфү итегеҙ, герр комендант, икенсе стакандан һуң да ҡапмайым», – тип ныҡыйым. Ул яңаҡтары күпергәнсе бырхылдап ебәрҙе лә, аҙаҡ шарҡылдап уҡ көлмәһенме! Үҙе көлкө аралаш ҡабаланып, немецса низер ҡыҫтыра, минең һүҙҙәрҙе дуҫтарына тәржемәләй, күрәһең. Тегеләр ҙә көлә башланы, урындыҡтарын ҡуҙғатып, йөҙҙәрен боралар һәм һиҙәм: хәҙер миңә башҡасараҡ, аҙ ғына илтифатлыраҡ ҡарайҙар.

Комендант миңә өсөнсө стаканды һона, ә үҙенең көлөүҙән ҡулдары ҡалтырай. Уныһын һуҙыбыраҡ эскәс, әҙ генә

тешләнем дә, ҡалған икмәкте кире ҡуйҙым. Минең ул мөртәттәргә, астан үлер хәлгә етһәм дә, ырғытҡан һыныҡтары менән тығынырға теләмәүемде, дәрәжәм, ғорурлығым барлығын, рус кешеһе булыуымды һаҡларға ынтылыуымды, күпме генә ныҡышһалар ҙа, мине хайуанға әйләндерә алмағандарын күрһәткем килде.

Шунан һуң коменданттың сырайы етдиләнде, күкрәгендәге ике тимер тәрене ипләп ҡуйғас, ҡоралын алмайынса өҫтәл артынан сыҡты ла: «Бына нимә, Соколов, һин – ысын рус һалдаты. Батыр һалдат. Мин дә һалдат һәм лайыҡлы дошмандарымды ихтирам итәм. Һине атмайым әле мин. Өҫтәүенә, беҙҙең шанлы ғәскәрҙәребеҙ бөгөн Волгаға еткән һәм Сталинградты башкөллө алған. Был беҙҙең өсөн ҙур ҡыуаныс, шуға күрә, мәрхәмәт йөҙөнән һиңә йәшәү бүләк итәм мин. Бар, үҙеңдең барагыңа ҡайт, ә быныһы – тәүәккәллегең өсөн», – ти ҙә был миңә, өҫтәлдән алып, бәләкәйерәк икмәк буханкаһы һәм бер киҫәк сало тоттора.

Икмәкте бар көсөмә түшемә ҡыҫтым, салоны һул ҡулыма тоттом. Эштең былай көтөлмәгәнсә осланыуы зиһенемде тотошлай сыуалтып ебәрҙе: рәхмәт тә әйтеп тормайса, һул яғыма боролдом да, ишеккә табан барам, ә үҙем эсемдән: «Хәҙер ике ҡалаҡ һөйәге араһына гөлтләтә инде был, ризыҡты дуҫтарға апҡайтып бирә алмам», – тип уйлайым. Юҡ, атманы. Үлем был юлы ла мине ситләтеп үтте, ҡәбер һалҡынлығын ғына тойоп ҡалдым...

Комендантскийҙан сыҡҡанда аяҡтарым ныҡ ине әле, ә ихатаны үтешләй, бөтөнләй ҡыйшанланы. Баракка ҡайтып еттем дә, аңымды юйып, таш иҙәнгә ауҙым. Мине үҙебеҙҙекеләр уятҡанда ҡараңғы ине әле. «Һөйлә!» – тинеләр былар миңә. Мин комендант янында булған ваҡиғаны түкмәй-сәсмәй һөйләп бирәм. «Ризыҡты нисек бүләбеҙ?» – тип һорай һикеләшем. Үҙенең тауышы ҡалтырай. «Һәр кемгә тигеҙләп», – тим күршемә. Таң атҡанды көтөп, икеһен дә беше еп менән бүлдек. Кеше башына шырпы ҡабылай икмәк тейҙе, валсығын да иҫәпләнек, ә сало тигәне, үҙең беләһең инде, мыйыҡ һыларлыҡ ҡына тәтене. Шулай ҙа бер кем өлөштән мәхрүм ҡалманы.

Оҙаҡламай арабыҙҙан иң таҙа өс йөҙ кешене һайлап, һаҙлыҡ киптереүгә, унан аҙаҡ Рур өлкәһенә шахтаға оҙаттылар. Шунда ҡырҡ дүртенсе йылға ҡәҙәр хитландым. Ул саҡ беҙҙекеләр Германияның яңаҡ төбөн ҡыйшатҡайны, фашистар әсирҙәрҙе сүпкә лә һанамауҙан туҡтай башланы. Бер мәл көндөҙгө сменаны тотош теҙҙеләр ҙә, ҡырҙан килгән обер-лейтенант тәржемәсе аша: «Армияла йәки һуғышҡа тиклем шофёр булып эшләгәндәр бер аҙым алға сыҡһын», – тип әйттерҙе. Элекке шофёр араһынан ете кеше сығып баҫтыҡ алғараҡ. Туҙып бөткән спецовкала етебеҙҙе лә конвой менән Потсдам ҡалаһына оҙаттылар. Ә унда еткәс, тараттылар төрлө ергә. Мине «Тодт»та эшләргә ҡалдырҙылар – немецтарҙың юл һәм оборона ҡоролмаларын төҙөүсе шундай шаҡы-шоҡо контораһы бар ине.

«Опель-адмирал» машинаһында армия майоры чинындағы немец инженерын йөрөтәм. Ай-бай йыуан ине! Буйға тәпәшерәк кенә, ҙур ҡорһаҡлы, арҡырыға-буйға бер төҫлө, осаһы һимеҙ ҡатындарҙыҡы шикелле йоп-йомро. Алдан ҡараһаң, эйәк аҫты мундир яғаһы өҫтөнән өс бүлкәттән ғибәрәт, арттан ҡарағанда ла йыуан муйыны өс ҡатлы һымаҡ һәленгән. Минең иҫәп менән, кәмендә өс бот таҙа майы ғына булғандыр үҙендә. Йөрөгәндә паровоз шикелле быфылдай, ә ашарға ултырҙымы – сыҙап ҡына тор! Көнө буйы ашана ла феләжкәнән коньяк һемерә. Юҡ-юҡта миңә лә ул-был эләгә: юлда туҡтай ҙа, колбаса менән сыр турай, ашай, эсә; кәйефе шәп икән, эткә ырғытҡан һымаҡ, миңә лә берәй һыныҡ ташлай. Бер ваҡытта ла ҡулыма бирмәне, ҡайҙа ти улай итеү! Быны ул кәмләнеүгә һанай. Нисек кенә булмаһын, лагерҙағы хәл менән сағыштырып булмай. Әкренләп кенә әҙәмгә оҡшай башланым, әҙ-мәҙ таҙара төштөм.

Майорымды бер-ике аҙна Потсдамдан Берлинға, Берлиндан Потсдамға йөрөттөм, аҙаҡ уны фронт полосаһына, беҙҙекеләргә ҡаршы оборона һыҙығы төҙөргә ебәрҙеләр. Шунда инде йоҡом бөтөнләй осто: тыуған ергә, үҙебеҙҙекеләр яғына, нисек тайырға тип төндәр буйы баш вата инем!..

Бер ваҡыт Полоцк ҡалаһына еттек. Таң алдынан ике йыл эсендә беренсе тапҡыр беҙҙең артиллерияның гөрһөлдәүен ишеттем: минең йөрәктең нисек типкәнен белһәң, брат! Буйҙаҡ саҡта Ирина янына барғанда ла улай типкәне юҡ ине! Һуғыш Полоцкиҙан ун һигеҙ километр тирәһе көнсығыштараҡ бара ине. Ҡалалағы немецтар асыуҙан ҡоторона, нервылары ҡуҙғый, минең майор иһә бөтөнләй эскегә һалышты. Көндөҙ бергәләп ҡала арьяғына сығабыҙ, шунда ул нығытмалар төҙөү буйынса күрһәтмәләр бирә, ә төндәрен яңғыҙ ҡалып эсә. Шешенеп бөттө, күҙ ҡабаҡтары һәлберәп төштө...

«Ну, ваҡыт етте, артыҡ көтөргә ярамай! – тип уйлайым. – Ләкин яңғыҙ ғына китергә ярамаҫ, теге йыуантаҡты ла үҙем менән алһам, беҙҙекеләргә хәжәте тейәсәк».

Емеректәр араһынан ике килограмлы гер табып алдым. Уны машина һөртә торған сепрәккә төрҙөм, берәй еренә тондорорға тура килһә, ҡаны сыҡмаһын... Юлда бер киҫәк телефон сымын күреп, уны ла алдым. Кәрәгерҙәй һәммә әйберҙе тәфсилләп әҙерләнем дә алғы ултырма аҫтына йәшереп ҡуйҙым. Немецтар менән хушлашырға ике көн ҡалғас, заправканан ҡайтып барһам, күрәм: стенаға тотона-тотона бысранып бөткән бер немец унтеры килә ята. Машинаны туҡтаттым да, тегене емерек өй артына алып кереп, кәүҙәһен мундирынан тартҡылап сығарҙым, башынан пилоткаһын алдым. Кейемде лә ултырма аҫтына тыҡ та тиҙ генә шыл мин.

Егерме туғыҙынсы июнь иртәһендә миңә майорым үҙен ҡала ситенә, Тросницы тарафына, илтергә ҡушты. Унда ул нығытмалар ҡороу эшенә етәкселек итә ине. Ҡуҙғалып киттек. Майор артҡы ултырмала тыныс ҡына серем итә, ә минең йөрәк күкрәгемдән сығырҙай булып тибә. Башта ҡыҙыу барҙым, ҡаланы сыҡҡас, газды кәметә төштөм, шунан машинаны туҡтаттым да төшөп ян-яҡты ҡараным: артта, бик йыраҡта, әкрен генә ике йөк машинаһы килә. Мин герҙе алып, ишекте киңерәк астым. Теге йыуан нәмә ултырма арҡаһына һөйәлгән килеш, ҡатыны янындағы ише, хырылдап йоҡлай.

Шунда мин һул сикәһенә гер менән берҙе «дыңҡ». Шундуҡ һалынып төштө башы. Ышаныслыраҡ булһын өсөн, тағы тондорҙом, ләкин үлтерергә теләк юҡ. Тере килеш тапшырырға кәрәк үҙен, беҙҙекеләргә күп кенә нәмә һөйләп бирергә тейеш ул. Кобураһындағы «парабеллум»ын алып, кеҫәмә һалып ҡуйҙым. Шунан монтировканы артҡы ултырма һөйәнгесенә беркетеп, майорҙың муйынына телефон сыбығын элмәкләп һалдым да, ысҡынмаҫлыҡ итеп монтировкаға бәйләп ҡуйҙым. Шәп барғанда майорым ауып-ҡолап китмәһен өсөн шулай иттем. Шунан һуң теге мундир менән пилотканы йәһәтләп кейҙем дә туп-тура ер олоған, һуғыш барған яҡҡа ҡыуҙым машинамды.

Ике дзот араһынан немецтарҙың алғы һыҙығын уҙҙым. Блиндаждан автоматчиктар һикерешеп сыҡты, ә мин, майор менән барғанымды күрһендәр өсөн, автомобилде юрамал яйлаттым. Шунда улар ҡулдарын һелкә-һелкә, ҡысҡыра башланылар, йәнәһе, миңә ул яҡҡа барырға ярамай. Ә мин, аңламамышҡа һалышып, газды өҫтәп, бар көскә һикһән километр тиҙлек менән шыҡыйҙым. Улар иҫтәренә килеп, машинаға пулемёттарҙан ата башлағанда, мин инде бер кем эйә булмаған ерҙәге воронкалар араһынан, йылғыр ҡуян һымаҡ, элмәктәр яһай инем.

Арттан немецтар бәрә, ә ҡаршынан, автоматтан һиптереп, үҙебеҙҙекеләр асыуға тейә. Алғы быяланы дүрт ерҙән тиштеләр, радиаторҙы пуля менән тетеп бөтөрҙөләр... Шунда бер күл янындағы урманға барып еттем. Беҙҙекеләр машинаға табан йүгерә башланы. Мин урманға кереп, ишекте асып ебәрҙем дә, ергә ауып, тупраҡты үбергә тотондом, үҙемә һауа ла етмәй...

Эргәмә тәүләп йәш кенә бер егет килеп етте лә мыҫҡыллай башланы: «Әһә, фриц тәреһе, аҙаштыңмы?» – ти. Гимнастёркаһына йәшел погон таҡҡан, ундай погондарҙы күргәнем дә юҡ әлегәсә. Шунда немец пилоткаһын аяҡ аҫтына бәрҙем дә, әйттем: «Эх һин, тәтәй егет, мәмәй ауыҙ! Улыҡайым! Ниндәй фриц булайым ти мин һиңә: мин бит тыумыштан Воронеждыҡы! Пленда инем мин, аңланыңмы инде? Хәҙер машинала ултырған бынау

дуңғыҙҙы сисегеҙ ҙә портфелен алығыҙ, ә мине командирығыҙға илтегеҙ», – тим. Шунан үҙҙәренә пистолетымды тапшырҙым да, ҡулдан ҡулға күсеп йөрөй торғас, кисләтеп бер полковник янына барып индем. Дивизия командиры булып сыҡты үҙе. Ошоғаса мине ашатып-эсереп, мунсала ышҡып, допростар алып, кейем-һалым да биреп өлгөргәйнеләр. Шулай итеп, полковник блиндажына барып ингәндә, тәнем дә, йәнем дә сафланған һәм үҙем тейешле формала инем. Полковник мине өҫтәл артынан сығып ҡаршы алды. Шунан һуң бөтә офицерҙар алдында ҡосаҡланы ла: «Немецтарҙан алып ҡайтҡан затлы «бүләгең» өсөн рәхмәт һиңә, һалдат! Һинең майор беҙҙең өсөн егерме «тел»дән дә ҡиммәтлерәк. Командованиенан үҙеңде хөкүмәт наградаһына тәҡдим итеүҙәрен юллаясаҡмын!» – тимәһенме! Бындай һүҙҙәрҙән, быңдай мөғәмәләнән шундай тулҡынландым, хатта ирендәрем дерелдәй, үҙ-үҙемде тыя алмайым. Бар көсөмдө туплап: «Мине, иптәш полковник, стрелковый часҡа ебәрегеҙ», – тип кенә әйтә алдым.

Полковник көлөп ебәрҙе лә яурынымды һыйпаштырып: «Аяғыңда көскә тораһың даһа, һинән ниндәй яугир сыҡһын? Бөгөн үк госпиталгә ебәрәм үҙеңде. Дауаларҙар, ашатырҙар, аҙаҡ бер айға ғаиләң янына отпускыға ҡайтып әйләнерһең, ә һине ҡайҙа ҡуйырға икәнде шунан һуң уйлашырбыҙ», – тине.

Полковник та, блиндаждағы барса офицерҙар ҙа ысын күңелдән ҡулымды ҡыҫып хушлашты. Уларҙан тамам тулҡынланып сығып киттем, сөнки ике йыл эсендә кешеләрсә мөғәмәләнең нимә икәнен дә онотоп бөтөргәйнем бит. Браток, бел йәнә: мин оҙаҡ ҡына ваҡыт, начальство менән һөйләшергә тура килһә, ғәҙәт буйынса, башымды елкәмә көҙрәйтә торғайным. Һуғып ебәрер тип, ирекһеҙҙән ҡурҡҡанға инде. Фашистар лагеры бына ниндәй хәлгә килтерҙе беҙҙе...

Госпиталгә барыу менән Иринаға хат яҙып һалдым. Әсиргә нисек эләккәнемде, нисек немец майорын алып ҡасҡанымды ҡыҫҡаса ғына яҙҙым. Әйтһәнә әле, сабыйҙарса маҡтаныу ҡайҙан килгәндер? Түҙә алманым, полковниктың миңә награда юлларға вәғәҙәләүен дә өҫтәнем, әй...

Ике аҙна буйы ашаным да йоҡланым. Әҙләп, ләкин йыш ашаттылар. Алдан артҡансы ашатһалар, кәкрәйер инем, шулай тине доктор. Шунда көс йыйҙым. Ике аҙна тигәндә бер нәмә лә ҡапҡы килмәй башланы, сөнки һаман өйҙән яуап юҡ. Шунда мин, дөрөҫөн әйтәйем, һағышҡа бирелдем. Ашау тигәнең иҫкә лә кермәй, йоҡо ҡасты, башта әллә ниндәй уйҙар сыуала... Өсөнсө аҙнала Воронеждан саҡ килеп төштө хат. Тик уны Ирина түгел, күршебеҙ Иван Тимофеевич яҙғайны. Кемгә лә ундай хат алырға Хоҙай ҡушмаһын! Ҡырҡ икенсе йылдың июнь айында немецтар авиазаводты бомбаға тотҡан, һәм бер ауыр бомба минең өй ҡыйығына төшкән. Шул хаҡта яҙған. Ирина менән ҡыҙҙарым нәҡ шул саҡ өйҙә булған... Уларҙың эҙҙәрен дә тапмағандар, ә өй урынында – тәрән соҡор... Хатты ул юлы аҙағынаса уҡый алманым. Күҙ алдарым ҡараңғыланды, күкрәгем ҡыҫылды, ебәрмәй ыҙалата. Койкаға ятып бер аҙ хәл йыйғас ҡына, уҡып бөттөм. Күршемдең һүҙҙәренә ҡарағанда, бомбаға тотҡан ваҡытта Анатолий ҡалала йөрөгән. Кисен посёлокка ҡайтып, теге соҡорҙо оҙаҡ ҡына ҡарап торған да төнгә йәнә ҡалаға киткән. Китер алдынан доброволец итеп фронтҡа ебәреүҙе һораясағын әйткән. Шул инде бына.

Йөрәгем ебәреп, ҡан баҫымы ҡолағымда шаулағас, вокзалда Ирина менән һаубуллашыуым иҫкә төштө. Ҡатынымдың күңеле был донъяла ҡабат күрешә алмаясағыбыҙҙы алдан уҡ һиҙгәндер. Ә мин шул саҡта уны этеп ебәрҙем... Ғаиләм бар ине, өйөм бар ине, уларҙы йылдар буйы йыйнаштырғайным, минут эсендә һәммәһе лә емерелде, япа-яңғыҙ ҡалдым. «Уңмаған тормошом төштә генә күренде микән әллә?» – тип уйландым. Ә мин бит әсирҙә һәр төндө тиерлек, эйе, эстән генә Иринам һәм балаларым менән серләшә инем: ҡайтырмын, йән киҫәктәрем, минең өсөн ҡайғырмағыҙ, мин – ныҡ кеше, иҫән ҡалырмын, тағы бергә булырбыҙ, тип йыуата инем... Эйе, ике йыл дауамында үле йәндәр менән һөйләшкән булып сығам да!..

Полковниктан бер айлыҡ отпуск алып, бер аҙнанан Воронежда инем. Ҡасандыр ғаиләм менән бергә йәшәгән ерҙәргә йәйәү барҙым. Тутлы һыу тулған тәрән соҡор, тирә-йүнде бил тиңенән үлән баҫҡан, ҡәбер тынлығы... Аһ, ауыр булды, брат! Аңҡы-тиңке торҙом-торҙом да йәнә вокзалға ыңғайланым. Бер сәғәткә лә ҡалғым килмәне, шул көндө үк ҡайтып киттем дивизияға.

Болот артынан сыҡҡан ҡояш һымаҡ, бер өс айҙан миңә лә шатлыҡ балҡыны: Анатолий табылды. Башҡа фронттан, буғай, миңә хат ебәргән. Адресымды күршебеҙ Иван Тимофеевичтан алған. Башта артиллерия училищеһында уҡый; шунда математикаға һәләтенең кәрәге тейә. Бер йылдан училищены «отлично»ға бөтөрөп, фронтҡа китә. Капитан званиеһы алғанлығын, «ҡырҡ бишенселәр» батареяһы менән командовать итеүен, алты ордены һәм миҙалдары барлығын – шуларҙы яҙған. Ҡыҫҡаһы, атаһын һәр яҡтан уҙып киткән. Мин уның менән тағы бер ғорурланып ҡуйҙым! Ни генә тимә, минең улым – капитан һәм батарея командиры, – ғорурлығы ни тора! Өҫтәүенә, күпме орден. Ә атаһы «Студебеккер»ҙа снаряд һәм башҡа һуғыш кәрәк-ярағын ташый икән, уныһы мөһим түгел. Атаһы эш-көш күргән инде, ә уның, капитандың, киләсәге алда әле.

Ҡасан осрашырбыҙ тип, елкенеп көтә башланым. Һәм... осраштыҡ... Нәҡ туғыҙынсы майҙа, иртәнсәк – Еңеү көнөндә – Анатолийымды немец снайперы һәләк иткән...

Төштән һуң рота командиры мине үҙ янына саҡыртып алды. Күрәм, мин белмәгән бер артиллерия подполковнигы ултыра янында. Бүлмәһенә керҙем, подполковник, үҙенән юғарыраҡ званиелы хәрби алдына үрә тороп баҫты. Рота командиры миңә: «Һиңә килгән, Соколов», – тигәс, үҙе тәҙрәгә боролдо. Тәнемде электр тогы сәнскеләгән кеүек булды – хәтәр хәбәр һиҙендем. Подполковник эргәмә килде лә әкрен генә: «Үҙеңде ныҡ тот, атай кеше! Улың, капитан Соколов, бөгөн иртән батареяла һәләк булды. Әйҙә минең менән!» – тине.

Бәүелдем, ләкин йығылманым. Ул саҡ подполковник менән бергә ҙур бер машинала нисек барғаныбыҙҙы, еме-

рек тулы урамдарҙан үткәнебеҙҙе, ҡыҙыл бәрхәт менән көпләнгән табут эргәләй теҙелгән һалдаттарҙы хәҙер төштәге шикелле генә хәтерләйем. Ә Анатолий, нәҡ бына хәҙер һине күргән кеүек, күҙ алдымда, брат. Табут янына барып баҫтым. Унда ятҡан улым һәр ваҡыт йылмайыусан, тар яурынлы, тамаҡ төйөрө бүлтәйеп торған бер малай ине, әле киң елкәле, сибәр ир ята, күҙҙәрен яртылаш йомған да, минең аша, ҡайҙалыр, билдәһеҙлеккә төбәлгән. Ирен ситтәрендә элекке Тольканың, ҡасандыр мин белгән улымдың көләмһерәүе генә мәңгегә ҡалған... Үптем дә үҙен, ситкәрәк тайшандым. Подполковник телмәр тотто. Анатолийымдың дуҫ-иптәштәре күҙҙәрен һөртә, ә минең йәш сыҡманы, йөрәгемдә кибеп ҡалды, күрәһең, шуға ла ауырта торғандыр әле...

Һуңғы йыуанысымды һәм өмөтөмдө ят ергә, немец еренә, күмдем шулай; улымдың батареяһы үҙ командирын йыраҡ юлға оҙатып, гөмбөлдәтеп атып ебәрҙе, йөрәктә нимәлер өҙөлгән кеүек булды... Үҙемде кеше танымаҫтай хәлдә часҡа ҡайтып киттем. Оҙаҡламай мине демобилизовать иттеләр. Ҡайҙа барайым? Воронежға ҡайтырғамы? Юҡ! Урюпинскиҙа дуҫым барлығы иҫкә төштө. Уны, йәрәхәт алғанға, ҡыш көнө үк демобилизовать иткәйнеләр. Бер ваҡыт унық үҙҙәренә саҡырғанын хәтерләп, Урюпинскиға кит тә бар мин.

Ҡай саҡ рейстан ҡалаға ҡайтаһың да, кәнишнә, берәй нәмә алыр өсөн иң әүәл сәйханаға инәһең. Бер көн сәйхана тирәһендә ошо малайҙы күрәм, икенсе көнө – тағы. Бәләкәс кенә йолҡош – уймаҡтай бите туҙанға ҡатҡан, ҡарбуз һутына буялып бөткән, ер кеүек бысраҡ, сәсе туҙған, ә күҙҙәре – төнгө ямғырҙан һуң баҙлаған йондоҙ ише! Шул ҡәҙәр яраттым – иҫең китер! Һағына башланым үҙен, рейстан тиҙерәк күргеләрем килеп ҡайтам. Сәйхана янында кем нимә бирә, шуның менән туҡлана был малайҡай.

Дүртенсе көндө совхоздан иген тейәп ҡайтышлай туп-тура сәйханаға боролдом. Малайым ултыра болдорҙа аяҡтарын һелкеп, ас икәне күренеп тора. Тәҙрәнән башымды тыҡтым да ҡысҡырҙым: «Әй, Ванюшка! Ултыр әйҙә тиҙерәк, элеваторға елдереп апарам үҙеңде, унан

ҡайтырбыҙ ҙа ашап алырбыҙ!» Ул минең тауышҡа һиҫкәнеп китте, соландан һикереп төшөп, машинаның баҫҡысына үрмәләп менде лә әкрен генә: «Ә һеҙ, ағай, минең Ваня исемле икәнде ҡайҙан беләһегеҙ?» – тип һораны. Күҙҙәрен шар асҡан да минең яуап биргәнде көтә. «Мин күпте күргән кеше, бөтәһен беләм», – тип кенә әйттем.

Малай машинаның уң яғынан яҡынайҙы, ишекте асып, йәнәш ултырттым да, елдерҙек. Былай бик сос малай, ләкин кинәт уйға ҡалды, тын тора ла, өҫкә бөгөлөп үҫкән оҙон керпектәре аҫтынан миңә ҡарап, ауыр ғына һулап ҡуя. Үҙе ҡош балаһылай ғына, ә эленән үк ауыр һуларға өйрәнгән. Бала хәсиәтеме ни был? «Атайың ҡайҙа һуң һинең, Ваня?» – тип һорайым бынан. Бышылдап ҡына: «Фронтта үлде», – ти. «Ә әсәйең?» «Әсәйҙе, поезда килгәндә, бомба төшөп үлтерҙе». «Бында туғандарың бармы һуң?» «Бер кемем дә юҡ». «Ә ҡайҙа төнәйһең?» «Ҡайҙа етте шунда».

Шул ваҡыт әсе ҡайнар күҙ йәштәрем бәреп сыҡты һәм мин ҡапыл «Икебеҙгә ике ерҙә юҡҡа сығырға ярамаҫ! Үҙемә балалыҡҡа алам мин быны» тигән ҡарарға килдем. Күңелем шундуҡ еңеләйеп һәм яҡтырып киткәндәй булды. Тегеңә эйелеп, шым ғына һорайым: «Ә һин, Ванюша, минең кем икәнемде беләһеңме?» Ул тын алмаҫ борон: «Кем һуң?» – тип ҡуйҙы. Мин шым ғына: «Һинең атайың», – тинем.

Йә Хоҙай! Күрһәңсе шунда ни булғанын! Муйыныма һырылды ла битемде, ирендәремде, маңлайымды үбергә тотондо, ә үҙе, сәпсек шикелле, шундай нескә һәм сыңлатып ҡысҡыра, хатта кабина эсен яңғырата: «Атаҡайым! Мин бит белдем! Эҙләп табырыңды белә инем! Тапмай ҡалмаҫһың тинем! Һинең табырыңды шундай оҙаҡ көттөм!» Мине һығып ҡосаҡлаған да елгә һелкенгән үләндәй дерелдәй был. Ә минең күҙ алдым томаланды, бәлтерәйем, ҡулдарым ҡалтырай – нисек шунда рулде ысҡындырып ебәрмәгәнмен. Улай ҙа яңылыштан йырынға янтайып керҙем. Моторҙы һүндерҙем дә, күҙ алдарым асыҡланғансы, ҡуҙғалырға ҡыймай торҙом, берәйһен тапатмайым тип... Шул килеш бер биш минут ултыра

бирҙем, ә улым бар көсөнә һырыҡҡандан-һырыға, үҙе ләм-мим өндәшмәй, дерелдәй генә. Мин уны уң ҡулым менән ҡыҫып алып, һул ҡулым менән машинаны борҙом да фатирыма һыпырттым. Ҡайҙа ул элеваторға барыу, ул ваҡытта элеваторҙы уйларлыҡ хәлдә инемме ни!

Машинаны ҡапҡа төбөндә ҡалдырҙым да, улымды ҡабат күтәреп, өйгә керҙем. Ә ул муйынымдан ҡулын алманы. Битен минең ҡырылмаған биткә терәгән дә, хас йәбешкән кеүек. Мин уны шул килеш күтәреп керҙем дә. Хужа менән хужабикә өйҙә ине. Керҙем дә, тегеләргә ике күҙемде лә ҡыҫа-ҡыҫа, шатланып әйттем: «Таптым бит Ванюшамды! Алығыҙ, дуҫтар, беҙҙе үҙ янығыҙға!» Теге балаһыҙ әҙәмдәр эштең ниҙә икәнен һиҙеп алдылар ҙа зыҡ ҡуба башланылар. Ә мин улымды үҙемдән һис кенә айыра алмайым. Улай-былай итеп саҡ күндерҙем. Ҡулдарын һабынлап йыуҙырып, өҫтәл артына ултырттым. Хужабикә уның тәрилкәһенә щи һалды ла, малайҙың ҡарһалан ашағанын күреп, сеңләргә тотондо. Шулай, күҙ йәштәрен алъяпҡысы менән һөртә-һөртә, мейес янында баҫып тора был. Ванюшкам уның илағанын күрҙе лә, йүгереп барып, итәгенән тарта башланы: «Ниңә илайһың, апай? Атай мине сәйхана янында тапты, быны өсөн барыбыҙға шатланырға кәрәк, ә һин илайһың», – ти. Ә теге, йә Хоҙай, нығыраҡ илай – бөтөнләй ебене!

Аштан һуң парикмахерға эйәртеп барып сәсен ҡырҡтырҙым, ә ҡайтҡас, ялғашта ҡойондороп, таҙа йәймәгә төрҙөм. Мине ҡосаҡлаған килеш, ҡулымда йоҡлап китте. Әкрен генә карауатҡа илтеп һалдым да үҙем элеваторға ашыҡтым. Унда ашлыҡты бушатып, машинамды туҡталышҡа ҡуйғас, магазинға йүгерҙем. Улыма буҫтау салбар, күлдәк, сандали, үрелгән картуз алдым. Һәммәһе лә, билдәле, ҙур һәм сифатһыҙ булып сыҡты. Салбар өсөн хужа ҡатыны әрләне үҙемде. «Ошондай эҫелә баланы буҫтау салбар менән йөрөтөргә аҡылдан яҙҙыңмы әллә?» Тиҙ генә тегеү машинаһын өҫтәлгә ҡуйҙы ла һандығын аҡтарҙы, һәм бер сәғәттән Ванюшкама сатин трусик менән ҡыҫҡа еңле аҡ күлдәк тегелеп тә бөттө. Улым менән йоҡларға йәнәш яттыҡ һәм нисә йылдан бирле тәү тапҡыр

тынысланып йоҡоға сумдым. Шулай ҙа төндә кәмендә дүрт тапҡыр уянып ултырғанмындыр. Ә ул, ҡыйыҡ аҫтына һыйынған сәпсек һымаҡ, ҡултыҡ аҫтымда һыйынып ята, әкрен генә мышнай – күңелгә бик тә рәхәт, һөйләп бөтөргөһөҙ! Уны уятмаҫ өсөн ҡыймылдамаҫҡа тырышам, әммә түҙмәйем, шым ғына тороп ултырам да, шырпы һыҙып, яратып туймай ҡарап торам…

Таң алдынан уянып китһәм, ниңәлер тыным ҡыҫылаҫы. Нилектән – аңлай алмайым. Бәй, улым юрған аҫтынан сығып, арҡыры ятҡан да бәләкәс аяҡтарын минең муйынға һалған. Бер ҙә тыныс йоҡлап булмай үҙе менән, шулай ҙа күнектем, айырым күңелһеҙ йоҡлана хатта. Ҡайһы саҡ төндә уянаһың да, йоҡлап ятҡан еренән һыйпап ҡуяһың, йәки маңлай сәсен еҫкәйһең, йөрәгең ял алғандай була, юғиһә, ҡайғыларҙан таш кеүек ҡатҡан бит йөрәккенәм…

Тәүҙә ул минең менән машинала рейстарға бергә йөрөнө, һуңға табанараҡ былай ярамағанын аңланым. Минең яңғыҙ башыма нимә кәрәк? Бер телем икмәк, бер баш һуған да тоҙ. Һалдат кешегә шул оҙон көнгә етә. Ә уның менән – эш башҡа: һөт табырға кәрәк үҙенә, йә йомортҡа бешерергә кәрәк, йылы аш бирмәй ҙә ярамай. Эш көтөп тормай ҙаһа. Бер саҡ ихтыярымды йыйҙым да үҙен хужа ҡатынына ҡалдырып киттем. Малайым көн буйы балауыҙ һығып йөрөгән дә, кисен мине ҡаршы алырға тип, элеваторға киткән. Йә инде, ҡараңғы төшкәнсе мине көтөп торған бит әле.

Баштараҡ уның менән бик ҡыйын ине миңә. Бер кис ҡараңғы төшмәҫ борон яттыҡ: мин ул көндө бик арыным, ә ул, гелән турғай балаһылай сырҡылдаған нәмә, кинәт шымып ҡалды. Һорайым: «Нимә уйлайһың, улым?» Ә ул түшәмгә ҡараған да, үҙе минән һорай: «Ә һин, атай, күн кейемеңде ҡайҙа ҡуйҙың?» Минең ғүмерҙә лә күн кейем кейгәнем юҡ! Алдашып ҡотолорға тура килде: «Воронежда ҡалды», – тим. «Ә ниңә мине шулай оҙаҡ эҙләнең?» – ти. Мин уға: «Мин һине, улым, Германиянан да, Польшанан да эҙләнем, тотош Белоруссияны гиҙеп сыҡтым, ә һин Урюпинскиҙа табылдың», – тим. Йоҡо алдынан шулай һөйләнеп ятабыҙ.

Ә һин, брат, ул көн кейем хаҡында бушҡа һорағандыр тип уйлайһыңмы? Һис тә тәккә түгел! Тимәк, үҙ атайы ҡасандыр көн кейемдә йөрөгән һәм шул уның хәтеренә төшкән. Бала хәтере йәйге һаҙағай һымаҡ ул: ҡапыл ялтырай ҙа, ҡыҫҡа ваҡытҡа бар нәмәне яҡтыртып, һүнеп тә ҡуя. Эйе, уның да хәтере һаҙағай ише ялтырап ала ҡай саҡ.

Бәлки, Урюпинскиҙа тағы берәй йыл йәшәр инек тә, тик ноябрь айында йәнә бәләгә юлыҡтым: бер хуторҙан батҡаҡ йырып уҙғанда, машинам ситкә шыуып китте лә, ҡайҙандыр бер һыйыр тап булып, шуны бәреп йыҡтым. Ундай саҡ хәлде аңлайһың: бисәләр ҡысҡырына, халыҡ тиҙ йыйыла. Нәҡ шунда әллә ҡайҙан автоинспектор ҙа пәйҙә булды. Шофёрлыҡ кенәгәһен тартып алды был. Күпме инәлһәм дә. Ә һыйыр аяҡланып алды ла, тыҡрыҡ буйлап ҡойроҡ сәнсеп сапты. Мин иһә таныҡтамаһыҙ ҡалдым. Ҡышын балта оҫтаһы булып эшләнем, аҙағыраҡ бергә хеҙмәт иткән икенсе иптәшем менән хатлаша башланым. Өлкәгеҙҙең Кашары районында шофёр ул. Шул мине үҙҙәренә саҡырҙы. Балта оҫтаһы булып бер ярты йыл эшләрһең дә, аҙаҡ беҙҙең өлкәлә яңы кенәгә алырһың, тип яҙған. Әле бына улым менән командировкаға шул Кашарыға йәйәүләп поход тәртибендә юлланғанбыҙ.

Унан һуң, әйтәйем инде һиңә, теге һыйыр ваҡиғаһы килеп сыҡмаған булһа ла, мин барыбер Урюпинскиҙа ҡалмаҫ инем. Һағыш тигәнең мине бер урында оҙаҡ ятҡырмай. Ванюшкам үҫә төшөп, мәктәпкә бирер ваҡыт еткәс, аҙ-маҙ тынысланып, берәй ергә төпләнеп тә ҡалырмын, бәлки, ә хәҙергә рус ерен гиҙәбеҙ әле икәүләп.

* * *

Урманда юлдашымдың тауышы һәм ишкәк сапылдағаны ишетелде.

Бөтөнләй ят булған, әммә миңә яҡынайып өлгөргән кеше баҫты ла ағастай ҡаты, ҙур ҡулын һуҙҙы:

– Һау бул, брат, бәхетле йәшә!

– Үҙеңә лә Кашарыға хәйерле сәғәттә барып етергә яҙһын!

– Рәхмәт. Әйҙә, улым, кәмә яғына барайыҡ әле.

Малай йүгереп килде лә, атаһының уң яғына сығып, һырма сабыуына тотондо һәм эре-эре баҫып барған ир кеше янынан ваҡ ҡына аҙымдар менән юрғаланы.

Ике йәтимәк, һуғыштың утлы өйөрмәһе сит ерҙәргә ташлаған ике ҡом бөртөгө... Алда ни көтә уларҙы? Һынмаҫ ихтыярлы ошо рус кешеһе барыһына ла бирешмәҫ, малай ҙа атай ҡанаты аҫтында үҫер һәм Ватан ҡушҡан сүрәттә, бөтөн һынауҙарға түҙеп, юлындағы барса кәртәләрҙе еңеп сығыр, тип күҙаллағы килә.

*(Руссанан Сабир Шәрипов тәржемәһе)*

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** М. А. Шолохов был әҫәрен ни өсөн «Кеше яҙмышы» тип атаған?
**2.** Хикәйәнең төп геройы кем ул?
**3.** Һуғыштың башланыуы, Андрей Соколовтың тәүге көндә үк фронтҡа алыныуы тураһында һөйләгеҙ.
**4.** Төп герой  һуғышҡа китер алдынан ғаиләһе менән хушлашҡанда Иринаны этәреп ебәргәне өсөн үҙен ғүмер буйы ғәйепләй. Ни өсөн?
**5.** Андрей Соколовтың әсирлеккә эләгеүе тураһында һөйләгеҙ.
**6.** Фашист концлагерҙарындағы шарттар һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты?
**7.** Андрей Соколовтың хыянатсыны үлтереүенә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Дөрөҫ эшләгән тип уйлайһығыҙмы? Ошо темаға әңгәмә ҡороғоҙ.
**8.** Андрейҙың әсирлектән ҡасырға йыйыныуы тураһында һөйләгеҙ.
**9.** Немец майорын беҙҙекеләр яғына ул нисек алып сыға?
**10.** Геройҙы  тыуған йортонда нимә ҡаршылай?

## Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ

Класығыҙ менән бергәләп интернеттан «Кеше яҙмышы» фильмын ҡарағыҙ. Хикәйә менән сағыштырып, уларҙың уртаҡ һәм айырмалы яҡтары тураһында һөйләшеү ойоштороғоҙ.



Ғайса

# ХӨСӘЙЕНОВ

(1928)

«…Минең бала сағым ауылымдың бер гөрләп торған сағына тура килеүе менән бәхетле лә төҫлө үҙемә.

Мәктәпкә, беренсе класҡа муҡсаһыҙ-ниһеҙ, ҡулыма бер дәфтәр менән ҡәләм тотоп барғаным хәтеремдә. Тәүге уҡытыусым үҙ ауылыбыҙға Ҡабаҡ ауылынан килен булып төшкән йәп-йәш кенә Кәшифә Наримбаева апай ине. Йәш булһа ла матур уҡытты, тейешле белемде бирә алды (аҙаҡ белермен: беҙҙе уҡытҡанда ул етенсе класты ғына тамамлаған булған).

Беренсе класҡа инде мин әсәйем өйрәткеләүе буйынса хәреф танып, үҙ алдыма уҡырға өйрәнеп барғайным. Шуға уҡып китеүҙәре еңел, хатта көрәгенән артыҡ анһат тойолдо. Кәшифә апайыбыҙ беренсе менән өсөнсө кластарҙы ике яҡҡа бүлә бер юлы ҡушарлап уҡытты: беҙгә, беренселәргә, һабағын тиҙ генә өйрәтә лә, күнекмәһен ҡушып, йәнәштәге өсөнсө класҡа дәресен бирергә күсә. Мин уҡытыусы биргән эштәрҙе тиҙ генә эшләп бөтә һалам да уның өсөнсө класта дәрес биргәнен түңәрәк мейес артынан ғына тыңлап үҙләштереп торам. Әйтерһең, бер юлы ике класта уҡыйым. Быны белеп, уҡытыусым башта иҫкәртеүҙәр яһай торғайны, аҙаҡ беренсе класс материалы миңә еңел бирелгәс, был ҡылығымды тыймаҫ булды, хатта хуплағандай итте.

Һәр хәлдә, уҡыу минең өсөн еңел бирелде, гел алдынғылар сафында иҫәпләндем, Маҡтау грамоталары алдым. Мәктәптә уҡыу минең өсөн белем алыу ғына түгел, үҙе бер күркәм донъя, байрам кеүек ине.

Китап уҡыу менән мауығып киттем. Мауығыу, тим тағы – бөтөнләй китап донъяһына сумдым. Ғәжәйеп тә баһа, китап биттәре аша ғына, бер илгиҙәр төҫлө – әллә ниндәй илдәр, ерҙәр гиҙәһең, хайран итер хәлдәр менән осрашаһың, донъялағы әллә нимәләр хаҡында белеп

бөтәһең. Матур әҙәбиәт тигәне уғата ҡыҙыҡлы: сәйәхәттәр, мажаралар, төрлө-төрлө кешеләр хаҡында ғәжәпһенеп уҡыйһың. Берсә ҡыуанаһың, берсә үртәләһең, ҡыҙғаныс мөлдәрҙә хатта илар сиккә етәһең. Күҙҙән йәштәр тәгәрәп төшкән саҡтар ҙа аҙ булмаҫ ине. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та шул китаптағы кешеләр донъяһы.

Шулай өй, хужалыҡ эштәренән бушаған араларҙа гел китап булыр ине ҡулымда. Өс-дүрт ҡыш эсендә ауыл мәктәбенең утыҙынсы йылдарҙағы әллә ни бай булмаған китапханаһындағы бар китаптарҙы уҡып бөттөм, буғай. Унда башҡортса, бер ни ҡәҙәр татарса һәм тәржемәлә ниндәй әҙәбиәт бар – барыһын да.

Әҙәбиәт донъяһына, әҙәбиәт ғилеменә килеүемдең башы, тәү орлоҡтары ана шул бала сағымда уҡыған китаптарымда ята тип уйлайым. Китаптар, дәреслектәр балаға белем биреп кенә ҡалмай, уның хыялын байыта, зиһененә ҡеүәт өҫтәй торғандыр. Беҙҙең бала саҡта китап бар белемдең, әҙәбиәттең, сәнғәттең берҙән-бер тиерлек төп сығанағы ине. Ғилем, рухи хазиналар иле икән ул китап.

Китапҡа әүәҫләнеүемдең бер ғилләһен дә әйтәйем әле: бала кешегә көн оҙоно эш ҡай саҡ ялҡытып бөтә торғайны. Ни генә тимә, эш – майлы бутҡа түгел. Эш-көштән әҙ генә бушаныммы, күңелем китапта. Ул бөтә донъяны, арығанды оноттора. Мин хатта көҙөн мәктәпкә уҡырға төшөүҙе зарығып көтөп ала инем. Ярты көнөң мәктәптә уҡыу, тәнәфестәрҙә төрлө уйын, шаярыу менән мәж килеп үтә. Һис арттырмайым, бәләкәй саҡтағы уҡып йөрөүҙәр бер күрк кеүектәр миңә.

Китапҡа яҙылғандарға мөкиббән китеп, балалыҡ бер ҡатлылығы менән ысын күңелдән ышанып, бирелеп уҡыуҙың ләззәтен балалар көслөрәк татый торғандыр. Донъяла иң ҡыҙыҡ китап – бала саҡта уҡылған китап, иң хәтерҙә ҡалған әҫәр – бала саҡта уҡылған әҫәр.

Донъяла кешенең күңелен нимә булһа ла яҡтыртып, йылытып торорға тейеш. Ул һөйөүме, һөйөнөсмө, йылы һүҙме, сәнғәтме, әҙәбиәтме – барыбер. Зауығына күрә рухы, күңеллегенә күрә күңеле.

Бала саҡта күңелдәргә һалынған осҡондарҙан да көслө нәмә юҡтыр ул. Ундай осҡондарҙан, ғәҙәттә, ялҡындар ҡабына.

Мәктәп минең күңелемә китапҡа һөйөү осҡоно һалып, уны ялҡынуттар итеп дөрләтеп ебәреште...”

Был юлдар атаҡлы ғалим, яҙыусы Ғайса Хөсәйеновтың «Яҙмышыма яҙғаны» тигән китабынан алынды. Ул хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районының Үтәгән ауылында тыуып үҫкән. Филология фәндәре докторы, профессор. Башҡортостан Республикаһы фәндәр академияһы академигы. Әҙәбиәт ғилеме буйынса тиҫтәләрсә китап авторы. Уның «Алдар батыр ҡиссаһы», «Пугачёв фельдмаршалы», «Ҡанлы илле биш», «Батырша», «Донъя», «Ил азаматтары», «Яҙмышыма яҙғаны» кеүек проза әҫәрҙәре китап һөйөүселәргә яҡшы таныш.

Ғалим һәм яҙыусының аҙаҡҡы китабынан алынған өҙөк, хөрмәтле уҡыусылар, тап һеҙҙең йәштәгеләргә тәғәйенләнгән. Аңлағанһығыҙҙыр, бала саҡтан китап яратҡан кеше  Ғайса Батыргәрәй улы кеүек юғары үрҙәр яулай ала.

**Интернеттан мәғлүмәт табабыҙ**

Интернеттан һәм белешмә баҫмаларҙан Ғайса Хөсәйеновтың тормош юлы һәм ижады тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр табығыҙ.

## ҺУҢҒЫ ТАРПАН

*(Хикәйәт)*

### I

Тыуған ауылыма бер ҡайтҡанда, ҡасандыр һабан һөрөп йөрөгән саптар бейәне күреп, яманһыулап ҡалғайным. Заманында колхоздың ауыр йөгөн һөйрәшкән хайуан инде ҡартайып, яраҡһыҙға сығып, тамам өшәнеп бөткән. Оса һөйәктәре һерәйеп ҡатҡан, күпме ауыр йөктән, күпме ҡолон аҫрауҙан ҡорһағы ике яҡҡа бүлтәйеп, аҫҡа һалынып төшкән. Үҙе көскә баҫып тора. Башын эйгән көйө, үҙе дайым юшамға талған, тоноҡ күҙҙәренән сыбашҡып йәш тама.

Ҡапыл йөрәгем жыу итеп китте: һабан атым өнһөҙ илай ине. Йәш, сапсан, тилбер саҡтарын, өйөр айғырына ҡушылып, өйөрө менән сапҡан, ҡолон үҫтергән, ер һелкетеп йөрөгән саҡтарын һағынып, өн аралаш төш күреп илай төҫлө тойолдо ул миңә. Ат ғүмеркәйенең һуңғы мөшкөл, аяныс хәле йөрәгемдә өтөп үтте.

Ғәлиулла бабайымдың хәҙерге башҡорт аттарының боронғо тоҡомдары ҡырағай аттар, ҡолан, тарпандар[1] тураһында һөйләгәндәрен ишеткәнем бар минең. Әллә әлеге саптар бейәнең аяныс хәле, әллә әүәл ир-егеттәрҙең ҡанаты булыр аттарҙың хәҙер ҡәҙере китеүе, әллә кешенең йәшлектә йәшнәп, ҡартлыҡта иңрәп йәшәр ғүмер һуңы мөшкөллөктәре әле бабайымдың һуңғы тарпан хикәйәтен хәтергә төшөрҙө.

---

[1] *Ҡолан, тарпан* – ҡырағай аттарҙың тоҡомдары.

Борон ҡырағай аттар – ҡолан, тарпандар бик ишле булған икән. Ҡылғанлы далалар, туғай, үҙәндәр уларҙың төп төбәге булған. Ҡышын йоҡа ҡарҙа тибендә йөрөгән, йәйен төньяҡ урман-далаларына саҡлы йәйелгән. Тора-бара Яйыҡ, Иҙел, Тын (Дон) буйҙарына халыҡ күсеп төпләнеп ултыра башлағас, далалар һөрөнтөгә әйләнгәс, тарпандарға йәйрәп йөрөр ерҙәре тарайған. Уларҙың байтағы һилерәк яҡтарға таралған. Өҫтәүенә, ите тәмле был ҡырағай йылҡыларҙы һуғым өсөн, өйөрө-өйөрө менән ҡыра башлағандар. Шулай итеп, борон ер ябып йөрөгән тарпандар бөтөнләй аҙайып, хатта тамам бөтөр хәлгә еткән.

Уларҙы шул хикәйәт итеп һөйләргә генә ҡалды инде хәҙер.

Шулай ишле тарпандарҙан ҡасандыр бер нисә өйөр генә иҫән ҡалған. Ул да өйөр башы айғырҙың үтә сослоғо, ажарлығы арҡаһында, ахырыһы.

Тарпан – үтә һаҡ, тилбер һәм йылғыр йылҡы. Әммә бар ғилләә өйөр башында. Өйөр башы сос икән, өйөр ҙә имен-аман. Бейә, тай, ҡолон, ҡонандар утлағанда ла, юшағанда ла айғыр һәр саҡ уяу. Өйөр уйһыуҙа утлап йөрөй, ә айғыр ҡалҡыулыҡта ҡолаҡтарын шымайтып һаҡта тора. Ул-был хәүеф-хәтәр тойолһа, ужғырып хәбәр һала, өйөр йәһәт кенә хәүефһеҙ ергә күсә йә ҡасып ҡотола. Ә айғыр тарпан өйөрҙө ҡурсалап иң арттан бара йә ҡурҡыныс һалған аусы-яусыға, ҡош-ҡортҡа ҡаршы алдан йомола. Айғыр ажар икән, өйөр ҙә иҫән-һау.

Өйөргә һил урын һайлаусы, үҙ белемдәрен билдәләүсе, кәрәк сағында ҡурсыусы, һуғарыуға алып барыусы, юл башлаусы, кире бороусы ла – өйөр башы. Өйөр айғыры талбыр икән, өйөр ҙә туҡ. Айғыр аҫау икән, өйөр ҙә түлле.

## II

Шулай һуңғы тарпан өйөрҙәренең береһендә оло баш, ҡыҫҡа муйын, шырт яллы, сысҡан һыртлы бер һайҙаҡ[1] тай бүтән тай-тулаҡтарҙан айырылыбыраҡ торған икән.

---

[1] *Һайҙаҡ* – шәп, һайлам.

Ҡойроҡ сәнсеп сапһа, алғыр булған, йонсоу-йүшән көндәр килһә, талбыр булған. Тай-һәүеректәргә ал бирмәгән. Моронона еç кергәс, бейәләр тирәһендә уралғылаған. Ужарынған, сапсынған. Ләкин ҡарт өйөр башынан бик тиҙ өлөш алып, тибелеп-биртенгеләп, йыш ҡына шымып ҡалған. Ҡырағай йәш ҡан ҡайнаһа ла, дарман етмәгән.

Киләһе йылынамы, нисек, күк үлән күтәрелеп, өйөр утығып, тыу бейәләр йомролап алғас, ер-уттан[1] ҡеүәт алып, шырт ял һайҙаҡ тай тарпан аҙау[2] йәш айғырға әйләнгән. Үҙе өйөр башы, бейәләр эйәһе булыр өсөн ҡарт айғыр менән яман алышҡа сыҡҡан. Һайҙаҡ тай башта ер тырнап сапсынған, өйөр тирәләй өйөрөлөп йөрөгән, өйөр башына уҡталғылап ҡараған.

Былтырғылай бер-ике биртендергәнсе ҡаты-ҡаты тибеп, айҡап өркөтөп ташларға самалаған ҡарт айғыр йәш тарпандың һырт бирмәүенә башта бер аҙ маҙап ҡалған. Алғырлыҡҡа алыш үлем йә ҡалыш төçөн алған. Хәйләкәр ҡарт тарпан тарпанлап һөжүм ҡылған, яман ужғырып, ҡолаҡтарын ҡайсылап йәш аҙауға уҡталған, бер-ике быраҡтырып осорған, үрһәләнеп күкрәгенә яçҡынған, өс-дүрт тапҡыр умыра тешләп алған, баçтырғылап йөрөткән.

Таңдан башланған алыш көн үҙәгенә ҡыҙа биргән. Ҡанға, туҙанға батһа ла, һөрлөгөп, иңрәп китһә лә, йәш айғыр был юлы бирешмәгән, йәш ҡан ҡыҙа ғына барған. Көсө китә башлаған, арыған ҡарт өйөр башы йәш ҡаты тояҡ, үткер тештәрҙең кәрен[3] ныҡыраҡ татыған, моронғабашҡа эләккән бер-ике тояҡтан алйып, миңрәп төшкән. Аҙаҡтан аçау айғырҙың үрәпсеп өçтөнә ырғыуын, муйынынан киçә тешләп, түкмәстереп ебәреүен дә абайламаған. Ергә ауған ҡарт тарпандың башына, моронона, күкрәгенә, ҡорһағына ҡатынан-ҡаты тояҡтар төшкән…

Шулай үлемесле алыш йәш айғыр файҙаһына тамамланған. Эшлектән сығарып ташланған баш тарпанға

---

[1] *Ер-ут* – үлән-һут.
[2] *Аҙау* – баш бирмәç уçал, аçау.
[3] *Кәр* – көс.

кәре китеп, туйлы ғүмере үтеп, ҡарт алаша хәлендә тереклек итәһе ҡалған.

Ҡанға, туҙанға буталған йәш тарпан кешнәп, ер тырнап сапсып, үҙенең өйөр башы, аҫау толпар икәнен белдергән. Шомланып, һағайып торған өйөр, тыу бейәләр йәш айғыр тирәһенә ығышҡан. Йылҡы туйлар, түлләр саҡтар еткән.

Йәш, йылғыр өйөр башы яйлыраҡ яңы биләмдәр, туплымдар, һыулауҙар тапҡан. Өйөрөн туры толпар айырым бер хиреслек менән ҡурсыған. Хәүеф-хәтәр, ҡытлыҡ, йотлоҡ онотолған. Бейәләр һәр береһе түлләнеп, тай-тулаҡтар, һәүеректәр[1], ҡонан[2], дүнәндәр[3] ишәйеп киткән, үрсем артҡан. Табун туп-туп булып иркен далаларҙы иңләгән, тарпан етер үлән-сәскәле туғай-яландарҙы ҡыҙырған. Йәш һайҙаҡлы, туҡ-түлле ҙур өйөргә ҡошҡорт та тейә алмаған.

Тик бер яман ҡарлы-боҙло йот[4] йылды өйөрҙән бүленеп мал ҡырылған. Туры тарпан үҙ өйөрөн бауырҙан ҡарҙар йырып тибен ерҙәргә юлланған. Юлда йәш мал-тыуар ятып ҡалған, өйөр миктәгән.

Таяҡ өҫтөнә туҡмаҡ: миктәгән өйөрҙө бер мәл ас бүреләр ҡамаған. Буранлы ҡара төндө бүреләр өйөрҙө олоп, сыйнап дүрт яҡтан ҡыҫа башлаған. Ауырыу, йонсоу ҡолон, тай-тулаҡты уртаға ҡалдырып, бейә-дүнәндәр ҡулсалап, өйөрҙө ҡурсыған, ырғыған бер бүрене тибеп түкмәстереп торған. Турайғыр өйөр тирәләй сабып ҡурсып йөрөгән: яҡынлашҡан бер бүре өйөрөнә ташланған, тиберен тибеп осорған, тапарын тапап үткән. Муйынына, түшенә йомолғандарын бырғып ташлаған. Тәнендә умырып тешләнгән бүре эҙҙәре яраһы артҡан, үҙе ҡанһырап хәлдән тайған. Шулай таң беленгәнсе алышып, ас бүреләр өйөрө һөжүмен кире ҡаҡҡан. Тарпан өйөрө тирәләй бүре үләкһәләре ятып ҡалған. Ә арыраҡ имгәнгән йә

---

[1] *Һәүерек* – үтә йәш айғыр мал.
[2] *Ҡонан* – ике йәштән өс йәшкә тиклем айғыр.
[3] *Дүнән* – дүрт йәшлек айғыр.
[4] *Йот* – көҙ ер өҫтө боҙлауыҡ менән ҡапланған йонсоу йыл.

баш-аяҡһыҙ ҡалған бүреләрҙе ас иҫәндәренең шашынып ашауына, ярһыуынан сың-сың ишетелгән...

Шулай төрлө йот-кырғындарҙан ҡырылып, ҡош-ҡорттарҙан ҡотолоп ҡалған тарпан өйөрө тағы түлләнеп тернәкләнеп киткән. Яңы тибенлектәргә юлыҡҡан, һил-мул ерҙәргә мулыҡҡан. Турайғырҙың туйлаған, бейәләрҙең биләнгән, тай-тулаҡтың уйнаҡлаған, ҡолон-ҡолонсаҡтың ҡойроҡ сәнсеп сапҡан саҡтарында дала кешнәү, сырҡырау, тупырлау тауыштарынан геүләп торған. Йәйрәгән йәй көҙрәгән көҙ, ҡыҫылған ҡыш яҙылған яҙ менән алышынған.

Турайғырлы тарпан өйөрөнөң иркен-ирәүән, һилауҡын, хәүеф-хәтәрһеҙ ғүмере шулай күпме дауам иткәндер, бер саҡ быға барыбер сик еткән. Ҡайҙандыр ҡара сапҡын килеп сыҡҡан. Тарпан тупламын шәйләп, һағалай башлаған, һағалап, башта һаҡсы сос турайғырҙы уҡтан уҙғарғандар, аҙаҡ өйөрҙө ҡамап, боғалларын боғаллап, үлтерәһен һөңгө, уҡтан үткәреп, ҡырып бөткәндәр. Тарпан һуғымын һоғонғандар.

Һуңғы турайғыр тарпан шулай һәләк булған.

Һуңғы тарпан өйөрө шулай ҡырылған.

Иркен далаларҙың иркен-ирәүән тарпанҡайҙары юҡҡа сыҡҡас, улар тураһында бары хөр хәтирәләр, моңһоу хикәйәттәр генә тороп ҡалған. Даланың меңйәшәр сал ҡылғаны ла шул ҡайғы-һағыштан салланған төҫлө.

Хәйер, бынан йөҙ йылдар самаһы элек бер баярҙың йылҡылары утлап йөрөгән яландарҙа, нисектер, бер ҡарт саптар тарпан бейә булған. Күпме япа-яңғыҙ йөрөүҙән ҡаңғырыпмы икән, төрлө ҡош-ҡорттарҙан биҙрәпме, әллә түлләнер өсөнмө, нисектер инде, ҡырағай мал йылҡы көтөүен ҡырлай башлай. Башта йылҡы быны ят итә, яҡын ебәрмәй. Тарпан, яйлап яҡынлашҡас, хәҙер уның үҙенә эйәләшеү еңел түгел: юҡ-барға өркөп-ҡурҡып бара.

Тарпан өйөргә ылығыр, ти. Әкренләп ылыға был, айғыр, тай-тулаҡ тирәһенә һырыға. Хәҙер йылҡы менән утлап йөрөй, юшап тора. Барына күнгәндәй итә.

Тик ҡырағай тиһәң дә ҡырағай шул, көтөүсене, әҙәм затын күреү менән ҡырыҫ бышҡырып, шымайып, өйөрҙө

ташлап ҡырға саба, көтөүселәр китһә генә, яңынан өйөргә килә. Йылҡы малы ял иткәндә, ул, һерәйеп, аяҡ өҫтө юшай. Утлауы ла, йоҡлауы ла бергә. Ҡыш йылҡы малы йылы аҙбарға ингәндә, ул, үҙ ғәҙәтен ҡыуып, ыжғыр яланда ҡала, көс-хәл менән ҡалын ҡарҙа тибенеп аҙыҡ таба, яҙғаса яңғыҙ йән аҫрай, тағы өйрәнгән йылҡы өйөрөнә ҡушыла.

Өсөнсө ҡыш тигәндә саптар тарпан бейә, үҙенең туры ҡолоно менән йылҡыға ҡушылып, йылы аҙбарға инергә баҙнат итә. Инеүе була, баярҙың бойороғо буйынса, уны бүтән йылҡынан айырып, айырым бикләп тә ҡуялар. Кәртә-ҡураны, сик-бикте белмәгән, иреклеккә, иркенлеккә күнгән ҡырағай тарпан меҫкен биккә алйып стенанан стенаға һуғыла, сапсып-үрәпсеп, бәрелеп-оролоп башын-моронон емереп, һырт-ҡабырғаларын һыҙырып бөтә. Стенаға бәреп, һул күҙен сығара.

Өс көн, өс төн өҙлөкһөҙ тулап, яман оролоп-бәрелеп, күҙенән яҙып, тамам алйып хәлдән тайғандан һуң, меҫкен тарпан бейә бер мөйөшкә һырлығып, ҡапыл тынып ҡала. Тарпан тарға тарығып, ауыҙына бер тәғәм аҙыҡ ҡапмай, бер йотом һыу эсмәй, бер нисә көн ҡымшанмай ҡатып тора. Ярһыуы ла, алйыуы ла, бесән-һыуҙан баш тартыуы ла ирекһеҙ иткән әҙәмдәргә сая ҡарауы булды, ахыры, хайуанҡайҙың.

Әммә эсе эскә йәбешеп асығыу, сарсау үҙенекен итә. Ҡырағай саптар семтемләп булһа ла бесән һәрмәштерә башлай, ҡар ашай. Ат ҡараусының ихтыярына буйһоноп, йүгән һалдыра. Тик һуғарырға сығарғанда, ҡулдан ысҡынырға ынтылышы ғына һөҙөмтә бирмәй. Яйлап йүгәнгә күнгән төҫлө тойолһа ла, аяҡҡа тышау, һыртҡа эйәр һалдырырға ирек ҡуймай.

Яҙын кәртәлә саптар бер ҡолон килтерә. Ҡолоно менән әүрәп кәртә-ҡураға ла, ҡулға ла эйәләшкәндәй итә. Ҡолонон аманат һымаҡ алып ҡалып, тарпан бейәне йылҡы менән ҡырға сығарһалар, тарлыҡҡа тарыҡҡан тарпан кешнәй-кешнәй сабып китә. Шул китеүенән ғәйеп була. Йылы ҡураға, хатта ғәзиз ҡолонсағына яландар иркен, үҙ иреклелеген алыштыра алмай хөр малҡай.

Күпмелер ирегеп йөрөгәс, елене тиртеп, бер төн ҡураға ҡайта саптар, һаҡ ҡына кешнәп, сыңрап, ҡолонон таба. Уны саңдау[1] тотҡонлоҡтан ҡотҡарып, икәүләшеп яланға китеп юғалалар. Алдағы ҡышты тарпан бейә лә, ҡолоно ла йылы ҡураға бөтөнсә ҡайтмай.

Шуның икенсе ҡышынамы Яйыҡ буйында башҡорттар бер ҡырағай ат күреп ҡалалар. Ҡыҙығып, ҡыҙышып китеп, уны ҡырпаҡ ҡарҙа нисек тә ауламаҡ итәләр. Дүртбиш һыбайлы ике көн буйы уны ҡыуалап, ҡамап ҡараһалар ҙа, һис тота алмайҙар. Өмөттәре өҙөлдө тигәндә, һис көтмәгәндә ҡасҡын малдың, тояғы йомран тишегенә эләгеп, аяғын һындырғас ҡына тоталар быны. Аяғы һынып, тыпырсынып, күҙҙәре аларып ятҡан аяныс малды уратып алып, ипләберәк ҡараһалар, был теге һыңар күҙле саптар тарпан булып сыға.

Йылы ҡураны ыжғыр ҡышҡа алыштырған, ирке өсөн күҙһеҙ, аяҡһыҙ ҡалған был хөр тарпанды ҡыҙғанып, башҡорттар уға ағастан тояҡ яһайҙар. Баш, ирек бирмәҫ хайуан ағас тояғын тибеп һындырып, ашау-эсеүҙән баш тартып, аяҡ өҫтө йән бирә. Һуңғы тарпан ғүмере шулай өҙөлә.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Хикәйәт ни өсөн саптар бейәнең хәлен тасуирлауҙан башланып китә?
**2.** Өйөрҙөң именлегендә өйөр башының роле тураһында һөйләп бирегеҙ.
**3.** Ҡарт айғыр менән туры толпарҙың көрәшенән һуң өйөр ниндәй хәлдәр кисерә? Йәш тарпандың еңеүе ниндәй һөҙөмтәләргә килтерә?
**4.** Тарпандар өйөрөнөң һәләк булыуына нимә ғәйепле?
**5.** Һуңғы саптар тарпан менән ҡулға эйәләштерелгән йылҡыларҙың көнитмешен сағыштырып ҡарағыҙ. Ниндәй айырма күрәһегеҙ?

### Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

**1.** Әҫәрҙә йылҡысылыҡҡа һәм йылҡы малына ҡағылышлы һүҙҙәр күп осрай. Уларҙың мәғәнәһен кем күберәк белеүенә ярыш ойоштороғоҙ. Был эште төркөмдәргә бүленеп башҡарырға мөмкин.
**2.** Һеҙгә бөтөнләй таныш булмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатмалы һүҙлек ярҙамында асыҡлағыҙ.

### Фонохрестоматия

Актёр башҡарыуында тыңлағыҙ.

---

[1] *Саңдау* – йылҡы малының йәйге кәртәле туплам урыны.



Яныбай
# ХАММАТОВ
(1925–2000)

Яныбай Хамматов әҙәбиәткә ҙур тормош мәктәбе үтеп килде һәм талантлы романсы буларак танылды. Уның ҙур күләмле тәүге әҫәре – «Бөртөклөп йыйыла алтын» романы XX быуаттың 60-сы йылдары уртаһында донъя күрҙе һәм авторҙың исемен шунда уҡ уҡыусыға киң билдәле итте. Алтын йыуыусылар тормошон сағылдырған был әҫәр аҙаҡ «Аҡман-тоҡман», «Йәшенле йәй», «Юрғашты» һәм «Руда» романдары менән бергә ҙур бер серияға әйләнде, башҡорт әҙәбиәтендә тәү тапҡыр яңы күренеш – пенталогия барлыҡҡа килде. Биш романдан торған был эпик әҫәрҙә алтын йыуыусы эшселәрҙең – старателдәрҙең тормошо киң яҡтыртылды, төп геройҙарҙың сағыу образдарында халыҡ яҙмышы тулы көүҙәләндерелде.

Яныбай Хамматов үткән быуаттың 50–60-сы йылдарындағы колхоз ауылы тормошо хаҡында «Йондоҙҙар нисек ҡабына» тигән ҙур әҫәрен – Советтар Союзы Геройы Миңлеғәле Ғөбәйҙуллинға арналған «Тыуған көн» романын яҙҙы.

Танылған яҙыусының яңы уңыштарының береһе булып башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышындағы ҡаһарманлыктарын сағылдырған «Төньяҡ амурҙары» тигән тарихи романы тора.

Талантлы романсы һуңғы йылдарҙа ла бай ижади тормош менән йәшәне. Ул тағы ла «Һырдарья», «Башҡорттар китте һуғышҡа», «Салауат» романдарын яҙҙы.

## ҒӘЙЗУЛЛА*

### I

Бигерәк тә йәмле шул был тирә! Ҡарайһың – күреп танһығың ҡанмай. Тыңлайһың – тыңлап туя алмайһың. Ниҙәр генә юҡ был яҡтарҙа! Йәшел шәлгә бөркәнгән ағас ботаҡтарына ҡунған ҡоштар сутылдаша. Ниңәлер зарығып кәкүк саҡыра. Саҡ ҡына ят тауыш сыҡтымы, ҡоштар шунда уҡ пыр туҙышып урындарын алмаштыралар ҙа һәр ҡайһыһы үҙ йырын дауам итә. Ҡара башлы тумыртҡа ҡыйҡылдап ағастан ағасҡа осто, ботаҡтан ботаҡҡа һикерҙе, үҙенә кәрәкле аҙыҡ таба алмағас, осоп барып, ялан уртаһында торған ҡыу ҡарағайға аҫылынды. Тырнағы аҫтындағы ҡайыр киҫәктәре ергә ҡойолдо. Тумыртҡа башын бороп, ергә ҡараны. Ҡурҡырлыҡ нәмә һиҙелмәгәс, ҡыйҡ-ҡыйҡ, тип оҙон суҡышы менән ағас ботағын ары-бире туҡылдатты ла ҡыйҡылдап һайыҫҡандар көтөүе яғына осто.

Ер өҫтө байрамса биҙәлгән. Ҡуйы йәшел япраҡлы ағас ботаҡтары араһынан саҡ беленер-беленмәҫ үткән яҡтыға үлән өҫтөндәге ысыҡ тамсылары ялтырай. Сәскәләр еҫе аңҡый. Иңкеш, бал ҡорттары һәм тағы ла әллә нисәмә төрлө бөжәктәр геүләшә. Аҙыҡ эҙләп, сәскәнән сәскәгә күсәләр. Үтәнән-үтә күренгән күм-күк һауа тағы ла юғарыраҡ күтәрелгәндәй тойола.

Тәбиғәттең ошо күренешенә мауығып, быҙауҙар көтөүе артынан улын эйәртеп килгән Хәйретдин ҡапыл туҡтаны. Кәпәсен сисеп, тирле таҡыр башын ең осо менән һыпырҙы ла алда йәшел бәрхәт һымаҡ йәйелеп ятҡан киң яланға күрһәтте.

– Һин, улым, быҙауҙарҙы ошонда көт. Бик аулаҡ урын. Мин кисә башлаған тырансамды[1] ярып бөтөрөп ҡуйайым.

---

* «Бөртөкләп йыйыла алтын» романынан өҙөк.

[1] *Тыранса* (дранки) – ҡарағай бүрәнәне биш-алты өлөшкә ярып, һәр ярҡаны ағастың ҡыртышы (йәшәү йылдары ҡулсалары) буйлап, шына ярҙамында ярыуҙан хасил булған йоҡа таҡта. Уны элек урман яҡтарында өй ҡыйығын ябыу өсөн файҙаланыр булғандар.

Үҙ ироктәренә ҡуйылған быҙауҙар юлдан ҡайырылды. Улар, кем уҙарҙан мул үләнде ялмай-ялмай, ағас араһына таралышты.

Атаһынан айырым ҡалып өйрәнмәгән Ғәйзулла күңелһеҙләнеп:

– Тыранса ярған урын алыҫмы? – тип һораны.

– Юҡ. Балта тауышы һиңә ишетелеп торор. Төшкө сәйгә килерһең.

– Быҙауҙарҙы унда көтөргә ярамаймы ни?

– Унда малға ярамаған аҡһырғаҡ, ҡаҙаяҡ үләне күп шул. Һыуға ла алыҫыраҡ. Бында йылға эргәһендә. Эсермәй көтһәң, Хажисолтан бай быҙауҙары өсөн әрләп, теңкәгә тейәсәк. Аңдып ҡына йөрөй.

– Атай, быҙауҙарҙы төшкө сәйҙән һуң эсерһәм, ярамаймы ни?

– Ярауын ярай ҙа ул, улым. Мин эшләгән урында малға ярарлыҡ үлән юҡ, тинем бит инде. Шыр урман. Әллә ҡурҡаһыңмы?

– Әйе.

– Әй, алйот, кем тейһен һиңә? – Хәйретдин иркәләп, улының башынан һыйпап, арҡаһынан һөйҙө. – Мин эргәңдә генә бит. Ҡурҡма. Иптәшкә быҙауҙарың бар.

Билбау аҫтына балтаһын ҡыҫтырып, урман араһына инеп киткән атаһы күҙҙән юғалғас та, Ғәйзулла алға киткән быҙауҙарын йылға буйына ҡайырҙы. Һәшкелдәп, һалабаштан ишкән оҙон сыбыртҡыһын шартлатты. Быҙауҙар һыу эскән саҡта, ул ҡулын ҡумырыҡ аҫтына тығып, балыҡ эҙләне. Бәләкәй генә бер сурағайҙан башҡа балыҡ тота алмағас, быҙауҙарын ярға ҡыуып сығарҙы. Үҙе, буш ваҡытын нисек үткәрергә белмәйенсә, йылға буйына кире төштө. Ҡырсындан һайлап алған йоҡа таштарҙы тоноҡ һыу өҫтөнән кәйкәләтте. Йәйелгән түңәрәктәр ни тиклем һыуҙа күберәк күренһә, Ғәйзулла ла шул ҡәҙәр ныҡыраҡ ҡыуанды һәм мауығып таш артынан таш ырғытты.

Үҙенә кәрәкле таш эҙләп йөрөгәндә, Ғәйзулланың күҙҙәре ҡырсын өҫтөндә ятҡан йоҙроҡ ҙурлығындай ялтыраусыҡлы һары ташҡа төбәлде. Уны ҡулына алды. Бик ауыр һәм мауыҡтырғыс күренде был таш. Усында өйрөлттө.

Ныҡлабыраҡ ҡарай торғас, уны мөгөҙлө кәзә тәкәһенә оҡшатты. Юрамал берәйһе эшләп ташлап киткәнме ни? Бер яғы мөгөҙ һымағыраҡ ослайған, аҡ таш ҡатнашҡан урыны һаҡалға оҡшаған. Ҡойроҡ һымаҡ күтәрелгән киҫәген онтарға теләп, таш менән һуғып ҡараны. Онталманы. Таш менән тейгән урыны еңел генә йәмшәйеп, яп-ялтыр булып ҡалды. Быға ғәжәпләнгән Ғәйзулла уны тешләп ҡараны. Был юлы ла онталманы. Теш тейгән урыны еҙ самауыр һымаҡ ялтыраны. Нимә булырға мөмкин? Әллә самородок тигәндәре ошоноң һымаҡ буламы икән? Улай тиһәң, уны шахтанан ҡаҙып сығаралар, тиҙәр. Был турала алтын приискыһында эшләгән Хисмәтулланың үҙенән әллә нисәмә ишеткәне бар. Алтындың тутыҡмауын һәм йәмшәйеүен дә ул әйткәйне. Бәлки, был ҙур самородоктыр? Шулай булһа, ниңә эшләмәйҙәр һуң бында? Ниңә алтын йыумайҙар? Әллә Юрғашты йылғаһының өҫ яғында алтын барын берәү ҙә белмәйме икән? Моғайын, шулайҙыр. Әгәр ҙә ҡулындағы киҫәк алтын булһа, ни эшләр ине икән? Әсәһенә күлдәк, атаһына күлдәк, апайҙарына елән, үҙенә Хажисолтан бай малайыныҡы һымаҡ бумазый ыштан алыр ҙа ҡалғанын кәнфиткә алыштырыр ине. Ул баш бармаҡ ҙурлығындай алтынға һыйыр һатып алып була имеш, тигән һүҙҙе иҫенә төшөрҙө. Әгәр ҙә шул дөрөҫ булһа, был – ысын-ысындан байлыҡ бит. Әҙәм ишетмәгән, зат-ырыуына теймәгән байлыҡ! Ошо самородок булһа, алтын приискыһының хужаһы Ғәлиәхмәт һәм Хажисолтан бай ни эшләрҙәр ине икән?

Оҙаҡ хыяллана торғас, Ғәйзулла самородок табыуы тураһында үҙен үҙе нисек ышандырғанын һиҙмәй ҙә ҡалды һәм уйланыуҙан тирләне, хәле бөттө. Уйҙары тарҡалды. Асығыуы һәм арыуы һиҙелмәне. Биҙгәк тотҡан кеше һымаҡ ҡалтыранды. Йөрәге дөпөлдәп типте. Төҫө ҡасты. Ҡулындағы һәлмәк металды күкрәгенә ҡыҫҡан һайын, шатланырға ла, ҡысҡырып көлөргә лә белмәне. Ҡайһы саҡта был күренеш төш һымаҡ күренде. Уяу икәнлегенә ышанмай үҙен үҙе семтеп ҡараны. Семтелгән беләге күгәреп сыҡты. Унда ла ышанманы.

– Ғәй-зул-ла-а-ау! Әйҙә сәй эсергә-ә!

Ғәйзулла тертләне. Атаһы ҡысҡырған яҡҡа ҡараны. Төш етеүен дә һиҙмәй ҡалған. Таралышҡан быҙауҙарына иғтибар итмәйенсә, әләгә-йығыла төтөн сыҡҡан яҡҡа йүгерҙе. Күлдәге һәм ыштанының балаҡтары ағас ботаҡтарына эләгеп йыртылды. Яланғас аяҡтары түңгәктәргә төкөлдө. Ағастан ағасҡа һуҙылған үрмәксе ауы әленән-әле көнгә янған битенә бәрелеп өҙөлдө. Ә ул, һаман хәл йыймайынса, йүгерҙе лә йүгерҙе. Ҡарттарҙың һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп, аҙым һайын:

– Хазина, ха-хаз-зина... таптым, ха-зина, – тип бышылданы.

Төтөнгә сирылып, сәйгүндә сәй бешереп маташҡан Хәйретдин, мыш та мыш килгән улына ҡарамайынса:

– Ниңә шул тиклем йүгерәһең? Йөрәгеңә ҡыйын була бит. Быҙауҙарыңды алып килмәнеңме? – тип һораны.

Ғәйзулла яуап ҡайтарманы. Сабышҡан ат һымаҡ, көскә тын алып, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ҡулындағы ташты атаһына һондо.

– Нимә ул?

– Алтын, шикелле. Ҡара әле, атай!

Хәйретдин ҡапыл тертләне. Ҡулынан төшөп киткән сәйгүндәге сәйе түгелде. Йәшел сәйгүн эргәһендәге үлән араһынан боҫ күтәрелде.

Үҙен ҡулға алырға өлгөргән Хәйретдин, улы алдында тыныс күренергә тырышып, һорауын ҡабатланы:

– Нимә ул? – Ҡалтыранған тауышы хәйләһен белдертте. – Баҡыр ҙаһа. Ҡайҙан таптың?

– Йылға буйынан. Уйнап йөрөй инем. Һыу ағып ятҡан ҡырсында...

Ағас шытырланы. Хәйретдин тиҙ генә улының ҡулындағы нәмәне тартып алып, уны буш туҙ тырызға тығып ҡапҡасын япты ла, бер ни ҙә булмағандай, тиктомалға ҡарағай ҡабығын әрсергә тотондо.

– Әссәләмәғәләйкүм!

– Вәғәләйкүмәссәләм!

– Йә, һаумы, иҫәнме, ағай? Эш шәп барамы, ағай?

– Ырамай. – Хәйретдин, уң ҡулының усын маңлайына ҡуйып, һаулыҡ һорашыусы кешегә ҡараны. – Кем тип әйтәйем? Йөҙөң таныш кеүек.

– Ниғмәтулла ағайым даһа, – тине Ғәйзулла.

– Вәт күҙеңде! Танымай ҙа торам. Үҙең һау ғына йөрөйһөңмө, ҡустым? – Хәйретдин, ике ҡулын биреп, Ниғмәтулла менән күреште лә сал төшкән түңәрәк һаҡалын һыпырҙы. – Ҡайһылай үҫкәнһең. Күҙгә-башҡа күренмәгәс тә... Йәштәр үҫә, беҙ сүгәбеҙ.

– Шулай инде. – Ниғмәтулла кейеҙ ҡалпағын башына батырыбыраҡ кейҙе. Өс урындан шына ҡатылған йыуан ҡарағай бүрәнәһен бармағы менән ҡарышлап үлсәне.

– Шәп ағас. Нисә аршын?

– Һигеҙ.

– Бер түмәрҙән нисә тыранса яраһың?

– Төрлөсә. Түмәренә ҡарап.

– Ошо түмәрҙән?

– Шутлап ҡара. Шул түмәр биш йөҙ илле йәшлек ҡарағайҙыҡы.

– Йәшен ҡайҙан беләһең?

– Ҡарағай төбөнән. Бер түңәрәге бер йыл. Үҙәгенән шутлаһаң, нисә балдаҡ, шунса йәш.

Хәйретдин балдаҡтарҙы һананы:

– Берәү, икәү, өсәү... йөҙ... өс йөҙ... биш йөҙ алтмыш.

– Әйттем бит, шул сама булыр тип.

– Йөҙөн ни саҡлыға яраһың?

– Нисек килешәһең бит. Ҡайһы берәүҙәр ота, ҡайһылары отола. Баҙарҙағы шикелле, һатыулашмай булмай. Хәҙер хаҡы төштө. Юҡҡа аҡса әрәм итмәйҙәр. Өй башын япҡаны яба, япмағаны тора. Тормошо шулайыраҡ булып китте бит.

Һүҙһеҙ торҙолар.

– Һине, ҡустым, бай яҡтарҙа йөрөп ҡайтҡан, имеш, тип ишеткәйнем. Ул яҡта ашау-эсеү яғы нисек?

– Ялан яғын әйтәһеңме?

– Эйе. Унда иген сәсәләр бит. Иген күптер инде.

– Әҙерләгәндәр. Үҙҙәре ҡырылалар. – Ниғмәтулла, һары тештәрен күрһәтеп, кеткелдәп көлдө. – Кәжән[1]

[1] *Кәжән* – йылға исеме.

буйында алтынды асмаһалар, һеҙ ҙә асығыр инегеҙ. Алтынды яманлаһағыҙ ҙа, файҙаһы тейә.

Хәйретдин ҡарағай олононоң осон тумырып өҙҙө. Ботаҡтарын өйөп яндырҙы ла яра башлаған бүрәнәләге шыналарға алмашлап балта төйҙәһе менән һуҡҡылап сыҡты. Улар эргәһенә эрерәк шына ҡуйып сыҡты. Бүрәнә шытырланы, сарсылды һәм урталай ярылды. Уларын да, ун ике өлөшкә ваҡлап, муртыҡ үҙәгенән айырҙы. Шунан бүленгән киҫәктең осона балтаһын саба һәм айырылған ярыҡҡа бармаҡтарын тығып тартҡас та, тыранса һыҙырылып сыға. Нәҡ һалабаш йүкәһен һыҙырғандағы һымаҡ. Һыҙырылған тырансаны етеҙ, өйрәнгән ҡулдары менән ырғыта ла икенсеһенә йәбешә. Урманда сайыр еҫе аңҡый. Ярты сәғәт самаһы ваҡыт үтеүгә, хәтһеҙ эш эшләнде. Хәйретдиндең һәр хәрәкәтен күҙәтеп торған Ниғмәтулла:

– Ауыр эш. Юҡҡа мәшәҡәтләнәһең икән, – тине.

– Алыусыһы булһа, мәшәҡәте һиҙелмәҫ ине лә ул, алыусыһы юҡ. – Хәйретдин сайырға буялып, тир һеңгән йыртыҡ күлдәк итәге менән ҡыҙарынған битен һөрттө. Кәпәсен сисеп кейҙе. – Был кәсеп булғас та, Аллаға шөкөр. Һәйбәтен ҡайҙан алаһың?

– Һы! Теләһәң, була ул. Теләгең генә булһын. Теләйһеңме, беҙҙең менән, әйҙә? Хур булмаҫһың. Һиңә ауырлыҡ һалмабыҙ. Ауырлыҡты үҙебеҙ күтәрербеҙ. Һинең ярҙамың ғына кәрәк. – Ниғмәтулла серле итеп күҙҙәрен сырт-сырт ҡыҫты. – Аңлайһыңмы? Байығылһа, үҙеңә кейәү ҙә булып ҡуйырмын. Һинең ҡыҙың бар. Мин буйҙаҡ. Килешер инек әле. Быныһы, аҙаҡ. – Ул, күҙен аҡшайтып, Ғәйзуллаға ҡараны. – Бар, кит әле һин. Атайың менән генә һөйләшәһе һүҙ бар. – Малайҙы күҙе менән оҙатып: – Йә, ризамы? – тип һораны. – Үкенмәҫһең.

Ниғмәтулланың нимәгә төрттөргәнен ҡарт шунда уҡ һиҙҙе. Хәйер, унан рәтле һүҙҙе көтөү мөмкин дә түгел ине. Ул еңел «кәсеп» итә.Ең һыҙғанып эшләүҙән кеше талауҙы һәм урлауҙы артығыраҡ һанай. Бынан дүрт йыл элек ата-әсәһенең берҙән-бер һыйырын урлап һатып киткәс, оҙаҡ юғалып йөрөнө. Унан әйләнеп ҡайтҡас та, үҙе

һымаҡ япа-яңғыҙ Ҡолсобай менән, иҫке өй урынын ҡаҙып, ниндәйҙер көршәктәге алтынды эҙләнеләр. Хәҙер, ас бүре кеүек, ҡайҙа етте шунда үҙенә яңы табыш эҙләй.

– Юҡ, улым, ҡарт көнөмдә гонаһлы булырға теләмәйем. – Хәйретдин, уң ҡулынан балтаһын төшөрмәйенсә, һул ҡулы менән һирәкләнгән түңәрәк һаҡалын тартҡыланы. – Хәләл малға ни етә...

– Үҙең миңә ҡатнашмаһаң, улайһа, атыңды биреп тор. Мин күрше ауылдан берәй нәмә осортайым. Хаҡын түләрмен.

– Юҡ, инде, улым, һин мине харамға тартма...

– Үкенерһең...

Ниғмәтулла ағастар араһына инеп юғалды. Уның китеүен түҙемһеҙлек менән көткән Ғәйзулла, уҡмашҡан ләпәкәйҙәрҙе сәпелдәтеп һуға-һуға, ҡайын башынан төшөргә өс аршын ҡалғанда, ергә һикерҙе. Һикергәндә, ҡайын ботағына эләгеп, ыштанының балағы йыртылды.

– Алйот, ыштаныңды ни эшләттең? Ғүмере ҡыланмағаныңды ҡыланаһың! Анауы һуйыл бөткәнсе һыҙырыуҙы көтәһеңме?

Үҙенә тырнаҡ та тейҙермәйәсәген аңлаған Ғәйзулла атаһының һүҙенә ҡолаҡ та һалманы. Аяҡ аҫтында тәгәрәп ятҡан туҙ тырыҙды ҡулына алды ла, утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ, түҙемһеҙлек менән урынында тыпырсынды. Тик шунда ғына Хәйретдин, улының яңыраҡ әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп, тырыздан билдәһеҙ нәмәне сығарҙы. Ләкин ата шатланманы. Ағарынды. Кәзә мөгөҙөнә оҡшаған еҙҙе тешләп ҡараны ла, уны сылғауға урап, улына һуҙҙы. Ғәйзулла, аптырап, атаһының күҙенә ҡараны.

– Әллә алтын түгелме?

– Алтын.

– Шулай булғас, нимә көтәбеҙ һуң? Әйҙә, тиҙерәк китәйек. Мин, мин беләм...

– Сеү! – Хәйретдиндең ҡобараһы осто, яҡ-яғына әйләнеп ҡараны ла, тауышын түбәнәйтеберәк, – ҡысҡырма, – тине.

Ул менән ата һүҙһеҙ ҡалдылар.

### Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Ғәйзулла, атаһы киткәс, ваҡытын нимә менән уҙғара?
**2.** Ғәйзулланың алтын табыуы тураһында тулы итеп һөйләп бирегеҙ.
**3.** Ғәйзулланың алтын тапҡандан һуңғы хыялдарын ҡысҡырып уҡығыҙ. Шунан сығып, уларҙың тормошо тураһында һөйләгеҙ.
**4.** Ниғмәтулла, һеҙҙеңсә, кем булырға тейеш? Ғәйзуллаларҙы ул ниндәй юл менән йәшәргә өндәй?
**5.** Әҙәбиәт теорияһы буйынса һүрәтләү тураһында иҫегеҙгә төшөрөгөҙ һәм бирелгән бүлектән һүрәтләүгә ҡоролған урынды табып, уҡып күрһәтегеҙ.

## II

Хәйретдин ҡарт ярылып бөтмәгән тырансанан күҙҙәрен улына күсерҙе. Ғәйзулла, атаһына тура ҡарарға баҙнат итмәйенсә, ғәйепле кеше һымаҡ, ситкә ҡараны. Атаға балаһы ҡыҙғаныс күренде. Ул ярылып бөткән ҡулы менән малайының башын күкрәгенә ҡыҫты. Яғымлы күренергә тырышты.

– Яңылышмағанһың. Һин тапҡан – алтын. – Баланың күҙенән шатлыҡ осҡондары яңынан ҡалҡып сыҡтылар. Уның күҙ алдына бөтөһөҙ байлыҡтар күренде, ниҙер әйтергә теләп, ул ауыҙын асты. Ләкин ата уны тыйҙы. – Беҙгә ул хазина өсөн шатланырға ярамай. Хазина байҙарға ғына килешә. Беҙҙең кеүек ярлы барыбер мандымай ул. Тау эйәһенең асыуланыуы ихтимал. Тау эйәһен асыуландырһаң, ҡаза артынан ҡаза килә, тип һөйләйҙәр.

Төрөлгән алтын сылғау аша Ғәйзулланың ҡулдарын яндырған һымаҡ тойолдо. Хыялы урынына яуыз тау эйәһе килеп баҫҡандай булды.

– Самородокты ерҙән ҡуҙғатҡан өсөн ул рәхмәт әйтмәйәсәк. Ул ергә халыҡ бара башлаһа, зат-ырыуың ҡороясаҡ.

– Быны нимә эшләтәйем? – тип һораны Ғәйзулла.

– Ҡайҙан тапҡанһың, шунда ташла, улым. Үҙеңдән башҡа берәү ҙә белмәһен. Алтын ярлыға бәхет алып килгәне юҡ. Мин, ишетә-күрә йөрөгәс, беләм.

– Шулай булғас, ниңә уны эҙләйҙәр һуң?

– Нәфсе эҙләтә. Күҙ туймай.

– Алтын барын белһәләр, бында ла ерҙе ҡаҙырҙар инеме әллә?

– Аҫтын-өҫкә килтереп аҡтарасаҡтар. Был урмандың әҫәре лә ҡалмаясаҡ. Сабынлыҡ бөтәсәк. Анһыҙ ҙа күпме ерҙе, яландарҙы әрәм иттеләр. Атай-олатайҙар был ерҙәрҙе һаҡлау өсөн күпме йылдар көрәште, ҡан түкте... Күбеһе ҡорбан булды.

Улар икеһе лә тынысландылар. Ут эргәһендәге үлән өҫтөнә иҫке сәкмән йәйеп сәй эстеләр ҙә, Хәйретдин улын ашыҡтырҙы:

– Бар, тиҙерәк бул. Быҙауҙарың таралмаһын. Көн эҫе. Ҡулыңдағын ырғыт, онотма. Бергә ҡайтырбыҙ.

– Һин бында оҙаҡ булаһыңмы?

– Юҡ. Солоҡто[1] ҡарап киләйем тигәйнем. Ҡорт ҡунмағанмы икән? Оҙаҡлаһам-нитһәм, һин әкренләп ҡайта тор.

Ғәйзулла быҙауҙары эргәһенә юрамал туп-тура барманы. Әрәмәлеккә төшөп, яртылаш бешкән ҡарағат ашаны. Шунан һуң ғына йылға ситенән һуҙылған һуҡмаҡтан аҫҡа ҡарай йүгерҙе.

Тирә-яҡ тыныс. Юлды ҡыҫҡартыу теләге менән ул уңға киткән һуҡмаҡҡа боролдо. Ҡыштырлап, юл арҡыры туҙбаш йылан үтте. Иҫке ғөрөф-ғәҙәткә ышанып, Ғәйзулла, юлын ҡыйҙырмаҫ өсөн, һуҡмаҡ ситенән йыландың алдына сыҡты. Ләкин йылан әллә ҡайҙа юғалды. Ерек ағасы төбөндәге кеҫәртке генә башын бороп ҡараны ла, ул да, үләндәрҙе ҡыштырлатып, ҡайҙалыр инеп юғалды. Юл ҡыйған йылан күңелен ҡырҙы. Аҙымын йышайта башлаһа, уның йыртыҡ балағы буйлап ниндәйҙер һалҡын нәмә шыуып йөрөгән кеүек була, туҡтаһа – баҫыла. Ыштанын сисеп ҡараны. Бер ни ҙә күренмәй. Тора-бара, балаҡ эсенә үрмәләгән нәмә йылан һүрәтенә әйләнгән тау эйәһелер тип, борсола башланы. Ҡулындағы төргәкте ағас төбөнә һалды. Тау эйәһенең асыуын баҫтырыу өсөн, уҡынып, бер нисә аҙым атланы ла ыштанындағы ямауға ҡыҫылып торған үләнде күреп тынысланды.

---

[1] *Солоҡ* – үҫеп ултырған ағасҡа ҡырағай бал ҡорттары өсөн соҡоп эшләнгән умарта.

Балаҡтың йыртығынан инеп ҡалған шул үлән балтырҙы ҡытыҡлаған икән.

Ғәйзулла урынынан тороп, инде китәм генә тигәндә, ярға аяҡтарын һалындырып ултырған кешене күреп, ҡурҡты. Артҡа сигенде.

– Эй малай, ҡайҙа ҡасаһың, туҡта әле. Шунда һаҡаллы кеше күрмәнеңме?

Ағас япраҡтары йөҙөн ҡаплаған кешенең тауышынан Ниғмәтулла икәнен танып, Ғәйзулла тынысланды.

– Юҡ.

– Ҡайҙа барып ултыраһың?

– Быҙауҙар көтөүе ҡаршыһына.

– Һин көтәһеңме? – Ниғмәтулла урынынан тороп, өҫтөн ҡаҡты. – Кем быҙауҙары?

– Хажисолтан байҙыҡы.

– Берәүһен һуйып ашайыҡмы?

– Юҡ.

– Ниңә?

– Буш.

– Мин дә аҡсаға тимәйем, буш тим. – Ниғмәтулланың сәтәкәй бармағында алтын балдаҡ ялтыраны. Тешен ыржайтып көлдө. – Һуябыҙмы?

– Хажисолтан байҙан һора.

Ғәйзуллаға был кеше ниңәлер Ниғмәтулла төҫөнә ингән тау эйәһе һымаҡ тойолдо. Уның һорғолт күҙҙәре ҡапыл ғына сысҡан тоторға әҙерләнгән бесәйҙеке һымаҡ ялтыраны.

– Әһә, һин шулай итеп бай быҙауҙарын ташлап йөрөйһөң икән әле. Ҡайтҡас та ошаҡлайым. Кәрәгеңде бирҙерәм. – Ниғмәтулла көлгәндәй итте лә, малайҙың ысынлап та ҡурҡыуын белеп, һүҙен йомшартты: – Юрамал әйтәм. Мин бәләкәйҙәрҙе йәлләйем. Мә, ҡағыҙлы кәнфит аша. – Ул кеҫәһенән сығарып кәнфиттең береһен ауыҙына ҡапты, икенсеһен малайға һондо. – Ал.

Ғәйзулла урынынан ҡуҙғалманы. Ниғмәтулла уның ҡулына кәнфитте көсләп тотторҙо.

– Ал, ал. Мин һиңә еҙнә була торған кеше. Оялма. Әҙерәк байыҡҡас та, Нәфисә апайыңды алам.

– Һиңә апайымды бирмәйбеҙ.

– Ниңә?

– Һин бур малайы. Үҙең дә бур, ҡараҡ...

– Ни-мә? Нимә тинең әле һин, байғош? Ҡабатла! – Ниғмәтулла малайҙың иҙеүенән тотоп, үңәсен һыҡты. – Ҡабатла! Үлтерәм, эт балаһы!

Ғәйзулла ғыжылданы. Йөҙө күгәрҙе. Ауыртыуға сыҙамайса ҡысҡырҙы. Ләкин тауыш урынына мәғәнәһеҙ һүҙҙәр сыҡты.

– А-ааай...

– Һин һөрән һалмаҡ булаһыңмы? Атайыңды саҡыраһыңмы? – Ниғмәтулла усы менән малайҙың ауыҙын ҡапланы. Ғәйзулла тештәре менән уның баш бармағын эләктереп алды. – Һин тешләшәһеңме әле?! Мә, мә!

Ниғмәтулла малайҙы тәгәрәтә һуҡты. Уның ҡулындағы тырызы ситкә тәгәрәне.

– Атай! Атай!

Уны үсекләп, «ат-а-ай» тип шаңдау ғына яуап ҡайтарҙы. Ниғмәтулла йоҙроҡтарын төйнәп малайға яҡынлашты. Ерҙән йылға буйына шыуышҡан Ғәйзулла тороп йүгерәм генә тигәндә, беләгенән эләктереп алды, тәгәрәтә һуҡты ла үсе ҡанғансы типкеләне.

– Ни эшләйһең һин!

Ниғмәтулла ситкә һикерҙе. Ҡысҡырыусы иптәше икәнен аңлап, юлға кире сыҡты.

– Һиңә баланың ни зыяны тейгән? Үлтерәһең бит, ахмаҡ! – тине ҡара һаҡаллы ят кеше.

– Бер маңҡа үлгәндән ни булыр тиһең. – Ниғмәтулла тышылдай-тышылдай кеткелдәп көлдө. – Ҡолсобай ағай, мин һине көттөм. Ниңә оҙаҡланың?

Ҡолсобай, уның һорауына яуап ҡайтармайынса, малайға эйелде.

– Әйҙә, бында бик мыжмылдамайыҡ. – Ниғмәтулла Ҡолсобайҙың еңенән тартты. – Ана, әллә кемдәрҙең тауыштары сыға.

Ысынлап та, ағас шытырлаған һәм кешеләр һөйләшкән тауыштар ишетелде.

– Ҡайҙа китте һуң ул?

– Ошо тирәләлер. Быҙауҙарын да йыймаған. Ғәйзулла-а-а!

Ниғмәтулла малайҙың атаһы тауышын таныны.

– Ғәй-зул-ла!

– Ғәйзулла!

Ниғмәтулла менән Ҡолсобай әрәмәлеккә йәшеренгәс тә, Ғәйзулла ҡалған яланда өс кешене эйәртеп килгән Хәйретдин күренде. Хәйретдин һыу буйлап аҫҡа китте.

Яланда тороп ҡалған кешеләрҙең береһе һушһыҙ ятҡан малайҙы күреп, ҡысҡырып ебәрҙе:

– Килегеҙ әле, килегеҙ! Йәһәтерәк, кем балаһы был?

Ирҙәр ҡанға буялған, шеш битле, күлдәге һәм ыштаны өҙгөләнгән малайҙы, танымайынса, уратып алдылар.

– Кем балаһы был?

– Танымайһыңмы?

– Юҡ. Ә һин?

– Мин дә юҡ.

Малай борғоланды. Ниҙер һөйләнеп, күҙен асты һәм, ят кешеләрҙе күреп:

– Атай, атай!.. Үлтермә!.. Алтынды тау эйәһе таланы, – тине.

Ирҙәр аптырашып, бер-береһенә ҡараштылар.

– Нимә һөйләй был бала?

– Тилергәндер.

– Тилергән, атаң башы! Саҡыр әле Хәйретдинде. Әллә ҡайҙа йөрөй.

– Әллә шуның улымы икән?

– Әй, Хәйретдин ағай, кил әле.

Тауышҡа ах та ух итеп килгән Хәйретдин, яҡынлашҡан һайын, аҙымын аҡрынайтты. Малай тәңгәленә еткәс, бөтөнләй хәлһеҙләнде. Ҡурҡынды. Ҡалтыранды. Быуындары үҙҙәренән-үҙҙәре бушанылар. Һаҡалы буйлап аҡҡан күҙ йәштәре бала өҫтөнә тамдылар. Усы менән малайҙың битендәге ҡанды һөрттө. Сәкмәнен улының башы аҫтына һалды, теткеләнгән күлдәк-ыштанын рәтләне.

– Ул кем малайы икән, танымайһыңмы?

– Минең малай. – Хәйретдиндең тауышы ҡалтыранды.

– Һинеке?

Тауыш-тынһыҙ торған ирҙәр бөтәһе лә бер юлы һүҙгә ҡушылдылар:

– Яраббым! Ғәйзулла икән дәһә!

– Баланың ни ғәйебе бар инде. Шул тиклем туҡмамаһалар...

– Егеттәр, бына сепрәккә төрөлгән ауыр нәмә таптым...

Хәйретдин серемгә киткән кешеләй һиҫкәнде. Ирҙәр тауыш сыҡҡан яҡҡа боролоп ҡаранылар. Оҙон буйлы кеше тағата башлаған сылғауҙы ҡапыл ғына кире ураны ла ерҙән һикереп торҙо. Көтмәгәндә өйөнә ҡайтырға ашыҡты.

– Мин ҡайта торам.

– Бергә ҡайтырбыҙ. Ғәйзулланы алып ҡайтырға ярҙамлашайыҡ, – тинеләр иптәштәре.

– Һин ниңә ҡасырға булдың? Төргәгеңдә нимә ул?

– Таш ине, ырғыттым инде.

– Алдашма, күрһәт!

– Ырғыттым, тим бит. Һеҙгә нимә кәрәк тағы? Ниңә бәйләндегеҙ әле һары һағыҙаҡ кеүек.

Һүҙ барышына ҡыҫылмай сүкәйеп ултырған Хәйретдин тауышын саҡ ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп:

– Юҡҡа ғауға күтәрмәгеҙ. Быраҡтырығыҙ. Тыңлағыҙ һүҙемде, зинһар. Баламдың башына етеүе лә етер, – тине.

– Нимә һуң ул?

– Хазина.

– Хазина-а?

– Хазина-а-а?

Әйтелгән һүҙҙең мәғәнәһенә әле булһа төшөнөп етмәгән ирҙәр ҡасып барған оҙон буйлы кешене баҫтырып тоттолар. Ситлек эсендәге йыртҡыс һымаҡ, иптәштәренең уртаһында ҡалған старатель[1] борғоланды. Ваҡытында телен тыя алмауына үкенеп, екеренде, аҡырҙы.

– Китегеҙ! Башығыҙҙы яра һуғам! Ҡарауыл! Талайҙар! Ҡарауыл!

---

[1] *Старатель* – алтын эҙләүсе.

Кешеләр араһында һуғыш сыҡты. Улар талаштылар, бер-береһенең үңәсен һыҡтылар, танауҙарын һәм бармаҡтарын сәйнәнеләр, баштарын ярҙылар. Өҫ-баштарын өҙгөләнеләр. Самородок ҡулдан ҡулға күсте.

Һуғышсыларға ҡатнашмай, улын ҡосаҡлап ултырған Хәйретдин ике һүҙҙең береһендә:

– Ҡайҙан сыҡты шул бәлә. Юҡ өсөн талашмағыҙ, – тине.

Ләкин Хәйретдиндең һүҙенә ҡолаҡ та һалманылар. Һуғышыуҙы дауам иттеләр. Барыһы ла хәлһеҙләнделәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, аҡтыҡ көстәрен йыйып, бер-береһен ысҡындырманылар.

Ауырыу кеше һымаҡ, Хәйретдин йонсоған, арыған һәм интеккән йөҙөн тәүге тапҡыр ҡалҡытып:

– Китегеҙ! Һуғышып, шул нәмә өсөн гонаһ шомлоғо булмағыҙ. Алтынды барыбер Хажисолтан байға бирәм, – тигәс кенә, һуғышыусылар ҡапыл хәрәкәтләнеүҙән туҡтанылар. Байҙың исемен телгә алыу уларҙы иҫкә индерҙе булһа кәрәк. Яңыраҡ ҡына бер киҫәк алтын өсөн үлешергә әҙер торған кешеләр, бер яҡлы булып, улы эргәһендә бөксәйеп ултырған Хәйретдингә яҡынлаштылар.

– Һин ошондай байлыҡты биреп, әллә аҡылыңдан яҙҙыңмы? – тип һораны Хәйретдиндән шаҙра битле, эйәге эскә батҡан ябыҡ ҡына кеше.

– Хазина – байҙыҡы. Ярлы кешегә ундай мал хәләл түгел. Тир, көс түгеп тапҡан малмы ни ул? – тине Хәйретдин. Уның эскә батҡан күҙҙәре бөтөнләй һүнеп барған шәмде хәтерләттеләр.

Тегеләр, геү килеп, тауыш сығара ғына башлағанда, һүҙгә оло ғына йәштәге кеше ҡушылып, бөтә нәмәне ул хәл итте:

– Егеттәр, егеттәр! Ҡарт дөрөҫ әйтә. Уны тыңлағыҙ. Күрмәйһегеҙме малайын. Исмаһам, шуның хаҡына, «алтынды бирәм» тигәс, бирһен инде. Бер файҙаһын күрһен. Әйҙә, беҙҙең беребеҙгә лә булмағас, булмаһын. Былай барыбер бүлешә алмаясаҡбыҙ.

– Байыған байҙы байыҡтырғығыҙ киләме?

– Әллә бай яллап ҡуйҙымы?

– Аҡылың нисәү?

Шулай ҙа улар әкренләп баҫылды. Шаулашҡан тауышты ишетеп килгән кешеләр һаны артҡандан-артты. Улар, сылғауға төрөлгән алтынды тотҡан Хәйретдиндән көнсөллөктәре килеп, үҙ-ара ғәйбәт һаттылар.

Иҫһеҙ ятҡан малайын күтәргән Хәйретдин артынан халыҡ эйәрҙе. Эңер төштө. Ҡош тауыштары баҫылды. Ярғанаттар оса. Урман сиңерткәләре серелдәшә. Серәкәйҙәр тезелдәшеп оса. Ҡайҙалыр әрәмәлектә, балаһын эҙләп, яңғыҙ ҡалған ҡуян тыҙҡылдай.

Һәр ҡайһыһы үҙ уйҙарына сумған кешеләр һүҙһеҙ барҙылар. Хәйретдин аҙым һайын тиерлек һөрөндө. Улын иплəберәк ҡосаҡланы ла ары атланы.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Улы тапкан самородокты Хәйретдин ағай ни өсөн Хажисолтан байға бирергә уйлай?

**2.** Халыҡ араһында алтын тураһында ниндәй ышаныуҙар йәшәй? Былдай ҡараш кемдәр өсөн файҙалы тип уйлайһығыҙ?

**3.** Солоҡсолоҡ – халҡыбыҙҙың төп кәсептәренең береһе. Уның тураһында нимә беләһегеҙ?

## III

Тағы ла таң атты. Йылы нурҙарын һибеп, күккә ҡояш күтәрелде. Яңыраҡ ҡына приискынан әйләнеп ҡайтҡан штейгер[1] Хәйретдин малайы Ғәйзулланың алтынға бай урын табыуы тураһындағы хәбәрҙе ишетеп, ни эшләргә белмәне. Өҫ кейемен алыштырып, Саҡмай ауылына барырға әҙерләнде. Ләкин өлгөрмәне, старателдәрҙе эйәрткән Хәйретдин үҙе күренде. Ул Хажисолтан байҙың, таяғына таянып, управляющийҙың ҡапҡаһы төбөндә тороуын күргәс, аҙымын тиҙләтте. Иҫке француз яулығына төрөлгән нәмәне баш өҫтөнә күтәрҙе.

– Хазина таптым, хазина!

---

[1] *Штейгер* – тау эштәрен күҙәтеүсе.

Хәйретдиндең һүҙен уға эйәреп килгән һары кейемдәге старателдәр ҙә күтәреп алдылар...

– Хазина!

– Хазина...

Старателдәрҙең тауыштарына балагандарҙан йүгерешеп сыҡҡан бала-сағалар, яулыҡ бөркәнгән ҡатындар һәм ирҙәр, эштең ниҙә торғанын төшөнөп етмәйенсә, ҡушылып ҡысҡырыштылар:

– Хазина!

Тауыш күтәреп яҡынлашҡан халыҡҡа һыр бирмәҫкә тырышып, бай яһалма асыулы тауыш менән ҡысҡырҙы:

– Нимәһенә ғауға күтәрәһегеҙ?! Бер тәңкәлек алтынға йөҙ тәңкәлек тауыш! – Бай ысынлап ҡыҙа башланы: – Эш бөткәнме һеҙгә? Марш эшегеҙгә...

Яртышар сынаяҡ булһа ла «әсе зәм-зәм һыуы»н өмөт итеп килгән старателдәр, байға ун аҙым самаһы ҡалғас, шып туҡтанылар. Улар һары балсыҡҡа буялған бүректәрен сисеп, биттәрен ыуҙылар.

Байҙың екереүенән ҡурҡҡан бала-сағалар әсәләренең итәктәренә күҙҙәрен йәшерә... Иң алда, ике ҡулы менән күкрәгенә төргәк ҡыҫҡан Хәйретдин ҡарт эргәһендә, һөмһөрө ҡойолоп, башын аҫҡа эйеп, аяҡ аҫтына ҡараған ҡыҫҡа буйлы кеше ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә борғоланды. Ниңә шундай «хөрмәт»? Байҙың кәйефен боҙорлоҡ бер нәмә лә эшләмәгәндәр ҙә баһа улар! Алтын табыуҙары өсөн рәхмәт әйтәһе урынға, хужа эт кеүек ҡаршы алды.

– Ошо малыңды алып килгәйнек, – тип Хәйретдин яулыҡҡа уралған төргәкте һуҙҙы. Бай, сирҡанып, ҡулын артҡа йәшерҙе.

– Бай әфәндем, сепрәк үҙе бысраҡ булһа ла, эсе таҙа, ал. Алтындан ерәнмә!

– Сис! – Бай таяғы менән төрөлгән сепрәккә төбәп күрһәтте.

Хәйретдин ашыҡмайынса ергә теҙләнеп ултырҙы. Эштең нимәлә икәнен белмәй, икеләнеп ҡатып ҡалған байға ҡарап: «Йүнһеҙ, ауыҙыңа һалған әҙер малды ла йота белмәйһең», – тигән һымаҡ, башын һелкте лә ергә

һалған төргәкте систе. Бай, яулыҡ эсендәге еҙ самауырға оҡшаған металды күреү менән, сүкәйҙе. Ҡалтыранған ҡулдары менән йоҙроҡтан ҙурыраҡ металды өйрөлттө. Тешенә тейҙереп ҡараны. Шунан һуң металды бысраҡ яулыҡҡа ураны ла, берәйһе тартып алмаһын тигән һымаҡ, ҡуйынына тыҡты. Ул сырайын һытҡан Хәйретдингә боролдо, һорғолт күҙҙәрен тағы ла нығыраҡ аҡайтты. Хәйретдингә ни тип әйтергә белмәйенсә, ҡуйынындағы металды ҡулдары менән ҡапшай-ҡапшай, һүҙһеҙ ҡалды.

Әле генә бойоғоп торған старателдәр батырая төштөләр. Ҡыҙыҡлы кәмит күрергә тырышҡандай, улар, берберейһен төртөп, алға ынтылдылар.

– Ҡайһылай йәтеш. Бай кеше лә алтынға үлеп барыр икән.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Хажисолтан байҙың Хәйретдин ағайҙы ҡырыҫ ҡаршылауының сәбәбе ниҙә тип уйлайһығыҙ?
**2.** Старателдәр Хәйретдин ағайҙың байға алтын килтереүенә нисек ҡарайҙар?

**Телмәрегеҙҙе байытығыҙ**

*Хазина* һүҙенә синонимдар табығыҙ.

## IV

Хәйретдин ҡарт килеп ингәндә, Хажисолтан бай үҙ бүлмәһендә управляющийға нимә тураһындалыр бойороҡ бирә ине. Бай, уны күргәс, управляющийға китергә ымланы ла ҡулы менән ултырғысҡа күрһәтте. Хәйретдин һарыға буялған таҙа иҙән буйлап үтергә ҡыйманы. Бысраҡ сабатаны сапылдатып үтеүе әллә нисек тойолдо. Ҡолаҡсын бөркен ҡулына тотоп, ишек яҡтауына һөйәлде. Ул йомшаҡ күн менән ҡапланған креслолар, ултырғыстар, төрлө приборҙар торған өҫтәл һәм келәмдәр менән йыһазландырылған бүлмәне тәүге тапҡыр күрә. Һәр ваҡыт бысраҡтан башҡаны күрмәгән кешегә бәләкәй генә бүлмә ожмахҡа оҡшаған донъяны хәтерләтә. Ундай

келәмдән үтеү түгел, ишек төбөндә баҫып тороуына ла үкенгән һымаҡ, Хәйретдин башын сайҡаны:

– Миңә түрбашҡа үтергә ярамай, сабатам бысраҡ.

– Үт, үт. Бысранһа, йыуырҙар әле. Ана, йомшаҡ креслоға ултыр.

– Юҡ, мин китәйем инде. Балам ауырый. Әбей ҙә көтә торғандыр. Киткәнгә хәтһеҙ ваҡыт үтте. Йомошоңдо ғына әйт тә...

– Мин һине оҙаҡ тотмам. – Бай мөмкин тиклем яғымлыраҡ булырға тырышты. – Әҙерәк ултырып ял ит. Мосолман кешегә аяҡ өҫтө тороп һөйләшеү – гонаһ. Сәй эсербеҙ, хәҙер самауыр килтерерҙәр. Мин дә сәй эсергә яратам. Хәйер, мосолмандарҙан кемдәр сәй яратмай.

Хәйретдин, урынынан ҡуҙғалырға ла ҡурҡып, күҙҙәрен өҫтәлдәге ҡағыҙҙарға текәгән көйө байҙың һүҙҙәрен ирекһеҙҙән тыңлап тороуын дауам итте. Бай ашыҡмайынса ғына өгөт һүҙен һөйләй. Ул урамда екеренгән кеүек ҡысҡырмай һәм ҡалтыранмай. Әйтерһең, өҫтәл артына икенсе кешене ултыртҡандар. Тик уның кәзә һаҡалы, хәйләкәр күҙҙәре, мискә кеүек йыуан ҡорһағы ғына үҙгәрмәгән. Ул әленән-әле алтын сынйырлы сәғәтте түш кеҫәһенән алып ҡарай. Башындағы кәпәсен төҙәтеп кейә.

– Йә, рәхим итегеҙ. Ялындырмағыҙ, ултырығыҙ.

Хәйретдин, сабатаһының үксәләренә баҫа-баҫа, өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ҡыйыуһыҙ ғына йүнәлде. Иҙәнгә түшәлгән келәмгә баҫмаҫҡа тырышып, уның бер ситен ҡайырып һалды. Ултырғыстың да ситенә генә ултырҙы.

Араҡы эсеүҙән күңеле йомшарған Хәйретдиндең күҙ йәштәре сал ингән һаҡалы буйлап өҫтәлгә тамдылар. Ул шул ваҡытта бик ҡарт кешегә оҡшаны. Әйтерһең, араҡы урынына ҡартайта торған дарыу эскән! Бәке менән таҙа итеп ҡырылған таҡыр башын алға һалындырҙы. Тиргә һеңгән майлы, һырлы ҡара кәпәсе киндер ыштан кейгән тубыҡтарына шыуып төштө. Тишек сабатаһының йүкә абуркалары сиселеп тағатылдылар. Һары балсыҡҡа мансылған киндер сылғауы һүтелгән, иҙеүе асылған. Бысраҡ киндер күлдәге лә нығыраҡ туҙғандай тойолдо. Елгә, бысраҡ һалҡын һыуға ярылып, ҡатып бөткән ҡулдары

ҡалтырайҙар. Ул ямау өҫтөнә ямау һалынған күлдәгенең итәгенә ҡабаланмай ғына тызылдатып танауын һөрттө. Тубығынан иҙәнгә шыуып төшкән кәпәсен башына кейҙе лә байға күтәрелеп ҡараны.

– Эйе, мин алтынға төкөрәм! Беҙҙең кеүек ярлы-ябағаға табылған ҙур алтын килешмәй. Күпме кешенең башына етте ул! Күпме әйтә килдем, тыңламаның, улым, улым. Үҙ башыңа үҙең еттең шул…

Ҡарттың ҡыланышына бай көслөк менән түҙҙе. Шартлап сығырға әҙер торған асыуын көскә йәшереп, һораны:

– Бер нәмә лә аңламайым, кемдең башына кем етте?

Бай ишек төбөнә барып, ситек кейгән аяҡтарынан калуштарын систе лә, әллә ни хәтлем эш эшләгән кешеләй, йыш-йыш тын алып, Хәйретдин ҡаршыһына килеп ултырҙы. Һалынып торған ҡорһағы бүҫелеп төшмәһен тигән һымаҡ, камзулының төймәләрен ҡаптырҙы ла, терһәктәрен тырпайтып, устары менән тубыҡтарына таянды.

– Әллә минең башҡа етергә йөрөүселәр бармы? Кемдәр улар?

Хәйретдин, ауырыуҙан торған хәлһеҙ кеше һымаҡ, башын һелкте.

– Ҡайҙа китәһең? Алтынды ҡайҙан тапҡаныңды әйтмәнең бит әле. – Бай кеҫәһенән аҡса сығарып һуҙҙы. Хәйретдин уның ҡулын кире этте. – Аҙ аҡса түгел. Самородоктың ташы күп сыҡҡан. Өс ҡаҙаҡ ярым ғына тартты…

– Кәрәкмәй. Мин һиңә ул алтынды һатырға алып килмәнем. Улым һаулығынан… – Иҫке ғөрөф-ғәҙәткә ныҡ ышанған Хәйретдин аҡсаны аҙ биргән өсөн түгел, ә алтын эйәһе үлем алдында ятҡан улын үлтереүҙән ҡурҡҡан өсөн алманы. – Мин алтын һатманым. – Алтын эйәһе ишетһен өсөн, ул һүҙен икенсе тапҡыр ҡабатланы. – Алтын минеке түгел, байҙыҡы. Алтынды мин һатманым! Миңә аҡса кәрәкмәй.

Таҙа иҙәнгә, келәмгә иғтибар итмәйенсә, Хәйретдин, тыңламаған аяҡтарын көслөк менән һөйрәп, ишеккә йүнәлде. Бай уның алдына сыҡты.

– Аҙ ғына туҡта әле.

– Тағы һиңә нимә кәрәк?

– Алтынды ҡайһы ерҙән таптың? Тәүҙә шуны әйт.

– Ниндәй алтынды?

– Миңә биргән алтынды.

– Белмәйем. Уны мин тапманым.

– Нисек «тапманың»? Үҙенән-үҙе миңә килмәгән дәһә... Һе-һе-һе... Ул тапмаған. Ул һүҙҙе балаға һөйлә. Кемде ышандырмаҡсы булаһың? Йыуырмын да байырмын тип уйлайһыңдыр. Һинеңсә булмаясаҡ!

Байҙың был һүҙҙәренән Хәйретдин үҙен айныған кеүек һиҙҙе. Алтынды байға килтереп ҙур хата эшләүенә тәүтапҡыр үкенде. Алтындың ҡайҙан табылыуы тураһында әйтһә, бәлә артынан бәләне көт тә тор инде. Тау эйәһе үҙенекен итәсәк. «Кисә төшөмә ут булып күренгән нәмә, тау эйәһе, асыу тотоуын белдерткән икән. Мин уны аңламаным. Ҙур алтынды, ташлау урынына, байға алып килдем. Хәҙер булғаны булған, алтынды улым табыуы тураһында әйтмәҫкә. Белмәгәндең беләге тыныс. Әйтһәм, тау эйәһе улымды ғына түгел, зат-ырыуымды ҡоротасаҡ», – тип уйланы ул.

– Ярай, мин дә ҡайтайым инде. – Хәйретдин ҡулын һуҙҙы. Бай, үҙенә һуҙылған ҡулды күрмәмешкә һалышып, өҫтәл өҫтөндәге китаптың биттәрен аҫҡылай башланы.

**Һорауҙар һәм эштәр**

**1.** Хәйретдин ҡарт ни өсөн байҙың өйөндә түргә үтергә ҡыймай?
**2**. Уның тау эйәһенә ышаныуы ҡайҙан килеп сыҡҡан?

**Фонохрестоматия**

Актёр башҡарыуында әҫәрҙән өҙөк тыңлағыҙ.



Рамазан

# ӨМӨТБАЕВ

**(1924–1997)**

## ИЛЕМ – МИНЕҢ ЯҘМЫШЫМ

Мин 1924 йылдың 7 апрелендә Башҡортостандың Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгәнмен. Атайым Өмөтбаев Ғимран Троицкиҙағы атаҡлы Зәйнулла ишандың «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә белем алған. Уны тамамлағандан һуң, Орскиҙағы Магази хәҙрәттең ысул йәҙит мәҙрәсәһенә күскән. Уның Ҡаҙағстандың Турғай далаларында балалар уҡытып йөрөүе лә шул йылдарға тура килә.

Атайымдың белемгә, яңылыҡҡа ынтылышы миңә лә күскәндер тип уйлайым. Ләкин етешмәгән тормош мине бик иртә эшкә егелергә мәжбүр итте. 1930 йылда атай-әсәй ауылда ойошторолған Будённый исемендәге колхозға ингәндәр ине. Мин дә ун өс йәшкә сыҡҡанда Әлмөхәмәт МТС-ы контораһына эш ҡағыҙҙарын күсереп яҙыусы булып эшкә төштөм. Ошо уҡ йылдарҙа колхозда йылҡы көтөүсеһе булып эшләнем.

Йылдар үтә торҙо. Мин дә үҫтем, егет булдым. 1941 йылда Баймаҡ баҡыр иретеү заводында торф ҡырҡыусы булып эшләнем. Шул йылдың көҙөндә урта мәктәпте Маҡтау грамотаһы менән тамамланым һәм Магнитогорск тау-металлургия институтына имтиханһыҙ ҡабул ителдем. Ләкин һуғыш сығып китеү арҡаһында, 1941 йылдың аҙағында Ҡыҙыл Армия сафына саҡырылдым. Бөйөк Ватан һуғышының ҡанлы 1942 йылының мартында ВКП(б) сафына ҡабул ителдем.

Ҡара сәсте ағартырҙай һуғыштан ҡайтҡас, тағы ла Баймаҡ районына эшкә килдем. 1946–1947 йылдарҙа Сибай руднигында комсомол комитеты секретары булып эшләп йөрөгән саҡта ВКП(б)-ның Баймаҡ райкомына эшкә күстем. Бында инструкторҙан беренсе секретарға тиклем хеҙмәт юлы үттем.

1960 йылда иһә КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетына эшкә үрләтелдем. 1967 йылдың баштарында Мәскәүҙә КПСС Үҙәк Комитетының Ижтимағи фәндәр академияһын тамамлап, иҡтисад фәндәре кандидаты дәрәжәһен яулағандан һуң, Башҡортостан Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары итеп эшкә ҡайтарылдым. Был вазифаны туғыҙ йылға яҡын башҡарҙым. Һуңғы эшләгән урыным – республиканың Дәүләт кинофикация комитеты рәйесе. Күп кенә орден-миҙалдар, шул иҫәптән Ленин ордены, СССР Халыҡ хужалығы күргәҙмәһенең алтын, көмөш, бронза миҙалдары менән бүләкләндем. Рәсәй мәғариф отличнигы, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре исемдәренә лайыҡ булдым.

Ижадым хаҡында бер нисә һүҙ.

Эшләү осоронда сәйәси иҡтисадҡа арналған биш китап сығарҙым. Тәүге ижад емешем булып 1984 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылған «Сиҙәм яҙы» тигән документаль повесым торалыр. Бынан тыш, ошо йылдарҙа егермегә яҡын хикәйә, новеллалар яҙҙым, улар төрлө гәзит-журналдарҙа донъя күрҙе, ләкин бер өлөшө генә «Һылыубикә әбей» тигән китапта нәшер ителде. 1993 йылда «Ысыҡтан эйелә ҡылған», 1995 йылда рус телендә «Баймаҡ баҡыр иретеү заводы тарих киҫелештәрендә» исемле китаптар сығарҙым. Башҡорт һәм рус телдәрендә «Генерал Күсимов» исемле документаль әҫәр яҙҙым.

## АТЛЫ БАШҠОРТ*

*(Повестан өҙөк)*

### VII

Бөгөн төндә Ғилмишәрифтәр станцияға килгән аттарҙы бушатырға барҙы. Теплушкаларҙа килеп аяҡтары, кәүҙәләре ойоған меҫкен аттар ҡыя түшәлгән таҡтанан ергә төшә алмай интекте, үҙ-ара иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан шикелле, кешнәшеп алды. Ергә төшкәс тә, ойоған аяҡтарында тора алмай кәүҙәләре менән ҡалтыранды, ә ҡайһы берҙәре шунда уҡ ергә йығылып, аунарға кереште.

Ғилмишәриф нуҡта чумбурынан тотоп сығарған ат уны күреү менән әкрен генә кешнәне лә таҡтанан төшкән саҡта, ирендәрен дерелдәтеп, ҡултығына башын тығырға

* Ҡыҫҡартып алынды.

маташты. Буйы-һынына, ҡойроҡ-ялына ҡарап, Ғилмишәриф атты төҫмөрләргә лә самалағайны, ләкин бөтә ергә өлгөргән Заровняевтың: «Тиҙ ҙә тиҙ!» – тигән фарманы ентекләп ҡарарға мөмкинлек бирмәне. Етмәһә, ҡараңғы. Шулай ҙа ат уның артынан бер аҙым да ҡалмай йылы тынын уның елкәһенә бөркөп килә бирҙе. Хатта һарайға инмәй, аяҡтары менән ер сапсып бының артынан китергә ынтылды. «Был ни ғәжәп! Әллә мине таныны инде был хайуан?» – Ғилмишәриф бер аҙ аптырап торҙо ла казармаға атланы.

Башҡа яҡтарҙа сентябрҙә лә ҡояшлы, йылы көндәр була, ә бында, төньяҡ Урал тауҙарына тартым ерҙә, сентябрь айы һалҡынса була.

Иртән, Ғилмишәрифтең ашҡынғанын һиҙенгәндәй, старшина уларҙы туп-тура ат һарайына алып китте. Килгәс тә, яңы аттарҙы урамға сығарып ҡулсаларына бәйләргә ҡушты. Ғилмишәриф кисәге атты бәйләгән денникка атлыҡты. Килеп инеү менән ишек аша башын һалып торған аҡ йондоҙло атҡа күҙ ташлауы булды, йөрәге һикереп китте, күҙенән бер нисә бөрсөк шатлыҡ йәше бәреп сыҡты. Уның алдында «Ҡыҙыл ялан» колхозының өйөр айғыры Әүхәҙи тора ине.

Ишекте емереп сығырҙай булып тыбырсынған бурыл айғыр күҙҙәрен еүешләтеп, ҡылған төҫлө ял ҡаплаған муйынын Ғилмишәрифтең яурынына һалды. Ҡалтыранған ирендәрен элекке көтөүсеһенең күкрәгенә терәне. Әүхәҙи тыуған яҡтан сәләм тапшырырға, хәл-әхүәлен һөйләргә теләгәндәй, башын сайҡап алды ла Ғилмишәрифтең икенсе яурынына үрелде. Элекке көтөүсеһе генә өнһөҙ тора һәм атын ҡосаҡлап һөйә ине.

Аттарҙы сығарып бәйләнеләр. Старшина башта уларҙы урап ҡарап сыҡты. Йөрөнө-йөрөнө лә бөтә аттарҙан да берҙәй айырылып торған Әүхәҙи янына туҡтаны. Морононан һыйпарға уйлағайны ла, айғыр муйынын һуҙып, ҡолаҡтарын шымайтты. Күрәһең, күпте күргән старшина аттың кәйефен шундуҡ аңланы.

– Сильный конь, с норовом, – тип, ситкәрәк китеп ҡарап торҙо ла, әүрәтергә тырышып, ауыҙ эсенән әллә

низәр һөйләнә-һөйләнә, ҡулын һоноп янына яҡынлашты. Был юлы айғыр старшинаның салғыйын умыра тешләп алды ла тешенә эләккән буҫтау киҫәген ергә төкөрҙө. Эскадрон пырх итеп көлөп ебәрҙе. Старшина атҡа ҡарата бер ниндәй ҙә тупаҫлыҡ күрһәтмәне: «Но ничево, ағайыңдар һинән былайыраҡтарҙы ла өйрәткән кеше әле», – тип үҙен тынысландырҙы.

Шул арала Әүхәҙи нуҡтаһының чумбурын тартып өҙҙө лә теҙелеп торған эскадронға табан китте. Ҡыҙылармеецтар ҡаса башланы – ҡурҡтылар. Ә Әүхәҙи, муйынын һуҙып, Ғилмишәриф эргәһенә килеп туҡтаны, томшоғон уның күкрәгенә ышҡырға тотондо. Бөтә эскадрон аттың был серле ҡылығына аптыраны. Ғилмишәриф айғырҙың муйынынан ҡосаҡлап, нуҡтаһынан ғына тотто ла бүрәнәгә килтереп бәйләне. Старшина уның эргәһенә осоп тигәндәй килеп баҫты ла:

– Ҡыҙылармеец Яуымбаев, быны нисек аңларға?! Мине умырып тешләп алды, ә һиңә иркәләнә!

– Был беҙҙең колхоздың гүләүәй йылҡыһының өйөр айғыры Әүхәҙи – «Ворошиловсы һыбайлылар» түңәрәгендә менеп өйрәткән атым.

Старшина ҡыҙылармеецтың һүҙенә ышаныр-ышанмаҫ ҡиәфәттә:

– Улай булғас, был айғыр тураһында бөтә мәғлүмәттәрҙе әйтеп сыҡ, – тине.

Ғилмишәриф бөтә кеше ишетерлек итеп:

– «Ҡыҙыл ялан» колхозы, 1938 йылдан алып РККА фонды, төҫө бурыл, маңлайында аҡ урайы – йондоҙо бар, айғыр, исеме Әүхәҙи, атаһы – Әбүбәкир, инәһе – Хаҙыя, таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан, 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған. Тыштан артҡы уң аяғы өҫтөндә «ФКА» тигән, йәғни «Фонд Красной Армии» тигән тамғаһы бар. Промерҙарын[1] әйтәйемме?

– Бейеклеген генә әйт тә…

– Бейеклеге мундаһынан ергә тиклем 170 сантиметр.

---

[1] *Промерҙар* – кавалерияға алынған аттарҙың буй-һынының үлсәүҙәре.

– Барыһы ла дөрөç. Хатта паспортында күрһәтелмәгән тыуған көнөн дә әйтеп ҡуйҙы, – тине ветврач.

Сит ерҙә ауылдашы, хатта үҙе атланып йөрөгән аты менән осрашыуына Ғилмишәриф кенә түгел, бөтә эскадрон шатланды. Тик эскадрон өсөн был дөйөм шатлыҡ ғәрсел, көнсөл старшина – «ат профессоры» Заровняев күңеленә бер таш булып ятты. Ошо сәғәттән алып Ғилмишәрифкә булған мөнәсәбәте ҡырҡа үҙгәрҙе. Ә үҙе Әүхәҙигә атланып ҡала урамынан саптырып үтеү теләге менән яна башланы.

– Кисә килгән аттарға биш көн карантин! Устав буйынса карантин ике аҙна булырға тейеш. Ләкин срокты ҡыçҡартабыҙ, ошо карантин мәлендә ат һарайына инеп, буталып йөрөүҙе ҡәтғи тыям! – тип иғлан итте бер аҙ баçыла төшкән старшина. Һуңғы һүҙенең бигерәк тә Ғилмишәрифкә ҡарай әйтелгәнен бөтә кеше аңланы.

Ғилмишәриф, тойғоһона бирелеп, армияла йәшәп килгән икенсе бер тәртипте хәтеренән сығарҙы. Кемдең дәрәжәһе юғарыраҡ, шул кеше кавалерияла яҡшыраҡ атҡа атлана. Бармағы менән төртөп күрһәткән ат – начальниктыҡы. Армияла кешеһен дә, атын да үҙ начальниктарын хөрмәтләргә өйрәтә торған борон-борондан килгән йола, тәртиптәр етерлек. Башта үҙҙәрен яҡшылыҡ менән яраттырырға тырышалар, улай барып сыҡмаһа, башҡа юлдары ла бар.

Беҙҙең старшина ла ошондай юлды һынап ҡарарға булды.

Ул, эскадронды таратып ебәргәс, ветврачты саҡырып алды ла:

– Һин теге Яуымбаевтың атын манежға сығар әле, ипкә килтерәйек, – тине. Ләкин һарайға инеп киткән ветврач урамда ҡалған Заровняев эргәһенә йүгереп кире сыҡты.

– Юҡ, юҡ, иптәш старшина, яҡын барырлыҡ түгел, үрәпсеп, ажғырып тора.

– Ничево, ничево, ундай сығынсыҡтарҙы өйрәтә торған саралар ҙа етерлек! – Старшина һарайға ыңғайланы, артынан ветврачты ла эйәртте. Әүхәҙи быларҙы ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды, ләкин донъя күргән стар-

шинаны ҡолаҡ шымайтып ҡына ҡурҡытырлыҡ түгел ине. Әммә ат та иҫәр түгел, старшинаға арты менән боролдо ла шартлатып ишеккә типте. Был урынында шып туҡтаны ла ветврачҡа ымланы. Ә теге икенсе яҡтан ат алдына сығып, рәшәткә аша таяҡ менән төрткөләп, аттың башын старшина торған ишек яғына борҙо. Шуны ғына көтөп торған Заровняев ҡапыл ишекте шар асты ла аттың моронона йәбеште. Һул ҡулы менән Әүхәҙиҙең үңәсенән һығып тотоп, уң ҡулы менән аттың морон кимерсәгенән эләктереп алды, аттың башын аҫҡа баҫып, сәбәләнеп йөрөгән ветврачҡа:

– Давай, давай закрутку! – тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи башын күтәреп старшинаны һелкеп ырғытырға тырышты. Бер нисә тапҡыр уны иҙәндән күтәреп тә алғайны, ләкин аяуһыҙ старшина бурауыҙ һымаҡ ҡыҫып тотҡан ҡулдарын ысҡындырманы. Ат бөтә көсөнә тыбырсынды, ажғырып төрлө яҡҡа әйләнгеләп туланы, ләкин уны һелкеп ырғыта алманы. Ҡылдан эшләнгән закрутка менән Әүхәҙиҙең ирендәрен ҡыҫып борҙолар ҙа бөтә кәүҙәһе ҡалтыранып иҫтән яҙа башлаған айғырҙың нуҡтаһы өҫтөнә йүгән, шунан башын өҫкә күтәрмәһен өсөн мартингал һалдылар. Бер нисә минут эсендә ҡара тиргә төшөп, еүешләнгән күҙҙәрен өҫкә текәгән атты закрутканан тартып, һөйрәп тигәндәй, манежға сығарып эйәрләнеләр. Хәҙер атҡа Заровняев хужа. Ул бесәй шикелле ат өҫтөнә һикереп менде лә:

– Закрутканы ысҡындыр! – тип ҡысҡырҙы. Әүхәҙи сайҡалып алды ла торған ерендә туп кеүек ырғырға тотондо. Артҡы аяҡтарын өҫкә ташлап, һыртында ултырған рәхимһеҙ кешене һелкеп ташларға ынтылды.

– Ә һин әле козлить* итергә маташаһыңмы? Ничево, ничево, ашыҡма, уныһына ла сара табырбыҙ, – тип ауыҙ йырҙы эйәргә сайыр һымаҡ йәбешкән старшина. Аяғындағы шпорҙары менән аттың ҡабырғаһын тызыны. Бындай мөғәмәләне ғүмерендә лә күрмәгән айғыр уның һайын

---

* Аттың башын түбән баҫып, һыртын бөгөп бер урында һикереүе.

ҡарышты, торған урынынан бер аҙым да ҡуҙғалманы. Старшина, ауыҙын йырғыслап, ҡамсы менән дә ярып ҡараны, ләкин ат тағы ла нығыраҡ ҡарышты. Шунан, артын борғотоп, өҫтөндәге кешене ергә алып һелкте, әммә сос старшинаны йыға алманы. Теге, бесәй шикелле, аяғы менән төштө.

Тамам сығырынан сыҡҡан старшина аттың янбашына ҡамсы менән бер нисә тапҡыр һыҙыра тартты ла, ялына йәбешеп, яңынан уның өҫтөнә атланды. Хәҙер Әүхәҙи арт аяҡтарына торҙо, алғыларын юғары күтәрҙе – старшинаны артҡа шылдырып төшөрөргә самаланы. Ләкин старшина көслө аяҡтарын нығыраҡ ҡыҫып, бөтә кәүҙәһе менән алға эйелде лә быныҡ муйынына йәбеште. Ат, өҫтөндәге кешенең көслө ҡулдарынан ысҡынырға теләп, муйынын борғоланы, һыртын бөгөп, бөтә кәүҙәһе менән һелкенде, әммә старшинаны барыбер ергә ырғыта алманы. Шулай бер урында күп кенә тапанып торғас, старшина һуңғы сараһын уйлап сығарҙы. Аттан һикереп төштө лә:

– Давай был сығынсыҡты кешәнләйек, – тип, һарайҙан арҡан алып килергә ҡушты.

Тамам киреләнгән атты кешәнләп тә артыҡ эш ҡыйрата алманылар. Артҡы бер аяғы үҙ муйынына ныҡ тарттырып бәйләнгән Әүхәҙиҙең ҡымшанырға ла әмәле ҡалманы. Муйынын дуға кеүек бөгөп ҡан һауған йәшкелт күҙҙәрен маңлайына атты ла, бөтә тәнен дерелдәтеп, үҙ яҙмышын көттө. Старшина башы ла, аяғы ла ҡуҙғалмаҫлыҡ итеп шаҡарып бәйләнгән аттың һыртына ултырҙы ла бөтә ғаләм алдында мәсхәрәләнгән ғорурлығы өсөн көтмәгәндә атты ҡамсыларға тотондо.

Арғымаҡ, старшина һуҡҡан һайын, тыбырсынды. Ҡамсы менән һуҡҡан эҙҙәренән юлаҡ-юлаҡ булып ҡабарып сыҡҡан урынын дерелдәтте. Ахырҙа арыған старшина ҡамсыһын ергә ырғытты ла шпорҙары менән тибенә башланы. Бындай яҙаны көтмәгән Әүхәҙи ҡапыл ҡабырғаһына ауҙы. Итегенең йөҙлөгөн өҙәңгенән ысҡындырып өлгөргән Заровняев ат аҫтына эләкмәне. Ерҙә дырҫ-дырҫ тын алып ятҡан Әүхәҙиҙе яңынан ҡамсыланы ла кешәнен систе. Күҙ төптәренә тиклем ҡара тиргә төшкән ат аяғына

баҫып бөтә көсөнә һелкенде лә, ике яғында баҫып торған ике кешегә күҙҙәренән ҡәһәрле осҡон атып, һарайына йүнәлде. Был инде, ун биш йыл атлы ғәскәрҙә хеҙмәт итеп, дошман алдында ла сигенмәгән Заровняевтың ат алдында беренсе еңелеүе ине.

– Был атты бөгөн ашатмағыҙ! Ул һыуынырға тейеш! – тип әмерен бирҙе лә каптёркаға ҡарай атланы.

Уның ҡайтыуын дүрт күҙ менән көткән Ғилмишәриф ниҙер булғанын йыртыҡ итеген ҡаплап, һөмһөрө ҡойолоп килеп инеүенән үк һиҙенде. Ул һылтау табып шунда уҡ һарайға йүгерҙе.

Күңеле һиҙгән икән шул: тәне ут кеүек янып, йөндәре ойошҡан Әүхәҙи ҡан һауған ҡабырғаһын стенаға терәгән. Ғилмишәрифте күргәс, үҙ ҡайғыһын һөйләргә теләгәндәй ыңғырашып алды. Әүхәҙи кормушкаһын кимереп тора ине.

Юлаҡ-юлаҡ ҡамсы эҙҙәрен күргәс, ат йәнле Ғилмишәрифтең күҙенә йәш эркелде, тамағына төйөр тығылды. Ҡара тиргә төшкән, ауыҙ ситтәре иҙелеп бөткән. Тимәк, атты кемдер көсләп менергә маташҡан. Был тик старшинаның ғына этлеге! Старшинаға булған ихтирамы көл булып елгә осто. Ғилмишәриф ҡулын әсе тир йылыһы бөркөп торған ат ялы араһына тығып бер аҙ торҙо ла, һалҡын һыуға мансылған сепрәкте аттың ҡабарған, ялланып сыҡҡан урындарына һалды. Хайуан, муйынын бөгөп, яҡташының арҡаһынан иркәләнә.

Әүхәҙиҙе бер нисә көн урамға сығармай тоттолар. Заровняев тамам ябығып йонсоғандан һуң аттың уға буйһоноп баш һалыуын көттө. Әммә малҡай ябығыу түгел, Ғилмишәрифтең тырышлығы менән көн дә матурайҙы, ялтыраны. Ғилмишәриф старшина ҡушҡандың киреһен эшләне. Уны ваҡытында таҙартты, ашатты, эсерҙе. Ат старшинаға мөнәсәбәтен тиҙ генә үҙгәртергә теләмәне, ҡолаҡтарын шымайтып ҡаршы алды, һалҡын ҡараш менән оҙатып ҡалды. Старшина ла тиҙ бөгөлөп төшә торғандарҙан түгел: Әүхәҙигә йәшертен генә килеп, уны тәрбиәләп йөрөгән Ғилмишәрифкә ҡарата үтемлерәк сара эҙләне. Нисек кенә булмаһын, Ғилмишәрифте үҙ атынан айырырға, ситләтергә

уйланы, сөнки үҙе атлана алмаған атҡа рядовой Ғилмишәрифтең менгәнен эскадрон күреп йә ишетеп ҡалһа, Заровняевҡа был часта урын ҡалмаясағын бик яҡшы һиҙә ине. Был тиклем мәсхәрәне нисек күтәрә алһын? Ошоға тиклем бер кемгә лә билдәле булмаған ауыл егете рядовой Яуымбаев эскадронда ғына түгел, ә бөтә училище күләмендә дан ҡаҙанасаҡ. «Билдәле, был атты эскадрон командирына ла тәҡдим итеп була, ул да, яҡшы ат күрһә, йоҡоһонан яҙа. Ләкин Әүхәҙиҙең эскадронда тороп ҡалыуы килешеп етмәҫ, сөнки ул Яуымбаев бар ерҙә башҡа кешене яҡын ебәрмәйәсәк», – тип уйланы Заровняев.

## VIII

Бер нисә көн үтеүгә, эскадрон командованиеһының саҡырыуы буйынса училищеның ат белгестәре, шул иҫәптән ат өйрәтеү буйынса инструктор, эскадрон старшинаһының күптәнге танышы, хеҙмәттәше Дон казагы майор Пустовой яңы аттарҙы ҡарарға килде. Уларҙы бер тапҡыр урап сыҡты ла бөтәһенән дә аша ҡарап торған бурыл айғырға сат йәбеште:

– О, бына был, исмаһам, ат! Был хайуан өсөн йәнең дә йәл түгел, – тип телен шартлатып ҡуйҙы. Артынан бер аҙым ҡалмай йөрөгән ветврачтан: – Йә, документын күрһәтегеҙ әле был хайуандың. Ниндәй тоҡомдан, ата-инәләре кем? – тип һораны. Ветврач, Әүхәҙиҙең паспортын алып, мәғлүмәттәрҙе уҡып сыҡҡас: – Ғәжәп хәл. Таҙа ҡанлы башҡорт тоҡомонан быңдай аттарҙы ошоға тиклем осратҡаным юҡ. Улар, нигеҙҙә, ҡола төҫтә, сысҡан һыртлы була, баштары ҙур, муйындары йыуан, көслө, ләкин байтаҡ тәпәш, бәкәлдәрендәге сәсмәүҙәренә үҫкән йөнө услап алмалы, үҙҙәре сиктән тыш сыҙамлы була. Был хайуандың тик ял-ҡойроғо ғына башҡорт атыныҡы. Ә үҙе ысын альбинос[1], – тип, уны тыңлап тороусы кеше-

---

[1] *Альбинос* – кешеләр һәм хайуандарҙың ата-бабаларынан килгән нормаль пигментацияһының юғалыуы. Бабаларының тоҡомона оҡшамай, ғәҙәттә, аҡ төҫлө булып тыуыуы.

ләргә башҡорт аты тураһында тулы мәғлүмәт бирҙе. Промерҙарын күҙе менән самаланы ла: – Был ысын стипль-чез[1], конкур[2] аты. Бына, исмаһам, һын, бына был инде беҙҙең кавалерияның данын күтәрә, биҙәй торған спорт аты буласаҡ, – тип, эске шатлығын йәшерә алмай телен тағы шартлатып алды. Ләкин ҡолаҡтарын шымайтып, нуҡта чумбурына тартылып торған ат эргәһенә килергә шикләнде. Майор үҙен уратып алған бөтә кешене һөҙөп ҡарап сыҡты ла: – Атты эшлектән сығара яҙғанһығыҙ. Ул бөтөнләй ҡарышҡанға оҡшай. Бына закрутканан һуң әле ирендәре лә уңалып бөтмәгән, – тип, ул Әүхәҙиҙең аҫҡы-өҫкө ирендәрендә түңәрәкләнеп өтөлөп сыҡҡан көрән ҡутырына ҡулы менән төртөп күрһәтте. – Кемегеҙ менергә маташҡайны? – тип майор тирәләп торған атлыларға һорау бирҙе. Аҫҡа төбәлеп, итегенең башы менән нишләптер ер соҡоп торған Заровняев, ҡапыл йоҡоһонан уянған кеше шикелле:

– Өсөнсө көн мин атланырға маташҡайным, – тип яуап бирҙе.

– Йә, йә, шунан?..

– Шунан – шул. Был ат мине мендермәне. Уның характеры минекенә ҡарағанда нығыраҡ булып сыҡты, иптәш майор.

Бөтә ат белгестәре старшинаның яуабынан ҡысҡырып көлөп алды. Тағы ла нығыраҡ йәнләнә төшкән майор, күҙҙәрен хәйләкәр ҡыҫып:

– Ай-ай, ай-ай! Бына һиңә кәрәк булһа, беҙҙең кавалерияла һин дә атлана алмаған ат килеп сыҡты бит, ә! Был мәсхәрәне нисек күтәреп йөрөмәк кәрәк, иртәгәнән башлап һиңә, шпорҙарыңды тапшырып, йәйәүле ғәскәргә күсергә тура килер, ахыры, – тип, майор старшинаның былай ҙа әсенеп торған күңел йәрәхәтенә тоҙ һалды. Атлы ғәскәрҙән йәйәүлегә күсеү кавалерист өсөн иң ҙур яза икәнен белгән кешеләр бер-береһенә ҡарап йылмайҙы.

---

[1] *Стипль-чез* – 4 км-ҙан 8 км-ға тиклем (ҡаршылыҡтар ҡуйылған) ябыҡ дистанцияла аттарҙың сабышы.

[2] *Конкур* – ун дүрт ҡаршылыҡ ҡуйылған кәртәле майҙанда ат спорты ярыштары үткәреү.

– Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул – иртәгә был дөлдөлдө беҙҙең ат һарайына күсерегеҙ. Беҙҙә, әлбиттә, иптәш старшина, һинең һымаҡ атаҡлы кавалеристар юҡ, шулай ҙа был атты мин үҙем өйрәтеп ҡарарға уйлайым, – тип әмер бирҙе. Оялышынан кишер һымаҡ ҡыҙарған старшинаға көмөш шпорҙарын зыңҡылдатып (бәлки, шпорҙарының һуңғы сылтырауылыр), үксә шаҡып:

– Тыңлайым, иптәш майор, барыһы ла һеҙ ҡушҡанса булыр, – тип әйтеүҙән башҡа әмәл ҡалманы.

Кис, ҡараңғы төшөү менән, бөтә эскадрон казармала саҡта, старшина, артына текә таҡта ҡуйылған бричкаға тағып, Әүхәҙиҙе кавалерия училищеһының ат һарайына оҙатты. Казармалағы иптәштәре төнгө йоҡоға талғас, Ғилмишәриф йәһәт кенә кейенеп үҙҙәренең ат һарайына йүгереп килде. Ләкин Әүхәҙиҙең деннигы буш ине. Аҫау айғырҙың һыу төбөнә төшөп юғалған таш кеүек ғәйеп булыуы күп кеше, шул иҫәптән Ғилмишәриф өсөн дә сер ине.

## IX

Кавалерия училищеһы бинаһы, хужалыҡ блоктары, ат һарайҙары, манежы ла бөтә ҡыҙыл кавалерияға үрнәк булырлыҡ итеп йыһазландырылған. Училищеның начальнигы – Граждандар һуғышы осоронда атаҡлы Беренсе атлы армияла эскадрон командиры булып хеҙмәт иткән, атлы ғәскәрҙәрҙә исеме киң таралған, Ставрополь казагы генерал-майор Вербицкий ине. Генералдың ат йәнле кеше икәнен күптән белгән майор Пустовой Әүхәҙиҙе ике-өс көн ашатып тәрбиә итте лә училище начальнигына күрһәтергә teләп манежға алып сыҡты. Аттың генерал күңеленә хуш килеүенә уның бер ҙә шиге юҡ ине.

Вербицкий учениеларҙы өлгөлө үткәргәне өсөн Әрмән компартияһының Үҙәк Комитеты бүләк иткән Баликджан[1] исемле күк айғырына атланып түгел, «Энка» машинаһына ултырып килде. Билдәле, генерал ат

---

[1] *Баликджан* – ҡәҙерле бала, малай.

ҡарарға сыҡҡас, башҡа командирҙар ҙа ҡалмай. Штаб начальнигы полковник Поддубный ҙа кабинетында нисек ултырһын? Ҡул ҡуяһы ҡағыҙҙарын тиҙ генә йыйыштырып, йәшерен бүлексәгә тапшырҙы ла начальнигы артынан урамға сыҡты. Әүхәҙи тигән ат Вербицкий күңеленә хуш килһә, Поддубныйҙың күптән эсен көтөрләтеп йөрөгән күк Баликджан үҙенә ҡала ла баһа! Бер үҙе өс атҡа атланып йөрөмәҫ бит инде! «Уға училище начальнигының аты күсһә, үҙенең дончагы Аскетты миңә ҡалдырмай кемгә бирһен?» – тип уйлай штаб оператив бүлексәһе начальнигы майор Изотов.

Кавалерияла ҡупшы ат – борон-борондан үҙ-ара дәғүә сығанағы. Бында һинең баһаңды атланып йөрөгән атыңа ҡарап билдәләйҙәр. Атың күркәм булһа, һиңә ихтирам да, хөрмәт тә бар. Мәгәр инде аҫтыңдағы атың бер баҡтаһын да ҡоймаған үжәт хайуан икән, теләһә ниндәй алтындай кеше самауыр еҙенә әйләнә. Хатта кавалерия частында хеҙмәт иткән командирҙарҙың ҡайһы саҡта ғаилә ныҡлығы ла ирҙең ниндәй атҡа атланып йөрөүе менән бәйле.

– Ҡайҙа, теге ҡанатлы дөлдөлөгөҙҙө күрһәтегеҙ әле, ниндәй мал икән? – тип, генерал бәйле торған ат яғына йүнәлде.

– Рәхим итегеҙ, иптәш генерал! – Пустовой алдан төштө. Әүхәҙи үҙенә яҡынлашҡан ят кешеләрҙе күргәс, йәшкелт күҙҙәрен тәгәрәтеп алды ла көслө муйынын дуға һымаҡ бөгөп башын өҫкә сөйҙө, нуҡта чумбурын өҙөргә маташты. Ә быны алдан һиҙенгән Пустовой чумбурға өҫтәп нуҡта дүңгәләгенә тимер сынйыр ҙа бәйләп ҡуйғайны. Әүхәҙи, башын ергә эйеп, дүрт аяғын бөрә баҫты ла бар көсөнән чумбурға аҫылынды.

– Был ат түгел, ысын йыртҡыс! – тине тәжрибәле генерал. – Бер ҡулда яҡшы итеп өйрәтеп алғанда, быныӊ менән спортта ла сабыш буйынса рекордтар ҡуйырға була. Ғөмүмән, ат шәп. Башҡорт аты булыуға ҡарамаҫтан, уларҙан байтаҡ бейек, буйы оҙон, һомғол, тимәк, йөрөк ат. Алғы бәкәлдәре нәҙек, ҡоро, тояҡтары текә, йомро – сапҡыстар тоҡомонан. Промерҙары классик

аттарҙыҡынан бер ҙә ҡайтыш түгел, – тип бөтә кеше ишетерлек итеп үҙ-үҙе менән һөйләшеп алды.

Бер аҙ торғас, теҙгенен бушатҡан атҡа тағы ҡараны:

– Шулай ҙа был дөлдөл минең өсөн түгел. Был атҡа атланырға йәшем үткән инде минең. Бәлки, берәй йәшерәк кеше өйрәтергә тотонор, – тип үҙ командирҙарына һорау менән ҡараны. Ләкин бәйле көйөнсә лә теләһә ниндәй сит кеше өҫтөнә ташланырға торған өйөр айғырына атланырға теләп алға аҙым атлаған берәү ҙә табылманы. Генерал манежға яҡты хыял менән йыйылған командирҙарының өмөтөн өҙөп ҡайтып китте. Ошо ваҡиғанан һуң Әүхәҙиҙе ат һарайына яптылар ҙа бөтөнләй унан төңөлдөләр.

## X

Ғилмишәриф бөгөн ауылдан хат алды. Адресын – алтынсы класта уҡып йөрөгән күрше малайы, хатты ҡыҙы, быйыл дүртенсе класҡа барырға тейеш Миңленуры, яҙған. Эстәлегенә ҡарағанда, хатҡа яҙылған һүҙҙәрҙе әсәһе Райхана әйтеп торған булырға тейеш. «Иртәнге иҫкән елдәр аша Урал тауындай ялҡынлы сәләм ебәргәндән һуң, хеҙмәтеңдә уңыштар теләйбеҙ. Немецтарҙы ҡырып бөтөрөп, Тыуған илгә һау-сәләмәт кире әйләнеп ҡайт, атай», – тиелгән. Күрше-күләндән сурытып-сурытып сәләм теҙгәндән һуң, ауыл хәлдәрен яҙған: «Һинең менән әрмиәгә ҡуша киткән Мәте Заһретдин апаның[1] командирҙарынан ташҡа баҫылған кантур ҡағыҙы килде. Өс немецты ҡырып, аҙаҡтан үҙе лә үлгән, үҙе үлһә лә, батырлығы өсөн орден бирәсәктәр, ти».

Ошо урынға еткәс, Ғилмишәриф, ҡапыл күңеле болоҡһоп, хат уҡыуҙан туҡтаны. Уның күҙ алдына ике ай тулыр-тулмаҫ алда моңһоу ғына ҡулын болғап, хушлашып киткән ауылдашы Заһретдин килеп баҫты. Шул күрешеү һуңғы булған икән. «Бында уның хеҙмәтен көлкөгә һабыштырырға маташһалар ҙа, фронтҡа барғас,

[1] *Апа* (*диал.*) – атайҙан өлкән ир кеше.

бирешмәгән икән. Маладис, Заһретдин ағай, батырлығың өсөн. Ялан ауылының ысын ҡаһарманы булып үлгәнһең. Етмәһә, орден да бирәләр ти бит әле. Бына шулай ул минең ауылдаштар», – тип Ғилмишәриф эстән генә хеҙмәттәше менән маһайып та алды.

Ауыл хәбәрҙәре Ғилмишәрифтең күңелен айҡап, тыныс ҡына йоҡларға бирмәй, төрлө уй-хәсрәткә дусар итте. Ул бөтә әҙәмдең һары ҡайғыһын, яңы ғына етеш донъяға күсеп, кешеләрсә йәшәй башлаған үҙ ауылдарының пыран-заран килеүен әсенеп уйланы, фронтта баш һалған ауылдаш ирҙәренең донъяһы вайран булып ятып ҡалыуы өсөн ошо һуғышты башлаған ләғнәт Гитлерҙы ҡарғаны, кеше иленә, кеше мөлкәтенә ҡанлы ҡулдарын һуҙған эйәрсәндәрен ҡәһәрләне.

Ғилмишәриф бөтә күңеле менән үҙен фронтта тоя. Майор Пустовой үҙенең сираттағы осрашыуында уға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ла үҙенә саҡырҙы:

– Йә, иптәш Яуымбаев, хәҙер ниндәй күнекмәләр башҡараһың? Эштәр нисек бара? – тип серле генә итеп һорап ҡуйҙы.

– Хәҙер мин, иптәш майор, ҡаршылыҡтар аша һикергәндә ат өҫтөндә дөрөҫ ултырыу алымдарын өйрәнәм: башта атланып, унан юрттырып.

– Дөрөҫ. Хәҙер ни стадияһына еттең?

– Кәртәләр аша ат аяғын тейҙермәй юрттырып үттем дә кавалеттиға[1] күстем. Иртәгәнән башлап Әүхәҙиҙе һикертә башлайым. – Ғилмишәрифтең һүҙен диҡҡәт менән тыңлап торған майорҙың күҙе уйсанланып китте, йөҙөндә етди һыҙаттар сағылып ҡалды:

– Иптәш Яуымбаев, хеҙмәтең өсөн бик ҙур рәхмәт. Һинән бик шәп спортсы сығыр ине. Күнекмәләрҙе лә бик яҡшы, аныҡ итеп башҡарырға өйрәнә башлағайның. Атың тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Спорт аты, килмәгән урыны юҡ. Ул ат менән мин үҙем дә эшләргә уйлағайным, тик һине йәлләнем, бигерәк тә һинең өсөн йәнен

---

[1] *Кавалетти* – 20–35 сантиметр бейеклегендәге тумәрҙәргә һалынған кәртәләр аша һыбайлы ат йөрөтөү.

бирергә әҙер торған ошо хайуанды, – тип Әүхәҙигә йылы ҡараш ташланы. – Иртәгәнән башлап, иптәш Яуымбаев, мин һине курсанттарҙың учебный эскадронына ебәрәм, Әүхәҙи ошонда спорт аттары менән тороп торор, ул бында ерегеп тә өлгөрҙө. Был ҙур эш. Иртәгәнән башлап – беренсе эскадронға! Дай пять! – тип, майор Ғилмишәрифтең ҡулын һелкә-һелкә изге юл теләне. Был сентябрь айының сыуаҡ көндәре ине.

Н. ҡалаһынан төндә эшелондарға тейәлеп ултырып киткәндең ун бишенсе көнөндә эскадрондарҙы Саратов өлкәһенең көньяғында Сталинград өлкәһе менән сиктәш бәләкәй генә станцияның бер төпкөлөнә төшөрҙөләр. Оҙаҡ ҡына ваҡыт ябыҡ вагондарҙа килгән аттар, ергә төшөү менән, бер-береһе менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан шикелле кешнәшеп, өр-яңынан танышып алдылар. Ҡайһы бер салтыраҡ аттар, эйәләренә баш бирмәй, теҙгендәренән тартылып иреккә талпынды, оҙон юл буйы ашаған ҡыу бесәндән ерекһеп, урман ситендә күпереп үҫкән ҡурпыға ынтылды.

Уларҙы алғы һыҙыҡҡа байтаҡ ер етмәҫтән бушатҡандар икән. Икенсе көнөнә килгән эскадрондарҙы яңынан комплектланып ятҡан кавалерия дивизияһына ҡуштылар. Дивизия һуңғы ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнашып, кешеһен дә, атын да күп кенә юғалтҡан, ныҡ ҡына туҙынған булып сыҡты.

Килгәндең икенсе көнөндә яңыларҙы баштан-аяҡ ҡоралландырҙылар. Карабин, ҡылыс, ә бер нисә взводҡа хатта автомат та тараттылар. Яңы килгән ҡыҙылармеецтар, аттар менән танышыу, частарға бүлеү эштәрен тамамлағас, төнгә ҡаршы юлға сыҡты.

Ғилмишәрифтең менеп һуғышҡа китеп барған атының колхоздарының өйөр айғыры Әүхәҙи икәнен Ялан ауылында бер кем дә, шул иҫәптән үҙ ҡатыны ла, белмәй ине әле.

Алғы һыҙыҡҡа яҡынайыуҙы төҫмөрләүе ауыр түгел. Алыҫта гөрһөлдәгән орудие атыштары көслөрәк ишетелә башланы. Емерелгән ауылдар, күмергә әйләнгән йорттар, һерәйеп ултырып ҡалған яңғыҙ-ярым мейес мөрйәләре

әле генә был ерҙәрҙе һуғыш уты ялмап үтеүен һөйләп тора.

– Иртәгә таң менән көслө артиллерия әҙерлеге башланасаҡ. Шунан һуң беҙҙән алда фронт тотҡан уҡсы частар, дошмандың алғы һыҙығын өҙөп, танкылар өсөн юл әҙерләйәсәк. Танкылар артынан дөйөм команда менән шул йырындан дошман өҫтөнә ташланасаҡбыҙ, – тип кистән командирҙар аңлатып сыҡты. Был 19 ноябргә ҡараған төн ине.

Ошо команданы көткән шикелле, Әүхәҙи лә төндө бик тынысһыҙ үткәрҙе. Ятып та ҡараны, һуңғы төндә үҙ эргәһендәге бер соҡор төбөнә ултырып төнәп алырға маташҡан Ғилмишәрифте мороно менән төртөп уятты ла уға оҙаҡ ҡына моңайып ҡарап торҙо. Ғилмишәриф өшөгән ҡулдарын уның ялы төбөнә тығып йылытты, муйынынан һыйпаны.

Таң һарыһы беленгәс тә, артиллериянан атыу башланды: бөтә донъя ҡупты, ер ҡалтыранды. Сәғәттән ашыу барған атыш ҡапыл ғына туҡтап ҡалды. Ракета һауаға сөйөлөү менән, таңды яңғыратып, йәйәүлеләрҙең «ура!» һөрәне яңғыраны. Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, геүләгән танкылар тауышы ишетелде. «Былар инде йәйәүле ғәскәр дошман һыҙығын йырған араға ынтылды», – тип самаланы Ғилмишәриф. Эскадрон командирының «по коням!» тигән һөрән һалыуын көтөп алыу Ғилмишәрифкә мәңгелек булып тойолдо. Бына, ниһайәт, ҡөҙрәтле команда яңғыраны.

Эскадрон һөҙәк ярға күтәрелде лә бер нисә секундҡа туҡтап ҡалды. Янған танкыларын, емерелгән автомашиналарын, тәгәрмәстәре менән өҫкә ауған мотоциклдарын, ҡыйратылған пушка-миномёттарын ҡалдырып, дошман фронт буйлап сигенә. Уларҙы борсаҡ һымаҡ һибелгән беҙҙең пехота ҡыҫырыҡлай. Бына һөжүм итеүсе танкылар колоннаһы барып инде лә, ҡасып барған дошманды тапап, иҙеп үтә башланы.

Эскадронда фарман яңғыраны: «Шашки к бою! Галопом за мной в атаку, ма-а-рш!» Теҙелеп торған йөҙәрләгән һыбайлы хәрәкәткә килде. Кавалеристар теҙгендәрен ат

ихтыярына биреп, шенкелдәрен ҡыҫты, турайған кәүҙәләрен алға иңкәйтте. Зыңлап тартылған ян керешенән осҡан ҡауырһынлы уҡ кеүек, атлылар алға, ҡасҡан дошман өҫтөнә ябырылды. Алда осраған ваҡ-төйәк соҡорҙар, емерелеп ятҡан тимерсыбыҡ кәртәләр аша һикереп, Әүхәҙи лә үҙ ауылдашын алға, дошман өҫтөнә алып сапты. Туң ерҙә сыр-сыу килеп кешнәшеп сапҡан йөҙәрләгән аттарҙың тояҡ тауышы, ҡылыстарын уңлы-һуллы болғап алға ынтылған кавалеристарҙың берҙәм көслө «ура!» һөрәне ҡасып барған дошман йөрәгенә ҡурҡыныс һалды. Артына әйләнеп ҡарай-ҡарай ҡасып барған фашист пулянан, мина һәм снаряд ярсығынан үлергә риза, ләкин үткер ҡылыстан башы ҡыйылып, ергә тәгәрәүенән ҡото оса. Был имәнес үлем уларҙың теләһә ниндәй батырын да тетрәтә. Шуның өсөн дә улар бик берҙәм ҡаса. Ҡайһы берәүҙәре башын ҡылыстан һаҡлау өсөн, винтовкаларын, автоматтарын баш осона арҡыры ҡуйған.

Әүхәҙи бөтә эскадрондың алдына килеп сыҡты. Бына Ғилмишәрифтең ҡылысынан ялтанған фашист аттың һул яғына сыҡты ла, төрлө яҡҡа тайпыла-тайпыла юрғалап, йүгереп ҡотолорға уйланы. Ә Ғилмишәриф уны сабыу урынына ҡылысының осо менән үңәсенән сәнсеп үтте. Фашист бер аҙ сайҡалып торҙо ла, бысылған ағас һымаҡ, ергә ауҙы. Әүхәҙи Ғилмишәрифте икенсе немец яғына алып сапты – ат та эште төшөндө, күрәһең. Шул саҡ эскадрон командирының бик етди командаһы яңғыраны:

– Дошман кавалерияһы флангынан атакалай!

Дошманды эҙәрләп алға ынтылған кавалеристар сафына засадала ултырған румын кавалерия часы килтереп бәрҙе. Хәҙер эскадрон аттары һулға, бейек йәйпәк һыртлы, гел генә ерән аттарға атланып, көтмәгәндә һөжүм башлаған румын атлыларына ҡаршы китте. Муйынын һуҙып йән-фарман сапҡан Әүхәҙи ауыҙын асып иң алда сабып килгән дошман айғырына ташланды. Өҫтөндә румын офицеры ултырған айғырҙың муйынынан тештәре менән әләктереп алды ла үҙенән байтаҡ ауырыраҡ та, бейегерәк тә булған атты ергә ауҙарҙы. Йығылып

төшкән румын офицерының пуляһы Ғилмишәрифтең һул аяғын яндырып үтте, әммә ул һелтәп өлгөрҙө – румындың башы ергә тәгәрәне.

Ғилмишәрифтең итек ҡунысы йылы ҡан менән тулды. Теҙгендең, ауыҙлыҡтың бушағанын һиҙеп, Әүхәҙи йөрөшөн әкренәйтте лә ергә шылып төшкән хужаһының башы осона туҡтаны. Бер ни ҙә аңламаған ат ерҙә ятҡан хужаһын мороно менән төрткөләне.

Ғилмишәриф сорлап аҡҡан ҡанын индивидуаль пакетындағы жгут менән бәйләп туҡтатты, яралы аяғын өҫкә күтәреп, ергә салҡан ятты. Күп тә үтмәй, санэскадрон кешеләре уны арбаға һалып, ялан госпиталенә оҙатты. Әүхәҙи, повозка артынан үҙен ҡамап тоторға маташҡан кешеләрҙән ҡасып, урманға инеп юғалды. Ғилмишәрифтең иптәштәре яҡын-тирәләге урманлыҡ, соҡор үҙәктәрҙе байҡап сыҡтылар ҙа, төңөлөп, эскадронға кире ҡайттылар.

Әүхәҙи бер нисә көн урмандан хужаһын эҙләп йөрөгәндән һуң, үҙҙәренең эскадронына килеп сыҡты. Хужаһынан башҡа бер кемгә лә баш бирмәйәсәген белгән кешеләр айғырҙы хужалыҡ взводына килтереп тапшырҙылар. Ул туҡмалһа туҡмалды, бында ла арҡаһына бер кемде лә атландырманы. Тик бер генә кеше, иллене ҡыуып барған элекке колхоз конюхы Безбородов ҡына тел асҡысы таба алды арғымаҡҡа. Тик ул ғына муйынына ҡамыт һалды, уны егеп эскадронға боеприпас, аҙыҡ-түлек ташырға кереште. Шулай бер-береһенә өйрәнеп кенә барғанда, Әүхәҙиҙең янбашына снаряд ярсығы тейеп, тегене ветлазаретҡа оҙаттылар.

Һуғышта ҡаты яраланып ветлазаретҡа эләккән аттарҙы мөмкинлек булғанда халыҡ хужалығына тапшырыу тәртибе бар, инде бөтөнләй өмөтһөҙ булһа, «расход»ҡа ебәрәләр ҙә итен кухняға тапшыралар. Атлы ғәскәрҙә «йылҡы ите харам» тип йөҙөн сирып, танауын ситкә борған кеше юҡ, кавалеристарҙың барыһы ла ат итенең ҡәҙерен яҡшы белә. Иллә бер генә кавалерист та, астан үлһә үлә, үҙе атланып йөрөгән атының итенә тотонмай.

## XI

Ғилмишәрифтең яраһы ауыр ғына булып сыҡты. Медсанэскадронда тәүге ярҙам күрһәттеләр ҙә тылға оҙаттылар. Башта һул аяғының тубыҡтан өҫ яғына гипс һалдылар. Бер нисә аҙна үтеүгә, гипс аҫты тәҡәт бирмәй ҡысыта башлағас, йоҡоһоҙлоҡтан һәм ҡысыныуҙан үлер сиккә еткән Ғилмишәриф ҡултыҡ таяғының осо менән гипсты төйгөләргә кереште. Хәрби табип асыуланып алды ла, гипсты аҡтарып, мыжғып торған бөжәктәрҙән таҙартты. Яңынан гипс һалдылар. Ошонан һуң ғына әҙәм рәтле ашай, йоҡлай башланы Ғилмишәриф. Ләкин йоҡоһо бик самалы ғына булды. Егермеләп кеше ятҡан, стеналарына камфара, тағы әллә ниндәй дарыу һәм серегән еҫ тә һеңеп бөткән госпиталь бүлмәһендә тыныс йоҡо буламы? Кешеләрҙең һыҙланып ыңғырашыуы, төштәрендә һуғыш «мөғжизәләрен» күреп ҡысҡырып уяныуҙары бер кемгә лә вайымһыҙ йоҡлап ятырға ирек бирмәй.

Әүхәҙи хәтәр яҙмыштың икеһенән дә имен-аман ҡотолдо. Быға, беренсенән, һәр кеше һоҡланырлыҡ буйыҡиәфәте ярҙам итте, «расход»ҡа ебәрергә командирҙың да ҡулы барманы. Икенсенән, Сталинград янындағы һуғыштарҙан һуң, уларҙың атлы часы май айына тиклем оборонала торҙо. Әүхәҙиҙе ветлазаретҡа ҡуйып дауаларға һәм аҙағына тиклем һауыҡтырырға булдылар. Янбаш һөйәге ныҡ ҡына онталған булыуына ҡарамаҫтан, ҡорһаҡ аҫтынан аҫылынған көйө дауаланылар. Икенсе ай тигәндә ат, әкренләп һылтыҡлай-һылтыҡлай, үҙенең бер нисә сантиметрға ҡыҫҡарып ҡалған аяғына баҫты. Яҙ ҡояшының үткер нурҙары һарай тәҙрәһендә уйнай башлағас, Әүхәҙиҙең йөрәге тыныслығын юғалтты. Ул тышҡа, ирекә ашҡынды, майҙансыҡта кордаға бәйләп йөрөтөлгән үҙ ҡәрҙәштәренә сәләм биреп, сыңғыратып кешнәп тә алғыланы.

Ғилмишәриф иһә төндәр буйы Әүхәҙи менән һаташып сыҡты. Йә атына атланып, баш ҡоҫа башлаған арыш баҫыуына ыңғайлаған өйөрҙәрен ҡайырҙы, йә ҡулына тотҡан ҡылысын ҡояшта ялтлатып һелтәй-һелтәй, ай-

барланып, дошман өҫтөнә ябырылды. Башына ниндәй генә төш инмәһен, һәр ҡасан үҙен Әүхәҙи өҫтөндә күрҙе, унан башҡа күҙ алдына килтерә алманы. Өндә иһә иптәштәре эргәһенә, фронтҡа ашҡынды.

Таяҡтарын ташлап, үҙ аяҡтарына баҫҡас, уны комиссиянан үткәрҙеләр. Төрлөсә тикшереп ҡарағандан һуң, комиссия «рядовой Яуымбаев Ғилмишәриф һауыға башлаусылар батальонына оҙатылырға тейеш» тигән һығымтаға килде. Ғилмишәриф улар ҡушҡан бөтә нәмәне лә эшләп күрһәтте, тик яралы аяғын кәрәгенсә бөгөп сүкәйеп ултыра ғына алманы. Бөгөлмәгән ағас кеүек төҙ аяғын алға этәреп, уң аяғына сүкәйҙе.

Госпиталь начальнигы ҡушылған күнекмәләрҙе тырышып башҡарған Ғилмишәрифтең арҡаһынан һөйөп:

– Бик сыҙамлы, беше кавалерист булып сыҡтың! Молодец! – тип, комиссияның башҡа ағзаларына ҡарап алды. Улары ла госпиталь начальнигының һүҙен ҡеүәтләгәс: – Бер нисә көндән документтарығыҙҙы алырһығыҙ ҙа, в батальон выздоравливающих в добрый час! – тип һүҙен тамамланы.

– Һин нимә, иптәш Яуымбаев, бик күңелһеҙ? Әллә үҙеңдең һауығыуыңа риза түгелһеңме?

– Иптәш военврач, мин яңынан үҙ часыма, кавалерия полкына эләгергә теләйем.

– Шулаймы? – тине табип көлөмһөрәп. – Барығыҙҙы ла үҙегеҙ теләгән часҡа ебәреп ятырға бында генераль штаб түгел. Кемде ҡайҙа ебәрергә ҡушылған – шунда ғына оҙатам! Һеҙ бөтә Рәсәй буйлап үҙ часығыҙҙы эҙләп йөрөй башлаһағыҙ, ни килеп сығыр? Һеҙҙе тиҙерәк фронтҡа оҙатырға кәрәк. Асылда бөтә частар ҙа бер үк. Шул уҡ совет кешеләре, шул уҡ һуғышсылар! – тип, һүҙ бөткәнгә хисаплап, китә лә башланы.

Ғилмишәриф шул уҡ төндә таныш сестра аша алдырған кейемен ашыҡ-бошоҡ кейҙе лә, ике простыняны ялғап, икенсе этаждан баҡсаға һикерҙе. Апрель айының таңына һоҡланып баҡсала бер аҙ хәл йыйғас, рәшәткә аша төшөп, Көнбайышҡа ҡарап юл тотто. Ул фронтҡа ҡасты. Бындай хәлдәр бик йыш булмаһа ла, осраштырып

торғас, икенсе көнөнә тауыш ҡуптарыусы артыҡ күренмәне. Тик госпиталь начальнигы ғына, яуап биреүҙән ҡурҡып, үҙ госпитале буйынса приказ сығарып элде: «Рядового Яуымбаева Гилмишарифа, долженствующего быть отправленным в батальон выздоравливающих, с 3 апреля 1943 года полагать дезертирующим из эвакогоспиталя нр. 1447 и снять из всех видов довольствия». Госпиталь буйынса смерш вәкилен саҡырып, ҡулына үҙ приказының күсермәһен тотторҙо. «Рядовой Яуымбаев Гилмишариф дезертировал из эвакогоспиталя» тигән яҙыу илдең төрлө мөйөштәрендә урынлашҡан бөтә ғәскәрҙәр штабын урап сыҡты, ләкин кавалерист һыуға батҡан шикелле юғалды, табылманы.

Өс аҙнанан һуң төрлө ыҙалар сигеп, әллә нисә төрлө кордондар аша үтеп, үҙенең кавалерия полкын эҙләп йонсоуҙан үлер сиккә еткән Ғилмишәриф тураһында икенсе приказ сыҡты. «Рядового Яуымбаева Гилмишарифа полагать с 27 апреля 1943 г. прибывшим в часть по излечении после ранения из госпиталя, поставить на все виды довольствия и откомандировать в распоряжение командира первого эскадрона». Бер нисә аҙнанан һуң сафҡа теҙелгән атлы полк алдында Әүхәҙиенә атланған Ғилмишәрифкә «...ҡыйыу эш итеүе менән бөтә эскадронды үҙ артынан әйҙәгәне һәм ошо бойҙа ҙур батырлыҡ күрһәтеп, ике фашисты дөмөктөргәне өсөн» Ҡыҙыл Йондоҙ ордены тапшырҙылар.

Ошо хәлдәрҙән һуң кавалерия полкы июль аҙаҡтарына тиклем Луганск ҡалаһынан төньяҡтараҡ оборона тотто ла, өҫтәлмә көс, ат һәм боеприпастар менән тулыландырылып, Көнбайышҡа ҡарап юл алды.

Ғилмишәриф менән Әүхәҙи 1943 йылдың сентябрь айында – Днепр, бер аҙҙан Буг йылғаһын кистеләр. 1945 йылда Польшаның Калиш ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа Әүхәҙиҙең муйынын дошман пуляһы тишеп үтте. Ғилмишәриф Әүхәҙиен күсмә ветлазаретҡа тапшырып, атһыҙ ҡалған кавалеристарҙан төҙөлгән йәйәүле эскадрон составында Көнбайышҡа юлын йәйәү дауам итте. Ул үҙ атынан күҙ яҙманы, хәлен һораша-һораша йөрөнө. Яраһы

тартылып, уңала башлағас та, полк ветлазарет начальнигының ай-вайына ҡуймай, Әүхәҙиҙе эскадронға алып ҡайтты. Ялға туҡтаған саҡтарҙа ҡасып киткән фашист бюргерҙарының усадьбаларында атын яҡшылап тәрбиәләргә тырышты. Шулай ине лә бит, фашист минаһының ярсығы Ғилмишәрифте йәнә эҙләп тапты. Был юлы ярсыҡ уң аяғының сирағын ватып киткәйне. Үҙенең, бигерәк тә медицина эскадроны командирының үтенесен хисапҡа алып, уны тылға оҙатмай, хәрәкәт итеүсе армияның ялан госпиталендә генә ҡалдырҙылар. Инде түшенә икенсе Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм ике «Батырлыҡ өсөн» миҙалы таҡҡан коммунист Ғилмишәриф атлы полктың танылған боецына әйләнде. Бер нисә тиҫтә километрҙа фронттың алғы һыҙығына эйәрә килгән госпиталдә уны бер ваҡытта ла иғтибарһыҙ ҡалдырманылар. Ҡыҙыл армия ойошторолоуының 27 йыллығына арнап үткәрелгән тантаналы йыйылышта Ғилмишәрифкә полк командованиеһының йылы ҡотлау хаты һәм күстәнәс килде. Иптәштәренең иғтибары яраһының тиҙ төҙәлеүенә ярҙам итте, күрәһең, апрель баштарында таяҡһыҙ йөрөй башланы. Йөрөй башланы ғына түгел, үҙ Әүхәҙиенә атланған Ғилмишәриф апрелдең аҙағында Берлиндан көньяҡ-көнбайышта ятҡан Бранденбург ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнашты. Был ике ауылдаш өсөн һуңғы алыш булды. Еңеү көнөн тантаналы үткәреп, һыбайлылар кубанкаларын ҡылыстары осона элеп һауаға сөйҙөләр ҙә бөтөнләйе менән ялға туҡтанылар.

Америка ғәскәрҙәрен беҙҙекеләрҙән бүлеп торған Эльба йылғаһының һул ярында атлы полк көҙгә саҡлы Совет командованиеһының оккупация йомоштарын үтәп торҙо.

Һуғыш бөткән йылдың көҙөндә Ғилмишәриф «строевой хеҙмәткә яраҡһыҙ» табылып, демобилизацияға тәғәйенләнде. Илгә ҡайтыу хәбәре бер яғынан сикһеҙ ҡыуандырһа, икенсе яғынан хәсрәткә һалды: Әүхәҙиҙе ҡалдырып киткеһе килмәне уның. Ошо мәсьәлә буйынса таныштары, иптәштәре менән кәңәш итергә уйланы. Йәкшәмбе көн уңайы менән ҡыҙмаса булып алған егеттәр уның изге теләген көлкөгә күтәрҙе.

– Һин нимә, Геннадий?! (Уны эскадронда шулай атайҙар ине.) Үҙ аҡылыңдамы, әллә әҙерәк яңылыша башланыңмы?

– Лучше һин ауылыңа мотоцикл менән ҡайтып төш. Ана ҡасҡан фашистарҙың мотоциклдары өйөлөп ултыра бит.

Әүхәҙиҙе егеп йөк ташып алған Безбородов ҡарт уйға батҡан Ғилмишәриф ҡырына килеп ултырҙы ла:

– Билдәле, Авдей, – ул Әүхәҙиҙе шулай атай ине, – яҡшы ат. Һис кенә лә һүҙ тейҙерерлек түгел. Ләкин ул өйгә ҡайтып етә алмай, астан үлеп ҡаласаҡ. Балаларыңа кейем-һалым һәм бисәңә күстәнәстәр алып ҡайтһаң, яҡшы булмаҫмы? Уларҙың өҫтө-башы бик туҙғандыр бит, – тип кәңәш бирҙе.

Икенсе бер йәшерәге, эскадронда яңыраҡ ҡына хеҙмәт итә башлаған боец, килде лә:

– Һин бисәлеккә йәш немка алып ҡайт – бына, исмаһам, ауылыңды таң ҡалдырырһың! – тип һөйләнә генә башлағайны, тегене шундуҡ бөрөп алдылар.

Нисек кенә өгөтләһәләр ҙә, иптәштәре Ғилмишәрифте үҙ йүндәренә күндерә алманы. Тегене кейем-һалым да, мотоцикл да, башҡа донъя кәрәк-ярағы ла ҡыҙыҡһындырмай ине. Французлдарға ҡаршы һуғышҡан башҡорт полктары ла илдәренә аттарына атланып ҡайтып ингәндәр түгелме? Мин нисек өс йыл буйы, үҙем менән бергә һуғыш уты аша сығып, тере ҡалған атымды ят кеше ҡулына ҡалдырып ҡайтып төшәйем? Ауылдаштар белеп ҡалһа, миңә ни әйтер? Юҡ, уны бында фашист илендә ҡалдырып китә алмайым. «Иртәгә үк барып полк командирынан һорайым. Рөхсәт итмәһә, унһыҙ барыбер бер ҡайҙа ла китмәйем» тигән ҡарарға килде.

## XII

Икенсе көнөнә иртән үк тороп, өҫтө-башты йүнәтеп, штабҡа, полк командирына китте. Яуымбаевты ишетеп кенә түгел, күреп тә яҡшы белгән командир яҡшы ҡабул

итте. Ҙур тулҡынланыу менән йомошон һөйләп биргән Ғилмишәрифте үҙ эргәһенә ултыртты:

– Тыңла, иптәш Яуымбаев. Бына мин ҡыҙыл кавалерияла егерме биш йыл хеҙмәт иттем. Был осорҙа төрлө мөғжизәләрҙе күрергә тура килде. Ҡыҙылармеецтарҙың буйҙаҡ килеп, бисә алып ҡайтҡандарын да күргән бар, демобилизацияланған егеттәрҙең йәшереп, үҙҙәре менән шашка алып ҡайтып киткәндәрен беләм, әммә әллә ҡайҙа, йәһәннәм аҫтындағы ятҡан иленә, менеп йөрөгән атын биреп ҡайтарыуҙы һораған ҡыҙылармеецты үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрәм.

Ғилмишәрифтең ҡояшта янған киң яңаҡтарында көрән таптар күренә башлағас, полковник түҙмәне, аяҡ үрә баҫты ла кабинетында үрле-түрле йөрөй башланы. Шунан Ғилмишәриф алдына баҫты ла яңынан өгөткә кереште.

– Понимаешь, Яуымбаев? Ат – кавалеристың боевой ҡоралы, тип яҙылған уставта. Һин шуны беләһеңдер бит?

– Беләм, бик яҡшы беләм, иптәш полковник.

– Белгәс һуң, нишләп минең йәнемде ҡыяһың?

Яуымбаев та, үҙ урынынан тороп, полковник алдына баҫты.

– Иптәш полковник! Минең менән өс йыл бергә һуғышып, ике тапҡыр яраланған ат – ул минең ауылдашым бит. Уны яҡты донъяға күҙен асҡан көнөнән бирле беләм. Мин ауылда ла уға атланып йөрөнөм. Шул үҙ ҡулым менән тәрбиәләп, үҙем өйрәтеп менгән атымды мин бында сит кеше ҡулына ни йөрәгем менән ҡалдырып китәйем? Ул бында барыбер һәләк буласаҡ, сөнки ул минән башҡа бер кемде лә яҡын ебәрмәй. – Ғилмишәрифтең тулҡынланып һөйләүенән әҙерәк икеләнә башлаған полковник яңынан үҙ урынына барып ултырҙы.

– Да… да, – тип һуҙҙы. – Беләм, уныһын да беләм. – Полк командирының Әүхәҙиҙе белеүенә Ғилмишәриф һис тә ғәжәпләнмәне, сөнки атты йәндәй күргән командир тураһында часта төрлө легендалар йөрөй. «Беҙҙең полковниктың йөрәгендә өтөрлөк сибәр военврач ҡатынды күҙенә лә элмәй үтеп китеүе мөмкин, ләкин күңеленә оҡшаған яҡшы ат эргәһендә туҡталмай ҡалмай».

– Бына нимә, иптәш Яуымбаев. Семь бед – один ответ. Атың менән Башҡортостаныңа ҡайтып китеү яуаплылығын мин үҙ өҫтөмә алып, пожалуй, рөхсәт тә итермен. Быға һинең, полктың данлы һуғышсыһының, хаҡы бар. Ләкин үҙ сигебеҙгә еткәнсе, һине үҙ атың менән бер ниндәй тимер юл ведомствоһы ла ҡабул итмәйәсәк. Аңланыңмы?

Полковниктың яҡшы һүҙенә ҡыуанған Ғилмишәриф:

– Аңланым, иптәш полковник, бик яҡшы аңланым. Мин Башҡортостанға һыбай ҙа ҡайтып етә алам! – тине.

– Бигерәк тә бер ҡатлы ғынаһың шул һин, иптәш Яуымбаев, – тип йылмайҙы полковник. – Һәр станцияла хәрби комендант, һәр бер туҡтаған ерҙә досмотр. Барып етә алмаҫһың. Юлда тоторҙар ҙа атыңды алып ҡалырҙар, үҙеңде лә һөйрәкләп йөрөтөүҙәре мөмкин. Ә һин ат һорағас, нишләп ҡылысын да һорамайһың? Ҡылысһыҙ... ниндәй кавалерист? Ҡылысһыҙ ат өҫтөндә йөрөү – ул ялан аяҡҡа шпор тағыу менән бәрәбәр! Шәхси ҡылысыңды ла тағып ҡайт. Беҙҙең полк өсөн ул ҙур юғалтыу түгел, ә һинең өсөн үҙең хеҙмәт иткән часың тураһында бер ҡиммәтле иҫтәлек булыр.

Күңеле тулған Ғилмишәрифтең полк командирын ҡосаҡлап алғыһы килде, ләкин «рәхмәт»тән башҡа бер ни әйтә алманы.

– Рәхмәт һуңынан. Берәй сәғәттән минең янға инеп сығырһың. Ә ҡылыс тураһында ҡайғырма, яныңдағы арматурный исемлеккә яҙып бирерҙәр.

Ғилмишәрифте теп-теүәл бер сәғәттән яңынан штабҡа саҡырттылар. Ул тағы командиры алдына килеп баҫты.

Полковник:

– Беҙҙең күрше атлы дивизия ике көндән һуң, Союзға ҡайтыу өсөн, эшелондарға тейәләсәк. Тейәлеү Преемниц вокзалында 22.00 сәғәттә башлана. Һинең турала мин шул дивизияның парадный[1] полк командиры, минең коллега, подполковник Фондеранцев менән һөйләшкәнмен.

---

[1] Һәр кавалерия дивизияһында байрам тантаналарында ҡатнаша торған бер өлгөлө атлы полк була.

Һине полкка минең адъютант оҙата барыр, – тине лә өҫтәл аҫтындағы кнопкаһына баҫты. Ҡайыштарына ҡыны семәрләп эшләнгән ҡылыс элгән, өр-яңы кобуралы пистолет таҡҡан ҡалмыҡ егете лейтенант Балаев килеп инде. Полковник һөңгө кеүек турайып торған лейтенантҡа, йөҙөнә яһалма етдилек һыҙаттары өҫтәп, фарман бирҙе:

– Беҙҙең полктың геройын, иптәш Яуымбаевты, күрше дивизияның парадный полк командиры подполковник Фондеранцев йә уның урынбаҫары подполковник Довнар менән таныштыр. Эштең ниҙә икәнен улар белә. Ҡалғанын үҙҙәре һөйләшер. Теләһә ҡайҙа кереп оҙаҡлап йөрөмә, ҙур хужалыҡҡа[1] саҡыралар, тиҙҙән шунда китәбеҙ. Ә һин, ысын кавалерист, хуш! Полк байрағына тап төшөрмәй намыҫлы хеҙмәт итеүең, батыр һуғышыуың өсөн ҙур рәхмәт! Гражданкала ла тырыш, намыҫлы бул! Полкты онотма, уның менән бер ҡасан да бәйләнеште өҙмә! Бында һине юлға әҙерләү буйынса кәрәкле күрһәтмәләр бирелгән, – тине лә урынынан торҙо. Үҙенән ашараҡ ҡарап торған ҡыҙылармеец эргәһенә килеп, өс тапҡыр битенән үбеп алды: «Улым! Хуш бул, һин Ватан алдындағы үҙ бурысыңды тулыһынса үтәнең, выжданың таҙа, тағы ла бер рәхмәт!» – тип, Ғилмишәрифтең ҡулын ҡыҫып һелкә-һелкә ишеккә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Быны көтмәгән һалдаттың күңеле йомшарҙы, күҙенә йәш килде.

Күрше полкка барып ҡасан, кемдәр менән ҡайтып китергә тейешлекте һәм башҡа шарттарҙы белгәндән һуң, Ғилмишәриф юлға әҙерләнә башланы. Яуымбаевтың үҙ аты менән илгә ҡайтып китеүен эскадрон белеп тә өлгөргән. Һәр кем кәңәше менән булһа ла ярҙам итергә ашыҡты. Уны өр-яңынан, энәнән-ептән кейендерҙеләр. Башына – яңы кубанка, аяғына шығырлап торған итек бирҙеләр. Даны бөтә дивизияға таралған тегенсе старшина Гершкович үҙе үлсәүҙәрен алып, бер көн эсендә Ғилмишәрифкә өр-яңы мундир текте. Яурынына атлылар

---

[1] Үҙенән юғары соединение тигәнде аңлата.

кейә торған оҙон шинель урынына түш һәм салғыйҙары ҡара ҡаракүл менән ҡайылған бакешаһын һалды. Обоз-әйбер складынан көндәлеккә кейеп йөрөү өсөн бер пар өр-яңы обмундирование бирелде. Үҙен кейендереп, күҙҙән үткәргәс, атына тотондолар. Һыртына нағышлап ҡыҙыл йондоҙ төшөрөлгән ҡара буҫтау серге[1] яптылар, өҫтөнә арчактары[2] көмөш ялатылған, үңдек һәм капталдары өр-яңы булған казак эйәре һалдылар, нуҡта, йүгәнен, хатта унын ат ауыҙына кейҙерә торған мундштугын да алмаштырҙылар. Эскадрон ветеринары аттың яраларын ҡарап, ветаптека әҙерләп бирҙе. Дағаларын алмаштырып, уны ғәҙәттәге даға сөйө менән түгел, ә шөрөп менән нығыттылар.

Ғилмишәрифте атҡа атланған көйө күргеләре килде. Уны фотоға төшөрҙөләр. Китәһе көнө йөҙөнә «С этой боевой шашкой отважный кавалерист Яуымбаев с боями прошёл от Сталинграда до Бранденбурга» тип яҙылған, суҡлы ебәк эфеслы ялтлап торған өр-яңы ҡылыс тапшырҙылар.

Эскадрон командиры ҡыҫҡа ғына телмәр һөйләп, полк командованиеһының иҫтәлекле яҙыуын уҡығас, Ғилмишәрифтең тамам күңеле тулды, йәнә күҙенә йәш эркелде.

Ғилмишәриф ҡылысты ҡабул итеп алғас, башын эйеп, өс тапҡыр үпте лә дерелдәгән бармаҡтары менән ҡылысын биленә таҡты. Эскадрон командиры:

– Геннадий, бәлки, бер нисә һүҙ әйтерһең? – тип бышылданы. Башҡорт егетенең һүҙ әйтерлек хәле ҡалмағайны, өҙәңгеһендә баҫа биреп, тын алды ла:

– Барыһы өсөн дә рәхмәт һеҙгә, иптәштәр! – тип ҡысҡырҙы. Унын тыныс, әммә ысын йөрәгенән сыҡҡан тауышы иптәштәренең көслө «ура!» оранына барып тоташты. Аҙаҡтан инде эскадрон командиры Ғилмишәрифкә полк командованиеһының күстәнәсен тапшырҙы.

---

[1] *Серге* – ат япмаһы.
[2] *Арчак* – атлының эйәргә тотоноп менә торған алғы һәм артҡы алюмин ҡашағаһы.

«Вольно, разойдись!» командаһы яңғыраны. Кавалеристар быны уратып алды.

– Ну, малай, килештерәһең! Ат өҫтөндә ултырыуыңды ҡара!

– Генерал, да и только!

Кисен Ғилмишәрифтең башына уй төштө: «Туҡта әле, күктән төшкән шикелле, бөтөнләй хәбәр-хәтерһеҙ ҡайтып төшөү килешмәҫ», – тип, Германия иленән ҡатыны Райханаға һуңғы хатын яҙып һалырға булды. «Йәш күкрәгенән урғылып, ҡайнарланып-парланып сыҡҡан ялҡынлы сәләмдәрен» ҡатыны, бала-сағаһына, туған-тыумасаһына бәйнә-бәйнә теҙеп сыҡты ла, аҙағына түбәндәге юлдарҙы өҫтәне: «Ҡәҙерле йәмәғәтем Райхана! Мин ҡайта тип артыҡ өҙгөләнмә. Бары менән байрам. Тормошоғоҙҙо күрмәһәм дә, ни рәүешле икәнен аңлап торам. Һиңә шул да мәғлүм булһын: ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым. Өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн минең менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм. Хәҙергә уның кем икәнлеген яҙмайым, күҙмә-күҙ осрашып күргәс, танышырһығыҙ. Һеҙҙе бер күреүгә зар-интизар булып, һағынып ҡәләм тибрәтеүсе ирең һәм балалар атаһы Ғилмишәриф».

## XIII

Вагонға килеп ингәс тә, Ғилмишәрифтең дә, атының да өр-яңы өҫ-башына, ялтырап торған һары күндән эйәрөпсөнөнә ҡарап, яңы юлдаштары ғәжәпләнеп ҡуйҙы. Көнләшеү, ғәжәпләнеү тойғоһо һирпелгән ҡараштан уңайһыҙланыпмы, Ғилмишәриф ситкә боролдо: ят кавалеристарҙың береһе, күрәһең, абруйлыраҡы инде, дуэлгә сығырға йәтешләнгән шикелле, ҡылысының эфесына тотондо ла:

– Эй, яҡташ, нимә унда һыуыр һымаҡ яҡтыға сығырға ҡурҡып ултыраһың? Кил бында, тәмәкең бар икән, ҡунаҡ булырһың, – тип һөрәнләне.

Ғилмишәриф кеҫәһенән еҫе аңҡып торған еңел тәмәке сығарҙы ла тегеләр янына барып баҫты. Ят юлдаштары

шунда уҡ ҡағыҙ йыртып, ҡулдарын уға һуҙҙы, хуш еҫле тәмәке һура-һура, бының кемлеген, ҡайһы полкта, нисек хеҙмәт итеүен төпсөнөргә тотондолар. Ғилмишәриф әллә ни асылып барманы. Өҫтән-мөҫтән генә таныштырҙы үҙе менән. Әммә күкрәгендәге ялтлап ҡалған орден, миҙалдарын күргәс, тегеләрҙең мөнәсәбәте бермә-бер үҙгәрҙе.

Преемниццан ҡуҙғалып киткәндең егерменсе көнөндә атлы ғәскәр тейәлгән эшелон Ғилмишәрифте үҙ аты менән Ҡарталы станцияһында ҡалдырып, Көнсығышҡа елде. Ҡола ялан уртаһында ултырған Ҡарталының тиреҫтән өргән һалҡын әсе еле йылы теплушкаға өйрәнеп өлгөргән ике юлсыны өтөп алды. Ғилмишәриф станция начальнигына инеп документтарын күрһәтергә, атына ла, үҙенә лә әүҡәт-фураж таптырырға, берәр йылы урын булмаҫмы, тип әйтергә уйлағайны. Ләкин асыҡ платформа тура килеүенән, юлда аты менән ҡуша туңып ҡуйыуынан ҡурҡып, артабан һыбай сығырға булды. Ауылдарға һуғылаһуғыла, өсөнсө көнөндә Ялан ауылынан илле саҡрымда ятҡан үҙ станцияһына килеп етте.

Ғилмишәрифтең Германиянан «ауылға бер үҙем генә ҡайтмайым, өс йыл һуғыш утын бергә йотҡан, фронттың йәмғе әсе-сөсөһөн үҙем менән ҡуша татыған йән дуҫым менән ҡайтып төшәм», тип яҙған һуңғы хаты йөҙ өйлө Ялан ауылының аҫтын-өҫкә килтерҙе. Иң башта ошо һүҙҙәре өс йыл буйы уны тилмереп көтөп ултырған Райханаһының йөрәген телгеләне. Күҙ йәштәрен тамыҙатамыҙа, хаттың шул урынын ҡат-ҡат уҡыны. Иҫ белә башлаған өлкән ҡыҙы Миңленур: «Әсәй, нишләп шул тиклем илайһың, атайым ҡайтам тип яҙған да инде», – тип тынысландырырға тырышты. Ә әсәһе уның һайын быуылып иланы.

Тыныслана төшкәс, кәштәлә ятҡан көҙгө киҫәген алып, оҙаҡ ҡына үҙ-үҙенә текләп ултырҙы.

Ғилмишәрифтең абайламайыраҡ яҙған һүҙҙәре хат эсендә генә ятып ҡалманы, күрше-күлән ҡолағына ла барып етте. Ялан ауылының бөтә өйҙәрен урап сыҡты.

## XIV

Ошо мәлдә Ғилмишәриф, ауылға ла еттем тип, үҙен һәм атын һуңғы тапҡыр тәртипкә килтереп, Ҡыҙыл йылғаһына терәлеп тигәндәй ятҡан текә ҡабаҡ өҫтөндә һыбай тора ине. Ул, тыуған ауылы тирәһендәге таныш яландарға текәлгән армыт-армыт булып төньяҡтан көнсығышҡа һуҙылған күк Ирәндек һырттарын, Йәнгүҙәй, Күсем таштарын күргәс, һуғыш йылдарында үҙ юлдашы булған берҙән-бер көйөн һуҙып ебәрҙе.

Алыҫтарҙан күгәреп, ай, күренгән
Болот микән, әллә тау микән?
Минең генә ғәзиз туғандарым
Ошо донъяларҙа бар микән?

Ирәндектең урта һыртынан һулдараҡ Биләнтауҙы күргәс, Заһретдинды иҫенә төшөрөп, кубанкаһын систе, оҙаҡ ҡына шул түбәгә ҡарап торҙо. «Ошо түбәнең итәгендә өйкөм-өйкөм сауҡалыҡтар араһында ултырған таҡта өйөндә алтын ҡабул итә торғайны бит Заһретдин ағай. Хәҙер алтыны ла, үҙе лә юҡ. Бомба төшмәһә лә, снаряд, миналар шартламаһа ла, һуғыш шауҡымы бында ла килеп еткән, уның афәт еле минең тыуған яҡты ла ялмап үткән икән. Тик бына бер Салғыя ташы ғына киткәндә нисек ҡалһа, шулай ултыра. Хатта ул да тәпәшәйеп, ергә һеңгән шикелле».

Ҡапыл текә ҡабаҡ аҫтында тигеҙ табаға һибелгән борсаҡ шикелле йөрөп ятҡан аттар күренде. Арыу-талыуҙан тик кенә торған Әүхәҙи бөтә кәүҙәһе менән һелкенде лә, башын күтәреп, улар яғына боролдо. Шунан морон тиштәрен тырпайтып, сыңратып кешнәп ебәрҙе. Айғырҙың көслө тауышы текә ҡабаҡ ташына бәрелде лә әллә ҡайҙарға барып һүнде. Сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡан ҡәрҙәшенең сәләмен алып, бейәләр ҙә нескә генә кешнәп яуап бирҙе.

Хәҙер айғырҙы тотоп тороуы ҡыйын, Ғилмишәриф Әүхәҙиҙе Ҡыҙыл йылғаһы буйына борҙо. Эсһен әле шуның һыуын туйғансы, һағынғандыр. «Әйҙә, Днепр, Висла һәм Одерҙарҙа ла һуғарҙым мин һине, үҙебеҙҙең

Ҡыҙылдыҡынан да татлыраҡ, шифалыраҡ ниндәй һыу булһын?» – тип һөйләнде.

Ана, Ҡыҙылдың арғы ситендә бер ҡыҙ бала тулы биҙрәләрен ергә ҡуйған да, ике күҙен Ғилмишәриф яғына текләп, ҡатып ҡалған. Ҡарап торҙо-торҙо ла ике ҡулын ике янбашына һуҡты:

– Атаҡ, атаҡ, Ғилмишәриф ағай, һин түгелме һуң?!

Ғилмишәриф ҡыҙҙы танымаңы, шулай ҙа:

– Өҫтөнә баҫтың! – тип һөрәнләне йылға аша. Ҡыҙ көйәнтәһен ырғытты ла тыҡрыҡтан ауылға йүгерҙе. Ихатаға етер-етмәҫтән тыны бөтөп:

– Райхана еңгә, һөйөнсө! Ғилмишәриф ағайым ҡайтып килә! – тип аҡырҙы. Аш-һыу әҙерләп йөрөгән Райхана, яулығын төҙәтә-төҙәтә, еүеш ҡулын итәгенә һөртә-һөртә, йүгереп урамға сыҡты:

– Ҡайҙа? Бер үҙе генәме? Янында бисә-фәлән юҡмы?

– Ниндәй бисә? Һыбай килә ята ла!

Ул да булмай, артынан бер көтөү бала-саға эйәртеп, һылтыҡлаған атына атланып, Ғилмишәриф үҙе өй алдына килеп туҡтаны. Шул ыңғайҙан атынан һикереп төштө лә ни ҡылырға ла белмәй аптырап торған ҡатынын ҡосаҡланы:

– Райхана, илама, шатлан! Ҡайттым бит! – тип бышылданы. Шунан атаһы эргәһенә яҡын килергә баҙнат итмәй торған кинйә малайын күтәреп алды: – Үәт, минең донъя көтә торған малайым! Ҡайһылай үҫеп киткән!

Шунан бер атҡа, бер ҡылыслы кавалерисҡа ҡарап ҡатҡан ауылдаштары эргәһенә атланы. Барыһы менән дә ҡул бирешеп ихлас күрешеп сыҡты.

Ишек алдында кеше күбәйгәндән-күбәйә. Һуғышсының да хәлен һорашалар, хәтәр эйәр-өпсөн менән эйәрләнгән Әүхәҙиҙе лә тикшерәләр.

– Ҡарап-ҡарап торам да, ҡустым, менеп ҡайтҡан малың беҙҙең яҡтың йылҡыһына оҡшай түгелме? – тип һораны бер ҡарт.

– Насырйән ағай, үҙебеҙҙең өйөр айғыры Әүхәҙи ҙә баһа! Танымайһыңмы ни? Һуғыш утын бергә үтеп, бына насип булғас, шуның менән ҡуша Яланға ҡайтып төштөк.

Ғилмишәрифтең яуабын ишеткәс, кешеләр бер аҙ телһеҙ ҡалды, ышанмағандай, йәнә атты уратып ҡарарға тотондолар. Шунан йәнә һораша башланылар, ғәжәпләнеүенән телдәрен шартлаттылар:

– Ҡара һин, әйтһәң, әҙәм ышанмаç! Кире әйләнеп ҡайтҡан тиһең, ә?!

– Әй, януар, ниҙәр генә күрмәне инде быны башы? Ауылды танымы икән? Онотманымы икән?

– Ана, ҡара-ҡара, нисәмә еренән ранен булған меçкенең.

– О, Ғилмишәриф ағайҙың ҡылысын ҡара!

Ғилмишәриф, хәл-әхүәл белешеп тын алғандай иткәс, ауылдаштарын өйөнә саҡырҙы.

– Әйҙә, ағай-эне, сәйгә рәхим итегеҙ. Артыҡ һый-хөрмәт юҡ та, барынса булыр, – тине, үҙе атын һарайға индереп бәйләне. Райхана ла ян-яғына ҡарап алды ла:

– Эйе, эйе, шулай булмай ни! Әйҙәгеҙ, барығыҙ ҙа өйгә рәхим итегеҙ. Сәйем әҙер, – тип, килгәндәрҙе өйөнә саҡырҙы. Шулай ҙа күстәнәс көткән бала-сағанан башҡаһы, әҙәп һаҡлап, өйгә инергә ашыҡманы.

– Ярар, ярар, ҡустым, алыç ерҙән юлда арып-талып килгәнһең. Әйҙә, ана хәҙергә бала-сағаң менән бул. Иншалла, насип булһа, әле бергә булырбыҙ. Имен-һау ҡайтып, үҙеңде күргәс, беҙгә хәҙергә шуныһы ла еткән, – тине Насырйән ҡарт. Ғилмишәриф өйөнә инеп юғалғас та, ат янына йыйылған халыҡ тиҙ генә тарала һалманы: һаман көтмәгәндә килеп тыуған был мөғжизәгә шаңҡып тора бирҙе.

Өйҙә көлдөксәләге самауыры менән булашҡан Райхана улын тубығына алып ултырған иренә боролдо ла:

– Алып ҡайтып килгән йәндәй иптәшеңде әллә берәй стансыла аҙаштырып ҡалдырҙыңмы? – тип һорап ҡуйҙы. Үҙ хатаһын килеп төшкәс тә аңлап алған Ғилмишәриф ауыҙын йырып тәҙрә яғына ымланы.

– Ана бит, күрмәйһеңме ни? Һарай ситәнендә бәйле тора! Шул инде минең өс йыл буйы бергә йөрөгән йәндәй дуçым, – тине. Ошо һүҙҙе ишетеү менән, Райхана ҡуҙ һалғысын көлдөксәгә ырғытып, иренең муйынына килеп аçылынды:

– Ай, минең бәгерем! Иптәшем менән ҡайтам, тип яҙған хатыңды уҡығас, йоҡоларҙан заяғи булдым, хыялыйға әйләнә яҙҙым бит. Хатта ғәрлегемдән нишләргә лә белмәнем, – тип һөйләнә-һөйләнә ирен үбергә тотондо. Ошо мәлдә ер йөҙөндә уларҙан да бәхетле бер кем юҡ ине.

* * *

Ғилмишәриф атына атланып колхоз идараһына китте. Һуғыштан ҡайтҡан һәр ауылдашы өсөн шатланып бөтә алмаған колхоз рәйесе Ҡаһарманов, һалдат килеп ингәс тә, ҡоластарын йәйеп уға ынтылды:

– Үәт, исмаһам, һуғышсы, үәт, исмаһам, кәүәлерис! – Рәйес һалдаттың затлы кейеменә ҡарап, устарын шапылдатып бер-береһенә һуғып алды ла телен шартлата бирҙе. – Был рәүешле ҡайтып төшөүеңде һис тә көтмәгәйнек. Ҡара һин мынауы шпорҙарын, ҡылысын!.. Ҡайһылай үҙеңә килешеп тора бит әле! – Ҡаһарманов ҡарт Ғилмишәрифтең ҡылысын самалап ҡараны. – Үҙе йәтеш кенә күренһә лә, һәлмәк кенә икән!

– Ҡаһарманов ағай, ҡылыс ҡарамаҡҡа еңел тойолһа ла, һелтәү көсө ҡырҡ һигеҙ килоға, йәғни өс ботҡа бәрәбәр. Самалап ҡара, – тип көлөмһөрәне Ғилмишәриф.

– Әй, ҡустым, ҡустым, ҡайҙан килгән, ти, ул беҙгә ундай көс-ғәйрәт? Бөтә булған ҡарыуҙы бер ошо «Ҡыҙыл Ялан» колхозына һалдыҡ инде. Бигерәк тә ошо дүрт йыл ҡаҡшатты, – тип, ул үҙ урынына ултырҙы ла ҡаты көрһөнөп ҡуйҙы. Бер аҙ ултыра торғас, етди һүҙгә күсте:

– Ҡустым, был ҡоралыңды кәрәк урынға тапшырып, бер аҙ ял иткәс, колхоз эшен башларһың бит инде?

– Ҡаһарманов ағай, ҡорал бер ҡайҙа ла тапшырылмай, миңә бүләк итеп мәңгегә бирелгән. Документы бар, законный ҡағыҙ менән беркетелгән.

– Һәл-лә-лә!.. Улай ҙа була икән. Өйөмдә генә торасаҡ, тиең, ә?

– Ҡаһарманов ағай, мин армияға йәйәү алынып – колхозға бынамын тигән атҡа атланып ҡайттым…

Ҡарт рәйес һаман һүҙҙең айышына төшөнә алмай ҡаңғыра:

– Ниндәй ат? Бер ҙә төшөнә алмай һандырап ултырам әле, – тине.

Ғилмишәриф, рәйестең ҡултығынан тотоп, тәҙрә эргәһенә килтерҙе лә идара ҡоймаһында бәйле торған бурыл атҡа бармағы менән төртөп күрһәтте.

– Был ниндәй хайуан?

– Ул хайуан түгел, беҙҙең колхоздың өйөр айғыры.

– Китһәнә, ҡустым, былай ҙа ҡаңғырған башты бутама әле.

Ғилмишәриф баштан-аяҡ ат тарихын аңлатып биргәс, колхоз рәйесе урынынан тороп яңынан тәҙрәгә килде.

– Юҡ, юҡ, ҡустым, былай ярамаҫ! Сабыр ит, әллә ҡайһы тарафтарҙан килгән үҙ атыбыҙ менән күрешмәһәк, бөтөнләй хилаф булыр, – тип, ул йәһәт кенә кейенде лә ат эргәһенә сыҡты.

– Эй, януар, тыуған ауылыма, таныш өйөрөмә ҡайтып килдем тиһең инде, ә? – тип, ат менән һөйләште лә, уға мөлдөрәп ҡараған бурылдың муйынынан шапылдатып һөйҙө.

Улар яңынан идараға инде. Ҡаһарманов өҙөлөп ҡалған һүҙен дауам итте:

– Ҡустым, үҙеңә тейеш ашау-эсеүен бирербеҙ. Берәр ай ял итеп, ҡунаҡ булып алғас, колхоз эшенә сығырһың бит? – тип, рәйес ауылдашына һораулы ҡараш атты, сөнки күптән түгел ҡайтҡан бер-ике фронтовик еңел тормош эҙләп ауылды ташлап ситкә китеп барғайны.

– Ҡунаҡ ҡайғыһы юҡ, ағай. Иртәгә үк эшкә тәғәйенләгеҙ, – тип, бекешаһының төймәләрен ысҡындырып, мундир кеҫәһенә портсигарына тығылды. Рәйес уның асылып киткән түшендәге наградаларын шәйләп ҡалып, папиросын ҡабыҙа-ҡабыҙа, тағы урынынан торҙо.

– Ҡара, ҡара, ҡайһылай ҙа батыр һуғышҡанһың икән, ә? Ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, биш-алты миҙал! Әле ауылға был тиклем түш тултырып ҡайтҡан батырҙы күргән юҡ ине. Прәмә атлы маршал һымаҡ ҙурлап ҡайтар-

ғандар бит үҙеңде! Һүҙ юҡ, һүҙ юҡ. Бик ҙур афтарит менән ҡайтып төшкәнһең. Маладис!

Йүгереп сығып ауыл советы рәйесен, парторгты саҡырып индерҙе, уларҙың да артынан эйәргән кешеләргә Ғилмишәрифтең бекешаһын килеп үк асты:

– Бына, күрегеҙ «Ҡыҙыл Ялан» колхозының ҡаһарманын! Орден, миҙалдарын тотоп ҡарағыҙ! Бына, фашистарҙың башын ҡыйған уның ҡылысын күрегеҙ! – тип, шашканы ҡынынан һурып өҫтәлгә һалды. Кемдер ҡылыс йөҙөндәге яҙыуҙы уҡып ишеттергәс, бөтә кеше уңайһыҙланыуынан нишләргә белмәй уртала баҫып торған Ғилмишәрифте төрлө яҡҡа әйләндереп ҡарарға тотондо:

– Бына шулай һуғыша ул беҙҙекеләр, любой дошмандың аталарын таныта ул беҙҙең егеттәр! – тип Ҡаһарманов, һуғыштан үҙе йөрөп ҡайтҡан шикелле, маҡтанып иҙән буйлап йөрөп алды.

Кәнсәгә йәнә халыҡ йыйылып китте. Йәнә һорашырға тотондолар. Шунан уйынлы-ысынлы ҡиәфәттә Ғилмишәрифкә эш һайлай башланылар. Яңы ғына армиянан ҡайтҡан Бикбирҙин фамилиялы йәш егет, колхоз парторгы, шундай тәҡдим индерҙе:

– Өс көндән Октябрь байрамын үткәрәсәкбеҙ. Ғилмишәриф ағайҙы үҙе алып ҡайтҡан атына атландырып ауыл халҡы алдында бер нисә һүҙ әйтеүен һорарға кәрәк. Етмәһә, коммунист та булып ҡайтҡан. Эш мәсьәләһендә шуны әйтәм: беҙҙең КТФ мөдире Малыбаев ағай үлеп ҡалды. Бына беҙгә әҙер коневод. Унан да шәберәген эҙләп тораһы ла юҡ, – тип йәнәшендә ултырған Ғилмишәрифкә ымланы.

## XV

Әүхәҙи үҙ хужаһы менән Октябрь байрамы демонстрацияһына сыға алманы. Һуғышта яралар алып, оҙаҡ юл үтеп йонсоған мал өс аяғына ғына баҫып тора башланы. Арт аяғына ныҡ көс төшөү сәбәпле, өс аяғында тороу ҙа бер ғазапҡа әйләнде, күрәһең. Тора-бара ат Ғилмишә-

рифте иҙәндә ятҡан көйөнсә генә ҡаршылай башланы. Йәшкелт күҙҙәрендәге нур көндән-көн һүнә барҙы. Ахырҙа, хайуанды ике яҫы ҡайыш менән түшәмгә тарттырып бәйләп ҡуйҙылар. Әүхәҙи барыбер ҙә мандый алманы, уның һаулығы көндән-көн насарайҙы. Ҡар төшөп, ҡыш һыуығы һарайға бәреп инә башлағас, хәле бөтөнләй мөшкөлләнде. Февраль аҙаҡтарына ул бөтөнләй ашауҙан да яҙҙы. Райондан килгән ветеринария табибы ауырлыҡ менән генә тын алып торған арыҡ атты төрлө яғынан тыңлап ҡараны ла:

– Ике яҡ үпкәһенә лә бик ҡаты һалҡын тейгән. Хәрәкәтһеҙ оҙаҡ тороу арҡаһында йөрәге лә насарайған. Алғы аяғының сираҡ һөйәге лә, онталған янбаш һөйәге лә төҙәлмәҫлек остит, йәғни һөйәк сире, менән ауырый башлаған, – тип һөйләне. – Был малҡайҙың ғүмере һанаулы ғына ҡалған. Әгәр итен һәм тиреһен файҙаланырға ниәтегеҙ булһа, һуйырға рөхсәт итеп китәм, – тине.

Ярһыған Ғилмишәриф тегене һарайҙан ҡыуып сығарҙы.

Яугир атты, ата-бабалар йолаһы буйынса, өҫтөнә ҡыҙыл йондоҙло серге ябып, һыртына үҙе менән ҡайтҡан эйәрҙе һалып, сағыл үҫерендә ҡаҙылған ҡәбергә аяғүрә баҫтырып күмделәр. Баш осона ҡыҙыл йондоҙ, аҫҡараҡ дағаһын һәм тимерлектә һуғып эшләнгән ҡылыс һәм мылтыҡ рәүешен, кавалеристың эмблемаһын ҡаҡтылар. Ҙур шыма ташҡа сүкеп: «Бында Бөйөк Ватан һуғышының яугиры, алған яралары һөҙөмтәһендә Тыуған иленә ҡайтып үлгән Әүхәҙи исемле колхоз аты ерләнде. 1935 йылдың 25 апрелендә тыуған, 1946 йылдың 3 апрелендә вафат булған», – тип яҙып ҡуйҙылар.

Көҙ еткәс, Ғилмишәриф атының ҡәбере өҫтөнә ике йәнәш ҡайын ултыртты. Йыл һайын 9 Майҙа ҡулына ялан сәскәләре тотоп, ейәндәре менән бергә үҙе ошо ҡәбергә килде.

...Һуңғы тапҡыр килгәндә сәстәре ағарған, кәүҙәгә ныҡ ҡуранысланған был яугир үҙе лә «өс аяҡ»та тора ине.

Еңеүҙең 50 йыллығы байрамына тиклем бер йыл ғына ҡалғайны.

## Һорауҙар һәм эштәр

**1.** Һуғышҡа атһыҙ киткән Ғилмишәриф фронтта колхоздың өйөр айғыры менән ниндәй шарттарҙа осраша?
**2.** Кавалерия эскадронында хеҙмәт иткән белгестәрҙең береһен дә үҙенә яҡын килтермәгән айғырҙы тик Ғилмишәриф кенә тыңлата алыуын иҫәптә тотоп, уның образына төрлө яҡлап характеристика бирегеҙ.
**3.** Өҙөктә Ғилмишәриф менән Әүхәҙиҙең һөжүмдә ҡатнашыу эпизоды бер тапҡыр ғына тасуирлана. Һуғышта улар нисә йыл бергә булалар? Аттың үҙ хужаһын һүҙһеҙ ҙә аңлай алыуына текстан миҫалдар килтерегеҙ.
**4.** Кәләше Райханаға яҙған хатында Ғилмишәриф өс йыл бергә һуғыш уты йотҡан йән дуҫы менән бергә ҡайтырын белдерә, ләкин кем икәнен асыҡлап әйтмәй. Быны нисек аңлата алаһығыҙ?
**5.** Әҫәр урыны-урыны менән документаль очеркка оҡшап китә. Шул урындарҙы табып, билдәләгеҙ.
**6.** Әҫәрҙән өҙөк ятлағыҙ (уҡытыусы һайлауы буйынса).

## Телмәрегеҙҙе байытығыҙ

Әҫәрҙә атҡа һәм кавалерияға ҡағылышлы байтаҡ һүҙҙәр ҡулланылған, ҡайһыларының мәғәнәләре аңлатылмаған. Уларҙы һүҙлектәрҙән үҙегеҙ эҙләп табығыҙ.

## Фонохрестоматия

Актёр башҡарыуында өҙөк тыңлағыҙ.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


*Ирек Кинйәбулатов.* Ҙур ышаныс һеҙгә, Уҡытыусы! ........... 3
*Әмир Әминев.* Инша ........... 4
*Рәми Ғарипов.* Тел ........... 9
*Рәсүл Ғамзатов.* Туған тел ........... 11

**Башҡорт халыҡ ижады** ........... 13

***Йырҙар һәм риүәйәттәр***
Урал ........... 15
Азамат ........... 16
Эскадрон ........... 17
Ҡаһым түрә ........... 18
Ҡолой кантон ........... 19
Любизар ........... 20
Зөлхизә ........... 21
Ғилмияза ........... 22
*Риүәйәт һәм легендалар тураһында* ........... 23
Ҡуңырбуға ........... 25
«Буранбай» риүәйәте ........... 44
Буранбай ........... 47
*Йырҙар тураһында* ........... 48
***Сеңләүҙәр***
*Сеңләүҙәр тураһында* ........... 55
Ерәнсә сәсән менән хан (башҡорт халыҡ әкиәте) ........... 57
**Боронғо әҙәбиәтебеҙ үрнәктәре** ........... 62
«Күрәҙәлек китабы»нан ........... 62
«Ҡорҡот Ата китабы»нан ........... 65
*Әхмәт Йүгнәки.* «Белем хаҡында һөйләйем...» ........... 71
*«Күрәҙәлек китабы», «Ҡорҡот Ата китабы»,*
*Әхмәт Йүгнәки шиғырҙары тураһында* ........... 73
*Василий Зефиров.* Йәнтүрә хикәйәһе ........... 75
**Мифтахетдин Аҡмулла** ........... 81
Башҡорттарым, уҡыу кәрәк! ........... 82
Нәфсе ........... 82
Дуҫлыҡ ........... 83
Аттың ниһен маҡтайһың?.. ........... 84
Нәсихәттәр ........... 85
Өлгөр һүҙ ........... 86
*Аҡмулла шиғырҙары тураһында* ........... 87
**Мәжит Ғафури** ........... 89
Мәжит Ғафуриҙың бала сағы һәм уҡыу йылдары ........... 89
Үҙем һәм халҡым ........... 93
Мин ҡайҙа? ........... 93
Гөлдәр баҡсаһында ........... 94
*Шиғыр төҙөлөшө тураһында* ........... 95
*Эпик һәм лирик әҫәрҙәр* ........... 98
Һарыҡты кем ашаған? ........... 99

*Мәҫәл һәм аллегория тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . 101
Һунарсы ҡарт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 102
**Шәйехзада Бабич** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 108
Салауат батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 109
Зәки – Башҡортостан терәге . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 110
Ҡурайҡайға . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 111
Көтәм . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 113
*Шәйехзада Бабич шиғырҙары тураһында* . . . . . . . . . 114
**Дауыт Юлтый** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 115
Тимеркәй фәлсәфәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
*«Тимеркәй фәлсәфәһе» хикәйәһе тураһында* . . . . . . . . 131
Һандуғасҡа . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 132
**Һәҙиә Дәүләтшина** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 134
Бәхет ҡошо . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 134
Айбикә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
*Повесть тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 164
*Әҙәби әҫәр геройҙарына характеристика биреү* . . . . . . 166
Һырға һабағы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 167
**Рәшит Ниғмәти** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 191
Йәмле Ағиҙел буйҙары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 192
*Поэмалар тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 200
Мәскәүгә минең бүләгем . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 201
**Мостай Кәрим** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 203
Айгөл иле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 205
Шағир шатлығы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 253
Ап-аҡ мөғжизә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 254
*Михаил Шолохов.* Кеше яҙмышы . . . . . . . . . . . . . . . . . 263
**Ғайса Хөсәйенов** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 298
Һуңғы тарпан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 300
**Яныбай Хамматов** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 307
Ғәйзулла . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 308
**Рамазан Өмөтбаев** . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 328
Илем – минең яҙмышым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 328
Атлы башҡорт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 329

*Учебное издание*

**Юлмухаметов** Миндибай Бахтиярович
**Идельбаев** Мирас Хамзович

**БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА**

**Учебное пособие для 7 класса
общеобразовательных организаций
с родным (башкирским) языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*

**Юлмөхәмәтов** Миндибай Бәхтиәр улы
**Иҙелбаев** Мирас Хәмзә улы

**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған
дөйөм белем биреү ойошмаларының
7-се класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

Тышлыҡта һәм 1-се форзацта – *А. Ә. Василов,*
2-се форзацта *А. Л. Данилов* фотолары файҙаланылды

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррирҙәре *В. У. Сафина, А. Р. Байиегетова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *З. М. Камалова, Г. Р. Попова*

Баçырға ҡул ҡуйылды 08.09.2017. Форматы $60 \times 90^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баçылды. Шартлы баçма таб. 23,00 + 0,31 форз. Шартлы буяу отт. 47,43. Иçәп-нәшер таб. 14,47 + 0,40 форз. Тиражы 6650 дана. Заказ 1.0138.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.





КИТАП